мәктәп китапханаһы



# Дауыт Юлтый

# Һайланма әҫәрҙәр



داود يولتى.

(شيعرلار توركومى.)

22 MAP 1937

باشقورتستان نەشرييات هەم كيتاب سەوداسى شيركەتينڭ
نەشرى.
اوفا — 1924








*Дауыт Юлтый*

# ҺАЙЛАНМА ӘҪӘРҘӘР

*Башҡортостан Республикаһы*
*Мәғариф министрлығы тарафынан*
*тәҡдим ителде*

КИТАП
Өфө
2008

УДК 821.512.141-3
ББК 84-4 (2 Рос=Баш)
Ю 44

*«Мәктәп китапханаһы» серияһынан*

Т ө ҙ ө ү с е һ е

*Ишмөхәмәт Әхмәҙулла улы Шарапов*

**Дауыт Юлтый**
Ю 44 Һайланма әҫәрҙәр / төҙөүсеһе И. Ә. Шарапов. — Өфө: Китап, 2008. — 336 бит.

ISBN 978-5-295-04256-0

Был йыйынтыҡта Дауыт Юлтыйҙың (1893—1938) шиғырҙары, «Бәләкәй Ҡотош», «Тимеркәй фәлсәфәһе» хикәйәләре, «Ҡарағол» драмаһы һәм «Ҡан» романы тупланған. Әҫәрҙәрҙә ХХ быуат башындағы лексика, яҙыу стиле һаҡланды.

Китап дөйөм урта белем биреү мәктәптәрендә, махсус уҡыу йорттарында уҡыусыларға һәм әҙәбиәт һөйөүселәргә тәғәйенләнә.

УДК 821.512.141-3
ТП-069/08 ББК 84-4 (2 Рос=Баш)

ISBN 978-5-295-04256-0
© И. Ә. Шарапов, теҙ., 2008

## ШИНЕЛЬ

Эй шинель, минән иҫәпһеҙ
Афарин, рәхмәт һиңә.
Һаҡлайһың ямғыр, һыуыҡ ел-
дән, файҙаң күп миңә.
Аҫҡа түшәк, өҫкә юрған,
Башҡа мамыҡ мендәрем,
Барлығы — һин, йылытаһың
Аҫтында туңған төндәрем.
Һин минең шәфҡәтле әсәм,
Мәрхәмәтле ҡәрҙәшем.
Күп ауырлыҡ, ҡайғыға
Уртаҡлыҡ иткән иптәшем.
Йоҡланыҡ һалҡын, еүеш
Зимләнкәләрҙә күп ваҡыт,
Аҙмы һуғыштарҙа йөрөнөк
Ҡан вә һаҙҙарға батып!
Эй шинель, минән иҫәпһеҙ
Афарин, рәхмәт һиңә,
Һаҡлайһың ямғыр, һыуыҡ ел-
дән, файҙаң күп миңә!

*1915*

## ҠАН БАҘАРЫ

Тоҡтомалдан ергә төштө
Бер-бер артлы бомбалар,
Бер поезд булған һәләк һәм
Бер ауылда ҙур пожар.

Йөҙ вә мең саҡрым һуҙылған
Киң фронтта ҡан аға,
Йәнҡыярҙар унда аҫкан
Ит вә ҡандан ҙур баҙар!
Ҙур пожар, ҡандан баҙар!..

Был баҙарҙа барыһынан да
Арзан әйбер: ит вә ҡан.
Көн һайын меңдәр шәһит[1]:
Меңдәр аяҡ-ҡулһыҙ, сатан.

Бында ҡан!.. — Артта Ватан-
Пәруар[2] халыҡтар ҡысҡыра:
— Барыһынан да беҙгә ҡыйбат,
Беҙгә ҡыйбат ил, Ватан!
Бында ҡан! Унда Ватан!

Ҡанлы һуғыш дәһшәтенә[3]
Түҙмәгән һалдат бахыр;
Түҙмәгәс, ҡасҡан... Ләкин
Һалдатты тотҡандар ахыр.

Император исеме менән
Ул бахыр алға бара;
Ул бара атылыу өсөн!., һуң
Ул бахырҙы кем атыр?
Ул бахырҙы кем атыр?

Көн вә төн туп, йәҙрә аҫтында...
Шулай һәр таң ата,
Ыңғырашып һәр ерҙә мәжрух[4]
Йән бирә алмай, ҡан ата.

Был фажиғ ҡанлы баҙарҙы
Кемдәр асҡан? Кем өсөн?
Биш түгелгән тауарын
Кем ала, кемдәр һата?
Кем ала, кемдәр һата?

Аһ, «туғандар ҡәбере» һәр көн
Һәр урынға өҫтәлә;
Һәр яҙын унда йәшел,
Төрлө үләндәр үҫһә лә, —

Баш күтәргәс, — ҡан менән,
Һәр япрағынан ҡан тама,
Унда донъя күңеленән сыҡҡан

***Шәһит*** — изге эш өсөн ҡорбан булған кеше.
***Ватан-пәруар*** — патриот мәғәнәһендә.
***Дәһшәт*** — ҡот осҡос, ҡурҡыу һалған нәмә, ныҡ ҡурҡыныс.
***Мәжрух*** — яралы, йәрәхәтле.

Фоған[1], хәсрәт яна.
Ҡан тама! Хәсрәт яна.

Шаулаған япраҡ — үлемде
Көйләгән шомло ҡурай;
Мин — мәйет! Йәнле мәйет!
Кәр йәҙрә минән ҡан һорай!

Выжлаған һәр йәҙрәләр, һәм
Гөжләгән һәр снаряд,
Ьәр сағылған ҡурҡыныс уттар
Үлемдән төш юрай,
Йән юрай, ут төш юрай!

*1916*

## СУМКА

Их сумка, сумка, сумка!
Ник бирелдең миңә юҡка?
Арыҡ[2] елкәмдә йөк булып,
Тарттыраһың ҡанлы судҡа.

Һин бирелдең тик бер йылға,
Өсөнсө йыл ҡанлы һуғыш,
Ҡасан бөтөр ер өҫтөндә
Был ҙур вәхшәт, был ҡан түгеш

Күп күтәрҙем, күп йөрөнөм,
Инде ташларға ла ваҡыт,
Юҡһа килер шундай бер көн:
Йотор мине һалҡын ләхет[3].

Ҡурҡмайым һалҡын ләхеттән,
Ләкин ниңә баш юғалтыу?
Әүәл белергә шул серҙе,
Унан дошманға уҡ атыу!

Барыһы хәйлә, барыһы золом[4],
Улар тик һеҙҙе һаталар,
Беҙҙең башты буштан-бушҡа
Ҡанға батырып юғалталар.

***Фоған*** — ыңғырашыу, зарланыу.
***Арыҡ*** — үтәябыҡ.
***Ләхет*** — гүр, ҡәбер.
***Золом*** — иҙгенлек, ҡоллоҡ, ғәҙелһеҙлек.

Их сумка, сумка, сумка!
Ник бирелдең миңә юҡҡа?
Арыҡ елкәмдә йөк булып,
Тарттырҙың ҡанлы судҡа!

*1916*

## АТЛАН, БАТЫР

Атлан, батыр, атҡа, тот һөңгөңдө!
Әйҙә, саптыр, яуға — дошманға!
Сәс ғәйрәтең дошман сафтарына,
Ауаздарың ашһын асманға![1]

Күрмәйһеңме, унда уҫал көстәр
Ҡуҙғап ҡара дауыл, елдәрҙе,
Ҡан йылғалар түгеп, уттар бөркөп,
Баҫып килә ярлы илдәрҙе.

Әйҙә, батыр егет, алға саптыр!
Аҡтар ҡара көстәр диуарын,
Тар-мар килтер, барыһын батыр ҡанға,
Ырғыт йәһәннәмгә[2] ни барын!

Ҡаҙалһындар мәңге иҙеп килгән
Ҙур батшалыҡ, король, ҡаанлыҡ![3]
Шунһыҙ ярлы илгә юҡ тыныслыҡ,
Юҡ саф ирек, мәңге туғанлыҡ!

*1919*

## ҺУҠА БАБАЙ, СИТКӘ КИТ, ТРАКТОР КИЛӘ

Һуҡа бабай, ситкә кит!
Ана килә трактор!
Зинһар, бабай, йыраҡ тор!
Ташла эште, боҙма ерҙе,
Ситтән генә ҡарап тор!
Ерҙе йыртып, өҙгөләп,
Ыҙан буйын һыҙғылап,

[1] *Асман* — күк, юғары урын.
[2] *Йәһәннәм* — тамуҡ.
[3] *Ҡаанлыҡ* — ханлыҡ.

Үгеҙ төҫлө һөҙгөләп,
Сирәмдәрҙе боҙғолап,
Нисә йылдар йөрөһәң дә,
Күпме ерҙәр һөрһәң дә,
Ашлыҡтарың уңманы,
Бураҙнаһы тулманы,
Ҡоро йылда Аллаңдан
Һораһаң да булманы.
Ашлығыңды ауыҙ итеп,
Балаларың туйманы!
Улар хәҙер белделәр,
Яңы юлды күрҙеләр,
Иҫке юлды ләғнәтләп[1],
Йәһәннәмгә өрҙөләр,
Йәшел ҡырға һәйбәтләп
Һабандарын ҡорҙо лар;
Ер һөрөргә пар менән
Тракторҙы борҙолар.
Ниндәй еңел, аҙапһыҙ
Ай һөргәнде көн һөрә;
Ун һабанға бер атһыҙ
Ер һөргәнде кем белә?
Тррр, тррр... трактор!..
Зинһар, бабай, йыраҡ тор!
Һинән артыҡ эшләгәнде
Ситтән генә ҡарап тор!

*1923*

## ХЫЯЛ ҺӘМ ТОРМОШ

Йыл артынан үткән йылдарҙы
Мөмкин түгел тиңләү үҙ-ара,
Былтыр хыял тигән уйҙарҙы
Быйыл тормош эшкә уҙғара.

Октябрҙең ҡайнар тамыры менән
Тормош тамыры тибә, ашҡына,
Бөгөн илдең бөйөк аҙымы менән
Һәр бер ҡаршы килгән таш һына.

Беҙ түгелбеҙ бөгөн буш боғаҙҙан
Төтөн тауын өйгән оратор.

[1] *Ләғнәт* — ҡарғыш, ҡәһәр.

Мөрйәләрҙән сыҡҡан төтөн, газдан,
Күрәһегеҙме, тыуа трактор.

Кисә ат тояғы тайған ерҙә
Бөгөн машиналар һыҙғыра,
Кисә аҡ айыуҙар йөрөгән ерҙә
Бөгөн «Седов» боҙҙар ҡыҙыра.

Дөйә үтә алмаған ҡом сахрала
Паровоздар бөгөн юл яра,
Хыял кибеп етмәй ҡарала,
Тормош уны эшкә уҙғара.

*1929*

# БӘЛӘКӘЙ ҠОТОШ

I

Завод мөрйәләре таңғы гудоктарын ҡысҡыртҡанда, таң яҡтылығы, ҡараңғылыҡты телгеләп, күк йөҙөнә һуҙыла башлаған мәлдәрҙә, атайым һалмаҡ ҡына кейенә лә, төрөпкәһен тоҡандырып, ишектән сыға; әсәйем, бәләкәй шәм яндырып, иҫке-моҫҡоларҙы ямарға тотона ине. Был мәлдәрҙә мин күберәк ваҡыт йоҡлап ҡала торған булһам да, ҡайһы бер уяу ятҡан көндәрем хәтеремдә бик ныҡ урынлашып ҡалғандар.

Башҡа саҡтарҙа, йоҡонан торғас та, әсәйем минең тамағымды туйҙыра, унан һуң күрше Ғәләүҙәргә ҡалдыра ла, ҡултығына әллә ниндәй төйөнсөктәр ҡыҫтырып, ҡайҙалыр сығып китә торғайны. Баҫҡыстар менән түбән төшкән беҙҙең подвал ишегендә көндәр буйы йоҙаҡ эленеп тора, ә мин көндө Ғәләү ағайҙарҙа йәки урамда йөрөп уҙғара инем. Әсәйем күп ваҡыт ҡараңғы төшкәс кенә ҡайта. Ҡайһы ваҡытта ул миңә тәмле икмәк һыныҡтары йәки бәлеш киҫәктәре алып ҡайтҡылай. Шуға күрә лә мин әсәйемдең ҡайтыуын, ишектәге йоҙаҡтың шалтырауын сабырһыҙлыҡ менән көтөп ала торғайным. Атайым ҡайтҡан саҡта инде мин һөр ваҡыт йоҡола булам. Шул сәбәпле уның өйгә ни рәүешле ҡайтып инеүен һис тә хәтерләй алмайым.

II

Мин бер көн йоҡонан торғанда, атайым, һикелә аяҡтарын һалындырып, иҙеүҙәрен ысҡындырып, төрөпкәһен тартып ултыра ине. Ғәҙәттә, ул байрам көндәрендә лә өйҙә булмай торғайны. Уның бөгөн өйҙә булыуы бик мәрәкә тойолдо. Мин, шым ғына барып, уның эргәһенә ултырҙым да төрөпкәһенән төрөлөп-төрөлөп сыҡҡан төтөндәргә ҡараным, унан һуң йөҙөнә күҙ төшөрҙөм. Уның эскәрәк батып торған ҡыҫыҡ ҡара күҙҙәрендә, йыйырсыҡланып торған йөҙөндә әллә ниндәй үҙгәреш бар ине. Биттәрендә, күҙ төптәрендә йыйырсыҡтар ҙа, бүтән көндәргә ҡарағанда, күберәк күренә ине. Мин уның

йөҙөнә оҙаҡ ҡарай алманым. Йәһәт кенә күҙемде алдым да әсәйем янына бармаҡсы булдым. Ул мейес эргәһендә әллә нәмәкәй ҡыҙҙырып, бешереп маташа ине.

Эсәйем эш араһында, атайыма ҡарамайынса ғына:

— Старшылар менән үҙең боҙолошҡанһыңдыр әле, — тине.

Атайым быға ҡаршы яуап та ҡайтарманы, ауыҙ эсенән генә мығырлап ҡуйҙы. Уның һүҙҙәре әсәйемә лә, миңә лә ишетелмәне. Эсәйем дә башҡа һүҙ ҡайтарып әйтмәне.

Ул көн, ашап-эскәс тә, әсәйем, көндәге ғәҙәте буйынса, сығып китте. Атайым менән беҙ икәү өйҙә ҡалдыҡ.

## III

Иртәгеһен атайым әллә ниндәй асыулы төҫ менән ҡайтып инде. Уның ундай ҡиәфәттә ҡайтыуын беренсе тапҡыр күрҙем мин: уның күҙҙәре ҡаймаҡланған, кәүҙәһе ҡалтырай, урыҫсалап әллә кемдәрҙе һүгә, ҙур ҡаты ҡулдары менән өҫтәлгә һуғып:

— «Ун һигеҙ йыл мастер булып эшләгән» тиҙәр. Неправда!.. Бөгөн булмаһа, иртәгә боғаҙығыҙҙан алырбыҙ, — тип кемдәрҙелер әрләй. Эсәйем бер ишек төбөнә бара, бер тәҙрәнән барып ҡарай, бер атайым янына килә, уны көйләй ине.

Күп тә үтмәне, атайым менән бергә бер заводта эшләй торған бер ағай килеп инде. Ул да атайымдың ҡыланышына ҡарап торҙо ла, эскәмйәгә ултырҙы, яйлап ҡына тәмәке төрҙө. Тәмәкеһен тоҡандырғас, атайыма:

— Ҡайғырма, Ҡотош ағай. Беспокоиться нечего... Эш табылмаç, тип beләһеңме ни? Бында булмаһа, шахтаға китербеҙ, — тине һәм иҙән буйынса ҡыҙыу-ҡыҙыу йөрөй башланы. Атайым ҡапыл ғына тынды ла, өҫтәл мөйөшөнә ҡарап, уйға ҡалды.

Шунан һуң ғына мин атайымдың заводтан ҡыуылғанын белдем.

## IV

Мин бер көн йоҡонан торғанда, атайым да, әсәйем дә өйҙә юҡ ине. Миңә был күренеш бик яманһыу тойолдо. Ары һуғылдым, бире һуғылдым, ишеккә барҙым — асылманы: тыштан йоҙаҡ һалынған икән. Ишектәге йоҙаҡтың шалтырауы асыуымды килтерҙе. Уның асылмауын белә тороп, тағы тарттым, ныҡ көсәнеп тарттым. Йоҙаҡтың ҡаты шалтырауы мине үсекләгән төҫлө булды, күңелем тулып китте, күҙгә ҡапыл килеп тығылған йәштәрҙе тыя алманым, үксәләрҙе һике йөҙләгөнә бәреп, тоҡтомалға аҡырып-аҡырып илай башланым. Бик оҙаҡ иланым. Ләкин минең тауышымды бер кем дә ишетмәне, бер кем дә килмәне.

Шулай бик оҙаҡ илап тынғандан һуң, подвалдан йортҡа ҡараған тәҙрә төбөнә килдем. Һандыҡҡа баҫып, тышҡа ҡарай башланым, тышта һибәләп ямғыр яуа, йорттағы соҡор-саҡырға һыу йыйылған. Беҙҙең тәҙрәнең яртыһынан юғары торған асфальт буйлап тәҙрә төбөнә һыу ағып төшә. Йортта ике ломовой извозчиктың егеүле аттары тора. Ике сәпсек балаһы, ямғырҙан ҡасып, беҙҙең тәҙрә төбөнә килеп ҡунды. Э мин уларҙы ҡурҡытып осороп ебәрҙем. Мин уларҙы тағы ла килмәҫме икән тип көтһәм дә, кире килмәнеләр.

Кискә ҡарай ямғыр шәбәйгәндән-шәбәйҙе. Тимер түбәләргә, таштарға, асфальттарға, тәҙрәләргә шыбырлап бәрелгән ямғыр тамсылары мине бәүеткән шикелле тойолдо: ҡапыл бөтә кәүҙәмде ауырлыҡ баҫты, күҙҙәрем йомола башланы. Бөршәйеп кенә һандыҡ өҫтөнә яттым. Бер аҙҙан һуң сәңгелдәктә бәүелеп киткән һымаҡ булдым. Шул бәүелеү араһында, ямғыр тауышын тыңлап, йоҡоға киткәнмен.

## V

Эсәйем мине уятҡанда, төн ине. Миңә таң кеүек тойолдо. Ул, минең башымдан һыйпап:

— Һуңғарып киттем шул, асығып, илап бөткәнһеңдер инде, балаҡайым, —- тип, ситкә ҡарап, күҙҙәрен һөртөп алды. Минең тәнем бик ауырайған төҫлө ине. Аҡрын ғына һандыҡ өҫтөнән төштөм дә һикегә килдем. Эсәйем алдыма ике һыныҡ күмәс менән бер стакан һөт ҡуйҙы. Ҡапҡан күмәс ауыҙымда кәлгә әйләнде. Тәмен белер өсөн, бик ҡаты сәйнәргә керештем, яңаҡ һөйәге сатнап киткән төҫлө булды, ҡолаҡтарым геүләп китте. Күмәс валсыҡтары теш төптәренә һылашты, тамаҡҡа ҡоро көл тәмдәре йүгерҙе. Мин әсәйемә:

— Башым ауырта бит!.. — тинем. Ул ҡалтыранып һалҡын ҡулдары менән башымды баҫып ҡараны ла:

— Ауырыйһыңмы әллә, балаҡайым? Башың ут кеүек ҡыҙыу бит, — тине.

Һикенең бер мөйөшөнә йәһәт кенә урын йәйҙе лә атайымдың майлы бишмәтен өҫтөмә япты. Мин, бер аҙ ятҡас, үҙемде түбәлә шикелле күрҙем:

— Йығылдым, йығылдым!.. — тип ҡысҡырып ебәрҙем, тәндә әллә ниндәй уттар йүгергән һымаҡ булды, ул тағы һалҡын менән аралашты. Өшөп киткән төҫлө булдым. Шунан һуң үҙемде ҙур ҡалын тәгәрмәстәр араһында күрҙем, шулар араһында атайым да әллә ни эшләп йөрөй. Ул тәгәрмәстәр минең өҫкә киләләр. Мин, уларҙан ҡурҡып:

— Тапайҙар!.. Мине тапайҙар!.. — тип атайыма ҡысҡырам. Ул мине ишетмәй, башын түбән һалып, һаман эшләй бирә. Мин һаман ҡысҡырам: «Тапайҙар мине!.. Тапайҙар!..»

Унан һуң күҙ алдым томанға әйләнде, тәндәрем ауырайҙы. Тар ҡабыҡ әрйәлә ятҡан кеүек булдым.

Мин иртә менән баш ҡалҡытҡанда, әсәйем һаман минең баш осомда ултыра ине. Мәғүзә әбей ингәс, әсәйем:

— Бөгөн төнө буйы Апушым ауырып сыҡты. Шуның эргәһендә ултырып, керпек тә ҡаҡҡаным юҡ әле, — тине. Был һүҙҙәр минең ҡолағыма тоноҡ ҡына булып ишетелделәр. Ләкин улар миндә һис бер тәьҫир ҡалдырманылар, юрғанға һөйләгән кеүек тойолдолар. Шул ваҡыт әллә ниңә атайымды күргем килде: «Әсәй, атайым ҡайҙа?» — тинем. Ул миңә яуап ҡайтарманы. Башын икенсе яҡҡа борҙо ла, кисәге шикелле, күҙҙәрен һөртөп алды. Әсәйемдең был ҡыланышына Мәғүзә әбейҙең төҫө үҙгәрҙе. «Әсәһе ризыҡтары шундалыр шул, балаҡайым», — тине. Минең башым ул һүҙҙәргә мәғәнә бирә алманы. Башым тағы ла сатнап китте, тәнде тағы ҡыҙыулыҡ ҡапланы, тағы түбәгә мендем, тағы тәгәрмәстәр араһына ҡыҫылдым, тағы ҡысҡырҙым, тағы әсәйемде баш осонда күрҙем...

Мин ауырый инем.

## VI

Мин терелгәйнем инде. Әсәйем әллә ҡайҙан ашығып ҡайтты ла:

— Күсенәбеҙ, балаҡайым, — тине. Мин аптырап ҡалдым. Ҡайҙа күсенәбеҙ?.. Ниңә күсенәбеҙ?.. Атайым өйҙә юҡ, ә әсәйем менән беҙ икәү күсенәбеҙ, имеш!.. Мин шул һорауҙарға яуап ҡайтарып бөтә алманым, әсәйем йыйына ла башланы.

Иҫке бишмәтемде кейеп, тышҡа сыҡҡанда, бөтә әйберҙәр бәләкәй арбаға тейәлеп ҡуйылғайны. Әсәйем теге мин өҫтөндә йоҡлай торған ҙур һандыҡты ғына һөйрәп тышҡа сығарып маташа ине. Бәләкәй арбаны тартып ҡапҡанан сыҡҡанда, атайым иҫкә төштө, беҙ юҡта ҡайтыр ҙа асыуланыр төҫлө тойолдо.

Урамға сыҡҡас, тротуар эргәһендәге канау буйлап киттек. Башта бәләкәй арба артынан бер ҙә ҡалышмай барһам да, магазин тәҙрәләренән күренеп торған төрлө матур әйберҙәр минең уйҙарымды бөтөнләй башҡа яҡҡа тартып алып киткәндәр, күрәһең, әсәйем, бер тыҡрыҡтан ҡайырылғанда, туҡтап:

— Апуш!.. Апуш!.. — тип миңә ҡысҡыра ине.

Беҙ ауыр итеп асылған тимер ҡапҡаның бәләкәй ишегенән индек тә, һулға боролоп, бер мунса төҫлө бәләкәй генә тәҙрәле өйгә туҡталдыҡ.

Беҙ килгән йорт Шәмсетдин бай йорто ине.

Әсәйемдең кухарка булып килеүен бер аҙнанан һуң ғына белдем, сөнки мине бында кухарка малайы тип йөрөтәләр ине. Тик әсәйем генә Апуш тип өндәшә торғайны.

## VII

Бер көн, йорттағы шау-шыуҙы ишетеп, йүгереп сыҡһам, Шәмсетдин байҙың ҡарт ҡатыны әсәйемде әрләп ята:

— Хәйерсе, аристан бисәһе, беҙгә килгәс кенә тамағың туйҙы бит!..

Эсәйем, был һүҙгә ҡаршы бер һүҙ ҙә өндәшмәй башын түбән һалып, тик кенә тора ине. Мин сыҡҡас:

— Үксәңде күтәр, малайың менән хәҙер үк тейәнеп сығып кит, күҙемә күренмә, хәйерсе! — тип бармағын яныны ла, ҡыҙыу-ҡыҙыу атлап, коридорға менеп китте.

Мин ҡарап торҙом да әсәйемде барып ҡосаҡланым. Ул, мине ҡосаҡлап алып, үкһеп иларға тотондо.

Бер көн дворник Ғәйнетдин малайын, мине мыҫҡыллаған өсөн, таш менән бәреп илатҡайным. Әсәйемде әрләгән өсөн теге бай ҡатынының да ауыҙына бәрерҙәй булдым, ләкин бәрә алманым. Әллә ниҙән күңелем шикләнде.

Иртәгеһен, тағы тейәнеп, кире теге подвалға ҡайттыҡ. Беҙ ҡайтҡанда, унда ирле-ҡатынлы бер ғаилә тора ине. Ишек төбөнә әйберҙәрҙе ҡуйҙыҡ та мейес эргәһенә урынлаштыҡ. Ҡайтып бер-ике көн торғас та, әсәйем ауырый башланы.

## VIII

Беҙҙең фатирҙашыбыҙ Һибәт ағай типографияла хәреф йыйыусы ине. Әсәйем үлгәс тә, ул мине типографияға алып барҙы, ҡулымдан етәкләп контораға алып инде. Унда киң ҡыҙыл битле, йыуан ҡорһаҡлы бер урыҫ менән һөйләште лә мине хәреф йыйыу бүлегенә алып инде. Тегендәге эшселәргә:

— Бына был теге Ҡотош ағайҙың улы була инде. Ул үҙе Себергә һөрөлдө, бисәһе яңы ғына вафат булды, хәҙер был малайҙың бер кеме лә юҡ, — тине. Реал[1] артына баҫҡан кешеләрҙең барыһы ла миңә әйләнеп ҡаранылар. Бер нисәһе, ҡулдарындағы верстаткаларын[2] ташлап, беҙҙең янға килделәр ҙә мине әйләндереп алдылар. Бер тәбәнәк кенә ҡара эшсе:

— Ҡотош малайы, тиген, ә!.. — тип башын сайҡаны ла арҡамдан һыйпап ҡуйҙы. Уның ҡыланышы миңә бик яғымлы тойолдо. Уның муйынына аҫылынып, бөтә эс серемде һөйләгем һәм илағым килде.

Иртәгеһенә, бик иртә тороп, Һибәт ағай менән типографияға киттек. Минең йоҡо ла йүнләп туймағайны. Юл буйынса иҫәңгерәп килдем. Беҙ килеп ингәндә, типографияла эшселәр

[1] ***Реал*** — типографияла ҡулланыла торған өҫтәл, шкаф.

[2] ***Верстатка*** — типографияла хәреф йыйғанда ҡулланыла торған инструмент.

күп ине. Мине бер мөйөшкә килтерҙеләр ҙә туҙылған хәреф-тәрҙе, квадраттарҙы, линейкаларҙы рәтләргә ҡуштылар. Тәүҙә был эш миңә бик ят тойолһа ла, һуңға табан өйрәнеп киттем. Бер урында сәғәттәр буйынса бер ҡуҙғалмай эшләй инем. Таң ҡараңғыһынан төн ҡараңғыһына тиклем минең эш шул туҙылған хәрефтәр өҫтөндә ине. Күп ваҡытта минең эш иртә бөтһә лә, Һибәт ағайҙы көтөп, төнгө сәғәт 10—11-гә тиклем уның эргәһендә болара инем, сөнки фатир бик алыҫ. Миңә яңғыҙ ҡайтыуы ҡурҡыныс, икәү ҡайтыуы күңеллерәк тә була ине.

Мин типография эшселәренә тамам үҙләшеп киттем. Улар мине «Бәләкәй Ҡотош» тип йөрөтәләр.

Бер байрам көндө беҙгә миңә таныш булмаған бер кеше килде. Уның сәстәре оҙон, төҫөнә, йәшенә ҡарағанда, һаҡал-мыйыҡтары йөҙөнә бер ҙә ятып бөтмәй, бик мәҙәк кенә тойола ине. Ул, Һибәт агай менән аҙыраҡ һөйләшкәндән һуң:

— Был Ҡотош ағайҙың малайы буламы ни инде? — тип миңә табан бер һөҙөп ҡарап алды. Был һүҙгә Һибәт ағайҙың йөҙөндә йылмайыу күренде.

— Мин бит уны үҙ малайым кеүек күрәм, — тине, бер миңә, бер уға ҡарап, теге кешенән яуап көткән шикелле, һүҙһеҙ ҡалды.

Теге кеше тағы ла миңә бер һөҙөп ҡараны ла:

— Был булдырыр, тиһеңме инде? — тип урындыҡҡа ятылаш ҡырын ятты, бармағы менән һаҡалын тарарға тотондо. Уның күҙҙәре түшәмгә ҡарап торалар ине. Һибәт ағай, өҫтәлгә иңкәйә төшөп:

— Улмы?.. Улмы?.. — тип һүҙен бөтөрмәҫтән, янсығын алып, тәмәке төрөргә тотондо. Бик ҡыҙыу төрөп, ирене менән уны сылатҡандан һуң, бармағы менән шымартып:

— Ҡотош малайы тиҙәр уны, — тип тәмәкеһен тоҡандыра башланы. Ул кеше беҙҙән төн урталарында ғына китте.

Бер байрам көндө йортта малайҙар менән бура уйнап йөрөй инек, Һибәт ағай мине саҡырып индерҙе лә бер төргәк ҡагыҙ күрһәтте:

— Бына һин ошо ҡағыҙҙарҙы ал да, баҡсаға барып, кешенең күп йөрөгән еренә берәм-берәм ташлап кит! — тине.

— Ул ҡағыҙҙарҙы ниңә унда ташларға? — тинем. Ул:

— Шаулама, әйткәнде тыңла, унан һуң молодец булырһың һин! — тине.

Мин ҡағыҙҙарҙы ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып барғанда, ҡараңғы төшкән, баҡсаның төрлө урындарында ҙур-ҙур фонарҙар яҡтыртылған, бөтә баҡсаны халыҡ тулҡыны баҫҡайны. Уларҙың әйтеүенсә, был ҡағыҙҙарҙы аҙлап-аҙлап эскәмйә аҫтында ҡалдырырға, ҡалғандарын урам мөйөштәренә ырғытып китергә ине. Мин быларҙы бер нисә минут эсендә таратып бөттөм. Мин ҡайтырға әйләнгәндә, таратылған йәшелле-ҡыҙыллы бәләкәй ҡағыҙ киҫәктәре бик күп кешеләрҙең ҡулда-

рында күренә ине. Ул арала полицейскийҙар йүгергеләй башланы. Мин, быларҙы күреү менән, баҡсанан тиҙ генә сығып тайҙым. Ҡалған ҡағыҙҙарҙы бер ҡараңғы мөйөштә ырғытып ҡалдырҙым. Ҡайтып, подвалға ингәндә, әлеге мыйыҡлы, һаҡаллы кеше менән Һибәт ағай баҫҡыс төбөндә мине ҡосаҡлап ҡаршы алдылар.

— Вот молодец, действительно, Ҡотоштоң копияһы икән! — тип мине күтәреп өйгә индерҙеләр.

## IX

Немецтар менән Рәсәй батшаһы araһындағы һуғыштың иң ҡыҙған миҙгелдәре ине. Теге мыйыҡ-һаҡал тағып йөрөүсе Бәҙри ағай менән дә беҙ күптән дуҫлашып алғайныҡ инде, сөнки мин уларҙың күп йомоштарын башҡара, күп ҡағыҙҙарын тарата инем. Хатта типографиянан хәрефтәр ташыу, заводтарға барып, йәшерен прокламация таратыу кеүек ҡыйын эштәрҙе лә өҫтөмә алған саҡтарым була ине. Шул арҡала эшселәр биҫтәһендә мине белмәгән бер кеше лә юҡ ине. Ҡайҙа ғына барһам да, мине аулаҡ мөйөштәргә алып китәләр, бөтә яңылыҡтарҙы, справкаларҙы минән алалар ине. Шундай йомоштар арҡаһында бер-ике көн мин хеҙмәткә бара алманым. Шуның өсөн теге ҡыҙыл битле йыуан кеше, саҡырып, миңә расчет бирҙе: типографиянан сығарылдым. Был миңә бик ҡыйын булды. Өйрәнгән эштән бер ҙә айырылып торғом килмәне, бер аҙнанан һуң Һибәт ағай мине газета идаралығына алып барҙы. Унда бер ябыҡ ҡына һары йөҙлө, шаҙра кеше менән һөйләшеп, миңә бер нисә номер газета алып бирҙе:

— Шуны һатып бөтөр ҙә аҡсаһын килтереп бир, унан һуң тағы газеталар алып һатырһың! — тине, һәм шулай эшләнем дә. Хәҙер инде таң ҡараңғыһынан барып, редакция тупһаһына баҫам да уның асылыуын көтәм, газеталар алам да, өйгә ҡайтып, тамаҡ ялғайым. Ҡала тормошо уяна башлағанда инде, мин ҙур урам мөйөшөндә: «Яңы хәбәр, бөгөнгө номер!» — тип ҡысҡыра башлайым. Бәҙри ағайҙың йомошо ла ҡалмай, уның да ҡағыҙҙарын төрлө урынға ташыйым һәм таратам.

Кисен ҡала араһында бөтә газетасы малайҙар шаулатып газета һаталар. Мин дә, уларҙан ҡалышмайым тип, йәһәтерәк урамға йүгерәм.

— Яңы хәбәр!

— Яңы хәбәр!

— Беҙҙә ҙур уңышлыҡ!

— Беҙҙең ғәскәр Перемышль ҡалаһын алған!

— Дошмандар окоптарын ташлап ҡасалар!

Урамдың бөтә ерендә шул тауыш ҡабатлана. Мин үҙ газеталарым менән әллә ниндәй ят кейемдәр кейгән, эшләпәле,

күҙлекле, кәкре таяҡлы кешеләр менән ҡамалғайным. Бер яҡтан ҡулға аҡсаны бирәләр, икенсе яҡтан газеталарым һыпырылып сығып торалар ине. Ҡулымдағы газеталарым бер нисә минут эсендә һатылып бөттө, мин тағы редакцияға «Вечерняя газета» алырға саптым. Ҡултығыма әллә ни тиклем газета ҡыҫтырып, йүгереп килә ятҡанда, әлеге Бәҙри ағай осраны, мине ҡараңғы мөйөшкә алып китеп, бер төргәк газета бирҙе.

— Бар, тарат! — тине. Мин аптырап ҡалдым. Уны ҡалай таратыу тураһында түгел, әлбиттә, сөнки Бәҙри ағайҙар публичный урындарға прокламация таратыуҙы күптән туҡтатҡайнылар. Мин шунан бирле эшселәр араһында ғына йөрөтә инем. Унан һуң Бәҙри ағай үҙе лә:

— Хәҙергә ундай публичный урындарға прокламация таратыуҙың файҙаһы юҡ, — тигәйне, бөгөн килеп, ниңәлер тағы шулай таратырға ҡушалар. Бына мин шуға аптырап ҡалғайным.

Билдәле, Бәҙри ағай менән ул турала ҡарышып тороп булмай, ул инде теҙгенде бик ҡыҫҡа тота:

— Бар, тарат! — Уның шунан башҡа һүҙе юҡ. Ул шуны ғына әйтте лә китте.

Мин театр алдына килеп етеү менән, газетаны һырып алдылар. Уның ҡалай һатылып бөтөүен дә тойманым, кеҫәгә әллә ни тиклем баҡыр аҡса йыйылды. Бәҙри ағайҙың биргән төргәге ҡулымда һерәйеп торҙо ла ҡалды.

«Быларҙы ни эшләтергә, ҡалай итеп таратырға?» — Мине шул уй солғап алды. Мин бәғзе ваҡыттарҙа театр Кассаһынан иртәгә буласаҡ спектаклдәрҙең листовкаларын алып тарата торғайным. Бына шул хәтергә килде лә йүгереп, кассаға барҙым. Касса алды тулы халыҡ, ҡойроҡ булып, сиратҡа теҙелгәндәр. Уларҙың ҡултыҡ аҫтарынан йырып, кассаға килдем.

— Листовкалар бөттө инде, — тиҙәр.

— Ҡалғандыр әле шунда, — тинем. Беләһең бит, ул артист халҡы бик хәйләкәр була, улар буш тараттырыу йәки аҙ хаҡ биреү яғын ҡарайҙар. Мин инде ҡарап торманым, бар тиклемен һорап алдым. Уныһы булыуын булды, ләкин бит ҡулдағы төргәккә ҡарағанда листовкалар аҙыраҡ булып сыҡты. Листовкалар күберәк булһа, таратыуы күңеллерәк була!

«Тәүәккәлләнем!» — тип эстән генә һөйләндем дә халыҡтың иң тығыҙ ерендә, теге төргәкте ҡағыҙҙар менән аралаштырып, листовкаларҙы өләшә, тарата башланым. Бер нисә минут эсендә минең тараҡтан ҡағыҙҙар менән бөтә халыҡтың ҡулы сыбарланғайны. Эш бөтөү менән, йәһәтерәк ишеккә ынтылдым. Шул ваҡыт мине бер ҡаты ҡул ҡыҫып тотоп алды. Ҡараһам, полицейский ине.

— Стоп, мальчик! — тине. Минең тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Һис бер һүҙһеҙ генә ысҡынырға тартылһам да — булманы. Бындай хәл минең үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр ине.

Ул мине елтерәтеп бер бүлмәгә алып килде. Минең аяҡтар ергә лә теймәй баралар ине. Ингәс:

— Ни таратаһың һин? — тине. Уның күҙҙәре миңә бик ҙур булып күренде. Уның оҙон мыйығы аҫтында ҡалтыранған ирендәре мине тағы ҡурҡыта төштөләр: минең бөтә тәнем ҡалтырай башланы.

Ҡаушап ҡына: «Листовкалар...» — тинем. Теге прокламацияның береһен күрһәтте:

— Был нимә? — тине. Минең яңаҡҡа сабып та ебәрҙе. Минең күҙемдән уттар күренде. Ул минутта минең күҙемә полицейскийҙың шпорлы аяҡтары ғына күренәләр ине. Мине тағы, һөйрәп, өҫтәл эргәһенә алып килде:

— Был нимә? — тине.

Мин ҡағыҙға оҙаҡ ҡарап торҙом да:

— Листовка, — тинем.

— Кем бирҙе?

— Кассир.

— Кассир?..

Шулай тине лә, мине ҡалдырып, сығып китте. Тыштан ишек шалтырап бикләнде. Мин айнып етә алманым, теге полицейский менән кассир инделәр. Минең яңаҡтар ут шикелле яна, аяҡтар ҡалтырай ине. Прокламацияны кассирға күрһәтте:

— Быларҙы һин бирҙеңме? — тине. Кассир, текләп ҡарап, күҙ йөрөттө лә:

— Юҡ, һис... — тине, йөҙө ап-аҡ ҡағыҙ шикелле булды, миңә ҡарап аптырап ҡалды.

Бер нисә минуттан беҙ частала булдыҡ. Улар минән күп һорашып торманылар, исем-фамилиямды, адресымды яҙҙылар ҙа ҡайтарып ебәрҙеләр. Мин частан сыҡтым да туп-тура өйгә йүгерҙем. Мин бер ҡараңғы урамдың тыҡрығынан өйләнгәндә, артымдан ҡара халатлы бер кеше ҡыҙыу-ҡыҙыу атлай ине.

## X

Мин, ҡайтып, ишекте тиҙ генә асып ингәндә, Бәҙри ағай менән Һибәт ағай әллә ниндәй ҡағыҙҙар аҡтарып ултыралар ине.

— Эш насар, һиҙҙеләр!.. — тип урталарына атылдым. Бәҙри ағай:

— Ниңә тура бында ҡайттың? — тип минең муйынымдан тотоп һелкетте лә таратып ташлаған ҡағыҙҙарын тиҙ генә йыйып мейескә ырғыта башланы. Һибәт ағай ут төртөп мата-

ша ине. Минең башымдан: «Ниңə тура бында ҡайттым икән?» — тигән уй йүгерҙе, бөтә тәнем ҡалтырай ине. Шул арала берәү килеп, ишек ҡаҡты, урыҫсалап:

— Асығыҙ! — тине. Әллә ниндәй ҡарлыҡҡан, иләмһеҙ бер тауыш ине. Бәҙри ағайҙар бер урында ҡатып ҡалдылар.

— Ни эшләргә, ҡайҙа барырға? — Мин бер мөйөшкә һыйындым. Шул ваҡыт Бәҙри ағайҙың йөҙөндә әллә ниндәй бер ҡурҡыныслы асыу уйнай ине. Ул, барып, Һибәт ағайҙы тотто ла ҡолағына ғына: «Ни булһа ла булһын, асырға кәрәк. Бөтә ғәйепте мин үҙ әҫтәмә алам, тик комитеттың ҡайҙалығын ғына белдермәгеҙ!» — тине. Әллә ниндәй көс менән ишек келәһенә йәбеште лә шатырлатып асып ебәрҙе. Йәшен тиҙлеге менән халатлы өс кеше килеп инде...

Төн уртаһында барыбыҙ ҙа жандармский управлениела инек.

## XI

Сәрби еңгәм шул төндә үк ҡайтып китте. Мине бер аҙ торғандан һуң сығарҙылар.

Һибәт ағайҙы порукаға алдылар. Бәҙри ағай ҡайҙалыр оҙатылды.

Был ваҡиғанан һуң беҙҙең тормош кәртәләнде: миңә газета һатырға рөхсәт итмәнеләр. Һибәт ағай матбағанан[1] ҡыуылды — бер ҡайҙан да килер ер юҡ, көнө буйы өйҙә ултырабыҙ. Мин бер нисә тапҡыр идараға барып ҡараным. Икенсе тапҡыр ундай эш эшләмәм тип ялынып та ҡараным — булманы. Башҡа кешеләр ҙә беҙгә килмәй башланылар. Ашарға аҙыҡ та бөттө, аҡса ла юҡ. Сәрби еңгәм генә, байҙарға барып эш эшләп, кер йыуып, бер аҙ ашарға тапҡан була. Өс дастуйын кешегә уның тапҡаны ғына, билдәле, етмәй, Һибәт ағай, эш эҙләп, ҡаланың аҫтын-өҫтөн ҡалдырманы, ләкин эш таба алманы. Ауылға китергә уйлашһаҡ та — булманы. Сөнки уға ҡаланан сығырға рөхсәт бирелмәй. Бер көн Һибәт ағай:

— Былай булһа, эш насар. Һеҙ икәү ауылға китегеҙ. Сәрбиҙең һөнәре бар. Йәй көнө ураҡ урырһығыҙ, ҡара эш эшләрһегеҙ, ҡыш булһа, ваҡ-төйәк эш менән шөғөлләнерһегеҙ, шунда мине лә онотмаҫһығыҙ, — тине.

Июнь урталары ине. Бәләкәй арбаға әйберҙәрҙе тейәп, сәйнүкте билгә тағып, Сәрби еңгәм менән йәйәүләп сығып киттек. Шул саҡта әсәйем менән Шәмсетдин бай йортона күскән ваҡыттар күҙ алдыма килде. Сәрби еңгәмдең йөҙө лә, әсәйемдең шул ваҡыттағы йөҙө төҫлө, ҡайғылы һәм моңһоу ине.

[1] *Матбаға* — типография.

## XII

Беҙ Сәрби еңгәм менән, йәй буйы баярға ашлыҡ урып, көҙ буйы байҙарға көнләккә иген һуғып, ҡышҡа табан Һибәт ағайҙың ауылына ҡайттыҡ һәм шунда ҡалырға булдыҡ. Сөнки Һибәт ағай киткән саҡта уҡ ҡалаға ҡайтмаҫҡа, ауылда ҡалырға ҡушҡайны.

Сәрби еңгәм ҡомған, силәк төпләргә, йөҙөк, алҡа ҡаштары эшләргә оҫта ине. Беҙ был эште мунсала эшләй инек. Ул эшләй, мин булышам. Май, ҡатыҡ мул. Тик Һибәт ағайҙың ғына юҡлығы беҙгә бик яманһыу тойола ине.

Шулай беҙҙең ҡыш үтте, яҙ етте, ҡояш, юғары күтәрелеп, беҙгә көлөп ҡарай башланы. Хәҙер инде ҡараңғы мунса эсендә оҙаҡ ултырғы килмәй ине. Ирендерә, ҡояш тышҡа тарта. Сәрби еңгәм дә яҙға табан бер аҙ үҙгәрә һәм ябыға төштө, һәр ваҡыт моңланып, көйләп ултыра торған булды. Минең күңелем уның моңдарын күтәрә алмай. Мин, уңай табыу менән, ауыл малайҙары янына сығам. Улар менән уйын ҡорам. Оҙаҡ йөрөһәм, Сәрби еңгәм тағы күңелһеҙләнә, яманһыулай башлай.

— Китәһең дә юғалаһың, бында бер үҙемә күңелһеҙ, — ти. Бына мин уның моңланыуын яратмайым шул. Ҡалай ғына булһа ла, берәй уйын табып, уны көлдөрөргә, күңел асырға тырышам. Кис менән беҙҙең янға әбей-һәбейҙәр, ҡыҙҙар килеп ҡуналар. Улар менән, билдәле, бик күңелле була. Төн буйы әкиәт һөйләп үткәрәбеҙ. Ҡайһы ваҡытта, улар йоҡлағанда ла, Сәрби еңгәм менән икәү йоҡлай алмайбыҙ. Шундай тын саҡтарҙа ул ҡайғылы була. Миңә белдермәй генә илап та ала, буғай. Ул, минең йоҡлай алмағанды һиҙеп булһа кәрәк, минең менән һөйләшә башлай:

— Насип булһа, ҡараға баҫҡас та, ҡалаға ҡайтайыҡ инде, — ти.

Шулай, үткәндәрҙе иҫкә төшөрөп, Һибәт ағайҙы һағынып, оҙаҡ һөйләшкәндән һуң ғына, йоҡоға китәбеҙ.

## XIII

Мин, һуң ғына йоҡоға китһәм дә, бик иртә уяндым. Тороп тышҡа сыҡҡанда, бөтә ауыл йоҡлай, ҡояш саҡ күтәрелеп килә ине. Һауа сиктән тыш матур, ҡояш тап яҙ ҡояшы булып сыҡҡан. Ауыл яҙының йәмле иртәһен күреү минең өсөн беренсе тапҡыр ине әле. Йортҡа сыҡҡас, тәнгә еңеллек йүгерҙе. Тиреҫ башында бөкрәйеп ятҡан Аҡбайҙы саҡырҙым да уның менән бик оҙаҡ шаярҙым, уны һыйлар өсөн, өйгә инеп, икмәк алып сыҡтым. Унан ҡалған валсыҡтарҙы тауыҡтарға һибеп ашаттым. Яңы сыҡҡан ҡояш йылыһына йылынып, аҡрын ғына көйшәп торған ала һыйырҙың йөнөн

һыйпаным. Арҡаһы менән ҡояшҡа ҡыҙынып торған туры атҡа, хужаһы ҡушмаһа ла, әүеҫлектән йәшел бесән төшөрөп һалдым. Ул, тәүҙә йәшел бесәнде еҫкәп, бер тапҡыр бик ҡаты бышҡырҙы ла, араларынан тәмлерәктәрен һайлап, ялҡау ғына сәйнәй башланы.

Унан һуң һарай башына юғарыраҡ менеп ултырғас, яңы ғына ҡарҙан әрселә башлаған тау биттәрен ҡарағым килде.

Алыҫта, ҡарҙар эсендә, шыйыҡ ҡына томан аша күгәреп, урман күренә. Яртылаш томанға төрөлгән бейек тау баштары яҙғы ҡояш аҫтында тағы ла матурыраҡ, тағы ла серлерәк булып һөҙөлөп торалар.

Мөрйәләрҙән сыҡҡан шыйыҡ төтөндәр иртәнге тымыҡ һауа менән ауыл өҫтөнә йәйелгәндәр. Уларҙың ҡайһы берҙәре, ҡояш нурына ҡаршы алтынланып, матур болоттар кеүек, ялтырап торалар. Ауыл тын, ауыл йоҡлай ине.

## XIV

Яҙғы юл аҡ ҡар өҫтөнән, бөгәрләнгән ҡара йылан кеүек, тау буйлап әллә ҡайҙарға, алыҫтарға, һуҙылып киткән. Ана, юлда бер йәйәүле кеше күренә. Ул, алыҫтан ҡарағанда, себен кеүек кенә ҡыбырлай: ул ашығып-ашығып ауылға табан атлай.

Эле ауыл ҡуҙғалмаған. Һәр кем яҙғы тәмле йоҡо эсендә, ә ул юлсы, меҫкен, тәмле йоҡонан мәхрүм. Ул теге ауылдан бик иртә ҡуҙгалғандыр. Йоҡоһо бик тәмле булһа ла, нужаһы тынислыҡ бирмәгәндер. Иртәнге мәлдә был юлды үтеп ҡалырға уйлағандыр, моғайын, меҫкенем.

Мин уға бик оҙаҡ ҡарап торҙом. Ул һаман ҡыбырлай, һаман ауылға яҡыная. Ул ауылға килеп инде, ағаслыҡтарға йәшенде.

Минең иғтибарымды йүнәлтерлек башҡа нәмә күренмәгәс, ҡыйыҡ башынан төшөп, урамға, ҡапҡа алдына, сыҡтым.

## XV

Түбән ерҙең ҡарҙары иреп, ҡара ергә әйләнһә лә, ҡаралтылар аша урамға өйөлгән бейек көрттәр, һаман да яҙғы ҡояшҡа бирешмәгән шикелле, ҡалҡыу булып яталар. Шулар минең күңелгә ауырлыҡ бирҙеләр. Минең ҡыҙыу ҡояш булғым, шуларҙы тиҙерәк кенә иретеп бөтөргөм килде. Шул тиле уй артынан Сәрби еңгәнең: «Ҡарағa баҫкас та, ҡалаға ҡайтырбыҙ», — тигән һүҙе хәтергә төштө. Бөтә уй ҡалаға, үҙебеҙҙең таныш подвалға йүгерҙе. Уның һәр бер кирбесе, һәр бер ватығы, емереге күҙ алдымдан үтте: бына унда Һибәт ағай яңғыҙы йөҙ түбән төшөп ятҡан, ул минең кеүек йоҡоһоҙ, ул

беҙҙе һағына, яманһыулай. Бәлки, ул да, яҙ булғас, подвалдың һауаһынан тарығып, тышҡа сыҡҡандыр ҙа, ғәҙәте буйынса, ҡулын артҡа ҡуйып, һыҙғырып йөрөй торғандыр әле...

Шул минут көрт өҫтөнән берәү йүгереп төштө лә минең алға килеп туҡтаны.

— Бәй!..

Әле генә минең уйымда кәүҙәләнгән Һибәт ағай, подвалда йөҙ түбән уйланып ятҡан Һибәт ағай, ҡулдарын артҡа ҡуйып, һыҙгырып йөрөгән һибәт ағай, минең алдымда тора ине. Минең күҙҙәрем быға ышанманы, ҡапыл артҡа һирпелдем. Ул миңә ташланды:

— Апуш!.. Һин бит!.. — тине.

Күҙ алдым томаланғайны. Бер аҙҙан һуң ғына, айнып, уны ҡосаҡлап алдым да илай башланым. Уның да күҙҙәренән берике бөрсөк йәш тәгәрәп минең түшемә төштө.

Ул юлда бик ҡыҙыу килгән булһа кәрәк. Оҙон сәсе араһынан буй-буй тирҙәр ағып, яңаҡ буйлап күкрәктәренә тикләм төшкәндәр, елкәһенән пар сыға, яғалары ысҡынған, түше асыҡ, әле генә бер ҡанлы һуғыштан сығып килгән батыр төҫлө күренә. Ләкин төҫө, ниңәлер, асыҡ һәм шат, эсенән әллә нимә ташып сығып килгән шикелле.

Ул, әллә ниндәй ел менән өйрөлтөп, мине йортҡа алып инде.

— Сәрби ҡайҙа?.. — тине. Ҡабаланып, һүҙһеҙ-ниһеҙ генә Сәрби еңгәм янына индек. Ул, урынынан тороп, саҡ кейенеп кенә бөткәйне.

Ул аптырап ҡалды.

Өй эсендә шау-шыу, илау, шатланыу китте, Һибәт ағай, сисенеп бөтөр-бөтмәҫ, эсендә ташып, аҡтарылып сығып килгән нәмәһен бер юлы түгергә ашыҡты:

— Беләһегеҙме?.. Мин бит ҡаланан төнгө сәғәт 12-лә сығып киттем. Унда бөтөнләй икенсе донъя.

— Йә, йә, ни бар? — Барыбыҙ ҙа уның ауыҙына ҡараныҡ.

— Батшаны төшөрҙөләр! Хәҙер слабуда!..

— Батшаны төшөргәндәр, ти!..

Минең аҡыл быны һис бер кәртәгә һыйҙыра алмай ине.

Сәрби еңгәм, минең туҙылып киткән аҡылға өҫтәп:

— Юҡтыр ҙа, булмаҫ!.. — тине. Әле генә көтмәгәндә һибәт ағайҙы күреүгә шашып ҡалған, йүнләп айнымаған аҡылға был да өҫтәлгәс, аңымдан бөтөнләй ситтә ҡалдым.

## XVI

Мин сәй янында ғына аҡылыма килдем. Ул Бәҙри тураһында ла һөйләй башлағас, әле мине тотҡан полицейскийҙар күҙ алдыма килде.

— Полицейскийҙар ни эшләйҙәр?.. — тинем. Минең был беренсе һүҙем булды.

— Улар инде хәҙер быш-быш! — тине.

Һибәт ағайҙың ҡаланан алып килгән яңылығы йәшен тиҙлеге менән бөтә ауылға таралып өлгөрҙө. Беҙ, сәй эсеп, урамға сыҡҡанда, беҙҙең ҡапҡа төбөндә әллә ни тиклем халыҡ йыйылғайны. Барыһы ла Һибәт ағайҙы һырып алдылар. Йөҙҙәрсә күҙ уның ауыҙына ҡараны.

— Шулай уҡ ысынмы икән?

— Яңы батша кем булыр икән?

— Бәлки, буштыр әле ул!

— Былай булғас, һуғыш та туҡталыр инде.

Исмаһам, һуғыш ҡына бөтһә ярар ине. Кешеләрҙең ауыҙында шундай һүҙҙәр әүәләнә ине, ләкин уларҙың барыһы ла ниндәйҙер бер шөбһә, икеләнеү менән тамам булалар ине.

Кискә ҡарай ҡаланан тағы ла яңы хәбәрҙәр өҫтәлде. Халыҡ күңелендәге шөбһәле төйөндәр сиселә төштө. Урамда икешәр, өсәр кеше йыйылып торған ерҙә шул яңылыҡ — батша төшөрөү тураһында һөйләнә ине.

Беҙҙең өйҙән төнгә тиклем кеше өҙөлмәне, Ьибәт ағай һаман һөйләй ине.

Иртәгеһен беҙ өсәү ҡала юлында инек.

Беҙҙең аҙымдар шул тиклем еңел ине. Арттан көслө ел өргән кеүек йәки ҡаланан беҙҙе бер магнит тартҡан кеүек тойола ине. Кибәт ағайҙың күҙҙәре аяҡ аҫтындағы юлға ҡарамайҙар, ҡалаға табан осалар ине. Бик алыҫтан ҡаланың көмбәҙҙәре яҙғы ҡояшҡа ялтырап күренгәс, Һибәт ағай киң бер һулыш алды ла:

— Эйе, унда революция бара, — тине.

## ТИМЕРКӘЙ ФӘЛСӘФӘНЕ

### I

Был киң туғай минең үҙ йортом кеүек булып китте инде.

Яҙ булып, ерҙе үлән ҡаплау менән, минең һәр кисем бында үтә. Уның үләндәре, сәскәләре араһында аунайым, тулайым. Унан һуң йәшел үлән өҫтөнә ятып, төрлө уйҙарға сумам. Унан һуң инде йоҡоға китәм...

Бына мин бөгөн дә бында.

Нисәнсе тапҡыр килеүем икән?

Үҙем дә белмәйем. Бөгөнгө һауа бүтән көндәргә ҡарағанда ла күңеллерәк. Йондоҙҙар бер-береһенән көнләшкән кеүек йымылдашып яналар. Миңә ҡарап күҙ ҡыҫҡандай булалар. Шуларға ҡараһам, ҡылт итеп күрше ҡыҙы Гөлбикә иҫкә төшә.

Анау көндө ул мине аулаҡ өйгә ҡурай тартырға саҡырғайны. Шунда мин уның күҙҙәренә ҡарап торҙом да ошо йондоҙҙарға оҡшаттым. Ләкин был йондоҙҙар, уның күҙҙәре кеүек, йөрәккә үтмәйҙәр, тик уны иҫкә генә төшөрәләр. Э Гөлбикәнең күҙ ҡараштары инде минең бөтә тәнемә ут йүгертеп ебәрә.

Ана, Нора тауы артынан ай ҙа ҡалҡа... Кисә әҙ генә иртәрәк ҡалҡҡайны һәм өҙөк-өҙөк болоттар араһында ине. Бөгөн ап-асыҡ булып түңәрәкләнеп ҡалҡа ул. Күк йөҙөндә уның йөҙөн ҡапларлыҡ бер генә болот киҫәге лә күренмәй... Өҫтәре ысыҡ менән ҡапланған үләндәр, арыш башаҡтары аҡһыл ай нурында ынйы төҫлө ялтырап киттеләр. Бейек тау биттәре шыйыҡ аҡһыл томандар аша серле көмбәҙ кеүек ялтырап күренделәр, тағы ла бейегәйгән төҫлө булдылар.

Донъяла ниндәй хикмәттәр юҡ. Ҡарап торһаң, иҫеңаҡылың китерлек. Ошо донъяны «Алла яратҡан», тиҙәр. Эле уның был ғына түгел, теге донъяһы — әхирәте лә бар, тиҙәр.

Унда ожмах менән тамуғы ла бар, тиҙәр. Үҙен бик шәфҡәтле, бөтә гонаһтарҙы кисерә, тиҙәр. Улай булғас, кешене аҙаплар өсөн, ниңә тамуҡ яратты икән ул?

Шул тамуҡ тигәндәре иҫкә төшһә, бай ағай күҙ алдына килә. Бай ағай ҡайһы ваҡытта мине тиктомалға туҡмаған саҡта, тамуҡты яратҡан Алла бай ағай шикелле булып күҙ алдына килеп баҫа.

Ысынлап та, әгәр ҙә мин Алла булһам, бигерәк тә шәфҡәтле булыр инем. Бөтә кешеләрҙе бер тигеҙ бай яһар инем. Зерәгә кешеләрҙе тамуҡта яндырмаҫ инем. Ысынлап та, ниңә кешеләрҙе яфаларға, аҙапларға инде?

Бына мин үҙем дә шул бәхетһеҙҙәрҙең береһе. Мин етем. Мин хеҙмәтсе, мин ҡол. Алла ҡоло ла түгел, бәндә ҡоло!

Иртәнән кискә тиклем байға эшләйем. Эҫе ҡояш аҫтында бөтә тәндәрем әсе тиргә ҡойона.

Кис булғас, ат менән ҡунырға киләм. Төндәр буйы ат көтөп сығам. Таң беленеү менән тағы өйгә, тағы эшкә, тағы тиргәшкә!

Минең көндәрем шулай үтәләр!

Минең бөтә тыныслығым ошонда ғына.

Бында теләгәнсә иркен һулыш алам, бында теләгәнсә уйлана алам. Бында мин тамам ирекле, һис кем миңә тығыҙлыҡ яһамай.

Аһ, өйгә ҡайтһаң инде... Елкә тырнарға ла ваҡыт юҡ! Эш, эш!.. Шуның менән дә байға ярап булмай әле. Берәй нәмәкәй генә тура килмәһә, зерә юҡҡа минең өҫкә аҡырынырға тотона. Имеш, бөтә гонаһ миндә генә. Мин бит ни ҡушһа, шуны эшләйем. Барыһын да эшләйем, ул тиклем донъя аҡтарырлыҡ ниндәй гонаһым бар һуң минең? Эҙ генә яуаплашһаң, унда инде ҡиәмәт ҡуба башлай.

— Табаныңды ялтырат! — тип кенә ебәрә.

Бына шул мәлде теге тамуҡты яратҡан Алла ҡылт итеп иҫкә килеп төшә.

Ул, тим, асыулы кешеләренә тамуҡ яратҡас, тим, беҙҙең бай шикелле берәй ныҡ асыуы килгән сағында нисек донъяны емереп ташламай икән, тим.

Шуға күрә лә туғайҙағы тыныс кистәрҙе дүрт күҙ менән көтөп алам мин. Уның һауаһы, тынлығы, матурлығы, йомшаҡ үләндәре миңә рәхәтлек бирәләр. Йәйҙең матур, ҡояшлы көндәре ни тиклем матур булһа ла, үҙем уның рәхәтен күрә алмағас, яратмайым мин уны.

Ҡояш сыҡҡас та, миңә әлеге тамуҡ ғазабы башлана...

Ҡояш тау артына барып, ер өҫтөнә ай шары ҡалҡыу менән, үҙемде бәхетле һанайым мин. Был да бит ваҡытлы ғына. Уның йәйе үтә лә китә, уның бит әле ҡышы бар!

Их, ҡыш, ҡыш!.. Ҡыш түгел, тамуҡ ул!

Унда инде быңдай рәхәтлектәр булмай. Көнө лә, төнө лә, таңы ла эш менән үтә. Үҙемдең шул тиклем бәхетһеҙ булыуыма аптырайым мин!

Алланы шәфҡәтле, тиҙәр, етемдәргә шәфҡәт итә, тиҙәр. Үҙе лә шулай итергә ҡушҡан, тиҙәр. Етем-еҫерҙәрҙең теләктәрен ҡабул итә, имеш, тиҙәр.

Мин илай-илай бәхет һораным, көндәр һораным, төндәр һораным. Бай ағай өй эсе менән «ҡәҙер» кисәләрендә намаҙ уҡығанда, теләк теләгәндә, мин дә теләнем. Ләкин минең теләктәремдең береһе лә ҡабул булманы. Минең һорағандарымдың береһен дә бирмәне.

Донъяла күп кешеләр йәшәйҙәр, бәхетте Алла бирә, тиҙәр. Ә үҙҙәре көн-төн эшләйҙәр. Байҙары кешеләр яллап эшләтәләр, шуның менән байыйҙар. Әгәр ҙә эшләмәй йәки эшләтмәй торһалар, бер нәмә лә булмай. Сәсмәйенсә ашлыҡ та үҫмәй, сапмайынса бесән дә булмай. Шуларҙың береһен дә эшләмәһәң, береһе лә булмаймы ни, нисек һуң «Алла бирә» тиҙәр икән?

Тимеркәй һәр ваҡыт шундай уйҙар менән баш вата ине. Көндөҙөн эше араһында ла, кистәрен туғайға ат ҡуна барғанда ла шуларҙы уйлай ине.

Бөгөн дә ул туғайҙа йәшел үләндәр араһында яңғыҙы ятҡан саҡта ошо уйҙарға күмелде. Күп уйҙарын, кешегә һөйләгән кеүек, ҡысҡырып һөйләне. Айға, йондоҙҙарға, алыҫта күренеп торған бейек тауҙарға ҡарап һөйләне. Уйлаған уйҙарының осона сыға алмағас, үҙенең биргән һорауҙарына яуап таба алмағас:

— Юҡтыр ҙа ул! — тип ҡуйҙы. Ләкин ул һүҙҙәрҙе ҡырҡа әйтә алманы, күңеленең әллә ниндәй генә бер мөйөшөндә шик ҡалды. — Кешеләр, бар, тиҙәр бит, — тип өҫтәп ҡуйҙы.

Уйҙары сыуалды, башы эшләмәй башланы. Алыҫтан, әллә ҡайҙан, бер тауыш ишетелгән кеүек булды. Ҡолаҡтарын

ҡуйып тыңлай башланы. Ләкин ул тауыш ҡабатланманы. Ҡалын урманға инеп юғалғандай булды. Алыҫ та түгел үҙенең ҡунырға алып килгән аттары, ауыҙҙарын тултырып, йәшел ысыҡлы үләндәрҙе көйшәйҙәр ине.

Бына ерән айғыр, башын юғары күтәреп, ҡолаҡтарын торғоҙҙо ла дәртле итеп бер кешнәп ебәрҙе. Уның көмөш тауыштары тулҡынланып туғайға йәйелде. Урман, һыу буйҙарына таралды. Уның яңғырауы ярҙарға ҡағылып, алыҫта тағы бер-ике ерән айғыр кешнәгән кеүек булды. Бер-ике секундтан һуң был тауыштар урманға инеп йотолдолар.

Тимеркәй тағы башын ҡалҡытып был тауышты тыңлап торҙо.

Тау артынан ҡыҙарынып йәйге таң атып килә ине.

## II

Тимеркәй ата-әсәһенән бик йәшләй генә етем ҡалды.

Ул әсәһен яҡшылап хәтерләмәй ҙә. Сөнки ул әсәһе үлгән саҡта ике йәш ярымдар самаһында ғына ине. Әсәһе үлгәс, Сәми ҡарттың бер яҡын ҡәрендәше Ҡаңышбикә әбей Тимеркәйҙе үҙ тәрбиәһенә алғайны. Сәми ҡарт — үҙ ғүмере буйынса Никлудин баярында урман ҡарауылсыһы булып торған кеше. Ул ауылға йылына ике — ғәйеткә йәки берәй кәрәкле йомошо булһа ғына ҡайта.

Шуның өсөн дә уны «Урман Сәми» тип йөрөтәләр. Уның тураһында халыҡ телендә әллә ниндәй легендалар бар. Уға урман ене эйәләшкән икән дә, шуның менән тора икән, тип тә һөйләйҙәр. Бисәһен дә урман ене быуып үлтергән, тип һөйләй торғайнылар. Ул ауылға ҡайтҡандың артынан берәй кеше ауырып китһә:

— Моғайын, Сәми ене ҡағылғандыр әле, — тип шомланалар.

Балалар илаһа:

— Ана, Сәми килә! — тип ҡурҡыталар.

Сәми ҡарт халыҡ йөрәгенә үҙенең шул ҡурҡыныслы яғы менән инеп ултырғайны. Һәр кем уның тураһында ҡурҡыныс һүҙҙәр һөйләй, һәр кем шомлана ине.

Ҡаңышбикә әбей үлеп киткәс, Сәми ҡарт улы Тимеркәйҙе үҙ янына алды. Шунан һуң Тимеркәй туғыҙ йәшенә тиклем атаһы янында, урман араһында, ҡалды.

Ҡаңышбикә апаһы үлеп, Тимеркәй үҙ тәрбиәһенә ҡалғас, улыма иптәш булыр тип, әйләнергә уйланы. Бер-ике тол ҡатынға яусы ебәреп маташты. Уның тураһында халыҡ телендә йөрөгән ҡурҡыныс әкиәттәргә ҡарап булһа кәрәк, теге ҡатындар риза булманылар. Шунан һуң ул был мәсьәләне икенсе тапҡыр ҡуҙғатманы. Ҡулын һелтәне лә ҡуйҙы. Үҙенең яҙмы-

шына баш эйеп, ул Тимеркәй менән икәү торорға ҡарар бирҙе.

Сәми ҡарттың землянкаһы Ағиҙел ярының эргәһендә генә. Ул уны үҙ ҡулы менән һалған, уның бөтә кәрәк-яраҡтары шунда, сөнки йомошҡа барырға күршеһе юҡ уның. Үҙе бешерә, үҙе әҙерләй. Ҡашығын да үҙе яһаған, туҫтаҡ, табағын да үҙе эшләгән. Балта, көрәк кеүек нәмәнән башҡаһын береһен дә баҙарҙан һатып алмаған ул.

Шунда уҡ яр ситендә кәмәһе тора. Ҡармаҡ, мурҙалары, ауҙары ла шунда. Уның бүреләрҙән һаҡланыу өсөн яһаған ҡоралы ла үҙенеке. Бер оҙон имәнгә кейҙереп тимер һөңгө кеүек нәмә лә эшләп алған. Ул урманға барһа йәки төнгә ҡалһа, шуның менән йөрөй. Урмандағы айыуҙарҙың барыһы ла уға таныш. Сәми ҡарт инде уларҙың барыһына ла исем ҡушып бөткән. Уның нисә балаһы бар икәнен, уларҙың нисә йәштә икәнен барыһын да күңеленә теркәп бара. Ул инде уларҙың иҫәбен яңылышмай. Ләкин ул бүреләр менән дуҫ түгел. Уларҙы бер ваҡытта ла үҙ бойороғона күндерә алғаны юҡ. Хатта бер нисә тапҡыр бүре ҡаҙаһына осрай яҙып ҡалғаны ла бар. Теге һөңгөнө ул ана шул бүреләр өсөн яһап алғайны.

Тимеркәй ана шул бүреле-айыулы урманда үҫте. Атаһы күп ваҡыт землянкала булмай: утарға аҙыҡ алырға, йә урманды әйләнеп сығырға, йә балыҡ тоторға китә. Балыҡҡа барғанда Тимеркәй атаһынан ҡалмаһа ла, күберәк ваҡыт Тимеркәйгә землянкала ҡалырға, ғүмерен яңғыҙ үткәрергә тура килә ине.

Тимеркәй йәй көнө землянкала ултырмай, көнө буйы яланғас көйө Иҙел буйында, ҡыҙыу ҡом өҫтөндә аунай. Уйнап туйһа, тау башына менеп, матур таштар йыйып йөрөй, йәки бейек ағас баштарына менеп, ҡош оялары ҡарай. Атаһы ҡайтҡан саҡта, күп ваҡыт өйҙә булмай торғайны. Сәми ҡарт һөрән һалып уны ҡайтара ине. Тимеркәйҙең көндәре шулай үтә ине.

## III

Бәхет бер кирегә китһә китә бит ул.

Холера йылы ине. Сәми ҡарт үҙенең тотҡан балыҡтарын йөкмәп баҙарға китте. Донъя бит ул. Аҡсаһыҙ тороп булмай. Тимеркәйгә күлдәк-ыштан кәрәк. Ҡышҡа табан аяғына, өҫтө-башына ла кәрәк була. Үҙенең эре, үтемле балыҡтарын йөкмәп, ике аҙнаға бер тапҡыр 15 саҡрымдағы баҙарға барып, ваҡ-төйәк нәмәләр алып ҡайтҡылай торғайны. Бөгөн дә шул уй менән баҙарға барырға сыҡты.

Көн эҫе. Исмаһам, әҙ генә еле лә юҡ. Бөгөнгө көндө үҙ кәүҙәңде йөрөтөргә лә күп хәл кәрәк. Э Сәми ҡарт, ике бот-

лап балыҡ йөкмәп, ҡомло юлдан бара. Ул иртәнге һалҡын менән сыҡһа ла, көндөң ҡыҙыуына ҡалды. Баҙарға килеп еткәндә, уның эсендә йәһәннәм ҡайнай ине. Ул шул тиклем көйгәйне, уға бер күл һыуы ла әҙ булыр төҫлө ине. Ул баҙарға инмәне, ҡойоно күреп, уға тура килде. Балығын ергә ҡуйҙы ла йәһәт кенә биҙрәне төпкө төшөрҙө. Һалҡын һыу менән битен, ҡулын әҙ генә сайҡаны ла ҡомһоҙланып эсә башланы. Эскәс, еңеләйгән төҫлө булды. Баҙарға сығып, бик еңел ҡулдан ғына балығын һатып өлгөрҙө.

Баҙарҙан әйләнеп юлға сыҡҡанда, уның тәне ауырайҙы. Эсендә ҡара йылан әйләнгән шикелле булды. Ҡояш юғарынан ныҡ ҡыҙҙырһа ла, уның тәненән, арҡа буйынан ваҡыт-ваҡыт һалҡын йүгереп китте.

— Ай-Һай, шул түгелме икән? — тине. Сөнки баҙарҙа холера менән ауырып киткән, арбаларында ҡоҫоп ятҡан кешеләрҙе үҙ күҙе менән күргәйне. Уның йөрәге өшөнө, йәһәтерәк ҡайтып етергә теләне. Ләкин аяҡтар уның теләгенсә йөрөмәйҙәр ине.

Тимеркәй уны әллә ни тиклем ер йүгереп килеп ҡаршыланы. Атаһын күрҙе лә:

— Ни эшләп улай күҙҙәрең эскә батып киткән? — тип һораны.

Сәми ҡарт:

— Бик эҫе бит, арығанмындыр, — тине.

Землянкаһына инеп, нәмәләрен ҡуйырға өлгөрмәне, эсен тотоп һикегә йығылды. Ҡоҫа башланы. Эсендә ут йүгерә ине. Тимеркәй Иҙелдән һаман һыу ташып торҙо. Төн урталарында ҡарт иҫенән яҙҙы. Үҙен үҙе төрлө яҡҡа ата башланы.

Таңға табан аяҡтары һыуынды, тырнаҡ остары ҡарайҙы. Танауы эскә батып керҙе. Эскә батҡан күҙҙәрен ҡаймаҡ төҫлө шекәрә баҫты, ауыҙынан әллә ниндәй һыуҙар аға башланы. Инде ул хәҙер дуламай. Уның тик күкрәге аҙ-аҙ ҡалҡып китә ине.

Тимеркәй:

— Хәҙер тынысланды, йоҡоға китте, иртәгә, бәлки, терелер, — тип уйланы. Яҡында ғына урман эсендә олоған бүреләрҙең шомло тауыштарын тыңлап йоҡоға китте.

## IV

Сәми ҡарт, үлгәс, өс көн буйына землянкаһында ятты. Һис бер килеүсе булманы. Дүртенсе көн утарҙан өс хеҙмәтсе килеп, тау битендә бер ҡәбер ҡаҙынылар ҙа, кейемдәренә төрөп, шунда күмделәр. Йыназа уҡыу, кәфенләү, саҙаҡа биреү кеүек дини мөрасимдарҙың береһе лә уның ҡәбере өҫтөндә үтәлмәне. Күмеп бөткәс, бер таҙа имән ҡаҙыҡты башының осона билдә итеп ҡаҡтылар ҙа эҫе көндә тирләп-бешеп бөткән

әшселәр хәл йыйырға ултырҙылар. Бик тәмләп кенә тәмәке төрөп тарттылар. Тимеркәй, быларҙың барыһына ла шаһит булып, ауыҙына бармағын тығып, ситтән генә ҡарап торҙо. Эшселәр:

— Их малай, атаһыҙ ҡалдың бит инде, хәҙер кемең бар? — тинеләр.

Ул быларға яуап ҡайтарманы. Уларҙың күҙҙәренә туп-тура ҡараны ла башын түбән эйҙе. Ул тәүге көндө илаһа ла, бөгөн иламаны. Ул алдағы көндә нисек буласағын да уйламай. Уларҙы уның башы һыйҙырмай ине әле.

Кискә табан ул эшселәргә эйәреп утарға китте.

Ауылда Сәми ҡарттың нисек үлеп, нисек күмелеүе тураһында төрлө хәбәрҙәр йөрөнө.

— Ул үлгәс, уны ендәр йыназа уҡып күмгән икән, — тип тә һөйләнеләр.

Ҡайһы берҙәре:

— Ул убырлы булған икән, вабаның[1] башы ла шунан булған икән. Уның тағы ла берәй шауҡымы булыр, ҡәберен асып, уны ҡаҙыҡ менән ҡаҙаҡларға кәрәк, — тип һөйләнделәр. Ҡайһы бер кешеләр уның ҡәберендә убыр осоп йөрөгәнен дә күреп ҡайттылар. Ул үлгәс, уның тураһында ауылда тағы ла ҡурҡыныслы хәбәрҙәр күбәйҙе. Һәр бер ҡаза, мал үлеү тураһында унан шомлана башланылар.

— Сәми шауҡымы ҡағылғандыр әле, — тиҙәр ине.

## V

Ҡотлояр — ауылдың иң бай әҙәме.

Уны «Һаран Ҡотлояр» тип тә, «Урыҫ Ҡотлояр» тип тә йөрөтәләр. Ул йәш сағында бик ярлы булған, ҡайҙалыр бер баярҙа хеҙмәт иткән, шунан һуң ауылға ҡайтып йорт ҡорған да бик ҡапыл байып киткән.

Ҡотлоярҙың байыуын халыҡ былай һөйләй:

— Ул баяр яланынан бик күп хазина тапҡан икән дә баяр менән уртаҡлашҡан икән. Шуның менән баяры ла, үҙе лә байып киткән икән, — тиҙәр.

Ҡайһы берәүҙәре:

— Үҙенең баярына килгән ҡунаҡ баярының иҫерек ваҡытында аҡсаһын ҡулға төшөргән дә байыған икән, — тиҙәр. Уны төрлө кеше төрлөсә һөйләй. Ләкин ул нисек кенә булһа ла байыған. «Ҡотлояр бай» тигән исемде күтәргән, тирә-яҡҡа байлығы менән уның даны таралған.

Ул үҙе кеше менән бик аҙ ҡатыша, йәй булһа, бөтә ғүмерен яланда үткәрә, ҡыш булһа инде, кәртәһенән кермәй.

[1] ***Ваба*** — холера.

Шундағы ваҡ-төйәк эш менән шөғөлләнеп ваҡытын үткәрә. Кеше барһа, йомош бирмәй, үҙе лә кешегә йомош һорап сыҡмай.

Унын өйөндә йылына ике генә мәжлес була. Ураҙала бөтә тирә-яғын саҡырып бер ифтар[1] яһай, ҡорбан байрамында, бер нисә ҡорбан салып, бөтә ауылды тиерлек ҡунаҡ итә. Бына шунан башҡа ваҡыттарҙа инде уның ҡапҡаһы ябыҡ була. Ҡапҡаһынан хәйерсе-фәләнде индереү түгел, күршенең этен дә кертмәй, шуға күрә уны «Һаран Ҡотлояр» тип йөрөтәләр.

Үҙен бик мыжыҡ тиҙәр.

Уға бик аҙ хеҙмәтсе ярай. Унда түҙеп торған хеҙмәтсене:

— Айыу тиреһенән яралғандыр, — тип һөйләйҙәр. Шуның өсөн дә ул яҡын-тирәнән үҙенә хеҙмәтсе таба алмай, әллә ҡайҙан ситтән барып яллай торғайны. Унан ҡасҡан хеҙмәтселәрҙең иҫәбен-һанын әйтеп бөтөрөрлөк түгел.

Ул хеҙмәтселәрҙе эшкә шул тиклем ҡаты ҡуша ки, уның иртәһе лә, кисе лә, төнө лә эш менән үтергә тейеш.

Ул йөҙәр дисәтинә иген сәсә, икешәр-өсәр йөҙ баш йылҡы аҫрай, ҡуйҙарының иҫәбен үҙе лә белмәй торғандыр. Бына шул ҡыр эше таң ҡараңғыһынан төн ҡараңғыһына тиклем бара. Хеҙмәтселәрҙең арыуы, йонсоуы менән иҫәпләшеп тормай, ул төндә лә эш таба, һис тә булмаһа, берәй ауырыу малын ҡарауылларға ҡуша. Шул рәүешсә уның ҡул аҫтында бер генә минутҡа ла тынғылыҡ юҡ. Ул үҙе лә шулай тынғыһыҙ бер әҙәм. Уның тураһында халыҡ:

— Бер күҙе йоҡлаһа, икенсе күҙе һәр ваҡыт ҡарап тора, — тип һөйләй.

Уның йорт-ҡаралтыһына килһәң, себен осоп инерлек урын юҡ. Бөтә йорто бейек таш ҡойма менән уратылған. Хатта йортоноң тәҙрәләре лә урамға ҡарамай. Барыһын да ҡура яғына сығарып эшләткән. Шуға күрә булһа кәрәк, уны «Урыҫ Ҡотлояр» тип йөрөтәләр.

Бына Тимеркәй ҙә туғыҙ йәштән уның донъяһына тап булды. Уның әңгәмәһе былай:

Сәми ҡарт үлгәс, Тимеркәйҙе берәү ҙә тәрбиәгә алманы. Атаһы үлгәс, баяр тирәһендә лә урын булманы. Йәш, эшкә яраҡһыҙ тип, ауылына ҡайтарҙылар. Уны ауылда ла бер кеше лә йортона индермәне. Сәми ҡарт тураһындағы шомло әкиәттәр Тимеркәйгә күсте. Уны:

— Урманда ен алыштырған, — тип һөйләй башланылар. Тимеркәй урамда, кәбән аҫтарында, аҙбар арттарында йоҡлап йөрөй ине. Әгәр ҙә берәүҙең йортона килеп ҡунһа, иртәгеһен үк ауылға хәбәр тарала. Ул йортта бер ҡаза йәки ауырыу көтөлә.

[1] ***Ифтар*** — үҙен күрһәтеп ала мәғәнәһендә.

Уға ҡайҙа барырға?..

Кис бер урын юҡ. Бөтә ишектәр ябыҡ. Бөтә кеше уға:

— Теге мәлғүндең ен алыштырған балаһын берәйһе шунда үлтереп ташлаһа, сауаплы булыр ине, — тип сиркәнеп ҡарай.

— Ауылға килгән аяҡлы фетнә, — тип йөрөтәләр. Тимеркәй бының серенә төшөнә алмай. Көнөнә бер-ике һыныҡ икмәк табып ҡорһағын тултырһа, уға шул етә. Төн үткәреү Тимеркәй өсөн ҡайҙа ла бер. Ул уға күнгән инде.

Ул мәлдә Тимеркәй Ҡотлояр байҙың да ҡапҡаһын буш ҡуйманы. Унан бер нисә тапҡыр әрләнеп, ҡыуылып сыҡҡайны.

Бер көн Ҡотлояр байҙың ниндәй мәрхәмәте килгәндер инде, Тимеркәй иртә менән аҙбар артында йоҡлап ятҡан сағында, уны уятып, өйгә алып инде. Алдына ҡатыҡ менән ҙур кисәк икмәк килтереп ҡуйҙы ла:

— Һинең барыр урының юҡ, беҙҙә ҡал, әшләрһең, тамағыңды туйҙырырһың! — тине. Тимеркәй былдай йылы һүҙҙе кешенән беренсе тапҡыр ишетә ине әле.

Ризалығын һүҙ менән әйтә алманы, башын ғына һелкеп белдерҙе.

Шул көндән башлап Тимеркәй Ҡотлояр байҙа хеҙмәтсе булып ҡалды. Уның бында тап булыуы ла Ҡотлояр байҙың хеҙмәтселәре ҡасҡан осорға тура килде. Уға яраҡлы хеҙмәтсене бик тиҙ генә балсыҡтан яһап булмай, морон төртөрлөк урыны булмаған кешеләр ауыр эштәргә тиҙ күнегеүсән булалар. Тимеркәй ҙә шуларҙың береһе, иң беренсеһе ине. Ҡотлояр бай ҙа былдай мәлдән бик файҙалана белә. Был тиклем байлыҡ бит бушҡа ғына йыйылмаған, уның өсөн бик күп әсе-сөсөләрҙе татыған инде ул.

## VI

Тимеркәйҙе хеҙмәтселеккә алғас, Ҡотлояр бай тураһында тағы яңы хәбәрҙәр таралды.

— Ҡотлояр бай, ен алыштырған Тимеркәйҙе үҙендә тотоп, уның ендәрен ҡушып эшләтә икән. Улар шулай күп икән... Ул былай икән... — тип һөйләй башланылар.

Был хәбәрҙе иң күп таратыусы, бик оҫта итеп, кеше ҡурҡырлыҡ итеп һөйләүсе Балтабикә ҡарсыҡ ине. Сөнки ул ен, зәхмәт, им-том тирәһендә тирә-яҡҡа мәшһүр бер ҡарсыҡ булып танылған.

Сәми ҡарт уның иң ҙур кәшфиәтенән[1] һанала ине. Ул үлгәс, Тимеркәйгә күсте. Тимеркәйҙе Ҡотлояр үҙенә алғас, ул шомло төйөн уның себен осоп инмәҫлек йортона барып йәше-

[1] ***Кәшфиәт*** — асыш мәғәнәһендә.

ренде. Унда ул тағы ла серлерәк бер төҫ алып китте. Һәр көн таң алдынан Ҡотлояр байҙың йортонан бик күп ен ғәскәрҙәренең сығып китеү хәбәрен дә, бик йәшерен сер итеп, ана шул Балтабикә тараткайны.

Ысынлап та, Тимеркәй эшкә килһә, ен кеүек эшләй ул.

Ул Ҡотлояр байҙа ун бер йыл хеҙмәт итте. Ул инде уның ауыр эштәренә тамам күнегеп бөткәйне. Ул кәбән ҡойған саҡтарҙа ат тартымы күбәләр кәбән башына йөн шикелле ырғытылалар. Аҫау малдарҙы ҡороҡлап тотканда, Тимеркәй бер аҙым атлатмай, шып иттереп туҡтата. Уның ун бер йыл буйына Ҡотлояр донъяһына түккән көсөн иҫәпләп ҡараһаң — уның таш ҡоймалары ла күтәрә алмаҫтар. Шулай булһа ла, Ҡотлояр байҙың уға мыжымаған сәғәте юҡ. Һәр көн бер тапҡыр әрләмәгән, уның эшенә бәйләнмәгән көнө булмағандыр. Тимеркәй уға күптән күнеккән, уға ундай мығырлауҙар ябай һүҙгә әйләнеп киткән, шуның өсөн дә Ҡотлояр байға ҡаршылашмай торғайны. Ҡаршылашып ҡайҙа бараһың?

Унан сығып китер ине, барыр урыны юҡ. Сәми ҡарт тураһындағы шомло әкиәттәр уны халыҡтан алыҫлаштырған, уға һаман да шомланып ҡарау бөтмәгән ине. Ҡайһы ваҡыттарҙа Тимеркәйҙең дә үҙ тормошонан зарланған, риза булмаған минуттары була. Ләкин уны бер кемгә лә һөйләмәй ул.

Хәҙер уның башына аң кергән. Уның ише егеттәр әйләнәләр, донъя рәхәтен күрәләр, ваҡытлы эшләйҙәр, ваҡытлы күңел асалар. Э Тимеркәй — һаман да шул Тимеркәй. Уның эш менән үтмәгән бер генә минуты ла юҡ. Уның да башҡалар төҫлө булғыһы килә, ләкин була алмай. Уның да хәҙер инде ҡыҙҙар күрһә, күңеле өҙгөләнә, күрше ҡыҙы Гөлбикә тураһында һәр ваҡыт уйлана, үҙенең арт ҡапҡанан сыҡҡан саҡтарын уның һыуға төшә торған ваҡытына тура килтерергә тырыша. Бер ваҡыт, йәшеренеп, Гөлбикәләрҙең өйөнә ҡурай тартырға ингән сағын һис хәтеренән сығарғыһы килмәй уның.

Ул уны ярата, ләкин бер ваҡытта ла үҙенең яратыуын уға һөйләй аласаҡ түгел, уны әйтеү менән барыбер Гөлбикә һанға алмаясаҡ.

Ул шулай уйлай ине.

Шундай өмөтһөҙлөктәр арҡаһында уның башын тағы ла күберәк уйҙар, төрлө хыялдар сырмап ала. Ул эш араһында ла, кис менән туғайға ат ҡуна барғанда ла үҙе тураһында уйлана, үҙенең бәхетһеҙлегенең сәбәптәрен тикшерергә бик ярата:

— Әгәр ҙә мин теге Кағынбайҙар төҫлө аталы-әсәле булып, шулар кеүек түңәрәк кенә донъя көтһәм, Гөлбикә лә миңә һис бер һүҙһеҙ килер ине бит.

Бына уның уйының тармаҡтары шунан башланып китә торғайны. Ул Алланан шул бәхетте бик күп һораны. Ләкин

береһе лә унының теләгенә ярҙам итмәне. Һәр көнгө таң уны ауыр, иҫәпһеҙ күп эштәр, тиргәштәр менән ҡаршыланы. Әле унын киләсәгенә лә бер өмөтлө нәмә юҡ.

Шуның өсөн дә уйҙарының аҙағы Аллаға барып терәлә ине. Күңелендә бер генә лә өмөт тойғоһо ялтырамаған ауыр, әсе минуттарында:

— Юҡтыр ҙа ул! — тип ҡуя ине.

## VII

— Дөрр!..

— Дөрр!..

Ерҙәр һелкенә, окоптар ишелә, мылтыҡ, пулеметтарҙан ямғыр шикелле пулялар яуа. Меңдәрсә кешеләр ут эсендә, туп йәҙрәләре ҡурҡынысы аҫтында үлем көтәләр. Әллә ни тиклем кәүҙәләр тупраҡҡа болғанып, ҡан эсендә ята. Әллә ни саҡлы кешеләр йәрәхәтенән ыңғыраша. Күкрәге менән шыуышып, пуляһыҙ, тупһыҙ ерҙәргә сығырға ынтыла...

Тимеркәй ҙә шулар араһында.

Ул инде алты ай буйына ана шул ҡурҡыныстар аҫтында йөрөй. Һуғыш сыҡҡан көҙ менән үк ул һалдатҡа алынды. Өс айҙан һуң инде фронтҡа оҙатылды.

Немецтар өҙлөкһөҙ окопҡа аталар. Баш ҡалҡытыр әмәл юҡ.

Шул ваҡыт Тимеркәйҙең башынан ошо уйҙар үтте:

— Беҙ ни өсөн һуғышабыҙ? Илде, ерҙе һаҡлау өсөн, тиҙәр. Һуң, минең бер табан ерем юҡ. Ниңә, улай булғас, ерен һаҡлар өсөн Ҡотлояр байҙың балаһы килеп һуғышмай, ул ҡолағын ауырттырҙы ла хеҙмәттән тороп ҡалды. Хәҙер кәләше менән тыныс ҡына йәшәп тик ята. Башҡа бай балалары барыһы ла шундай һылтау менән тороп ҡалдылар. Исхаҡ бай улын хеҙмәттән ҡалдырыу өсөн мең һум аҡса тотҡан. Ә беҙҙе йүнләп ҡараманылар ҙа:

— Годен! — тип сығарҙылар ҙа ебәрҙеләр.

Унан тура һуғышҡа. Минең немецтар менән ниндәй уртаҡ малым бар? Мин уларға, улар миңә пуля аталар.

Быныһы Алла эше тиһәң инде, ниңә ул теге бай улдарын ҡушмай икән!

Күпме кешеләр зар илайҙар, Алланан иҫән ҡалыуҙы һорайҙар. Ләкин туптар, пулялар быларҙың барыһын да үҙенсә эшләй, ә Алланың бында бер генә лә, бармаҡ осондай ҙа мәрхәмәте юҡ. Уның көсө ҙур, һәр нәмәне үҙенсә эшләтергә ихтыяры етә, тиҙәр. Ниңә һуң инде иҫәпһеҙ кешеләрҙең: «Һуғыш туҡталһын ине!» — тигән теләктәренә әҙ генә булһа ла ҡолаҡ һалмай икән?

— Юҡтыр ҙа ул!..

Шул вакыт уның эргәһендә ҙур туп шартланы. Тупрактары уны, еле менән этәреп, кырға алып ырғытты. Шунан айнып торҙо ла бер соҡорға йүгерҙе. Шул минут аяғына каты бер нәмә бәрелде. Йөрәгенә үтте. Табан аҫтары эҫеле-һыуыклы булып сымырлап китте. Окоп эсенә һикереп төштө лә мылтығын ырғытып бәрҙе. Бер нисә канлы кәүҙә өҫтөнән атлап, окоп буйлап артка шыуыша башланы. Аяғының ауыртҡан ерен тотто. Кулы кып-кыҙыл йылы канға батты.

— Ах, харап булғанмын! — тип юғарыға караны ла, тороп, йән көсө менән алға йүгерә башланы. Уның тирә-яғында пулялар себен кеүек осалар ине.

— Юк ул!

— Юк ул! — Шул һүҙҙәр уның ауыҙында кабатландылар.

Алдында тағы шрапнель ярылды. Снаряд каҙыған соҡорға йығылды. Башынан йәшен үткән шикелле булды. Кыскырырға уйланы, ауыҙына тупрак тулғайны. Күҙ алдында әллә ниндәй ут уйнаны ла ер төбөнә убылып төшөп киткән кеүек булды.

Шрапнелдең бер ауыр суйын киҫәге уның түбә капкасын алып киткәйне. Ул баҫкан урынында ике мәртәбә әйләнде лә мәңге тормаҫлык булып снаряд соҡорона йығылды. Уның тегеуйҙары, шрапнель киҫәге менән осоп, канға аралаштылар.

# ҠАРАҒОЛ[1]

ҠАТНАШЫУСЫЛАР:

Ҡарағол — ихтилал[2] башлығы, баҫалҡы тәбиғәтле, 40 йәштәрҙә.
Гөлбикә — уның бисәһе, 35 йәштәрҙә.
Таңсулпан — уларҙың ҡыҙы, 18 йәштәрҙә.
Ҡыраубикә — Ҡарағолдоң әсәһе, 60 йәштәрҙә.
Мозой — Ҡарағолдоң күршеһе, бер ҡатлыраҡ, еңел тәбиғәтле кеше, 28 йәштәрҙә.
Һөйөндөк — ихтилалсы, Таңсулпандың һөйгән егете, 25 йәштәрҙә.
Ҡәзерша
Йортбағыш
Яланғол — Ҡарағолдоң иптәштәре, ихтилалсылар, 30 йәштәрҙә.
Ишмырҙа кантон — түрәлекте, шөһрәтте яратыусы кеше, 50 йәштәрҙә.
Иван Иванович — отставка алған генерал, ҙур имение эйәһе, 50 йәштәрҙә.
Елизавета — уның бисәһе, бик ҡыланырға яратыусан ханым, 35 йәштәрҙә.
Батюшка Андрей — рухани, миссионер, 40 йәштәрҙә.
Вася — Иван Иванович ҡулында тәрбиәләнгән, уның имениеһында актер булған крәҫтиән балаһы, 25 йәштәрҙә.
Наташа — ул да шул имениела тәрбиәләнгән, актриса, крәҫтиән ҡыҙы. Васяның һөйгән ҡыҙы, 20 йәштәрҙә.
Кондрат Петрович — кантон штабында команда башлығы, 30 йәштәрҙә.
Кузьма — крәҫтиән, төрмә һаҡсыһы, Васяның дуҫы, 30 йәштәрҙә.
Гөлбәғиҙә — Ишмырҙа кантондың ҡыҙы, 18 йәштәрҙә.
Әпкәләй — Ишмырҙа кантондың шымсыһы, ҡара эсле, маҡтансыҡ кеше, 43 йәштәрҙә.
Дуня — Иван Ивановичтың аҫрау ҡыҙы, 18 йәштәрҙә.
Аҫылбай — ҡурайсы егет, 25 йәштәрҙә.
Барсынһылыу — Таңсулпандың иптәш ҡыҙы, 17 йәштәрҙә.
Имение һаҡсылары, төрмә башлыҡтары, төрмәлә ятҡан крәҫтиәндәр һәм башҡалар.

[1] Ҡыҫҡартып алынды.
[2] ***Ихтилал*** — восстание.

## БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Йәйге кис. Тирмә алды. Алыҫта эңер ҡыҙыллығына күмелгән тауҙар күренә. Сәхнә асылғанда, йылҡы көтөүе оҙатҡан, һыйыр көтөүе ҡаршылаған, йылҡы кешнөгән, һыйыр мөңрәгән тауыштар, шаушыуҙар ишетелә.

### I күренеш

Г ө л б и к ә *(ҡулына күнәген аҫып, ашығып сыға).* Көтөү ҙә ҡайтып бөткән икән. Эш менән булашып, ҡаршыларға сыға алманым тағы. Быҙауҙарым ҡушылмаһалар ярар ине. Таңсулпан ҡайҙа йөрөй икән? Таңсулпан, Таңсулпан!

Т а ң с у л п а н *(арттан).* Эүүү!

Г ө л б и к ә . Таңсулпан!

Т а ң с у л п а н . Эү, тимен, әсәй! (*Килеп сыға.)*

Г ө л б и к ә . Көтөү ҡаршыланыңмы әллә?

Т а ң с у л п а н . Эйе, әсәй, барыһы ла теүәл, ала башмаҡ ҡына ҡайтмаған.

Г ө л б и к ә . Ярар, ҡайтыр әле. Балам, мин һыйырҙарҙы һауып алайым, һин тирмә тирәһен ҡарай тор. Хәҙер атайың да ҡайтыр инде. Ул ҡунаҡтар менән ҡайтырмын тигәйне, һауыт-һабаңды әҙерләп, ҡымыҙҙарыңды тултырып ҡуй.

Т а ң с у л п а н . Әсәй, ҡайҙан, кемдәр икән?

Г ө л б и к ә . Кемдәр, тип ни, шул Үмер буйынан. Һөйөндөктәр, ахырыһы...

Т а ң с у л п а н . Һөйөндөктәр?!

Г ө л б и к ә . Белмәйем тағы, шулар булырға кәрәк. (*Ҡабаланып китә.)*

Т а ң с у л п а н . Һөйөндөктәр! *(Үҙ алдына.)* Ысынлап та һөйөндөктәр киләләрме икән?.. Мин уларҙы, килер тип, һис көтмәгәйнем. *(Уйланып тора.)* Уны ла күрер көнөм бар икән!.. Ул ниңә килергә уйланы икән? Ул ни өсөн килә икән?.. Ул килһә, мин уға нисек күренермен, мин уға ни һөйләрмен? Миңә ул һауанан төшкән бөркөт кеүек күренә! Мин уны күрһәм... эйе, мин уны күрһәм, ҡаушап ҡалырмын төҫлө күренә... *(Шул ваҡыт Әпкәләй килә, ҡарап тора.)* Улар ҡасан килерҙәр икән? Хәҙер кис була, бына улар яҡтыла килһәләр икән. Мин уларҙың анау тау башынан төшкәндәрен ҡарап торған булыр инем. *(Китә. Әпкәләй алға сыға.)*

### II күренеш

Ә п к ә л ә й *(яңғыҙы, Таңсулпан киткән яҡҡа ҡарап).* Бына ҡыҙ. Бына ҡыҙ тиһәң дә ярай!.. Күрәһең, уға хәҙер дәрт ингән. Ул әллә ҡайҙарға, тау башына ҡарап, әллә ниҙәр һөй-

ләгән була бит әле! Бына мин шундай ҡыҙҙы яратам инде! Бына ул ҡыр ҡаҙҙарына оҡшаған. Бына ул һәр ваҡыт түш-баштарын ҡалҡытып, ҡыр ҡаҙҙары кеүек, осорға ғына тора... Бына ул үҙе бик һылыу, бик һәйбәт... Атаһы насар шул. Ҡыҙыңды миңә бир, тип атаһынан һорап ҡара әле. Әй-йәй-йәй, ул яҡын да килмәç, бына уның атаһы булмаһа ине, мин ул ваҡытта ҡылыҡты ҡылыр инем инде!.. Бәлки, күндереп тә булыр ине. Ҡарағол менән дошманлашып кителде шул. Дошманын дошман да, ошо ҡыҙын күрһәм, күңел ирей ҙә китә. Ҡарағол менән ярашып, килешеп ҡуйығы ла килә. (*Уйланып тора.*) Бик уçал кеше бит ул. Уның менән кантондың үҙе килешә алмағанды, мин килешә аламмы һуң? (*Мозой килә.*)

М о з о й (*уның алдына сығып туҡтай*). Әпкәләй ағай, нихәл?!

Ә п к ә л ә й. Бик яҡшы. Ә, Мозой ҡорҙаш, һинме ни әле? Мозой ҡорҙаш, һин миңә ағай тиһең дә тиеүен, һин минән өлкәнерәк түгелме икән, һин миңә ағай түгелме икән?

М о з о й. Мин һинән өлкән буламмы? (*Көлә.*)

Ә п к ә л ә й. Юҡ, ысынлап мин шулай уйлап йөрөйөм әле. Әсәйем мәрхүмә мине сысҡан йылында, һине йылҡы йылында тыуған, тип әйтә торғайны.

М о з о й. Бәлки, шулайҙыр. Бәлки, һин сысҡан йылында тыуғанға күрә бәләкәй булғанһыңдыр.

Ә п к ә л ә й (*төçөнә ололоҡ сығарып*). Һ.ин мине бәләкәй тип хурламаҡсы булаһың тағы! Аçыл һөйәк ҙур булмай ул.

М о з о й (*артына әйләнеп, елкәһенә төртөп көлә*). Дөрөç, дөрөç. Әпкәләй ағай.

Ә п к ә л ә й (*эреләнеп*). Ҡорҙаш, шулай шул. Бына мин бәләкәй булһам да, бер урында ла бәләкәй тип тормайҙар. Кантонға барһаң, «һыуу, әйҙүк, түрә!» тип кенә тора. Ә баярға барһаң, «ах, кенәз, кенәз!» тип кенә ҡаршы ала. Бында хикмәт башта бит ул! Бына һеҙҙең Ҡарағол бар, һыны ла һәйбәт, төçө лә матур, һүҙгә лә сәсән, ә үҙе бер урынға ла һыя алмай. Ул ниҙән килә, беләһеңме? Уның башында хикмәт юҡ.

М о з о й. Әпкәләй ағай, һуң, шул хикмәтеңде беҙгә ле өйрәт әле!

Ә п к ә л ә й (*көлөп*). Ки, алйот, ул хикмәт тигән нәмә өйрәтә торған нәмә түгел. Ул нәçелдән килә. Беҙҙең атай, олатайҙың тайраһы[1] Әбүбәкер Сиддиҡ сәхәбәгә[2] барып тоташҡан. Беҙҙең олатайҙар борондан изге булып килгәндәр. Хәҙер тархандыҡ алғандар. Батша белмәйенсә тарханлыҡ бирмәй ул.

М о з о й (*шаяртып*). Киңә кантон ғына булырға ине, Әпкәләй ағай.

[1] ***Тайра*** — нәçел-ырыу тарихы; шәжәрә.

[2] ***Сәхәбә*** — Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең замандашы һәм көрәштәше булған кеше.

Ә п к ә л ә й. Әллә булмаç тип әйтәһеңме, әллә булмаç тип әйтәһеңме? Булыр ҙа ул! *(Китә. Мозой яңғыҙ ҡала.)*

М о з о й. Хикмәт... изге нәçел... тархан... кенәз... (*Башын һелкеп тора.)* Тфү! Бының теле булмаһа, күҙен күптән ҡарға суҡып киткән булыр ине. Әгәр ҙә үҙен күрмәй, һүҙен тыңлаһаң, ысынлап та был ҙур кеше икән тип уйларһың! Ошаҡ ташып, баяр тупһаһына теҙ сүгеп, тамағын туйҙыра. Имеш, уға баярҙар «кенәз» тип әйтәләр. Бына хикмәт ҡайҙа ул! *(Көлә.)* Үҙе минән ун биш йәшкә ҙур, миңә, ҡорҙаш, ти! Ғәрләнеп үлерһең бит!

Шул ваҡыт Ҡ а р а ғ о л инә.

### III күренеш

Ҡ а р а ғ о л *(асыулы төç менән ҡабаланып йөрөй).* Ярар, күрербеҙ, ни булһа, шуны күрербеҙ! Шунан башҡа юл юҡ. Улар беҙҙе таныһындар!.. *(Ҡамсыһын һелтәп.)* Шунан һуң һөйләшербеҙ! Шунан һуң улар беҙҙең кем икәнлекте аңларҙар!

М о з о й (*яҡын килеп).* Ҡарағол ағай, Ҡарағол ағай, ниңә ҡыҙып ҡайттың?

Ҡ а р а ғ о л *(һиçкәнеп).* Ә, һин, Мозой, бындамы ни әле? Ярай, бик яҡшы. Һин миңә бик кәрәк инең әле. *(Тауышын аҡрынайтып.)* Ҡустым, мин Үмер буйынан киләм. Ҡыпсаҡ ырыуына абжурнай команда ҡуйғандар. Ишмырҙа кантон беҙҙең Ҡоростал, Олобүләк буйҙарын Красиков баярына биргән. Беҙҙе йәйләүҙән ҡыуасаҡтар. Әгәр ҙә ҡарышһаң, беҙгә лә абжурнай команда ебәрәсәктәр.

М о з о й. Һммм... Әле генә Әпкәләй беҙҙең ауылға килде, Ишемғол ҡартҡа ҡарай китте. Моғайын, ул берәй әшкәмә[1] ҡороп йөрөй торғандыр әле.

Ҡ а р а ғ о л. Әпкәләй? Бына нисек! *(Уйланып тора.)* Уны хәҙер үк бөтөрөп ташларға кәрәк! *(Йөрөй.)* Йә, ни һөйләй, ниңә килгән?

М о з о й. Уның һүҙенең атаһы-инәһе юҡ. Ул һаман маҡтана ғына.

Ҡ а р а ғ о л. Һммм. *(Ҡулын һелтәй.)* Ярар, йөрөһөн әле. Мозой, һин уға күҙ-ҡолаҡ бул. Ни һөйләй, ҡайҙа бара, барыһын да аңдып торорға кәрәк. Ул берәй нәмә һиҙеп килмәнеме икән?

Г ө л б и к ә килә. М о з о й китә.

[1] ***Әшкәмә*** — араны боҙоу өсөн аçтыртын йөрөтөлгән һүҙ; отко.

## IV күренеш

Г ө л б и к ә (*күнәген ҡулына асып).* Бәй, һин ҡайтҡанһың икән!

Ҡ а р а ғ о л *(төҫөн үҙгәртеп).* Йә, Гөлбикә, мал-тыуар имен-ме, барыһы ла теүәлме? Таңсулпан ҡайҙа?

Г ө л б и к ә. Барыһы ла иҫән. Таңсулпан аш-һыу тирәһендә йөрөй торғандыр. (*Төҫөнә ҡарап.)* Ҡара әле, һин бөгөн әллә ни эшләп үҙгәреп ҡайтҡанһың, әллә бер-бер хәл булдымы?

Ҡ а р а ғ о л (*белдермәй*). Юҡ, юлда асыуым килде. Беҙҙең ауылдың йылҡы өйөрҙәрен Иван Иванович еренә ҡыуып таш-лағандар! Ҡоростал башына килеп сыҡһам, ҡыуып алып ки-тергә маташып яталар. Баяр кешеләре менән ҡамсыға ҡамсы килеп талашырга, өйөрҙө ҡайырып алып ҡайтырға тура кил-де.

Г ө л б и к ә (*хафаланып*). Бөтә йорт өсөн бер үҙең тала-шаһың да йөрөйһөң! Һиңә ниңә кәрәк ул!

Ҡ а р а ғ о л (*һүҙен бороп).* Гөлбикә, юҡҡа хафаланма әле. Оҙаҡламай ҡунаҡтар килер. Кин аш-һыу тирәңде ҡарап ҡуй.

Г ө л б и к ә. Был арала һин дә өйҙә тормай башланың. Күк тана өс көндән бирле ҡайтканы юҡ. Анау ҡара башмаҡ һәр көн инәһен имә лә ҡуя. Көрән бейәнең ҡолонона һаҡау[1] бул-ған. Өйҙә торһаң, шуларға берәй төрлө әмәл яһар инең, исма-һам!

Ҡ а р а ғ о л. Ярар, ярар. Барыһын да иртәгә эшләрмен. *(Гөлбикә китә.)* Бисә тиһәң, бисә инде. Каман да шул баш-маҡтарын, ҡолондарын килтереп ҡыҫтыра. Минең башымда шул ғына ине шул!

Ҡыраубикә менән Таңсулпан инәләр.

## V күренеш

Т а ң с у л п а н *(алдан йүгереп килеп).* Атайым ҡайтҡан!

Ҡ ы р а у б и к ә. Балам, ҡайтҡанһың икән. Ыыуһап ҡайт-ҡанһыңдыр, ни эшләп урамда тораһың? *(Таңсулпанга ҡарап.)* Бар, балам, атайыңа ҡымыҙ әҙерлә.

Т а ң с у л п а н. Атай, ҡунаҡтарың ҡайҙа? Эсәйем, ҡунаҡ-тар менән килә, тигәйне бит.

Ҡ а р а ғ о л. Килерҙәр, балам, килерҙәр.

Ҡ ы р а у б и к ә. Кемдәр улар?

Ҡ а р а ғ о л. Үмер буйҙары. Көйөндөк, Ҡәҙерша, Яланғол.

[1] ***һаҡау*** — тамаҡ аҫты шешеп, танауынан ҡан килтерә торған йо-ғошло йылҡы ауырыуы.

Т а ң с у л п а н *(үҙ алдына).* Һөйөндөктәр киләләр, Һөйөндөктәр киләләр! (*Йүгереп тирмә артына китеп юғала.)*

Ҡ ы р а у б и к ә . Ул Ҡәҙерша тигәнең кем балаһы?

Ҡ а р а ғ о л . Ул — Ғәҙелша ҡарт балаһы. Ҡыпсаҡ ырыуынан. Шул ырыуҙың бер батыры инде.

Ҡ ы р а у б и к ә . Балам, улар төнгә ҡарай ниндәй йомош менән йөрөйҙәр. Әллә берәй кәңәш-фәлән бармы?

Ҡ а р а ғ о л . Юҡ, әсәй, былай ғына.

Ҡ ы р а у б и к ә . Былай ғына булһа, ярай инде. (*Китә башлай, әйләнеп килә.)* Ҡара әле, балам, анау Әпкәләй тигәндәре Ишемғол ҡарттарға килеп туҡтаны. Мин үткәндә, һаман һинең менән булашҡаны ҡолағыма салынды. Етмәһә, беҙҙең Таңсулпанға өмөт һалып йөрөй, тип һөйләйҙәр.

Ҡ а р а ғ о л (*күтәрелеп*). Әпкәләй, Таңсулпанғамы? (*Ирония менән көлә.)*

Ҡ ы р а у б и к ә . Яусы ебәрәм, үҙе бирмәһә, закон менән ҡурҡытып алам. Мин Ҡарағолдоң ниндәй эш менән йөрөгәнен беләм, тип әйтә, ти.

Ҡ а р а ғ о л *(үҙ алдына).* Бына ни һөйләй бит ул! Шул әҙәм аҡтығы, шайтан күләгәһе Ҡарағолдоң ҡыҙын һораһын, имеш! Һин уның телен ҡара! Ул шуның менән әллә кемдәрҙе ышандыра бит! Бөтә йортто болғап йөрөй бит ул! Ысынлап та ул шул һүҙҙе әйтәме икән?

Ҡ ы р а у б и к ә . Ат аҡтығы илгә бүре килтерә, тиҙәр, балам, уҫаллыҡҡа тәһәрәт кәрәкмәй ул. Йорт эсендә тынысһыҙлыҡ тыуып тора. Һин, балам, бик ҡыҙыу ҡанлыһың, берүк инде шундай эштәргә ҡатыша күрмә!

Ҡ а р а ғ о л . Бына минең ҡаным шул тиклем ҡайнай, ул Әпкәләй тигәндәрен хәҙер үк барып өҙгөләп ташлағым килә! Әгәр ҙә ул шул һүҙен һөйләп йөрөй торған булһа, мин уны хәҙер үк быуып ырғытам!

Ҡ ы р а у б и к ә . Балам, эт менән эт булма. Бер аҡҡа ҡара төшһә, унан арыныу ҡыйын булыр. Хәҙер хөкөм бик ауырайҙы бит, балам.

Ҡ а р а ғ о л . Инде, әсәй, Әпкәләйҙе лә өҫкә баҫтырып тороп булмаҫ!

Мозой йүгереп инә. Ҡыраубикә сығып бара. Шул ваҡыт Ҡыраубикәгә бәрелә.

## VI күренеш

Ҡ ы р а у б и к ә . Абау, шаталаҡ, күҙемде сығарырһың бит! Әҙәм төҫлө йөрөһәң ни була?

М о з о й . Инәй, берүк асыуланма инде! Яңылыш булды. Ысынлап та минең күҙемә аҡ-ҡара күренмәй. *(Ҡарағолға.)*

Йә, Ҡарағол ағай, әле һин һаман да бында тораһың икән. Мин... (*Ҡыраубикәгә ҡарап, һүҙен әйтеп бөтөрмәй.*)

Ҡ ы р а у б и к ә. Бөгөн һеҙгә ни булған?! Ҡарағол, һин арығанһыңдыр, инеп һыуһын эс, ҡунаҡтарың килгәнсе, ял итеп ал. (*Сыға.*)

Ҡ а р а ғ о л. Йә, ни бар?

М о з о й. Һаҡ булырға кәрәк. Был Әпкәләй тигәндәре шымсылап йөрөй икән! Ни ҙә булһа, бер нәмә һиҙеп маташа торғандыр.

Ҡ а р а ғ о л. Ул шымсылап әллә ни ырата алмаç. Бөгөн бында, Ҡәҙершаларҙан башҡа, Вася тигән крәçтиән егете лә килмәксе ине. Һин Айсыуаҡҡа әйт, ул килә ҡалһа, ҡараңғы төшкәнсе Айсыуаҡта тороп торһон.

М о з о й. Ҡарағол ағай, ул Әпкәләй шул төçө, ҡиәфәте менән беҙҙең Таңсулпанды телләп маташа икән!..

Ҡ а р а ғ о л. Беләм, беләм, ишеттем. Хәҙергә һөйләһен әле...

М о з о й. Ярар, ул ваҡытта мин китәйем әле. (*Китә.*)

## VII күренеш

Ҡ а р а ғ о л (*яңғыҙы*). Бына нисек улар йөрәкте ағыулайҙар бит! Бына нисек улар һинең намыçыңдан көләләр бит! Ишмырҙа кантондың үҙе талағаны, йортто хурлағаны етмәгән, Әпкәләй кеүек шайтан шәүләләрен өçкә ебәрә бит! Быға нисек итеп түҙеп торорға?! Әпкәләй... Йә, Әпкәләй ҙә килеп, һинең йортоңда һүҙ һөйләп йөрөһөн! (*Йөрөй, ғасабилана.*) Юҡ, былай булһа, түҙер хәл ҡалманы! Бөгөн үк эш ҡуҙғатырға кәрәк. Бөгөн үк, ни булһа ла, берәй ҡылыҡ ҡылырға кәрәк!.. (*Йөрөй.*) Табаныбыҙ аçтынан ерҙәребеҙҙе тартып ала башланылар. Үҙ ерҙәребеҙҙән үҙ малдарыбыҙҙы ҡыуа башланылар. Ысынлап та, уйлап торһаң, шунан башҡа сара ҡалмай бара бит инде!.. (*Уйланып тора, унан һуң артына ҡарай.*) Ниңә былар оҙаҡлап киттеләр? Ҡараңғы төшөңкөрәһен тип торалармы икән? Улар килгәнсе, бер аҙ ял итеп торорға кәрәк. (*Инеп китә. Әҙ генә ваҡытҡа сәхнә буш ҡала.*)

## X күренеш

Ҡ ә ҙ е р ш а (*бик эре атлап алға килеп баçа*). Әле мин юл буйына шуны уйлап килдем. (*Һөйөндөк менән Ялангол алдына килә лә.*) Мин әйтәм, ысынлап та, беҙ башлаһаҡ, бөтә йорт беҙҙең арттан ҡуҙғаласаҡ. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, һеҙ... мин... шулаймы? Ил ҡарттары беҙҙең һүҙҙән сыҡмайҙар бит.

Т е г е л ә р. Эйе, эйе, дөрөç.

К ә ҙ е р ш а . Әле мин Ҡарағолдоң тупһаһына килеп баҫҡас, уның кисәге һүҙенә тамам ышандым. Бына уның шул һүҙенә ҡеүәт итеп Васяны алайыҡ. Бөтә рус крәҫтиәне Вася тип үлергә тора. Был тирәлә башҡа ғәскәр көсө юҡ. Үмер буйындағы абжурнай команда беҙгә бер кислек эш!

К ө й ө н д ө к . Ҡәҙерша уҙаман, сисенгән һыуҙан таймаҫ, тиҙәр. Бола ҡуҙғатыу бер беҙҙән түгел, ата-олатанан була килгән эш.

Я л а н г о л. Ҡарағол өйҙәме икән?

Шул ваҡыт Вася менән Мозой килә.

М о з о й . Бына Ҡарағол тирмәһе.

Т е г е л ә р (*кумәк тауыштан).* Вася, Вася! Беҙ һине килгәндер, тип тора инек әле.

В а с я . Кеҙ ҙә яңы ғынамы?

Т е г е л ә р . Килеп төшөп кенә торабыҙ. (*Ҡарагол сыга.)*

Ҡ а р а ғ о л . Ниндәй тауыш тиһәм, һеҙ килгәнһегеҙ икән. Йә, иҫәнме, һаумы, ҡустылар? (*Күрешәләр.*)

Ҡ ә ҙ е р ш а *(көлөп).* Кинең тирмәң кантон штабына оҡшап китте. *(Көләләр.)*

Ҡ а р а ғ о л *(шым гына).* Егеттәр, бында күҙгә-башҡа күренеп тормағыҙ, әйҙәгеҙ тирмәгә, бында шымсылар йөрөй... Каҡ булырға кәрәк... Унда һөйләшербеҙ. *(Барыһы ла инәләр. Ҡарагол м,енән Ҡәҙерша ҡалалар.)*

Ҡ ә ҙ е р ш а . Бына шул була инде...

Ҡ а р а ғ о л *(Ҡәҙершага яҡын килеп).* Йә, Ҡәҙерша, был кешеңдең артҡы уйы-фәләне юҡмы икән? Ышаныслымы икән?

Ҡ ә ҙ е р ш а *(бик ышаныслы тауыш менән).* Мин әйткәнсә!

Ҡ а р а ғ о л *(уйланып).* Шулай булһа, ярай ҙа.

Ҡ ә ҙ е р ш а . Беҙҙең эшебеҙ абжурнай команда менән генә бөтмәҫ бит. Беҙ Иван Ивановичтың имениеһын да туҙҙырырға тейешбеҙ. Вася баяр имениеһының бөтә ҡатмарын белә. Ул баяр имениеһынан ҡыуылған, ҡасҡан кеше. Ул баяр имениеһына үсле кеше. Бөтә крәҫтиән уны күҙ өҫтөндә ҡаш кеүек итеп тота. Ул үҙе урмандарҙа, тау араларында ҡасып, яңғыҙ йөрөһә лә, крәҫтиәндәр уның ҡайҙа баҫҡанын белеп торалар. Ул беҙҙең юл кешеһе.

Ҡ а р а ғ о л *(төҫөнә шатлыҡ сыгарып).* Ысынлап та шулай булһа, беҙҙең эш бик уң булыр! Булды... булды... мин һиңә ышанам, Ҡәҙерша... Әйҙә, инәбеҙ. *(Мозой ҡаршы сыга.)*

М о з о й . Йә, ағай, ни эшләйбеҙ?

Ҡ а р а ғ о л . Хәҙер ҡымыҙ, аш килтерегеҙ! *(Ҡараголдар тирмәгә инәләр, Мозой тирмә артына инеп югала.)*

### XIII күренеш

В а с я *{яңғыҙы).* Бөгөн минең бөтә иҫке уйҙарым емерелде. Мин ошо көнгә тиклем христиандан бүтән халыҡҡа дин дошманы тип ҡарай инем. Донъялағы бөтә афәттәрҙе[1] шуларҙан ғына күрә инем, антихрист, вәхши тип ҡарай инем. Бөгөн мин бөтөнләй үҙгәрҙем. Улар ҙа беҙҙең кеүек ҡыҫылалар, иҙеләләр, хур ителәләр. Уларҙа ла ирек теләгән яҡшы йөрәк бар. Бөгөн улар миңә шул тиклем яҡындар, туғандар! Үҙемдең крәҫтиәндәрем кеүек туғандар. Ҡарағолдоң осҡон сәскән күҙҙәре, ялҡын һипкән йөрәге минең йөрәгемә һүҙһеҙ ҡушылды. Ах, әгәр ҙә бөтә диңгеҙ тулҡындары бөгөн минең йөрәгем кеүек көслө типһәләр ине!.. Мәңге тулҡын ярып ултырған ҡая таштар селпәрәмә килерҙәр ине. Әгәр ҙә янар тауҙар минең күкрәгем менән һулыш алһалар ине, минең ихтыярымды быуған бөтә таш стеналар, кәлгә әйләнеп, күккә осорҙар ине! *(Шул ваҡыт тирмә эсендә оҙон көйгә тартылған моңло ҡурай тауышы яңғырап китә. Вася ул тауышҡа шашып ҡала ла тирмә эргәһенә килә.)* Был ниндәй тауыш? Был тауыш әллә ҡайҙан, алыҫтан, йөрәктең иң тәрән, ҡайғылы еренән килгән кеүек. Мин йөрәктән ҡайғы менән аҡҡан бындай тауышты беренсе ишетәм. Гүйә, бында, минең йөрәктә, йырлай төҫлө тойола. Гүйә, бында минең Наташам да ҡайҙалыр, ҡараңғы мөйөштәрҙә, ҡараңғы урман араларында илай төҫлө тойола! Мин үҙем дә ҡараңғы, елле, шомло төндәрҙә, урман араларында яңғыҙым ҡунған саҡтарҙа, ҡолағыма ошондай өндәр ишетелә торғайны. Шул ваҡыт минең ауыр тойғоларға күмелгән йөрәгем азатлыҡ, яҡтылыҡ теләп ашҡына торғайны. Бөгөн мин кешелек йөрәген аңланым... Бөгөн мин улар менән азатлыҡ өсөн көрәшкә сығам. Эй, дуҫтар, уйнағыҙ шуны, бөгөн мин һеҙҙең менән. (*Тирмә ишегенә ынтыла, ҡурай тауышы дауам итә, сәхнә ҡараңғылана, аҡрын ғына шаршау төшә.)*

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Шул уҡ Ҡарағол төйәге. Кис. Тирмәнең арт яғында усаҡта баҙлап ут күренә. Икенсе яғында ағаслыҡ.

### I күренеш

Ә п к ә л ә й *(ағаслыҡ араһынан сыға).* Бында ни булһа ла бар!.. (*Бөкрәйеңкерәп атлап, тирмә эргәһенә килә. Тыңлай.)* Эйе, эйе, шулай... Әйттем дә шул! (*Уйланып тора.)* Былар

[1]*Афәт* — бәлә-ҡаза, бәхетһеҙлек.

кемдәр булыр икән? Аттары был яҡтыҡына оҡшамай. Ҡайҙан да булһа ситтән килгәндәрҙер. Былар тиктәҫкә килмәҫтәр... Былар ни ҙә булһа берәй әтлек уйлап йөрөй торғандарҙыр. Ҡарағолға йүнле кешеләр киләме һуң!.. (*Ҡамсыһын һелтәп.)* Туҡта, туҡта, алыҫҡа китә алмаҫһығыҙ!.. Әпкәләй башында хикмәт бар... Белер ул... Ҡалайтып ҡына һуң уларҙы күрергә? Яҡын барырға мөмкин түгел. Әгәр ҙә Ҡарағол һиҙеп ҡалһа, ул бөркөт кеүек ташланыр ҙа быуа ла башлар. Тиҙерәк китергә кәрәк... Ярар... (*Әкрен генә китә.)*

## III күренеш

К а р а ғ о л (*күккә ҡарап).* Таң да яҡындыр инде. Беҙ бында көндөҙгә ҡалмайыҡ. Кеше күҙенә күренергә ярамай. Бигерәк Васяға ярамай. (*Тағы күккә ҡарай.)* Болоттар ҙа ҡуйырып, ел сығып тора. Ямғыр яуыр, ахыры.

К ә ҙ е р ш а. Беҙҙең өсөн иң һәйбәт төн. Бүреләр йөрөй торған төн. Вася бүреләр менән күп йоҡлаған кеше. Шулаймы, дуҫ?

В а с я. Бындай төндәрҙә бәләкәй уттар ҙа алыҫтан ҙур, ҡурҡыныс булып күренәләр. Әле был ҡараңғы төндө күргәс, минең башыма шундай иҫәр бер уй төштө: әгәр ҙә беҙ ошондай ҡараңғы төндө Иван Иванович имениеһына ут һалһаҡ, унан лаулап сыҡҡан ут шәүләләре ҡайҙа тиклем күтәрелер икән, дуҫтар?

Я л а н ғ о л. Улмы, ул бөтә тирә-яҡты ҡып-ҡыҙыл шәүлә итер.

К ә ҙ е р ш а (*көлә).* Был һүҙең күңелемә оҡшай, Вася... Минең башым ҡымыҙ менән дә иҫергән. Ә был һүҙҙәрең мине тамам иҫерттеләр. Ысынлап та, шул уттар минең күҙеме хәҙер үк күренә башланылар.

К а р а ғ о л (*алға сығып).* Шулай... Яҡшы һүҙҙәр улар... Ул һүҙҙәр бер беҙҙең генә йөрәктәрҙә түгел, бөтә йорттоң йөрәгендә ҡайнай. Халыҡ көҙгө ҡылған кеүек дөрләп янырға, тоҡанырға тора. Бөгөн Васяны күргәс, уның менән аңлашҡас, минең был уйҙарым тағы ла дөрөҫкә сыҡтылар.

К ә ҙ е р ш а (*йөрөй).* Бына шул һүҙҙәрегеҙ йөрәгемде елкендерә бит!

К а р а ғ о л (*Мозойға ҡысҡыра).* Мозой, Мозой!

М о з о й (*йүгереп тирмәнән сыға).* Йә, ни бар?

К а р а ғ о л. Хәҙер үк айғырыңды мен, Айсыуаҡҡа бар. Ул әҙер торһон. Хәҙер беҙ уға барып етербеҙ.

М о з о й. Хәҙер. (*Китә.)*

В а с я. Мин хәҙер тамам ышандым, һеҙ ҙә минең кеүек кеше икәнһегеҙ. Мин һеҙгә шуны әйтәм: мин баяр балаһы түгел. Мин — крәҫтиән балаһы. Мин йәштән зирәк булған-

мын, йырға оҫта булғанмын, шуға күрә мине баярҙар уҡытҡандар. Мин күп уҡыным. Күп донъя күрҙем. Күп аҡыллыларҙың һүҙҙәрен ишеттем. Шуға күрә лә мин баяр һарайында уйынсы, йырсы булып ҡына ҡала алманым. Мин һаман үҙ туғандарымды — крепостной крәҫтиәндәрҙе яҡын күрҙем. Шулар араһына киттем. Шулар өсөн мин имениеның управляющийын үлтерҙем. Ҡастым... Хаҡлыҡ эҙләнем. Ул хаҡлыҡ тигән нәмә көрәшмәйенсә табылмай икән. Уның өсөн беҙ башлап көрәшергә тейешбеҙ икән. Бөгөн мин һеҙҙә шул хаҡлыҡты күрҙем. Бына, беҙ барырбыҙ, беҙҙе күрер ҙә беҙҙең арттан бөтә йәберләнгән халыҡ күтәрелер. Шулай түгелме, дуҫтар?

К ү м ә к т а у ы ш. Шулай, шулай, Вася!..

Ҡ а р а ғ о л (*барыһына ла).* Йәгеҙ, ҡустыларым, ваҡыт уҙмаһын. (*Яҡ-яғына ҡарана).* Бәй, Һөйөндөк ҡайҙа? Ул ҡайҙа китеп юғалды?

Я л а н ғ о л. Аттар янында булыр. Һөйөндөк! Һөйөндөк! (*Һөйөндөк йүгереп сыға.)*

Һ ө й ө н д ө к (*каушаған ҡиәфәт менән).* Бәй... Һеҙ йыйынған да икәнһегеҙ, мин ни төптө абайламай торам!

Ҡ а р а ғ о л. Әйҙәгеҙ, аттарығыҙға менегеҙ! *(Вася, Ялангол, Һөйөндөк китәләр. Ҡәҙерша менән Ҡарагол ҡала.)*

## ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

Кис. Төрмә эсе. Өс камера күренә. Беренсеһендә — Ҡарағолдар, икенсеһендә — крепостной крәҫтиәндәр, өсөнсөһөндә — Наташа яңғыҙы. Шаршау асылғанда, Ҡарағолдар камераһында Ҡ а р а ғ о л менән В а с я ғына күренә. Һ ө й ө н д ө к, Я л а н ғ о л, Й о р т б а ғ ы ш т а р ер аҫтында булалар.

### I күренеш

В а с я *(Ҡараголга).* Бер яҡтан, беҙҙең эш бөтөүгә яҡынлашһа, икенсе яҡтан, беҙгә үлем сәғәттәре лә яҡын һуғалар. Бөгөн кис беҙ ҡорған планды нисек кенә булһа ла еренә еткерергә кәрәк.

Ҡ а р а ғ о л. Уны мин дә шулай уйлап торам, Вася. Мин әле һаман шуға үкенәм. Әгәр ҙә беҙ иң тәүҙә Керән урманына киткән булһаҡ, быларҙың ҡулдарына төшмәгән булыр инек. Беҙ Ҡайынлығолда ҡалып, харап булдыҡ.

В а с я. Ҡорған план барып сыҡманы шул! Беҙ Ишмырҙаларҙан үс алабыҙ тип, шулай һуңлап киттек бит!

Ҡ а р а ғ о л. Беҙ уларға унан тороп та еткерер инек инде. Бында һеҙҙең киреләгегеҙ уңайһыҙланы.

В а с я . Дөрөҫ, хаталыҡ беҙҙә булды. Үткәнде кире ҡайтарып алыуы ҡыйын инде ул. Әйҙә, алдағы өсөн ҡайғырайыҡ әле!

Ҡ а р а ғ о л . Шулай, Вася, үткән эштән төш яҡшы, тиҙәр. *(Икеһе лә уйға ҡалалар. Пауза.)*

В а с я . Һин Ҡәҙерша тураһында ни уйлайһың?

Ҡ а р а ғ о л . Ҡәҙерша тураһында?

В а с я . Эйе... Ул шулай уҡ беҙҙең турала оноттомо икән, тим.

Ҡ а р а ғ о л . Әгәр ҙә Ҡәҙерша ҡулға төшмәһә, ул ете диңгеҙ ҡыҙырып булһа ла, беҙҙе ҡотҡарырға тейеш. Ҡәҙерша ул шундай кеше: бер һүҙ әйттеме, ете ҡабат йәнен алһалар ҙа, унан ҡайта торған егет түгел.

В а с я . Шулайҙыр ҙа. Бына унан бер генә хәбәр ҙә юҡ шул!

Ҡ а р а г о л . Унан хәбәр ҙә булыр, ҡыйғыр ҡош һымаҡ, ул төрмә өҫтөнә килеп тә ҡуныр.

В а с я *(тороп йөрөй)*. Ысынлап та, ул бына шулай килһен ине. Ул, осоп килеп, беҙҙе ҡотҡарһын ине! Минең шул тиклем иректе күргем килә! Иректә мин ыласын булып осҡом килә. Дошмандарымды ҡырғым килә!.. Дошмандың төрмәһендә ятыуҙан ҡыйын нәмә юҡ!..

Ҡ а р а ғ о л . Минең йөрәгем шуны һиҙә... Ошо төрмәлә мәңге ҡалыуҙы һис уйламайым. Сөнки ул мөмкин түгел.

В а с я *(Ҡараголдоң арҡаһына һуға)*. Бына шул һүҙең өсөн рәхмәт! Ул һүҙҙәрең минең йөрәгемә рәхәтлек бирәләр.

Ишектән аҡрын ғына К у з ь м а инә.

## II күренеш

К у з ь м а (*ҡулында фонарь, бак һаҡ ҡына)*. Ҡарағол, Вася, беләһегеҙме, мин бөгөн нимә ишеттем? Һеҙгә хөкөм сығарылған: иртәгә искә һеҙҙе аҫасаҡтар.

В а с я . Иртәгә кискә?! Аҫасаҡтар! (*Шашып ҡала.)*

К у з ь м а . Эйе, аҫасаҡтар...

Ҡ а р а ғ о л . Мин һис үҙемдең шулар ҡулынан аҫылып тороуымды күҙ алдына килтерә алмайым! Иртәгә аҫасаҡтар?! Ниндәй ҡыҙыҡ хәбәр!

К у з ь м а . Беләһегеҙме, бөгөн мин дежурствонан төнгө сәғәт 12-лә алышынам. Әгәр ҙә ҡотола алмаһағыҙ, миңә рәнйей күрмәгеҙ.

В а с я *(Кузьманың муйынына аҫылына)*. Һин минең бәләкәс кенә ваҡытымда ла миңә дуҫ инең, мин һине ярата инем. Иван Иванович һарайында ла дуҫ инек. Төрмәлә лә һин шул уҡ Кузьма! Һин беҙгә тереклегеңде йәлләмәйһең, мин һине мәңге онотасаҡ түгелмен!

Кузьма. Вася, ишетәһеңме, әгәр ҙә һеҙ бынан ҡотолһағыҙ, мин һеҙҙең арттан китәсәкмен. Мин был тормоштан тамам туйҙым инде!

Вася. Беҙ шат булырбыҙ, тик бына ҡотолоуы ғына...

Кузьма. Һеҙҙең Наташаға ҡарай булған ер аҫты юлығыҙ ни хәлдә?

Вася. Уныһы бөгөн өлгөрә.

Ҡараҡол. Кузьма, һин үҙең һаҡ бул инде. Әгәр ҙә һине һиҙһәләр, беҙҙең бөтә эш боҙолор.

Вася. Был тәҙрә тапҡырында ҡарауыл көслөмө?

Кузьма. Көслө ҡарауыл ҡапҡа яғында, бында берәү генә йөрөй. Уның менән һәр хәлдә иҫәпләшә алырбыҙ...

Ҡараҡол. Аттар нисек?

Кузьма. Мәмерйә буйында бөгөн аттар һеҙҙе көтөргә тейеш. Мозойҙан хәбәр алдым. Ну, мин китәйем инде. Миңә бында күп торорға ярамай. *(Сыға, сәхнә артында дежурный менән Кузьма араһында һүҙ башлана.)*

## IV күренеш

Вася. Аҫасаҡтар, тиген...

Ҡараҡол. Ҡайғырып файҙа юҡ. Һөйөндөктәргә хәбәр итәйек. Ишек төбөнә начальниктар килгән түгелме? Һөйөндөктәргә әйтергә кәрәк булыр. *(Баҙға күрһәтә.)*

Вася *(карауат аҫтына башын тығып)*. Һөйөндөк, Йортбағыш, килегеҙ әле! *(Һөйөндөк менән Иөртбагыштың баштары күренә.)*

Ҡараҡол. Йә, сығып тороғоҙ, ҡустыларым, тегендә эт сиреүҙәре йөрөй, эште боҙоп ҡуймаһындар.

Һөйөндөк. Ни бар?

Вася. Начальник килеп инә яҙҙы. Һаҡ булайыҡ.

## VII күренеш

Наташа *(нимәлер ишетеп һиҫкәнеп тора)*. Ҡайҙан, ер аҫтынан тауыш килә?! Әллә Кузьманың һүҙҙәре дөрөҫ буламы! Ул бөгөн бөтә мәсьәлә хәл ҡылыныр тигәйне... Әллә ысынлап та шулаймы? Был булырмы икән? Шулай булырмы икән ни? Һис күңелем менән ышанып бөткөм килмәй! *(Йөрөй.)* Хәҙер төн... *(Төрлө ерҙәрҙән ятып тыңлай.)* Әллә ҡолаҡтарым шулай яңылыш ишетәләрме... *(Ҡурҡып тора.)* Ах, әгәр ҙә бынан ҡотолһаҡ, ни тиклем шатлыҡ булыр ине! Тағы урмандарға, киң сәхрәләргә китер инек! Унда Вася менән бергә булыр инек! Ләкин ул булырмы икән? Булырмы икән ул? (*Уйға ҡала, шул арала, ишекте шалтыратып асып, дежурный начальник инә.)*

## VIII күренеш

Н а ч а л ь н и к. Нататтта! (*Наташа һиҫкәнеп әйләнеп ҡарай ҙа аптырап ҡала.*) Наташа, тим... Беләһеңме, мин ниңә килдем? Иртәгә һеҙгә приговор уҡыла, бөгөн һуңғы кисегеҙ... Беләһегеҙме, төрмәләге һуңғы кисегеҙ!.. Мин һеҙҙең өсөн ҡайғырам, Наташа! Беләһегеҙме, мин һеҙҙе нисек яратам!.. Әгәр ҙә минең һүҙемде тыңлаһағыҙ, мин һеҙҙе һәр хәлдә ҡотҡарырға тырышасаҡмын, тик һеҙҙе генә... (*Наташа өндәшмәй.*) Наташа, мин бит һеҙҙе ҡыҙғанып әйтәм...

Н а т а ш а (*көлөп*). Господин начальник, һеҙҙе нисек аңлайыҡ?

Н а ч а л ь н и к. Беләһегеҙме, мин һеҙҙе ҡыҙғанам: ошондай йәш, сәскәләй бер зифа ҡыҙҙың бағанала аҫылынып тороуын мин теләмәйем! Әгәр ҙә ғүмерегеҙҙе ҡыҙғанһағыҙ, сараһын табасаҡмын, тик быныӊ бер генә шарты бар... Кеҙ мине яратырға тейешһегеҙ! Ул ваҡытта...

Н а т а ш а. Ниңә шулай тынысһыҙланаһығыҙ минең өсөн?.. Мин әле, үҙемдең йәнемде үлемдән ҡотҡарыу өсөн, һеҙгә ярҙам һорап барғаным юҡ бит.

Н а ч а л ь н и к. Мин һеҙҙе һәр хәлдә тынысһыҙ күрәм. Ьәр хәлдә һеҙ йәшләй генә үлергә теләмәй торғанһығыҙҙыр. Бына шул минутта мин һеҙҙең ярҙамсығыҙ булайым!

Н а т а ш а. Бер үлемгә хөкөм ителгәс, үлергә мәхкүмбеҙ инде. Мин хәҙер үлемемә һис үкенәсәк түгелмен, господин начальник!

Н а ч а л ь н и к (*баш һелкеп*). Ниндәй тәкәббер ҡыҙ!

Н а т а ш а. Хәҙер минең иң һуңғы ләззәтем — ана шул үлем алдындағы тәкәбберлегем генә!

Н а ч а л ь н и к. Аңламайһың мине, Наташа, беләһеңме, мин һине нисек ҡыҙғанам?! (*Алдына бара.*) Ҡыҙғанамын мин һине!

Н а т а ш а. Башта төрмә, унан һуң үлемгә хөкөм, унан һуң ҡыҙғаныу... Ниндәй шәфҡәт эйәләре бар икән донъяла! Ха-ха-ха!

Н а ч а л ь н и к (*төҫөн үҙгәртеп*). Ярай, Наташа, ләкин һуңынан... Бағана алдына барһаң, иҫеңә төшөрөрһөң әле!

Н а т а ш а. Шулай, беҙҙең бөтә яҙмышыбыҙ үкенескә ҡоролған инде! (*Начальник сыға. Наташа яңғыҙ ҡала.*)

## IX күренеш

Нат аша (*йөрөй*). Ниндәй шәфҡәт, ниндәй ҡыҙғаныу! Үлем сәғәтендә лә кешенең яҙмышы менән уйнамаҡсы булалар! Имеш, уны яратырға, һөйөргә кәрәк! Уны һөйөү өсөн Васяны күңелдән һепереп ташлап, шул тупаҫ, ҡәбәхәт йөҙлө

кешегә шунда урын әҙерләргә кәрәк! Был үҙе бер үлем түгелме ни һуң?! Ниндәй ҡыҙыҡ кешеләр бар донъяла!

Шул арала ҡулына фонарь тотҡан Кузьма килеп инә.

### X күренеш

Кузьма. Наташа!

Наташа. Ах, Кузьма, был һинме? (*Муйынына барып аҫылына.)*

Кузьма. Наташа, бөгөн төн ни булһа ла булырға тейеш... Һин һаҡ бул! Тегендә эш рәтләнә, һиңә ер аҫты юлы килә...

Наташа. Шул дөрөҫмө, Кузьма? Бөгөн шул эштәр эшләнерме?!

Кузьма. Тыныс бул, Наташа, һин берүк шаулама! Бөгөн икенең береһе...

Наташа. Мин дә шулай китерменме?!

Кузьма. Бөтә мәсьәлә һине ҡотолдороуға туҡталып тора ине, ул да бөгөн тамамлана... Беләһеңме, Наташа, юғиһә иртәгә барығыҙға ла үлем бит!

Наташа *(аптырап).* Һуң, мин ни эшләйем инде, миңә ни эшләргә?!

Кузьма. Тыныс бул, эштең барып сығыуын сабырлыҡ менән көт! Улар һине килеп алырҙар, унан һуң тәҙрәнән сығырһығыҙ...

Наташа. Ах, ниндәй шатлыҡ! Булырмы икән ул эш?! Тимәк, бөгөн йә үлем, йә урман?

Кузьма. Эйе, эйе, Наташа... Мин хәҙер сығайым инде... һеҙ ҡотолһағыҙ, мин дә һеҙҙең арттан.

Наташа. Һин дә беҙҙең менән? *(Кузьманы үбә. Кузьма ишекте асып сығып китә. Наташа ары-бире йөрөй.)*

### XII күренеш

Ҡарағолдар камераһы.

Ҡарағол *(ҡуҙғалып).* Йә, ни эшләйһегеҙ?

Вася. Бөткәндәрҙер... *(Тишек эргәһенә бара.)* Һөйөндөк! Яланғол!

Яланғол *(килеп сыға).* Егеттәр, бында эш бөттө! *(Аллыартлы сығалар.)*

Һөйөндөк. Уф... тирләнем!

Ҡарағол. Йә, Вася, былар арығандарҙыр, хәҙер һин тәҙрә эшенә кереш. Унан һуң Наташаға.

Яланғол. Тәҙрә эше күп түгел.

В а с я *(карауат аçтына һаламдар араһына тығыла).* Ну, һеҙ төрлө яҡҡа ҡолаҡ һалығыҙ, ә мин хәҙер... (*Игәү менән тәҙрәгә бара, эшкә керешә.)*

К ө й ө н д ө к . Йә, Ҡарағол ағай, бынан сыҡҡас та, шул мәмерйә буйына ҡарай ынтылабыҙ инде.

Ҡ а р а ғ о л . Унда бөгөн Мозой булырға тейеш. Кузьма шул хәбәрҙе алған.

В а с я . Ну, туғандар, бында эш булды! (*Ҡырҡып төшөрә.)* Мин хәҙер Наташа эргәһенә барайым. Кеҙ тыныс булығыҙ. Хәҙергә ҡолаҡ һалып, тын ғына ултырығыҙ. Э мин хәҙер... (*Тишеккә инеп юғала, былар үҙ-ара һөйләшеп, ишектән тыңлайҙар.)*

## XIII күренеш

Наташа камераһы.

„ Нат аша *(ер аçтында хәрәкәт һиҙә).* Әллә киләләрме? *(Йөрөй, ҡарана.)* Әллә киләләрме?! *(Ишеккә бара.)* Туҡта!.. Уф, йөрәгем түҙмәй!.. *(Шул арала Вася күренә.)* Аһ, һин!.. Кинме был?! Әллә шулай күҙемә күренәһеңме?! *(Васяға ташлана.)* Вася, һин!..

В а с я . Наташа, мин... Сеү! Тыныс бул. Хәҙер китәбеҙ...

Н а т а ш а . Китәбеҙ?! *(Аçылына.)* Шулай, дөрөç, китәбеҙме?!

В а с я . Әйҙә, киттек, Наташа!..

Нат а ш а . Әйҙә! *(Баҙға инеп юғалалар, бында, Ҡарағолдар камераһына, килеп сығалар.)*

## XIV күренеш

Ҡ а р а ғ о л *(Васяларҙы күреп).* Ах, Васялар ҙа бында! Наташа!.. Бына хәҙер ул да беҙҙең менән!..

Н а т а ш а . Ҡарағол ағай!.. Кинме бында? Күҙҙәремә һис ышанмайым! Төшөммө әллә был?!

В а с я . Наташа, хыяллана торған ваҡыт түгел! Тиҙерәк бынан китергә кәрәк!

К ө й ө н д ө к . Хәҙер барыбыҙ ҙа бергә!..

Ҡ а р а ғ о л . Йәгеҙ, туғандарым, ир булығыҙ, ныҡ булығыҙ. Йә үлем, йә ирек! Бына ошо юлда беҙ көс һынашырға тейешбеҙ. Хәҙер юл асыҡ беҙгә, тик ошо юлдағы арҡыры ятҡан бағаналарҙы беҙ ҡырҡып үтергә тейешбеҙ. Әйҙәгеҙ, егеттәр! *(Башлап Ҡарағол сыға, уның артынан — Наташа, уның артынан — башҡалар, Вася артта ҡала.)*

В а с я . Беҙ хәҙер иркен яланға, тыныс урман эçтәренә киттек!.. Килер ваҡыт, һине лә беҙҙең уттар ялмар! Беҙ һине ут эсендә күреп көлөрбөҙ!.. *(Юғала. Сәхнә бер аҙ ваҡыт тын ҡала. Тәҙрә аша, ялтырап, йәшен уттары күренеп ҡала.)*

## БИШЕНСЕ ШАРШАУ

Ишмырҙа кантондың идаралығы. Кантон эргәһендә үҙенең секретары. Күрше бүлмәнән писарҙар инеп-сығып йөрөйҙәр. Кондрат Петрович йөрөп тора. Шаршау асылғанда Әпкәләй килеп инә.

### I күренеш

Әпкәләй *(бик эшлекле ҡиәфәт менән).* Кандрат Петрувис, әмерегеҙ буйынса Ҡарағолдоң ғаиләләрен алып килдем.

Кондрат. Бик хуш.

Әпкәләй. Кандрат Петрувис, ну ҡыҙы ла ҡыҙ инде!.. *(Күҙ ҡыҫып.)* Бына нисек кенә итеп шунынһын ҡулға төшөрөргә?

Кондрат. Ничего, уныһы ҡасмаç! Уныһын һуңынан ҡарарбыҙ әле... Ну, Ҡарағолдар тураһында һораштырғыланыңмы?

Әпкәләй *(башын һелкеп).* Юҡ, әй!.. Юл буйынса юхаланып килдем, төрлө яҡтан һораштырғыланым, һис ул яҡтан һүҙ ысҡындырмайҙар!..

Кондрат *(шулай уҡ башын һелкеп).* Әйтмәйҙәр, тиһең?

Әпкәләй. Ай-ай-ай! Уның теге ҡарсығы би-и-ик аçтыртын ҡарсыҡ бит!

Кондрат. Әйтмәһәләр... әйтмәһәләр... *(Ҡамсыһын күрһәтеп.)* Бының менән аҙ ғына йомшартып алаһың уны!

Әпкәләй. Әллә шул... Тик ҡыҙына ғына тейергә ярамай!

Кондрат. Ай-ай, Әпкәләй! *(Көлөп.)* Ьин ҡыҙына була уларға үҙең һатылманыңмы, шайтан?

Әпкәләй. Юҡ, юҡ!.. *(Шул арала бер ғәскәри башҡорт ҡартын алып инә.)*

### II күренеш

Ғәскәри. Ваше благородие, был башҡорт һуғылырға хөкөм ителгән.

Кондрат. Сәбәбе ни?

Ғәскәри. Кантон үрге ауылдан ҡайтҡан саҡта, повозкаға йүнле аттар екмәгән. Аттары тулап, бер соҡорҙа кантон хәҙрәтте ауҙара яҙғандар. Шуның өсөн ун биш ҡамсы һуҡһындар, тине.

Башҡорт *(үҙәләнеп).* Ни эшләйем, гаспадин? Аттарым йәш аттар, бик аçау малдар ине! Ғәйеп миндә түгел, аттарымда бит, гаспадин харунжа!

Кондрат. Молчать! Барығыҙ, еренә еткерегеҙ!

Башҡорт. Бер юлға ҡотҡарығыҙ инде! Бигерәк тә наҳаҡҡа бит! *(Әпкәләй мыçҡыл йөҙө менән көлөп тора.)*

К о н д р а т . Һис һүҙһеҙ!

Ғ ә с к ә р и . Ишетәм, ваше благородие! (*Алып сығып китә.)*

К о н д р а т *(артынан).* Мерзавецтар улар!

Ә п к ә л ә й . Ай-яй, Кандрат Петрувис, бик яҡшы иттең! Мин уның тураһында бер әңгәмә һөйләйем әле. Ул күрше ауылдың Яҡшыбай тигән бер ауыл ҡарты. Ул һәр ваҡыт Ҡарағолдар яғын тартыңҡырай торған кеше. Юрый мыҫҡыл итеп шундай аттар еккәндер әле. Анау көндө беҙ барҙыҡ. Беҙгә тәкә лә һуйманы, һаумал ҡымыҙы менән генә һыйлап ебәрҙе. *(Башын сайҡап көлөп.)* Әммә яҡшы булды һуң үҙенә!

К о н д р а т . Да, күренеп тора: һин приказ бирәһең, ул һаман теленә һалына!

Ә п к ә л ә й . Әммә ҡаты ҡуллы насанникһың инде!

К о н д р а т . Как же, шулай булмаһаң, бында Ҡарағолдар күптән елкәгә менерҙәр ине. *(Шул арала бер гәскәри инә.)*

## IV күренеш

И ш м ы р ҙ а . Йә, Кандрат Петровис, был Ҡарағолдоң ғаиләһен ни эшләтәбеҙ инде? Уның инәһе бик аҫтыртын кеше. Уны нығыраҡ ҡыҫырға кәрәк булыр. Ул һәр хәлдә Ҡарағолдоң эштәрен белергә тейеш.

К о н д р а т . Кантон хәҙрәт, улар менән мин яҡшылап һөйләшә алмам. Бында хәйлә кәрәк булыр, хәйлә... Бында эште башта ғәфү итеү яғынан башларға кәрәк, унан һуң, бәлки, улар серҙе ысҡындырырҙар.

И ш м ы р ҙ а . Ярар, уныһын шулай итербеҙ. Әле һеҙ Ҡарағолдар тураһында берәй хәбәр алманығыҙмы? Шымсыларығыҙ ниндәй яңы хәбәр килтерҙеләр?

К о н д р а т . Имәнғол урманында булһалар кәрәк, унда малдар ҙа юғалғылаған икән. Унда ҡапыл ғына барып инеп булмай, дөм-ҡара урман — бик уңайһыҙ, берәм-һәрәм барырға ярамай.

И ш м ы р ҙ а . Әһә... *(Башын түбәнерәк һалып уйланып тора.)* Былар башҡа бәлә булдылар бит!

К о н д р а т . Уларҙы бик күмәгәйгән, тиҙәр. Вася менән Наташа улар эргәһендә, тиҙәр.

И ш м ы р ҙ а . Уны хәҙер бик уҫал ҡараҡ булып киткән, тиҙәр. Быларҙың барыһын да ҡулға алмайынса тороп, тынысланырға ярамай. Бәлки, Ҡыраубикә ҡарсыҡтарҙы нығыраҡ ҡыҫһаң, осо килеп сыҡмаҫмы икән?

П и с а р ь *(аҫтәленән тороп).* Кантон хәҙрәт, үткән аҙнала теге Сиркәш юлы буйында Плащанов баярының управляющийын үлтергәндәр. Был эш Ҡарағолдарҙың эше булырға тейеш, тип һөйләйҙәр.

И ш м ы р ҙ а . Булыр, булыр!

П и с а р ь . Имәнғол урманында *ла*, тиҙәр, төндәрҙә бында килеп, таңға ҡарай шунда йәшеренәләр, имеш, тип тә һөйләйҙәр.

И ш м ы р ҙ а . Улай икән!

К о н д р а т . Да, унда булыуҙары бик ихтимал.

И ш м ы р ҙ а . Уларҙы нисек тә булһа тоторға кәрәк! *(Йөрөй.)* Нисек кенә булһа *ла* тоторға кәрәк! Был турала губернаторҙан шундай ҡаты әмер килгән. Бер ай эсендә улар юҡ ителергә тейеш. Быны ҡолағыңда тот, Кондрат Петровис! Иртәгә үк үҙең кит!

К о н д р а т . Уларҙы төрмәлә саҡта уҡ аҫырға кәрәк ине! Нисек уларҙы шулай ҡасырғандар, әллә хыянат итеүселәр булдымы икән?

И ш м ы р ҙ а . Эйе шул, шунда ғына аҫып ҡуйырға кәрәк ине шул! *(Бер ғәскәри килеп инә.)*

## V күренеш

Ғ ә с к ә р и *(Кондратҡа).* Әмерегеҙ еренә еткерелде, тағы *ла* яҫаҡ түләмәгән ике башҡортто килтергәндәр.

К о н д р а т . Ул турала ниндәй әмер бирелгән?

Ғ ә с к ә р и . Егерме ҡамсы.

К о н д р а т . Һуғығыҙ!

И ш м ы р ҙ а *(гәйрәтләнеп).* Унан һуң ябып ҡуйығыҙ! Иртәнән һуң барып, малдарын һаттырып түләттерегеҙ! Әгәр ҙә батша әмеренән баш тартһағыҙ, эш уның менән генә ҡалмаҫ, Ишмырҙа кантон шулай тип әйтте, тиегеҙ, ишеттегеҙме?

Ғ ә с к ә р и . Ишетәбеҙ, кантон хәҙрәт!

К о н д р а т . Ярай, китегеҙ!

Сыға, уның артынса уҡ Ә п к ә л ә й , Ҡ ы р а у б и к ә , Т а ң с у л п а н , Г ө л б и к ә килеп инәләр.

## VI күренеш

Ә п к ә л ә й *(ҙур эш кешеһе ҡиәфәтендә).* Йә, кантон хәҙрәт, бына һеҙгә ҡунаҡтар!

И ш м ы р ҙ а . Бик яҡшы, бик яҡшы! *(Ҡыраубикәгә.)* Һеҙ Ҡарағолдоң әсәһе — Ҡыраубикә ҡоҙағый булаһығыҙмы? Ҡоҙағый тип һөйләшәйек инде, улай булғас.

Ҡ ы р а у б и к ә *(үҙ алдына).* Ҡара көнөңдә ҡарға алдына үләкһә һорап бараһың, тиҙәр, беҙ ҙә шулай булдыҡ, ахырыһы! Ҡарт көнөмдә былай әҙәм көлкөһөнә ҡалырмын, тип һис уйламағайным! *(Ишмырҙаға).* Эйе, Ҡарағолдоң әсәһе — Ҡыраубикә ҡарсыҡ мин булам инде.

Ишмырҙа. Э, улай икән! Ҡарағолоң ҡайҙа йөрөп ятыр, унан хәбәр-хәтер юҡмы?

Ҡыраубикә. Ҡарт әсәм, бахыр, бәндә алдына бәндә итмәһен Хоҙайым, тип теләй торғайны, бәндәгә бәндә булыу тигәндәре ошо булалыр инде.

Ишмырҙа. Йә әле, ҡоҙағый, һүҙҙе әллә ҡайҙан уратып маташма әле, «ят ярлыҡамаç, үҙеңдеке үлтермәç», тиҙәр, мин дә бит үҙегеҙҙең бер түрәгеҙ әле.

Ҡыраубикә. Бер ҙә белмәйем шул, кантон хәҙрәт, уны ниңә беҙҙән һорайһығыҙ? Бөтә фарман үҙ ҡулығыҙҙа. Беҙ уны ҡайҙан beләйек? Китте лә юғалды бит!

Ишмырҙа *(үҙ алдына).* Бына ҡайҙа һалдыра бит ул!.. *(Гөлбикәгә.)* Йә, һин, йәш ҡоҙағый, бәлки, ҡарт кеше белмәй торғандыр. Ундай эшкә ҡатышмай торғандыр, һин был тура-ла ни әйтәһең?

Гөлбикә. Эгәр ҙә Ҡарағолдоң иçәнлеген, ҡайҙалығын белһәк, үҙебеҙ ҙә был тиклем күҙ йәше түкмәгән булыр инек! Һыуға батҡан кеше кеүек батты ла юғалды бит!

Ишмырҙа. Эштең дөрөçөн әйтергә кәрәк, ҡоҙағыйҙар! Губернаторҙан әмер булды, улар менән килешергә, барыһын да ғәфү итергә уйлайбыҙ. Булған эш булған инде. Илдәренән, көндәренән айырылып, рисуай булып йөрөмәһендәр, тибеҙ. Ул да бит бер яҡшы ата балаһы...

Кондрат *(үҙ алдына башын сайҡап).* Да, ғәфү итербеҙ инде!.. *(Мыйығын көлдөрә.)*

Ҡыраубикә *(уйланып тороп).* Был эш бүренең һарыҡ-тарға көтөүсе булыуы кеүек булмаçмы икән? *(Ишмырҙа кан-тонга.)* Кантон хәҙрәт, беҙҙән ундай нәмәләрҙе һорама ла, беҙ-ҙе ҡыçма ла, беҙ, бисә кешеләр, ул эште ҡайҙан beләйек?

Ишмырҙа *(Кондратҡа ишара итеп).* Был ҡарсыҡты алып китегеҙ. Яҡшылыҡтың ҡәҙерен белмәгән өсөн, әҙерәк һыйлаштырып алығыҙ!

Кондрат. Бик яҡшы, кантон хәҙрәт! *(Ҡыраубикәне то-та. Таңсулпан менән Гөлбикә Ҡыраубикәгә һарылалар.)*

Ҡыраубикә. Атаҡ, кантон хәҙрәт, был ни эшегеҙ? Ҡарт көнөмдә мине ниңә былай әҙәм мәсхәрәһенә ҡалдыраһығыҙ?!

Ишмырҙа *(гәйрәт сәсеп).* Әгәр ҙә яҡшылыҡ менән әйтмә-һәгеҙ, шулай итергә мәжбүрмен! Губернаторҙың әмере шулай!

Ҡыраубикә. Ниңә былай нахаҡҡа тәкәтебеҙҙе ҡоро-таһығыҙ? Алтмыш йәшкә еттем, нәçел-ырыуымдан, дуç-дош-манымдан яман һүҙ ишетмәнем! Ошо көндә...

Ишмырҙа *(һүҙен бүлеп).* Нахаҡҡа, нахаҡҡа, имеш! Эле балаңдың ғәйептәрен белмәйһеңме ни? Ул кеше үлтереүсе, ҡа-раҡ, бығлый бит! Етмәһә, шул балаңды әрсәләп, ғәйебен йәше-реп торған булаһың! Бында һинең дә ҡатышың юҡ түгел!..

Ҡыраубикә. Етмәһә, миңә яла яға башланыңмы ни, кантон хәҙрәт?

И ш м ы р ҙ а. Шулаймы ни әле, минең менән әрепләшә башланыңмы әле? (*Ҡамсы менән ынтыла, Таңсулпан менән Гөлбикә килеп ҡаплайҙар.*) Бар, алып кит!.. (*Таңсулпан һуштан яҙа. Әпкәләй тотоп ала. Алып сығып китәләр.*)

Ә п к ә л ә й (*сығып барғанда, Ишмырҙаға ҡарап*). Ай, ир икәнһең, кантон хәҙрәт!

И ш м ы р ҙ а. Һабаҡтарын яҡшыраҡ уҡытығыҙ! (*Яңғыҙы иҙән буйлап йөрөй.*) Ҡара һин уны, эт ҡарсығын!.. Яҡшы ҡәҙерен эт белмәҫ, тиҙәр. (*Әпкәләй әйләнеп инә.*)

Ә п к ә л ә й. Кантон хәҙрәт, ҡыҙын күрҙеңме? Уның ҡыҙын әрәм итергә ярамай!.. Әллә шуны миңә икенсе ҡатынлыҡҡа?

И ш м ы р ҙ а. Ай, эт ҡойҡаһы, ул ҡыҙҙың һиңә бара торғаны бармы һуң?

Ә п к ә л ә й. Әллә үҙеңә самалайһыңмы, кантон хәҙрәт?

И ш м ы р ҙ а (*көлөп*). Ярамаҫлыҡ түгел бит, ҡыҙы матур икән! Уның шулай еткән ҡыҙы барлығын белмәй инем әле.

Ә п к ә л ә й. Ҡыҙ тигәндә лә ҡыҙ инде! (*Ситкә ҡарап.*) Ҡара һин уны, үҙе самаларға уйлай бит әле, өс бисә етмәгәнме икән ни быға?

И ш м ы р ҙ а. Әпкәләй, яҡын кил әле бында! (*Әпкәләй килә, Ишмырҙа уйланып тора.*) Әллә, мин әйтәм, был Ҡарағолдоң ҡыҙын үҙебеҙгә алырғамы икән, тим, юҡһа ҡараҡтар ҡулында әрәм булыр...

Ә п к ә л ә й. Әллә шул.

И ш м ы р ҙ а. Нәмәкәй, әллә шул, тип тораһың?!

Ә п к ә л ә й. Оҡшаһа инде...

И ш м ы р ҙ а. Ҡара әле, Әпкәләй, беҙ уны былай итәйек әле: һин Ҡыраубикә ҡарсыҡҡа бар, әгәр Ҡарағолдоң ҡыҙын миңә дүртенсе ҡатынлыҡҡа бирһә, барыһын да ҡотҡарам, тип әйтә тиген. Бәлки, шул юл менән Ҡарағолдарҙы ла ҡулға алып булмаҫмы?

Ә п к ә л ә й. Бына, бына, ҡайҙан был уйҙы уйлап сығарҙың, кантон хәҙрәт?

И ш м ы р ҙ а. Бар, Ишмырҙа кантон шулай тип әйтте, тиген.

Ә п к ә л ә й. Була ул, була, яусыға үлем юҡ, тиҙәр.

И ш м ы р ҙ а. Йә, иҫәүән, күп лыҡылдап торма!

Ә п к ә л ә й. Хәҙер!.. (*Үҙ-үҙенә.*) Былай булһа, бөтә эш бола!

И ш м ы р ҙ а (*иҙән буйлап йөрөй, писарҙар эргәһенә бара*). Теге Йыуасалы ерен Нежданов баярына һатыу тураһында Табын йортауай старшинаһына әмер биреддеме?

П и с а р ь. Барыһы ла әҙер, мисәт һуғып, ҡул ҡуя торғаны ғына ҡалды.

И ш м ы р ҙ а. Ярай, килтер, ҡул ҡуяйым. (*Ҡул ҡуя.*) Яһаҡ түләмәгән кешеләргә әмер яҙығыҙ!

Шул арала Ә п к ә л ә й, уның артынса К о н д р а т йүгереп килеп инәләр.

## VII күренеш

Ә п к ә л ә й . Кантон хәҙрәт!.. (*Әйтә алмай.*)

К о н д р а т . Кантон хәҙрәт, бер төркөм һыбай тау башынан саң борҡотоп килеп төштө!

И ш м ы р ҙ а (*аптырап*). Йә, йә, ни бар?!

Ә п к ә л ә й . Ҡарағолдар киләләр, «Үлем, үлем!» тип киләләр!..

И ш м ы р ҙ а . Ҡарағолдар, Ҡарағолдар?!

К о н д р а т . Шулар, шулар!..

И ш м ы р ҙ а . Йәһәтерәк әмер бирегеҙ, бөтә ғәскәр атҡа атланһын. Йәһәтерәк! Йәһәтерәк!

Буталыш китә. Барыһы ла штабтан сығалар. Сәхнә артында тауыш, атыштар китә. Сәхнә буш тора.

## VIII күренеш

Ә п к ә л ә й (*йүгереп сәхнәгә инә*). Ах, харап булдыҡ! Таңсулпан тинем, шуны алыр өсөн Ҡарағол менән дошманлаштым, Ишмырҙа кантонға шуның арҡаһында хеҙмәт иттем! Бөтә эш бөттө, харап булдым! Хәҙер ҡайҙа барырға? Үлем миңә, үлем!!!

Шул арала Ҡарағол килә. Әпкәләй өҫтәл аҫтына йәшеренә.

## IX күренеш

К а р а ғ о л (*төҫөндә ҡаһарманлыҡ балҡый*). Илдең күҙ йәше ояһы булған Ишмырҙа кантон штабы ла туҙҙырылды! Күкрәккә һыймай тышҡа ташҡан үстәр алынды! Хәҙер күкрәгем ул ауыр үс утынан бушанды, йөрәгемдә ҡара ҡан булып төйнәлгән Ишмырҙа кантондың «һыны» ла һеперелеп ташланды! Ерҙәр үбеп, бөтә тау-таштарҙы шаһит итеп биргән антым бөгөн еренә еткерелде! Хәҙер миңә бынан китһәм дә ярай. Хәҙер Ҡарағол Урал тауҙарына, елһеҙ ерҙәргә, киң урман араларына китергә, бынан һуң һағалаған дошмандарҙың күҙҙәренән мәңге юғалырға тейеш!

Шул арала өҫтәл аҫтынан Әпкәләй сыға.

Ә п к ә л ә й . Миңә барыбер үлем!.. (*Арттан хәнйәр менән ҡаҙай.*)

К а р а ғ о л . Аһ, ни булды, кем ул? Кем ул? Көйөндөк... Вася... Аһ-аһ! Харап иттеләр мине... (*Йығыла, шул арала Вася, Ҡәҙерша, Һөйөндөктәр, Наташа, Ҡыраубикә килеп инә.*)

В а с я . Ҡарағол, һин ни эшләнең?! (*Шау-шыу киләләр.)* Килтерегеҙ Ҡарағолдо үлтергән кешене, килтерегеҙ!

Ҡ ы р а у б и к ә *(өҫтөнә килеп).* Ил намыҫы тип, үҙ башыңды бирҙең, күкрәгемдең һөтө хәләл булһын, балам!

Һ ө й ө н д ө к . Кәүҙәң өҫтөндә ант итәм, Ҡарағол ағай, һинең исемеңде ергә күммәбеҙ!

В а с я . Ҡарағолдо күтәрегеҙ, хәҙер бында беҙгә артыҡ эш ҡалманы. Китәбеҙ! *(Ҡарағолдо күтәрәләр, сыға башлайҙар.)*

Я л а н ғ о л *(эҙләнеп йөрөгәндә, Әпкәләйҙе өҫтәл аҫтынан һөйрәп сығара).* Бына кем үлтергән икән Ҡарағолдо!

Ә п к ә л ә й . Эйе, мин үлтерҙем. Мине теләһәгеҙ ни эшләтегеҙ!

В а с я *(ашығып).* Атмағыҙ, киҫмәгеҙ, һеҙ уны быуып үлтерегеҙ. *(Әпкәләйҙе быуып алып сығалар. Гөлбәғиҙә инә, уға бөтәһе ҡарап ҡаталар.)*

Г ө л б ә ғ и ҙ ә *(Ҡәҙершаны күреп).* Ҡәҙерша... Һин минең атайымды үлтерҙең, атайым һиңә дошман ине. Мин йөрәгемдән һине яраттым. Мине үҙең менән алып кит.

Ҡ ә ҙ е р ш а *(иптәштәренә ҡарай, унан һуң Гөлбәғиҙәгә).* Гөлбәғиҙә, мин һине алып китә алмайым. Ишмырҙа кантондың бөтә тоҡомон ҡоротормон тигән һүҙем бар. Мин ул һүҙемде һинең өсөн кире аласаҡ түгелмен!

Г ө л б ә ғ и ҙ ә . Мин, һин улай булырһың, тип уйламағайным! Бөтә күңелемде һиңә бирҙем! Һин уны ҡабул итмәйһеңме?

Ҡ ә ҙ е р ш а . Юҡ! *(Иптәштәренә ҡарай.)* Ҡарағолдо алығыҙ. Бөгөн үк Ҡыпсаҡ, Табын ырыуҙарына хәбәр итегеҙ. Беҙҙең ерҙәребеҙ киткән кеүек, беҙҙең дошмандарыбыҙ ҙа ҡулыбыҙҙан үтте. Хәҙер беҙ боҫорға, бынан китергә тейешбеҙ...

В а с я . Китәбеҙ, китәбеҙ, туғандар! *(Китәләр, Гөлбәғиҙә Ҡәҙерша артынан бара.)*

Ҡ ә ҙ е р ш а . Һинең юлың беҙҙең менән түгел, ҡал!

Г ө л б ә ғ и ҙ ә . Мин ҡалдым!.. *(Ергә йығыла. Артта ат тояҡтары тауышы ишетелә. Аҡрын ғына шаршау төшә.)*


КАН

# БЕРЕНСЕ КИҪӘК

## БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

Ҡыш.

Польша ҡышы, Башҡортостандағы кеүек, ҡоро сатлама һыуыҡ түгел: бында таңға табан туңдыра, иртә менән күбәләкләп ҡар яуа, ерҙең өҫтөн ағартып ташлай, төш ауғас, ул ҡар ҡатышлы ямғырға әйләнә.

Беҙҙең һуғышҡа оҙатылған запасной батальон Варшаванан сыҡҡанда иртәнге сәғәт биш ине, беҙ биш-алты саҡрым киткәс, таң беленде. Әллә баш әйләнгәнгә инде, таң көнбайыштан беленгән кеүек булды. Мин Байғужаға һүҙ ҡуштым:

— Ниңә таң был яҡтан ата икән?

— Әллә шул... — тине Байғужа. Ул, аяҡ аҫтына ҡарап, әллә ниндәй уйға батып бара ине. Мин дә башҡа һүҙ ҡушманым, тирә-яҡҡа ҡаранып бара башланым.

Беҙ таш юлдан барабыҙ, бындағы юлдар беҙҙәге кеүек түгел, шыма итеп, бер аҙ уртаһы ҡалҡытыбыраҡ эшләнгәндәр. Тирә-яғында бағаналар ултыртылған, бер аҙ барғас, цементтан ҡойолған саҡрым бағаналары осрайҙар.

Көн тағы ла яҡтыра төштө. Юлдың уң яғында бер ауыл күренде. Бында өйҙәр таштан, матур итеп һалынғандар, түбәләрен арыш һаламдары менән тигеҙ, бөхтә итеп япҡандар. Унда бер нисә көршәк менән япҡан түбәләр ҙә күренә. Ауылдың тирә-яғы баҡсалыҡ, ауылдың артынан урман һуҙылып киткән. Йоҡа аҡ ҡар өҫтөндә ҡарайып күренгән нарат ағастарының япраҡтары иртәнге ҡар шәүләһе менән күкһел ҡара булып күренәләр, күңелгә ауыр, баҫынҡы тәьҫир бирәләр.

Бағаналарға ҡарағанда, хәҙер туғыҙынсы саҡрымды барабыҙ. Ошо күренгән ауылда ял итербеҙме икән тип уйлашҡайныҡ, беҙҙең юл буйлап һуҙылған йәйәүле һалдаттар ағымы ул ауылға боролманы, һул яҡҡа табан айырылды.

— Әле һаман барабыҙ... — тигән тауыштар ишетелде. Күрәһең, күп кешеләр мин уйлаған уйҙы уйлағандар. Варшаванан сыҡҡанда минең уң аяғым бик ныҡ ауырта ине, әле бер аҙ ҡыҙып китте буғай, ауыртмай башланы. Бынан дүрт көн элек Варшава вокзалында вагондан рельсҡа йығылып төшкәй-

нем. Уң аяҡтың енсеге тура килде. Ул ныҡ ауырта торған ер икән: һындарым китеп ятты. Иптәштәрем казармаға ҡултыҡлап алып килделәр. Итекте сисеп ҡарағас, ус төбөндәй ҡара янып сыҡҡан урыны күренде. Иптәштәр:

— Бына, һуғышҡа инмәç борон ранен булдың! — тип көлөштөләр. Миңә көлкө түгел, бик ауырта ине. Иртәгеһенә мине околодокка ебәрҙеләр. Мин, ун биш көнһөҙ төҙәлмәç, тип уйлағайным; ауылға: «Бик ҡаты йығылдым, аяғымды һындыра яҙҙым. Хәҙер больницала ятам, ун биш көнһөҙ сыға алмам», — тип хат та яҙып өлгөргәйнем. Өс көндән сығарып ебәрҙеләр. Сатанлап, таяҡҡа таянып, иптәштәрем әргәһенә ҡайттым. Бына бөгөн шул аяҡ менән фронтҡа китеп барам...

Ҡараңғы төшөүгә, Блуния тигән кескәй генә ҡалаға килеп индек. Урамдары тар, һәр ике яғында тәпәшәк икешәр ҡатлы таш өйҙәр теҙелгән. Ҡалала тормош юҡ. Ҡала ҡараңғы, бер нисә урында тоноҡ ҡына электр фонарҙары күренәләр. Күп тәҙрәләрҙә уттар янмайҙар. Урамдан обоздар, һирәк-мирәк йөк автомобилдәре үтәләр.

Кис менән ваҡ күҙле ямғыр яуа. Беҙ, һарыҡ көтөүҙәре кеүек, бөршәйеп урамда торабыҙ. Беҙ ошонда ҡунырға тейешбеҙ. Бер сәғәттән артыҡ торабыҙ инде, беҙҙе һаман урынлаштырғандары юҡ. Күп урында тәмәке уттары баҙлай, бөтә ерҙә һөйләшәләр. Шул һөйләшеүҙәр гөрөлдәүеге эсендә һүгенгән тауыштар йыш ишетелә, һирәк-мирәк таш урамда дағалы аттарҙың тауыштары яңғырап ҡалалар. Ул аттарҙа ҙурыраҡ командирҙар, офицерҙар йөрөйҙәр.

Өҙөлөп-өҙөлөп ҡорһаҡ асты, ашағы килә, унан һуң йылы ғына урында йоҡлағы, оҙаҡ итеп йоҡлағы килә. Беҙҙең иптәштәр ашау тураһында һөйләшәләр:

— Бында обед булырға тейеш. Бөгөн көн буйы ашаған юҡ бит! — тиҙәр. Новиков тигән тәбәнәк, йыуан, ҙур ауыҙлы бер һалдат үҙенең ҡалын, бас тауышы менән обед ашарға теләүселәрҙе һүгә:

— Обед алыç ҡалманы инде, бөгөн кискә булмаһа, иртәгә кискә әҙер булыр. Үҙегеҙҙең өҙөлгән аяҡ, ҡулдарығыҙҙы бешереп килтерерҙәр! — ти. Новиковҡа берәү ҙә һүҙ ҡайтармай. Сөнки Новиков менән яуаплаша башлаһаң, ул һинең бер һүҙеңә ун төрлө һүҙ әҙерләй, әгәр ҙә уны бер генә ҡатлы итеп һүкһәң, ул һине ун ҡатлы итеп, нәхүсәләп һүгә башлай. Үҙе шахтер булып йөрөгәндә уның тарафынан емерелгән ауыҙ, морондарҙың, һаналған тештәрҙең тарихына төшөп китә. Ыуңға табан уның һүғенеүе ҡурҡыныслы бер әкиәткә әүерелә башлай. Уны бөтәһе лә ҙур иғтибар менән тыңлай башлайҙар. Урыны-урыны менән көләләр. Көлгәс, Новиковтың күңеле була. Ул асыулы йөҙөн көлдөрә, ҙур ауыҙын йырып, эре тештәрен күрһәтеп:

— Шулай ул, браток! — тип, һүҙгә килгән кешеһенең арҡаһына һуғып, минең менән бәйләнергә ярамай, тигән һымаҡ

эреләнеп ҡуя. Ул күңеле килгән саҡта, бик йомшаҡ, һәр бер һүҙҙе тыңлаусан, иптәштәренә ярҙам итеүсән кеше. Күңеле килмәһә, хәҙер тоҡаныпп, ҡоро утын кеүек дөрләп, янып күтәрелеп китә.

Новиковтың нәҡ күтәрелеп, тоҡаныпп барған сағы ине.

— Смирно! Теҙелегеҙ, хәҙер фатирҙарға барабыҙ! — тигән команда булды. Бүренән ҡасып, бер урынға өйөлгән һарыҡтар кеүек, үҙ урындарыбыҙға йыйылдыҡ. Ҡалай етте, шулай рәттәр яһаныҡ. Төндө уны кем ҡарап тора, мылтыҡтарҙы яурынға ҡуйып, шым ғына команда көтә башланыҡ.

Беҙҙе тәҙрәһеҙ өйгә урынлаштырҙылар. Ел өрөп тора. Тик ямғыр ғына үтмәй. Шырпылар сыйып ҡарағас, уның стеналары бысраҡ, иҙәндәре сүп, батҡаҡ булды. Әллә ҡайҙан бәҙрәф еҫтәре килә, кем белә, бәлки ошонда уҡ ебәргәндәрҙер. Беҙ уны-быны ҡараманыҡ, стена буйына сумкаларҙы һалдыҡ та шуларҙың өҫтөнә ултырып торҙоҡ. Төрлө урындарҙа шырпылар сыйылды, тәмәкеләр тоҡандырылды. Шау-шыуҙар, һүгенеүҙәр, йырлауҙар китте.

— Сволочтар, бөгөн бөтөнләй ашатманылар!

— Беҙ хайуанмы ни, сусҡа аҙбарына килтереп яптылар!

— Өҫтәрҙе ҡалайтып киптерәбеҙ инде?

— Исмаһам, уты ла юҡ бит!

Налдаттар ауыҙындағы бөтә һүҙҙәр шунан ғибәрәт ине.

Мин асыҡ тәҙрә эргәһенә тура килгәнмен. Ел өрә, ел менән ямғыр тамсылары ла елкәгә килеп бәрелә. Бер аҙ ултырғас, аяҡтар ойоп, ауырта башланылар. Тәндәр ҡалтыранырға тотондолар. Бая өҙөлөп ҡарын асҡайны, хәҙер ул да онотолдо. Эстән уйлайым: ҡаты итеп ауырып китһәм, лазаретҡа алып ҡалырҙар ине, һуғышҡа китмәҫ инем, тимен, ләкин тәндә бик ныҡ арыу һиҙелһә лә, ауырыу һиҙелмәй. Тәндәр былай ғына өшөйҙәр.

Мин тик кенә ултырам. Байғужа сумкаһын аҡтарып булаша:

— Мин Варшавала май шәм ҡулға төшөргәйнем, ҡана шуны тоҡандырып ебәрәйек әле, — ти. Был һүҙҙе ишеткәс, әкрен генә мығырланып, һүгенеп тәмәке тартып ултырған Новиков ҡапыл күтәрелеп китте. Байғужаның арҡаһынан һөйә башланы.

— Валлаһи, — ти Новиков, — мин фронтта Байғужанан айырылмайым. Бына ул, по крайней мере, кеше. Уның менән йөрөһәң, мәңге асҡа үлмәҫһең! — ти. Үҙе, сумкаларын шыуыштырып, шырпыһын тоҡандырып, Байғужа эргәһенә килә. Был һүҙ миңә лә йән индерҙе. Кеҫәләге Варшаванан алған папиросты алып, эре генә итеп:

— Әйҙәгеҙ, улай булһа, папирос тартып ебәрәйек! — тип, Новиковҡа һуҙҙым. Уның йөҙө тағы ла асылып китте:

— Вот беҙҙең компания хәҙер офицерский! — тип, папиросты тоҡандырып ебәрҙе. Беҙ май шәмде тоҡандырып, алға ит консерваларын ҡуйып, ашарға башлағас, башҡа һалдаттар ҙа беҙҙең тирәгә йыйылышып, кәмит ҡараған кеүек, беҙҙе тамаша итә башланылар. Новиков асылып, күңелләнеп, тау түбәненә төшкән арба кеүек, шалтырап китте. Ул һүҙ артынан һүҙ таба, көлкө артынан көлкө таба. Үҙе өҙлөкһөҙ ашай, ҡулдарын болғап, икмәк менән тулған ауыҙы менән өҙлөкһөҙ һөйләй. Башҡалар көлөшәләр. Ишек төбөндә әсе тауыш ишетелде:

— Смирно! Рота командирҙары килә! — тине беҙҙең взвод командиры старший унтер Бабин. Калдаттар аяғөҫтө торҙолар. Поручик беҙҙең яҡтыға табан килде.

— Братцы! Бөгөн обед булманы, берәр консервағыҙҙы ашарға рөхсәт ителде, ашағыҙ! — тине, үҙе тиҙ генә сығыу яғын ҡараны. Унтер уны оҙатып, ишек төбөнә ҡыҙыу атланы. Улар артынса күмәк көлөү тауышы күтәрелде:

— Бына һиңә важный барин, консерва ашарға рөхсәт бирергә килгән. Беҙҙең ҡорһаҡтар һинән элек рөхсәт иттеләр инде уларҙы.

Байғужа менән Буранбай ҡайҙандыр алама септә табып ингәндәр. Уны аҫҡа түшәп ебәрҙек. Новиковҡа ла бер мөйөш эләктерҙек. Мин уларҙың урталарына яттым, тәндәр йылынып китте. Иҙәнгә иреп төшкән кеүек булдылар. Бүлмәлә тауыш бик тиҙ тынды. Юлда арып, туңып килгән кешеләр, ҡайһыһы, бөршәйеп стенаға һөйәлеп, ҡайһыһы, сумаҙандарына баштарын һөйәп, хырылдай башланылар. Бигерәк тә беҙҙең май шәме һүнеүе менән, бүлмәлә тормош та һүнде, барыһын да бөтә ҡоласы менән йоҡо баҫты. Әҙерәк ятҡас, Байғужа, минең яҡҡа әйләнеп, ауыҙын ҡолаҡҡа яҡын килтереп, әкрен генә һөйләй башланы:

— Минең Варшавала алған ике ҡап печеньем бар. Бер әсмүхә яҡшы сәй ҙә алдым. Тура килһә, һәйбәтләп сәй эсербеҙ, һугышта беребеҙҙе-беребеҙ ташламайыҡ инде...

Уның һуңғы һүҙе эстән, йөрәктән әйтелде. Шунан һуң ул тиҙ генә йоҡоға китте. Байғужаның был һүҙе миңә ныҡ тәьҫир итте. Тән йоҡо менән ҡойолһа ла, күҙ йомолманы.

Байғужа — минең ауылдаш. Ул беҙҙең ауылдың үрге осонда Йәйентамаҡ күле ярында ултырған Байназар тигән ярлы кешенең балаһы. Ул йәш ваҡытында күп уҡый алманы, күберәк батраклыҡта йөрөнө. Мин ауылда саҡта Байғужалар араһына бик һирәк ҡатыша торғайным. Мин уны күп күрһәм дә, ул миңә яҡын таныш түгел ине. Һалдатҡа алынгас, һәр ваҡыт бергә булдыҡ. Ул аҙ ғына буйға минән оҙонораҡ булһа ла, бер взводҡа эләгеү өсөн, ул, сүгәләберәк, мин, ҡалҡыбыраҡ баҫып, бер тигеҙ булырға тырыша торғайныҡ. Хәҙер беҙ уның менән бик дуҫлаштыҡ. Ул, ҡарап торғанда, йыуаш, һәлмәк кеше кеүек күренһә лә, үҙен һәм иптәштәрен ҡарау өсөн *

тапҡыр, етеҙ һәм алдан күрә торған кеше. Бер урынға килеп төшһәк, беҙ күҙ-баш алғансы, ул әллә ни арала, әллә ҡайҙарҙа булып, әллә кемдәр менән танышып, һөйләшеп килә. Ҡайҙа кибет, баҙар, мунса барын белеп килә. Уның сумаҙанында һәр төрлө кәрәк нәмәләр була. Энә, еп, һәҙәп, булавка, ҡайраҡ, беләү... — бөтәһе лә бар. Шуға күрә лә уның менән йөрөү рәхәт. Ул яҡшы иптәш була белә, ул күп ауырлыҡтарҙы, мохтажлыҡтарҙы еңеләйтә белә. Шуға күрә лә уны бөтә иптәштәр яраталар. Уға берәү ҙә ауыр һүҙ әйтмәй, уның менән бер кем дә һүҙ көрәштермәй, уға өлкән кеше кеүек итеп ҡарайҙар, уны хөрмәт итәләр. Йоҡлар алдынан һуңғы һүҙен әйткәс, ул миңә тағы ла яҡын күренде. Мин арҡамды уның кәүҙәһенә яҡыныраҡ терәп яттым. Башҡа кешеләргә ҡарағанда, уның тәне миңә йылыраҡ, яғымлыраҡ тойолдо. Быялаһыҙ тәҙрәле, һалҡын, ташландыҡ өйҙә ятыу онотолдо. Әллә ҡайҙа, алыҫта, Быҙаулыҡта ҡалған тегеүсе Ивановтың йылы өйө, һөйкөмлө Нинаһы күҙ алдына килде.

Беҙ, 1914 йыл көҙ яңы алынган кешеләр булып ғәскәри хеҙмәткә алынғас, Быҙаулыҡ ҡалаһына килдек. Ҡалала ике запасной полк тора ине. Унда көҙ алынған запас һалдаттар, ополчиндар, Украинанан килгән батальондар тора. Уның өҫтәүенә беҙ килдек. Беҙҙе урынлаштырырға казармалар етмәне. Беҙҙе хосуси фатирҙарға тараттылар. Мин Иванов тигән бер тегеүсе фатирына тура килдем. Фатир яҡшы, таҙа, семьяһы бәләкәй, ике генә ҡыҙы бар. Береһе 12, береһе 17 йәшендә. Бисәһе ауырыу. Иванов кейем тегә, йорттағы бөтә ауыр эште башҡара. Бисәһе мызмырлап аш-һыу тирәһендә генә болғана.

Мин иң тәүҙә Иванов фатирына килеп ингәс, ҡаҙанлыҡ эргәһендә торған ҡатын мине ҡаршы алды. Мин нәмәләремде ҡуйып өлгөрмәнем, ике силәк менән һыу күтәреп Иванов ҡайтып инде. Мине бик мөләйем ҡаршы алдылар. Ивановтың бисәһе Клавдия, ауырыу менән эскә батҡан йәшкелт һоро күҙҙәрен ҙур итеп асып, миңә оҙаҡ ҡарап торҙо. Унан һуң көрһөнөп:

— Йәш кенә балалар! Ошо йәш кенә балаларҙы һуғышҡа ебәрәләрме икән? — тине, иренә ҡарап алды, унан һуң тағы ла миңә ҡарап, — һеҙгә нисә йәш? — тине. Мин ашығып ҡына:

— Ун туғыҙ йәштә, — тинем. Ул мейескә аш ултыртып маташа ине. Ул, янған мейескә ҡарап, ауыҙ эсенән генә бик оҙаҡ һөйләнде. Әллә кемдәрҙе йәлләне, әллә кемдәрҙе ҡарғаны, һүҙ араһы һайын Аллаға ялбарҙы.

Бер аҙҙан һуң беҙгә ғәскәри кейем бирҙеләр. Ул кейемдәрҙең береһе лә беҙҙең буйҙарға ҡарап тегелмәгәндәр. Ул кейемдәрҙе алып ҡайтыу Иванов семьяһы өсөн ҙур ваҡиға булды: фуражкаһы шул тиклем ҙур, минең ҡолаҡтар күмеләләр, шинель шул тиклем оҙон, минең аяҡтан уҙып, иҙәнгә һөйрәлеп ята, хлястигы минең осанан түбән төшөп тора. Гимнастерканың яғаһы үгеҙ муйыны өсөн эшләнгәнме ни -— минең ике муйын

һыйырлыҡ. Шуның өҫтәүенә еңдәре минең ҡулдарҙы ҡаплап, теҙҙән түбән төшөп торалар. Мин кейенеп ҡарағас, Иванов һындары ҡатҡансы, күҙҙәренән йәштәре сыҡҡансы көлдө. Нина бында түҙә алмағас, бүлмәгә инеп, бикләнеп көлдө. Мин үҙем оялам, үҙем көлгән булам. Клавдия ла башта беҙгә ҡушылып, арыҡ кәүҙәһен ҡалтыратып, мыртылдап көлөп маташты. Һуңға табан, әллә мине ҡыҙғанып, күңеле нескәрҙе инде: «Йәш кенә балаларҙы нисек мәсхәрә итәләр бит!» — тип илай башланы. Уның илауы барыбыҙға ла тәьҫир итте буғай, шымдыҡ. Киске сәй алдында Иванов:

— Бөгөн мин уның шинелен матурлап, ҡыҫҡартып, кәүҙәһенә таман итеп кенә тегеп бирәм, — тине. Уның был һүҙе минең күңелгә йылы бирҙе. Клавдия ла, Нина ла, бәләкәй ҡыҙ Маруся ла быға ҡул ҡуйҙылар.

— Эйе шул, Алла хаҡы өсөн булһа ла, ҡыҫҡартып бирергә кәрәк, — тинеләр.

Йоҡоға ятҡан ваҡытта, Иванов минең шинелде үҙенең бүлмәһенә алып инде. Иртә менән сәғәт алтыла тороп ҡараһам, шинелем һүтелеп ырғытылғайны. Уны күргәс, мин ҡысҡырып ебәрҙем:

— Бөгөн беҙгә ғәскәри кейем менән сығырға приказ булғайны, нисек итеп үҙ кейемем менән сығайым инде... — тинем. Иванов һалҡын ҡан менән генә:

— Бөгөнгә бер нәмә лә булмаҫ, кискә өлгөрә ул. Фуражкаңды ла ҡалдыр. Уны үҙемдең бер таныш мастерға илтеп бирәм. Гимнастеркаңды башҡа ваҡытта төҙәтербеҙ, — тине. Был, бер яҡтан, миңә күңелле булһа ла, икенсе яҡтан, бөгөнгө өсөн ауыр һәм ҡурҡыныс ине.

Иртәнге сәғәт 6-ла, таң ҡараңғыһында, казарма алдына килгәндә, бик күп һоро күләгәләр ҡуҙғалалар: былар яңы ғәскәри кейем кейеп сыҡҡан минең иптәштәрем ине. Хәҙер быларҙың береһен дә таныр әмәл юҡ. Бер мин улар араһына вольный кейемдән килеп индем. Байғужа менән Буранбай ҡысҡырып, саҡырып алдылар. Бөтөнләй үҙгәреп киткәндәр. Уларҙың икеһе лә кәүҙәгә килбәтле, йыуантыҡ егеттәр, уларға был кейемдәр аҙыраҡ ята төшәләр. Бөтә иптәштәргә баштан-аяҡ ҡарап сыҡтым. Барыһы ла яңы кейемдәр кейеп, яңы кәйеф менән килгәндәр. Улар миңә аптырап ҡаранылар.

— Ниңә кейемеңде кеймәнең? Приказ шулай бит, — тинеләр. Мин барыһына ла теге ваҡиғаны һөйләнем. Ул арала старший унтер Кудряшов барыбыҙға ла теҙелергә ҡушты, мин артҡы флангыға Байғужа артына баҫып торҙом. Ул: «Смирно!» — тип команда бирҙе. Һалдаттарҙың нисек кейенеүҙәрен ҡарай, тикшерә башланылар. Ҡайһыһының поясын тартып ҡарай, ҡайһыһының кәпәйеп торған арҡаһын төҙәттерә. Уларҙың береһе лә «бүләкһеҙ» үтмәй. Иң башта йыуан ғына итеп бер «мат»лап ала, унан һуң йә сикәгә, йә арҡаға, йә бөйөргә

эләгә. Мин, күмәк ҡуйҙар араһындағы бер кәзә һымаҡ, ҡалтыранып, ҡурҡып торам. Һәр секунды сәғәт тойола, һораһа, ни тип яуап бирергә белмәйем. Арҡанан тирҙәр сыҡты. Миңә килеп етте.

— Һин ниңә былай? — тине. Мин ҡурҡыуымдан һикереп киттем. Ни әйтергә белмәй аптырап ҡалдым. Ағарындым, тамаҡ төптәрем кипте. Ул тағы ла:

— Ниңә кейенмәнең? Әллә һатып эстеңме? Өс аҙым алға сыҡ! — тине. Команда бирҙе. Мин алға сыҡҡанда, аяғым Байғужаның аяғына эләгеп, ике аҙым алға һөрләгөп киттем. Ҡулды под козырек алып:

— Господин взводный, мин кейемдәремде тегергә бирҙем, бик өлкән булғандар, — тинем. Кудряшовтың күҙҙәре утланды, ирендәре ҡалтыраны.

— Ах, басурманская морда! Кемдән рөхсәт алдың?.. Кем һиңә ғәскәри кейемде боҙорға рөхсәт итте?.. Хәҙер һин военный хөкөмгә тартылаһың! — тине. Ҙур көслө ус менән минең яңаҡҡа бирҙе. Минең күҙҙән уттар күренде. Сайҡалып киттем, йығыла яҙып ҡалдым. Тағы алдына килеп баҫтым. Кудряшовтың кәүҙәһе миңә алыҫта, томан артында кеүек күренә ине. Ул тағы һулаҡай ҡулы менән һул яңаҡҡа берҙе төшөрҙө. Быныһы артыҡ ныҡ һиҙелмәгән кеүек булды. Ниңәлер башым әйләнде. Теҙелеп торған һалдаттар, ер ҡалтайып, ауышып, артҡа табан китеп барған кеүек булдылар. Эйәктән йылы нәмә ағып төштө. Ҡулым менән һыйпаным, минең ҡул ҡып-ҡыҙыл ине. Ләкин танау ҡанағанмы, сикә ярылғанмы, — уныһын һиҙмәнем, сөнки минең ике битем дә ут кеүек яна ине. Шунан һуң, мине төртөп стройға индерҙе лә, отделение командирын саҡырып, приказ бирҙе.

— Был хайуаныңды стройҙан ал! Бөгөн смотр була. Ҡалай итеп уны полк командирына күрһәтәһең. Кухня тирәһенә наряд бир. Кискә ике сәғәт винтовка аҫтына ҡуй. Мин уның тураһында рота командирына доложить итәсәкмен, — тине.

Мине кухняға картуф әрсергә ебәрҙеләр. Ул көнөм шунда үтте. Ҡар менән йыуып ауыҙҙағы, танауҙағы ҡандарҙы бөтөрһәм дә, кискә тиклем башым шауланы, ҡолаҡтарым тондо. Гүйә, минең биттәр, ҡолаҡтар, йылы кейеҙ менән ҡапланған кеүек, бөтә тойғоларымды томалап торалар ине. Тамам аңраға әйләнгәйнем.

Кис менән ҡайтҡас, хужам Иванов, төҫөмә ҡарап:

— Әллә ауырыйһыңмы? Биттәрең шешенгән... — тине. Мин:

— Былай ғыналыр, — тинем. Ул турала һөйләмәнем.

Минең шинель менән фуражка әҙер ине. Кис менән гимнастерканың яғаһын, еңен кесерәйтеп бирҙе. Иртәгеһен мин занятиеға кейенеп сыҡҡанда, минең өҫтә ыҡсым һәм ҡупшы итеп тегелгән шинель, башта офицерҙар фуражкаһына оҡшаған һәйбәт защитный төҫтә фуражка ине. Бөтә иптәштәр, мине уратып

алып, минең шинелде ҡаранылар, фуражканы ҡарау менән ҡәнәғәтләнмәнеләр, ҡулдан ҡулға алып, баштарына кейеп: «Нисек, килешәме?» — тип береһенән-береһе дөрөҫләттеләр. Бөгөнгө иртә кейем мәсьәләһендә мин бөтә взводтың геройы инем. Кисәге яңаҡ ауыртыуҙары бөгөн онотолғандар, мин яңы кейем аҫтында, яңы донъя кешеһе. Кисәге һабаҡ буйынса, иптәштәр, бөгөн минең ҡайышты ҡыҫалар, хлястиктарҙы төҙәтәләр, шинелдең арҡаларын, итәктәрен матурлайҙар, шымарталар. Мин кинәнеп торам.

Рота командиры Карклин килде. Стройға теҙелдек. Кудряшов минең турала Карклинға доклад бирә. Ләкин, ниңәлер, бөгөн минең тубыҡтар ҡалтырамай, күңелгә лә артыҡ ҡурҡыу төшмәй. Мин яңаҡ тураһында уйламайым, суд тураһында ғына уйлайым, эстән генә, мин әйтәм, барыбер түгелме ни, тимен. Бында, һалҡын һауала, иртәнән кискә тиклем занятие, ә унда, исмаһам, йылы урында тик ултырырмын, тип уйлайым. Карклин мине саҡыра. Мин:

— Имею честь явиться, ваше благородие! — тип алдына килеп баҫам. Оҙон тура кәүҙәле, ҙур мыйыҡлы Карклин миңә оҙаҡ ҡарап тора. Мыйыҡтарын көлдөрөп:

— Ни әйтергә?.. Тектергән бит. Үҙенә килешеп тора. Болван! Болван!.. Ярай, бар, урыныңа кит, — тине.

Мин, шатлығымданмы, белмәйем, ҡаушапмы, ғәскәри тәртиптәрҙе үтәмәйенсә былай ғына урыныма килдем. Ул мине тағы ла саҡырып алды.

— Әллә һин командир эргәһенән ҡалай китергә өйрәнмәнеңме?

— Виноват, ваше благородие!

— Ну, кит!

Мин бөтә тәртип буйынса китәм. Урыныма киләм. Карклин көлә.

— Чудак! — ти. Ул ваҡиға шуның менән бөттө. Мине винтовка аҫтына ла ҡуйманылар, судҡа ла бирмәнеләр. Занятие һуңында Кудряшов саҡырып алып миңә шуны әйтте:

— Ярай әле, рота командиры яҡшы кеше икән. Һинең башың юғала ине бит, басурманская морда! — тине.

Был эштең аҙағы шулай шыма бөткәс, бөтә ваҡиғаны ҡайтып Ивановҡа һөйләнем. Клавдия Матвеевна минең был фажиғәле хәбәрҙе һәр ваҡыт башын һелкеп тыңланы. Ә Нина, йотлоғоп, мин һөйләгән һайын миңә яҡын килде. Ул кис бөтә өй эсе еңеү байрамы шатлығын үткәрҙе. Мин тағы ла күтәрелеп киттем. Үҙемдең ирлекте күрһәтеү өсөн, артығыраҡ та һөйләп ебәрҙем. Иванов, был ваҡиғаға тәьҫирләнеп, үҙ эшенә керешеп китте:

— Клавдия әйтә, был баланы мәсхәрә итмә инде, ти. Заказдарыңды ҡуйып булһа ла, бер кисеңде әрәм ит, уның кейемдәрен кесерәйтеп бир, берәүҙең ҡәҙерле балаһылыр, ата-

әсәләре илап ултыра торғандыр, үҙеңде Алла риза итер, ти. Мин әйтәм, Клавдия, була ул, миңә ни тора, кәнфит кеүек итеп эшләп бирермен, тием. Һәм кәнфит кеүек булды ла инде, — ти. Үҙенең тегеүселек тарихы һәм уның оҫталыҡ серҙәрен айырым кисереш менән, төрлө ваҡиғаларға бәйләп, һөйләп алып китте.

Беҙ барыбыҙ ҙа уны тыңлайбыҙ.

Шул көндән башлап Нина миңә яҡыная башланы. Ул сәғәт ундан йоҡоға ята торғайны. Мин төнгө сәғәт ун берҙә ҡайтам. Нина һәр ваҡыт кухняла була. Миңә самауыр әҙерләй, мин сәй эскәндә, ул һәр ваҡыт минең янда була. Ул ваҡытта мин иренеп кенә сәй әсәм. Артыҡ арығанлыҡтан, тәндәр ҡойолоп баралар, тиҙерәк йоҡо һорайҙар. Нина һаман һөйләнә. Мин арлыбирле сәй әсәм дә, тиҙерәк өҫтәрҙе һалып, урынға йығылам. Нина ҡасан йоҡлай торғандыр, мин уны белмәйем. Мин иртә менән сәғәт биштән тороп занятиеға китәм. Ул ваҡыт Нина йоҡлай. Фәҡәт Иванов ҡына уяу була. Ул мине оҙатып, ишек бикләп ҡала. Көндөҙөн өйҙә булмайым. Төнгө сәғәт ун берҙә генә өйҙә булам. Ул да төндә генә, көндөҙ улар мине күрмәйҙәр. Сөнки йәкшәмбе байрам ителмәй. Һуғыш ваҡыты булғас, беҙҙе һис ялһыҙ-ниһеҙ өйрәтәләр.

Бер төн, сәй эсеп бөтөп, урыныма инеп ятҡас та, Нина өҫтәлен йыйыштырҙымы, юҡмы, шәмдәрҙе һүндерҙе, үҙе зал ға үтте. Мин уны ауыр серемгә китеп барғанда ғына байҡап ҡалдым. Унан һуң йоҡоға киткәнмен. Шул ваҡыт минең ҡуйыныма йылы, йомшаҡ бер ҡул инде. Икенсе ҡул минең башты һыйпай башланы. Ҡулдар ҡалтырайҙар, шуның менән бергә дөп-дөп һуҡҡан йөрәк тауыштары минең ҡолаҡҡа ишетеләләр. Миңә ул төш кеүек. Ләкин ҡулдар янғандан-яналар, эҫе һулыштар яҡынайғандан-яҡынаялар. Ниндәйҙер бер ҡайнар кәүҙә минең һул яҡ яурынды баҫҡандан-баҫа. Ләкин ул ләззәтле баҫыу менән баҫа. Күҙ ҡабаҡтарын ауыр йоҡо баҫа, ә шул рәхәттән минең йөрәк тибә. Мин ҡулымды алып, шул йылы тәнде ҡапшамаҡсы булам. Ләкин арыған, ял теләгән ҡул ҡуҙғалырға теләмәй. Йылы һулыш һуҡҡан тауыш миңә тағы ла нығыраҡ ишетелә башлай. Мине баҫҡан йомшаҡ кәүҙә тағы ла ауырая төшә. Ләкин ул ауырлыҡ уңайһыҙ ауырлыҡ түгел, ниндәйҙер бер йомшаҡ, рәхәт ауырлыҡ. Ул ауырлыҡты тағы ла нығыраҡ, тағы ла күберәк төшөрәһе, шул ауырлыҡ аҫтында ятаһы килә. Шул ауырлыҡтан, шул эҫелектән минең төндәрем тирләне, йомшарҙы. Ҡулдарым ауырайҙы, ағзалар һары май кеүек урынға һеңделәр. Күҙ ҡабаҡтарына йоҡолар тағы ла ныҡ төйөлдөләр. Йоҡлағанмын...

Беҙ, ант биреп, яланға стрельбаға йөрөй башлағас, беҙгә йәкшәмбе көндәрҙә ял бирә башланылар. Ул көн Нина ял итә. Ул гимназияның икенсе курсында уҡый. Иванов ҡыҙы Нинаны танышлыҡ арҡаһында гимназияға индергән. Ул турала күп

аҙаптар күрмәгән. Хәҙер ул бөтә тапҡан-таянғанын Нинаның уҡыуы өсөн бөтөрә. Уны кейендерә, уға түләй. Уның тураһында хәстәр күрә. Шуның менән бергә ул Нинаны артыҡ ярата. Күберәк ваҡыт өйҙә һүҙ Нина тураһында һөйләнелә. Иванов семьяһындағы тормоштоң атҡан сәскәһе Нина. Ҡайһы ваҡыт Иванов, Нина тураһында һөйләгәндә, бисәһенә:

— Шайтан алғыры, беҙ был өйгә сыҡҡанда, бер валсыҡ ҡына ине бит, хәҙер нисек матурланып үҫеп китте бит ул... — тип ҡуя. Ысынлап та, Нина матур, ягымлы ҡыҙ. Ул таҙа. Тығыҙ тәнле, матур, килбәтле. Уның биттәренең остары ҡып-ҡыҙыл булып янып торалар. Ҡуңыр сәс, һарғылт ҡаш, шул йөҙгә бик һирәк осрай торған ҙур зәңгәр күҙҙәр. Һарғылт оҙон керпектәр араһында уйнап торған ҙур зәңгәр күҙҙәр матур, мөләйем булалар.

Бер йәкшәмбе көн Иванов, бисәһе менән бәләкәй ҡыҙы Марусяны эйәртеп, таныштарына ҡунаҡҡа китте. Нина менән икәү өйҙә ҡалдыҡ. Мин дә, ял көнөнән файҙаланып, иптәштәрем эргәһенә барырға йыйынам. Нина минең эргәмдә урала, һүҙ артынан һүҙ табып, минең менән һөйләшергә тырыша. Мин ябай һалдат кеше уға ҡаршы һүҙ таба алмайым. Шуға күрә лә тиҙерәк китергә ҡабаланам. Ул бик серле генә итеп миңә әйтә:

— Һеҙ бик арып ҡайтаһығыҙ, ахыры? Бик ҡаты йоҡлайһығыҙ, — ти.

— Әллә, ҡаты йоҡ лаймын дыр шул, — тимен, үҙем уңайһыҙланам. Ул һикереп килеп, минең яурынымдан тота, ҡыҙара:

— Мин йүләр бит инде, асыуланмаһағыҙ, һөйләйем? Асыуланмайһығыҙ бит, ә, асыуланмайһығыҙ бит?

— Юҡ, юҡ, ниңә асыуланайым! — тимен, үҙем артҡараҡ сигәм. Ул тағы ла яҡыныраҡ килеп:

— Беләһегеҙме, бер төн мин һеҙҙең эргәгеҙгә килдем. Һеҙ уянманығыҙ. Рәхәт итеп йоҡлай инегеҙ...

Шул ваҡыт ул ҡыҙарҙы, ҙур зәңгәр күҙҙәрен түбән төшөрҙө. Әллә йоҡлаған ваҡытта берәр уңайһыҙлыҡ эшләнем микән тип, мин тағы ла ояллым. Уның эргәһенән ситкә тайшанып, һис бер мәғәнәһеҙгә көлә башлаған булдым.

— Ярай, мин китәйем әле, ату һуңға ҡалам, — тип ишеккә табан барам. Нина йүгереп килеп ишек төбөнә баҫа:

— Юҡ, мин һеҙҙе ебәрмәйем! — ти. Ҡолас йәйеп тора. Ә мин уға ҡаршы торорға, уның менән яуаплашырға оялам. Шул ваҡыт ул миңә ҡапыл ташланды ла йомшаҡ бәләкәй ҡулдары менән минең ике биттән ҡыҫып:

— Их, мин һине нисек яратам, ә һин белмәйһең! — тине лә, атылып, залға инеп юғалды. Мин аптырап бер урында баҫып ҡалдым. Ишек яғына ҡараным. Ул күренмәй ине. Минең тубыҡтар ҡалтырай, кеше килер төҫлө, Иванов ҡайтып килеп, «ни эшләп тораһығыҙ?» тип әйтер төҫлө күренә. Шул тәьҫир аҫтында мин тиҙ генә өйҙән сығып, Заводской урам буйлап

иптәштәрем яғына киттем. Минең арттан Нина ҡарап торған кеүек йәки ул минән көлгән йәки илаған төҫлө. Э урамда осраған кешеләр был ваҡиғаны белгән кеүек тойолалар. Мин башты һаман түбән баҫып атланым. Ләкин Нинаның шәүләһе һаман минең артта, «их, мин һине нисек яратам!» тигән һүҙе һаман ҡолаҡта ине. Ләкин ул турала мин һаман аҡылды йыйып ала алғаным юҡ ине әле.

Шул төн йомшаҡ ҡулдар тағы минең башты һыйпанылар, эҫе һулыштар тағы минең биткә бәрелделәр. Ҡаты һуҡҡан йөрәктәр тағы минең һул яҡ кәүҙәне баҫтылар. Ләкин ул төн мин йоҡоло түгел инем...

Беҙ бөгөн тәҙрәһеҙ, ташландыҡ һалҡын өйҙә ятабыҙ, тәҙрәләрҙән һалҡын ел бәрә, ямғыр тамсылары тамалар. Иртәгә һуғышҡа инә торған минең иптәштәрем, һаташа-һаташа, ауыр төштәр күреп йоҡлайҙар. Минең иптәшем Байғужа ла йоҡлай. Мин уның арҡаһына терәлеп, һөйөклө Нина тураһында, тегеүсе Иванов семьяһында үткәргән ай ярым ғүмер тураһында уйланам. Ул миңә йылылыҡ бирә. Байғужаның арҡаһы баҫҡан ауырлыҡ Нинаның ҡыҙыу тәнле ауырлығын иҫкә төшөрө. Мин иркәләнеп күҙҙәремде йомам: бөгөн йәкшәмбе көн. Мин Быҙаулыҡта, тегеүсе Иванов өйөндә, караватта ятам. Ә минең эргәмдә Нина ултыра...

Быға тиклем ул турала уйларға ваҡыт юҡ ине. Бөгөн тәҙрәһеҙ, ташландыҡ өйҙә, һалҡын көҙгө төндө мин ул турала оҙаҡ уйланым...

Иртәгә ни булыр? Ҡайҙа булырбыҙ?.. Һуғыштамы әллә башҡа урындамы? Ул турала бөгөн уйлағы килмәй. Ә Нинаны уйлауы рәхәт. Ул уй менән йоҡлауы ла рәхәт. Сөнки ул йылылыҡ бирә...

## ИКЕНСЕ БҮЛЕК

Байғужа уята:

— Булат! Булат! Тор инде!..

Мин иренеп кенә күҙҙәрҙе асам. Биткә һалҡын ел бәрелә. Бөтә һалдаттар торғандар. Шатыр-шотор йыйыналар. Мин ҡуҙғалам, аяҡтар, тәндәр ауырталар. Аяҡ бик ныҡ ойоған. Уны күтәреп булмай. Ике ҡуллап ыуам. Аяҡҡа баҫам. Көн яҡтырған. Тирә-яҡҡа ҡарайым. Беҙҙең ятҡан өй ҡот осҡос йәмһеҙ, стеналары ҡара, түшәмдәре емерелгән, стеналары соҡолған, беҙҙең аяҡ осонда ғына кирбес өйөмдәре ята; торғас, бик ныҡ итеп кирелдем. Ҡулдарҙы һелктем. Тән әҙерәк еңеләйгән кеүек булды. Сумка, патронташтарҙы бәйләй башланым. Байғужа:

— Бына бер котелок һыу килтерҙем. Шуға мансып сохари ашайыҡ әле, — ти. Беҙ сохариҙы унан-бынан ҡабып өлгөрмәнек, тышҡа сығырға команда булды. Кейемдәрҙән еүеш,

һаҫыҡ еҫтәр килә. Аяҡтар атларға теләмәйҙәр. Сумка, патронташ, мылтыҡтар яурынды ныҡ баҫалар. Билгә таҡҡан кәрәк, фляжкалар, подсумкалар, ҡайышты баҫып, билде ауырттыралар. Китке килмәй, бер йылы урынға инеп, йоҡлағы килә. Һәр кемдә баҫынҡы, ауыр кәйеф, теләр-теләмәҫ кенә ҡарлыҡҡан тауыш менән һөйләшәләр. Күҙ ҡабаҡтары шешенгән, яурындар төшкән. Йәш кенә биттәргә ҡобараһы осҡан ҡарт төҫтәр ингәндәр. Бөтә кешенән алда, бөтә кешенән күп һөйләшә торған Новиков та бөгөн һөйләшмәй. Ҙур ауыҙын асып иҫнәй-иҫнәй баҫҡыстан түбән төшә.

Бөгөн туңдырмаған. Ҡар ҙа яумаған. Түбән һалынып төшкән болоттарҙан өҙлөкһөҙ ваҡ тамсылар һибеләләр...

Местечконың беҙ ҡунған өлөшө, ысынлап та, ташландыҡ бер местечкоға оҡшаған. Күптән түгел бында һуғыш булған, тиҙәр. Снарядтан емерелгән стеналар, пожарҙан ҡарайған өйҙәр, асыҡ түбәләр күңелгә шомлоҡ бирәләр. Һис бер урында күңел туҡтарлыҡ күренеш юҡ. Тик бер йортта артиллерия туптары һәм уның обоздары күренә. Уның эргәһендә бер часовой йөрөп тора.

Беҙ, һибәләп торған ваҡ ямғыр аҫтында местечконы сығып, өс-дүрт саҡрым барғас, таш юлдан һул яҡҡа урман буйынан киттек. Юл бысраҡ, ике яғы һөрөлгән. Шуның араһынан барабыҙ. Төш алдынан көн аяҙайып китте. Ҡояш күренде. Әллә беҙ тирләгәнгәме, әллә ысынлапмы, һауа йылынған кеүек булды. Юл ауыр. Аяҡтар талалар, һалдаттар һөйләшмәйҙәр, һәр ваҡыт аяҡ аҫтына ғына ҡарап баралар. Тигеҙ ер, ҡомлоҡ, урман... Һәр урында береһенә береһе оҡшаған күренештәр күҙгә бәреләләр. Башта бүтән уй юҡ. Алға ҡарайбыҙ. Һуғыш ҡайҙа? Алыҫмы? Берәү ҙә белмәй. Сөнки барыбыҙ ҙа һуғыш өсөн яңы кешеләр. Барыбыҙ ҙа яңы алынған һалдаттар. Барыбыҙ ҙа беренсе тапҡыр һуғышҡа киләбеҙ. Ҡалай һуғышалар, нисек һуғышалар, беҙ ул турала тулы картина бирә белмәйбеҙ.

Алыҫта һауала аҫылынып торған бер шар күренә. Үҙе күгелйем, үҙе ҡаҙылыҡ кеүек кәкрерәк; беренсе күргән һалдаттар:

— Ҡара, ҡара, нимә икән ул? — тиҙәр, ҡайһы берәүҙәре төҫмөрләп кенә яуап биреп маташалар:

— Ул фронттағы нәмә, тимәк, фронт яҡын.

Беҙҙең взвод командиры Шишков, бик белгән кеше булып:

— Ул аэростат, унан дошмандың позицияһын ҡарайҙар, — ти. Шул ыңғайға күмәк тауыш:

— Фронт! Фронтҡа етәбеҙ!..

Бер юлы ҡабатлана. Бөтә күҙҙәр шул шарға ҡарап баралар. Беҙ ҡалҡыуыраҡ урынға менгәс, алыҫтан бер ҙур ауыл күренде. Теге шарҙан алыҫтараҡ тағы ла бер шар күренде. Шул ваҡыт беҙҙең баш осонан, шул яҡҡа ҡарап, бер аэроплан шау-

лап уҙҙы. Шул ҡалҡыуҙа беҙҙе хәл йыйырға, тәмәке тартырға туҡтаттылар. Мылтыҡтарҙы биш тағанлап ҡуйҙыҡ та, юл буйындағы һарғайған еүеш үләндәр өҫтөнә теҙелешеп ултырып, тәмәке тоҡандырҙыҡ. Шул ваҡыт бер яҡтан, бик алыҫтан, гөрҫ-гөрҫ иткән һаңғырау тауыштар ишетелә башланы. Улар ер аҫтынан килгән кеүек булалар. Уларҙың ҡайһы берҙәре яҡын ишетелгән кеүек булалар.

— Туп тауышы! Туп тауышы!.. — тиҙәр. Шул һүҙҙәр күңелгә ҡурҡыныс һалалар. Теге алыҫтан ишетелгән тауыштар был ауыр шомдо тағы ла көсәйтәләр. Йөрәк һикерә, шыу итә. Һалдаттар әкрен, баҫынҡы һөйләшәләр. Бер-береһенә тәрән мәғәнә менән ҡарашалар. Ләкин уларҙың ҡараштарында ниндәйҙер бер ярҙамһыҙлыҡ, ышаныҫһыҙлыҡ, өмөтһөҙлөк бар. Гүйә, уларҙың аҫтындағы ер, теге алыҫтан ишетелгән һаңғырау тауыш менән уйылып, ишелеп бара. Улар уйылып түбән төшәләр. Түбәнгә, тәрәнгә төшәләр. Һәр кем төшә. Берәүҙең дә берәүгә ярҙамы юҡ. Шуға күрә бер кем дә берәүгә лә өндәшмәй, бер кем дә ярҙам көтмәй... Ниндәйҙер бер упҡын бөтә донъяны үҙенең сикһеҙ тәрәнлегенә тарта. Гүйә, бөтә донъя йотола, бөтә кешеләр йотолалар, гүйә, бөтә кешеләр үҙҙәренең төпһөҙ упҡынға йотоласағын алдан белеп йотолалар, шуға хөкөм ителгәндәр...

Шул кәйеф менән баяғы ҡалҡыуҙан күренгән местечкоға килдек. Ул корпус штабы ине. Унда тормош ҡайнай. Унда әллә ни тиклем обоз, интендантство, Ҡыҙыл тәре палаткалары, столовыйҙар, сәйханалар, ғәскәри лавкалар...

Килеү менән беҙҙе ергә ҡаҙылған землянкаларға урынлаштырҙылар. Землянканың эсендә яңы ғына түшәлгән һаламдар яталар. Консерва һауыттары, папирос коробкалары ҡалдырғандар. Күрәһең, беҙҙән элек кенә беҙҙең ише кешеләр бында булып киткәндәр. Беҙҙе Ҡыҙыл тәре палаткаларына алып килделәр. Егерме бишәр дана папирос, берәр һауыт печенье, конверт, ҡағыҙ, ҡәләмдәр, молитвенниктар өләштеләр. Шунан һуң, столовыйға алып барып, йылы һурпа, дөгө бутҡаһы ашаттылар, яртышар бутылка ҡыҙыл араҡы өләштеләр. Был беҙҙең өсөн көтөлмәгән бер хөрмәт булды.

Ҡайһы бер иптәштәр сәйханаға киттеләр. Беҙ землянкаға ҡайтырға булдыҡ. Уға сәбәпсе Новиков булды. Ҡыҙыл араҡыларҙы ҡулға алғас, ул беҙҙе йыйнап алды ла:

— Иптәштәр, барыбер иртәгә фронтҡа китәбеҙ, давай бөгөн дер һелкетеп күңел асайыҡ, — тине. Риза булдыҡ. Землянкаларға ҡайттыҡ. Биҙгәкле рәүештә консерваларҙы ватып, шешәләрҙе асып, мәжлес әҙерләргә тотондоҡ. Ул арала баш осонда күмәк аэроплан тауыштары ишетелде. Штабҡа яҡын урында йөрәк өҙгөс бер снаряд ярылды. Беҙҙең землянкалар эргәһендә бер рәттән өс-дүрт бомба ярылды. Улар ҡара тупраҡ фонтандарын һауаға күтәрҙеләр. Уның балсыҡтары беҙҙең землянкалар өҫтөнә яуҙылар. Беҙ барыбыҙ ҙа бөтә көсөбөҙ менән ергә

ятып, баштарҙы ҡулдар менән тығыҙ итеп ҡаплап, землянка стеналарына һыйындыҡ. Беҙҙән уҙып тағы ла бер нисә урында бер-бер артлы биш-алты бомба шартланы. Шул арала беҙҙән алыҫ түгел, беҙҙең батареялар, вууу... вуууу... итеп, ҡайҙалыр ата башланылар. Беҙ һаман ергә түш менән йәбешеп, стеналарға һыйынабыҙ. Атыу, шартлау бөттө. Юғарыла аэроплан тауыштары ла туҡталды. Тышта сыр-сыу тауыштар ишетелә башланы. Беҙ һаман да ятабыҙ.

Буранбай землянканың ишегенә барып ҡарай:

— Кешеләр урамға сыҡҡандар, — ти. Беҙ ҙә ҡурҡа-ҡурҡа ғына, әкрен генә ҡуҙғалабыҙ. Беребеҙҙең артынан беребеҙ ишек эргәһенә киләбеҙ. Йөрәктәр сығып баралар, быуындар ҡалтырайҙар. Барыбыҙҙың да төҫтәребеҙ ап-аҡ ҡағыҙ кеүек булғандар. Ирендәр кипкән, күкрәктәр ҡыҫылғандар, күҙҙәр кәртәләренән сыҡҡандар.

Бер аҙ торғас, беҙҙең сәйханаға киткән иптәштәр йүгерешеп ҡайттылар. Ҡурҡышҡандар, ап-аҡ булғандар:

— Был осҡан немец аэропландары булғандар. Шулар бомба ташлағандар. Беҙҙең сәйхананың тәҙрә төбөнә бер бомба төштө. Бөтә тәҙрәләре селпәрәмә килде. Сыуашаев шунда үлде...

— Сыуашаев үлде?!

Бөтәбеҙ ҙә һикереп торҙоҡ. Тегеләрҙән тағы ла һораша башланыҡ.

— Эйе, Сыуашаев үлде. Ул тәҙрә төбөндә ултыра ине, уның сумкаһын аҡтарып алып киткән. Ҡулына тотҡан стаканы стенаға барып бәрелде лә сәсрәп китте. Үҙе өҫтәл аҫтына йығылды. Беҙ ҙә өҫтәлдәр аҫтына яттыҡ. Беҙ тороп сыҡҡанда, ул йән биргәйне инде.

Уның сумкаһын, нәмәләрен алып уртаға ҡуйҙыҡ та бөтәбеҙ ҙә йыйылып уйға ҡалдыҡ:

— Ауылына хат яҙырғамы, юҡмы?

— Хәҙергә яҙырға ярамаҫ!

— Фронтта үлһә, бер хәл ине. Исмаһам, фронтҡа ла барып етмәне бит!

Асылған араҡылар эселмәне, консервалар ашалманы. Барыбыҙ ҙа тәмәке артынан тәмәке тоҡандырып тарта башланыҡ, хәҙер Сыуашаев тураһында һөйләмәйбеҙ, сөнки унын тураһында һөйләүе ауыр.

## ӨСӨНСӨ БҮЛЕК

Төн. Көнбайыш яғы күҙ күреме ерҙән ҡып-ҡыҙыл булып яна. Йөҙәр саҡрым һуҙылған өлкән янғындан күтәрелгән осҡондар кеүек, өҙлөкһөҙ атылған ракеталар юғары менәләр ҙә күҙҙәрҙе сағылдырып һүнәләр. Төрлө урындарға көслө нурҙарын атҡан прожекторҙар оҙон телдәре менән һауаны айҡайҙар.

һауанан алып ерҙәргә һибәләр. Ҡырҙан ҡарағанда, фронт сикһеҙ ут диңгеҙе кеүек йәйелеп ята. Өҙлөкһөҙ пытырлаған мылтыҡ, пулемет тауыштары, ҡайһы ваҡытта һирәк, ҡайһы ваҡытта бик йыш атылған туп, бомбаларҙың ярыл ыуҙары, ҡайҙалыр ерҙең емерелеүен, иҫәпһеҙ кешеләрҙең ер аҫтарында ҡалыуҙарын күҙ алдына килтерәләр.

Беҙҙе 258-се Пошехонский полкка билдәләнеләр. Ул полк ҡайҙа? Һуғышып ятамы, әллә берәй урында беҙҙең килеүҙе көтәме? — Беребеҙгә лә әйтмәйҙәр. Беҙ ут диңгеҙенә табан, өҙлөкһөҙ мылтыҡ, пулеметтар шаулаған, туптар гөрһөлдәгән яҡка барабыҙ. Төн ҡараңғы, аяҡ аҫты бысраҡ. Беҙҙе әллә юлдан, әллә соҡорҙан алып баралар, — белгән юҡ. Ҡайҙа барһаң да, аяҡ аҫтары соҡолған, ҡаҙылғандар...

Нарат урманы эргәһендәге емерелгән завод эргәһенә килеп туҡтаныҡ. Һирәк-мирәк аҙашҡан пулялар беҙҙең баш остарынан выжлап үтәләр. Һәр бер выжлаған пуляға беҙҙең бер нисәбеҙ ергә ятабыҙ.

Позиция яҡын тиҙәр. Байғужа, Новиков, Буранбай — беҙ дүртәү бергә барабыҙ. Прожектор яҡтыһы төшкән саҡта, мин уларҙың йөҙҙәренә ҡарайым. Уларҙың йөҙҙәре ҡағыҙҙан яһалған манекенға оҡшаған. Беҙ һөйләшмәйбеҙ. Беҙҙең күҙҙәр ҡыҙыл ут диңгеҙенә текәлгән, аяҡтар, беҙҙең теләктән тыш, кешеләр ағымы менән бергә шул яҡка табан атлайҙар. Беҙҙә үҙ башыбыҙ, үҙ уйыбыҙ, үҙ аҡылыбыҙ юҡ. Беҙ, гүйә, әллә ниндәй упҡын ихтыярына бирелгән йәнле ҡурсаҡтар. Беҙ шул упҡын яғына тартылабыҙ. Хәҙер, хәҙер беҙ шунда йотолабыҙ. Беҙгә ҡайтыу юҡ. Беҙгә яңынан артҡа ҡайтыу юҡ. Артта ҡалған тормош, ғүмер, үтелгән юлдар төш кеүек йәки күҙгә сағылып үткән сағым кеүек кенә күҙ алдына киләләр. Беҙҙең үҙ йәндәребеҙ юҡ. Улар күптән беҙҙән киткәндәр. Хәҙер беҙ шул төпһөҙ упҡын көсө менән, шуның магниты менән генә алға этеләбеҙ...

Беҙҙең партияла барыһы ла новобранецтар. Барыһы ла йәштәр. Беҙ позицияның ҡайҙан башланып, ҡайҙа туҡтауы тураһында бер нәмә лә аңламайбыҙ. Элек беҙ һуғышты былай уйлай торғайныҡ: бер яҡта беҙҙең ғәскәр тора, икенсе яҡта дошман ғәскәре тора. Команда буйынса атыша башлайҙар. Шунда үләләр, яраланалар. Ҡайһы яҡ күп ҡырылһа, шул яҡ еңелә, еңгән яҡ штыктар менән, ура ҡысҡырып барып, уларҙың ерҙәрен алалар була...

Бер уйпатыраҡ урынға килгәс, беҙҙе туҡтаттылар. Һәр ике һалдатка сәнскеле тимер сыбыҡтарҙан эшләнгән рогаткалар күтәрергә ҡуштылар. Беҙҙең елкәлә мылтыҡ, йөҙәр патрон; арҡала аҙыҡтар, нәмәләр менән аҫылған вещевой мешок, билдә кәрәк, подсумка, котелок, кружка һәм фляжкалар. Быларҙың үҙҙәре генә лә беҙҙең йәш, арыҡ кәүҙәләрҙе баҫалар, талдыралар. Шуның өҫтәүенә өҫтән өҙлөкһөҙ һибәләп торған ямғыр быларҙы тағы ла бер өлөш ауырлата төшә. Ҡараңғы төн, аяҡ аҫ-

тындағы баткаҡлыҡтар, һәр минут көтөлгән үлем ҡурҡыныстары беҙҙең күкрәктәрҙе тағы ла ҡыҫалар, һулыштарҙы быуалар. Шундай ауыр, шундай ҡурҡыныслы минуттарҙа, һәр аҙым, һөр һулыш һаналған секундтарҙа сәнскеле сыбыҡтарҙан уҡмаштырылған өс-дүрт ботлоҡ ауырлыҡтағы рогаткаларҙы күтәреп барырға кәрәк, имеш. Был шундай тупаҫ, аҡылға һыймаған бер приказ. Был приказды кешенең йөрәген, хәлен аңламаған йыртҡыс ҡына бирергә мөмкин.

Беҙ ул бойороҡто баштағы үҙ аңыбыҙ менән үтәмәнек. Ниндәйҙер һуҡыр бер көстөң ҡушыуы менән үтәнек. Өҫтәрҙәге нәмәләрҙең ауырлығы, алдағы ҡурҡыныс менән ҡыҫылған күкрәктәргә тағы ла рогаткалар өҫтәлделәр.

Рогаткалар яурынды баҫа, яурын һөйәген ҡырҡып төшә. Яурындағы амуницияларҙың ауырлыҡтары рогаткалар менән онотолдолар. Рогаткаларҙың ауырлығы тәрән упҡындарға тарта. Хәҙер алдағы ҡыҙыл уттар, баш осонан һыҙғырып үткән пулялар үлем алдында күренә торған шәүләләр кеүек кенә булып күренәләр. Старший унтер Кудряшов минең яңаҡтарға һуҡҡанда, күҙҙән уттар күренгәйнеләр. Хәҙер был уттар ҙа күҙҙән сыҡҡан ҡыҙыл уттар кеүек тойолалар.

Беҙгә туп-тура ҡараған прожектор нурҙары күҙҙәрҙе сағылдырҙы. Уның артынан донъя ҡап-ҡараңғы булды. Ҡапыл ғына яндағы иптәштәрҙе лә күреп булманы, күҙ һуҡырайған кеүек булды. Шуның артынан баш осонан һауаны ярып снарядтар выжлап үттеләр, беҙҙән үтеп алыҫ түгел ерҙә ер һелкетеп ярылдылар. Команда булды:

— Таралығыҙ! Ятығыҙ!..

Беҙ, йәшендән өрккән һарыҡтар кеүек, йүгерешеп таралдыҡ, ҡайҙа тура килде, шунда яттыҡ. Кәләкәтле көстәр менән снарядтар бер-бер артлы ярылалар, төрлө урындарҙа ярылған снарядтарҙың көстәренә ер бәүелә, ыңғыраша. Гүйә, беҙ сикһеҙ, төпһөҙ диңгеҙ өҫтөндә ваҡ, бик ваҡ юныҫҡылар кеүек йөҙәбеҙ, йәки, көслө дауылдарҙа осҡан ҡамғаҡтар кеүек, күтәрелеп барабыҙ, йәки, тәрән һыу төбөнә, ҡараңғылыҡҡа төшкән ваҡ ҡомдар кеүек, төпкө, тәрәнгә ҡойолабыҙ, бер хәрәкәт, бер нәмә, бер үлән беҙҙең ихтыярыбыҙҙа түгел. Хәҙер минең эргәлә кешеләр юҡ. Ниндәйҙер һоро түмгәктәр ут яҡтыһында минең күҙгә салынып ҡалалар. Ауыр снарядтар баш осонан түбәнгә үткән саҡта, үҙенең һөйләргә мөмкин булмаған көсө менән һауаны ярып үткәндә, уның, ҡорос кеүек, һауаны ҡырҡып үткән әсе тауышы үҙе менән йәнде бергә алып китә. Ул артта ярылған саҡта, тупраҡ фонтаны менән бергә йән дә күтәрелгән кеүек була, бер нисә секундтан һуң тағы ла үҙеңдең барлығыңды һиҙәһең...

Бер аҙҙан атыу туҡталды. Прожектор яҡтыһында күренгән һоро түмгәктәр һаман ҡуҙғалмайҙар. Мин дә ҡуҙғалмайым, күҙемдең ҡыры менән генә түште ергә терәп ятҡан килеш

ҡарайым. Әллә үлгән кешеләр, әллә туптар аҡтарып ташлаған балсыҡ өйөмдәре... Хәҙер мин йүнәлеште белмәйем: фронт алдамы, арттамы?.. Төрлө яҡтан өҙлөкһөҙ һуҙылған прожектор нурҙары күҙҙәрҙең ҡараштарын үҙҙәренә йүнәлтәләр ҙә, улар һүнгән саҡта, күҙҙәр дөм һуҡыр булып торалар.

Хәҙер мин яңғыҙ. Ҡайҙа барырға? Ҡайҙа юл алырға? Һис мөмкин түгел. Алыҫта туп тауыштары ишетеләләр. Мылтыҡ, пулемет өҙлөкһөҙ әшләй. Аҙашҡан пулялар баш осонан үтеп, әллә ҡайҙарға сумалар. Бер аҙҙан взвод командиры Шишков йүгереп уҙҙы. Команда бирә:

— Таралышып, имгәкләп алға шыуығыҙ! Бында ҡалҡыу урын. Прожектор күҙе күрмәһен!

Күп түмгәктәр ҡалҡалар. Хәҙер артта ыңғырашҡан тауыштар ишетелә, улар бер нисә урында ишетеләләр... Иптәштәр иҫкә төшәләр: Байғужа, Буранбай, Тимеров, Юлдашев һәм башҡалар... Ыңғырашҡан тауыш, ниңәлер, Байғужа тауышына оҡшай. Мин шул яҡҡа ҡарап шыуышам. Тауыш яҡын, ләкин табып булмай. Өйөлгән балсыҡтар, соҡорҙар ҡамасаулыҡ итәләр. Теге тауыш соҡор эсенән ишетелгән кеүек була. Соҡорға төшәм. Уның эсе һыу, кире сигенәм. Тауыш яҡын. Ләкин ҡайҙалыр ыңгыраша. Унан алыҫ түгел тағы ла бер тауыш ишетелә. Ҡайһы яҡҡа барырға белмәйем... Тағы ла прожектор яҡтыртты. Уның артынса күҙ һуҡырланды. Ергә йәбешеп бик оҙаҡ яттым. Тағы ла тыңлайым. Теге тауыш хырылдап ишетелә башланы. Тағы ла шыуыштым. Ул минең артта ишетелә башланы. Кире әйләндем. Минең ҡул тупраҡлы шинелгә тейҙе. Нығытыбыраҡ ҡараһам, ярты кәүҙәһе тупраҡ менән күмелгән бер кеше ята. Ул тас салҡан яткан.

— Ранен булдыңмы? Ҡайҙан ранен булдың? — тип әкрен генә һорашам. Ул ыңғыраша, һүҙен әйтә алмай. Башын һыйпап ҡараным. Ҡул еүешкә тейҙе. Прожектор яҡтыртҡанда, мин уның йөҙөнә ҡараным. Тупраҡ баҫҡан йөҙҙәре ҡан менән һылашҡан. Танауы күренмәй, бер күҙен ҡан менән бергә тупраҡ ҡаплаған. Бер күҙе йомолған. Фляганы табып, ауыҙына һыу һалдым. Ул уны йотманы. Һыуҙар ирендәренән ауыҙ ситенә ҡойолдолар. Ул хәҙер ыңғырашмай, күкрәктәрен ныҡ ҡалҡытып хырылдай... Ул һуңғы минуттарын үткәрә.

Алда команда тауышы ишетелә. Кемдәрҙер ҡуҙғалып алға баралар. Мин дә улар артынан китәм. Ләкин иптәштәремдең береһе тураһында ла хәбәрем юҡ. Һәр кем алға бара, бер кем бер кем менән дә һөйләшмәй. Бер аҙҙан һуң емерелгән таш стеналар буйына килеп йыйылдыҡ. Хәҙер пулялар беҙгә бик йыш киләләр. Беҙгә ошонда ышыҡланып торорға, ҡысҡырып һөйләшмәҫкә, тәмәке тартмаҫҡа ҡушалар. Ләкин берәүҙең дә башында һөйләшеү, тәмәке тартыу уйы юҡ, берәүҙең дә башында үҙ аҡылы, үҙ уйы юҡ. Улар артта, снаряд соҡорҙары араһында ҡалғандар, ҡара ер фонтандары менән һауаға осҡандар.

Минән алыҫ түгел Новиков тауышы ишетелә. Мин шул яҡҡа барам. Байғужа ла, Буранбай ҙа Новиков эргәһендә. Мин барып Новиковтың еңенән тартам. Ул аңра кеше кеүек миңә оҙаҡ ҡарап тора:

— Нин иҫәнме?

— Эйе...

Башҡа һүҙ юҡ, бергә өйөлөшәбеҙ. Ул арала команда була. Берәм-берәм стена буйынан түбән төшәләр. Беҙ бер-беребеҙгә тағылып кешеләр артынан китәбеҙ. Бер аҙ барғас, тар канауға төшәбеҙ, беҙгә эйелеп барырға ҡушалар. Канау эсе тубыҡтан һыу. Күп урыны тайҙыра. Тайған саҡта котелоктар шалтырайҙар. Канауҙың ҡайһы ере тәрән, ҡайһы ере һай. Хәҙер ракеталар яҡынайҙылар. Бер-бер артлы күтәрелгән ракеталар канау эсен көндөҙгө кеүек яҡтырталар. Пулялар баш осонан выжлап үтеп торалар.

Ҡапыл ут асылды. Өҙлөкһөҙ пулеметтар эшләй башланылар. Пулялар, көслө ямғырҙар кеүек, баш осонан ағыла башланылар. Улар еңел снарядтар менән бергә оҙатылдылар. Беҙ тағы ла һыулы канауҙарға һуҙылып яттыҡ. Баш осонда шрапнелдәр ярылалар. Еңел снарядтар, канауҙың алдына һәм артына өҙлөкһөҙ төшөп, ерҙәрҙе аҡтаралар ҙа, уларҙың ярсыҡтары төрлө тауыштар менән ситкә һибеләләр. Снаряд көсө менән һауаға күтәрелгән batҡаҡтар, боҙ ямғыры кеүек, өҫтәргә яуалар. Өҙлөкһөҙ ярылған туптарға еүеш канауҙар ишеләләр. Ерҙәр бәүеләләр. Науалар шомло тауыш менән һыҙғыралар.

Бер аҙҙан пулеметтар, туптар тағы ла тындылар. Һирәк атылған мылтыҡ тауыштары ғына ҡалдылар. Ләкин ракеталар һауала йөҙәләр, нур сәсәләр. Беҙ тағы ла канау буйлап алға атланыҡ. Бер йылға буйына төштөк. Йылға буйында канау юҡ. Уның тәпәшәк кенә яры буйлап өйөлөшөп алға барабыҙ, яр буйында ташланған мылтыҡтар, үлгән аттар, кеше кәүҙәләре күренәләр. Әкрен генә тар һыуҙың баҫмаһына сыҡтыҡ. Немецтар, белгән кеүек, баҫмаға аталар. Пулялар выжлап торалар. Баҫма тирәһендә егермегә яҡын үлгән һалдаттар яталар. Күрәктәр менән биттәрҙе ҡаплап баҫманан сыҡтыҡ та тағы яр һәм һирәк ағаслыҡтар араһынан уң яҡҡа киттек. Бер аҙ барғас, тағы ла тәрән канауға төштөк. Канау буйында, аҙым һайын тип әйтерлек, үлек кәүҙәләр осрайҙар. Улар һыу эсендә яталар. Беҙ уларҙы тапап уҙабыҙ.

Шул канау буйлап, өҫтөнә тоҡтар өйөлгән окопҡа килеп еттек. Был алғы позиция ине. Беҙҙе роталарға, взводтарға бүлделәр. Беҙ биш кеше айырылышманыҡ. Етенсе ротаның икенсе взводында ҡалдыҡ. Беҙҙе эсенә ҡомдар тултырылған тоҡтарҙан яһалған блиндажға индерҙеләр.

— Бөгөнгә дежурить итмәҫһегеҙ, ял итегеҙ! — тинеләр. Өшәләккә ҡамалған ҡуяндар кеүек ҡурҡып, бөршәйешеп, блиндаждың төпкөлөнә инеп ултырҙыҡ. Һис өҙлөкһөҙ мылтыҡтан

аталар. Окоп эргәһендә бомбалар ярылалар. Вaҡыт-ваҡыт пулеметтар ҙа таҡылдап ала. Беҙҙең окоп тапҡырынан немецтарҙың ауыр снарядтары геүләп, артҡа, беҙ килгән яҡҡа осалар. Беҙҙең яҡтан килгән снарядтар ҙа немец окобына табан уҙып ярыла.

Блиндаждың эсе һыу. Ергә ултырһаң, артҡа һыу үтә. Шул сәбәпле сүкәйеп кенә ултырабыҙ. Һәр бер шартлаған бомба, һәр бер баш осонан уҙған снаряд беҙҙең блиндажға төшөр төҫлө. Һөр береһендә күҙҙәрҙе йомабыҙ, тоҡ стенаға нығыраҡ һыйынабыҙ. Һөйләшкән юҡ. Тамаҡтар кипкән, һыу һораған юҡ.

Алғы дозорҙан ҡайтҡан бер һалдат беҙҙең блиндажға килеп инде:

— Әллә яңылармы? — тине. Беҙ:

— Шулай, — тинек. Ул әкрен генә тәмәке тоҡандырҙы. Һөйләнә башланы:

— Бына бер ай була инде, ошо позицияла ятабыҙ. Бында бик ҡаты һуғыш булды. Ике-өс көн генә элек немецтар ике тапҡыр атакаға килделәр. Беҙҙекеләр кире ҡайтарҙы. Был бик әшәке урын. Ход сообщениеһы уңайһыҙ. Кухня килә алмай, һалдаттар асығалар. Артҡа аҙыҡҡа барған кешеләрҙең күбеһе һау ҡайтмайҙар. Әле генә немецтар ике тапҡыр бик мул күстәнәс ебәрҙеләр. Моғайын, һеҙҙе ҡаршылағандарҙыр әле. Булыр ул, булыр.

Уның һалҡын ҡан менән шундай фажиғәле күренеште ябай бер ваҡиға итеп кенә, әкрен генә һөйләүе беҙҙең өсөн бик ят тойолдо. Гүйә, ул ошо окоп эсендә пулялар, снарядтар араһында тыуған да, уға бер нәмә лә булмай: уға пуля ла теймәй, уны снаряд та алмай. Ул ошо тормош өсөн генә яралған. Беҙ уның һүҙенә ҡатышмайбыҙ. Сөнки беҙҙә телдәр юҡ. Улар бәйләнгәндәр. Улар һөйләмәйҙәр. Теге ҡарт һалдат беҙҙән ашарға һораны:

— Һеҙ арттан килгәнһегеҙ, берәр һыныҡ икмәгегеҙ юҡмы? — тине. Новиков сумкаһын аҡтара башланы. Теге һалдат шырпыһын сыйып яҡтыртты. Беҙгә берәм-берәм ҡарап сыҡты:

— Йәштәр, йәштәр икәнһегеҙ... — тине. Новиков уға ҙур киҫәк икмәк бирҙе. Уның рәхмәтенә ҡаршы Новиков тарафынан шулай уҡ бер һүҙ әйтелмәне. Теге ҡарт икмәкте ашап бөттөмө, юҡмы, әллә беҙ тыштағы дәһшәтле гөрһөлдәүҙәргә ҡарап һиҙмәнекме — ул хырылдап йоҡоға китте. Гүйә, уның өсөн бөтә урында тыныслыҡ. Гүйә, тышта яуған пулялар, осҡан ауыр снарядтарҙа теге һалдаттың эше юҡ. Ә беҙ һәр бер һыҙғырған пуляны, һәр бер өҫтән үткән снарядты бөтә ҡурҡыныcы менән эстән кисерәбеҙ.

Ер ыңғыраша, һауа шомло тауыш менән һыҙғыра...

## ДҮРТЕНСЕ БҮЛЕК

Польша яланы, Урал яланы кеүек, ҡатлы, ҡалын тиреле түгел. Йоҡа тиреле кеше кеүек, бер сиртһәң, ҡаны сыға: бер ауыр снаряд соҡор ҡаҙыһа, ҡоҙоҡ сыға, бер метр окоп ҡаҙыһаң, һыу сыға. Ҡыш булһа, ярты аршын, бер сирек тәрәнлектән дә һыу сыға. Шуның өҫтәүенә өҙләкһеҙ яуған ямғыр ер өҫтөн һыу менән күпсетә.

Бына беҙ шул урында окоп ҡаҙып, немецтарға ҡаршы позиция тотоп ятабыҙ.

Йылдың һәр сезонына ҡарап, хайуандар, йәнлектәр төҫ алыштыра белә, тиҙәр. Еренә, урынына ҡарап, окоптарҙы ҡаҙырға ла хәйләһен тапҡандар. Немецтың һуғыш техникаһы, окоптың насарлығынан файҙаланып, рус һалдаттарын күп ҡырған. Атака саҡтарында ул өлөш тағы ла ике тапҡыр артҡан. Ул факт рус ғәскәре өсөн, бер яҡтан, сәлби[1] һөҙөмтә бирһә лә, икенсе яҡтан, ижади һөҙөмтә тыуҙырған. Рус һалдаттары араһынан ниндәйҙер бер ихтирағсы[2] табылған. Ул тегендә, бында тәгәрәп ятҡан үлектәрҙе тере кешеләрҙе һаҡлау өсөн ышыҡ итергә мөмкинлек тапҡан. Бының өсөн тәбиғәттең дә ҡулай моменттары бар: Польша ҡышы — көндөҙ ҡарлы ҡатыш ямғыр яуа, кис менән һыуыҡ төшкәс, ул ябалаҡ ҡар киҫәктәренә әйләнә, ер туңа, батҡаҡтарҙы ла туңдыра. Көндөҙ тағы ямғыр яуып, ер өҫтөн бысрата... Һауа шулай бара.

Шул һауаның төрлө моменттарынан файҙаланырға мөмкин. Шул мөмкинлекте файҙаланғандар: һәр кис үлектәрҙе ташып, ике рәт итеп һалғандар ҙа, шуларҙың араһына батҡаҡ тултырғандар. Ул төнгө һалҡында таңға тиклем туңған. Уны тағы өҫтәгәндәр, тағы ла өҫтәгәндәр... Һәр көн өҫтәлә тора, һәр көн туңа тора. Ул кеше эйелеп йөрөрлөк стена-окоп булған. Һуңға табан полотноларҙан тоҡ тектереп, уларҙың эсҭәренә батҡаҡ тултырып, шул тоҡтарҙан окоп өйә башлағандар.

Беҙҙең яҡтан окоп һәм уның блиндаждары шул ике төрлө материалдан тора ине.

Шуға күрә, окоптың төп нигеҙендә кешеләр — йәғни үлек кәүҙәләр яталар. Уларҙың ҡайһылары ҡабырғалары менән, ҡайһылары арҡалары менән, ҡайһылары йөҙҙәре менән яталар. Ләкин үлек кәүҙәләрҙең береһе лә позициялағы һалдаттарға ерәнеү яғынан да, ҡыҙғаныу яғынан да әҙ генә, бик әҙ генә лә тәьҫир итмәйҙәр. Еүеш балсыҡ менән бергә туңған күп баштар окоптың эс яғына ҡарап яталар. Уларҙың күҙҙәренә, танауҙарына тупраҡ тулған, ауыҙҙары асыҡ ҡалған. Шул асыҡ ҡалған ауыҙҙарҙа ҡайһы һалдаттарҙың ҡашыҡтары тора. Әгәр ҙә

[1] ***Сәлби*** — кире, насар.

[2] ***Ихтирағсы*** — уйлап табыусы, асыш яһаусы.

окопҡа аш килһә, шул ҡашыҡ менән аш ашай ҙа, тағы ла шунда ҡыҫтырып ҡуя. Күп кешеләр тәмәке төргән саҡта, тәмәке янсыҡтарын шунда ҡуйып торалар. Ашаған ваҡытта икмәктәрен шунда ҡуйып торған кешеләр ҙә бар. Үлек башына баш ҡуйып йоҡлау бик ябай күренеш. Сөнки, ҡыш көнө атака һуғыштары булмаһа ла, немец пуляһы, немец бомбаһы, немец снаряды менән һәр көн һалдаттар үлеп торалар. Уларҙы күмеүсе лә, ташыусы ла юҡ. Кәрәкмәгән тиреҫ кеүек, улар һәр кис окоп өҫтөнә ташланалар. Алғы окоп тирәһендә иң күп нәмә: патрон гильзалары, обоймалар, ташланған мылтыҡтар һәм үлгән һалдаттар. Улар йәйге үлән, ҡышҡы ҡар кеүек ябай, иң ябай күренештәр. Һуғышта һалдат үлеме туғайҙа сабылған бесән бөртөктәре тиклем дә тәьҫир бирмәй. Ләкин үҙең менән бергә йөрөгән, бергә ашаған, фронт ауырлығын бергә кисергән иптәштәрең үлһә, ул онотолмай, уға ҡалай ҙа булһа хөрмәт итке килә. Больница алдында дозор булып торғанда беҙҙең иң яҡын иптәшебеҙ Тимеров башы яраланып үлде. Беҙ уны окоп өҫтөнә ташлап ҡуйҙыҡ. Ул шунда ун көн ятты. Бер тынысыраҡ саҡта, командирҙан рөхсәт алып, төндә беҙ уны күтәреп алып киттек. Окоптан өс саҡрым артҡа алып барып, ҡәбер ҡаҙып, шунда күмдек. Арабыҙҙа шағирҙар ҙа табылды. Бер таҡтаға химик ҡәләм менән шундай шиғыр яҙып ҡуйҙыҡ:

Һин ҡотолдоң ҡанлы, һалҡын
Һәм әшәке донъянан;
Ал мине лә үҙ яныңа,
Бында юҡ шатлыҡ вә йәм...

Был шиғыр барыбыҙға ла оҡшаны. Ләкин тәрән тәьҫир ҡалдырманы. Таҡта янынан киткәс, ул юлдарҙың бөтәһе лә онотолдолар.

Беҙҙең арала үҙ иптәштәребеҙҙе былай күмеү беренсе һәм аҙаҡҡы тапҡыр булды. Был — окопта беренсе көндәр ине, һөжүмһеҙ, атакаһыҙ көндәр ине.

Был дәүер — атака һуғышынан окоп һуғышына киткән беренсе дәүер ине. Шуға күрә лә һәр яҡ һәр хәрәкәт өсөн күҙ асҡыһыҙ ут аса ине. Төн булһа, мылтыҡтан һәм пулеметтан өҙлөкһөҙ атыш дауам итә. Дежур сағында һәр һалдат төндә өс йөҙ, дүрт йөҙ патрон атырға мәжбүр була ине. Рус винтовкаһы — Польшалағы ҡомло окоп өсөн иң уңайһыҙ винтовка. Уның затворы асыҡ; һәр ваҡыт уға ҡом тула. Ҡом тулһа, уның затворын асыу, ябыу әше атҡан һайын ауырая. Бара-тора ул эшләмәй башлай. Мылтыҡтарҙы таҙартырға шомпол юҡ, май юҡ. Шул арҡала күп мылтыҡтар окоп башына ташланалар йәки блиндаж түбәһенә арҡыры-торҡоро һалынып, өрлөк ролен уйнайҙар. Йыйнап әйткәндә: окоп тулы мылтыҡ, атырға мылтыҡ юҡ.

Ләкин үлек күп. Немецтың һуғыш техникаһы беҙҙең һанһыҙ һалдатты молотилка барабаны кеүек ашай, йота. Килгән бер өҫтәмә ғәскәрҙе окоп шартында тәртипле рәүештә ҡырып, һепереп тора...

Беҙ хәҙер инде алғы позицияла, ике ай шул шарт эсендә йәшәйбеҙ: окоп эсе тубыҡтан һыу, көн-төн атыш, йылы аш юҡ, күберәк ваҡыт ас.

Ләкин беҙҙең блиндаж халҡы күберәк ваҡыт бәхетле саҡтар үткәрә: Байғужа менән Новиков артҡа китәләр. Төндә позицияға килгән кухняны беренсе улар осраталар. Шуның өҫтәүенә улар, ҡайҙалыр ауылдарға барып, һуғыш арҡаһында крәҫтиәндәрҙең күҙ йыйылмай ҡалған картуфтарын табып, ҡаҙып күтәреп ҡайталар, бер ваҡыт улар икеһе ҡайҙандыр ҙур-ҙур түшәктәр күтәреп килгәндәр. Беҙ уларҙы блиндаждың еүеш иҙәненә матрац итеп түшәнек. Ул төн беҙҙең йоҡо айырыуса тәмле булды:

— Офицерҙарга бындай йомшаҡта ятыу ҡайҙа ул! — тип, маҡтанып ҡуйҙы иртәгеһенә Новиков.

Беҙҙә обед һәр ваҡыт мул була. Уның өҫтәүенә картуф бешкән саҡ булһа, беҙҙең рота командиры подпоручик Васильев килә. Ул килһә, беҙҙең Новиков картуфтың ҡабығын тантаналы рәүештә әрсеп, тоҙға манып, ҙур итеп ҡаба ла уны айырым бер ләззәт менән сәйнәй башлай. Картуф ҡабығын Васильевҡа табан ырғыта.

Васильев күберәк ваҡыт ас. Уның ике денщигы аҙыҡ килтергәндә юлда яраланғандар. Өсөнсө денщигы, ҡарт запас һалдат, төрлө һылтау табып, окопҡа, үҙенең барины эргәһенә, һирәк килә. Һалдаттар үҙҙәренең пулялар аҫтынан алып килгән ашын бер ваҡытта ла командирға бирәсәк түгелдәр. Шуға күрә ул ас. Һәр бер һалдаттың ашағанын ул йотоп ултыра. Үҙе ашамаһа ла, ит консерваһынан бешергән ашты маҡтай:

— Консерванан бешергән аштың һурпаһы тәмле була ул, — тип һөйләнеп ултыра. Новиков подпоручик Васильевтың шул моментынан файҙаланып, унан көлә, уны мыҫҡыл итә. Әгәр ҙә беҙҙең эргәнән китһә:

— Ана, маъмай китте! — тип, башҡаларҙы көлдөрөп ала. Бик асыуы килгән ваҡытта ярым көлкө менән:

— Ваше благородие, һеҙгә асҡа үлеүе ҡыйын булыр, бик оҙаҡ аҙап күреп үлерһең, әллә окоптан сығып маңлайыңды тотоп тораһыңмы? Әллә үҙем генә бер пуля ебәрәйемме? — тип уға бәйләнә башлай. Подпоручик Васильев уға асыуланмай, нисек тә булһа Новиковтың һүҙен уйынға борорға тырыша.

Ә подпоручик Васильевтың сәстәрен ҡараһаң, һарғылтланып ағарып тора. Яҡыныраҡ барып ҡараһаң, һәр бер сәс бөртөгөндә ваҡ ҡына төймәләр кеүек теҙелгән бет, һеркәләр йәбешкән булалар. Башта уның сәстәре ҡуңыр булған, хәҙер теге иҫәпһеҙ һеркәләр арҡаһында һарғылт аҡ төҫкә әйләнгән. Йәшкелт төҫ-

тэге офицер погоны ғәскәри докторҙар таға торған аҡ уҡа погон түшенә ингәндәр. Һыуығыраҡ көндә уның елкәһенә ҡараһаң, унда теге мәхлүктәрҙең мыжғырлап торған донъяһын күрәһең. Һалдаттар, теге мәхлүктәр бик тынысһыҙлай башлаһалар, күлдәк-ыштандарын утҡа тоталар. Ә ул был турала сара ла күрмәй. Окопҡа ингәндән бирле күлдәк, ыштандар иңдән һалынғандары юҡ. Шуға күрә лә теге мәхлүктәр подпоручик Васильев кейемдәрендә ҡурҡыныcһыҙ, көрәшһеҙ, тыныс, рәхәт йәшәйҙәр. Тоҡомдарын үрсетәләр.

Беҙҙең отделениеға бер көн ун йәшлек бер доброволец малай килде. Уның артынса подпоручик Васильев бик асыҡ йөҙ менән генә килеп:

— Һеҙ инде доброволец Тимашевты үҙ звеноғыҙға алығыҙ. Ул бик йәш, һеҙ боевой һалдаттар. Һеҙҙең арала уға күңелле лә булыр, — тип беҙҙең блиндаж алдына ултырҙы. Тимашев бик йәш, ҡыҙҙар төҫлө бер малай. Тауышы нәҙек, биттәре саф, күҙҙәре сабыйлыҡтан да сығып бөтмәгән. Хәйләһеҙ ҡарайҙар. Э бармаҡтары, ҡыҙҙар бармағы кеүек, нәҙек һәм нәфистәр. Уның түшенә һәм ҡулдарына ҡарағанда, үҙ ғүмерендә ул ауыр эш тотмаған. Ләкин ул бармаҡтар менән мылтыҡ тоторға, уның менән атырға ҡалай өйрәнгәндер, беҙ уға барыбыҙ ҙа ғәжәпләндек. Ул, беҙҙең блиндажға ингәс тә, бөтә нәмәләргә ҡарап сыҡты. Һәр береһе тураһында һорау бирҙе. Бирелгән яуаптарҙы артыҡ бер ғәжәпләнеү менән тыңланы. Шунан һуң ул сумкаһынан бик күп ашамлыҡтар сығарҙы: колбаса, сусҡа майы, ветчина, аҡ май, печенье, кәнфит һәм башҡалар. Берәр киҫәк май, колбасалар менән барыбыҙҙы ла һыйланы. Подпоручик Васильевҡа бик күп кенә итеп ҡырҡып сусҡа майы һәм колбаса бирҙе.

Ул кис Тимашев беҙгә бик күп әңгәмәләр һөйләне. Үҙенең бер сауҙагәр балаһы булыуын, гимназияла уҡыуын, атаһы яратһа ла, үгәй әсәһе менән тыныша алмауын, шул арҡала доброволец булып һуғышҡа килеүен оҙон һәм күңелле итеп хикәйә итте. Ул беренсе тапҡыр окопҡа килеүгә ҡарамаҫтан, яҡын ярылған снарядтарға, выжлап осҡан пуляларға, йөрәк ярғыс итеп окоп алдында ярыла торған бомбаларға бик артыҡ иҫе китмәне. Тормош ауырлығы күрмәй үҫкән бер сауҙагәр малайының ҡапыл шундай ауыр окоп тормошон һалҡын ҡан менән ҡаршы алыуына, уға бик тиҙ арала үҙләшеүенә иҫебеҙ китте. Уға һорауҙар биргеләнек:

— Нисек йәш башың менән бында ҡурҡмай килдең? Үлемдән ҡурҡмайһыңмы?

— Юҡ, ҡурҡмайым, миңә барыбер, — ти. Ул турала башҡаны һөйләмәй. Новиков күп ваҡыт уны мәрәкәләй:

— Һин бит яҡшы бүлмәлә, йомшаҡ карауатта йоҡлай торған, шоколадлап, вареньелап сәй эсә торған, кеҫәңә һәр ваҡыт кәнфиттәр тығып йөрөй торған малай бит! — ти. Ул Новиков-

тың мәрәкәләүенә бер ваҡытта ла яуап ҡайтармай, һүҙгә лә килмәй, көлә лә ҡуя. Новиков артығын ебәрә башлаһа:

— Ҡуй инде, Новиков! — ти. Уға дүрт-биш көндә бер посылка килә. һәр посылкала сусҡа майы, колбаса, кәнфит һәм башҡалар булалар. Подпоручик Васильевҡа дүрт-биш көндә бер йүнле обед алып килмәйҙәр. Ә Тимашевҡа посылканы килтереп тапшыралар. Беҙ уға:

— Атайың риза булмағас, ул нисек итеп һиңә посылка ебәрә? — тибеҙ. Ул йөҙҙәрен көлдөрөп:

— Минең бер апайым бар. Ул бик бай кейәүҙә тора. Ул мине ярата, ҡыҙғана. Посылкаларҙы ла шул ебәреп тора, — ти.

Ләкин килгән посылкаларҙы бер ваҡытта ла үҙе генә ашамай, барыбыҙға ла өләшә. Алмаһаҡ, көсләп, үпкәләп алдыра. Беҙҙең бәхеттән бөтә батальон һалдаттары көнләшәләр:

— Бәхет, малай, һеҙҙең... Ҡайҙан һеҙгә уңай килеп тора. Һеҙҙең кеүек, окопта офицерҙар ҙа тора алмайҙар бит.

Былай ҙа беҙҙең звенола күңелле халыҡтар. Тимашевтың күстәнәстәре беҙгә тағы ла көрлөк бирә. Күп ваҡыт яҡшы папиростар тарта башланыҡ. Башҡалар махоркаға аптырайҙар. Беҙ яҡшы папиростан таныш һалдаттарға «ҡырҡты» ҡалдырабыҙ. Аҙ таныштарға «егермене» ҡалдырабыҙ.

Тимашев килгәндән һуң беҙҙең йәшәү шулай китте. Ләкин беҙҙең Байғужа уны баштан уҡ яратманы. Тимашев кешегә артыҡ бәйләнә: артыҡ күп һорауҙар бирә. Байғужа уға бер ваҡытта ла яуап бирмәй: «Выж үҙ юлыңа!» — ти ҙә ҡулын ғына һелтәй. Бер көндө Байғужа минән хат яҙҙыра. Ул һөйләй, мин яҙам. Беҙ уның менән хат яҙғанда бөтә ағай-энеләргә хат яҙабыҙ, бөтә ағай-энеләрҙең хәлдәрен һорашабыҙ, һуғышта йөрөгәндәрҙе, һалдатҡа алынғандарҙы ҡабат-ҡабат хатҡа яҙырға һорайбыҙ. Бөтә баштан кискәндәрҙе, окоп тормоштарын яҙабыҙ. Беҙҙең хат һөр ваҡыт биш-алты бит була. Беҙҙең полкта Минзәлә, Бөгөлмә, Боғоруслан, Бәләбәй яғынан килгән һалдаттар байтаҡ ҡына. Позицияла тынысыраҡ ваҡыт булһа, һауа матур булһа, улар ҙа беҙгә киләләр, хат, адрес яҙҙыралар. Ул ваҡытта беҙҙең арала һүҙ күп була. Тимашев башҡортса белмәһә лә, һәр ваҡыт беҙҙең яҙғандарҙы ҡарап, һөйләшкәндәрҙе тыңлап ултыра. Күп ваҡыт һүҙгә ҡыҫыла:

— Ни турала яҙаһығыҙ, ни турала һөйләйһегеҙ. Мосолман телен миңә лә өйрәтегеҙ әле? — тип теңкәгә тейә башланы. Уның һүҙенә аҙ ҡолаҡ һалалар. Ҡайһы ваҡытта Байғужа уға башҡортсалап:

— Һин ҡойошҡанға ҡыҫылған ат тиҙәге! Мишайтлама әле! — тип уның күкрәгенән этеп урынына ултырта. Тимашев уның һайын Байғужаға бәйләнә:

— Ни әйттең? Ни һөйләйһең, руссаға тәржемә ит әле? — ти. Унан һуң башҡаларҙан Байғужа һүҙҙәренең тәржемә ителеүен һорай. Уға бер кем дә яуап бирмәй. Байгужа ауыҙ эсенән генә мығырлана:

— Һугыш булһа, был малайҙы бер пуля менән генә сәңгелдәтәм инде, — тип ҡуя, асыуланып ҡырға ҡарап ултыра башлай.

Бер ваҡыт шулай марттың йылы ҡояшында Байғужа менән икәү генә ултырабыҙ. Австрия фронтындағы бер ауылдашҡа хат яҙабыҙ. Хатта фронт хәлдәрен хикәйә итәбеҙ. Күрәһең, боҙ окоп, снаряд, мир тигән һүҙҙәрҙе ҡабатлағанбыҙ. Беҙҙән алыҫ ҡояшҡа ҡыҙынып ултырған Тимашев беҙҙең эргәгә килде:

— Беҙ һуғыш, окоп, мир тураһында һөйләйһегеҙме әллә?.. — тип, нимәлер һорашырға уйланы. Тын ғына ултырған Байғужа ҡапыл күтәрелде. Бер секунд үтмәне, Тимашев, осоп барып, окоп эргәһенә тәгәрәп ятты. Ул арала нескә, балалар тауышы менән Тимашев шыңшый башланы:

— Йыртҡыс! Варвар!.. Вәхши!..

Мин Тимашевты күтәреп алдым. Уның ауыҙынан ҡан килә ине. Байғужа бүре кеүек әкрен генә блиндажға инде. Новиков йүгереп Тимашев эргәһенә килде:

— Тимашев? Ни булды һиңә?

— Тоҡтомалға Байғужа һуҡты.

— Бына нәмә, моғайын, телеңдән тапҡанһыңдыр. Ярар, былай булғас, һиңә Георгий тәреһе яҙырбыҙ, — тип көлдө. Тимашев ауыҙындағы ҡандарын, күҙендәге йәштәрен һөртөп, блиндаж эргәһенә килеп ултырҙы. Байғужа блиндаж эсендә һаман мығырланып һүгенә ине.

Кискә табан немецтар әллә нисә батареянан беҙҙең артҡы линияға ҡарай ут астылар. Беҙҙең полк штабы тирәһенә еңел снарядтар төшәләр, ауыр снарядтар алыҫ-алыҫҡа барып ярылалар. Бер аҙҙан һуң беҙҙең алғы линияны ла еңел снарядтар иләп алдылар. Байтаҡ һалдат ранен булды. Үлгәндәре лә бар ине. Ләкин алғы окопҡа атыу тиҙ туҡталды. Артҡа атылған артиллерия командаһы өҙлөкһөҙ дауам итте. Кискә табан ул тағы көсәйҙе. Һалдаттар немецтарҙың кискә һөжүм башлауҙары ихтималын һөйләй башланылар. Бөгөн Байғужаның уйламағандан теле асылды. Ғүмерендә һүҙ башлап һөйләмәгән кеше бөгөн һүҙ башланы:

— Март айында мир була тип һөйләйҙәр ине. Былай булғас, булмаҫ инде, — тине. Байғужаның был һүҙе Новиковҡа тәьҫир итте буғай, ул ҡапыл тоҡанды. Иң башта ун ҡатлы итеп һүгенеп алды. Уның күптән бирле улай һүгенгәне юҡ ине. Шунан һуң һүҙгә башланы. Өҙлөкһөҙ баш осонан үткән ауыр снарядтар тауышына күрһәтеп:

— Ана мирҙар осалар. Беҙгә тигән мирҙар шулар ул. Һин мир тигән булаһың, Байғужа! Беҙгә мирынан да, һуғышынан да файҙа юҡ. Беҙгә мир, ана күргәнең бар бит, туғандар ҡәберен — шунда. Унда күмелһәк ярай әле. Беҙ бына ошонда окоптар аҫтында хәбәрһеҙ-ниһеҙ күмелеп ҡалырбыҙ әле. Эҙме ни беҙҙең браттар күмеләләр? Хәйер, барыбер инде. Шулай ул,

һуғыш та, мир ҙа беҙҙең өсөн түгел. Уларҙың барыһы ла генералдар, байҙар өсөн... Беҙгә ни. Беҙҙең бер табан еребеҙ юҡ. Бөгөн бында, иртәгә унда... Беҙ бит ябай үлем кешеләре, пушка ҡорбандары!..

Тимашев айырым бер иғтибар менән Новиковтың ауыҙының аҫтына барып, уның һүҙен тыңланы. Байғужа бик ауыр һулап:

— Дөрөҫө шулай инде уның... — тип ҡуйҙы. Новиков тағы нимәлер һөйләмәксе ине. Беҙҙең окоп алдына бер снаряд төштө. Беҙҙең окопты тупраҡтар менән тултырҙы. Юғарыға саң бурандары күтәрелде. Блиндаж һелкенде. Һауала выжлап осҡан снаряд ватыҡтары гөпөлдәп ергә төшә башланылар. Беҙ йәшен тиҙлеге менән блиндаждарға йәшерендек.

Ҡараңғы төшөр алда подпоручик Васильев килде, Тимашевҡа өсмөйөшлө пакет бирҙе:

— Ошоно бик ашығыс рәүештә полк командирына илт! — тине. Шатлығынан Тимашевтың күҙҙәре уйнаны. Беҙгә аҙыҡтарын өләшә башланы.

— Килгәс, үҙеңә кәрәк булыр бит, — тибеҙ. Ул:

— Мин тағы ла алып киләм. Посылка килгән булырға тейеш, — тип нәмәләрен йыя. Новиков көлә:

— Күрәһең, тағы ла килмәҫкә уйлай. Һуғыш елкәгә тейә ул, — ти. Ул китте.

Ҡараңғы төшөр-төшмәҫ немец окоптарынан бер-бер артлы ракеталар күтәрелә башланы. Бер нисә урында пулеметтан биш ут асылды. Беҙҙән уҙып төшә торған еңел снарядтар беҙҙең окоптарҙа ярыла башланылар. Уларға ауыр бомбалар өҫтәлде. Ер сайҡала, окоптар ишеләләр. Һис түҙер әмәл юҡ. Арттан беҙгә ярҙам килде. Беҙҙең пулеметтар эшкә башланылар. Туптар немец окобына ут астылар. Үҙебеҙҙең бер нисә снаряд беҙҙең уң яҡта торған икенсе батальон окобына төшөп ярылды. Беҙҙең һалдаттар:

— Бына мәргәндәр! Үҙ кешеләрен ҡыралар!.. — тип һүгенәләр. Бомбаларҙы әҙерләнек. Кис өҙлөкһөҙ бойницаларҙан немец окоптарына ҡарата ата башланыҡ. Ут тағы ла көсәйҙе. Окоп өҫтәре төтөн, саң менән тулды. Атырға мөмкинлек ҡалмай башланы. Үлгәндәр, яраланғандар менән окоп буйы тулды. Яраланғандар ыңғырашалар. Уларға бер кем дә ярҙам бирмәй һәм бирерлек тә түгел. Сөнки өҙлөкһөҙ яуған снаряд, пулялар баш ҡалҡытырға мөмкинлек бирмәйҙәр. Һәр кемдә үҙ ҡайғыһы. Беҙгә алғы окопты ташлап, икенсе окопҡа күсергә приказ булды. Ход сообщения буйлап, йөҙ сажиндар булыр, икенсе окопҡа күсә башланыҡ. Канау буйы тулы үлек һәм ранендар... Беҙ уларға эләгеп йығылабыҙ, ҡайһы ваҡыт бер урында өймәкләшеп китәбеҙ. Бер урынға тығылғас, канауҙан сығып асыҡ ерҙән артҡа йүгерәбеҙ. Пулялар ямғыр кеүек яуалар. Теймәгәс теймәйҙәр. Снаряд ярылғанда барыбыҙ ҙа ергә йығылабыҙ. Уның ярсыҡтары, тупраҡтары ергә ятҡас, тағы тороп йүгерәбеҙ.

Ниңәлер, немецтар атакаға килмәнеләр. Төн урталары уҙғас, атыш туҡталды. Тик өҙләкһеҙ ракеталар, прожекторҙар яҡтырталар ине. Шул ваҡыт арттан Төркөстан дивизияһының бер полкы беҙҙе алыштырырға килде. Беҙ өс ай һуңында артҡа ял итергә сығабыҙ. Ләкин беҙҙең полк тамам буталған. Ҡайһы рота, ҡайһы батальон икәнен аңлар хәл юҡ. Иптәштәрҙе табыр хәл юҡ. Пошехонский полк исеме менән артҡа ҡайтабыҙ. Окоптан бер километр самаһы киткәс, беҙгә бер емерек заводтың стеналары буйында тупланырға ҡуштылар. Беҙ унда тупланып өлгөрмәнек, немец прожекторҙары беҙҙе күрҙе. Завод ҡоймаларына ауыр снарядтар ебәрә башланы. Беҙ стена буйына һырылдыҡ. Немецтарҙың уңышлы төшкән бер снаряды беҙҙең алға сығып барған йөҙләп һалдатты ер менән тигеҙләне. Беҙ ятҡан стенаның бер яғы емерелеп төштө. Шул ваҡыт бер нисә снаряд валсығы минең яндағы һалдаттың аяҡ йөҙөнә тейҙе, ул ыуаланып, аяғын тотоп стена буйында тәгәрәп йөрөй башланы. Мин уның итеген һалдырып өлгөрмәнем, беҙҙән шаҡтай уҡ алыҫта шартлаған снарядтың киҫәге минең һул беләккә килеп ултырҙы. Ул ҡуңыҙ кеүек ыулап килгән киҫәк ҡулға тейеү менән, минең ҡолаҡ шаулап китте. Беләк иҫһеҙләнде. Йөрәк ойоп китте. Мин теге һалдаттың итеген ташланым да:

— Миңә лә әләкте! — тип, беләгемде тотоп стена буйына ултырҙым. Таң һыҙылып ата башланы. Атыш туҡталды. Билдәле, бинт пакетын асып һыңар ҡул менән йәрәхәтте арлыбирле генә бәйләнем. Беҙгә стена буйынан тиҙ генә китергә бойороҡ булды. Бер-ике километр самаһы киткәс, таң яҡтырҙы. Бер һалдат минең бәйләгән ҡулды күргәс:

— Ҡулдан ранен булдыңмы? Бына бәхетле кеше. Бер-ике айға ебәрерҙәр инде. Уға тиклем бәлки мир ҙа булыр әле. Тимәк, ҡайтанан һуғышты күрмәйһең? — Ул турала минең башта бөтөнләй уй юҡ ине әле. Ҡаты йоҡонан уянған кеүек ҡапыл уяндым, аңға килдем.

Ысынлап та, шулай бит, мин әйтәм, эстән генә — мине аҙ тигәндә бер айға ебәрерҙәр. Мин лазаретҡа китермен. Бер айға тиклем әллә нәмәләр булыр. Ләкин мин һау ҡотолдом. Ә Байғужалар, Буранбайҙар тураһында ауылға ни яҙырмын? Улар һаумы икән?..

Ҡыҙарып, матур булып март ҡояшы күтәрелә. Иртәнге һауа тымыҙыҡ. Ә мин яңы тыуған кеше кеүек барамын. Ниңәлер, йөрәк ышанмай, алда лазареттар юҡ кеүек тойола, алда ла окоптар бар кеүек тойола. Окопта саҡта өйгә ҡайтыу тураһындағы уйҙар онотолғайны. Хәҙер ауыл иҫкә төшә. Ысынлап та, ауылға ҡайтыу насип булырмы икән?.. Бер урман буйында перевязка пункты күренде. Теге һалдат миңә әйтә:

— Йүләр, ранен булғас, мылтыҡ күтәреп бараһың. Уны әллә ҡасан ташлап ҡалдыралар. Бар, перевязка пунктына йүгер. Унда бәйләйҙәр, — тине. Мин тиҙ генә сафтан айырылам

да шунда табан атлайым. Хәҙер мылтыҡ ташлап китеүе уңайһыҙ, һаман күтәреп барам. Унда йөҙҙәрсә ауыр яралы һалдаттар ята. Санитарҙар яралары бәйләнгәндәрҙе двуколкага тейәйҙәр. Үлгәндәрен, үлергә яҡын булғандарын бер яҡҡа ташыйҙар. Шәфҡәт туташтары яңы килгән яралыларҙы бәйләйҙәр.

Бер көрәк һаҡаллы һалдат йөҙ түбән ята. Былай битендә, ҡулында ҡандар күренмәй, эсенән яраланған булған буғай. Ул ҡыҫып эсен тотҡан, ыңғыраша. Уның йөҙө ап-аҡ, ирендәре күм-күк, күҙҙәре майланғандар. Ул бер ҡулын юғары күтәреп кемделер саҡыра, мин уның эргәһенә барам.

— Улым, улым!.. — ти. Мин фляганан һыу алып бирәм. Ул һыуҙы күрмәй, һаман һөйләнә; флягаға ҡарамай, һаман юғары ҡарай:

— Улым, улым, яҡыныраҡ кил, яҡыныраҡ. Кил... кил... мине тартып ал! Күрәһең бит, мин ҡайҙа ятам, тартып ал!

Бер ҡулы менән һаман эсен тота, бер ҡулын юғары күтәрә. Бик оҙаҡ юғары ҡарап тора ла күлөргә маташа, тағы башын баҫып бик оҙаҡ ыңғыраша. Бының яраһы ауыр, күрәһең. Ул һаташа, ул белмәй һөйләшә, ул үлем алдынан ҡайҙалыр ҡалған улын күҙ алдына килтерә. Шул ваҡыт бер санитар килә. Уны әйләндереп һала, шул ваҡыт уның ҡапыл күҙе йомола.

— Быны үлектәр эргәһенә алып китегеҙ! — тип санитар бойороҡ бирә. Мин әйтәм:

— Исмаһам, иркенләп үлергә ирек бирегеҙ, үлгәс алып китерҙәр, — тинем. Ул миңә күҙенең ағын әйләндереп ҡараны ла ары китте. Теге көрәк һаҡаллы һалдат санитар әйләндергән килеш ҡалды, башҡа хәрәкәт яһаманы, ҡулын да һуҙманы. Йомолған күҙҙәрен ҙур итеп асып, күккә ҡарап йыш-йыш һулыш ала башланы. Ул ҡайҙалыр осорға, күтәрелергә ашҡынған йөҙ менән күкрәктәрен ҡалҡытты, аҙағында ул хырылдай башланы. Тештәрен шыҡырлатты, ирендәрен ослайтты, күрәһең, ул һүҙен һөйләргә теләй. Ләкин уға мөмкин түгел.

Баш өҫтөндә немец аэропландары осалар. Беҙҙән алыҫ түгел немецтың ауыр снарядтары төшөп ярылалар. Яралы һалдаттар юғары ҡарап һөйләшәләр:

— Бында бомба ташламаһындар тағы.

Яралы һалдаттарҙың бында килгәс үлгеләре килмәй. Тиҙ-тиҙ генә алыҫҡа, тыныс ергә киткеләре килә. Төрлө урындан сестраларға ҡысҡыралар:

— Тиҙерәк бәйләһәгеҙ ине, тиҙерәк оҙатһагыҙ ине...

Минең алға бер ҡарт сестра килде. Йәше илленән өҫтөн булыр. Уның саллы сәс бөртөктәре уны тағы ла дөрөҫләйҙәр.

— Яраң ҡайҙа? — тип минең ҡулды сисә башланы. Ҡандарын мамыҡ менән һөртөп, дарыу һөрттө, бәйләргә тотондо. Минең йө|!һә ҡарап, әсә ҡиәфәте менән һөйләй башланы:

— Иәш кенә балалар харап булалар. Бөгөн атыш, артиллерия командаһы бик көслө булды шул. Мин үҙем дә төн буйы

алғы позицияла ут аҫтында йөрөнөм. Унда күпме кешеләр үләләр. Бер ярҙамһыҙ үләләр. Терелерлек яралылар ут аҫтында ҡалып һәләк булалар...

Күптән ҡатын-ҡыҙ ауыҙынан бындай һүҙ ишетмәгәс, миңә был һүҙ бик яҡын тойолдо. Мин уйламай-нитмәй генә һорау бирҙем:

— Һеҙ бында үҙ иркегеҙ менән килдегеҙме?

Ул миңә ҙур күҙҙәрен тултырып ҡараны. Унан һуң әкрен генә ҙур ҡара күҙҙәрен түбән баҫты. Уларҙы оҙон керпектәр ҡапланылар:

— Юҡ... — тине, бик тәрән һулыш алып. — Мин һуғышты яратмайым. Мин һуғышҡа дошман кеше.

— Ни эшләп һуң, улай булгас, бында ут аҫтына килдегеҙ?

— Мин фронтҡа бына ошо ҡурҡыныслы һуғыштарҙа яраланған, яфа сиккән туғандарыма ярҙам итеү өсөн килдем. Бына, күрәһеңме, быларҙың барыһына ла беренсе ярҙам кәрәк.

Мин уның был һүҙҙәренә төшөнмәнем. Үҙе һуғыш яратмай, үҙе төндәр буйы пулялар, снарядтар аҫтында алғы позицияла йөрөй. Һуңғы һорауымды шаяртып ҡына бирҙем:

— Үлемдән ҡурҡмайһығыҙмы?

— Юҡ! — тине, бик ҡапыл ғына киҫте. Шунан һуң ул баҫынҡы-әрнеүле тауыш менән һөйләп китте. — Минең ике улым фронтта үлделәр. Хәҙер минең бер кемем дә юҡ. Хәҙер минең өсөн барыбер. Миңә унда өйҙә ултырыуы ҡыйын. Мин бында балаларымдың ҡандарын, үлем алдында кисергән ҡурҡыныстарын күрергә килдем. Хәҙер мин уларҙың ҡалай үлгәндәрен беләм. Үлем алдындағы бөтә кисерештәрен, яфаларын күрәм. Мин көнөнә йөҙҙәрсә үлектәр күрәм, йөҙҙәрсә яраланған ауыр яралыларҙы күрәм. Мин уларҙың барыһына ла үҙ балаларым кеүек итеп ҡарайым. Мин уларҙың барыһында ла үҙ балаларымдың үлем алдындағы кисерештәрен күрәм...

Ул тағы һөйләр ине, яралы һалдаттарҙың ҡысҡырышыуҙары, ыңғырашыуҙары уның һүҙҙәрен киҫтеләр. Ул башҡаларға ярҙам бирергә ашыҡты. Мин ул сестранан бик оҙаҡ күҙҙәремде алманым. Унда миңә әсә яҡынлығы, әсә мөхәббәте тыуҙы, окопта уттар аҫтында бер йылмайыу күрмәгән, снаряд, пулялар шауы менән томаланған, тупаҫланған күңел ҡапыл ҡыҙыу тимергә һалған боҙ кеүек ирене. Күңел йомшарҙы. Күҙгә ауыр йәштәр тығылды. Ул сестраны барып, ҡосаҡлап, алдына башты ҡуйып,^ оҙаҡ итеп илағы килде. Ләкин уны эшләү мөмкин булманы. Йөрәгемде әйтеү өсөн былай ҙа һүҙҙәр етмәй, уны рус телендә аңлатып биреүе шулай уҡ мөмкин булмаған эш.

Март ҡояшы ике һөңгө буйы күтәрелгән. Һауа тымыҡ. Япраҡ ҡағырлыҡ ел юҡ. Окоп яғында һаман да пушка тауыштары гөрһөлдәй. Э беҙҙең китә торған яҡта алыҫтарға һуҙылған урман, март ҡояшы аҫтында күм-күк һағымдарға күмелеп, тыныс ята. Шул урмандар өҫтөндә оско, шаярғы килә. Шул

сағымдар өҫтөндә тороп, бөтә пушкаларҙың, мылтыҡ, пулеметтарҙың уттарын һүндерге килә. Бөтә һуғыш фронтын юҡ итке килә. Ә минең сестрам яралылар араһында, үлектәр араһында йөрөй. Мин уның ҡояшҡа ялтыраған күн тужуркаһына ҡарайым да, шул ялтырауыҡлы тужурка эсендәге әсә шәфҡәтенә тағы мөхәббәтем арта. Ҡалын болоттар араһынан сығып бер нисә минутҡа яҡтыртҡан ҡояш ҡалай матур һәм яғымлы булһа, ул да бер генә йылмайыу, яҡшы йөрәк күрмәгән, секунд һайын үлем ташыған пулялар, снарядтар араһынан сыҡҡандан һуң күренгән шул күн тужуркалы сестра шул тиклем яғымлы, шул тиклем яҡын ине, мин ул минут уның теләге юлында бөтәһен дә, бөтәһен дә эшләргә, уның һуғышта үлгән ике улының балалыҡ йөрәген бөтә ҡорбандар биреп алыштырырға әҙер инем. Ләкин уны эшләү мөмкин түгел бит.

Мин дивизия штабының ололодогына киттем. Экрен барам. Тәрән уйҙарға сумып барам. Минең уй хәҙер бер нәмәне лә хәл итә алмай. Минең баш осонда яҡтыртҡан март ҡояшы минең өсөн ят. Гүйә, мин әллә кем еренән барам, әллә кем ҡояшына ҡыҙынам.

Әллә ҡайҙа, мин йәшәргә тейеш түгел донъяға барам. Мин һөр ерҙә яңғыҙ, һәр урында ташландыҡ... Хәҙер мин аҙашҡанмын. Бара торған юл минең юлым түгел. Минең тағы ла ҡайтҡым килә. Кире фронтҡа ҡайтҡым килә. Байғужа, Буранбай, Новиковтар эргәһенә барғым килә. Улар миңә яҡын, улар мине аңлайҙар. Улар менән һөйләшкем, улар менән ултырып тәмәке тартҡым килә. Уларға теге сестра тураһында оҙаҡ итеп һөйләгем килә...

Хәҙер мин барам... Ҡайҙа барам, кемгә барам, ниңә барам... Минең өсөн бөтәһе ҡараңғы, бөтәһе мәғәнәһеҙ... Гүйә, мин бара торған юлда миңә тормош юҡ, миңә һауа юҡ. Миңә юл юҡ...

Март ҡояшы юғары күтәрелде. Уйпат урында дивизия штабы күренде, миңә бик күп обоздар ҡаршы килделәр. Мин уларға юл бирҙем. Мин юл эргәһенән ҡомдан бара башланым. Юлда йөҙгә яҡын һалдат ята, улар ҙа окоптан киләләр буғай. Улар ял итәләр, тәмәке тарталар. Улар эргәһенә барғы килмәй. Туҡталдым, ултырҙым, тәмәке тарттым. Улар һаман яталар.

Урман араһына индем, юғары ҡараным. Һирәк ботаҡлы ҡарағайҙар төҙ һәм юғары күтәрелеп үҫкәндәр. Уларҙың ҡойолмай торған йәшкелт ылыҫтары, ҡараһыу төҫкә инеп, елһеҙ һауала тын һәм тәрән уйҙарға батып ултыралар. Минең йөрәктә тулҡын. Ел сығарғы килә, шул япраҡтарҙы шаулатҡы килә. Ләкин улар һелкенмәйҙәр, шауламайҙар. Уларҙың тын тороуҙары минең өсөн ауыр, бөркөү... Урмандан сығам. Һалдаттар киткәндәр. Юл аулаҡ. Мин иркен юлдан ҡыҙыу атлайым. Ниңә атлайым, ҡайҙа барамын — мин уға хисап бирмәйем, һаман барам...

Дивизия штабы. Околодокка килдем. Унда еңел яралылар. Мин докторға беләгемде һуҙҙым:

— Ҡулыңа үҙең аттыңмы?

Беренсе һорау шулай булды. Асыу килде. Мин снаряд киҫәге менән яраланыуымды һөйләнем. Улар ныҡ ҡаранылар. Беләгемде ҡайырҙылар, яраны соҡонолар. Ауырта, йөрәктәргә үтә. Ләкин ҡысҡырмайым. Һөҙөмтә шул булды: өс көнгә околодокта ҡалдырҙылар.

## БИШЕНСЕ БҮЛЕК

Ҡулға операция яһанылар. Снаряд ярсығын алдылар. Яра ла төҙәлеп бөтмәне. Беләктәге шеш тә бөтмәне, мине полкка ҡайтарҙылар. Байгужа ла, Буранбай ҙа, Новиков та һауҙар. Мине күктән төшкән кеүек ҡаршыланылар.

— Нине үлгәнгә хисап иткәйнек, — тиц бер ауыҙҙан ҡысҡырып ебәрҙеләр. Етмәһә, Байғужа минең үлеү тураһында ауылға хат яҙған. Ул хәбәр мине борсоно, тиҙ генә хат яҙырға ултырҙым. Мин барак алдында ергә йөҙ түбән төшөп хат яҙып ятҡанда, Новиков минең әргәгә килеп ятты, әкрен генә һөйләй башланы:

— Беләһеңме, — ти Новиков, — беҙгә бында бик яҡшы ял бирәләр. Һәр көн иртә менән дүрт сәғәткә строевой занятиеға алып сығалар. Шуның өҫтәүенә мине ике тапҡыр штабҡа саҡырҙылар. «Неҙ һуғышҡа нисек ҡарайһығыҙ, һалдаттарҙың кәйефе нисек?» — тип һорашалар. Теге Тимашев беҙгә кире ҡайтманы. Ул юғалды. Моғайын, ул шпион булғандыр. Беҙҙең окопта һөйләнгән һүҙҙәрҙең барыһы ла түкмәй-сәсмәй штабҡа еткерелгән. Башҡа бер кем дә түгел, шул ғына. Да, һине лә штабҡа саҡырғайнылар. Беҙ: «Ул үлгән», — тип хәбәр иттек...

Ул һүҙ дөрөҫкә сыҡты. Мин ҡайтып, рота бойороғо буйынса үткәрелеү менән иртәгеһенә мине штабҡа саҡырттылар. Мин бер капитан алдына барып баҫтым. Ул көләс йөҙ менән мине ҡаршы алды. Мин уның алдында под козырек алып тора инем, үҙ ихтыярыма торорға ҡушты:

— Был хат һинекеме? — тине, өҫтәлдәге бер хатҡа күрһәтте. Мин уны таныным. Ул хат минеке ине. Һуғышҡа китмәҫ борон Ҡыҙыл тәре обществоһы тарафынан бүләк итеп бирелгән һүрәтле конверт һәм ҡағыҙға яҙылған хат ине. Хаттың бөтә йөкмәткеһе иҫкә төштө. Мин унда һуғыш, ҡырылыш, уның дәһшәте тураһында, аслыҡ тураһында яҙам. Беҙҙең снарядтарҙың үҙ окоптарыбыҙға төшөп, үҙ һалдаттарыбыҙҙы үлтереүҙәрен тасуир итәм. Уларҙың барыһы ла ҡыҙыл ҡара менән цензура тарафынан һыҙылғандар. Капитан хатҡа төртөп:

— Был һеҙҙең ҡулмы? — тип миңә ҡараны. Мин ҡурҡтым, ҡаушаным. Тәндәрем аяҡ табандарыма тиклем сымырлап кит-

те. Сөнки мин быңдай хәлде беренсе күрәм. Ни тип яуап бирергә? Минеке түгел тиһәм, хаттың аҙағында минең полк адресы ята. Унда үҙ ҡулым менән исем, фамилиям яҙылған. Хатта роталары, взводтары ла күрһәтелгән. Минеке тиһәм, ҡаты яуапҡа тарттырырҙар, тип уйланым. Йәшереп ҡалып булмай, ни булһа ла булыр, арестовать итерҙәр, судҡа бирерҙәр, төрмәгә ултыртырҙар. Исмаһам, унда тыныс булыр.

— Эйе, минеке, ваш высокоблагородие! — тинем. Ул миңә бик оҙаҡ ҡарап торҙо. Унан һуң минең губернамды һорашты. Тыуған ауылымды, кәсебемде, уҡыуымды һорашты. Бөтәһенә лә дөрөҫ яуап ҡайтарҙым. Һорау бөткәс, ул мыйыҡтарын бороп, бер аҙ уйланып ултырҙы.

— Бин башҡорт икән, башҡорттар малсылыҡ менән кәсеп итәләр. Һин мал таныйһыңмы? — тине. Кис бер ваҡиғаға бәйләнеше булмаған был һорауға мин аптырай ҡалдым. Бер аҙ уйланғас:

— Эйе, таныйым, ваше высокоблагородие! — тинем. Ул ҡәнәғәтләнде буғай. Миңә табан яҡыныраҡ килеп:

— Хатты улай яҙырға ярамай. Полктың торған ерен, һуғыш хәлдәрен хатта яҙырға бөтөнләй ярамай. Ул хәрби сер.

— Мин белмәнем, ваше высокоблагородие.

Ул мине ебәрҙе. Тышҡа сыҡҡас, был турала үҙемә иҫәп бирә алманым. Бараҡтар яғына ҡыҙыу-ҡыҙыу атланым. Кисә, оҙон итеп яҙып, почтаға һалған хатым иҫкә төштө. Һуңғы хат минең артыҡ оҙон, шуның менән бергә бөтә әхүәл унда ваҡлыҡтарына тиклем тасуир ителгән, етмәһә, теге Тимашев тураһында ла яҙылған. Шулар иҫкә төшкәс, быуындарым ҡалтыраны:

—- Былары өсөн ғәфү иттеләр инде, ләкин быныһы өсөн тағы ла саҡыртырҙар, тағы бәйләнерҙәр. Яуапҡа тарттырырҙар, — тип уйланым. Шул уйҙар өҫтөндә борсолоп иптәштәр эргәһенә ҡайттым. Новиков ҡаршыланы:

— Йә, ни булды? Ни һоранылар?

Иптәштәр мине һырып алдылар. Бөтә хәлде һөйләп бирҙем. Новиков ҡысҡырып көлдө. Бөтә кешеләргә ишетелерлек итеп:

— Чепуха! Әйҙә, ҡурҡһалар, окоптан алһындар, арестантский ротаға ебәрһендәр. Беҙҙең өсөн тағы ла яҡшыраҡ булыр.

Новиковтың был һүҙен барыһы ла тыныс йөҙ менән дөрөҫләнеләр. Новиков менән икәү һалдаттарҙың иғтибарҙарын ҡараттыҡ. Шунан һуң улар айырым иғтибар менән ҡарай башланылар. Һәр ваҡыт үҙен һалдаттарҙан айырым тота торған, аҙ һөйләшә, асыулана торған эстон һалдаты Индрил минең эргәгә килде. Миңә айырым яҡынлыҡ күрһәтеп:

— Нечево, беҙҙең браттарға ҡайҙа ла шулай инде ул! — тип, ауыҙындағы оҙон тештәрен сығарып көлдө. Ул көн Индрил кискә тиклем беҙҙең эргәнән китмәне. Ул һәр төрлө анекдотҡа оҫта икән. Ҡыҙыҡлы анекдоттар һөйләп төнгә тиклем беҙҙе

көлдөрҙө. Ул Ригала механика заводында эшләгән, Лебавала сәғәт мастеры булып торған, һуғыш алдынан Петербургта электр станцияһында эшләгән. Хәҙер ул беҙҙең ротала телефонист, ул нескә буйлы, артыҡ оҙон кәүҙәле, уның муйыны оҙон, башы бәләкәй, оҙон тештәре һәр ваҡыт ауыҙынан күренеп торалар, көлгән мәлдә оҙон тештәр бөтә аҙауҙары менән күренәләр. Ул яңғыҙ, тыныс ултырған мәлдәрҙә бик уҫал кеше кеүек күренә, иптәштәр араһына инһә, шул тиклем асыҡ, ҡатлауһыҙ күңелле, уның эсендәгеһе тышында.

Ул беҙгә бик тиҙ эйәләште. Беҙҙең кеше булды. Ул ут яғырға, картуф бешерергә оҫта. Усаҡ тирәһенә бер кешене лә килтермәй. Утты яҡҡас, уның яныуына айырым бер ләззәт менән оҙаҡ итеп ҡарап ултыра. Эгәр ҙә котелокта һыу ҡайнап сыҡһа, уның урғылыуын, һикереүен, төҫөнә айырым бер кисереш сығарып, шуны күҙәтә. Күҙҙәрен шул ҡайнаған һыуҙан алмайынса беҙгә ҡысҡыра:

— Ҡайнай!.. Ҡайнап сыҡты! Урғыла!.. Урғыла!..

Гүйә, ул шуның эсендә үҙе ҡайнаған, урғылған кеүек ҡысҡыра. Котелоктарҙы усаҡтан алып, ҡырға ҡуйғас, уның төҫөндәге тантана ҡапыл бөтә. Ул ябай Индрил, тын Индрил булып ҡала. Ашаған ваҡытта һөйләшмәй, алдына ҡарап шым ғына ашай. Ашап бөткәс, һауыттарҙы сайҡап йыйыштырғас, тәмәкеһен тоҡандырып ала ла һүҙҙе башлай, бер-бер артлы беҙгә анекдоттар теҙергә тотона.

Беҙ инде ялда ун көн ятабыҙ. Беҙгә меңдән артыҡ өҫтәлмә ғәскәр килде. Бер аҙы Ҡазан яҡтары. Ҡалғандары Украинанан. Быларҙың составы сыбар: өсөнсө наборҙа алған новобранецтар бар. Улар артыҡ йәштәр. Һаҡаллы ополчиндар бар. Улар килгәс, беҙгә йәйге кейем бирҙеләр, смотр булды. Дивизия начальнигы, бер генерал килде. Духовой оркестр аҫтында беҙ уның алдынан уҙҙыҡ. Шунан һуң генерал беҙҙе стройға ҡуйҙырып һөйләй башланы:

— Данлы рус ғәскәре һәр көн ҙур еңеүҙәр менән алға бара. Австрияның Львов ҡалаһы алынды, хәҙер Австрияның бик ҙур территорияһы беҙҙең ҡулда. Беҙҙең ғәскәр Перемышлгә яҡынлай. Перемышль алыныу менән беҙ был яҡтан һөжүм итергә тейешбеҙ. Тиҙерәк мир яһау өсөн, нығыраҡ һуғышырға кәрәк! — тине. Беҙҙең эргәлә торған Индрил, башын юғары күтәреп:

— Эле мир яһау өсөн тағы ла һуғышырға кәрәк икән! — тине. Үҙе генералға ҡараған хәлдә ҡатып ҡалды. Новиков, Индрилдың һүҙенә ҡушылып:

— Был генералдың үҙен алғы линияға ҡуйырға ине. Күрәһеңме, ул ҡалай таҙа. Ҡып-ҡыҙыл, һуғымға ашатҡан суҫҡа кеүек. Улар бит, беҙҙең кеүек, ике-өс көнгә бер тапҡыр ярты котелок һалҡын өйрә эсмәй...

Взвод командиры, Новиковтың тауышын ишетеп, уны тәртипкә өндәне. Беҙ тын булдыҡ.

Смотр һуңында, беҙ ҡайтып аш ашап ултырғанда рота писары Барсук килде:

— Новиков менән һине рота командиры саҡыра, — тине. Беҙ бер-беребеҙгә ҡараштыҡ. Минең күҙ алдыма һуңғы хат килде. Новиков ҡулындағы ҡалағын ҡуйып:

— Булат, беләм, беҙҙе бөгөн аталар; егеттәр, һау булығыҙ! — тине. Үҙе шарҡылдап көлдө. Ашаған ваҡытта һүҙһеҙ ултыра торған Индрил һүҙгә килде:

— Әгәр ҙә ундай эш булһа, быға тиклем полевой судҡа бирерҙәр ине. Башҡа берәр урынға күсерергә уйлай торғандарҙыр, — тине. Байғужа менән Буранбай был хәлгә тәьҫирләнделәр.

— Бергә-бергә күңелле ине әле. Беҙ китһәгеҙ, беҙгә күңелһеҙ булыр инде, — тинеләр.

Индрилдың пәйғәмбәрлеге дөрөҫ булды. Прапорщик Панин беҙгә шулай тине:

— Беҙҙе интендантствоға ебәрергә приказ булды. Берегеҙ көтөүселәр командаһында старший булыр, берегеҙ скотовод булыр. Хәҙер үк арматура списоктарын алығыҙ, ҡоралдарығыҙҙы тапшырығыҙ...

Башта күңелдәр ышанманы. Новиков менән беҙ, прапорщик Панин эргәһенән сыҡҡас, бик оҙаҡ һүҙһеҙ барҙыҡ. Юл ыңғайында рота писары Барсук торған баракка индек. Ул уға билдәле икән. Беҙгә арматура списоктары бирҙе. Ҡулдарыбыҙға приказ копияларын тотторҙо. Приказды алғас, Новиков йәйләнеп китте:

— Йәшәйбеҙ, брат, йәшәйбеҙ... Ҡурҡма, барыһын да булдырырбыҙ. Тик бына иптәштәр генә йәл... Йәл, ҡалалар...

Беҙҙең был эш иптәштәр өсөн ҙур удар булды. Байғужа йөҙ түбән бик оҙаҡ уйланып ятты ла ҡапыл ғына күтәрелеп:

— Миңә теге Тимашевты үлтерергә кәрәк булған икән. Ул ваҡытта мин дә һеҙҙең менән киткән булыр инем. Белмәнем! — тине.

## АЛТЫНСЫ БҮЛЕК

Беҙ, фронттан ҡырҡ саҡрым самаһы артта, Варшава аҫтында ҡыҙҙар приютында ятабыҙ. Әле беҙ эшкә башлағаныбыҙ юҡ. Казначей менән закупочный комиссияның начальнигы поручик Аликсакин өс көн инде әсәләр, приюттың хеҙмәткәр ҡатындары менән гулять итәләр. Маклерҙар ҙа икенсе бер йортта әллә ниндәй вольный халыҡтар менән әсәләр, Новиков менән беҙ көн буйы приют баҡсаһында йөрөйбөҙ. Кухняларына инеп ашап сығабыҙ. Беҙ кухаркалар менән танышып алдыҡ. Улар беҙҙе туйғансы һыйлайҙар.

Был приютта ике йөҙҙән артыҡ ҡыҙҙар тәрбиәләнә. Был приют ниндәйҙер бер тол бай ҡатын тарафынан һалынған. Хәҙер ул ҡырҡ йылдан артыҡ дауам итә. Уның төрлө емештәр менән тулған баҡсаһы ғына егерме десятиналап бар.

Беҙ приютҡа килгәндә йәшел үләндәр баш күтәрә башлаған, емеш ағастары япраҡ бөрсөктәре ебәрә башлаған ваҡыт ине. Беҙҙең көндәр былдағы ирек менән иҫереп үтәләр. Һис бер тынысһыҙлаған, борсоған кеше юҡ. Эш тураһында уйлаған юҡ. Киләсәкте иҫкә алған да юҡ. Полкта ҡалған иптәштәргә бер-ике тапҡыр хат яҙырға уйлаһаҡ та, уны ла эшләгәнебеҙ юҡ. Көндәр йөрөү менән үтәләр. Беҙ приюттан өс-дүрт саҡрым ситтә йөрөп ҡайтабыҙ, ныҡ асығабыҙ. Тағы ла кухняға инеп, һис тормошта күрмәгән тәмле, ләззәтле аштар ашайбыҙ. Унан һуң бик оҙаҡ итеп йоҡлайбыҙ.

Приют ҡыҙҙары беҙгә яҡыная башланылар. Улар кис менән беҙҙең эргәгә киләләр. Новиков уларға ҡурҡыныслы позиция тормошон һөйләй. Улар айырым бер ғәжәпләнеү һәм ҡурҡыу менән тыңлайҙар. Ҡайһы ваҡытта, ҡурҡыныс картиналарҙы тыңлап:

— Ах, ах! — тип баштарын баҫалар. Күҙҙәрен йомалар. Новиков уның һайын береһенән-береһе ҡурҡыныслы картиналарҙы тасуир итә башлай. Улар, ҡулдарын һелтәп:

— Ҡуй, ҡуй, һөйләмәгеҙ! — тип, Новиковтың һөйләмәүен һорайҙар. Шунан һуң һүҙ икенсегә күсә. Ҡыҙҙар беҙҙең офицерҙарҙы яманлай башлайҙар. Уларҙың ғәйептәрен асалар.

Поручик Аликсакин бик насар кеше икән. Ул ҡыҙҙарға бәйләнә. Үҙенең эсә торған бүлмәһенә приют ҡыҙҙарын һөйрәп алып инә. Ул бер нисә ҡыҙҙы харап итте инде. Беҙҙә бер нисә аҙғын ҡыҙ бар. Улар һәр ваҡыт шулар эргәһендә, шулар менән гулять итәләр. Анау көндә шуларҙың береһен ата яҙғандар, туҡмап сығарғандар. Күлдәктәре йыртылған, биттәре ҡып-ҡыҙыл ҡан ғына ине. Беҙҙең начальниктар ҙа бына шулай әсәләр...

Шул ергә еткәс, улар туҡталалар. Күрәһең, улар начальниктарҙан ҡурҡалар. Йәки уларға берәй хәбәр ишетелеүенән шикләнәләр. Бер-береһенә ҡарашып алалар ҙа һүҙҙе икенсегә боралар.

Бер көндө көндөҙ беҙ Новиков менән үҙ бүлмәбеҙҙә йоҡлай инек. Берәү бик ҡаты итеп беҙҙең ишекте япты. Мин уяндым. Коридор буйынан йүгереп киткән бер аяҡ тауышы алыҫланды, тынды.

— Был ниндәй хәл булды? — тип, мин урындан һикереп төштөм дә ишеккә барҙым. Коридорҙа бер кем юҡ ине. Тәҙрәгә барҙым. Ишек алдында приют ҡыҙҙары крокет уйнайҙар ине. Мин, тәмәке тоҡандырып, кире урыныма ятырға килһәм, беҙҙең аяҡ осонда кескенә конвертлы бер хат ята. Тышында икебеҙҙең дә фамилия яҙылған. Тиҙ генә Новиковты уяттым. Хәлде һөйләп бирҙем. Хатты күрһәттем, асып уҡыйбыҙ:

«Беҙ һеҙгә хат яҙырға батырсылыҡ иттек. Беҙ һеҙҙе ярата-

быҙ. Кис менән, ҡараңғы төшкәс, баҡсаның төньяғындағы беседкаға төшөгөҙ. Шунда күрешербеҙ».

Исемдәрен ҡуймағандар. Беҙ ул хатты бер нисә тапҡыр уҡып сыҡтыҡ. Беҙҙең баштар эшләмәне. Тиҙ генә бер һөҙөмтәгә лә, бер ҡарарға ла килә алманыҡ. Бер нисә тапҡыр тәҙрәгә барҙыҡ. Крокет уйнаған ҡыҙҙарға ҡараныҡ:

— Уларҙың ҡайһылары яҙырға мөмкин?

Беҙ береһен дә белмәнек. Беҙгә ашарға ваҡыт еткәйне. Хәҙер инде элеккесә ябай ғына сығырға ярамай. Хәҙер беҙҙе ярата торған ҡыҙҙар бар. Беҙ хәҙер кавалерҙар. Беҙҙең эсәрҙә әллә ниндәй тойғолар ҡайнайҙар, улар эскә һыймайҙар, тышҡа сығалар. Новиков әйләнгән һайын:

— Бына һин әле, шайтан алғырҙары! — ти. Кейенгәндә ҡайышты тығыҙыраҡ ҡыҫа. Гимнастеркаһының арҡаларын төҙәтә. Фуражкаларын ҡағып, төҙәтеп кейә. Мин дә, маймыл кеүек, Новиков ни ҡыланһа, шуны ҡыланам.

Стройҙағы кеүек; текә генә атлап урамға сыҡтыҡ. Хәҙер беҙ ҡыҙҙар эргәһенән бармайбыҙ. Алға ҡарап ҡына башҡа аллея буйлап кухняға барабыҙ. Башта дөрөҫ атлап сыҡҡайныҡ. Ҡыҙҙар тапҡырынан үткәндә беҙҙең аяҡтар яңылыштылар. Аяҡтарҙы тигеҙ алыу өсөн ваҡ-ваҡ баҫып, аяҡтарҙы тыпырлатып, шыуыштырып алабыҙ. Ләкин ундай ваҡытта, үсеккән кеүек, аяҡтар тиҙ генә тыңламайҙар. Новиковтың елкәләре ҡыҙара. Тимәк, ул ҡаушай, ояла. Кухня алдына килгәс, туп-тура кухняға инмәнек. Һуғыштан һау ҡотолған кешеләр кеүек, эскәмйәгә ултырып, һүҙһеҙ-һиһеҙ генә тәмәке тоҡандырҙыҡ. Ләкин ҡыҙҙар тураһында ла, килеү тураһында ла, ул юлдағы уңайһыҙлыҡтар тураһында ла һөйләшмәйбеҙ. Сөнки һәр кем үҙенең серен үҙенә йәшерә. Новиков бик йыуаш һәм әкрен тауыш менән:

— Бөгөн оҙаҡ йоҡлағанбыҙ. Беҙ һуңға ҡалманыҡмы икән? — тигән була. Ләкин был һүҙҙәр беҙҙең йөрәк һүҙҙәре түгел. Ул теге ҡаушауҙарҙы ҡаплау өсөн генә һөйләнә. Мин уны бик яҡшы аңлайым. Ләкин мин үҙем дә шул хәлдә...

Беҙ башҡа ваҡытта кухняға шаулап инә торғайныҡ. Бөгөн, кейәү егеттәре һымаҡ, шым ғына, әкрен генә индек. Кухаркалар менән бик мөләйем генә һаулаштыҡ. Урындарға ултырҙыҡ. Ҡарт кухарка Авдотья беҙгә аш килтергәндә:

— Ниңә һеҙ бөгөн йыуаш ҡына ултыраһығыҙ, әллә начальниктарығыҙ берәй ҡатылыҡ эшләнеме? — тип беҙгә тура ҡараны. Новиков ҡарлыҡҡан тауыш менән:

— Юҡ, былай ғына, — тине. Әлдә Авдотья беҙгә башҡа һүҙ ҡушманы. Беҙ әкрен генә, шым ғына ашаныҡ та, рәхмәт уҡып, сығыу яғын ҡараныҡ. Кухня ишеге арҡыры ҡапҡаға сығып, шунан яланға табан атланыҡ. Беҙ ниндәйҙер эске тулҡын менән һис бер йүнәлешһеҙ алға бара инек.

Кисте көтөү беҙҙең өсөн бик оҙаҡ булды. Беҙ уны биҙгәкле рәүештә көттөк. Кискә табан быуындарҙы ҡалтырау алды. Новиков әкрен генә миңә һөйләй:

— Улар беҙҙе шаяртмайҙармы икән? — Бер аҙ уйланып тора ла, көс алып: — Шаяртып ҡараһындар! Мин уларға күрәктәрен бирермен, шайтан алғырҙары, үҙҙәре күңелдәрҙе тарталар бит әле! Ни булһа булһын, барабыҙ. Бына уларҙың ҡайһылары икәнен белергә ине.

Төрлөһө тураһында төрлө фекер йөрөтәбеҙ. Ләкин ҡайһылары булыуы тураһында бер һөҙөмтәгә лә килә алмайбыҙ.

— Әйҙә, барайыҡ әле! Ҡайһылары булыр икән? — тигән булабыҙ. Кис була башлағас, йүнләп сыҡҡан һаҡалдар булмаһа ла, бәпкә йөндәрен ҡырған булдыҡ. Ҡырып бөткәс, мин көләм:

— Төндә улар беҙҙең бәпкә йөндәрҙе күрер тип беләһеңме? — тинем. Новиков күтәренке рух менән:

— Шулай ҙа, ҡыҙҙар эргәһенә барғас, формаһына килтерәйек инде, — ти. Шулай ҙа өҫтә кейемдәр таҙа, икебеҙҙә лә яңы ғына алған яңы йәйге кейемдәр. Беҙ, итектәрҙе таҙартып, ҡайыштарҙы ҡыҫып быуып, немец окобында табып алған минең ватыҡ түңәрәк көҙгөгә ҡарап фуражкаларҙы кейҙек. Шинелдәрҙе яурынға һалып, иҙән буйынса маршировать итә башланыҡ.

Ҡараңғы төшөп етмәгән, иртәрәк әле. Поручик Аликсакиндар бүлмәһендә пианино уйнайҙар. Пианиноның матур, моңло тауышы беҙҙең асыҡ тәҙрәнән бүлмәгә ағыла. Пианино тауышын, карауатҡа ултырып, икебеҙ ҙә тын ғына тыңлайбыҙ. Ләкин йөрәктәр сығып баралар. Шул пианино тауышына ҡушылып бөтә тауыш менән йырлағы килә, шул пианино тауышы менән юғарыға күтәрелге, осҡо, һауаның бушлығында йөҙөп йөрөгө килә. Был минуттарҙа беҙҙең кәүҙәләр шул тиклем еңел, улар мамыҡ кеүек еңелдәр. Шул пианино моңо аҫтында, шул күтәренке рух аҫтында мәңге ултырғы килә. Новиков пианино көйөнә әкрен генә һыҙғыра, мин аяҡтарҙы бейетәм. Пианино туҡталды. Мин тәҙрәгә ҡараным. Минең ҡарау бер теләк менән түгел, бәлки пианиноның туҡталыуы менән механик рәүештә ҡарау ине. Шул ваҡыт тыштың ҡараңғылығын күрҙем.

— Ҡараңғы төшкән! — тинем. Новиков, стройҙағы кеүек, шарт итеп тороп баҫты:

— Әйҙә, китәбеҙме? — тине. Ул минутта бөтә донъяға беҙ хужа инек. Беҙҙең алда фронт та юҡ. Ғәскәр хеҙмәте лә юҡ. Поручик Аликсакиндар ҙа юҡ. Иртәгеһе эштәр ҙә юҡ. Донъяла беҙ икәү генә бар. Унан һуң беҙҙе көткән тағы икәү бар. Бөгөн беҙҙең өсөн донъя шулай тора.

Баҫҡыстан төшкән саҡта, эске тойғоларға мауығып, мин бер баҫҡысты арҡыры баҫҡанмын, ахырыһы, бер нисә баҫҡысты һөрләгөп йығылып төштөм. Ләкин ҡалай төшкәнемде белмәйем, торғанымды беләм. Мин, әллә ниндәй бер көс менән

тороп, бер нисә аҙым йүгереп барҙым. Минең арттан Новиков та йүгереп килә ине. Ул:

— Берәй ереӊ ауыртманымы? — ти. Мин ашығып:

— Юҡ, юҡ, бер нәмә лә булманы! — тинем. Беҙ, һис бер нәмәгә ҡарамайынса, һис бер нәмә уйламайынса, ҡыҙыу-ҡыҙыу алға атланыҡ. Баҡсаның төньяғындағы аҡ стенаға яҡынлашҡас гүйә, разведка ваҡытында ҡапыл алда дошман күргән кеүек, Новиков минең итәктән тартты:

— Туҡта, етәбеҙ бит! — тине. Мин ҡапыл туҡталдым... Хатта бер-ике аҙым артҡа сиктем. Ул, минең шинелдең яғаһынан тотоп:

— Улар булһалар, шунда булалар инде. Әкрен генә барайыҡ, — тине. Беҙ, төндә дошман позицияһына үрмәләгән кеүек, әкрен генә, шым ғына бара башланыҡ. Аҙ ғына ел бар. Яңы ғына япраҡ бөрсөктәре ебәрә башлаған ағастар һелкенәләр, беҙ, беседканың арт яғынан килеп, әкрен генә күтәрелеп ҡараныҡ. Беседкала берәү ҙә юҡ. Новиков бик шомло тауыш менән:

— Юҡ! Алдағандар, ахыры! — тине. Минең ике беләктән ҡыҫып, миңә ҡарап алды. Ьауаһы бушатылған ҡыуыҡ кеүек, беҙҙең быуындар ҡапыл бушандылар. Ярһып, күтәрелеп, үҫеп килгән кешеләр беседка әргәһендә бәләкәй генә булып ҡалдыҡ. Беҙҙең эргәләге ағастар беҙҙең күҙҙәргә йыуан һәм бейек булып күренделәр. Беседка беҙҙең өҫкә ауып, ишелеп килгән кеүек булды...

Шул ваҡыт беседка артында нескә генә көлгән тауыш ишетелде. Ул тауыш беҙҙең ҡолаҡ төбөндә асыҡ һәм яғымлы булып яңғыраны. Мин:

— Моғайын, шулар! — тинем. Беҙҙең ҡолаҡтар ҡарпайҙы, күҙҙәр ҙурайҙы. Тағы быуындар скрипка ҡылдары кеүек тартылды. Тағы ла һауа шары кеүек өрөлдөк. Беҙҙең күҙ алдынан йыуан, оҙон ағастар ҙа, ауып килә торған беседка ла юғалды. Беҙ, беседканы ҡыҙыу-ҡыҙыу уҙып, уның түбән төшкән баҫҡыстарынан ашығып түбән төшө башланыҡ. Шул ваҡыт беҙҙең артта бер юлы көлкө аҡтарылды. Беҙ тып туҡталып артҡа ҡараныҡ, беседканың һул яҡ мөйөшөндә ике баҫҡыс түбән генә ике аҡ кәүҙә ултыра ине. Беҙ, уларҙы күргәс, ҡаушап ҡалдыҡ. Бер һүҙ ҙә әйтә алманыҡ. Ауыҙҙарыбыҙҙы йырған хәлдә шул урында баҫып ҡалдыҡ. Береһе:

— Оҙаҡ көттөрҙөгөҙ! — тине. Үҙе башын түбән баҫты. Икенсеһе көлә башланы. Уларҙың был һүҙҙәре беҙгә йән индерҙе. Баяғы пианино тауышы кеүек, беҙҙе еңеләйтеп, күтәреп ебәрҙе. Новиков минең ҡабырғаға төртөп, үҙе улар яғына атланы. Мин уның артынан, Новиков арҡаһына йөҙөмдө йәшереп, шулай уҡ атланым. Новиков, ҡулдарын болғап:

— Беҙ, беҙ... — тип нимәлер һөйләргә теләгәйне, теге ҡыҙҙарҙың икеһе бер юлы:

— Эйҙө, рәхим итегеҙ, ултырығыҙ! — тинеләр. Беҙ, һис бер һүҙһеҙ-ниһеҙ, уларҙың уң яҡтарына ултырҙыҡ. Беҙ ултырғас, бер-берeһенә һыйынып, баштарын баҫып тағы ла көлдөләр. Беҙ уңайһыҙ хәлдә ҡалдыҡ. Новиков:

— Туташтар, ниңә көләһегеҙ, әллә беҙ һеҙгә мешать иттекме? — тигән булды. Новиковтың был һүҙе миңә оҡшаны. Мин, башымды күтәреп, Новиковҡа ҡарап, бер аҙ күтәрелеп ҡуйҙым. Ҡыҙҙарҙың береһе:

— Юҡ, юҡ, һис мешать итмәйһегеҙ, пожалуйста, ултырығыҙ! — тине. Ул һүҙҙәр тағы ла еңеллек бирҙеләр.

Новиков ҡыҙҙарға яҡыныраҡ шыуышты. Мин Новиковҡа яҡыныраҡ шыуыштым. Шул ваҡыт тәнгә ниндәйҙер бер йылылыҡ инде. Күңел иркәләнә башланы. Мин Новиковтың ботона ҡулымды һалдым. Миңә бер батырлыҡ инде. Һис бер дәлилһеҙ, сәбәпһеҙ ҡыҙҙарға һүҙ ҡуштым:

— Туташтар, һеҙгә һалҡын түгелме? — тигән булдым. Һүҙемдең урынһыҙ булыуына уңайһыҙландым, ҡыҙарындым. Ҡыҙҙарҙың береһе, шуны көтөп кенә торған кеүек, минең һүҙемә ялғап китте:

— Юҡ, һалҡын түгел. Бүлмәлә бик күңелһеҙ. Эс боша. Шуға күрә Женя менән сығып ултырҙыҡ әле.

Новиков һүҙҙең ебен уңышлы алды:

— Мин уйлайым, бында һеҙгә күңелһеҙ түгелдер. Ниндәй күңелле, яҡшы урын, ниндәй күңелле баҡса, йорттар матур итеп һалынғандар. Һеҙгә бында тормоштоң аҙабы юҡтыр, — тине. Женя күтәрелеп китте. Түбән баҫып ултырған башын юғары күтәрҙе.

— Ҡуй, һөйләмәгеҙ. Был тормош тамам туйҙырҙы инде. Әллә ҡайҙа, алыҫҡа, Рәсәй эсенә китке килә. Әйтәм бит, һис кенә торғо килмәй.

Шул ваҡыт Новиковтың елкәһе арҡыры икеһенең дә йөҙҙәренә ҡараным. Быларҙың береһе ысынлап та Женя, икенсеһе Ирочка ине. Хәҙер уларҙың йөҙҙәре таныш. Беҙ һуғыш хәбәрҙәрен һөйләгәндә, улар айырым бер кисереш менән тыңлай торғайнылар. Берәйһе беҙҙең һүҙҙе бүлһә, уға, мешать итмәгеҙ әле, тип ҡысҡыра торғайнылар. Шуларҙың береһе — Ирочка бында ултыра. Ләкин Женяға оҡшағаныраҡ ике ҡыҙ бар ине. Ҡайһыһы Женя булғандыр, асыҡ белеп етмәнем. Новиков, ғәҙәте буйынса, ҡыҙҙар менән әңгәмәне һуҙыр өсөнмө, тағы ла һуғыш тураһында һөйләй башланы. Әлбиттә, уның урыны был түгел, был минут түгел ине. Ирочка ялынған ҡиәфәт менән:

— Господин Новиков, ғәфү итегеҙ, һүҙегеҙҙе бүләм, зинһар, һуғыш тураһында һөйләмәгеҙ әле. Мин ҡурҡам. Былай ҙа минең төшөмә һәр көн һуғыш инә, ҡурҡып уянам, — тине. Новиков уңайһыҙланды. Һүҙен киҫеп:

— Улай булһа, һөйләмәйем, нимә тураһында һөйләшәйек һуң? Йә, улай булғас һеҙ һөйләгеҙ, беҙ тыңлайыҡ. Женя әкрен генә:

— Нимә лә булһа, башҡа берәй нәмә тураһында һөйләгеҙ!

Беҙҙең арала һүҙ бөттө. Барыбыҙ ҙа тындыҡ. Новиков эстән тулҡынлана. Ул башлап китергә һүҙ таба алмай. Э мин Новиков ауыҙына ҡарап торам. Ләкин түҙем етмәй. Ул минутта һүҙһеҙ тороу — үлем. Ни ҙә булһа һөйләргә кәрәк. Мин түҙмәнем, һис уйламаҫтан:

— Ул ваҡытта теге хат тураһында!.. — тип ысҡындырҙым. Новиков минең бөйөргә терһәге менән төрттө, Ирочка, белмәмешкә һалышып:

— Ниндәй хат! — тине. Мин һүҙемде ҡеүәтләү өсөн:

— Үҙегеҙ белгән хат тураһында инде, — тип башымды икенсе яҡҡа әйләндерҙем. Ҡыҙҙар көлә башланылар. Мин дә көлгән булам. Аптырағас, уңайһыҙланып Новиков та көлә.

Ирочка бик ҡырҡыу ғына итеп һорау бирҙе:

— Әллә ул запискanан берәй мәғәнә аңланығыҙмы?

— Юҡ, — тине Новиков, ул да ҡырт киҫте. Мин, һаман ауыҙымды йырып, һауаға ҡарап, был һүҙҙең һөҙөмтәһен көтөп ултырам. Шунан һуң Женя һөйләй башланы:

— Их, беҙ ҙә иҫәр бит инде. Ул записканы мин илттем. Һеҙ йоҡлап ятаһығыҙ. Тәҙрәнән ҡараным, тәҙрә ябыҡ. Шунан коридор буйлап әкрен генә индем, ишекте астым, һеҙ йоҡлайһығыҙ. Мин записканы ырғыттым да сығып киттем, һеҙ уяна тип ҡурҡтым. Шул ҡурҡышымдан ишекте шул тиклем ныҡ яптым, бөтә коридор шауланы. Мин ҡалай йүгереп сыҡҡанымды белмәйем. Һеҙ ҙә ҡурҡҡанһығыҙҙыр инде.

Улар икеһе лә баштарын баҫып көлә башланылар. Беҙ ҙә көләбеҙ. Ҡысҡыра-ҡысҡыра көләбеҙ. Шунан һуң Ирочка ҡапыл көлөүенән туҡтап:

— Ҡысҡырып көлмәйек, юғиһә ишетерҙәр, — тине. Барыбыҙ ҙа тындыҡ. Өҙөк-өҙөк итеп, әкренләп кенә көлә башланыҡ. Ул ваҡыт беҙ тамам яҡынлашҡайныҡ, бер-беребеҙгә үҙләшкәйнек инде. Шул моменттан файҙаланып, Новиков батырланып китте. Ул, минең эргәмдән күсеп, Женя яғына сығып ултырҙы. Мин Ирочкаға яҡын һыйынып ултырҙым. Ике ҡыҙ беҙҙең уртала ҡалдылар. Новиков:

— Һеҙ өшөйһөгөҙ, буғай, — тип яурынына һалған шинелен Женяның арҡаһына яртылаш япты. Женя һис бер ҡаршылыҡ күрһәтмәне. Шуны күргәс, мин тағы ла Ирочкаға яҡыныраҡ һыйынып, уның арҡаһына үҙемдең шинелдең салғыйын яптым. Хәҙер беҙҙең дүрт баш бер-береһенә яҡын килде. Уңай, йылы, рәхәт булып китте. Беҙҙең һүҙҙәр ҙә хәҙер бер-беребеҙгә яғымлы һәм тартыу булып сыға башланылар, һүҙ уңайындамы йәки берәй хәрәкәт яһағандамы, бер генә сантиметр булһа ла ҡыҙҙарға тағы ла яҡыныраҡ, тағы ла тығыҙыраҡ ултырғы килә. Тағы ла эскәрәк, тағы ла эскәрәк инге килә. Яурындағы шинелде төҙәтеү һылтауы менән ҡулды Ирочканың биленә ҡуйып, уны үҙемә тағы ла ҡыҫырға, яҡыныраҡ килтерергә тырышам.

Ирочканың төндәренән рәхәт, тәмле йылы бәреләә. Ул йылыны күберәк, күберәк алғы килә. Бөтә тәнде, бөтә йәнде шул йылыға уратҡы килә. Ҡайһы ваҡыт беҙ дүртәү үҙ-ара һөйләшәбеҙ. Ҡайһы ваҡыт үҙ-ара ғына һөйләшәбеҙ. Новиков менән Женя, баштарын яҡын ғына ҡуйып, икәү-ара әкрен генә һөйләшәләр. Шуларҙы күргәс, Ирочка ла миңә башын яҡын ғына килтерә. Уның йомшаҡ бөҙрә сәстәре минең битте һыйпайҙар. Ул сәстәрҙең һыйпауҙары, музыканың нескә һәм матур ҡылдары кеүек, минең эскә үтәләр. Тамаҡ төптәренә ниндәйҙер хуш, тәмле еҫтәр индерәләр.

Беҙҙең ике шинель дүрт кәүҙәне ҡапланы. Беҙ дүртебеҙ ике шинель аҫтында ҡалдыҡ. Ике шинель беҙҙең дүртебеҙгә өй булды. Хәҙер беҙ дүртәү шул «өй» эсендә ултырабыҙ. Ул шул тиклем уңай, ул шул тиклем йылы, унда шул тиклем рәхәт: шунда ҡуҙғалмай мәңге ултырғы, шунда мәңге ҡалғы килә.

Хәҙер бер «өй»ҙә дүртәү торабыҙ. Хәҙер унда икешәр-икешәр ике тормош йәшәй: береһе — Новиков менән Женя, икенсеһе — Ирочка менән мин. Ирочка ярты кәүҙәһе менән минең алға ятҡан. Мин уны ике ҡулым менән тығыҙ ҡыҫып алғанмын да уның бөҙрә сәстәре аша битенә башымды һалғанмын. Мин бөтә йылылығым менән уны йотам. Ул бөтә кәүҙәһе менән миңә йотола.

Хәҙер беҙҙең беребеҙ ҙә һөйләшмәй. Тик эске тойғолар менән генә янабыҙ. Бая һүҙһеҙ ултырыу үлем ине. Хәҙерге минутта һәр бер һүҙ артыҡ һәм килешһеҙ. Сөнки хәҙер йөрәктәр һөйләшәләр. Һәр бер алынған һулыштар бер-береһен аңлашалар. Ирочканың йыш-йыш ҡына алған ҡайнар һулыштары минең уң беләккә тейәләр. Шунан улар эскә үтәләр, табандарға төшәләр...

Беҙ беседканан торғанда, таң һыҙылғайны. Икешәр-икешәр бер шинель аҫтында йортҡа ҡайттыҡ. Айырылғы килмәй. Ирочкалар начальниктарынан ҡурҡалар. Беҙ уларҙы оҙаттыҡ. Ләкин улар ишеккә барманылар. Тәҙрә төбөнә килделәр. Улар тәҙрәләрен бикһеҙ ҡалдырған булғандар. Хушлаштыҡ. Хушлашҡас, Ирочка минең беләккә башын ҡуйҙы. Ниңәлер үкһене. Минең беләккә бер нисә тамсы ҡайнар йәш тамды. Был минең өсөн ауыр булды. Гүйә, минең йөрәккә эҫе ҡурғаш тамған кеүек ауыр булды.

Улар тәҙрәнән инделәр. Беҙ, бер аҙ ситкә китеп, тағы ла тәҙрәгә ҡараныҡ. Таң яҡтыһында уларҙың шәүләләре айырым серле, айырым мөхәббәтле күренде. Беҙ тағы ла оҙаҡ-оҙаҡ ҡарап торор инек, улар беҙгә «китегеҙ» тигән ишара яһанылар. Беҙ һүҙһеҙ генә бүлмәбеҙгә ҡайттыҡ. Беҙҙең һәр беребеҙҙә үҙ тойғобоҙ ине. Ҡайтып сисенгәс, Новиков һуҙып ҡына:

— Көтөлмәгән эш булды! — тине. Мин дә:

— Да!.. — тинем дә башҡа һүҙ әйтмәнем. Новиков ни эшләгәндер, йоҡлағандырмы, әллә шул тойғолар эсендә ятҡандыр-

мы — мин уга ҡараманым, уның хәрәкәтенә ҡолаҡ та һалманым. Мин, таң яҡтыһына ҡарап, бик оҙаҡ йоҡлай алманым. Һыҙылып яҙғы таң ата. Таң яҡтылығы ситендә бер йондоҙ йылтырай. Ул күскән кеүек, миңә табан килгән кеүек була. Мин унан күҙемде алам да эске тойғоға батам. Ул йылы, ул рәхәт, ул Ирочканың йылы, ҡайнар һулыштары менән һуғарылған, мин шуға төрөнгәнмен. Мин шуның эсендә ятам.

— Ирочка!.. Ирочка!..

Бәлкем ул да йоҡламай торғандыр. Ул йоҡламағас, мин дә йоҡламайым.

## ЕТЕНСЕ БҮЛЕК

Беҙ йоҡлай инек әле. Беҙҙе унтер-офицер Карташов уятты.

— Беҙ һеҙҙе юғалттыҡ. Беҙ йоҡлап ятаһығыҙ икән, — тине. Ләкин һүҙҙәрен приказ юлы менән әйтмәне. Йомшаҡ һәм дусҭарса әйтте. Новиков урынынан һикереп торҙо:

— Ни бар?

— Китәбеҙ, аттар егелгән. Команда күптән юлда инде. Әйҙә тиҙерәк йыйынығыҙ! — Карташовтың был һүҙе беҙгә уҡ кеүек ҡаҙалды. Мин ырғып тороп кейенә башланым. Новиков, күҙҙәрен тултырып, Карташовҡа ҡарап ҡалды. Карташов көлөмһөрәп:

— Новиков, әллә йоҡоң туйманымы? — тип, уның арҡаһына һуҡты. Новиков карауатынан һикереп төштө лә аңра кеше һымаҡ:

— Ни эшләп улай тиҙ уйланылар? — тип һорау бирҙе. Карташов ғәжәпләнгән ҡиәфәт менән:

— Хәрби эш бит, уның иртәһе, һуңы юҡ. Поручик шулай приказ бирҙе, — тине лә сығырға ашыҡты. Ул арала мин кейенеп бөткәйнем, сумкаларҙы йыйыштыра инем. Новиков һаман бер итеген кейеп, икенсеһен тотоп уйланып ултыра ине. Мин уны ашыҡтырҙым:

— Әйҙә, һуңға ҡалмайыҡ! — тинем. Ул миңә яуап ҡайтарманы, һөйләнмәйенсә генә кейенде. Мин, тәмәке тоҡандырып, тәҙрәнән ҡарап торам. Кисәге ваҡиға миңә төш кеүек тойола. Минең күңел ышанмай. «Ысынлап та шулай булдымы?» тигән һорауҙы үҙемә бирәм. Хәҙер уйҙар әкрен, һалмаҡ ҡына ағалар. Шөбһә менән ағалар. Кисәге күренештәр, миңә алыҫта, сағымланып, тулҡынланып күренәләр. Новиков миңә ҡысҡыра:

— Йә, ни эшләп тораһың? — ти. Мин уға:

— Ирочкалар тураһында уйлап торам әле, — тинем. Новиков ҡулына тотҡан сумкаһын кире карауатҡа атып бәрҙе. Артыҡ ғасабиланып[1], тулҡынланып иҙәндә йөрөй башланы:

[1] ***Ғасабиланыу*** — ҡыҙып китеү, ярһыу, ҡыҙыу.

— Мин дә шуны уйлап торам. Сәнселеп китһендәр! Ҡайҙан китергә ваҡыт тапҡандар. Исмаһам, бер генә көн торорға ине!.. Былай булһа, беҙ уларҙы күрә алмай ҙа китәбеҙ бит инде!..

Новиковтың «күрә алмай ҙа китәбеҙ» тигән һүҙе миңә ниндәйҙер көс бирҙе. Мин тиҙ генә ишек төбөнә килдем.

— Әйҙә, сығабыҙ! — тип атлай башланым. Новиков, елкәһенә аҫа торған сумкаһын ҡулына тотоп, минең арттан сыҡты. Беҙ сыҡҡанда бөтә аттар егелгән, алдағы повозкалар, ҡуҙғалып, ҡапҡанан сығалар ине. Беҙ ашығып Карташов бричкаһына ултырҙыҡ. Аттар ҡуҙғалды. Беҙҙең күҙҙәр тәҙрәләрҙә. Ишек алдында бер ҡыҙ ҙа күренмәй, тимәк, улар дәрескә ингәндәр. Сәғәт 11, дәрес ваҡыты.

Беҙ, ҡапҡанан сығып, ҡойма буйлап, күпергә төшкәндә, ике ҡатлы аҡ йорттоң көньяғында, веранда баҫҡысында, аҡ күлдәкле ике ҡыҙ баҫып тора ине. Новиков, уларҙы күреп, фуражкаһын болғаны. Уның артынса мин дә болғаным. Улар беҙгә бер ишара күрһәтмәнеләр. Һаман бер урында һөйәлеп ҡалдылар. Беҙ һаман фуражкаларҙы болғай-болғай, артҡа ҡарап барҙыҡ. Улар баштарын түбән баҫтылар. Новиковтың күңеле йомшарҙы:

— Күрәһеңме, улар илайҙар, — тине. Беҙ фуражкаларҙы башыбыҙға кейеп, ҡарап ҡына бара башланыҡ. Улар беҙгә айырым-асыҡ күренәләр ине. Гонаһ шомлоғона ҡаршы, беҙҙең юл урманға инде. Веранда ла, унда торған кешеләр ҙә йәшеренделәр. Беҙ баштарҙы баҫып, ауыр тойғоларға сумдыҡ.

Карташов, беҙҙең был ҡыланышҡа өндәшмәй барған икән, урман эсенә ингәс тә, беҙ һаман артҡа ултырып барғас, ул беҙҙе шаяртып:

— Был яҡҡа әйләнегеҙ инде, урман аша барыбер күрә алмаҫһығыҙ, — тине. Был һүҙ беҙгә ауыр тойолдо. Новиков ҡарлыҡҡан тауыш менән:

— Пожалуйста, тик барығыҙ, һеҙҙән һорамайҙар бит! — тип, үҙ килешендә ултырып бара бирҙе. Беҙ шул асыуҙан тәмәке тоҡандырҙыҡ. Карташов та беҙгә башҡа һүҙ өндәшмәне. Бер арбала өс кеше бер һүҙһеҙ тын ғына бара инек. Тик күсер генә һүгенә-һүгенә аттарын ҡыуа ине.

## ҺИГЕҘЕНСЕ БҮЛЕК

Беҙ баҙарлы местечкоға килдек. Местечконың бөтә халҡы тип әйтерлек еврейҙарҙан тора. Мал баҙарында поляк крәҫтиәндәре. Беҙ арбанан төшөүгә казначей килде.

— Маклерҙар кисә үк килеп мал алғандар. Крәҫтиәндәр аҡса көтәләр. Тиҙерәк барып, һатып алынған малдарҙы ҡабул ит! Инструкция буйынса быуаҙ малдарҙы, сирле малдарҙы алырға ярамай. Ҡалғандары һимеҙме, арыҡмы — барыһы ла бара, — тине. Мин әле үҙ эшем тураһында яңы мәғлүмәт алам.

Быға тиклем ул турала уйға ҡалдым. Мин башҡорт булып, башҡорт ауылында үҫһәм дә, ошо көнгә тиклем баҙарға сығып бер баш мал алғаным юҡ. Малдың һимеҙлеген, арыҡлығын һынап ҡарағаным юҡ, быуаҙ мал тураһында мин аҙ ғына булһа ла хәбәрҙар түгел. Хатта һыйырҙың быҙаулаған сағын да күргәнем юҡ. Мин, бөгөн һуғышта йөрөһәм дә, был йәшемә тиклем тауыҡ та, сысҡан да һуйғаным юҡ. Бөгөн мин армия өсөн көтөү-көтөү малды ҡарап ҡабул итергә, ҡабул итеү актына ҡул ҡуйырға тейешмен.

— Бөттө баш!..

Юлда барғанда үҙемдең хәлемде Новиковҡа һөйләп барам. Ул мәсьәләгә еңел, анһат ҡарай:

— Уның нимәһенә ҡарайһың, тот та ҡабул ит, иҫерек баштар шуны тикшереп торорҙар тип уйлайһыңмы? Унан һуң өйрәнерһең...

Новиковҡа бер яҡтан асыу килә. Икенсе яҡтан күңелде йылытам. «Әйҙә, һынап ҡарайым әле», — тигән булам. Ләкин күңел ҡурҡа, ысын шөрләй:

— Әгәр берәй яңылыш эш эшләһәм, полевой судҡа бирерҙәр, атырҙар, беҙҙе шуның өсөн юрамал ебәргәндәрҙер?.. — тигән береһенән-береһе ҡурҡыныс уйҙар башҡа киләләр. Мал ҡамалған аҙбарға килдек. Ҡапҡа төбөнә өҫтәл ултыртылған, өҫтәл эргәһенә дүрт-биш мылтыҡлы һалдат ҡуйылған, ике маклер мине ҡаршы алды:

— Һеҙ ҡабул итәһегеҙме? — тинеләр. Мин ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына:

— Эйе, мин!.. — тинем. Өҫтәлдән миңә урын күрһәттеләр. Мин, өҫтәлгә ултырғансы, ҡапҡа аша малдарға күҙ һалдым. Ни күҙем менән күрәйем — ул аҙбарға бер нисә йөҙ баш сусҡа бикләнгән!.. Бысраҡ аҙбарҙа арҡаларына тиклем батҡаҡҡа сумған сусҡалар ғыззз итеп сыйылдашып, тулҡынланып торалар. Был сирҡаныс күренешкә минең тәндәрем эҫеле-һыуыҡлы булып киттеләр. Күҙ алдарым ҡараңғыланды. Көскә генә өҫтәлгә килеп ултырҙым. Мин быға тиклем һарыҡ, һыйыр малдары тураһында баш вата инем. Хәҙер минең алдымда башыма килмәгән, ата-бабам аҫрамаған сусҡалар сыйылдашалар. Уларҙың сыйылдашыуҙары ҡолаҡтарымды ярып, йөрәгемә әсе ут булып инделәр. Шуларҙы күрмәҫкә, тауыштарын ишетмәҫкә тиҙерәк-тиҙерәк ҡасырға уйланым. Ләкин мөмкин түгел. Мин шул ауыр тәьҫораттан айнып етмәнем, уға тиклем сусҡаларҙы аҡыртып берәм-берәм минең алға алып килә башланылар. Маклерҙар:

— Господин приемщик, йә, нисек, ярарлыҡмы? Беҙҙеңсә, ярарлыҡ бит! — тиҙәр. Ҡолағына тиклем бысранған сусҡалар тураһында мин ни беләм? Ул ауырыумы, быуаҙмы — береһен дә белер әмәл юҡ. Күбеһенең эстәре шалпайып төшкән. Имсәктәре ергә һөйрәлеп баралар. Үҙҙәре өҙлөкһөҙ мырҡылдайҙар. Нығыраҡ тотһалар, әсе тауыштар менән ҡолаҡтарҙы ярырлыҡ

итеп сыйылдап ебәрәләр. Мин уларҙың тауыштарынан тиҙерәк ҡотолоу өсөн:

— Ярай, үтерлек! — тигән булам. Ул сыйылдауҙар араһында минең тауыш әллә ишетелә, әллә юҡ, һаман алып үтә бирәләр. Минең күҙҙәр талды, ҡолаҡтар тондо; миңә сусҡаларҙың йә аяҡтары ғына, йә ҡорһаҡтары ғына, йә ҙур ҡолаҡтары ғына, йә кәкрәйеп торған ескәй ҡойроҡтары ғына күренә, күҙгә салына башланылар. Минең алдан бер нисә йөҙ сусҡа үтте, барыһына ла:

— Ярай, үтерлек! — тип, тутыйғош һымаҡ бер һүҙҙе ҡабатлап ултыра бирәм. Минең башҡа бер уй төштө, мин әйтәм:

— Туҡта, былай ярамаҫ, бер аҙ формаһына килтерәйем. Ошо тиклем сусҡа араһынан исмаһам бер нисәһен бракка сығарырға кәрәк! — тип уйланым. Ҡапыл айнып китәм дә, күҙҙәрҙе нығыраҡ асып, бер аҙ урындан ҡалҡа төшөп, сусҡаларға иғтибарлыраҡ ҡарай башлайым.

Йәш кенә, түңәрәк, һимеҙ сусҡалар үтәләр. Йәш булғас, таҙа, һимеҙҙер, тип уйлайым. Бына берәүһе килеп сыҡты. Бегемот ҙурлығы булыр. Эсе шалпайған, әллә ни тиклем имсәктәре ергә тейә яҙып киләләр. Ҡорһаҡ аҫтары ҡып-ҡыҙыл, сейләнгән кеүек тора. Үҙе бысраҡ, ҡарауға имәнес инде. Үҙе өҙләкһеҙ ҡалын тауыш менән мырҡылдап килә:

— Был быуаҙ икән, ситкә алығыҙ! — тинем. Шуны ғына көтөп торган һалдаттар мылтыҡ прикладтары менән төртөп сыйылдатып ситкә сығарып ебәрҙеләр. Уның артынса теге ҙур сусҡаның эйәһе — ҡарт поляк крәҫтиәне минең аяҡҡа килеп йығылды, бүркен алып, Алла исеме менән миңә ялына башланы:

— Уның балалауына бер генә ай булды. Ул быуаҙ түгел. Ул бик яҡшы тоҡом сусҡаһы. Ул егерме бот ит бирә. Нуждам өсөн генә һата инем. Господин, пожалуйста, ҡабул итегеҙ инде!

Мин ғәжәп уңайһыҙ хәлгә ҡалдым. Ни әйтергә белмәнем. Аптырағас, бер һүҙ әйтмәҫкә ҡарар иттем. Һалдаттар, крәҫтиәнде етәкләп, өҫтәл эргәһенән алып киттеләр. Шунан һуң тағы ла баяғыса, бөтә сусҡаларҙы:

— Ярар, үтерлек! — тип үткәрә башланым.

Был баҙарҙа бер һарыҡ, бер һыйыр булманы. Алғандары ылғый сусҡанан тора ине. Сусҡаларҙың сыйылдауҙарына, күҙ алдынан үткән имәнес картинаға минең иҫ китте, ҡолаҡтар тондо. Фатирға аңра булып ҡайттым. Тиҙ генә карауатҡа йығылдым.

Тәмәке тартып уйлап ятам: «Кисә генә Ирочкалар эргәһендә аҡылдан шашып, бөтә донъяны онотоп, уның бөҙрә сәстәре арҡыры ҡайнар, йомшаҡ битенә башымды ҡуйып ултыра инем. Ул минең өсөн тормошомда осраған иң ҡәҙерле, иң ләззәтле минуттар ине. Бөгөн имәнес, сирҡаныс сусҡалар араһында ултырам. Уларҙың тауыштары минең йөрәгемде тутлы бысаҡтар менән ҡырҡалар. Мин Ирочкамды уйлаған, уның тураһындағы

тойғоларым менән ләззәтләнгән мәлдә, ҡолаҡтарыма мырҡылдаған, сыйылдаған сусҡа тауыштары инәләр».

Кис Новиков менән бик оҙаҡ йоҡламаныҡ. Көйләшеп яттыҡ, төрлө пландар ҡорҙоҡ:

— Бер төн приютҡа Ирочка, Женялар эргәһенә барырға, уларҙы алып, ҡасҡын поляк крәҫтиәндәре булып, тегеләр менән Рәсәйгә ҡасырға... Кире фронтҡа барып, үҙебеҙҙе үҙебеҙ яралап лазаретҡа китергә, шунан һуң отпуск алып Женялар, Ирочкалар эргәһенә килергә.

Ләкин бер план барып сыҡмай, ҡалай ҙа килештереп булмай. Пландар барып сыҡмағас, беҙ бер-беребеҙ менән һөйләшмәй, тын ятабыҙ. Шунан һуң, гүйә, бер еренә ут тоҡанған кеүек Новиков һикереп тора. Иҙән буйында ҡыҙыу-ҡыҙыу йөрөй башлай. Бөтә донъяһын яндырып һүгергә тотона:

— Уйлап ҡараһаң, тиреңә һыймайһың. Йә, уйлап ҡара, беҙ ни өсөн, кем өсөн былай итеп йөрөйбөҙ? Быларҙың барыһы ла халыҡтың аңралығынан! Эгәр ҙә аңра булмаһалар, һарыҡ көтөүе һымаҡ утҡа баралармы ни улар? Бер уйлағанда, һарыҡ көтөүенән дә аңрараҡ. Бар, һарыҡтарҙы утҡа ҡыуып ҡара, улар янып торған утҡа мәңге бармайҙар. Атһаң да бармайҙар. Э беҙ, аңралар, барабыҙ. Уның өсөн беҙгә ни бирәләр? Кукиш! — Бер аҙ уйлап тора. — Эгәр ҙә халыҡҡа үҙенең шул аңралығын төшөндөрһәң, береһе лә бармаҫ ине. Был һуғыш күптән, хатта башланмаҫ борон бөткән булыр ине, уйлап ҡара: әле беҙ яңы донъя күрәбеҙ, әле беҙ тормоштоң рәхәтен яңы һиҙә башланыҡ. Шул ваҡытта себен кеүек итеп, һине бер снаряд һытып үлтерһен! Ул һуғыштан мин ни файҙа күрәм? Миңә уның ни кәрәге бар? Унан кем файҙа итә? Әлбиттә, беҙ түгел. Әлбиттә, өйөндә бот күтәреп, түбәгә төкөрөп ятҡан байҙар файҙа итәләр. Ошо беҙҙең арабыҙҙа ҡайһы байҙың балаһы хеҙмәт итә? Барыһы ла ярлылар. Ҡайҙа ла ярлылар ҡырыла, ҡайҙа ла ярлылар этлек күрәләр. Бер уйлағанда, беҙгә бер пуля атырға ла ярамай. Ә беҙ, аңралар, көн-төн йоҡламай, ас, яланғас ут эсендә йорөйбөҙ, һис бер маҡсатһыҙ, себен кеүек ҡырылабыҙ.

Новиков был һүҙҙәрен әллә ҡайҙа, юғарыға ҡарап һөйләне. Мин уны айырым бер тулҡын менән тыңланым. Ул эскәмйәгә ултырып тәмәке тарта башлағас, мин дә ятҡан урынымдан тороп:

— Уйлап торһаң, дөрөҫ инде, әй!.. — тип, шинелде яурынға һалып, Новиковҡа ҡаршы ҡарап ултырҙым. Йоҡо асылды. Хәҙер төн урталары яҡынлаша инде. Беҙ икәү һаман ултырабыҙ. Окопта ҡалған Байғужа, Буранбай, Индрилдарҙы иҫкә алдыҡ. Беҙ уларға әллә ҡасан хат яҙырға уйлағайныҡ. Ләкин беҙҙең көндәр әллә нисек үтәләр. Күп ваҡыт буш йөрөйбөҙ. Ә хат яҙырға ваҡыт тапҡаныбыҙ юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, ултырып хат яҙырға кәйеф булғаны юҡ. Йөрәк ярһый, йөрәк тулҡынлана, йөрәк бер урында түгел. Окопта мәлдә беҙҙең күңелдә артыҡ теләк юҡ

кеүек ине. Һәр бер выжлаған пуля, һәр бер ярылған снаряд беҙгә иркен уйларға, иркен фекер йөрөтөргә мөмкинлек бирмәй ине. Уйҙар томаланған, тойғолар тупаҫланғайны. Беҙҙә ике хайуан тойғоһо бар ине: береһе — йәнде һаҡлау, икенсеһе — ас ҡарынды туҡландырыу. Хәҙер беҙ окоптан ситкә киткәс, иркенгә, ҡурҡынысһыҙ ергә сыҡҡас, окоп дәһшәттәре бөтә киңлеге менән күҙ алдынан үтәләр, һәр бер күренештәре йөрәккә ут ағыҙалар. Тормоштоң матур яҡтары, йәшәүҙең ләззәте, рәхәте, күңелдең шуға ирекле булырға теләүе. Шул иреккә күңелдең ярһыуы, тулҡынланыуҙы, баштағы уйҙарҙы, хыялдарҙы эшкә тарталар, уларға майҙанды киң итеп йәйеп ебәрәләр.

Оҫта һунарсылар, яланға сыҡҡанда, һунар эттәрен айырым бер ябыҡ аҙбарға тейәп алып сығалар, һис тә булмаһа, муйынына еп менән бәйләп алып баралар. Ул ваҡыт эт һунар ҡомары менән ярһынып, елкенеп бара. Ул түҙемһеҙлек менән үҙенең йәнлеген көтә. Уның күҙҙәрен ҡан баҫа. Ләкин, ул ҡасан булыр, ҡасан осрар, ҡасан һырт биреп ҡасыр, уны күрмәй. Ул уны һунарсы эйәһенең ишараһынан көтә. Уның өсөн шундай минут була. Уйламағанда бер йәнлек күренә. Һунар ҡомары менән күҙҙәрен ҡан баҫҡан эт, бауын ысҡындырып, бер генә «һөс!» тиеү менән, бөтә көстәре, бөтә ғәйрәте менән алға атыла. Уға ут, һыу күренмәй, соҡор, таш беленмәй, тик уның күҙҙәренә алдынан тәгәрәп барған йәнлек нөктәһе генә күренә. Уның ярһыған йөрәге шул нөктәгә етеү өсөн ашҡына. Ул минут уның өсөн донъяла шул тәгәрәп барған нөктә генә бар. Уның өсөн уйлаған уйҙарҙың сиге шунда ғына...

Бөгөн беҙҙең уйҙар, хыялдар ҙа, нәҡ бауҙан ысҡындырылып, һунарға ебәрелгән эт кеүек ярһынып, ашҡынып сабалар. Беҙҙең уйҙар, хыялдар беҙҙең күңел теләгән ирек нөктәһенә ҡарап сабалар. Уларҙы тыйыу, йүгәнләү мөмкин түгел. Беҙ үҙебеҙ шул уйҙар, хыялдар артынан сабабыҙ. Сөнки беҙҙең уйҙарҙың сиге беҙҙең өсөн ана шул ирек нөктәһендә күренә...

Беҙ үҙебеҙ йоҡонан үҙ ваҡыты менән уянмай башланыҡ. Бөгөн дә беҙгә, таң хәбәрсеһе булып, әлеге унтер Карташов килде. Ул беҙҙе уятҡанда иртәнге сәғәт ун ине инде. Карташов беҙҙән көлдө:

— Һеҙ тамам бариндар булдығыҙ! Һеҙҙе обязательно уятырға кәрәк. Унан һуң кейенеү өсөн кейемдәрегеҙҙе тотоп торорға кәрәк.

Новиков ғәҙәте буйынса, нимәгәлер, уға бәйләнмәне. Сөнки был һүҙҙәрҙе Карташов ысынға алып әйтмәне. Ярым шаярып ҡына һөйләне. Новиков бик етди ҡиәфәт менән:

— Беҙ окопта айҙар буйы йүнле йоҡо күрмәнек. Хәҙер шуның ҡәҙерен белергә кәрәк. Кем белә, тағы иртәгә окопҡа ебәрерҙәр, — тине. Карташов сығып китте. Уның артынса, минең күҙ алдына тағы сусҡа көтөүҙәре килеп баҫты. Улар мырҡылдайҙар, сыйылдайҙар. Уларҙан аңҡып торған һаҫыҡ тиреҫ еҫтәре тағы минең танауға бәреләләр.

## ТУҒЫҘЫНСЫ БҮЛЕК

Беҙ кескәй генә баҙарлы ауылға килеп ингәндә, урамда атлы казактар йөрөйҙәр ине; маклерҙар баҙар мөйөшөндә беҙгә ҡаршы осранылар.

— Бөгөн бында баҙар булманы. Баҙарҙағы халыҡты атлы казактар таратты, — тинеләр. Беҙ аптырап ҡалдыҡ. Ысынлап та, урамда халыҡ юҡ. Тәҙрәнән урамға ҡараған йөҙҙәр күренәләр. Һәр тәҙрәгә ҡараһаң, баш артында баш күренә. Беҙ урамға килеп туҡталғас, күп күҙҙәр беҙгә шөбһә менән ҡарайҙар. Ҡайһы тәҙрәләр ҡапыл ябылалар, йәки тәҙрәләрҙән баштары эскә тартылалар. Урамдан ҡыйыш арбаға ултырған бер еврей ҡарты килә. Ул ынтылып-ынтылып атын ҡыуа, йөрөшөн тиҙләтергә тырыша, уға ҡаршы йөҙгә яҡын атлы казак килә. Улар баҙарҙан юғары үтәләр. Бер атлы казак беҙҙең янға килеп тәмәке тоҡандыра, һорашабыҙ:

— Баҙар ниңә таратылды?

— Еврейҙәр, поляктар бунтовать итәләр.

Ул туҡтап торманы, юлына китте. Беҙ ҙә постоялый дворға табан аттарыбыҙҙы борҙоҡ. Начальниктан приказ булғансы, үҙебеҙ тамаҡланырға, аттарыбыҙҙы ашатырға булдыҡ.

Беҙ постоялый дворға инеп ҡағынып, йыуынып йөрөгәндә беҙҙең янға бер поляк ҡарты килде. Заманында ыҫпай, килбәтле ир булғанға оҡшай. Аяғына иҫке итек башы, ҡыҫҡа балаҡлы туҙып бөткән салбар, өҫтөнә ташландыҡ һалдат шинеле, башына козырекһыҙ фуражка кейһә лә, кәүҙәһе төҙ, йөҙ һыҙыҡтары дөрөҫ, эскә батҡан ҙур күҙҙәре генә өмөтһөҙ ҡарайҙар. Ул беҙҙән икмәк һораны. Новиков йөктән сумкаһын алып уға икмәк телеп бирҙе. Беҙ уның кем икәнлеген һорашманыҡ, ул икмәкте алып ҡултығына ҡыҫтырыу менән беҙгә һорау бирҙе:

— Һеҙ ҡайһы яҡтан булаһығыҙ?

Мин уға:

— Һаҡмар яғы, — тинем. Ул баҫҡыс төбөнә барып ултырҙы ла бик ҡәнәғәт төҫ күрһәтеп, һүҙгә башланы:

— Исмаһам, һеҙ һуғышта йөрөһәгеҙ ҙә, һеҙҙең ата-әсәләрегеҙ йылы, тыныс урында ҡайғыра торғандарҙыр. Э беҙҙең хәлде һөйләргә түгел. Бына минең бер балам һуғышта йөрөй. Минең йортом позиция уртаһында ҡалды. Хәҙер минең семьям да юҡ. Үҙем генә...

— Семьяң ҡайҙа, ҡарт? — тинем. Ул башын түбән баҫты. Күҙҙәренән бер нисә тамсы йәш тамды. Уның күҙ йәше минең өсөн бик ауыр булды. Мин, ҡарттың йәшен күрмәҫ өсөн, ситкә ҡарап, тәмәке төрә башланым. Ул әрнеүле тауыш менән һүҙен дауам иттерә башланы.

— Һорашма инде, һалдат. Эле беҙҙән фронт байтаҡ алыҫ ине. Мин яланда саҡта немец аэропландары бомба ташлағандар. Шунда минең ауырыу ҡарсығым да, утта ҡалған йәш ба-

лаһын ҡотҡарам тип, балаһы менән киленем дә яндылар. Өйҙөң нигеҙ урыны һәм көлдәре генә ҡалдылар. Бер мин генәме ни, хәҙер минең ишеләр меңәрләп, унар меңләп һаналалар. Баҫыу ерҙәребеҙ ҡаҙылып, боҙолоп бөткән, йорттар емерелгән, бөтә фронт буйы менән халыҡтар, уларҙың бала-сағалары торлаҡһыҙ, асыҡ һауала ҡалғандар.

Ҡарттың был һүҙҙәре йөрәктән, тәрәндән ҡайнап сығалар. Ул фронт фажиғәһе кисергән йөҙҙәрҙең, меңдәрҙең йөрәге. Хәсрәтен, аһын һөйләй. Уның һүҙҙәре артында халыҡ фажиғәһе ята. Өйҙән арыҡ һәм ҡаҡса ғына бер еврей сыҡты. Күрәһең, ҡарттың һүҙҙәрен тыңлап торған. Ул ҡарттың һүҙен бөгөнгө баҙар ваҡиғаһына бәйләп алып китте.

— Ай-һай, ай-һай, яман эшләйҙәр. Атлы казактар яман эшләйҙәр. Бына һеҙ ҙә крәҫтиән балалары бит. Уйлап ҡарағыҙ, уйлап ҡарағыҙ. Фронт буйында ерҙәре ҡалған крәҫтиәндәр батшаға прошение биргәндәр. Тиҙерәк мир яһал ыуын һорағандар. Шуға яуап булмағас, бөгөн баҙарға йыйылған крәҫтиәндәр шаулаша башлағандар. Бөгөн шуның өсөн атлы казактар бөтә местечконы айҡап сыҡтылар. Крәҫтиәндәрҙе арестовать иттеләр. Еврейҙарҙың лавкаларын таланылар. Бында еврейҙың ни ҡатнашы бар? Уның ере юҡ. Улар батшаға ғариза бирмәгәндәр. Ай-һай, ай-һай, атлы казактар насар эшләйҙәр. Насар эшләйҙәр...

Әллә беҙҙән шикләнепме, теге еврей ашығып ҡапҡанан сыҡты. Һарай аҫтынан бер нисә ҡасҡы крәҫтиәндәр килеп беҙҙең түңәрәккә сүгәләп ултырҙылар. Беҙ Новиков менән уларҙың хәбәрҙәрен тыңланыҡ. Уларҙың да бөтә фекерҙәре прошениеның бөгөнгө һөҙөмтәһе тураһында йөрөй. Яҙ етә башлағас, бер нисә прошение яҙҙырғандар, ул прошениеның ҡыҫҡаса айышы ошолай булған:

> «Хәҙер яҙ яҡынлаша, сәсеү миҙгелдәре етә. Баҫыу, ерҙәребеҙ һуғыш аҫтында яталар. Әгәр был яҙ иген сәсә алмаһаҡ, беҙҙең бөтә ерҙәребеҙ әрәм булып ҡалалар. Семьяларыбыҙ тағы ла ас ҡаласаҡ. Беҙгә кәсеп юҡ. Шул аяныс хәлебеҙҙе бәйән итеп, һеҙ ғали император хәҙрәттәренән үтенәбеҙ: бөтә ил һәм һуғыштан аҙап күргән халыҡтарҙың күҙ йәштәре хаҡына сәсеү ваҡытына тиклем солохҡа килеүегеҙҙе».

Бындағы крәҫтиәндәр, шул прошениеға таянып, мир көткәндәр, уларҙан аҡса алып, прошение яҙған адвокаттар ул прошениеның батша тарафынан иғтибарға алыныуына халыҡты ышандырғандар. Ниһайәт, халыҡтың түҙеме бөткән. Яҙ еткән. Сәсеү ваҡыттары уҙып баралар. Әле мир тураһында бер нәмә лә юҡ. Шул түҙемһеҙлектән сыҡҡан крәҫтиәндәр, баҙарға йыйналғас, шунда кәңәш иткәндәр ҙә адвокат өйөнә барғандар. Уны быуып ырғытырға уйлағандар. Ул ҡасҡан, уның асыуын

приставтан алырға уйлағандар. Ул да ҡасҡан. Уның тәҙрәләрен ватҡандар. Военный складҡа һөжүм иткәндәр. Ләкин был хәрәкәт йәйелеп өлгөрмәгән, яҡын-тирәлә ятҡан атлы казактар быларҙың хәрәкәтен баҫып өлгөргән. Беҙ нәҡ шул финал бөткән мәлдә генә килгәнбеҙ.

Новиков был ваҡиғаға артыҡ әҫәрләнде. Ул башта, ике ҡулын яңағына ҡуйып, бик оҙаҡ тыңланы. Крәҫтиәндәр һүҙенә ҡатнашманы. Һуңынан бөтә ата-бабаларынан алып атлы казактарҙы һүкте.

— Бына эске дошман тигәндәре шулар инде. Һай, шәп кешеләр ни... Бындай ҡоралһыҙ, ярҙамһыҙ ас крәҫтиәндәрҙе туҡмарға килгәндәр. Шәп булһа, улар фронтта һуғышһындар. Улар алғы позицияға бармайҙар шул. Унда беҙҙең кеүектәрҙе илтеп һалалар. Ә атлы казактар артта, крәҫтиән талап, һимереп яталар...

Новиковтың был ҡыйыу һүҙе крәҫтиәндәргә бик оҡшаны. Уларҙың барыһы ла Новиковтан риза булғандарын йөҙҙәрен йылмайтып, баштарын һелкеү менән белдерҙеләр. Ул арала унтер Карташов тәҙрәнән беҙгә ҡысҡырҙы. Сәйҙең әҙер булыуын белдерҙе.

Новиков крәҫтиәндәр эргәһендә сиселмәгәйне. Сәй эсергә ингәс, туҙынып китте. Атлы казагын да, генералын да, һуғышын да, бөтәһен дә ләғнәтләне. Эттән алып эткә һалды. Шым ғына тыңлап ултырған Карташов Новиков менән бәхәскә килде:

— Беҙ һүгенеү менән эш булмай бит. Бында мәсьәлә дипломатиянан тора. Дипломатия шулай. Шуның өсөн һуғыш кәрәк.

Карташов, бик тәрән мәғәнәле һүҙ әйткән кеүек, төҫөнә бик мөһим ҡиәфәт сығарып, күҙҙәрен йылмайтып, Новиковтан һүҙ көтә башланы. Новиков өсөн был дары өҫтөнә кәрәсин һипкән кеүек булды:

— Дипломатия тиһегеҙме? Дипломатия кем өсөн, беҙҙең өсөн түгел, крәҫтиәндәр өсөн түгел, үҙҙәре өсөн генә. Халыҡ аңра. Әгәр ҙә улар, аңра булмаһалар, ни за что һуғышҡа бармаҫтар ине. Бөгөн күрәһең бит әле. Улар хәҙер аңлай башлағандар. Уларға хәҙер аҡыл инә башлаған. Артына штык менән ҡаҙай башлаһаң, тиҙ аҡыл инә ул. Һынап ҡара: бөтә крәҫтиәндәр, эшселәр, шулай күтәрелеп ҡараһындар әле, һинең атлы казагың ҡайҙа бара? Ә һалдаттар, уларҙың барыһы ла һуғыштан туйғандар.

Новиковтың был һүҙенә Карташовтың кәйефе китте. Ул, ҡулына тотҡан шәшкеһен өҫтәлгә ҡуйып, маңлайындағы тирҙәрен һыпырып, урындығын Новиковҡа яҡыныраҡ килтереп, бәхәсләшергә тотондо.

— Һин социалистар һүҙен һөйләйһең, улар өсөн Ватан да юҡ, ил дә юҡ. Улар анархистар. Хуш, уйлап ҡара: әгәр беҙ ватан эсендә халыҡ ҡуҙғалышына ихтыяр бирһәк, ул ваҡыт

беҙгә, илгә немецтар хужа булалар. Улар беҙҙе иҙәсәктәр. Хуш, шунан ни файҙа итәһең? Бына йүләр баш.

Новиков, уның һүҙен бүлеп, өҫтәлгә бер һуғып ҡуйҙы.

— Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, господин Карташов? Немецтың крәҫтиәне, эшсеһе, ярлыһы юҡ тип беләһеңме? Уларҙың бөтәһе лә теләп һуғышалар, тип уйлайһыңмы? Әгәр ҙә һуғыш былай оҙаҡҡа һуҙыла башлаһа, бөтәһен дә көтөргә кәрәк.

Карташов башҡа һүҙ көрәштермәне. Өҫтәл эргәһенән тороп китте. Новиковтың кәйефе килде. Ул көлә башланы. Карташов иҙән буйында йөрөй, һыҙғыра, Новиков һаман да һөйләнә-һөйләнә сәй эсә. Новиковтың һүҙе араһында Карташов көйләп кенә:

— Да... да... — тип ҡуя ла тағы ла һыҙғырырға тотона. Мин Новиковҡа күҙ ҡыҫам. Карташов арты менән әйләнгәндә Новиков уға «нос» яһай, икәү көлөшәбеҙ. Карташов беҙҙең был ҡылыҡты яратманы ахырыһы, шинелен яурынына һалып, тышҡа сыҡты. Ул сыҡҡас, Новиков:

— Был бисара берәй дәрәжә алырға йөрөй, күрәһең. Ул ҡиәфәте менән барыбер прапорщик итмәйҙәр. Һаман унтер булып ауылыңа ҡайтырһың. Ул бик эре ҡылана, күп беләм тип уйлай буғай.

Беҙ бер аҙ ял иткәс, урамға сыҡтыҡ. Ҡапҡа төбөндә беҙгә Карташов осраны.

— Бөгөн ҡунабыҙ, иртәгә икенсе пунктҡа китәбеҙ, — тине. Үҙе ашығып ишек алдына инде. Урамда кешеләр күренә. Еврейҙар лавкаларын асҡандар, сауҙа итәләр. Беҙ, ҡаршы лавканан сығып, папирос алдыҡ. Папирос тартҡанда, полктағы иптәштәргә хат яҙырға кәңәшләштек. Бында күргән бөтә хәлдәрҙе теҙеп яҙырға булдыҡ. Шул ваҡыт Карташов ҡайтанан сыҡты ла мине өндәшеп алды:

— Һеҙ казначей эргәһенә протоколға ҡул ҡуйырға барығыҙ, унда һеҙҙе саҡыралар, — тине. Мин тиҙ генә инеп кейендем. Казначей эргәһенә ашығам. Беренсе мөйөштө ҡайырылғанда, бер ишек алдынан атлы казактар иллеләп крәҫтиәнде ҡарауыл аҫтында алып сыҡтылар. Уларҙың күбеһе алама кейемле, бойоҡ һәм ябыҡтар. Урамдағы кешеләрҙе бер нисә һыбайлы алдан ҡыуып ҡапҡаларына индерәләр. Мин дә бер ҡапҡаға индем. Үткәндәрен көттөм. Бер нисә ҡатын, балаларын эйәртеп, арестанттар артынан эйәргәйнеләр. Уларҙы ла атлы казактар, ҡыуып, бер ҡапҡаға индерҙеләр.

Мин казначейға индем. Ҡабул итеү протоколына ҡул ҡуйҙым.

— Башҡа эш юҡмы? — тип сығырға торғанда, мине поручик Аликсакин үҙ бүлмәһенә саҡырып алды:

— Йә, һаумы?

— Һау, ваше благородие!

Уның күҙ ҡабаҡтары шешенгән, тауыштары ҡарлыҡҡан,

ул йоҡонан яңы ғына торған, күрәһең. Ул тәмәке тоҡандыра, мин һаман уның алдында баҫып торам.

— Һеҙ һуғышты яратмайһығыҙмы әллә? — тине. Һынаулы күҙ менән миңә тура ҡараны, мин өҙөп кенә:

— Һис юҡ, ваше благородие!

Минең һүҙгә мыйығын көлдөрҙө. Уның таралмаған, рәтләнмәгән һары мыйығы өҫтөндә тәмәке төтөндәре бар ине. Шунан һуң ул:

— Мин ишеттем... — тип, бер аҙ уйланып торҙо. Шунан һуң «да» тип әҙерәк тыныш яһаны ла, миңә тура ҡарап, һүҙгә башланы:

— Һеҙҙе бунтовать иткән крәҫтиәндәр яҡлы, тип һөйләйҙәр. Ул дөрөҫ хәбәрме?

— Һис юҡ, ваше благородие!

— Э һинең иптәшең Новиков! Бәлки һин түгел, ул яҡлай торғандыр?

— Һис белмәйем, ваше благородие!

Ул минең һуңғы һүҙгә ҡапыл ҡабынды. Аяғын тибеп:

— Алдама һин, сволочь! Вон, марш! — тине. Минең аяҡтарым ҡалтыранды. Мин тиҙ генә әйләнеп сыҡтым. Артыма ҡарай-ҡарай ҡайтыуға ашыҡтым. Урамда мин берәүҙе лә күрмәнем. Был хәлде Новиковҡа еткерергә ашыҡтым.

Сөнки эш шәптән түгел, бының ахыры хәйерле бөтәсәк түгел ине. Өйгә ҡайтып етер алда, Карташов иҫкә төштө. Шунан башҡа бер кем дә түгел. Сәй алды ваҡиғаһын шул поручик Аликсакинға түкмәй-сәсмәй генә еткергән. Минең быға иманым камил ине.

Мин бүлмәгә ингәндә, тәҙрә төбөндә Новиков хат яҙып ултыра ине. Минең төҫөм бөтөп, туҙынып ингәнде ул һиҙҙе:

— Ни булды, ни бар? — тине. Ҡулындағы ҡәләмен ташлап миңә ҡаршы килде. Асыуҙан минең йөрәк ярһыған, тулҡынланған, һөйләр һүҙҙәрҙе һөйләп булмай.

— Карташов барып сыҡҡан! Поручикка барып донос яһаған! — тинем. Новиков мәсьәләгә тиҙ үк төшөндө. Тәҙрә төбөндәге яҙа башлаған хатын йыртып, тәҙрә арҡыры ырғытты. Гүйә, һуғышырға йыйынған кеше кеүек, ҡайыштарын төҙәтеп:

— Мине саҡыралармы? — тип ишек төбөнә барҙы. Мин:

— Белмәйем, — тинем. Карташов беҙҙең янда юҡ ине. Конюх уны командаға киткән, тип хәбәр бирҙе. Беҙ Новиковтың Аликсакин эргәһенә саҡырылыуын минут һайын көтә башланыҡ. Ул арала төрлө яуаптар әҙерләп ҡуйҙыҡ. Ҡапҡа төбөнә сығып ултырҙыҡ. Мөйөштән күренгән бер һалдатты Аликсакиндан килә тип уйланыҡ. Еврей лавкаһына барып бер нисә бутылка һыра эстек. Шулай ҡараңғы төшкәнсе тынысһыҙланып көттөк. Поручик саҡыртманы. Беҙ йоҡоға ятыр алдынан, Карташов бик эре генә инеп:

— Поручик Аликсакин приказ бирҙе. Һеҙ иртәгә үҙ часығыҙға китәһегеҙ! — тине. Беҙ ул приказды бик тыныс ҡына

ҡабул иттек. Сөнки беҙ унан яманырағын көткәйнек. Ләкин был беҙҙең өсөн, ниңәлер, уңай кеүек тойолдо. Новиков:

— Окоп беҙҙең өсөн яңы хәбәр түгел, — тине. Беҙ Карташов менән дә һүҙ көрәштермәнек. Юлға китергә йыйынған кешеләр кеүек йоҡларға яттыҡ. Йоҡо алдынан артыҡ тынысһыҙланманыҡ та.

Мин:

— Иптәштәрҙе күрәбеҙ инде! — тинем. Новиков та минең һүҙҙе ҡабатланы:

— Эйе, иптәштәрҙе күрәбеҙ инде. Әйҙә, йоҡлайыҡ әле, — тине. Шинелен бөркәнеп, бөгәрләнеп ятты. Окопта ултырған Байғужа, Индрил, Буранбайҙар минең күҙ алдынан китмәне. Шуларҙы уйлап йоҡоға киттем...

## УНЫНСЫ БҮЛЕК

Беҙҙең 286-сы Пошехонский полк һул фронтҡа Себер дивизияһы эргәһенә күскән. Был урында һыу яғы насар тиҙәр. Был тирәлә аҡҡан йылға ла, күл дә юҡ. Беҙҙең полк штабы эргәһендә бер ҡойо бар. Унда көн буйы оҙон сират тора.

Һары йөҙлө арыҡ балалар ҡайҙандыр һыу алып киләләр. Һалдаттарға һыу килтереп, икмәк алалар. Кухня тирәһендәге икмәк ҡатыларын, картуф ҡабыҡтарын йыйыштыралар. Шуларҙы бешермәйенсә ашайҙар. Тынысыраҡ ваҡытта хатта алғы линияға яҡын баралар. Шунда барып һалдаттар араһынан аҙыҡ йыйнап киләләр икән. Беҙ бер баланан һорашабыҙ:

— Нисек ҡурҡмай бында ҡалдың? Ҡайҙа ҡунаһың?

Ул, күҙенә төшкән ҙур фуражкаһын күтәреп, оло кешеләр һымаҡ итеп, бик эшлекле генә яуап бирә:

— Беҙҙең ауылды немецтар төндә алдылар. Беҙҙекеләр күсеп киттеләр. Мин аҙашып ҡалдым. Ҡайҙа барайым, ошонда йөрөймөн, — ти, тутыҡҡан ҡалай һауыттағы бысраҡ һыуын беҙгә тәҡдим итә. Беҙ уның һыуын алмаһаҡ та, уға аҙ ғына икмәк бирәбеҙ.

Хәҙер был фронт буйында ҡалған балаларға ҡаршы террор башланған. Полевой жандарм уларҙы әкренләп йыйыштыра. Уларҙың шпионлыҡ итеүенән шикләнәләр буғай, ләкин һалдаттар балаларға ярҙам итергә, уларҙы жандарм террорынан һаҡларға тырышалар. Уларҙың барыһының да өҫтөндә һалдат кейемдәре. Улар үлгән һалдаттарҙың кейемдәрен алып, шуның еңдәрен, итәктәрен ҡырҡып ташлап кейәләр. Уларҙа һаман балалыҡ, төрлө уйынсыҡтар менән мауығыусанлыҡ бар. Кеҫәләрендә әллә ни тиклем патрон, обоймалар, снаряд баштары, бомба капсюлдәре йөрөтәләр. Уларҙың араһында бомба капсюлдәре менән яраланғандары ла юҡ түгел. Улар ҙа, һалдаттар кеүек, немецтың снаряд һәм аэропландан ташланған бомбала-

рынан ҡорбан булалар. Емерек өйҙәр араһында төркөм-төркөм йөрөгән балалар өҫтөнә аэропландан бомбалар ташлайҙар. Уларҙы ысын һалдат тип уйлайҙар, күрәһең.

Беҙҙең полк окопта. Ундағы иптәштәрҙе һәр көн иҫкә алабыҙ. Ләкин полк штабына барып күренгән юҡ әле. Полк обоздары араһында буталабыҙ. Унда Йосоп Баҡыйбаев тигән бер башҡорт һалдаты менән таныштым. Ул Оренбург яғы. Үҫәргән волосынан. Ул беҙҙе туйҙыра, ул беҙгә һәр көн аш килтерә, аҙыҡ табып килтерә. Уның менән дуҫлашып киттек. Ул беҙҙе обозға алып ҡалырға уйлай:

— Мин начальник менән һөйләшәм. Лучше бында ҡалығыҙ! — ти. Ләкин ниңәлер беҙҙең ҡалғы килмәй.

Бында килгәс, Новиков менән икәү күберәк Женя, Ирочкалар тураһында һөйләшә башланыҡ. Ауылда йөрөгәндә һәр ваҡыт уларҙы иҫкә алһаҡ та, ашҡынып күреү теләге ул тиклем тыумағайны. Окопҡа китер алда уларҙы күреү теләге тағы ла көсәйә төштө. Шул осрашыуҙың рәхәтен тамам татығы килә. Окопҡа ингәс, ул матурлыҡтар һис кире ҡайтмаҫ, мәңге ҡайтмаҫ кеүек тойола. Йәшел үләндә салҡан төшөп, төпһөҙ күк бушлығына ҡарап, һүҙһеҙ-ниһеҙ тик кенә ятҡан саҡтарҙа, Новиков романтикаға бирелеп китә.

— Шайтандар, ниндәй матурҙар, һөйкөмлөләр бит улар! Һын-килбәттәре, йөҙҙәре ҡойоп ҡуйған кеүек килешәләр. Әгәр ҙә мирный ваҡыт булһа, улар беҙгә ҡарамаҫтар ине, ә хәҙер улар беҙҙе яраталар. Мин үҙ ғүмеремдә ҡыҙ ятратҡаным юҡ ине, мине лә ҡыҙҙар яратҡаны юҡ ине. Беләһеңме, был беренсе тапҡыр.

Мин өндәшмәйем, үҙ уйыма күмелгәнмен. Сөнки ул үҙе тураһында һөйләгәндә, мин үҙемдекен кисерәм. Шунан һуң ул миңә балаларса һорау бирә:

— Һинең яратҡаның бармы?

Мин уға ҡапыл ғына яуап бирмәйем. Мин Нина тураһында әйтергә уңайһыҙланам. Мин, һүҙҙе уралтып:

— Шундайыраҡ эш булғайны. Ләкин ул үҙемдән булманы, — тимен. Ул, ятҡан еренән тороп, минең эргәмә ултыра.

— Йә, һөйлә әле, ҡыҙыҡтыр ул. Ысынлап та, ҡасан, ҡайҙа, нисек булды? Һөйлә әле, Булатчик, һөйлә? — Мин ҡалай ҙа булһа һөйләмәҫкә тырышам. Ниңә әйтеүемә үкенәм. Ул ҡыҫтап һорай. Ялындырғас, үпкәләргә тотона. Сөнки бөгөн Новиковта шундай настроение тыуған, уға, ҡалай ғына булһа ла, шул туралағы һүҙҙе оҙағыраҡ һуҙырға, шуны тыңларға кәрәк. Мин булдыра алманым. Аҙағына теге Быҙаулыҡтағы булып үткән Нина ваҡиғаһын оҙон итеп һөйләп бирҙем. Ул айырым бер тынлыҡ һәм эске кисереш менән тыңланы. Мин һөйләп бөткәс:

— Уны һин яратмағанһың, ул һине яратҡан. Ундай булырға мөмкин. Ләкин һәр хәлдә Нина Ирочка кеүек матур һәм һөйкөмлө булырға тейеш түгел. Мин һамар яғының ҡыҙҙарын

беләм. Улар тупаҫ, йыуан, ҡалын балтырлы булалар. Теге Нина ла шуларҙың береһелер әле.

Новиков был һүҙҙәрен, гүйә, минең көндәлдән уҡыған кеүек һөйләне. Нинаны үҙе күрмәйенсә тороп уны Ирочка менән сағыштырыуы, минеңсә, дөрөҫ ине. Ысынлап та, Нина тиреһенә һыйыша алмай йөрөгән, бәрәмәс кеүек тулы, ҡып-ҡыҙыл битле ҡыҙ ине. Э Ирочкалағы нәзәкәтле кәүҙә, нәфис йөҙ һыҙығы, оҙон керпектәр араһында янып торған ҡара күҙҙәр Нинала юҡ ине. Нина үҙ күләмендә яғымлы, тере ҡыҙ ине. Э Ирочка тураһында бер-ике һүҙ менән генә әйтеп булмай. Уға ҡараһаң, күҙҙәр, диңгеҙҙең тын ваҡытындағы ҡояш нуры төшкән матурлығына ҡараған кеүек, уның матурлығының киңлегенә китәләр. Уның эргәһенә килһәң, бөтә тәбиғәтте үҙенә йыйып алған кеүек иғтибарҙың бөтә нөктәһе шунда йыйыла. Шуның өсөн дә уның тураһында бер-ике һүҙ менән әйтеүе ҡыйын. Был урында Новиковтың пәйғәмбәрлеге хаҡлы һәм урынлы. Ирочкалар хәҙер беҙгә матур хыял. Ул хыялды хәҙер аҙ ғына булһа ла, бер генә көн, бер генә сәғәт булһа ла, иректе ваҡытта кисерге килә. Беҙҙең полкка барып күренмәҫкә теләүебеҙҙең, аҙ ғына булһа ла шуны кисектерергә тырышыуыбыҙҙың төп сәбәбе лә шул.

Новиков ҡайһы мәлдә һис тормошҡа ашырырға мөмкин булмаған пландар уйлай:

— Әллә барып ҡайтабыҙмы? Күп булһа, бынан илле саҡрым юл. Бер көн барабыҙ, бер көн ҡайтабыҙ. Унан һуң окопҡа...

Был инде аптырағандан бер һүҙ генә. Сөнки илле саҡрым ер барғансы, унан ҡайтҡансы, беҙҙе әллә нисә урында тотасаҡтар, арестовать итеп, конвой менән оҙатасаҡтар. Аҙағында уларға хат яҙыу тураһында уйлашабыҙ. Беҙ приютты беләбеҙ. Ләкин беҙ аңралар Женя менән Ирочканың фамилияларын һорарға онотҡанбыҙ. Шайтан белә, унда күпме Женя һәм Ирочкалар барҙыр. Үҙебеҙҙең адрестарҙы бирҙек. Хәҙер Пошехонский полкка киләбеҙ. Быларҙың быныһы ла беҙҙең йәшлек, тәжрибәһеҙлектән инде.

Беҙҙән алыҫ түгел ауыр снарядтар ярылалар. Баш осонда аэропландар осалар. Беҙ быларға һис иғтибар итмәйбеҙ, былар беҙгә күптән, күптән таныш һәм күнеккән тауыштар инде. Мин һыу алып киләм. Новиков картуф әрсей. Баҡыйбаев килтергән ит консерванан бик тәмле аш әҙерләргә уйлайбыҙ. Обоз тирәһендә туйынып йөрөгән бер поляк ҡатыны, беҙ һорамаһаҡ та, беҙгә ҡоро утындар йыйып килтерә, ут яғыша, һыу һалғанда, тоҙ һалғанда, беҙгә кәңәштәр бирә. Новиков уның кәңәшен тыңламай.

— Беҙҙең зауыҡ башҡа төрлө, шуның өсөн үҙебеҙсә эшләйбеҙ^ — тип үҙ эше менән булаша. Ҡатын башҡа һүҙгә күсә:

— Йәш саҡта мин панда аш бешереп тороусы булдым. Ул пандар ниндәй генә тәмле аш ашамай торғайнылар! Әле иҫкә

төшһә, ауыҙҙан һыуҙар килә. Тәмле аҙыҡтар булған саҡта, мин дә иремә шундай яҡшы аштар бешерә торғайным.

Уның һүҙен мин дә, Новиков та тыңламайбыҙ. Шунан һуң ул янған усаҡҡа ҡаран һүҙһеҙ генә ултыра башлай. Ул ҡатындың ире һуғышта, йорто немецтар яғында ҡалған. Ул һәр ваҡыт теге яҡта ҡалған йортон һағына. Бигерәген унда тороп ҡалған тегеү машинаһына йөрәге әрней. Ул тегенсе булған. Шуның менән тамаҡ туйҙырған, өҫтөн бөтәйткән. Хатта иренә күстәнәс, аҡсалар ебәреп торған. Хәҙер ул тормош теге яҡта, уттар артында ҡалған.

Уның бында килеп эләгеү тарихы шулай: ул, ҡасҡылар менән китеп, ниндәйҙер бер станцияла, Рәсәйгә китергә тип поезд көткәндә, ауылдың беҙҙекеләр тарафынан алыныу хәбәрен ишеткән. Шул имеш хәбәргә ышанып кире ҡайтҡан. Ҡайтһа — фронтта үҙгәреш юҡ. Ҡайҙа барырға белмәй торғанда, уға бер нестроевой команданың коптинармусы осраған. Теге коптинармус унан файҙаланған. Бер аҙ ваҡыт үҙе менән дә йөрөткән, кәрәге ҡалмағас, ҡыуып ебәргән. Хәҙер беҙҙең полктың обозында йәшәй. Начальниктар ул ҡатынды бынан да ҡыуалар. Тик уны обоз халыҡтары йәшереп тоталар. Ул бөгөн беҙгә утын йыя, ашағас, котелок, ҡашыҡ, шәшкеләрҙе таҙартып бирә. Беҙ уға икмәк бирәбеҙ, алмай:

— Үҙегеҙгә кәрәк булыр. Мине обозда туйҙыралар, — ти. Ул беҙгә ғали йәнәплек күрһәтә. Беҙ уға бер мәғәнә лә бирмәйбеҙ. Беҙ үҙ эшебеҙ, үҙ уйыбыҙ менән йәшәйбеҙ.

Беҙ кискә табан сәй ҡайнатып ултырғанда, Новиков аҡылдан шашҡан тауыш менән ҡысҡырҙы, һүгенә башланы. Мин землянка эргәһендә хат яҙып ята инем. Ҡапыл күтәрелеп тауыш яғына килдем. Килһәм, ни күҙем менән күрәйем, Новиков теге ҡатынды быуып алған да һөйрәп йөрөтә.

— Ах, аҙғын ҡатын, фәхишә! — ти. Мин барып әрсәләргә башланым, теге ҡатынды Новиковтың ҡулынан тартып алдым. Ҡатындың төҫтәре ағарған, күҙҙәре ҙурайған, һулыштары ҡыҫылған, ғыжж-ғыжж килә. Үҙе һөйләнә:

— Бына йыртҡыс кеше, шаярып әйткәнде белмәй!.. Үлтерә яҙҙы!.. — Новиковтың асыуы бик тиҙ баҫылды. Ирония менән ҡатынға ҡарап көлә башланы:

— Әллә һин мине обоз крысаһы тип белдеңме? Мин ундай кеше түгел, мин ундай бысраҡ эш менән булашмайым! — тине. Тауыш тынды. Теге ҡатын, усаҡтан ситкәрәк китеп, әкрен генә пырхылдап илай башланы. Новиков, йөҙ түбән ятып, усаҡҡа табан ҡараны ла тәмәке тоҡандырҙы. Мин ике яҡҡа ла ҡарап торҙом, ҡатынды барып йыуата башланым:

— Ни булды? Ниңә илайһың?

Ул өндәшмәй. Яурындарын һелкетеп, һаман да шыңшый. Усаҡ эргәһендә ятҡан Новиков:

— Ул һиңә лә тәҡдим яһар әле, — тип көлдө. Шунан һуң мин мәсьәләне аңланым.

Беҙ сәй эсеп, тамаҡланып бөткәндә, ҡараңғы төшкәйне. Беҙ обоздан брезенттар алып аҫҡа түшәнек. Төн аяҙ, матур булһа ла, кис һалҡын. Яңы ғына ҡалҡып килгән йәшел ыуыҙ үләндәр, ысыҡланып, тәндәрҙе сирҡандыралар. Күк саф, унда иҫәпһеҙ йондоҙҙар һибелгәндәр. Тик көнбайыш яғы ғына алыҫҡа күтәрелгән ракета, прожектор яҡтылары менән ҡыҙарып, күк йөҙөнә ҡан төҫө бирәләр. Өлкән янғынды күҙ алдына килтерәләр. Алыҫта, алыҫта ярылған туптарҙың һаңғырау тауыштары киске тынлыҡ менән яҡын кеүек ишетеләләр. Беҙ Новиков менән, һүҙһеҙ генә күккә, йондоҙҙарға ҡарап, уйланып ятабыҙ. Новиков ни уйлай торғандыр, минең уйҙар төрлө яҡҡа сабалар. Йә ауылдағы ҡайһы бер картиналарҙы күҙ алдына килтерәм. Йәш кенә кешенең фронт буйында аҙап күреп, мәсхәрәләнеп йөрөүенә мәғәнә бирә алмайым.

Новиков, урынынан ҡуҙғалып, усаҡта һүнергә яҡынлаған күмерҙәрҙе аҡтарып, тәмәке тоҡандырҙы. Теге ҡатын ятҡан арба эргәһенә барҙы, уга бик йомшаҡ тауыш менән һөйләй башланы:

— Ҡәҙерлем, ниңә һин бында этләнеп йөрөйһөң?.. Һинең ирең бар. Кау булһа, һуғыштан ҡайтыр. Ҡулың һәнәр белә, тегеүсеһең. Киңә бынан китергә кәрәк. Берәй урынға барып эшкә инергә кәрәк. Юғиһә бында үҙеңде эт кеүек итеп үлтереп китерҙәр...

Новиков һуңғы һүҙен айырым йомшаҡ, туғанлыҡ хисе менән әйтте. Новиковта ындай йомшаҡлыҡ бик һирәк була. Был минутта ул артыҡ нескәрҙе. Уның был нескәлеген миңә тыңлау ауыр булды. Мин уны ишетмәҫ өсөн шинель менән башымды бөркәнем. Новиковтың был һүҙе ҡатынға ла бик ныҡ тәьҫир итте, буғай, ул балалар кеүек үкһеп иларға башланьт. Новиков уның эргәһендә ҡалманы. Урынына килеп ятты ла бик тәрән итеп һулыш алды. Бер аҙҙан теге ҡатын да тынды. Новиков менән беҙҙең арала һүҙ бөттө. Мин, ул һүҙ ҡушмаһын тип, күҙгә йоҡо килмәһә лә, хырылдаған булдым. Алыҫтан, алыҫтан туп тауыштары ишетелә. Беҙҙән алыҫ түгел торған обоз аттарының бышҡырыуҙары, үлем хырылдауҙары кеүек, күңелгә шом һалалар. Мин Байгужалар, Буранбайҙар тураһында уйлайым. Шулар өсөн генә позицияға барғы килә, улар менән һөйләшке килә. Яҡын ғына ерҙә, ағас араһында ҡороһарылар шытырлай. Төндә ҡуяндар йөрөйҙәр. Күп ваҡыт ҡыр кәзәләре килеп сыгалар. Ул мәғсүм[1] йәнлектәрҙең бында, фронт буйында, йөрөүҙәренә бер ҙә күңел ултырмай. Әгәр ҙә мин улар кеүек ирекле булһам, был урмандар эсендә бер минут та ҡалмаҫ инем. Тыныс урмандарға, туп тауыштары ишетелмәгән ерҙәргә китер инем. Ә былар бында йөрөйҙәр...

[1] *Мәгсүм* — гонаһһыҙ.

Беҙ иртә менән торғанда, теге ҡатын урынында күренмәне. Обоз тирәһендә лә юҡ ине. Новиков тирә-яғына ҡаранды ла:

— Киткән, ахыры! — тине. Мин уға һүҙ ҡайтарманым. Беҙ ул турала башҡа һөйләшмәнек. Сөнки беҙҙең алда башҡа эштәр, башҡа уйҙар торалар ине.

## УН БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

Беҙ алғы линияға килгәндә, Байғужа менән Индрил беҙҙе ҡаршы алдылар. Байғужа шатлығынан ауыҙын ғына көлдөрҙө, Индрил икебеҙҙе лә ҡосаҡлап үпте. Беҙ килгәндә, саҡ эңер төшкәйне. Фронтта атыш юҡ ине. Тик беҙҙең снарядтар ғына, баш осонан уҙып, алыҫҡа барып ярылалар ине. Индрил беҙҙе блиндажға алып инде. Беҙҙең хәлде һорашып торманы, үҙе һүҙ башланы:

— Бәхетегеҙ бар икән, шайтан алғырҙары! Беҙҙекеләр наступлениеға әҙерләнәләр, ә һеҙ шуны ҡотлар өсөн килгәнһегеҙ, буғай.

Был хәбәр беҙгә артыҡ тәьҫир итмәне. Мин Буранбайҙы һораштым.

— Буранбай ҡайҙа? — тинем. Индрил ашығып яуап бирҙе:

— Улмы? Ул бәхетле булды инде. Ул, һыуға барғанда, ҡулынан бик еңел генә яра алды. Дивизия штабында лазаретта ята. По крайней мере, ул алдағы наступлениены күрмәй...

Беҙ блиндажға ҡараныҡ. Хәҙер ҡышҡы окоп түгел. Бөтөнләй башҡа. Окоптар тәрән ҡаҙылғандар, блиндаждар ныҡ эшләнгәндәр, эсе ҡоро һәм иркен. Эре туптар төшмәгәндә, ваҡ туптар алдырырлыҡ түгел. Беҙ блиндаждарҙы маҡтап алдыҡ. Байғужа һалҡын ғына:

— Беҙ, был позицияға күскәндән бирле, һаман эшләнек. Беҙҙең бында күп тирҙәр түгелде инде... — тип ҡулын һелтәне.

Ул арала теге тәүҙә окопта осрашҡан ҡарт һалдат — белорус Тарас инде. Ул хәҙер беҙҙең халыҡтар менән дуҫлашҡан икән. Беҙҙе туғандарса ҡаршыланы:

— Ҡайҙан ел ташланы һеҙҙе? Беҙ инде, мәңге килмәҫкә киткәндәр, тип уйлағайныҡ. Билләһи, беҙ шулай уйлағайныҡ.

Новиковҡа был һүҙ артыҡ тәьҫир итте, буғай. Ул, төҫөнә сәмселлек сығарып:

— Эйе, беҙҙең браттарға ошо окоптан башҡа урын юҡтыр инде. Унда, интендантствола, эшләү өсөн, иң башта бәхетһеҙ ефрейторҙарҙың аяҡтарын үбергә кәрәк. Иң кәмендә подхалим булырға кәрәк. Шунда ғына йәшәп була. Беҙҙең телдәр уға өйрәнмәгәндәр. Беҙҙең телдәр кәкре. Телдән таптыҡ инде.

Новиковтың был һүҙенә ҡаршы башҡа төрлө һорау булманы. Сөнки иптәштәр беҙҙең холоҡто яҡшы беләләр ине. Арала бер аҙ ваҡыт тынлыҡ дауам итте. Иптәштәрҙең күңел-

дәренән беҙҙе ҡыҙғаныу тойғоһо күренеп тора ине. Тарас өндәшмәй генә тәмәке төрә башланы. Ҡапыл Новиковтың йөҙө асылды. Эстән, йөрәктән, бер ҡәҙерле нәмәһен һурып алған кеүек, һүҙгә башланы:

— Башҡаларын шайтан белә. Булат менән беҙ ғәжәп бер ваҡиғаға осраныҡ, аңлайһығыҙмы?

Иптәштәр Новиковтың ауыҙына ҡаранылар.

— Йә, йә, һөйлә әле! — тиештеләр. Новиков, күкрәген һыйпап, эсенән кисереп алды. Мин уның нимә һөйләйәсәген алдан белеп тора инем. Ул бер тапҡыр ҡуҙғалып алды:

— Аңлайһығыҙмы?.. Ул ғәжәп ваҡиға булды. Уны һис онотоу мөмкин түгел!.. — Минең арҡаға һугып алды. — Бына ошо Булат менән икәү инде. Аңлайһығыҙмы?.. Беҙ полктан киткәс тә, ҡыҙҙар приютына барып эләктек. Их, унда ҡыҙҙар!.. Ҡыҙҙар!.. Ожмах хурҙарымы ни! Шулай бит, Булат?..

Тарас ғасабиланды:

— Йә, йә, һөйлә, күп булһа берәй ҡыҙ менән булғанһығыҙҙыр. — Новиков артыҡ еңеләйеп китте:

— Туҡта, туҡта, улай ғына түгел. Уның хикмәте бар. Ул ҡыҙҙар бына! Урта бармаҡ кеүектәр!.. — Миңә ҡарап: — Женя, Ирочка!.. Шулай бит?.. — Шул ваҡыт ҡапыл пальба күтәрелде. Беҙҙең окоптар өҫтөнә снарядтар төшә башланылар. Тарас, ҡапыл төҫөн үҙгәртеп:

— Ана, немецтар һеҙгә Ирочкалар ебәрәләр. Көтөп тороғоҙ, хәҙер беҙҙең окопҡа төшөрәләр...

Арала һүҙ өҙөлдө. Новиков та ҡапыл үҙгәрҙе. Тыны бөтөп, отделение командиры инде:

— Тарас! Звенонды секретка ебәр. Немецтар бик ҡаты ут астылар. Наступать итеүҙәре бик мөмкин.

Тарас бик етди төҫ менән Новиков менән миңә:

— Барығыҙ, ҡыҙҙарығыҙҙы ҡаршыларға барығыҙ. Һеҙ ял итеп килгән кешеләр бит! — тине. Новиков был һүҙгә ныҡ ғәрләнде. Ҡапыл тоҡанып китте:

— Тарас! Етәр һиңә!.. Юғиһә әллә түрә булдыңмы? — Бик асыулы йөҙ менән ҡараны. Мылтығын тотоп: — Әйҙә, Булат! — тип блиндаждан сыҡты.

Прожектор, ракеталар төндө көндөҙгө кеүек яҡтырталар. Беҙ блиндаждан сығыуға, беҙгә яҡын ғына бомба-колбаса ярылды. Беҙ ергә яттыҡ. Беҙҙең баш осонан ғына, яҡын ғына, уҙып, еңел снарядтар ярылалар. Мылтыҡтарҙан, пулеметтарҙан атылған пулялар ямғыр кеүек окоп өҫтөнә яуалар. Беҙ, окоп буйлап шыуышып, ята-ята киттек. Һис бер баш ҡалҡытыр әмәл юҡ. Бер снаряд ярылды. Мин снарядтың еле менән бер нисә аҙым ситкә ырғытылдым. Бик ҡаты ергә һуғылдым. Минең ҡолаҡтарым томаландылар. Ҡулдар, аяҡтар хәлһеҙләнделәр, ағас кеүек ҡаттылар. Аң юғалды. Минең күҙгә прожектор, ракета яҡтылары ғына тоноҡ булып күренәләр. Ә ко-

лаҡтар бер нәмә лә ишетмәйҙәр. Аталармы, юҡмы, әллә бөтә һуғыш ергә йотолдомо — мин хәҙер аңламайым. Кемдер минең беләктән тарта. Ләкин мин кем тартҡанын, ниңә тартҡанын белмәйем. Шунан һуң мине канауға һөйрәп төшөрҙөләр. Ниңә һөйрәйҙәр, ҡайҙа һөйрәйҙәр, минең башым ул турала эшләмәй. Мин яҡтыларҙы ғына күрәм. Бер баш минең ҡолаҡҡа яҡыная, мин уға текәлеп ҡарайым. Мин уны саҡ танийым. Ул — Новиков йөҙө. Ул миңә алыҫтан, юғарынан ҡараған төҫлө күренә. Уның ҡарашына мин бер мәғәнә лә бирә алмайым. Беҙ уның менән ҡайҙа торабыҙ? Мин ни эшләп ятам? Ул турала бер нәмә лә хәтергә килмәй. Минең ауыҙга Новиков фляга менән һыу һалды. Мин уны йоттом. Ул рәхәт булды. Тагы ла йоттом, тағы ла йоттом... Улар миңә тағы ла, тағы ла рәхәт бирҙеләр. Башым шаулай башланы. Ул шау баш осонда уйнаған музыка кеүек булды. Гүйә, мине күрмәй, минең өҫтән тапап уҙалар, күҙҙәремде йомам, күҙҙәрҙе йомған һайын, музыка тауыштары көсәйәләр. Ул тауыштар шарлауыҡ кеүек шаулайҙар. Ул тауыштар йөрәккә ауыр, тәндәрҙе баҫалар. Биткә ҡайҙандыр һалҡын һыу ҡойола. Әллә мин шарлауыҡ аҫтында ятаммы? Әллә көслө ямғыр аҫтында ҡалдыммы? Ҡапыл күҙҙәрҙе астым. Күҙ ҡабаҡтары ауыр булып асылалар. Ҡарайым. Бер таныш йөҙ. Кем һуң ул? Мин ул кешене беләм. Танийым. Ләкин кем икәнен хәтерләмәйем. Ул кеше мине тотоп һелкә, стенаға һөйәп маташа. Мин аңлар өсөн күккә ҡараным. Күктә уттар тулҡынланалар. Хәҙер минең ҡолаҡҡа әллә ниндәй тауыштар ишетеләләр. Мин тағы теге таныш йөҙгә ҡарайым. Ул хәҙер миңә асыҡ күренә. Ләкин мин уның исемен әйтә алмайым. Ысын ут кеүек янам. Тамаҡ кипкән:

— Әй, әй, һыу бир! — тинем. Ул тағы ауыҙға фляга ҡоя. Мин ҡомһоҙланып йотам. Ул миңә һөйләй, мин ишетмәйем. Мин һорашам:

— Мин ҡайҙа? Миңә ни булды?..

Үҙ тауышым да үҙемә ишетелмәй. Уныҡы ла ишетелмәй. Баш ҡатып ҡалған таш кеүек. Ҡулдар, аяҡтар юҡ кеүек тойолалар. Гүйә, мин — әллә ҡайҙа ташланган тоҡ. Шулай ятам...

Ҡапыл ер һелкенде. Күҙ алды ҡараңғыланды. Өҫкә тупраҡтар ҡойолдо. Шул ваҡыт минең бер ҡолаҡ асылды. Ул ҡолаҡта туп тауыштары, пуляларҙың выжлауҙары ишетеләләр. Ләкин улар миңә алыҫта кеүек ишетеләләр. Беҙҙең эргәгә генә бер ракета төштө. Ул, выжлап янып, уттарын сәсрәтеп, тиҙ генә һүнде. Икенсе ракеталар яҡтыһында уның быҫҡып ятҡан төтөндәре күренде. Мин хәҙер хәтерләнем. Мин һуғышта, мин ут аҫтында ятам. Миңә ни булды? Ләкин аңламайым. Хәҙер минең эргәләге кешене лә беләм. Ул Новиков. Һорашам:

— Ни булды?

Ул һөйләй, ишаралар яһай, ләкин уның тауышы миңә ишетелмәй. Ауыҙ кипкән. Һыу һорайым. Ул эсерә. Хәҙер һыу

ниңәлер ауыр тойола. Эскә ҡурғаш кеүек булып барып төшә. Туңдыра, башты һелкәм, эсмәйем, тинем. Баш осонан снарядтар шаулап уҙалар. Ҡайҙалыр бәрелеп шартлаған пуля тауыштары ла хәҙер миңә асыҡ ишетеләләр. Уларҙың береһе лә миңә ҡурҡыныс түгел. Мин үҙемде аңламайым. Ни эшләп мин былай булдым? Уйҙар ауыр һәм өҫтән эшләйҙәр. Гүйә, улар ҡапланғандар, улар ҡалын стена арҡыры эшләйҙәр... Ләкин мин һуғышта, ут аҫтында ятамын. Уны хәҙер анығ беләм.

Бер аҙҙан һуң бер һалдат килде. Новиков менән икәүләп, мине ҡултыҡлап, имгәкләтеп канау буйынан алып киттеләр. Аяҡҡа баҫырға тырышам. Улар баҫмайҙар, ерҙә һөйрәләләр. Һөйрәлгәндә, минең аяҡтар үҙемә оҙон кеүек тойолалар...

Хәҙер мин үҙебеҙҙең блиндажда, беҙ ул блиндажға бөгөн генә килдек. Мин уны хәтерләй башланым. Шунан һуң Новиков менән секреткаға киттек. Шунан һуң белмәйем. Миңә ни булды? Хәтерләмәйем.

Байғужа миңә текләп ҡарай. Аяҡтарҙан, ҡулдарҙан тота, баштарҙы һыйпай. Новиков, ҡулдарын болғап, уларға ниҙер һөйләй. Мин аңламайым. Бер аҙҙан улар блиндаждан сыҡтылар. Яңғыҙ ҡалдым. Улар сыҡҡас, миндә уйлау бөттө. Күҙ ҡабаҡтарын ауырлыҡ баҫты. Ойой башланым... Төндә мине Байғужа уятты.

— Тор!.. Тор!.. Китәбеҙ! — ти. Унын тауышы миңә стена арҡыры килгән кеүек ишетелә.

— Ни булды? — тинем. Ул, минең ҡолаҡҡа бик яҡын килеп:

— Һин контужен булғанһың. Һине пунктҡа оҙатып ташлайым. Атыш баҫылды. Хәҙер таң яҡын...

Хәҙер баш эшләй башланы, бөтөн хәл күҙ алдына килде:

— Эйе, эйе, төндә бит минең эргәлә ауыр снаряд ярылды, тимәк, мин һуштан яҙғанмын...

Аяҡҡа баҫтым. Иҫерек кеше кеүек, тәнтерәкләп, йығылып барам. Кәүҙәне яҡшылап тотоп булмай. Баш шаулай, ҡолаҡтар сыңлайҙар, Байғужа ҡултыҡлап тота. Бер ҡулына сумканы тотҡан. Блиндаждан сығабыҙ. Һирәк-мирәк кенә атыштар бара. Прожектор, ракеталар өҙлөкһөҙ яҡтыралар.

Ход сообщения буйлап артҡа киттек. Юл буйында үлгән һалдаттар яталар. Ҡайһы ваҡыт мин уларға абынып йығылып китәм. Байғужа һөйләнә:

— Бәлки, һин берәй ай лазаретта ятырһың әле, — ти. Ләкин ул миңә артыҡ тәьҫир итмәй:

— Әллә шул, — тимен. Һүҙҙе оҙайтмайым. Оҙаҡ барҙыҡ. Мин һөйләмәгәс, ул да һөйләмәй. Шулай тын ғына барабыҙ. Минең башта бер уй ҙа юҡ. Барабыҙ ҙа барабыҙ.

## УН ИКЕНСЕ БҮЛЕК

Бәйләү пунктында доктор мине ҡараны ла:

— Зарарлы түгел, өс көндән кире полкка китерһең. Хәҙергә ял ит! — тине. Хатта мине койкаға һалырға ла ҡушманы. Еңел яралылар барагына ебәрҙе. Юлда барғанда, Байғужаға асыу килде:

— Эйе, ебәрҙеләр бер айға! — тинем үҙ-үҙемә.

Ярты өлөшө ерҙән ҡаҙылған барак. Ике яғына һикеләр һалынған. Һалдаттар шунда аунайҙар. Эс ауырыуы менән, еңел яра менән, минең кеүек контужен булып килгән һалдаттар яталар. Араларында бик ауыр хәлдә ятҡандары ла бар. Ниңәлер уларҙы лазаретҡа оҙатмайҙар.

Мин, юлда арып килгән кеше, уны-быны ҡараманым. Бер мөйөштән урын таптым да, сумкамды баш аҫтына ҡуйып, йоҡларға яттым.

Обед ваҡытында уяталар икән. Бер санитар барак буйынса ҡысҡырып үтте. Минең торғом килмәй. Ашағы ла килмәй. Тәндә эҫелек һиҙелә. Санитар килеп минең аяҡҡа типте:

— Әллә һинең өсөн айырым обед бешерерҙәр тип беләһеңме? Әйҙә, тор, котелок, ҡашыҡтарыңды ал! — тине. Минең йөрәктә асыу ҡабарҙы. Ҡапыл һикереп торҙом да тегегә текләп ҡараным:

— Әллә ятырға ла ярамаймы? — тинем. Ул миңә бик оҙаҡ ҡарап торҙо. Уның ҡарауына минең йөрәк тулҡынланды. Шул секунд уны өҙгөләп ташлағым килде. Минең ирендәр ҡалтырай, быуындар дерелдәй ине. Санитар һүҙһеҙ-ниһеҙ генә минең эргәнән китте. Мин бик оҙаҡ бер урында баҫып торҙом. Тирәяҡҡа ҡарандым. Миңә ҡаршы һикелә тағы берәү ята. Ул ыңғыраша. Өҫтөнә яртылаш шинелен япҡан, йыртыҡ салбарҙан һис йыуылмаған, ҡарайып, тимгелләнеп бөткән тубығы күренә. Бер аяғында обмотка, икенсеһендә — юҡ. Мин уға ҡарап торғанда, ике санитар носилка тотоп ишектән инделәр. Теге һалдатты носилкаға ҡуйҙылар. Шул ваҡыт теге һалдат ҡарлыҡҡан тауыш менән һөйләшә башланы:

— Мине ҡайҙа алып бараһығыҙ? Ошонда ғына ятһам икән!..

Санитарҙар һүҙһеҙ генә носилканы күтәрҙеләр. Уны алып сыҡтылар. Котелок менән ҡашығымды алып, улар артынан тышҡа сыҡтым. Ҡараңғы барактан ҡояшлы көнгә сыҡҡас, күҙ алдары семәкәйләнде. Иҫерек кеше кеүек бәүелеп алдым.

Һауа матур, асыҡ. Ер йәшәргән, йәшел япраҡтар йөҙҙәрен асҡандар. Миңә донъя ғәжәп киң тойолдо. Мин күрмәгән башҡа бер донъя кеүек күренде. Алыҫ та түгел, ҙур палатка эргәһендә, котелок тотҡан һалдаттар күренәләр. Шул яҡҡа ҡарап атланым. Минең башта бер маҡсат та юҡ. Ул яҡҡа механик рәүештә генә барам. Санитар әйтеүе буйынса, мин унда барырға тейешмен.

Палаткаға яҡынайғас, минең танауға кәбеҫтәле аш еҫтәре бәрелде. Ул еҫтәр бик ауыр тойолдолар. Шуға ҡарамаҫтан, ул еҫтәр ниңәлер яҡын тойолалар. Шуларҙы еҫкәге, шуларға яҡынайғы килә.

Палатка артында поход кухняһы. Уның алдында сират тора. Сиратта торғандарҙың барыһы ла бойоҡ күренәләр. Ғәҙәттә һалдаттарҙа була торған шау-шыуҙар юҡ. Ҡайһылары, сиратта торһалар ҙа, ергә ултырғандар, мин сиратҡа баҫҡанда, берәү килеп ҡулымдан тотто. Ҡараһам — Буранбай.

— Һин ни эшләп бында? — тине ул. Мин дә уға ҡаршы:

— Һин ни эшләп бында? — тинем. Беҙ аптырашып ҡалдыҡ. Мин Буранбайҙың еңел ранен булыуын, лазаретта ятыуын бөтөнләй хәтерҙән сығарғанмын. Мин яңынан фронтҡа килеүемде, контужен булыуымды һөйләнем. Ул мине сираттан алып китте:

— Беҙҙә аш бар. Мин повар менән таныш. Бик һимеҙен эләктерҙем, — тине. Буранбай өс һалдат эргәһенә алып килде. Улар йәшел үлән өҫтөндә ашап ултыралар. Береһе башын бәйләгән. Береһе ҡулын бәйләгән, береһендә бәй-фәлән күренмәй. Мин улар менән һаулаштым да башҡа һүҙ һөйләп торманым, Буранбайҙың әйтеүе буйынса, ҡашығымды тотоп, котелокка үрелдем. Аш һимеҙ һурпалы күренде. Ләкин ауыҙға ҡапҡас, аштан йүкә тәмеме, тимер тәмеме килә. Йотҡас, түбән төшөп китмәй, тамаҡ тирәһенә төйөлөп ҡала. Бер-ике ҡашыҡ ҡапҡас, уҡшытырға уйлай. Ҡашыҡты әкрен генә йәшел үләнгә ҡуйҙым. Буранбай миңә ҡараны:

— Ниңә ашамайһың? — ти. Мин түбән ҡарап ултырам. Әкрен генә:

— Ашағым килмәй... — тинем.

Теге һалдаттар, миңә ҡарамайынса, минең һүҙгә иғтибар итмәйенсә, котелоктарҙағы аштарҙы бушаталар. Тамаҡ төбө кипте, бик эске килде.

— Сәй ҡайнатырға ине! — тинем. Буранбай ҡайҙандыр ҡайнаған һыу алып килде. Баракка ҡайтып, кирбес сәйе бешереп, сәй эсергә ултырҙыҡ. Сәйҙән дә ниндәйҙер бер ҡом тәме килә. Ләкин сәйҙе әсәм. Маңлайҙан һалҡын тирҙәр сығалар. Буранбай минән беҙҙең хәлдәрҙе һораша. Мин уга:

— Туҡта әле, һөйләшербеҙ әле. Әҙерәк кәйеф килһен, — тимен. Кәйеф юҡ. Тәндәр ҡойолоп төшөп баралар. Ятҡым килә. Сумкаға башымды ҡуйып ятам. Күҙемде йомам. Күҙ йомғас, түбәнгә төшөп киткән төҫлө булам. Ҡапыл күҙҙе асам. Буранбай минең эргәлә ултыра.

— Ауырыймын, буғай... — тимен Буранбайға. Ул ниңәлер өндәшмәй. Мин тағы ла күҙҙәрҙе йомам, тағы түбәнгә төшөп китәм. Мин ятҡан барак бәүелгән кеүек була. Һалдаттар ҡысҡырып һөйләшәләр. Уларҙы һөйләштерге килмәй. Уларҙың һөйләшеүҙәре ҡолаҡ ҡабына ныҡ бәреләләр. Ауыр иттереп бәреләләр. Буранбайға:

— Тышта йылымы, шунда сығып ятайым әле, — тимен. Тышҡа ҡояш битенә сығабыҙ. Ниңәлер бында иркен, рәхәт кеүек тойола. Тик аҙ ғына өшөтә. Минең өҫкә Буранбай шинелен яба. Шул ауырлыҡ аҫтында мин ойоп китәм...

Мин был баракта өс көн ятам инде. Тәндәге ҡыҙыулыҡ, температура 38, 39 градустан түбән төшкәне юҡ ине. Бөгөн иртә менән нормаль күренә. Баш иҫәңгерәп торһа ла, хәҙер ҡолаҡтар асыҡ ишетәләр. Ләкин ваҡыт-ваҡыт сыңлап китәләр. Ул сыңлауҙар шул тиклем уңайһыҙ — һушты алалар.

Буранбайға иртәгә окопҡа китергә.

Унын беләгенә тейгән снаряд ярсығының урыны ныҡ төҙәлеп етмәһә лә, уны ебәрәләр. Ә минең турала хәбәр юҡ әле. Күрәһең, температура миңә бер аҙ миһләт бирә, буғай.

Бөгөн Буранбай менән бик оҙаҡ урманда йөрөнөк. Урман матурланған. Уҫаҡ ағастары йәм-йәшел япраҡ ебәргәндәр. Тик уларҙың араһындағы нарат ағастары ғына ҡараһыу булып, тегеләрҙең төҫтәрен боҙоп ултыралар. Мин уға баштан үткән хәлдәрҙе һөйләнем. Ул минең һүҙҙәрҙе төҫөнә кисереш сығармай ғына тыңлай. Күрәһең, унын башында башҡа уйҙар бар. Ул үҙ уйҙарына сумған. Ул шулар менән йәшәй. Э мин һаман үҙемдекен һөйләйем. Беҙ икәүләп йәшел үләнгә йөҙ түбән яттыҡ. Ул, күккә һәм тирә-яғына ҡарап:

— Хәҙер беҙҙә лә һабанға төшәләрҙер инде. Яҙғы сәсеүгә тиклем һуғыш бөтә, тигәйнеләр. Ҡайҙа ул бөтөү!.. Бер ҙә йүнле хәбәр ишетелмәй. Һаман да һуғыш, һуғыш... — тип алдына ҡарап һөйләнде. Ниңәлер минең һуғыш тураһында һөйләгем килмәне. Ауылды хәтергә алғас, мин уға һорау бирҙем:

— Ауылдан хат киләме?

— Килә лә килеүен, йүнле хәбәр яҙмайҙар. Атайым менән әсәйем ҡарттар. Бисә ауылына, аталарына ҡайтып киткән. Уларға хәҙер тороуы ҡыйын инде. Быйыл ашлыҡ та сәсә алмаҫтар.

Ошо һүҙҙәр һуңында Буранбайҙың төҫөн ауыр ҡайғы баҫты. Ул һыҙғырына башланы. Беҙҙең арала һүҙ киҫелде. Мин дә, оҙон бер көйгә һыҙғырып, көйләй башланым. Шул ваҡыт минең ҡолаҡтар сыңлап киттеләр. Мин, башымды ергә ҡуйып, ҡолаҡтарымды баҫтым; Буранбай һикереп торҙо ла:

— Хәҙер обед етә, әйҙә, ҡайтайыҡ, — тине. Икебеҙ ҙә һүҙһеҙ-ниһеҙ генә алға атланыҡ.

## УН ӨСӨНСӨ БҮЛЕК

Бөгөн биш көн инде. Һәр ике яҡтан артиллерия канонадаһы бара. Баш осонда аэропландар өҙлөкһөҙ осалар. Беҙҙең артта әллә ни тиклем полк һәм артиллерия дивизиондары килгәндәр. Бик ҙур һуғыш көтөлә, беҙҙең алғы линияға кух-

ня, аҙыҡ килгәне юҡ. Тик бирелгән сохари, консерва запастары менән генә туйынабыҙ. Көндөҙ һыуһыҙ аптырайбыҙ. Төн булһа, артиллерия утына ҡарамаҫтан, окоптан артҡа, ярты саҡрымлап ергә, һыуға барабыҙ. Бик күп һалдаттар һыу юлында үләләр. Э беҙҙең иптәштәр нindәй ҡөҙрәт менәндер һау ҡайталар.

Беҙҙең полкка килгән новобранецтар наступление булмаҫ борон уҡ ҡырылалар, улар үҙҙәрен окопта тота белмәйҙәр. Окопҡа ауыр снарядтар төшөп ярылғанда, бер ергә өймәкләшәләр, паникаға биреләләр. Ҡасырға, йәшеренергә урын таба алмайынса, окоптан сығып, немецтарҙың пуляларына эләгәләр. Фронтҡа яңы килгән ҡайһы бер новобранецтар аңраға әйләнәләр, ашамайҙар, эсмәйҙәр. Әйткәнде аңламайҙар. Аҡылдан яҙған кеше һымаҡ, кәртәһеҙ күҙҙәре менән кешегә туп-тура ҡарайҙар.

Бер һүҙ өндәшһәң:

— А-а-а... — тип торалар ҙа бөтөнләй башҡа яуап ҡайтаралар. Уларға ҡараған, иғтибар иткән кеше юҡ. Кешеләр ҡайҙа барһа, улар шунда баралар. Мин бер новобранец менән секреткала булдым. Ул дошман окобына һис ҡарамай, маңлайын дошман окобы яғына ҡуйған да түбән ҡарап тик ултыра. Ул, гүйә, шулай торорға хөкөм ителгән. Унда эске тойғо юҡ. Уның үҙ ихтыяры юҡ. Ул стихия буйынса йөрөй, уның тормошо стихия буйынса аға. Сәғәттәр буйынса беҙ уның менән секреткала ултырҙыҡ. Ул үҙенең шул ултырышын үҙгәртмәне һәм бер һүҙ өндәшмәне. Беҙҙе алмаштырырға килеүсе һалдаттарҙы күргәс, ул ҡапыл тулҡынланды. Әллә ниндәй ҡурҡып ҡасҡан кеше һымаҡ мылтығын тотто ла канау буйлап артҡа йүгерә башланы. Бөгөн беҙҙең окоптарға снарядтар, шрапнелдәр яуалар. Беҙҙең окоп алдындағы тимер сыбыҡ заграждениелар снаряд көстәре менән аҡтарылып, окоптарға төшәләр. Окоп буйында йөрөр әмәл юҡ. Кәр минут, һәр секунд үлем көтөлә. Окоп буйында үлгән, яраланған һалдаттар тулып яталар. Уларға ярҙам итергә мөмкинлек юҡ. Ҡайһы бер яралы һалдаттар йә аяҡтарын, йә ҡулдарын, йә эҫтәрен тотоп ҡысҡыралар, ыңғырашалар, ярҙам һорайҙар. Уларҙың яраларын бәйләүсе, уларға ярҙам биреүсе кеше юҡ. Кәр кемдә үҙ ҡайғыһы, һәр кемдә үҙ башы.

Новобранецтарҙың күбеһе блиндаж эсендә стеналарға һөйәлеп ултыралар. Ҡайһы бер снарядтар блиндаж эргәһенә төшөп, бөтә блиндажды һелкетеп, тупраҡтарын ҡоялар. Блиндаж эсендә саңдар ҡуба. Новобранецтар шул дәһшәткә түҙә алмайҙар, блиндаждан сығып, окоп буйынса йәшеренергә урын эҙләйҙәр. Аллы-артлы төшкән снарядтар, һауала ярылған шрапнелдәр асыҡ һауала йәшеренергә мөмкинлек бирмәйҙәр. Аптырағас, улар, окоптан сыға килеп, асыҡ ерҙән артҡа йүгерә башлайҙар.

Беҙҙең ҡарт һалдат Тарас яраланған. Пуля, уң күҙенән инеп, сикәһен ярып сыҡҡан. Байғужа уны етәкләп блиндажға алып инде. Ябай пуля тейгән, үлерлек яра түгел. Уны тиҙ генә бинт менән бәйләнек. Ьыу эсерҙек. Блиндаждың мөйөшөнә ятҡырҙыҡ. Ул ыңғыраша, һөйләнә:

— Үлермен инде. Атыш тынһа, берүк, мине артҡа алып китегеҙ инде. Тынмаҫ инде, тынмаҫ...

Беҙ уны йыуатабыҙ, тынысландырабыҙ. Беҙ тынысландырған һайын, ул тынысһыҙлана. Беҙҙең ҡулдарҙы алып, күкрәгенә ҡаты итеп ҡыҫа:

— Минең адресты алығыҙ, үлһәм, минең семьяға хат яҙығыҙ, исмаһам, берәрегеҙ иҫән ҡалыр әле. Хат яҙығыҙ...

Буранбай уның кеҫәһенән дәфтәрен ала. Үҙ кеҫәһенә тыға. Кеҫәһенә тыҡҡас, үҙе һөйләнә:

—- Үҙемдең иҫән ҡалыуҙы уйлаған юҡ, кешенең адресын алған булам, — ти. Уға түбән ҡарап ултыра. Тарас һаман һөйләнә:

— Балалар йәш ине, балалар... Иҫән ҡотолоп булмаҫ инде...

Шул ваҡыт ҡабаланып Индрил беҙҙең блиндажға инде. Уның тындары бөткән, төҫтәре ағарған. Әйтер һүҙен әйтә алмай:

— Бөтә яҙҙым. Беҙҙең телефон блиндажын снаряд аҡтарып ырғытты. Мин телефон линияһын ҡарап тышта ҡалдым. Унда бер кеше лә иҫән ҡалмағандыр. Уф... уф!..

Индрилдың һүҙе беҙгә төрән тәьҫир бирмәне. Уны һүҙһеҙ тыңланыҡ, сөнки блиндаж аҡтарылыу, блиндаж емерелеү, кеше үлеү беҙҙең өсөн бик ябай күренеш. Индрил иҫән ҡалған икән, беҙгә шул еткән.

Ҡараңғы төштө. Атыш тағы ла көсәйҙе. Көндөҙ пулеметтар һирәк аталар ине. Хәҙер ике яҡтан пулемет тауышы көсәйҙе. Бомбалар ярыла башланылар. Отделение командиры ашығып инде:

— Оҙаҡламай команда булыр, әҙер тороғоҙ! — тине. Беҙ, мылтыҡтарҙы тотоп, блиндаж ауыҙына килдек.

Батальон командиры капитан Корягин беҙҙең блиндаж ауыҙына килде. Подпоручик Васил ьевты һорашты. Беҙ: «Юҡ!» — тип яуап бирҙек. Ул, әйләнеп, ҡайҙалыр китергә бороллдо. Шул арала беҙҙең баш осонда бер шрапнель ярылды. Капитан Корягин шул уңайға окоп өҫтөнә сығып йүгерә башланы. Уның был ҡылығы беҙгә оят тойолдо. Беҙ, блиндаждан баштарҙы сығарып, капитан йүгергән яҡҡа ҡараныҡ. Ул, ун аҙымдар самаһы йүгереп барып, ҡырҡылған ағас кеүек, йөҙ түбән ауҙы. Отделение командиры йүгереп килде:

— Шрапнель капитандың башын өҙөп алып китте! — тине. Беҙ баштарҙы блиндаж ишегенән алдыҡ. Ул турала бер һүҙ өндәшеүсе лә булманы.

Беҙгә команда булды. Беҙ барыбыҙ ҙа, блиндаждан сығып, окоп буйҙарына тараldыҡ. Баш күтәрер әмәл юҡ. Немецтар пу-

лялар, бомбалар, снарядтар яуҙыралар. Беҙҙекеләр утты, немецтарҙың алғы линияларынан күсереп, артҡа табан ебәрә башланылар. Ул билдә атаканың яҡынайыуын күрһәтә.

Беҙгә окоптан сығырға, тимер сыбыҡ заграждениеһы артына урынлашырға команда булды. Беҙҙең окопҡа икенсе бер полк һалдаттары килеп тулдылар. Беҙ окоптан сығып өлгөрмәнек, беҙҙең уң яҡта «урра» тауыштары ишетелде. Немецтар утты көсәйттеләр. Тауыш баҫылды. Беҙ, ергә ятып, шыуышып алға барабыҙ. Баш осонан выжлап пулялар үтәләр. Хәҙер немец снаряды ҡурҡыныс түгел. Тик бомба, шрапнелдәр баш осонда секунд һайын ҡурҡыныс бирәләр.

Ракета яҡтыһында түш менән алға шыуған һалдаттар, һоро түңгәклек кеүек, күҙгә бәреләләр. Окоптан егерме биш сажин самаһы алға киткәс, эштәр уңайланды. Окоп уртаһында ҡалған тимер юл буйындағы үлектәр, соҡорҙар өҙлөкһөҙ яуған пуляларҙан һаҡланырға бер аҙ мөмкинлек бирҙеләр. Мин, тимер юл арҡыры сығып, юлдың канауына яттым. Минең эргәмә бер нисә һалдат килде. Кемдең кем икәнен белер хәл юҡ. Ергә түште ҡуйып, тимер кәрәк менән баштарҙы ҡаплап ятабыҙ.

Беҙҙән аҙ ғына уҙа төшөп бомбалар ярыла. Беҙҙең окопҡа төшөп өҙлөкһөҙ ярылған снарядтар ерҙе бәүелдерәләр, һушты алалар. Хәҙер команда ла юҡ, алға барырғамы, юҡмы, уны белгән кеше юҡ. Баш әйләнә, ориентация юғала. Беҙҙең окоп алдамы, арттамы — белер хәл юҡ.

Йөрәк һуға, ауыҙ кибә, һыу юҡ. Йән алҡымға килә. Пуляһыҙ-ниһеҙ үлем көтөлә. Башта башҡа бер уй юҡ, тик үлем генә. Йән бар. Ләкин кәүҙә мәңге ҡайтмаҫҡа үлем соҡорона ташланған. Ул хәҙер көсһөҙ, уның ихтыяры юҡ. Ул ҡот осҡос көстәр менән ярыла торған снарядтарҙың ҡанундарына буйһонған. Шунда бөтөргә, тағы ла йәшәмәҫкә хөкөм ителгән. Унда ятҡан кәүҙәләр — тормоштан сығарып ырғытылған кәрәкһеҙ киҫәктәр. Ташҡындар менән һеперелеп ташланған сүп-сарҙар... Хәҙер бер көслө тулҡын килә лә, үҙенең көслө ипкене менән йыуып, диңгеҙ упҡынына алып китә. Улар шунда мәңге ҡайтмаҫҡа убылалар... Унан кире сигенеү, ҡайтыу юҡ. Алда бер юл — ул да упҡынға...

Кешеләр ҡуҙғалалар, түш менән алға шыуалар. Артҡа сигенәләрме, дошман яғына баралармы — айышына төшөнөп булмай. Берәү минең эргәгә килә.

— Ҡайҙа барабыҙ? Команда булдымы? — ти. Мин, баш һелкеп, белмәйем тигән ишара яһайым. Беҙҙең эргәлә һалдаттар күбәйҙеләр. Белмәйем — арттан, белмәйем — алдан киләләр. Беҙ ҙә шулар уңайына ыңғайлайбыҙ. Ниҙәндер ҡотолорға теләгән һымаҡ, алға шыуышабыҙ. Күкшәүел өлпөләре араһына индек. Арттан взвод командиры килде. Беҙҙең ҡолаҡҡа шыбырлай:

— Күптән хәбәр бирелде, саф буйынса бер-береһенә хәбәр итергә ҡушылды. Беҙгә әйттеләрме? — ти. Мин уның йөҙөнә

ҡарап торам. Беҙҙең взвод командиры. Унын бөтә тәндәре ҡалтырай. Бәйләгәндә, тапма йәбешкән кеше кеүек, тотлоғоп-тотлоғоп һөйләй. Уға мин:

— Юҡ! — тип ҡулды һелтәнем. Ул минең эргәнән китмәне:

— Бынан ары беҙҙең һалдаттар юҡтыр инде. Әллә ни тиклем полктар килделәр. Буталып бөттөк инде. — Ул шомло, хырылдаулы бер тауыш менән: — Хәҙер немец окобы яҡын, уларҙың электр токтары ебәрелгән тимер сыбыҡ заграждениелары булыуы ихтимал. Шуны алдан байҡап барырға команда булды. Әгәр ҙә эләгеп ҡалдыңмы — бөттөң тигән һүҙ инде... — Минең эргәнән алға шыуа башланы. Беҙ күкшәүелме, әремме өлпөләре араһынан барабыҙ. Пулялар, бомбалар беҙҙән аша төшәләр. Һалҡын ел иҫте. Ниңәлер баш айныған кеүек булды. Эргәләге кешеләр ҙә асыҡ күренгәндәй булдылар. Шул ваҡыт мин күккә ҡараным. Күк йөҙө зәңгәр, асыҡ; иҫәпһеҙ йондоҙҙар йымылдайҙар, улар юғары торалар. Уларға пуля ла, бомба ла, снаряд та етерлек түгел. Ләкин улар беҙҙе ҡаплаған кеүек түгел, башҡа донъяны ҡаплаған кеүек күренәләр. Улар беҙҙекеләр түгел, улар ят тойолалар.

Ҡапыл «ура» тауыштары күтәрелде. Һалдаттар, тороп, йүгерә башланылар. Беҙ, тороп, бер-ике сажин йүгермәнек, алда уттар күренде. Шаулап мылтыҡ, пулемет тауыштары күтәрелделәр. Ямғыр кеүек, беҙҙең баш осонан үтә, яуа башланылар. Бик күп һалдаттар йығылдылар. Беҙ ҙә, пуляларҙан һаҡланыу өсөн, ергә йығылдыҡ. Тағы бомбалар аҡтарыла башланы. Беҙҙең өҫтә һис өҙлөкһөҙ бомба, ракета уттары ялтырайҙар. Баш осонан йөрәк өҙгөс еңел снарядтар уҙалар. «Ура» тауыштары тынды. Ул мылтыҡ, пулемет, бомба, снаряд тауыштары менән күмелде. Бер аҙҙан мылтыҡ, пулемет тауыштары ҡапыл туҡтанылар. Бомбалар ҙа һирәгәйҙеләр. Беҙҙән артҡа уҙып төшкән снарядтар йышайҙылар. Взвод командиры, минең бөйөргә төрттө:

— Немецтар атакаға киләләр. Хәҙер киләләр, һаҡ булырға кәрәк, — тине. Шуны әйтеп бөтмәне, беҙҙең уң яҡта күмәк ят тауыштар, шауҙар ишетелә башланы. Беҙ шул шауға баштарҙы ҡалҡытып ҡарағанда, беҙҙең алда бер нисә немец һалдаты штыктарын беҙгә төҙәп, баҫып тора ине. Улар беҙгә бик асыҡ күренделәр. Беҙ, мылтыҡтарҙы тотоп, аяғөҫтө торҙоҡ. Улар ишаралар менән беҙгә мылтыҡтарҙы ташларға ҡуштылар. Беҙ мылтыҡтарҙы, бомбаларҙы ергә ташланыҡ.

Ул ваҡыт таң яҡтыра башлағайны. Алда яҡын ғына немецтарҙың сыбыҡ заграждениелары күренде. Беҙҙең һул яҡта тимер юл линияһы. Немец һалдаттары беҙҙең һалдаттарҙы, ҡоралһыҙландырып, бер урынға йыйнайҙар. Шул ваҡыт беҙ үҙебеҙҙең пленға тешәүебеҙҙе һиҙҙек. Немецтарҙың снарядтары, баш осонан шаулап, беҙҙең окопҡа төшәләр. Ике яҡ та мылтыҡтан да, пулеметтан да атмайҙар. Ике ара тыныс. Беҙҙе

һаман бер урынга туплайҙар, шикләнмәй, бөтә ерҙе ҡапшайҙар, беҙҙән йәшергән бомбаларҙы эҙләйҙәр. Таң яҡтыра төштө. Беҙҙең һалдаттар ҡолаҡтан ҡолаҡҡа ғына һөйләшәләр:

— Иҫән-Һау пленға төшкәс, ярай инде. Исмаһам, һуғыштан ҡотолорбоҙ.

— Унда бик ҡыйын, тиҙәр, ашарға юҡ. Суррогат менән генә аҙыҡландыралар икән, тиҙәр. Ҡайҙа ла үлергә инде.

Беҙҙең арала яралы кешеләр бар. Артта үлергә ятҡан ауыр яралыларҙың ыңғырашҡан тауыштары ишетелә. Беҙҙең уң флангынан яралы рус һалдаттарын күтәрткәндәр. Беҙ Сергеев тигән йәш һалдат менән иң һул флангыла тимер юл буйында торабыҙ. Эле беҙгә сират килеп еткәне юҡ. Сергеев миңә күҙ ҡыҫа:

— Тимер юл бик уңай икән, давай ҡасабыҙ! — ти. Мин алға, артҡа ҡарайым. Таң яҡтырған. Хәҙер тирә-яҡ айырымасыҡ күренә. Беҙҙең артта, уң яҡта немец һалдаттары һәм санитарҙары яралы рус һалдаттарын бәйләйҙәр. Беҙ һаман баҫып торабыҙ, беҙ әҙ-мәҙ ҡуҙғалып, йөрөй башлаһаҡ, бармаҡ һелкәләр, штык күрһәтәләр. Күкрәктәренә мылтыҡтарын ҡуйып, атабыҙ тигән һүҙҙе аңлаталар.

Уйҙар алғы көндәргә йүгерәләр. Хәҙер Рәсәй артта ҡалды. Ул алыҫта, диңгеҙ артында кеүек тойола. Хәҙер инде беҙ, окоптарҙы уҙып, эскә, Германияның төпкөлөнә, китәсәкбеҙ. Шуларҙың ят ҡалаларын, ауылдарын, ҡырҙарын күреү ҡыҙыҡһындыра. Уғаса, бәлки, солох та булыр әле. Унан һуң тыуған илгә ҡайтырбыҙ... Ләкин ул уйҙарҙың береһе лә реаль тойолмай. Алда билдәһеҙ ҡара көндәр тора. Баш осонан выжлап үткән немец һәм беҙҙең снарядтар һаман күңелгә ҡурҡыу һалалар.

Беҙҙең уң флангылағы һалдаттарҙы әкренләп яралылар менән бергә немец окобына оҙаталар. Ике немец һалдаты беҙҙең һул флангынан бер нисә һалдатты айырып алды ла тимер юл буйлап артҡа алып китте. Унда беҙҙең яралы һалдаттар яталар. Үлгәндәре лә күп. Үлем алдында ятҡан яралыларҙы алырға ҡушмайҙар, еңелерәк яралыларҙы гына һайлайҙар. Беҙ, еңелерәктәрҙе һайлап, һаман артҡа барабыҙ. Беҙ таралыша башланыҡ. Шул моменттан файҙаланып, Сергеев ҡапыл ғына миңә төрттө лә, үҙе тимер юл аша йүгереп, яр яғына сыҡты. Мин дә, һис ни уйламаҫтан, уның артынан йүгереп, тимер юл линияһынан арҡыры сыҡтым. Мин сыҡҡанда, ул тимер юл канауы буйлап йүгереп бара ине. Мин ҡурҡыуымдан артҡа ҡараным. Немец һалдаты минең арттан килә. Шул уңайға мин, йүгереп, канауға һөрөнөп йығылып төштөм. Артта мылтыҡ атҡан тауыш ишетелде. Мин тороп йүгерә башланым. Артта тауыштар күтәрелде. Беҙҙең баш осонан мылтыҡ пулялары выжлап үттеләр, тагы туҡталдылар. Мин Сергеевты ҡыуып еттем. Ул өҫтөндәге шинелдәрен, сумкаларын ташлай. Мин дә

ташларға маташам. Ләкин сисеп булмай. Һулыш ҡыҫыла. Бөтә тәндән тирҙәр аға. Быуындар ҡалтырай, йөрәк тибә, һөйләшеп булмай, ауыҙ кипкән. Тимер юлдың күпер төбөнә килдек. Унда күл кеүек һыу бар. Шул һыу ағамы, юҡмы, уны белеп булмай. Арттан һаман немец һалдаттарын көтәбеҙ. Улар ҡыуып етер төҫлө, беҙҙе атыр төҫлө тойола. Беҙҙең окоп алыҫ, һаман күренмәй, һыуҙы үтәһе бар. Ятып һыу эстек. Һыу буйындағы үләндәр, күрәндәр араһынан шыуышып, уның сиген эҙләп киттек. Сергеев:

— Беҙ килгәндә һыу аша сыҡманыҡ бит! Был ҡайҙан килде? — ти.

Мин:

— Беҙ, немецтарҙан ҡасып, тағы немецтар окобына барып сыҡмайыҡ! — тинем.

Көн яҡтырҙы, ҡояш сығып килә. Йүнәлеште белмәйбеҙ. Әгәр тимер юл буйына сығып ҡараһаҡ, белгән булыр инек, ул мөмкин түгел. Ятҡан ерҙән снарядтарҙың атыл ыуын, шаулап уҙыуын ҡарайбыҙ. Ләкин еңел снарядтарҙан белеп булмай. Ауыр снарядтар, бер аҙ ҡарайып, күҙгә салынып ҡалалар. Улар беҙҙең тапҡырҙан уҙмайҙар. Төндө ракета буйынса белеп була. Немецтар тарафынан күтәрелгән ракеталар яҡты һәм һауала оҙаҡ елпенеп торалар. Беҙҙең яҡтан күтәрелгәндәр шаулап күтәреләләр ҙә, һауала шартлап, ҡыҙыл осҡондар сәсеп, таралып, тиҙ генә ергә һибеләләр. Прожекторҙан белеп булыр ине. Көн яҡтырған, ул да юҡ. Әкренләп һыу буйлап шыуабыҙ. Сергеевтың сабыры етмәй:

— Был күлдең бер осо немец яғына бара торғандыр. Әйҙә, сисенәбеҙ ҙә йөҙөп сығабыҙ. Күл аръяғында беҙҙекеләр булырға тейеш, — ти.

Күл киң түгел, ләкин бик тәрән күренә. Ике арала мылтыҡ атыштары юҡ. Тыныс. Беҙ өҫтәрҙе һалабыҙ. Иртә менән һалҡын — тәндәр өшөй, ҡалтырай, уның өҫтәүенә ҡурҡыу ала. Аяҡтағы француз ботинкаларын берәм-берәм һыу арҡыры ырғыттыҡ. Кейемдәрҙе ырғытып булмай. Исмаһам, салбар менән гимнастеркаларҙы ырғытырға ине. Һыуҙан сыҡҡас, кейер инек. Ләкин уларҙың сығыуҙарына ышанып булмай. Минең кеҫәлә плен төшкән бер немец офицерынан алған сәғәт бар. Конвой менән штабҡа алып барғанда, уға булған йомшаҡ мөғәмәләм өсөн ул кеҫәһенән шул сәғәтен сығарып биргәйне. Миңә шуның менән әллә ниндәй бер яҙыу ҙа биргәйне. Адресы булғанмылыр, фамилияһы булғанмылыр — уны үҙем дә уҡый алманым. Кеше лә уҡыманы. Ләкин сәғәте шәп ине. Сәғәттең тышы көмөш, өҫтө алтын һәм төрлө таштар менән биҙәкләнгән. Шуға күрә мин уны юғалтмай һаҡлап йөрөй инем. Салбарҙы һалғанда сәғәтте күргәс, минең күңелгә бер шомло уй килде:

— Үлгән кешенең нәмәһен алһаң, һуғышта кеше үлә, ул кеше һуғыштан иҫән сыҡмай, — тиҙәр һалдаттар. Был сәғәт үлгән

һалдаттан алынмаһа ла, йөҙөп сыға торған күл алдында күңелгә шик төшөрә. Шул сәғәт һыуға батырыр, шул арҡала һыуҙан сыға алмам кеүек тойола. Ул шомло уй эсендә оҙаҡ ҡалғы килмәне. Мин тиҙ генә сәғәтте күлгә ырғыттым. Ул ҡумп итеп һыуға сумды. Тын ятҡан һыу өҫтөндә ваҡ ҡына йыйырсыҡлы түңәрәк тулҡындар йәйҙе. Шуны күргәс, Сергеев:

— Ни ташланың? — тине. Мин үҙемдең эшемдән бик риза булған ҡиәфәт менән, көлөп:

— Теге матур сәғәтте ебәрҙем, — тинем.

Ул миңә: «Дурак!» — тине лә башҡа һүҙ әйтмәне. Аяғын һыуға тығып ҡараны, тиҙ генә тартып алып:

— Һалҡын, әй, әйҙә, кем алдан төшә? — тип миңә ҡараны. Мин ул ваҡыт гимнастерка, салбар, күлдәк-ыштандарҙы муйынға урап маташа инем. Шул ваҡыт күҙ алдына ҡаҙаҡ сәхрәһе килеп баҫты. Мин, ҡаҙаҡ араһында йөрөгән саҡта, ҡаҙаҡтар менән бәхәсләшеп, Илек һыуының иң киң еренән йөҙөп сыҡҡайным. Ул һыу алтмыш-етмеш сажин киңлегендә бар, ә тәрәнлегенең иҫәбе юҡ ине. Тәрәнлегенән ҡурҡып, ул урында бер ҡаҙаҡ та һыу инмәй торғайны. Мин, хәл йыймайынса, шул һыуҙың аръяғына һәм бирьяғына йөҙөп сығып, бүләк алғаным бар. Мин Сергеев һүҙенә ҡаршылашып тормаңым. Тәүәккәлләп, төшөргә булдым. Һыуҙың киңлеге биш сажиндан ары юҡ. Ләкин сыға торған яғы насар һәм һаҙлыҡ булып күренә. Мин ике аяҡты һыуға тығып өлгөрмәнем, һурылып һыуға төшөп киттем. Башым һыуға күмелде. Көскә ҡалҡып сыҡтым. Ауыр, йөҙөп булмай, төпкә тартып бара. Бер нисә ынтылғас та, һыуҙың ситенә килдем. Ләкин аяҡ ергә теймәй, ярҙың эсенә табан тартыла. Яр ситендәге тотҡан ҡамыштар һығылып, убылып һыуға, эскә инәләр. Эскә ингән һайын, мин ҡамыш төптәренә тотонам. Тотонған бер ҡамыш төбө бата һәм мине һура, хәл бөттө. Күҙ алдары ҡараңғылана башланы, уның һайын мин, ҡаушап, ғасабиланып ҡамыштарға үрелә, өҙгөләнә башланым. Сергеев әллә нәмә һөйләй, мин ишетмәйем. Аҙағында ҡулым бер тал төбөнә тейҙе. Мин ике ҡуллап шуға тотондом. Ул да әкренләп һығыла, ләкин кәүҙә ауыр, күтәреп булмай. Кеше ярҙамы кәрәк. Бер аҙ ваҡыт аҫылынып торҙом. Сергеев хырылдаған тауыш менән ҡыҫҡыра:

— Тотҡан талың да һиңә бара бит инде. Тиҙерәк сығыу яғын ҡара! — ти. Уның һүҙе миңә көс бирҙе. Мин бөтә көсөм менән талды ҡосаҡланым. Шуның төбөнә күкрәк һалдым. Шул миңә таяныс бирҙе. Ләкин кәүҙәнең яртыһынан күбе һыуҙа, аяҡтар төпкә тартылалар. Уларға таяныс юҡ ине әле. Аҙаплана торғас, уң ҡул талдың ҡаты тамырына тейҙе. Шул тамырға аҫылынып, алға ынтылыу менән, кәүҙә һәм аяҡтар өҫкә ҡалҡтылар. Кәүҙә еңеләйгән кеүек булды. Ул ваҡыт минең тубыҡтар тал төбөнән таяныс тапҡайнылар. Мин, тал төбөнә баҫып, ҡороға сығырға теләһәм, тағы ла аяҡтар һаҙға батты-

лар. Тиҙ генә күкрәк менән ҡаты түмһәгә ятып, ҡаты ергә баҫтым. Түш менән шыуышып, ҡороға сыҡтым. Ерҙең ҡатылығында, мине күтәреүендә шөбһә ҡалмағас, торҙом. Аяҡҡа баҫтым. Ләкин аяҡтарҙың тамам хәлдәре бөткән, улар һығылдылар. Ергә ултырҙым. Күкрәк ҡыҫылған, һулыштар саҡ-саҡ сығалар. Күҙҙәр томаланған, саҡ-саҡ күрәләр; ҡолаҡтар шаулайҙар. Ниҙер тамаҡҡа тығыла. Бөтә тәндәр, ергә ташлаған пружина кеүек, ҡалтырайҙар, һелкенәләр, аяҡтар, ҡулдар тартышалар. Аръяҡта әкрен генә тауыш менән Сергеев ҡысҡыра:

— Ни эшләнең, ни булды? Мин ни эшләйем?.. — ти. Минең уға яуап ҡайтарырлыҡ та хәл ҡалмаған. Ауыҙҙан һүҙҙәрҙе сығарып булмай. Шулай ҙа, тырышып:

— Туҡта! Аҙ ғына көт! — тинем. Ауыҙҙан йәмһеҙ, ҡара һыуҙар ҡойолалар. Ул һыуҙар яңаҡты тартыштыра, ҡолаҡтарҙы сәнсә, мин һаман йөҙ түбән ятам. Тәнде тағы ла яман ҡалтырауыҡ алды. Урындан торҙом. Ултырған ерҙән аяҡтарҙы бейетәм. Ҡулдарҙы хәрәкәткә килтерергә маташам, улар ауырҙар, гүйә, герҙәр тағып ҡуйған кеүек ауырҙар. Сергеев ялынған тауыш менән ҡысҡыра.

— Өшөйһөң, буғай, тиҙерәк күлдәктәреңде кейеп ебәр, — ти. Мин муйындағы күлдәк, гимнастеркаларҙы сисергә маташам. Ҡулдар ҡалтырайҙар, тыңламайҙар. Етмәһә, улар һыуға шешенгәндәр, ауырайғандар. Э ҡулдар, төйнәлгән ергә ҡуйһаң, минең ихтыярҙан тыш ҡалтырап ситкә китәләр. Оҙаҡ маташтым, муйындағы төйөндәрҙе систем, аҡтарҙым. Күлдәктәрем ҡоро, тик салбарым ғына һыуланған. Күлдәк, ыштанды кейеү менән төндәр йылынғандай булды. Ләкин ҡалтырау бөтмәне. Күлдәктә ҡандар күренде, ҡараһам, түштәр буй-буй булып һыҙырылғандар, ҡанағандар. Бөтә түш һәм боттар ҡып-ҡыҙыл ҡан булғандар. Уларҙы йәшереү өсөн тиҙерәк гимнастерканы кейеп алдым. Ыштанды кейеп, балаҡтарын төрҙөм дә салбарҙы үлән өҫтөнә ташланым. Аяҡтар күм-күк булғандар, күк тамырҙар бармаҡ йыуанлығы булып ҡалҡҡандар. Кейенгәс, тән йылынғандай булды. Ҡолаҡтың шаулауы баҫылды. Тик яңаҡ ҡарыша, тештәр һаман шаҡылдайҙар. Мин һыу ситенә килдем. Сергеевҡа ҡараным:

— Йә, һине ҡалай сығарабыҙ?

— Мин йөҙә белмәйем. Минең өсөн был һәләкәт! — ти. Ҡалтырана, төҫтәре ағарған, бөршәйгән, күҙҙәре ҡаймаҡланған. Мин уны йыуатам:

— Ҡурҡма, ҡурҡма, Сергеев! — тигән булам. Ләкин уның сығыуына өмөт юҡ. Ул үҙе лә сығыуына ышанмай. Хәҙер ҡояш сыҡты инде. Күл буйында шыйыҡ ҡына томан күтәрелде. Беҙҙең өсөн уңайланды. Фронт тынды. Атыш-фәлән дә юҡ. Ләкин Сергеев ҙур өмөтһөҙлөк эсендә ултыра. Мин уны ҡыҙғана башланым. Үҙемде ниңәлер көслө һиҙә башланым. Шул

настроение аҫтында мин тиҙ генә йыйындым. Сергеевты ҡотҡарыу тураһында минең баш эшләй башланы:

«Ах, мин әйтәм, берәй таҡта йәки ағас булһа ине, тим. Тиҙерәк артҡа йүгерәм. Сөнки һыу буйында ағас, таҡта кеүек нәмәләр һәр ваҡыт булырға тейеш. Мин күпер ауыҙына табан барам. Күпер алдына килһәм, йөҙ-йөҙ илле сажин самаһында окоп күренә. Мин уны ҡапыл һиҙҙем, ул бая ғына беҙ ҡасҡан немецтар окобы. Ә тимер юл окоп буйлабыраҡ һуҙылып китә икән. Уға ҡарағанда беҙ дөрөҫ килгәнбеҙ. Беҙ тимер юлдың бирге яғына, үҙебеҙҙең окоп яғына, сыҡҡанбыҙ. Күпер аҫтында ҙур ағастар һәм таҡталар күрҙем, ләкин арғы яҡта — Сергеев ҡалған яҡта. Мин унда тағы сыға алмайым инде. Мин тағы ла бер яңылыҡ астым. Тимер күперҙең теге яғына был күл оҙаҡ һуҙылмаған, уның ҡамыштар үҫкән башы күренә. Әгәр беҙ шунан ураһаҡ, был күлде йөҙөп сығыу мәшәҡәтен дә күрмәгән булыр инек».

Тиҙерәк Сергеевҡа килдем:

— Һиңә сығыу өсөн ике юл таптым. Кинең яҡта тимер күпер аҫтында күп кенә таҡталар ята. Шуларҙы алып кил дә шуға ятып йөҙөп сыҡ йәки күл башынан әйлән. Күпер ауыҙы асыҡ. Дошман окобы күренә. Атып ҡуйыуҙары ла ихтимал.

Минең был һүҙҙәргә Сергеевтың йөҙҙәре асылды:

— Ҡалай итәбеҙ һуң? Ҡайһыһы уңай булыр?..

— Үҙең уйла, ҡайһыһы һиңә уңай. Ләкин оҙаҡлама инде! — Ул, ике юлдың береһен һайлай алмай, бик оҙаҡ торҙо. Шунан һуң ул:

— Юҡ, мин таҡта менән дә йөҙөп сыға алмайым. Күл башынан урайым! — тине. Ул китергә булды, мин шул урында көтөргә булдым. Ул киткәс, мин ботинкаларҙы эҙләп алдым. Салбарҙы, ботинкаларҙы кейеп алдым. Тәндәр ҡыҙып китте, арҡаға йылы ҡояш төштө. Шул ваҡыт өҙөлөп ҡорһаҡ асты. Мин, шуны баҫыу өсөн, өлпө төбөнә йөҙ түбән төшөп яттым. Башта һис бер уй юҡ. Сергеевтың килеүен көтәм. Юғарынан, баш осонан, үткән снарядтарҙың тауыштарын тыңлайым. Ҡояш сығыу менән, юғарыла-юғарыла немецтарҙың аэропландары йөрөй башланылар. Шул ваҡыт бер рәттән атылған мылтыҡ тауыштары ишетелде. Пулялар һыҙғырып күпер төбөнә яттылар. Башҡа килде: «Моғайын, Сергеевҡа аттылар!» Тиҙ генә урындан ҡуҙғалып, түш менән шыуышып, күпер яғына киттем. Ухылдаған тауыш ишетелде. Сергеев тауышы. Айырым-асыҡ ишетелә, һүгенә. Ләкин ҡамыш арҡыры күренмәй. Әкрен генә өндәшәм. Ул яуап бирмәй. Ҡамыш араһына инәм. Һыу ситенә яҡын килдем. Һаҙлыҡ, аяҡтар батып баралар. Шул ваҡыт бер таҡта күрҙем. Кемдәрҙер уны һыу ситенә килтергәндәр ҙә шуға баҫып һыу алғандар, буғай. Бысраҡ аяҡ эҙҙәре яталар. Мин шул таҡтаны һөйрәй башланым. Ауыр, ләкин килтерергә мөмкин. Уны һөйрәп ҡороға сығарҙым да

тағы Сергеев тауышын тыңлай башланым. Ишетелмәй, мин уйлайым: «Әллә үлдеме икән?» — тим. Тиҙ генә үҙем сыҡҡан урынға килдем.

Сергеев башын тотоп ултыра. Ҡулдары ҡанлы, ҡолаҡ артынан, һул битенән юлаҡ-юлаҡ булып ҡандар ағып төшкәндәр...

— Ни булды, Сергеев?

— Аттылар, ранен яһанылар. Бик ҡурҡҡайным да, зарарлы түгел, ҡолаҡ артынан һыҙырып үткән...

— Йә, ни эшләйбеҙ инде?

— Юҡ, береһе лә булмай. Күл башына ла бара алманым, таҡта ла алып килә алманым, күпер төбө асыҡ. Немецтар аталар. Төнгә тиклем ҡалырға тура килер, ахыры, — тине. Мин уға таҡта табыуымды белдерҙем, ул, башынан ҡулын алып:

— Дөрөҫмө? Таптыңмы? — тине. Күлдең ситенә яҡын килеп, — иптәш, килтер таҡтаны! Ни булһа ла булыр — сығам, — тип миңә ялына башланы.

Мин тиҙ генә таҡтаны алып килдем, һыуға бер башын төшөрҙөм. Уның яғына этеп ебәрҙем. Таҡта мин этеп ебәргән көс менән Сергеев алдына барып төкәлде. Ул, таҡтаның бер башын тотҡас, план төҙөй башланыҡ. Ул таҡтаға күкрәге менән арҡыры ятырға тейеш, был яҡ ситкә сыҡҡас, ул таҡтаның бер яғына күсеп, бер башын миңә бирергә тейеш. Мин, таҡтаның башын ҡороға сығарып, уны сығарыу өсөн еңеллек яһарға тейешмен. Сергеевтың тал төбөнә килеүе шарт. План шулай төҙөлдө. Ләкин Сергеев һыуға төшөргә бик оҙаҡ ҡарар итә алмай торҙо. Шул һылтау менән битендәге ҡандарын йыуҙы, һыуға ҡараған һайын:

— Кай, ҡурҡыныс!.. Һай, ҡурҡыныс! Бында төшөп үлгәндән башҡа бер пуля тейгәне артығыраҡ!.. — тип һаман зарланды. Мин уны минут, секунд һайын ҡыҫтаным. Ул ҡурҡынысты йомшартырға тырыштым. Аҙағында ул суҡынып алды:

— Ярай, үлһәм, бәхил бул! — тип һыуға төштө, таҡтаны рәткә килтерә алмай аҙапланды. Түше менән ятып, ҡулы менән ишә башланы. Бөтә эш план буйынса килеп сыҡты. Ул, сыҡҡас, мине бик ҡаты ҡосаҡлап үпте. Уның башын минең гимнастерка түшенә тегелгән бинтты алып бәйләнек. Агы күренмәһен өсөн, фуражкаһын баҫып кейҙерҙек. Хәҙер беҙ күлдең был яғында, үҙебеҙҙең окоп яғында, инек. Ҡояш шаҡтай күтәрелгән. Хәҙер окоп яғына китеү уңайһыҙ. Беҙ тимер юл буйынан, канауҙар эсенән шыуырға ҡарар бирҙек.

Беҙ бик яҡшы беләбеҙ: тимер юлы буйынан беҙҙең окопҡа тиклем юл оҙон буласаҡ. Шуның менән бергә, тимер юл линияһына ышанып етеп тә булмай, уның боролоп тағы немец окобына китеүе лә бик мөмкин. Әгәр ҙә берәй ҡалҡыу урынға сығып ҡараһаң, барыһын да абайларға мөмкин булыр ине. Был обстановкала уны эшләү мөмкин түгел.

Ҡояш күтәрелде, көн ҡыҙҙы, канау буйы бөркөү, беҙ һаман шыуышабыҙ. Биттән тирҙәр аға. Ҡулдар ҡап-ҡара саң булдылар. Ваҡ таштарға бәрелеп, беләктәр, тубыҡтар ауырта башланылар. Ашағы килә, эске килә. Ә беҙ һыу буйында һыу ҙа эсмәгәнбеҙ. Шуға үкенәбеҙ.

Бик оҙаҡ барҙыҡ. Иртәнге сәғәт 9-ҙар тирәһе. Ике яҡтан да артиллерия атышы башланды. Хәҙер беҙ, шуға ҡарап, үҙебеҙҙең окопты билдәләнек. Немец туптары яҡын ярылалар. Беҙҙекеләр, уҙып, байтаҡ ҡына ергә китеп ярылалар. Тимер юл беҙҙе алдаманы. Үҙебеҙҙең окопҡа яҡын алып килде. Окопҡа нисек сығырға? Беҙҙең окоп күренмәй, беҙ баш ватабыҙ. Беҙҙең план ике төрлө: йә төнгә тиклем шунда ҡалырға, йә, бөтә баҙмансылыҡҡа[1] барып, окопҡа табан шыуырға — икеһенә лә төплө ҡарар яһай алмайбыҙ. Беҙ тағы ла тимер юл буйлап шыуырға булдыҡ. Алда әрем өлпөләре, шулар артында канауҙар күренде. Ул беҙҙе йәнләндерҙе. Ашыға-ашыға шуға табан шыуыштыҡ. Тимер юл канауынан сығып, өлпөләр араһына индек. Күрәбеҙ, алда ҡаҙылған соҡор күренә, шунан канау һуҙылған. Ул канау ҡайҙа бара? Ул беҙҙең окопҡа барырға тейеш. Ләкин ул канау ҡалҡыу урында, ул беҙҙән әҙ тигәндә егерме биш сажиндар булыр. Сергеев үрелеп ҡараны. Уның күҙҙәре шарҙай булдылар.

— Алда ғына сыбыҡ загражденеһы! Билләһи, беҙҙең окоп! — Ул шатлығынан минең яғанан тотоп һелкә башланы. Беҙҙә шундай көслө теләк тыуҙы: ҡалай ғына булһа ла шул соҡорға барырға!

Беҙ өлпөләр төбөндә, ботинкаларҙы һалып, яңынан кейендек. Обмоткаларҙы яңынан һәйбәтләп ураныҡ. Салбар, гимнастеркаларҙы рәтләп, ҡайыштарҙы тығыҙлап быуҙыҡ. Шул ун биш сажинлап ергә асыҡтан йүгерергә йыйындыҡ. Сергеев тағы ла суҡынып алды. Мин әсемдән генә Аллаға һыйындым. Сөнки иң ҡәтғи моментта, аңламаҫтан үҙебеҙҙекеләр йә немецтар мушкаға алыуҙары бик мөмкин. Сергеев күтәрелде лә йүгерә башланы. Уның артынан мин. Сергеев йүгергәндә окопҡа ҡарап ҡысҡыра.

— Үҙебеҙҙекеләр! Атмағыҙ, үҙебеҙҙекеләр!

Яҡын гына ара ла бик оҙаҡ тойолдо. Беҙ соҡорға барып етер алда, белмәйем, — беҙҙекеләр, белмәйем, — немецтар мылтыҡтарҙан аттылар. Ләкин ул арала беҙ соҡорға төшөп өлгөрҙөк. Атыу туҡталды. Беҙ бер аҙ хәл йыйҙыҡ та канау буйлап имгәкләп киттек. Сыбыҡ загражденеларға килдек. Загражденины уҙғас та, канау ослана. Окопҡа төшөү өсөн, тағы уның башына менергә кәрәк. Беҙ ҡысҡыра башланыҡ:

— Беҙ пленден ҡасып ҡайтабыҙ, атмағыҙ! Атмағыҙ!

[1] ***Баҙмансылыҡ*** — ҡыйыулыҡ.

Шул ваҡыт окоптан ике баш күренде. Рус һалдаттарының баштары. Береһе ҡысҡырҙы:

— Ниңә ҡурҡып тораһығыҙ, әйҙә, окопҡа һикерегеҙ! — тине. Беҙгә ул һүҙ йәшен кеүек тәьҫир итте. Бер нисә секунд уҙмағандыр, беҙ һикереп окоп эсенә төштөк. Беҙҙе һалдаттар өйләндереп алдылар. Сергеев, бик ауыр һулыш алып:

— Наконец, үҙебеҙҙең окоп! Аллаға шөкөр булһын! — тип ҡуйҙы. Беҙҙең бында ҡайтыу ундағы һалдаттар эсендә тәрән тәьҫир ҡалдырманы. Ябай бер ваҡиға итеп ҡаранылар. Араларынан берәүһе:

— Дурактар, кеше, плендан ҡасып, бында һуғышҡа ҡайтамы ни? Күрәһең, быларҙы һуғыш туйҙырмаған, — тине. Беҙҙең эргәнән китте. Беҙ килеп сыҡҡан окопта бөтөнләй башҡа часть ине. Беҙ үҙ полкыбыҙҙы һораштыҡ, берәү ҙә белмәне. Беҙ окоптан артҡа үҙебеҙҙең полкты эҙләп киттек. Беҙҙең ҡотолоп ҡайтыуҙың шатлығы ла, ҡайғыһы ла юҡ ине. Ләкин үҙебеҙҙе иркен хис итә инек.

## УН ДҮРТЕНСЕ БҮЛЕК

Сергеевтың башындағы яраһы еңел кеүек булһа ла, Себер дивизияһы штабына килгәнсе, уның күҙҙәре, биттәре шешенеп китте. Уны лазаретҡа алып ҡалдылар. Миңә шинель, аҙыҡ һәм путевка биреп, үҙ полкыма оҙаттылар. Беҙҙең дивизия штабы бынан егерме саҡрым урында, тиҙәр. Бирелгән маршрут буйынса юлға сыҡтым.

Ялан матур, ағастар ҡуйы япраҡтарға күмелгәндәр. Арыштар йәм-йәшел булып тулҡынып ултыралар. Ҡояш ҡыҙҙыра. Урман аралап барған юлда бөркөү, исмаһам, әҙ генә лә ел иҫмәй. Мин бер-ике саҡрым барам да ағас төбөндә ятып хәл йыям. Бөтә эш үҙ ихтыярымда. Теләһәм — барам, теләһәм — ятам. Әгәр ҙә бәйләнһәләр, ҡулда путевка. Юлда ғәскәри обоздар, Ҡыҙыл Тәре повозкалары осрайҙар. Уларҙың миндә эштәре юҡ. Ҡайһы берҙәрен туҡтатып, уларҙан тәмәке һорап ҡалам. Минең юл шулай бара. Был юлды минең оҙайтҡы, һуҙғы килә. Юлда поляк крәҫтиәндәре осрайҙар. Маршрут буйынса мин ауылдарҙы һорайым, улар белмәйҙәр. Уларҙың белмәүҙәре мине артыҡ борсомай, тик иптәштәрҙең хәлдәрен белеү мине ашығырға мәжбүр итә. Улар плен төшкәндәрме, үлгәндәрме — шул хәбәрҙе тиҙерәк ишетке килә.

Ҡояш түбәнләне. Юлдарға урман күләгәләре төштөләр. Һауа һүлпәнәйҙе. Еләҫләнде. Байтаҡ юл килдем. Алда ҙур ғына поляк ауылы күренә. Ләкин ул ауылға минең тиҙ генә барып инге килмәй. Яланда, иркендә ҡалғы килә.

Урман ситендә йәшел үлән өҫтөнә яттым. Юлда һалдаттарҙан алған аҙаҡҡы тәмәкене төрөп тоҡандырҙым. Һауа тын.

Кискә табан алыҫтан-алыҫтан туп тауыштары ишетеләләр. Ҡайҙалыр юғарыла аэроплан моторы гөжләй. Ауыл өҫтөнә күк төтөн йәйелгән. Күрәһең, улар киске аш бешерәләр. Һуғыш та бөтөнләй баштан сыҡҡан, тыуған ауыл күҙ алдына килә. Унда йөрөгән саҡтар иҫкә төшәләр. Ике ағайым һуғышта, мин өсөнсө булып йөрөйөм. Ҡарт атайым менән әсәйем генә ауылда донъя көтәләр. Һуғышҡа инмәҫ борон хат алғайным. Улар мине йыуатып яҙғандар: «Аллаға шөкөр, яҡшы торабыҙ. Һеҙҙең өсөн пенсия алабыҙ, хәҙергә беҙгә шул етә», — тигәндәр. Мин бик яҡшы аңлайым. Уларға тормош ауыр. Улар иген сәсә алмайҙар. Улар беҙҙең өсөн яналар. Беҙҙең өсөн көйәләр. Уларҙың сәйендә лә, ашында ла, йоҡоһонда ла беҙ. Беҙҙең ҡайғы менән әсәләр, беҙҙең ҡайғы менән ашайҙар, беҙҙең ҡайғы менән йоҡлайҙар... Ҡасан һуғыш бөтә? Ҡасан ҡайтабыҙ? Ҡасан уларҙы шатландырабыҙ? Ул турала уйлау ауыр. Ул турала уйлаһаң, йөрәк ҡабарына башлай.

Ауылды баштан сығарырға тырышам. Кис ҡырын серәкәйҙәр күбәйәләр. Улар төрлө урындан тешләйҙәр. Мин уларҙы ҡыуам. Улар менән һуғышам. Серәкәйҙәр менән һуғышҡанда, ауыл иҫкә төшө. Атайым менән бәләкәй саҡта балыҡҡа йөрөгәндә, һыу буйында мине серәкәйҙәр талай торгайнылар. Улар менән көрәшеп булдыра алмаһам:

— Атай, майыңды һөрт! —- тип уның эргәһенә йүгерә торғайным. Атайым серәкәйҙәргә ҡаршы һәр ваҡыт ҡәнәфер майы йөрөтә. Шуны һөртһәң, серәкәйҙәр килмәйҙәр. Әгәр ҙә ҡәнәфер минең ҡулға эләгеп ҡалһа, мин биттәрҙе, ҡулдарҙы, аяҡтарҙы, хатта күлдәктәрҙе лә ҡәнәфер майына буяп ташлайым. Ҡайһы ваҡытта атайыма буш шешә генә ҡайтарып бирәм. Ул асыулана башлай:

— Һине алып сыҡһам, шешә менән түгел, биҙрә менән йөрөтөргә кәрәк. Ул ҡыйбатлы нәмә, үҙең ярты тин тораһың.

Күп ваҡытта әллә ҡәнәфер майын ҡыҙғанып, әллә минең менән йөрөүҙең аҙабынан ҡасып, мине алып бармаҫҡа тырыша торғайны. Әгәр мин мыжый башлаһам, мине йыуатып, алдаштырып:

— Ҡуй, улым, бөгөн барма. Мин алыҫ китәм. Унда серәкәйҙәр ҙә күп була. Ул урындағы серәкәйҙәр шундай ҙур, шундай уҫалдар, ҡәнәфер майына ла ҡарап тормайҙар, башты, күҙҙе күптереп бөтәләр, — ти торғайны. Мин, уның һүҙенә ышанып, өйҙә ҡала торғайным.

Шул саҡтар һағындыралар. Шунда ҡайтҡы, шунда йөрөгө килә. Шул һыу буйҙарында аҡ сабаҡтарҙы тотҡо килә. Шул һыуҙарҙа, аҡ сабаҡ кеүек шаярып, уйнап, бөтә донъяны онотоп һыу инге, йөҙгө килә... Уларҙы уйлау ауыр, уларҙы уйлаһаң, йөрәк ҡабара.

Яҡшы күк ат менгән бер һалдат юлдан уҙҙы. Ул берәй ашығыс пакет менән барған ординарецҡа оҡшай. Уның аты

шундай етеҙ, шундай еңел бара, ул күҙ алдынан тиҙ юғалды, тик артында тояҡтары күтәргән саңдар ғына күтәрелеп, һуҙылып ҡалдылар... Киске тынлыҡта улар һаман тиҙ генә ергә ятмай, күтәрелгән урындарында торалар. Шул саңдарға ҡарап, атта уҙған һалдаттың бәхетен көнләйем. Оҫкон аттарға менеп, күңел теләгән яҡҡа китке килә. Ләкин ул теләк саңдар араһындағы хыял ғына. Мин дә, ауылда саҡта, бәйгеләрҙә йүгерек аттарҙы саптырыуҙа, беренсе малай инем. Ғаяз байҙың күрән йүгерегендә сабып, мин атайымдан туҡмалғаным бар. Атайым — Ғаяз байҙың үҙенә генә түгел, уның бөтә ағай-энеһенә дошман кеше. Атайым үҙ ғүмерендә улар араһына бармаңы. Улар мәжлесенә йөрөмәне. Уларҙан йомош һораманы. Уларҙы:

— Кәпәш балалары, «ышым халыҡтар»! — тип йөрөтә торғайны. Бер ваҡыт мин яландан ҡайтып килгәндә, атайымдың дошман кешеһе Ғаяз мине туҡтатты. Көләс йөҙ менән иҫәнләште:

— Булат ҡустым, һиңә бик ҙур ялыныс бар әле. Күрән ат өҫтөндә малай тотмай, йыға ла китә, йыға ла китә. Һин шул күрән атты бер һынап ҡара әле, ҡустым. Бик яҡшы беләм. Ул ал бирә торған ат түгел; әгәр ҙә күрән атты уҙғарһаң, һине ризалатырмын. Иҫәнбай ауылында ҙур бәйге була. Бик данлы аттар килә, тиҙәр. Әгәр ҙә шуға барһаң, күрән аттың бәйгеһе үҙеңә булыр, ярармы? — тине. Ғаяз байҙың был һүҙе, был йомартлығы мине артыҡ шатландырҙы:

— Ярай, барырмын! — тинем. Вәғәҙә бирҙем.

Бәйге була торған көн, мин атайыма әйтмәнем, ауылдың ситенә сығып, Ғаяз байҙың кырандасына ултырып киттем. Минең күҙ ҡушаҡҡа тағылған күрән атта булды. Ул ҡойоп ҡуйған кеүек матур. Оҙон ҡойроҡло хайуан. Түштәре киң, күҙҙәре ҙур, күҙ ҡабаҡтары ҡабарып, шешенеп тора. Ирендәре йоҡа, өҫтө киң һәм шыма, йылтырап тора.

Миндә атта йөрөргә, сабырга оҫталыҡ бар. Хатта ат өҫтөндә ултырып ҡына түгел, аяғөҫтө тороп сабып йөрөгәнем бар. Ләкин күрән атҡа бер тапҡыр ҙа менеп ҡарағаным юҡ. Барып еткәнсе, минең йөрәк елкенде. Юл буйынса ҡыҙыҡһынып барҙым.

Бәйге ҙур. Йүгерек аттар күп килгән. Ырымбурҙан, ҡаҙаҡ далаларынан атаҡлы йүгеректәр бар. Уларҙы күргәс, Ғаяз бай ҡаушай төштө, буғай:

— Белмәйем, ҡустым, көтөлмәгән ерҙән данлыҡлы йүгеректәр килгән. Һин инде, берүк, йығыла күрмә. Артта килһә лә, күрән атты һынайыҡ әле. Ул йүгереп дан алған мал түгел. Артта килһә лә, оят булмаҫ, — тине.

Мин хәҙер күрән ат өҫтөндә. Ул уйнаҡлап, шаярып йөрөй. Уның өҫтөндә йөрөүе лә күңелле. Аттан йығылыу тураһында уйлаған да юҡ.

Ун биш саҡрымдан сабабыҙ. Көн еләҫ. Шуның өҫтәүенә саба торған юл, һыртлап, ҡырлас буйлап килә. Ундай юлдан сабыуы бик уңай була. Утыҙлап йүгерек ат оҙонға сабырға киттек. Юлда барғанда малайҙар аттары менән маҡтаналар. Ҡаҙаҡ малайы барыһынан да артыҡ маҡтана:

— Минең туры ат өс йыл инде өлкән бәйгеләрҙә булды. Бер атҡа ла ал биргәне юҡ! — ти. Мин, тыңлап, таң ҡалып барам.

Беҙҙе тиңләштерәләр. Йөрәк сығып бара. Минең көрән ат бейей, уйнай, өҫтөндә ултырырға мөмкин түгел. Мин артҡа сыҡтым. Тиңләштереүсе «бер, ике...» тип һанағанда, «өс»тө әйтеп бөтмәне — аттар күтәрелеп киттеләр. Минең аҫтағы көрән ат ҡапыл һикерҙе, мин бер яҡҡа шыуышып ҡалдым. Ысынлап та, уның өҫтө бик шыма икән. Мин уның яйына бик тиҙ төшөндөм. Бер күҙҙе елдән йәшереп, үҙ уңайына ҡуйҙым. Саба торған атты ҡапыл ҡыуырға ярамай, уның бышлығып, сәсәп ҡалыуы бик мөмкин, ә йәш атта ундай хәлдең булыуы бигерәк тә мөмкин. Көрән атта дәрт ҙур. Ьис ҡалмай, иркен бара, әкренләп алдағы аттарҙы ҡыҫа. Ярты юлды килгәндә, минең алда аттар һирәгәйҙе. Ҡаҙаҡтың туры аты, Ырымбурҙан килгән ерән, Суран буйының данлыҡлы йүгереге тимер күк ат, тағы ла мин танымаған ике-өс ат күренә. Уларға ҡарағанда мин алтынсы киләм. Ләкин әле көрән аттың йүнләп тире лә сыҡмаған. Мин уны ҡыуғаным да юҡ. Алдағы шул күренеш миңә дәрт бирҙе. Алға эйелеп килеп, аттың арҡаһына еңел генә ҡамсы төшөрөп, теҙгенен буш ҡуйҙым. Көрән ат һурылып сыҡҡандай булды. Уҡ кеүек алға ынтылды. Ярты саҡрым үтмәгәндер, минең көрән ат Ырымбур ерәне, ҡаҙаҡ турыһы менән тиңләшеп ярыша башланы. Улар тирәһендә килгән теге өс ат күренмәне. Мин тағы ла дәртләндем. Тағы көрән аттың арҡаһына бер еңел генә ҡамсы төшөрөп, уға көс бирҙем. Ҡаҙаҡ егете атын миңә арҡыры ҡайыра башланы. Мин ул хәйләне бик яҡшы беләм. Улар шулай итеп аттың көс, һәләтен алырға тырышалар. Шул ваҡыт мин ҡамсы менән бик ныҡ ҡаҙаҡ атының арҡаһына бирҙем. Атты һулға бороборак үҙемдең атҡа берҙе һуҡтым. Ат тағы ла ҡанатланған кеүек булды. Ул бөтә көс менән юлдың бер ситенән генә, бер генә йүнәлеш алып, аға башланы. Ырымбур ерән аты ла, ҡаҙаҡ туры аты ла минең артта ҡалғайнылар. Дүрт-биш саҡрым самаһы ҡалғас, бәйге майҙаны күренде. Юл интәргә[1], түбәнгә китте. Мин яңынан, ат арҡаһына еңел генә ҡамсы биреп, үҙем алға эйелә төшөп, атҡа дәрт бирҙем. Ат тағы ла яҙыла төштө. Бәйгегә етер алда һәр бер йүгерек ат таҫыллана торғайны. Был етеҙлеген тагы ла арттыра төштө. Уның һайын мин уға дәрт бирә киләм. Алда сыбар халыҡ диңгеҙе күренә, елгә ҡаршы килгән күҙҙәргә улар

[1] *Интәр* — иңкеү.

томанланып күренәләр. Мин майҙанға етер алда юрамал бик ҡаты һуҡтым. Ул ташланды, буғай, уҡ кеүек атылып, ике яғына халыҡ теҙелгән юлда оса башланы. Миндә, ат сапҡанда туҡтап, бәйге алыу ғәҙәте юҡ. Был юлы ла мин бәйгегә туҡтаманым, йән-фарман сабып, юл буйлап, туғай яғына төшөп киттем. Бәйгенән бер-ике саҡрым китеп, кеше күҙенән юғалғас ҡына, йөрөштө әкренәйттем. Ул момент халыҡта ҙур ҡыҙыҡһындырыу тыуҙыра. Алдан килгән атҡа ҡарағылары килә — ул юҡ. «Ул сабып уҙҙы ла күҙҙән юғалды. Бәйгеһен дә таҡмаған...» тигән оригиналь бер фекер тыуа. Ә башҡа йүгеректәр, майҙанға туҡтап, бәйгеләрен ат муйынына тағып, майҙан эргәһендә аттарын күрһәтеп йөрөтөргә яраталар.

Атына ултырып, саптырып Ғаяз бай килеп етте. Мине күргәс тә, шатлығына түҙә алмай, илап ебәрҙе:

— Ысынлап та, ҡаҙаҡ аттарын ярты саҡрым ташлап уҙған һин булдыңмы? Беренсе бәйгене беҙгә бирҙеләр. Эле лә йөрәгем ышанмай. Бына инде, ҡустым, көрән ат ҡош кеүек оса, ә һин уның өҫтөндә күбәләк кеүек елберләп, шаярып киләһең. Бына, ҡустым, ни тип тә әйтә алмайым! — тип һүҙен әйтә алманы, тағы ла иларға башланы. Атынан төшөп, көрән аттың күҙенән үпте, ялдарынан һыйпаны. Шунан һуң мине маҡтарға тотондо:

— Арыҫлан малай икәнһең. Майҙанға туҡтаманың бит. Бөтә халыҡ көттө, көрән атты күрергә шаулаштылар. Һин килмәнең, бара-тора ҡурҡа башланым, мин әйтәм, әллә йығылып ҡалдымы, тим. Ә һин бында ғәмһеҙ йөрөп ятаһың. Был яғың менән тағы ла дан иттең. Хәҙер халыҡҡа күренмә инде. Ат йөрөтөргә бер малай ебәрәм. Һин хәл йыйырһың, — тине. Үҙе ашығып майҙанға китте.

Көрән аттың даны таралды. Ғаяз байҙың түбәһе күккә күтәрелде. Шул шатлығынан көрән аттың бәйгеһен — һигеҙ аршын ҡыйбатлы сукноны миңә бирҙе. Шуның өҫтәүенә 25 һум аҡса бирҙе. Ул минең өсөн күтөлмәгән байлыҡ булды. Мин дә аты уҙған Ғаяз байҙан кәм шатланманым. Ләкин, өйгә ҡайтҡас, ул эффекттар боҙолдо. Минең сукно ишек төбөнә ырғытылды. Әлдә аҡсамды әсәйемә биреп өлгөргәйнем. Арҡага көрән атҡа һуҡҡан ҡайыштар ҡайттылар.

— Һиндә намыҫ юҡ! Һин шуларҙың бер ҡабым иттәренә һатылып йөрөйһөң! Һиндә оят юҡ! Бар, Ғаяз байға ул бул! — тип атайым мине туҡмап сығарҙы. Шунан һуң мин Ғаяз байҙарға барманым. Ғаяз, күргәндә, минең менән оло кешеләр менән иҫәнләшкән кеүек иҫәнләшеп йөрөй башланы. Ләкин мин башымды ғына баҫып ҡала торғайным.

Мин урман ситендә ятам. Ауылда үткән матур саҡтар күҙ алдынан картина-картина булып үтәләр. Ләкин уларҙы уйлау ауыр. Уйлайһың, йөрәк ҡабара башлай. Ысынлап та, бит ошо көндә Ғаяз бай ҙа, уның балалары ла ауылда тыныс яталар. Уларға һуғыш еле, бураны ҡағылғаны юҡ. Ә беҙ, өс туған,

һуғышта йөрөйбөҙ. Ҡарт атайым яңғыҙы ауылда бөкрәйләп көн күргән була. Атайымдың туҡмарға ла хаҡы булған шул.

Ҡояш урман артына йәшеренде, мин ауылға килдем. Ауылда өйҙәрҙең күбеһе бикле йәки буш торалар. Урамда һалдаттар күренәләр, ниндәйҙер команда тора, буғай. Өй артында картуф утап йөрөгән бер поляк ҡатыны эргәһенә туҡталдым:

— Һеҙҙә ҡунып китергә урын булмаҫмы?

— Була, була, рәхим итегеҙ. Хәҙер йәй бит инде, ҡайҙа ла йоҡлап була, — тип үҙе һаман эшен дауам итте. Мин, шинелде һәм аҙыҡ төйөнсөктәрен өйгә ҡуйып, уның эргәһенә сығып ултырҙым. Мин был хужа ҡатынының тормошо менән ҡыҙыҡһындым:

— Һеҙҙең ғаиләгеҙ ҡайҙа? Әллә ҡырҙан ҡайтмағандармы? — тип һорау бирҙем. Ул эшен ташланы ла, минең алдыма килеп, кәтмәненә таянып, һөйләргә башланы:

— Ирем һуғышта. Ун йәшлек улым бар ине, ул да ҡалаға китте. Бер фабрикаға эшкә ингән. Ҡарт ҡайным менән икәү генә торабыҙ. — Юлға ҡарап: — Ул да өйҙә юҡ. Өсөнсө көн күрше ауылдағы ҡыҙына киткәйне, һаман ҡайтҡаны юҡ. Ире һуғышта үлеп, ҡыҙы ла тол ҡалды. Балалары күп. Күрәһең, шуларға ярҙам итә торғандыр.

— һуғыштан ҡурҡмайһығыҙмы һуң?

— Һуғыштан ҡурҡып ҡайҙа барайыҡ? — тине лә шарҡылдап көлөп ебәрҙе. Уның көлөүендә ниндәйҙер бер илау тауышы ишетелә. Аҡылдан шашҡан йәки үлемгә хөкөм ителгән кешеләрҙең көлөүе кеүек, эстән һулҡылдап әсе йөрәк тауышы сыға. Мин уға ҡаршы көлә алманым, тыштан ғына йылмайҙым. Сөнки уның һүҙендә көлкө юҡ, көлә торған һүҙ ҙә юҡ, сөнки ул күңел көрлөктән көлмәй, үҙенең яҙмышынан көлә. Кеше һалҡын бурандарҙа аҙашып үлгән саҡта, үлем алдынан ут күреп көлә, тиҙәр. Был ҡатын да ҡурҡыныслы һуғыш алдында ут күреп көлә. Уның был көлөүе мине ауыр тойғо аҫтында ҡалдырҙы, мин, унан йөҙөмдө алып, һүҙҙе икенсегә борорға уйланым. Ул көлгән йөҙөн ҡапыл үҙгәртте лә ғасаби бер тиҙлек менән һөйләргә кереште.

— Ҡайҙа бараһың? Ҡасып китергә кешеләр кеүек байлыҡ юҡ. Хәллерәк кешеләр киттеләр. Беҙҙең китергә ат та юҡ, аҡса ла юҡ. Сит ергә китеп үлгәнсе, үҙ йортомда үләм. Алла ҡушһа, иҫән булырбыҙ, ҡушмаһа, үлербеҙ. Ҡайҙа ла үлем бер түгелме ни? Бына күрәһең бит, һаман да көн күрергә маташабыҙ. Алланан әмер килмәһә, тоҡтомалға ғына үлеп булмай бит ул!.. — тип, кәтмәненең башына яңағы менән таянып, күҙҙәрен күккә терәп һөйләй ине. Мин уның йөҙөнә күтәрелеп ҡараным. Уның башы аша, төн яғында, офоҡта йәйелгән ҡыҙыллыҡтар күренәләр. Улар эңер ҡыҙыллығы түгел. Туптарҙан ялтыраған, ракета, прожекторҙарҙан йәйелгән фронт ҡыҙыллыҡтары. Был ауылдар шул ҡыҙыллыҡтарҙан төшкән ҡурҡыныс шәүләләр

аҫтында йәшәйҙәр. Ана шул шәүләләр аҫтында улар үлем яҡынлығын күрәләр, шул үлем алдында үҙҙәренең яҙмыштарынан көләләр.

Миңә был хәлдә ултырыу артыҡ күңелһеҙ булды. Хужа ҡатындан һораным:

— Ауылда тәмәке табып булырмы икән? — тинем. Ул ҡапыл ҡуҙғалды:

— Тәмәке? Тәмәке, тиһеңме? Уны табырбыҙ. Беҙҙә һалдаттар ҡалдырып киткән бер йәшник тәмәке ултыра. Әйҙә, тарт ҡына! — тип өйөнә табан атланы. Мин дә уның артынан тәмәке тартырға ашыҡтым.

## УН БИШЕНСЕ БҮЛЕК

Өс көндән һуң үҙебеҙҙең полкты эҙләп таптым. Иптәштәрҙең барыһы ла иҫәндәр. Күңел ышанмай һорашам. Мин уларҙы юғалтып ҡайтһам, улар мине юғалтып торғандар икән. Мин иҫән ҡайтҡас, улар, шаулап күтәрелеп киттеләр, ҡунаҡ иттеләр, һыйланылар, минең хәлдәрҙе, күргәндәрҙе һораштылар.

Был һуғышта беҙҙең полк бик ныҡ ҡырылған. Өс меңдән артыҡ кешенән бөтәһе биш йөҙләп кеше ҡалған. Беҙҙең рота-ла барлығы 15 кеше. Шул арҡала беҙҙең полкты ғына түгел, бөтә дивизияны артҡа ял итергә сығарғандар. Өҫтәлмә ғәскәр көтәләр. Шулар килеп, яңынан формировать ителмәйенсә тороп, беҙҙе ебәрмәйәсәктәр, имеш, тигән хәбәр бар. Һалдаттар өсөн был хәбәр ҡыуаныслы. Новиков мәсьәләне бөтөнләй башҡа төрлө ҡуя:

— Етер инде, иптәштәр, хәҙер һуғышырға ярамай. Мин һеҙҙе бер үлемдән ҡотҡарҙым. Гел генә улай ҡотолоп булмаҫ, — ти. Ысынлап та, был һуғышта иптәштәрҙе үлемдән Новиков ҡотҡарған. Һөжүм ваҡытында бөтә телефон сыбыҡтары өҙөлгән, штабтар менән хәбәр алышыу мөмкин булмаған. Шул линияларҙы күҙәтеү өсөн, телефонистарға ярҙам итеү өсөн Новиковты ебәрергә булғандар. Шул һылтау менән Новиков бөтә иптәштәрҙе һуғыш линияһынан үҙе менән артҡа алып киткән. Мин, аҙашып, тороп ҡалғанмын. Улар һуғыш баҫылғансы, артта, блиндаж эсендә ултырғандар. Иптәштәрҙең барыһы ла иҫәнһау ҡотолғандар. Шул арҡала иптәштәр Новиковҡа «Христос спаситель» тип исем дә ҡушып өлгөргәндәр. Хәҙер Новиков иптәштәр араһында үҙен етәксе итеп хис итә. Шуға күрә ул хәҙер күберәк аҡыл бирергә, юлдар күрһәтергә ярата, беҙ ҙә уны ҡаршылыҡһыҙ тыңлайбыҙ.

Беҙ бер аҙна ғына ял итеп ҡалдыҡ. Беҙгә өҫтәмә ғәскәр килде. Улар ҡарт ополчиндар, новобранеңтар, еңел яраланып лазареттан сыҡҡан фронтовиктар, ҡалаларҙа, новобранеңтар өйрәтеп, һуғышҡа килмәй ятҡан кадровой унтер-офицерҙарҙан

торалар. Уларҙың килеүе беҙҙең башҡа бәлә ине. Шулар менән беҙҙе һәр көн стройға, занятиеға сығара башланылар. Һуғыштан сыҡҡан, яралары төҙәлеп, лазареттан килгән һалдаттарға был эш бер ҙә оҡшаманы. Етмәһә, теге яңы килгән унтер-офицерҙар, новобранецтарға ҡуйған дисциплинаны ҡуйып маташалар. Эҙ генә бәйләнһәң, рота командирына жаловать итәләр, дисциплинаны боҙған өсөн беҙгә наказание бирҙереү сараһын күрәләр; үҙҙәре алдында честь алып һөйләргә ҡушалар. Хәҙер былар беҙҙең өсөн ят, беҙҙең өсөн күптән онотолған әкиәттәр.

Яңы килгән унтер-офицерҙар менән беҙҙең арала булған был тартыштар һөҙөмтәһеҙ үтмәне. Бер тапҡыр яраланып, яңынан фронтҡа килгән ҡарт һалдат Андреев менән бер унтер-офицер араһында ваҡиға Андреевтың үлеме менән бөттө.

Андреев ике көн занятиеға сыҡмаған; яңы килгән унтер-офицер уға бәйләнгән, наряд биреп маташҡан. Рота командирына доложить иткән. Бер уңайлы моментта Андреев теге унтер-офицерҙы тотҡан да биттәрен ҡанға туҙҙырғансы туҡмаған. Андреевҡа ярҙамға башҡа һалдаттар ҙа килгәндәр. Шул арҡала башҡа бер унтер-офицер ҙа эләккән. Ләкин ул ҡасып ҡотолған. Командирға хәбәр иткән. Андреевтың был эшенә политик төҫ биргәндәр, һалдаттар араһында восстание яһарға теләгән тип, полевой судҡа бирҙеләр. Полевой суд Андреевты атырға ҡарар сығарҙы. Был ҡарар һалдаттар араһында төрән һәм ауыр тәьҫир тыуҙырҙы. Бер нисә взводҡа Андреев тураһында булған хөкөмдө еренә еткереү, атыу өсөн приказ булһа ла, улар үтәмәнеләр, баш тарттылар. Аҙағында казачий эскадрон кешеләре килеп, Андреевты атып киттеләр. Шул Андреев ваҡиғаһынан һуң ҡарт һалдаттарҙы стройҙан алдылар, беҙҙе ағас ҡырҡырға, юлдар, күперҙәр төҙәтергә йөрөтә башланылар. Ләкин ул саралар ғына ҡарт һалдаттар менән унтер-офицер араһында тыуған дошманлыҡҡа сик ҡуйманы. Бер төн урман эсендә ике унтер-офицерҙы үлтереп ташланылар. Ул турала допрос, тикшереү-фәлән булманы. Тауыш-тынһыҙ ғына күмделәр.

Әгәр ҙә немец ғәскәре беҙҙең фронтты өҙөп, беҙҙең ғәскәр артҡа сикмәһә, ул көрәш һаман дауам иткән булыр ине, шул арҡала әхүәл ҡапыл үҙгәреп китте. Полкты роталарға, батальондарға бүлеп, бөтәбеҙҙең дә ҡулдарыбыҙға салғылар биреп, баҫыуҙарға тараттылар. Урожай дошман ҡулына ҡалмаһын өсөн, крәҫтиәндәрҙең яңы баш ҡоҫорға яҡынлашҡан ашлыҡтарын сабырға приказ булды. Салғы күтәргән һалдаттар алдында теге унтер-офицерҙар йомшарҙылар, тауыштарын күтәрмәй башланылар. Үләндән түбән, һыуҙан әкрен булдылар. Сөнки һалдаттар крәҫтиәндең өлгөрмәгән ашлығын сабыу өсөн теләп килмәйҙәр. Сапҡанда ла теләп сапмайҙар. Берәр покос сығалар ҙа:

— Был яғы үҙҙәренә ашарына ҡалһын инде, иптәштәр, сапмайыҡ, — тип бер-береһен өгөтләргә башлайҙар.

Беҙҙең Байгужа менән Буранбай бер покос ер сыҡманылар. Салғыларынан күләгә ҡороп, шуның аҫтында тәмәке тартып яттылар. Ә Новиковҡа көн тыуҙы. Ул көнө буйы һүгенә, һуғышын да, батшаһын да, крәҫтиәнен дә һүгә:

— Поляк крәҫтиәндәре — һарыҡ. Берәһе лә баҫыуҙарына күҫәк күтәреп сыҡмайҙар, өйҙәрендә илап ултыралар. Улар күтәрелеп сыҡһалар, билләһи, еңерҙәр ине. Уларға бер һалдат та ҡаршы тормаҫ ине. Беҙ бит үҙебеҙҙең атайҙарыбыҙҙың ашлыҡтарын һәләк итәбеҙ. Беҙ салғылар менән үҙ муйыныбыҙҙы үҙебеҙ һуябыҙ бит. Беләһегеҙме, иптәштәр?

Ҡарт һалдаттар Новиков һүҙенә ҡушылалар. Новобранеҫтар шым ғына тыңлайҙар. Унтер-офицерҙар ишетмәмешкә һалышалар. Калдаттар араһында шундай һүҙҙәр барғанда, ситкәрәк китеп тәмәке тарта башлайҙар.

Кис ҡырын ауылға ҡунырға килдек. Бер ҡарт поляк крәҫтиәне урамда, күҙенә ҡулын ҡуйып, беҙгә ҡарап ултыра. Беҙҙең яурындағы салғыларҙы ҡарап:

— Беҙгә бер ҙә ашарға ҡалдырмайһыҙмы ни? Барыһын да сабып китәһегеҙме ни? — тип ҡалтырауыҡлы тауыш менән һорау бирҙе. Күҙенән ҡулын алып, беҙҙән яуап көтә башланы. Новиков, уның алдына туҡтап, тәмәке төрөп:

— Барыһын да бөтөрәбеҙ. Хәҙер бына үҙегеҙҙе сабырға килдек, — тине. Бабайға көлөп ҡараны. Бабай әкрен генә тауыш менән:

— Дөрөҫ әйтәһең, һалдат. Былай булғас, үҙебеҙҙе лә сабырға кәрәк. Аҫҡа аҙапланып үлгәнсе, былай үлеү еңелерәк булыр, — тине ҡарт, Новиков эргәһендә торманы, тәнтерәкләп өйөнә табан атланы. Уның кәүҙәһе һелкенә, иҫерек кеше кеүек алпан-толпан килә, ул илап бара ине.

Ул кис Байғужа, Буранбай, мин — өсәү бер өйҙә ҡундыҡ. Байғужа төнө менән шул ашлыҡ сабыу тураһында баш ватты:

— Ысынлап та, ҡарт дөрөҫ әйтә бит, әй... крәҫтиәндең игенен сапҡансы, үҙен сапҡан яҡшыраҡ ул. Ашлыҡ немецтарға ҡала тип ҡурҡалар — ҡалһын! Крәҫтиәне лә шунда ҡала бит уның. Унда ҡала торған крәҫтиәндең ни ғәйебе бар. Батша һуғыша тип, улар аҫҡа үлергә тейешме ни? Иллә-мәгәр был офицер, генерал халҡы крәҫтиәнде аңламай инде. Мин был эштәренә һис риза түгелмен. Ошо һалдаттар берләшеп, ул сволочтарҙың үҙҙәрен сабырға ине. Теге унтер-офицер килмәне. Әгәр ҙә бәйләнһә, билләһи, сабып үлтерә инем. Ниҙән ҡурҡырға. Киткән баш киткән инде...

Аҙ һөйләй торған, күп ваҡыт тыңлаған Байғужабыҙ бөгөн йөрәкләнгән, ярһыған. Бөгөн уның һүҙе бөтмәй, йоҡларға ятҡас та, бик оҙаҡ һөйләнде. Йоҡлар алда беҙҙе тәмәке тартырға торғоҙҙо. Тәмәке һылтауы менән тағы һүҙгә-һүҙ ялғанды. Бөтә донъяһын, һуғышын, офицерын, генералын — барын-барын ләғнәтләне. Беҙ йоҡларға ятҡас та, ул бик оҙаҡ ахылдап йоҡлай алмай ятты.

Мин тәмле йоҡоға киткәнмен. Байғужа мине уятты:

— Тор әле, Булат.

— Ниңә уятаһың, тағы? Бөгөн һиңә ни булды?

— Киңә генә һөйләй торған һүҙҙәрем бар.

— Иртәгә һөйләрһең әле, йоҡларға кәрәк! — Мин, әйләнеп, шинелгә төрөнөп яттым. Ул мине күтәреп алдына ятҡырҙы ла тоҡандырған тәмәкеһен минең ауыҙға ҡаптырҙы:

— Тәмәке тарт, йоҡоң асылыр. Әйтәм бит, һиңә генә һөйләй торған һүҙҙәрем бар.

— Йә, нимә бар һуң? Һөйлә!.. — Мин иренеп кенә бик ауыр тороп ултырҙым. Йоҡо баҫҡан күҙҙәр йомолалар, уларҙы асырға тырышып, тәмәке һура башланым. Байғужа үҙенә яһап маташа, шул ваҡыт әкрен генә һөйләй:

— Ышанырһыңмы, юҡмы, мин бер ҙур эш эшләнем бит.

— Йә, ни эшләнең?

— Әйтмә инде, әй... Уйламаған бер эш эшләп ташланым бит. Ул эште ошо көнгә тиклем бер кемгә лә әйтмәнем. Бына башлап һиңә генә әйтәм.

— Йә, һөйлә инде!.. Ниндәй эш һуң ул?

Байғужа тирә-яғына ҡаранды. Ауыҙын минең ҡолаҡ эргәһенә килтерҙе, айырым бер кисереш менән:

— Беләһеңме, мин кеше үлтерҙем бит.

— Кеше үлтерҙең?

Байғужа минең ауыҙҙы баҫты, беләктән ҡыҫып тотто.

— Сеү, шаулама! — тине. Байғужаның был һүҙенә минең йоҡо асылды. Ҡаты итеп тәмәке һурҙым да, төпсөгөн иҙәнгә ырғытып, Байғужаның һүҙен тыңларға башланым:

— Йә, кемде? Ҡасан?

— Теге унтер-офицерҙарҙы.

— Кем менән?

— Бер үҙем.

— Бер үҙең булмаҫ, булмаҫ!

— Әйтәм бит, билләһи, бер үҙем.

— Икеһен дәме?

— Эйе, эйе, икеһен дә, билләһи, шулай.

— Юҡ, ышанмайым. Һин әллә төш күреп уяндыңмы? Әллә һаташаһыңмы?

— Әйттем бит, ышанмаҫһығыҙ, тинем бит, бына, улай булһа, бөтәһен дә һөйләп бирәйем. Ул шулай булып сыҡты инде...

Байғужа ул минут миңә нормаль түгел кеше кеүек тойолдо. Мин уны беренсе тапҡыр шул хәлдә күрәм. Ул бөгөн күп һөйләй, унан һуң күңел ышанмаҫлыҡ хәбәрҙәр һөйләй. Мин уйлайым. Бының һүҙе ни менән бөтөр икән, тим. Әллә ауырый микән тип, белдермәҫтән генә ҡулдарын тотоп ҡарайым, ҡыҙыу түгел, нормаль кеүек күренә, ләкин ҡулдары ҡалтырай. Ул ҡалтырау уның эске кисерештәренән ине. Ул бик ауыр көрһөндө:

— Мин үҙем дә уйламағайным. Көтмәгәндә булды инде. Кис менән балта күтәреп урмандан ҡайтып килә ятҡанда, ҡараңғы төшкән саҡта, әлеге яңы килгән ике унтер-офицер урман эргәһендә һөйләшеп ултыралар. Мин балтаны яурынға һалған килеш туҡтап ҡалдым, улар мине һиҙмәнеләр. Улар теге атылған Андреев тураһында һөйләшәләр. Шуны ишеткәс, минең йөрәгемә асыу тулды. Андреев мәрхүмдең үлер алдындағы һүҙҙәре иҫкә төштө. «Әллә ошоларҙы үлтерәйемме?» тигән уй башҡа килде. Балта күтәреп үтһәм дә, шикләнерҙәр кеүек тойолдо. Мин һаман шул урында баҫып ҡалдым. Улар һаман һөйләшәләр. Тоҡтомалға йөрәк ҡабарҙы, тулҡынланды. «Юғалған баш юғалған, үлтерәйем шуларҙы», — тинем. Береһенең башына балта менән birҙем. Ул бер генә «эһ!» тине, тауышһыҙ юғалды. Икенсеһе ҡуҙғалғансы, уның елкәһенә birҙем. Ул бөкрәйеп төштө. Икеһенең дә тауышы юҡ. Мин шикләндем. Былар юрамал ятмайҙармы икән, тип уйлайым. Икеһенең дә башына ауыр балта түтәһе менән берәр генә birҙем дә кире артҡа йүгерҙем. Бик оҙаҡ урман араһында тыңлап яттым. Шау-шыу ишетелмәне. Кис бер кеше менән һөйләшмәй йоҡларға яттым. Йоҡлау ҡайҙа ул. Таң атҡансы күҙемде йомманым инде. Иртәгеһенә тегеләрҙең үлтерелеү хәбәре ишетелгәс, мине килеп тоторҙар инде, тип минут, сәғәт һайын көттөм. Неҙгә әйтергә ҡыйманым. Уларҙы күмгәс кенә, бер аҙ тынысландым. Мин уйлайым, моғайын, һиҙмәнеләр, тимен, ләкин күңелдә шик бөтмәй. Әле ашлыҡ сапҡан ваҡытта юрамал эшләмәнем, шулар менән бәйләнергә теләнем. Бәхеттәренә ҡаршы, береһе лә килеп бәйләнмәне. Эгәр ҙә бәйләнһәләр, билләһи, береһен салғы менән саба инем. Бер йөрәк ҡоторһа, ҡотора икән ул, әй. Мин быға тиклем үҙ ҡулым менән себен дә үлтергән кеше түгел бит!

Ул ҡабаланып тағы ла тәмәке төрҙө. Күҙен бүлеп, тәмәке төтөнөн ҡабалана-ҡабалана һура башланы. Үҙенең эше тураһында ул минең фекерҙе көттө, буғай, мин уга ҡапыл ғына бер һүҙ ҙә әйтмәнем, Байғужаның унтерҙар үлтереү картинаһын яңынан күҙ алдынан кисереп ултыра инем, ул ҡарлыҡҡан тауыш менән:

— Уйламағанда шулай булды бит, әй!.. — Миңә тәмәке ҡағыҙы һуҙҙы. Мин, артыҡ уйламаҫтан-нитмәҫтән:

— Ниңә, бик яҡшы булған. Шул арҡала беҙҙе занятиенан ҡотҡарҙылар бит, — тинем. Минең был эшкә булған еңел ҡарашым ундағы ауыр настроениеға еңеллек birҙе, буғай, ул, һарыҡ йүткергән һымаҡ итеп, теләр-теләмәҫ өҙөк кенә итеп бер көлдө лә үҙ алдына үҙе һүгенергә тотондо. Ул һүгенгәндә, мин өндәшмәй генә тәмәке төрҙөм. Ул һүгенеүен былай бөтөрҙө:

— Улар беҙҙе меңәрләп үлтерәләр бит. Эгәр ҙә шуларҙың бер полковнигын атып үлтерһәм, үлһәм дә үкенмәҫ инем. Нимәкәй беҙгә, барыбер үлем бит! Шулай түгелме?

Минең йоҡо асылды. Байғужаның рухында был үҙгәреш мине аптыраушта ҡалдырҙы. Мин уның был әшенә ни тип тә нарыҡ бирә алманым. Бигерәк тә тымыҙыҡ ҡына, баҫалҡы, йыуаш ҡына Байғужа тарафынан шундай бер эштең эшләнеүе, уның шып-шыма бөтөүе мине ғәжәпкә ҡалдырҙы. Аптырағас:

— Байғужа, һин ысынды һөйләйһеңме? Ошо ваҡиға ысынлап та булдымы? Шуның барыһын да үҙең генә эшләнеңме? — тип яңынан һорауҙар бирҙем. Ул тағы өҙөк кенә көлдө лә:

— Төндә, һине йоҡоңдан уятып, алдап ултыра тип беләһеңме әллә? Үҙемдең яҡыным итеп кенә һиңә һөйләйем бит. Бына Буранбай йоҡлап ята, уға ла һөйләгәнем юҡ, — тип үпкәле тауыш менән һүҙен бөтөрҙө. Мин, уның рухын күтәреү өсөн:

— Бир ҡулыңды! Әгәр шуны эшләһәң, молодец! Уларға минең дә ҡаным көйгәйне, молодец! — тип ҡулын ҡыҫтым. Байғужа минән шуны ғына көткән кеүек күтәрелеп китте. Күтәренке тауыш менән:

— Ҡуй инде, әй. Себергә китерлек эш эшләнем инде, әй... Но үҙем дә ҡурҡҡайным, ярай әле осо сыҡманы. Беләһеңме, мин тегеләрҙе үлтергән балтаны ергә күмеп ҡалдырҙым, — тип бик ҡаты көлдө. Баш аҫтынан алып салбарын кейә башланы. Үҙенең ғәҙәте буйынса өҙөк-өҙөк итеп һөйләнеп, итектәрен алды. Мин:

— Ҡайҙа бараһың? — тип ҡырҡыу һорау ҡуйҙым. Ул ашыҡмай ғына:

— Мин бер урында бик яҡшы нәмәләр күрҙем. Иртәгә ашлыҡ сабырға барабыҙ. Мин һеҙҙе бик шәп итеп һыйлайым әле. Таң яҡтырмаҫ борон барып килергә кәрәк, — тине. Буранбайҙы уятты. Ул йоҡо аралаш, кирелеп һуҙылып, һүгенеп маташты. Байғужа уның капризына ҡараманы, ботонан һөйрәп торғоҙҙо. Буранбай, күҙҙәрен ыуып:

— Йә, ни бар? Ниңә уятаһың? — тип тороп ултырҙы. Байғужа уға ҡайҙа, ниңә барыуҙы һөйләп торманы:

— Таң ата, әйҙә, тиҙерәк барайыҡ, — тине. Буранбай һис ҡаршылыҡһыҙ кейенә башланы. Күрәһең, уларҙың төнгө пландары көндөҙҙән уйланып ҡуйылған, мин дә һорашманым, улар сығып киттеләр. Мин, яңғыҙ ҡалып, Байғужа тураһында оҙаҡ уйландым. Таң яҡтыра башланы. Мин йоҡоға киткәнмен.

Мин уянғанда, ҡояш шаҡтай күтәрелгәйне. Новиков, Индрил, Байғужа, өсәүләп, шаулашып һөйләшәләр, тәмәке тарталар ине, мин тора башлағас:

— Барин, завтрак әҙер, рәхим итеп кейенегеҙ! — тип көлдөләр. Шаяра башланылар. Минең алға сығыр өсөн көршәк килтерҙеләр. Берегһе кружка менән һыу, таҫтамал, һабын тотоп килеп алға баҫты. Индрил бармағы менән сәсте тарарға тотондо. Новиков минең итектәрҙе, шинелде алып таҙарта башлаған булды. Миңә төрлө сюрприз яһай башланылар. Быларҙың барыһы ла мин йоҡлаған саҡта эшләнгән план буйынса башҡарыла

ине. Башта мин ҡарышып маташтым, улар ихтыяр бирмәнеләр; һуңынан ҡарышманым. Улар әйткәндең бөтәһен дә эшләнем. Мин йыуынып, кейенеп бөткәс, ҡултыҡлап һарайға алып барҙылар. Унда төтөн сыға, бик тәмле аш еҫтәре танауға бәреләә, шул төтөндәр араһында Буранбай, еңдәрен һыҙғанып, эшләп йөрөп ята. Беҙ һарайға ингәс, Новиков бик күтәренке оратор тауышы менән:

— Быларҙың бөтәһе лә һинең һуғыштан иҫән-һау ҡайтыу хөрмәтенә эшләнә, был беҙҙең тарафтан һиңә эшләнгән бик кескәй генә хөрмәт, — тине. Иптәштәр «ура» ҡысҡырҙылар, шаулашып көлөшә башланылар, мине, күтәреп, ҡулдарында сөйҙөләр. Быларҙың барыһы ла юрамал эшләнһә лә, минең өсөн бик күңелле булды, үҙемде яҡын иптәштәрем араһында һиҙҙем. Новиков мине ҡайнап ултырған силәк эргәһенә алып барҙы. Ҡуңысынан ҙур ҡашығын алып силәккә тығып, ҙур киҫәк ит һәм бер тауыҡты алып күрһәтте. Тағы силәк эргәһендәге ике котелокка экскурсия яһаныҡ, уларҙың береһендә сусҡа майында бутҡа бешә, береһендә сусҡа майында картуф жарить ителә. Шуларҙы ҡарап сыҡҡас, Новиков:

— Бөгөн офицерский обед ашаясаҡбыҙ. Быларҙың бөтәһе лә Байғужа менән Буранбайҙың хеҙмәте. Э бына быныһы минең хеҙмәт! — тип һарайҙағы йәшник артынан сирек менән ҡыҙыл араҡы сығарҙы, мин аптырап ҡалдым. Быларҙың барыһы ла минән башҡа, миңә әйтелмәй эшләнгәндәр. Минең аптыраш эсендә ҡалыуыма шарҡылдашып көлдөләр ҙә бындагы аҙыҡтарҙың, араҡыларҙың тарихтарын һөйләй башланылар. Байғужа менән Буранбай, офицерский кухня өсөн килтерелгән кухня складына барып, ярты һарыҡ ите, бер тауыҡ, ярма, консервалар, сусҡа майҙары урлап алып ҡайтҡандар. Ул бер крәҫтиән һарайында булған, улар түбәнән төшөп алғандар. Был аҙыҡтарҙың бөтәһе лә бешерелгән. Тағы ла бешереү өсөн ҡалдырғандар. Ә Новиков, еврейҙар араһына барып, ҡайҙандыр, ниндәй юл менәндер, бер сирек ҡыҙыл араҡы табып килгән. Индрилдың да бер флакон одеколоны йөрөй икән. Ул да стройға инде. Ҡыҙыл араҡыны көсәйтеү өсөн сирек эсенә ҡойолдо.

Беҙҙең батальон бөгөн эшкә сыҡманы. Беҙҙең дивизияны икенсе фронтҡа оҙаталар, имеш, тигән хәбәр бар. Бөтә һылтау бергә тура килде.

Беҙ ул көн бөтә донъяны онотторҡ. Аҡылдан шашып эстек. Бөтә закускаларҙы ашап бөттөк. Карайға һыйманыҡ. Йырлашып, ҡосаҡлашып яланға, урман араһына сығып йөрөнөк, бөтә донъяһын һүктек. Яңынан ауылға ҡайтып, бер гармунсы алып килдек. Уны уйнатып бейештек. Беҙҙең шау-шыуға һалдаттар килделәр, ауылдағы крәҫтиән, егет, ҡыҙҙар йыйылдылар. Бейеү, йырлау китте. Беҙ башлаған мәжлес общий уйынға, күңел асыу кисенә әүерелде. Беҙ ул көн ҡайһыбыҙ ҡайҙа, ҡалай ятҡанды белмәнек, иртә менән торғанда барыбыҙ ҙа һарайҙа, һа-

лам өҫтөндә, кейемдәребеҙ менән ята инек. Әгәр ҙә батальонға, дивизия штабына ҡайтырға приказ булмаһа, һаман да ятҡан булыр инек. Барыбыҙ ҙа, ауыртҡан баштар, ауырыған, ватылған кәүҙәләр менән тороп, һүҙһеҙ-ниһеҙ генә йыйынып стройға киттек. Кисә үткәргән күңелле мәжлестең матур иҫтәлектәре бөгөн башта юҡ, улар похмель менән томаланғайнылар.

## УН АЛТЫНСЫ БҮЛЕК

Дивизия менән походҡа сығыу алдынан, Новиков штабтан ҡулына хат тотоп йүгереп ҡайтты. Ауыҙы йырылған, һулыштары ҡыҫылған: «Булат! Булат, бейе, бейе, билләһи, бейе! Әгәр бейемәһәң, билләһи, туҡмайым, әйтәм бит, билләһи, туҡмайым!» — тип, минең ҡулдан тотоп, һөйрәп йөрөтә башланы. Индрил таҡмаҡ әйтте, мин, бер-ике әйләнеп, бейеп алдым. Новиковтың ауыҙынан һүҙ көтә башланым. Ул, минең ҡулдан тартып, үҙ эргәһенә яҡын килтерҙе лә йыртылған хаттың конвертын күрһәтте:

— Күрәһеңме, был хат кемдән? Женя, Ирочкаларҙан. Тағы бейе, шайтан алғыры! Онотмағандар бит! — Мине ҡырғараҡ алып китте. Йәшел үләнгә баҫып уҡый башланыҡ. Новиков уҡый, мин тыңлайым, йотолоп тыңлайым. Ул бер һөйләмен уҡый ҙа:

— Ишетәһеңме, ни әйтәләр бит! — тип, бармағын күтәреп, көләп ҡуя. Беҙ ул хатты бер нисә тапҡыр уҡыныҡ. Уҡыған һайын шатлығыбыҙҙан күтәрелдек. Ҡулдарыбыҙҙы ҡыҫтыҡ. Ләкин хаттың аҙаҡ яғы беҙҙең өсөн күңелһеҙ. Фронт яҡынлау сәбәпле, приют эвакуацияға әҙерләнә, шул сәбәпле адрестарын күрһәтмәйҙәр һәм яуап яҙыуҙы ла тейешле тапмайҙар, барып урынлашыу менән, яңы адрес менән хат яҙырға уйлайҙар. Ләкин уның да бик насар яғы бар. Был хат беҙгә әлеге интендантство адресы менән килеп, шунан беҙҙең полк штабына ебәрелгән. Һәр ваҡыт беҙгә Ирочкалар хат ебәреп тормаҫ бит. Икәүләп үкенәбеҙ, шулай ҙа полк адресын күрһәтеү өсөн генә булһа ла хат яҙырға уйлайбыҙ. Ләкин ҡалай итеп яҙырға беҙҙең баш етмәй. Уларҙың матур яҙылған хаттарына ҡаршы матур яуап яҙырға кәрәк. Новиковтың грамотаһы уртаса, мин рус телен яҡшылап белмәйем, белгән тиклемен дә дөрөҫ яҙа алмайым. Беҙ ул турала баш вата башланыҡ. Аҙағында Индрилдан яҙҙырырға тигән ҡарарға килдек. Новиков хатты тағы ла уҡый, уҡыған һайын:

— Күгәрсендәрем, ниндәй матур яҙалар бит. Ундай матур һүҙҙәрҙе ҡайҙан һайлағандар? Хәйер, культура шул, культура...

Ысынлап та, ул хат уҡып туйғыһыҙ матур яҙылған, былай башлап киткәндәр:

*«Һөйөклөләребеҙ Сережа һәм Булат! Һеҙҙең менән бергә үткәргән төндө беҙ онотҡан тип уйлайһығыҙҙыр, юҡ. Беҙ шуның менән йәшәйбеҙ. Беҙ шул турала уйлайбыҙ, шул турала йырлайбыҙ, шул турала илайбыҙ. Йәштән бәхетһеҙ булып тыуған кешеләрҙең мөхәббәттәре лә бәхетһеҙлек менән бөтә, тип уйлайбыҙ. Беҙ һеҙҙе көттөк, килер тип көттөк. Ләкин көтөүҙәребеҙ бушҡа сыҡты. Хат көттөк, адресыбыҙҙы бирергә онотҡаныбыҙҙы хәтерләп, унан өмөт киҫтек. Бына бөгөн икәүләшеп күҙ йәштәре менән һеҙгә хат яҙабыҙ. Тапшырылырмы, юҡмы, уға ла ышаныубыҙ тулы түгел. Шулай ҙа, хат яҙғас, бер аҙ йөрәк баҫыла, күңел тынысланa, бәлки, хат барыр, бәлки, алып уҡырҙар, тигән өмөт тыуа. О, әгәр ҙә беҙҙең хатты һеҙ уҡығанды белһәк, беҙ нисек шатланыр инек! Әгәр ҙә уға ҡаршы һеҙҙән хат килһә, беҙ шатлығыбыҙҙан ҡанатланып осор инек. Һәр ваҡыт төшкә инәһегеҙ. Күңелһеҙ, бойоҡ булып төшкә инәһегеҙ. Иртә менән торабыҙ ҙа: «Үлделәрме икән әллә?» — тибеҙ. Үҙебеҙҙең шул һүҙҙәребеҙҙән ҡурҡабыҙ ҙа, ҡолаҡтарҙы ҡаплап: «Юҡ, юҡ, үлмәгәндәр!» — тип күңелебеҙҙе йыуатабыҙ. О, әгәр белһәгеҙ ине, беҙ һеҙҙең өсөн нимәләр эшләнек! Беҙ икегеҙгә бик матур итеп, бөтә оҫталығыбыҙҙы һалып, тәмәке өсөн кисет әҙерләнек, иң матур сигештәр менән нағышлап, ҡулъяулыҡтар эшләнек. Яғаларын, еңдәрен, итәктәрен нағышлап, һеҙгә бирәр күлдәк тә тектек. Беҙ уларҙы һеҙҙең өсөн иң ҡәҙерле бүләк итеп һаҡлайбыҙ. Сөнки беҙ уларҙың һәр бер нағышына айырым күңел һалдыҡ, ептәрен, төҫтәрен, биҙәктәрен һайланыҡ, һеҙҙең матур, нескә күңелдәрегеҙҙе шунда сағылдырырға тырыштыҡ. Шул арҡала приют өсөн дә яҡшы нағыштар бирҙек, ҡыҙҙар араһында беренселекте алдыҡ. Ләкин һеҙ булмағас, уларҙың барыһы ла бушҡа торалар. Беҙ шуларға ҡарайбыҙ ҙа, һеҙҙе иҫкә алып, күҙ йәштәрен түгәбеҙ. Шуларҙың эсендә һеҙҙе күрһәк ине, тибеҙ. Ә һеҙ әллә ҡайҙа, ҡандар эсендә йөрөйһөгөҙ. Беҙ һеҙҙең өсөн бөтә һуғышты, һуғыш асҡан батшаларҙы ҡарғайбыҙ, ләғнәтләйбеҙ. Шулар тонсоҡһондар ине, тибеҙ. Хатта ул турала беҙ үҙебеҙҙең начальниктарҙан да шелтә алдыҡ. Беҙҙе саҡырып тәүбә иттерҙеләр. О, белһәгеҙ ине, ниҙәр генә булып бөтмәне! Беҙ география уҡығанда картала Рәсәй һыҙығын немецтар алған ерҙән күрһәткән өсөн, беҙҙең приюттың побы беҙҙе шул тиклем ҡыҙҙырҙы, сәстәрҙе йолҡа яҙҙы. Беҙ, белмәмешкә һалышып, ғәфү үтенгән булдыҡ. Әле лә иптәштәр беҙҙән көләләр. Бына беҙҙең ваҡыт шулай үтә. Һеҙ булмағас, күңелһеҙ, күңелһеҙ!.. Ҡасан һуғыш бөтөр. Ҡасан һеҙҙе иҫән-һау күрербеҙ! Беҙҙең бөтә теләк шул...»*

Хатты бер нисә тапҡыр уҡып сыҡҡас, Новиков йәшел үләнгә салҡан төшөп ятып, күккә ҡарап бик оҙаҡ уйланды. Мин хаттан алған көслө тәьҫир аҫтында, тубығымды тотоп, ал-

дыма ҡарап, шуларҙы күңелдән ҡабатлап ултырҙым. Новиков ҡапыл ҡуҙғалып торҙо ла ергә тубыҡланып ултырҙы. Ораторҙарса ҡулын болғап һөйләй башланы:

— Барыһы ла дөрөҫ! Был һуғыш беҙҙе йәшәтеү өсөн түгел, беҙҙе үлтереү өсөн яһалған. Һиҙәһеңме, беҙҙең фәрештәләр ҙә дөрөҫ аңлағандар? Ниңә беҙгә ҡан түгергә? Ниңә беҙгә йәштән генә ҡорбан булырға? Шайтаныма кәрәкме ни ул? Беҙ яңы тормош күреү өсөн ашҡынабыҙ, ә улар беҙҙе үлемгә ҡыуалар! Беҙ үлгәс, ул һуғыштың беҙгә ни кәрәге бар? Беҙгә ерҙең ни кәрәге бар? Беҙгә бер аршын ер етә бит. Юҡ, юҡ, үлергә ярамай, һуғышырға ярамай!.. Ни өсөн һуғышырға? Ни өсөн?..

Һуңғы һүҙҙәр Новиковтың йөрәгенән айырым ялҡынлы сыҡтылар. Шул уңайға ул тороп китте, кеҫәһенә хатты һалды ла:

— Әйҙә, китәбеҙ! — тине. Беҙ иптәштәр эргәһенә килдек. Улар, кухнянан обед алып килеп, беҙҙе ашарға көтәләр ине. Беҙ өндәшмәй генә ашарға ултырҙыҡ. Ашап бөткәс, Индрил ҡашығын һөртөп ҡуңысына тыҡты ла Новиков менән минән көлә башланы:

—г Ҡыҙҙарҙан килгән хатты һеҙгә уҡыу бик ауыр булды, буғай? Бик ауыр кисергәнһегеҙ кеүек тойола? Һәр икегеҙгә бик етди төҫ ингән. Әллә көлөп яҙғандармы, әллә илап яҙғандармы? — тине. Новиковтың фуражкаһын күтәреп, күҙенә ҡараны. Новиков көлөмһөрәне, үҙенең эсендәге тулҡынын белдермәҫкә тырышты. Ул, төҫөн ҡапыл етдиләндереп:

— Мин шундай фекергә килдем. Һуғышмаҫҡа кәрәк! — тине. Индрил, тағы ла көлөп:

— Ҡыҙҙар саҡырып, хат яҙып торғанда, ни эшләп һуғышып йөрөргә кәрәк? Дөрөҫ әйтәһең, Новиков, дөрөҫ!.. — тип арҡаһына һуҡты. Новиков үҙенең етди һүҙенең хатҡа бәйләп, уйынға һабыштырылыуын һиҙеп алды. Һуғыш темаһындағы һүҙен икенсегә бороп ебәрҙе:

— Беҙ походҡа сығабыҙ. Теге аҙыҡтарҙы ни эшләтәбеҙ? Уны ҡайҙа бешерербеҙ? — тине. Байгужаға ҡараны. Байғужаға һүҙ биреЛдеме, ул үҙенекен һөйләй башлай, уларҙың ҡайҙа, нисек һалынғандарын, кемдәрҙә булыуын һанап сыға һәм уларҙың ҡолаҡтарына нисек һаҡларға кәрәклекте индереп ҡуя. Бешереү мәсьәләһенә килгәндә, һүҙҙе Индрил ала. Сөнки ул дөрләп янған утҡа, ҡайнаған һыуға ҡарап ултырырға ярата. Әгәр ҙә ул усаҡ алдына килһә, үҙенең бөтә ҡайғыларын онота. Хатта ул, аш бешкәндән һуң ҡалған утты, янып бөтмәгән утындарҙы рәтләп, өйөп, күмерҙәрен бер урынға йыйып, яндырып бөтөрөп ҡуя. Хатта ул тәмәке тоҡандырған шырпыһын да ҡапыл ғына ташламай, ул уны, ҡулында яндырып бөтөрөп, күмергә ҡалғас ҡына ырғыта. Шуның өсөн беҙ уға «ут Аллаһы» тип исем ҡушҡанбыҙ. Ләкин Новиков менән беҙҙең башта теге хат тәьҫире шаулай, Новиковтың хужалыҡ тураһындағы һүҙҙәре Индрил тарафынан көлкөгә һабыштырылған һүҙҙе

ҡаплау өсөн генә әйтелеүен мин бик яҡшы аңлай инем. Шуның өҫтәүенә башҡаларға йәшерен булған Байғужа ваҡиғаһы минең башта яна. Хәҙер Байғужа миңә әкиәт геройы һымаҡ күренә башланы. Уның фажиғәле төндәге бөтә кисерештәрен күҙ алдына килтерәм. Шунан һуң мин уның йыуаш, хәрәкәтһеҙ йөҙөнә ҡарап алам да шул кешенән шундай эштәрҙең башҡарылыуына ғәжәпләнәм. Мин, хәҙер барыһын да баштан сығарып, шул ике тәьҫир эсендә йәшәйем. Ул ваҡиғаның икеһе лә бер-береһенә логик яҡтан бәйләнәләр. Ирочкаларҙың хаттары һуғышҡа бәйләнеп бөтһә, Байғужаның ваҡиғаһы ла, Андреевтың атылыуынан тыуған тәьҫирҙән башлап, унтер-офицерҙарҙы үлтереү менән бөтә. Икеһе лә ҡанлы һуғыш арҡыры тыуған трагедиялы күренештәр, икеһе лә ҡанлы һуғышҡа ҡаршы ташланған йөрәк протестары...

Беҙҙең дивизия кис ҡырын походҡа ҡуҙғалды. Фронт буйында күмәк ғәскәрҙең хәрәкәте ярамай, ғәҙәт буйынса, ундай походтар кис менән булалар. Киске һауа тын. Уртаса аҙымдар менән баш юлдан барабыҙ. Һауа аяҙ, уң яҡтан урман артынан ай ҡалҡа, ҡараңғы төшә башлау менән, беренсе йондоҙҙар күренәләр. Шуларға ҡарап барһаң, аяҡтарҙың арығандары һиҙелмәй, баштағы уйҙар ҙа асыҡ һәм киҫкен булалар. Мин үҙ иптәштәремдән артҡараҡ ҡалып, улар менән һөйләшмәҫкә, башымдағы уйҙарҙы боҙмаҫҡа тырышып барам. Мин шул уйҙар көйөнә атлайым, уйҙар көйө менән мауығып барам...

## УН ЕТЕНСЕ БҮЛЕК

Варшава янында ятабыҙ. Позиция тотҡаныбыҙ юҡ. Алдағы частар әкренләп кире сигәләр. Беҙ, уларға терәк булып, юлдарҙы, күперҙәрҙе төҙәтеп, шулай уҡ артҡа сигәбеҙ. Аҙағында беҙ Висла йылғаһы буйына килдек. Висла аша понтон күперҙәр һалыу эшенә башланыҡ. Был күперҙәр сигенгән ғәскәр өсөн кәрәк буласаҡтар. Тиҙ көндән Варшава ҡалаһын да биреүебеҙ ихтимал, тиҙәр. Сөнки фронт бик яҡын. Немецтарҙың ауыр туптары крепостарға аталар. Беҙҙең тарафтан бер урында ла еңеү хәбәре юҡ, гел генә сигенеү тураһында һөйләйҙәр, шул турала көн-төн әҙерлек алып баралар.

Беҙҙең бер батальонды Висла һыуының бирге ярына окоп ҡаҙырға ҡуштылар. Беҙҙең һалдаттар көләләр:

— Крепостарға тыныслыҡ бирмәгән немец туптары был окоптарға ҡарап торалармы һуң? Барыһы ла буш хеҙмәт инде! — тиҙәр.

Немец аэропландары, таң тыуғас та, үҙ өйҙәрендәге кеүек, беҙҙең баш осонда рәхәтләнеп, иркенләп осалар. Элегерәк немец аэропланына туптан ата торғайнылар. Хәҙер атыусы юҡ. Хәҙер был тирәлә беҙҙең аэростаттар ҙа юғарыға күтәрелмәй-

ҙәр, тик немецтарҙыҡы ғына һәр көн бер нисә урындан юғарыға күтәреләләр. Беҙгә ҡарап торалар. Хәҙер бөтә фронт сигенеү, еңелеү настроениеһы аҫтында йәшәй, ләкин һалдаттар өсөн, һуғышыуға ҡарағанда, сигенеү еңелерәк тойола. Сөнки һаман да артҡа сигәһең, һаман да тыуған илгә яҡынаяһың. Ҡайһы һалдаттар:

— Мин үҙемдең ауылға тиклем генә сигәм, унан ары бармайым, өйөмдә ҡалам. Унан һуң минең өсөн һуғыш бөтә, — тиҙәр.

Ҡайһы берәүҙәре мәсьәләне былай ҡуялар:

— Әйҙә, немецтар алһын, исмаһам, һуғыш тиҙерәк бөтөр. Беҙҙең өсөн рус батшаһы ни, немец батшаһы ни — барыбер! Ҡайһыһы һуғышты элек бөтөрә, беҙ шуға баш эйәбеҙ, — тиҙәр.

Ә беҙҙең группа халҡы өсөн Висла буйы курорт булды. Беҙҙең иптәштәр хәҙергә һуғыш тураһында баш ватмайҙар. Ашау, эсеү, шуны әҙерләү тураһында уйлайҙар. Буранбай менән Байғужа һәр көн иртә менән күрше поляк ауылына барып ҡайталар. Икмәккә, башҡа нәмәләргә алыштырып йомортҡа, тауыҡ, тоҙланған ҡыяр, алма кеүек нәмәләр алып киләләр. Индрил усаҡ тирәһендә әйләнә. Новиков менән беҙ икәү күпер һала торған материалдарҙы ҡарауыллайбыҙ.

Андреевтың атылыу, унтер-офицерҙарҙың үлтерелеү ваҡиғалары һуңында беҙҙең роталағы яңы унтерҙар ҡарт фронтовиктар менән һаҡ ҡылана башланылар. Беҙҙең менән һүҙ көрәштермәҫ өсөн, мөмкин тиклем беҙгә айырымыраҡ хеҙмәттәр бирә башланылар. Беҙҙең рота һалдаттары күпер эшләргә, окоп ҡаҙырға йөрөгән ваҡытта беҙҙе уларҙан айыралар, икенсе бер наряд бирәләр. Хәҙер бер аҙна инде беҙ күпер материалдарын ҡарауыллайбыҙ. Беҙ яр буйында үҙебеҙгә ҡыуыш һалдыҡ. Карауаттар яһап алдыҡ. Шунда хужалыҡ төҙөй башланыҡ. Беҙ, бер тәүлек ҡарауылда торһаҡ, беҙҙе икенсе ҡарауыл килеп алыштыра, беҙ ҡалған бер тәүлекте бөтә звено менән ял итәбеҙ. Йоҡлап, йөрөп, шаярып, ауылға барып көн үткәрәбеҙ. Беҙҙең звенола үҙ-ара ҡарауыл эше лә үҙебеҙҙең тәртип буйынса ҡуйылған. Кем ни ваҡытта ҡарауыл торорға теләй, шуға ҡарап билдәләнә. Беҙҙең старший — Новиков. Ул үҙе ҡарауылда торорға тейеш түгел. Әгәр ҙә иптәштәрҙең береһенең берәй урынға бара торған урыны булһа, ҡарауылда Новиков үҙе тороп ҡала. Беҙҙең Индрил айырым положениела. Ул беҙгә аш бешереп бирә лә, ҡармаҡтарын тотоп, Висла буйына балыҡ тоторға китә. Уның тотҡан балығы ла юҡ, ул күберәк ваҡыт яр буйында һыуға ҡарап ултырырға ярата. Әгәр ҙә ул балыҡ тотҡан урынға барһаң, уның ҡармағы бер урында ултыра, үҙе икенсе урында һыуҙың ҡыҙыу, урғылып аҡҡан урындарын тамаша итеп ултыра. Уға:

— Ниңә бында ултыраһың? — тип һорау бирәһең, ул айырым бер тойғо менән һыуҙың ағыуын тасуир итә башлай:

— Ана, һеҙ һыуҙың урғылған урынына ҡарағыҙ әле, ғәжәп төрлө фигуралар яһай ул. Улар бер-береһенә оҡшамайҙар. Ҡайһы ваҡыт улар дүңгәләкләнеп китәләр, ҡайһы ваҡыт улар тулҡынланып торған ат ҡойроғо кеүек һуҙылып, тулҡынланып төшәләр, ҡайһы ваҡыт улар көлөп торған кеше йөҙө кеүек булып юғалалар, ҡайһы ваҡыт улар биҙәкле матур вазаларға оҡшап, сөңгөлләнеп, өйөрөлөп таралалар. Нисә төрлө генә фигуралар яһамайҙар улар! Мин һыуҙың урғылып аҡҡан урындарын ҡарап ултырырға яратам. Мин шуларға ҡарағанда үҙемде, бөтә донъяны онотам. Сөнки уларҙа шундай көслө ихтыяр бар, улар теләгән ваҡытта теләһә ниндәй фигураларға әйләнәләр, теләгән ваҡытта теләһә ниндәй ижад тыуҙыралар. Бына минең дә һыу тулҡындары кеүек аҡҡым, күңелдәге бөтә теләктәрҙе, шулар кеүек, теләгән фигураға әйләндергем килә... Бына һеҙ ҡарап тороғоҙ әле, ысынлап та, уларҙа тулҡынлы бер матурлыҡ бар. Уларҙа, аңлы рәүештә булмаһа ла, айырым бер көс бар, айырым бер ихтыяр бар. Шулар миңә айырым бер күтәренке тойғо бирәләр. Бына мин диңгеҙ тулҡындарын шулай ҡарағаным бар. Уларҙа инде тағы ла башҡа көс, башҡа матурлыҡ!.. Мин матрос булырға бик теләнем. Ләкин алманылар, ярамайһың, тинеләр...

Әгәр ҙә Индрилдың шундай настроениела сағында ғына осраһаң, ул ғәжәп һүҙсән, мөләйем һәм самими[1] була. Ул үҙенең йөрәгендә ҡайнаған бөтә йәшерен тойғоларын, теләктәрен асып ташлай. Йәш балалар кеүек елкенеп, үҙенең үткәндәрен һәм киләсәк пландарын һөйләргә тотона. Шул ваҡыт Индрилдың ысын һәм ҡатлауһыҙ саф күңелен күрәһең. Башҡа ваҡытта Индрил аҙ һөйләшә, күберәк ваҡыт эш тураһында һөйләй, бик кәйефе килһә, берәй иптәште шаяртырға, унан көлөргә башлай. Беҙ бөтәбеҙ ҙә Индрилдың эске рухына төшөнөп бөткәнбеҙ. Әгәр ҙә Индрилдың кәйефһеҙ сағы булһа:

— Ут яғырға кәрәк! Индрилды ҡармаҡҡа ебәрергә кәрәк! — тип һөйләнә башлайбыҙ. Уның уға асыуы килмәй, көлә генә:

— Һәр кемдең ләззәт тапҡан бер нәмәһе була бит, — тип үҙенең йомшаҡ яғын күләгәләргә тырыша. Ҡайһы ваҡытта уның шундай сағы була: ул үҙ алдына бик оҙаҡ уйланып ултыра ла ауыҙ эсенән генә көйләргә тотона йәки күтәренке бер рух менән берәй шиғырҙы уҡырға, декламировать итергә башлай. Ул күберәк ваҡыт Максим Горькийҙың «Дауыл хәбәрсеһе»н («Буревестник»ты) яратып, айырым бер кисерештәр менән уҡырға ярата. Уның аҙағындағы: «Әйҙә дауыл ҡупһын!» тигән һөйләмде көслө юғары тон менән әйтеп бөтөрә. Индрилдағы был күтәренкелек күберәк Висла буйына килгәс була башланы. Ундай ваҡытта беҙ уға тығылмайбыҙ. Ул иркенә

[1] ***Самими*** — саф, асыҡ күңелле, ихлас.

ҡотора, шаша, шаулай ҙа барыбыҙ ҙа белә торған бер һалдат йырын башлап ебәрә.

— Әйҙә күтәрегеҙ, күтәрегеҙ! — Үҙе бас менән һуҙа башлай. Беҙ бөтәбеҙ ҙә ҡушылабыҙ. Ул йыр аҙагында барыбыҙ ҙа бер настроение аҫтында тәмәке тартырға башлайбыҙ.

Висла буйында беҙҙең көндәр шулай үтәләр ине. Ҡуғыш яҡыная башланы. Беҙҙең ғәскәрҙәр һаман сигенәләр, немецтар беҙҙе Варшаваға ҡыҫалар. Беҙҙең полк ашығыс рәүештә арттағы позицияға урынлашты. Алда беҙҙең артҡа сигә торған ғәскәрҙәр булһа ла, беҙ бөтә боевой әҙерлек менән немец ғәскәрен көтә башланыҡ. Немецтарҙың тимер юлдан ата торған дальнобойный туптары беҙҙең арҡыры Висла күперҙәренә, крепостарға аталар. Әллә ҡайҙан шаулап килгән ауыр снарядтар, беҙҙән дүрт-биш саҡрым уҙып төшөп, һауаға көслө ҡойондар аҡтаралар. Крепостар, йөн кеүек тетелеп, һауаға күтәреләләр.

Бөтә фронт буйынса тревогалы хәл тыуҙы, ғәскәрҙәр тәртипһеҙ рәүештә сигенә башланылар. Ниндәй частың ҡайҙа барғанын белер хәл юҡ. Алдағы беҙҙең ғәскәрҙең ҡайҙа фронт тотҡанын, немец ғәскәрҙәренең ҡайҙан килгәнен белгән әмәл юҡ. Телефон бәйләнешенең рәте киткән. Алғы позициянан да, артта штабтан да ғәскәрҙең ҡалай, ниндәй тәртип менән сигенеүҙәре тураһында дөрөҫ мәғлүмәт алып булмай, артҡа сигәләр ҙә сигәләр...

Төн булды. Сигенгән ғәскәрҙәр бөтә поляк ауылдарын утҡа тоталар. Йөҙҙәрсә саҡрым буйынса, телдәрен һауаға һуҙып, ауылдар яналар. Уларҙың ҡыҙыллыҡтары, күккә күтәрелеп, ут диңгеҙе кеүек тулҡынланып торалар. Улар араһынан күтәрелгән ракеталар, прожекторҙар нурҙары, төндә ут атылғанда ялҡылдап күренгән уттар ул төнгө пожарҙар араһында барған фажиғәле күренештәрҙе тағы ла көсәйтәләр, тағы ла шомландыралар, гүйә, бөтә донъяны яндырырға, көл итергә килгән, унан һис бер йән эйәһе ҡотолорға мөмкин булмаған янғын кеүек күңелдәргә дәһшәт һалалар. Шул ҡурҡыныстан, үлемдән, янғындан ҡасҡан крәҫтиәндәр, ҡайһылары аттарына нәмәләрен тейәгән хәлдә, ҡайһылары йәйәүләп, таш юлдан ағылалар. Кис кем һөйләшмәй, һәр кем алға ынтыла, тик илаған йәш балаларҙың, уларҙы йыуатҡан әсәләрҙең өҙөк өндәре генә ишетелеп ҡалалар ҙа, туп гөрләүектәре араһында улар күмеләләр.

Таш юлдан өҙлөкһөҙ обоздар, санитар арбалары, артиллериялар үтәләр. Уларҙы эргәләп ниндәйҙер һалдат колонналары киләләр. Улар артынан түбән генә күтәрелгән, ниндәйҙер батарея арбаһына тағылған аэростат килә. Күрәһең, ул төндә дошмандың килеүен күҙәтеп барырға уйлай. Ул тирәлә шау-шыу күп, уны тиҙ генә төшөрөп шиңдерәләр, тағы юлдарында дауам итәләр. Беҙ ятҡан позицияның рәте китте. Беҙҙең окоптар арҡыры үткән ғәскәри частар беҙҙән көлөп үтәләр:

— Бында ни һаҡлап ятаһығыҙ? Беҙҙең менән һуғышырғамы? Барығыҙ, барығыҙ, алғараҡ барығыҙ! — тиҙәр. Беҙҙең һалдаттар ғәрләнәләр. Улар араһында асыу ҡуҙғала:

— Беҙ бында ни эшләп ятабыҙ? — тип тауышланалар. Ләкин тауышланыу бушҡа китте. Беҙгә лә шунда уҡ сигенергә бойороҡ булды. Беҙгә тәртип менән сигенергә приказ булһа ла, беҙ уларҙы тыңламаныҡ. Варшаваға китә торған таш юл буйынса, обоздар теҙмәһе эргәһенән колонна менән сигенә башланыҡ. Беҙҙең алда өс ҙур пожар күтәрелде. Улар — немецтарҙың ауыр туптарынан сыҡҡан янғындар. Улар Варшава тирәһендә яналар. Беҙҙең алдағы янғындар беҙгә ҡурҡыныс бирәләр. Сөнки хәҙер артҡа сиккән һайын ҡурҡыныс. Немецтар еңел батареянан беҙҙең артҡа сиккән колонналарға һирәк аталар. Мылтыҡ, пулемет тауыштары бөтөнләй ишетелмәһә, беҙҙекеләр бөтөнләй атмайҙар. Э немецтар өҙлөкһөҙ рәүештә ауыр снарядтарҙы беҙҙән аша, беҙҙән алға аталар. Э беҙ хәҙер шул йүнәлешкә табан барабыҙ.

Алдағы ҡурҡынысты уйлап барғанда, көтмәгәндә немец снарядтары беҙ бара торған таш юл буйына төшә башланылар. Бер снаряд өс парлы батарея аттары эргәһенә төшөп ярылды. Ул аттар снаряд көстәре менән юл ситенә ырғытылдылар. Береһе ҡорһағы тишелгән көйөнсә, үрһәләнеп, кире батарея өҫтөнә менеп китте. Сыйылдап, шунда тулай башланы.

Беҙ тиҙерәк цепҡа таралдыҡ. Юл буйҙарынан ситкә китеп, ямдарға, канауҙарға, ашлыҡ араһына һибелдек. Тимер юлдағы обоздар, артиллерия парктары паникаға төштөләр. Улар ҙа, ҡырға һибелеп, төрлөһө төрлө яҡҡа саба башланылар. Бөтә урында башбаштаҡлыҡ китте. Төйөндәрен елкәләренә күтәргән ҡасаҡ крәҫтиәндәр, балаларын күтәргән ҡатындар, һис бер урынға йәшеренмәйенсә, ашлыҡ араларынан үҙҙәре теләгән яҡҡа йүгерәләр. Һалдаттар: «Канауға йәшеренегеҙ!» —тип ҡысҡырһалар ҙа ишетмәйҙәр, тыңламайҙар, аҡылдан шашып йүгереүҙәрен беләләр; һалдаттарҙың кәңәштәренә ҡаршы бер крәҫтиән былай яуап ҡайтара:

— Канауҙа ҡалырға беҙҙә ҡорал юҡ бит. Беҙгә ҡотолорға кәрәк, — ти. Бер урында һалдаттар снаряд ярсығы менән яраланған бер крәҫтиәндең яраһын бәйләйҙәр. Ул үкереп илай, зарын һөйләй:

— Минең ҡатыным, балаларым ни эшләй инде, улар ҡайҙа баралар инде! Тиҙерәк булығыҙ! Тиҙерәк бәйләгеҙ! Мин уларҙы эҙләп табам! — ти. Һалдаттар йыуаталар, ҡан күп аҡһа, үҙенә яман буласағын аңлаталар, ул уларҙы тыңламай, һаман да үҙенең һүҙҙәрен ҡабатлай, аҡырып-баҡырып илай.

Таңға табан немецтар атыуҙан туҡтанылар. Тик алыҫта-алыҫта ҡыҙыл уттар араһында мылтыҡ, пулемет тауыштары ҡапыл күтәреләләр ҙә тағы ла баҫылалар. Беҙ ҡуҙғалдыҡ. Варшаваға йүнәлдек. Беҙҙең полк юл буйлап, шпалдар, рельстар

өҫтөнән бара, бер генә поезд да йөрөмәй, тимер юлда бөтә хәрәкәт туҡталған. Тик фонарҙар тотҡан тимер юл эшселәре генә һирәк-мирәк күренәләр. Беҙ Варшаваға ингәс, вокзалға етерҙән алда, бер бронепоезд уҙҙы. Беҙ, юлдарҙың ситенә таралып, уға юл бирҙек. Рельстар буйлап юлдарҙы дауам иттерҙек.

Беҙ Варшава ҡалаһы эсендәге Николай II исемендәге ҙур күперҙән Висла арҡыры сыҡҡанда, таң яҡтырғайны. Ҡалаға ингәс, беҙҙе бер тар урамға индереп, шунда теҙеп ҡуйҙылар. Шаулашырға, ул урамдан кеше үткәрергә ҡушманылар. Беҙ, торған еребеҙҙә тәмәке тартып, урамда ултырып хәл йыйып, яңы приказ көтә башланыҡ. Таралмаҫҡа тигән приказ булыуға ҡарамаҫтан, һалдаттар, берәм-һәрәм китеп, иртә асылған ваҡ лавкаларҙан папирос, печенье, колбаса, вобла алып килә башланылар.

Йәйге ҡояш сыҡмаған әле, ҡала халҡы уянған инде. Бәлки, улар, ҡалаға немец ғәскәре яҡынайыу менән, төндә йоҡламағандарҙыр, тревога үткәргәндәрҙер, уныһы беҙгә билдәле түгел. Күп өй эҫтәрендә электр яҡтылары бар. Күп тәҙрәләр асылалар ҙа кире ябылалар, күп баштар тәҙрәнән тышҡа һуҙылалар ҙа кире алыналар. Урамда халыҡтар юҡ, өйҙәрҙә тапмалы хәрәкәттәр бара.

Ваҡ һатыусыларҙың ҡаланың шундай хәлендә, көндөң иртәлегендә эштәре юҡ. Улар, төнгө ҡандалалар кеүек, ярыҡ-тишектәрҙән, ҡапҡа арттарынан, подвал тәҙрәләренән, кескәй ишектәрҙән нәмәләрен сығарып, һалдаттарға тәҡдим итәләр, баштарын сығарып ҡысҡыралар, ҡайһы берҙәре, шинель кейеп, шуның итәгенә, кеҫәләренә нәмәләрен йәшереп, һалдаттар араһына инәләр, теттереп һатыу итәләр, бер аҙҙан йылы пирожныйҙар, вафлялар сығара башланылар. Ул тауарҙар һатыусылар өсөн файҙалы булманылар, һалдаттар, төрлө яҡтан һырып алып, уларҙы тиҙ бушаттылар, һалдаттарҙың ҡайһыһынан аҡса алырға белмәй аптырап, өҙгөләнеп йөрөп, кире өйҙәренә инеп юғалдылар.

Ҡояш сығып, бер аҙ күтәрелгәс, урамдарҙағы патрулдәр алынды. Ҡала эсендә хәрәкәт башланды. Ҡаланың хөкүмәт учреждениелары күптән сығып киткәндәр, фәҡәт хәрби частар ғына ҡалғандар. Ҡайһы бер вольный халыҡтар, сауҙагәрҙәр, чиновниктар ғаиләләре ҡаланан сығалар. Ә ҡаланың ҡалған өлөшө, һис һуғыш булмаған, немецтарҙы көтмәгән кеүек, магазиндарын асып сауҙа итергә, үҙ эштәре менән ҡайнашырға башланылар. Был хәл һалдаттарға тарҡаулыҡ индерҙе: улар асыҡ магазиндарға, лавкаларға йүгерҙеләр, «бер урында торорға» тигән команда ла, приказ да ярҙам итмәне. Беҙҙең бөтә полк буталды. Башбаштаҡлыҡ китте, һалдаттар төрлө магазиндарҙы таларға тотондолар. Команда аптырашта ҡалды, «ҡаланы талаусылар атыуға хөкөм ителәсәктәр» тигән ҡаты приказ-

дар бик аҙ тәьҫир иттеләр. Беҙҙең рота бер хәрби кейемдәр һатыла торған магазинды таларға керешкән. Унан офицерский итектәр, гимнастерка, салбарҙар, шинелдәр, фуражкалар күтәреп сығалар. Елкәләрендәге мешоктарына ҡиммәтле папиростар, сигаралар тултыралар. Беҙҙең һалдаттар талап туйҙылар. Төш алдында ғына урындарына йыйыла башланылар. Һаман да бөтә һалдат йыйылып бөткәне юҡ әле. Шуға ҡарамаҫтан, беҙҙе стройға теҙеп, ҡала уртаһынан ҙур урамдар менән алып киттеләр. Беҙҙе бик ҡыҙыу атлаталар, һис бер урынға туҡтатмайҙар, һыбайлы жандармдар килеп еттеләр ҙә беҙҙең колонналарҙы тирәләп бара башланылар. Урам ҡыҙыу, бөркөү, һалдаттарҙа йөк ауыр, береһе лә таланған ғәнимәтте ташламай, елкәләренә күтәреп, ҡултыҡтарына ҡыҫтырып, ҡулдарына тотоп алып баралар. Барыһының да биттәренән шыбырлап тир аға, гимнастерка арҡалары тирҙәргә мансылғандар; һөйләшмәйҙәр-нитмәйҙәр, һаман ағым ыңғайына алға атлауҙарын беләләр. Беҙ ҡаланан сыҡҡас, атлы жандармдар тороп ҡалдылар, беҙҙе туҡтатмай алып киттеләр. Ҡаланы сыҡҡас, һауа еләҫләнде. Һулыштар бер аҙ иркенләп ҡалдылар. Аҙымдарҙы ла бер аҙ әкренәйттеләр. Стройҙан тауыштар ишетелә башланылар:

— Тын алырға бирегеҙ!

— Беҙ салбар балаҡтарына ебәрәйекме ни!

— Әллә беҙҙе ҡыуалап үлтерергә уйлайһығыҙмы?

— Ике көн ашаған юҡ, беҙгә тамаҡланырға кәрәк!

— Туҡтағыҙ! Атламағыҙ!

Тауыштар күбәйгәндән-күбәйҙе, көсәйгәндән-көсәйҙе, бара торғас, һис бер һүҙ аңлашылмай торған йәрминкә шауына әйләнде. Полк командиры ат менән колонналар буйынса бер артҡа, бер алға сапты, ул ниндәйҙер команда бирҙе, уны тыңламанылар. Ахырында команда туҡталды. Һалдаттар тышҡа сығыу өсөн юлдың ике яғына таралдылар. Ҡалғандары юлдың ике яҡ ситенә, йәшел үләндәр өҫтөнә һарыҡтар кеүек түшәлделәр. Бөтә колонна буйынса тәмәке тоҡандырылды, тәмәкеләрҙән күтәрелгән күк төтөндәр юл буйына һуҙылдылар.

Һалдаттар ашығып-ашығып Варшаванан алған нәмәләрен бәйләйҙәр, сумкаларына тығыҙлап тултыралар, иҫке ботинкаларҙы ырғытып, яңы матур итектәрҙе кейәләр. Ҡайһы берҙәре, керләнгән салбарҙарҙы һалып, яңы салбар кейеп маташалар. Беҙҙең Байғужа менән Буранбай бөтә сорттан нәмәләр йыйғандар. Уларҙа ҡайсы, бысаҡ, бритваларҙан башлап офицерский шинель, күн тужурка, витринаға ҡуйған погонлы гимнастеркаларға тиклем бар. Улар, нәмәләре күп булғас, беҙгә бүлеп бирҙеләр. Биш кеше күтәргән нәмә бер сейхгаур тиклем булды.

Ҡуҙғалырға команда булды. Һалдаттар һаман ҡуҙғалмайҙар, һаман да нәмәләрен йыйып, төйнәп, рәтләп маташалар. Полк командиры үҙе, аты менән саптырып, команда биреп сыҡты.

Шунан һуң ғына әкренләп, тәртипһеҙ рәүештә ҡуҙғала башланылар.

Беҙ, Варшаванан егерме саҡрым киткәс, хәл йыйыр өсөн, бер ауылда туҡталдыҡ. Унда беҙгә обед әҙерләнгәйне. Һалдаттар араһында шундай хәбәр таралды:

— Бында һалдаттар араһында тентеү була, имеш, кемдән таланған нәмә сыҡһа, шул кеШе полевой судҡа бирелә, имеш!..

Был хәбәр һалдаттар араһында паника тыуҙырҙы. Шаулаша башланылар. Офицерский фуражкаларҙың кокардаларын, шинелдәрҙең погондарын ырғыта башланылар. Ҡайһы берәүҙәр яҡшы гимнастерка һәм салбарҙарҙы эстән ҡатлап кейеп алдылар. Һәр кем алған нәмәһен йәшерергә, уға башҡа төҫ бирергә тырышты. Ҡайһы берәүҙәр яңы салбар һәм итектәрҙе һыулап, батҡаҡҡа буяп, борһалап, иҫке төҫ бирергә тырыштылар. Күп кешеләр офицерский фуражкаларҙы ырғыталар. Ырғытылған, ташланған нәмәләрҙе алыусы, ерҙән күтәреүсе юҡ. Ауыл крәҫтиәндәре лә алырға ҡурҡалар, ташланған нәмәләр шул көйөнсә ерҙә аунап яталар.

— Варшаваға немецтар ингән, Варшаваны беҙҙең ғәскәр ташлап сыҡҡан! — тигән хәбәр таралды. Беҙгә: «15 минут эсендә обед ашап бөтөргә!» — тигән приказ бирелде. Һалдаттар кухняларға тығылдылар. Шау-шыу, тағы ығы-зығы китте. Ҡайһы бер частар ауылдан сыға башланылар. Кухнянан алған аштарҙы аяғөҫтө арлы-бирле ҡаптыҡ та, бөтә нәмәләрҙе аҫып, юлға сыҡтыҡ. Һалдаттар, китергә булғас, ташланған нәмәләрен яңынан йыйыштыралар, яңынан сумкаларына тултыралар.

Һауа асыҡ, ҡояш ҡыҙҙыра. Беҙҙең баш өҫтөндә немец аэропландары осалар. Артта ауыр снарядтарҙың ярылғандары ишетелә. Беҙ фронт тотмайбыҙ, һаман күсәбеҙ ҙә күсәбеҙ.

— Немец ғәскәре беҙҙе, ике флангынан ҡамап, дүңгәләк эсендә ҡалдырып килә, имеш, — тигән хәбәр бар. Шуға күрәме беҙгә тәүлегенә илле саҡрым сигергә бойороҡ бирелде. Беҙ таш юл буйынан көн барабыҙ, төн барабыҙ. Ҡайҙа туҡталырбыҙ — билдәле түгел.

## УН ҺИГЕҘЕНСЕ БҮЛЕК

Биш тәүлек инде һаман туҡтауһыҙ киләбеҙ. Ашаған юҡ, йүнләп ял иткән юҡ. Күп һалдаттар аяҡһыҙ булып юлда ҡалалар. Юлда ҡалғандарҙың барыһын санитар обоздары алып бөтә алмайҙар. Медицина ярҙамы юҡ, булһа ла, продукттар юҡ. Ауылдарҙа аҙыҡ табып булмай, алдан үткән ғәскәрҙәр бөтәһен дә ҡырып, һыпырып бөтөп киткән булалар. Ауылдарға туҡталғанда, ҡоҙоҡтарға йыйылып, һыу эсәбеҙ ҙә тағы ла атлайбыҙ. Һалдаттар асыҡтылар. Аҙыҡ запасы юҡ. Аптырағас, яңы ғына йомарланған, бешеп етмәгән алмаларҙы,

грушаларҙы төшөрөп ашайҙар. Ауылдарҙағы өлгөрмәгән картуфты ашайҙар. Шул аркала һалдаттар араһында эс китеү ауырыуы башланды. Юл буйында, эҫтәрен тотоп, тәгәрәп ҡалған һалдаттарҙың иҫәбе юҡ.

Кис менән тағы артта яндырылған ауылдарҙың ут шәүләләре менән күк йөҙө ҡаплана. Күп ваҡыт беҙҙең алдан үткән ғәскәрҙәр ауылдарҙы яндыралар. Бер кис менән ауылдан үткәндә, беҙ шундай ауыр картинаға осраныҡ.

Ике казачий аттары менән бер крәҫтиән өйөнә килгәндәр ҙә уның ҡара кирбес түбәһенә ут тоҡандырып маташалар. Шуны күреп, хужаһы бөтә бала-сағалары менән сыҡҡандар, казачийҙарҙың алдарына ятып, суҡынып, ялбарып, ут һалмауҙарын һорайҙар. Казачийҙар үҙ эштәрен эшләйҙәр. Крәҫтиән был хәлгә түҙмәне, ахыры, казактың атының башынан алып, уны ситкә һөйрәй башланы. Икенсе казак ҡамсыһы менән крәҫтиәнде бешерә башланы. Юлдан уҙған һалдаттар түҙмәнеләр, ваҡиға эргәһенә йүгереп бара башланылар. Беҙҙең Новиков, тиреһенән сығып, донъялағы бөтә һүҙҙәр менән һүгенеп:

— Ниңә һеҙ өйгә ут төрттөгөҙ, ниңә һеҙ крәҫтиәнде туҡмайһығыҙ? — тип һорау бирә башланы. Бер казак һалҡын ҡан менән көлөп:

— Күгәрсенем, һин был эшкә ҡыҫылма, беҙ уны юғарынан булған приказ буйынса эшләйбеҙ. Кис менән сигенеү тактикаһы шуны ҡуша, һеҙҙең унда эшегеҙ булмаһын, барығыҙ, юлығыҙға китегеҙ! — тине. Ул арала өйҙөң түбәһен ут ялмап алды. Крәҫтиәндәр, ерҙә аунап, ер тырнап иларға, аҡырырға башланылар. Һалдаттарҙың асыуҙары ҡабарҙы. Казактарҙы ҡамап алдылар. Штыктар менән тоҫҡана башланылар. Казактар ҡамсыларын һелтәнеп ҡаса башланылар. Бер һалдатты тапаттылар. Был тағы ла һалдаттарҙың асыуын килтерҙе. Улар казактарҙың аттарына мылтыҡ менән ата башланылар. Береһенең аты яраланды. Ул атын ташлап китте лә иптәшенең атына менеп, икеһе лә бер ат өҫтөндә ҡараңғыға инеп юғалдылар. Ут көсәйҙе, ул икенсе өйҙәргә йәйелде. Сөнки улар утты ел ыңғайына ҡарай төрткәндәр. Һалдаттар утҡа ҡаршы бер ярҙам да күрһәтә алманылар. Беҙ, көслө янғын дәһшәте аҫтында һыҡраған ауылды артҡа ҡалдырып, үҙ юлыбыҙға киттек. Беҙ полк артынан ялға туҡтағанда ҡыуып еттек.

Был картина һалдаттар араһында ауыр һәм тәрән тәьҫир ҡалдырҙы. Улар юл буйынса казактарҙы һүгеп барҙылар. Ҡайһы бер һалдаттар юлда тәү осраған казакты атып үлтереү менән хыялландылар. Беҙҙең Байғужа шул уңай менән иптәштәргә үҙенең унтер-офицерҙарҙы үлтереү ваҡиғаһын систе, бөтәһен һөйләп бирҙе. Байғужаның ул геройлығы өсөн Новиков менән Индрил уны күтәреп йөрөттөләр, үптеләр, әллә нисә тапҡыр ҡулдарын ҡыҫтылар.

— Ниңә быға тиклем беҙгә әйтмәнең? Бына ғәжәп. Беҙ һинән ундай эште эшләр тип көтмәгәйнек! «Тыныс күлдә шайтан үрсей», тиҙәр, бына ҡайҙа ята икән ул хикмәт...

Ул көн Байғужа беҙҙең иптәштәр араһында үҫте, шул көндөң геройы булды. Иптәштәр араһында уға айырым хөрмәт һәм ҡараш тыуҙы. Новиков бөтөнләй шашты, өйләнгән һайын Байғужаның арҡаһынан һөйөп:

— Бындай иптәштәр булғас, эшләргә мөмкин. Хәҙер минең башҡа бер фекер килде. Туҡта әле, мин уны ныҕыраҡ уйлайым әле, һуңынан мин уны һеҙгә һөйләрмен әле! — тип ҡолаҡтан ҡолаҡҡа бышылдап барҙы. Индрил юлда бик йонсоғайны. Ул саҡ һөлдәһен күтәреп килә ине. Иптәштәр араһында тыуған революцион рух уны ла күтәреп ебәрҙе. Ул, һауаға ҡарап, һыҙғырып бара башланы.

Биш-алты саҡрым барғас, беҙгә ун минут ял бирәләр. Шул ял ваҡытында беҙҙең башҡа бик яҡшы план килде. Ул планды бөтә иптәштәр бик яҡшы таптылар һәм ҡушылдылар; беҙ, төндән файҙаланып, полктан алға сығып китергә тейешбеҙ. Тура килһә, юлдан бер аҙ ситкә сығып, һалдаттар булмаған ауылға инеп, шунда аҙыҡ табырға, тамаҡ туйҙырырға тейешбеҙ...

Полк ҡуҙғалыу менән, беҙ, юлдан ҡырғараҡ сығып, аҙымдарҙы йышайттыҡ. Бер һүҙ аҫтына ойошҡан биш кеше берҙәм аҙым менән атлай башланыҡ. Беҙҙең арабыҙҙа иң сыҙам, иң ныҡ, иң сыныҡҡан кеше — Буранбай: беҙ уны алға төшөрҙөк. Ул, башын алға эйә төшөп, муйынын бер аҙ уңға ҡыйшайтып, ергә ҡарап, һис өндәшмәй-нитмәй генә оҙон аҙымдар менән бер уңайға атлап бара. Ул яй ғына атлаһа ла, уның аҙымдары бик ырамлы була. Беҙ бөтәбеҙ ҙә уның артынан ҡалмаҫҡа, аҙымдарҙы уның аҙымына эйәртергә тырышабыҙ. Бер сәғәт самаһы барғас, беҙ полкты алыҫ ташланыҡ. Ял итергә тейеш булған арала ял итмәнек. Ун минут булһа ла, алға китеү яғын ҡараныҡ. Ләкин алда ғәскәр күп, әллә ни тиклем обоздар баралар. Уларҙы уҙып бөтөү мөмкин түгел. Беҙҙең план барып сыҡмаҫ төҫлө. Бер киткәс, һаман атлайбыҙ, һаман минуттарҙы ҡыҫҡартып алга барабыҙ. Бик күп ғәскәри частарҙы артҡа ҡалдырабыҙ. Каман да уларҙың осона сығыр әмәл юҡ. Бара торғас, таң яҡтырҙы. Күҙҙәрҙе йоҡо баҫты. Аяҡтар талдылар. Ултырғы, ял итке, аҙ ғына йоҡлағы килә. Иптәштәр:

— Ял итергә ярамай, әгәр ҙә йоҡлаһаҡ, уяна алмабыҙ, полктан ҡалып, немецтарға плен төшөрбөҙ, — тиҙәр.

Ҡарын асыуҙы, ашағы килеүҙе һөйләргә лә түгел. Осраған бер обоздан ашарға һорайбыҙ. Варшаванан алып сыҡҡан яҡшы кейәмдәрҙе тәҡдим итәбеҙ. Кейем алыусы, аҙыҡ биреүсе юҡ. Асығыуҙан йөрәктәр өҙөлөп, түҙер хәл ҡалмағас, ерҙән йәшел үләндәр алып ҡабып ҡарайбыҙ, уның да файҙаһы юҡ. Ҡояш байтаҡ күтәрелде. Алда ғәскәрҙәр һирәгәйә. Бер ваҡыт беҙҙең арабыҙҙағы иң оҙон кеше — Индрил ҡысҡырып ебәрҙе:

— Ана һул яҡта, бик алыҫ түгел, ауыл күренә! — тине. Бөтәбеҙ ҙә ҡараныҡ. Юлдан ҡырҙа, ике-өс саҡрым алыҫлығында, урман арҡыры бер ҡалҡыуыраҡ урында ауыл күренә. Беҙ бөтәбеҙ ҙә шатландыҡ:

— Моғайын, был ауылға ғәскәр инмәгәндер, унда аҙыҡ табырбыҙ. Әйҙәгеҙ, шунда боролабыҙ, — тинек. Урман араһына ҡайырылып беренсе берләм юлдан шунда табан ҡайырылдыҡ.

Барабыҙ. Урман юлы төрлө яҡҡа ҡайырыла. Туҡтап торабыҙ, ауылға ҡарап, тоҫмаллап, юлһыҙ урман араһынан китәбеҙ. Ниндәй соҡор булһа ла, әрәмәлек булһа ла, ҡарап тормайбыҙ, — артҡа сикмәйбеҙ, алға алған юлдан бара бирәбеҙ. Ул, яҡын күренһә лә, шаҡтай ғына алыҫ булып сыҡты. Әллә сабырһыҙлыҡ менән барғанға шулай тойолдо инде, ни булһа ла булды, ауылға килдек.

Ауылда ғәскәр ҙә юҡ, халыҡ та аҙ күренә. Бик ҙур бай йорттар күренәләр. Ләкин тирәһендә кешеләр күренмәйҙәр, ташландыҡ йорттар кеүек күренәләр. Бер крәҫтиәнде осраттыҡ, унан икмәк һораныҡ. Ул бик оҙаҡ елкәһен ҡашып торҙо:

— Ике генә көн элек беҙҙең ауылда күмәк ғәскәр булды. Улар бөтә ауылдың аҙығын ҡоротоп киттеләр. Бында байҙар күп ине, бәлки, уларҙа аҙыҡ булыр ине. Улар ҙа бөгөн төндә күсеп киткәндәр, — тине. Шулай ҙа ул өйөнә инеп китте, беҙ, уның өй алдында ултырып, тәмәке тарта башланыҡ, Индрил тирә-яҡҡа ҡарана:

— Бында аҙыҡ табылыр, барҙыр әле, — ти, үҙе тартҡан тәмәкеһен ергә ырғыта, — тартҡы килмәй, ашағы килә, — тип, башын түбән баҫып, төкөрөнөп ултыра. Шул ваҡыт теге крәҫтиән ҡулына бер киҫәк икмәк тотоп сыҡты. Беҙҙең эргәгә килде. Көршәк эсендә әсегән һөт бар. Новиков, күтәрелеп, крәҫтиәндең һүҙен көтмәйенсә:

— Ни хаҡ алаһың? Күпме бирәйек? — тип көршәкте һәм икмәкте ҡулынан тартып алды. Крәҫтиән ашыҡмайынса ғына:

— Уға ниндәй аҡса һорайһың. Хоҙай хаҡы өсөн булыр. Ни барын сығарҙым. Ашағыҙ иҫәнлеккә, — тине. Беҙ бер-беребеҙгә ҡараштыҡ. Өндәшмәнек. Байғужа, Новиков ҡулынан икмәкте алып, бәкеһен сығарып, тигеҙләп ҡырҡа башланы. Башҡа иптәштәр ҡуңыстарынан ҡалаҡтарын алып, әҙерләп ҡуйҙылар. Крәҫтиән беҙҙең аҙапланғанды ҡарап торманы. Үҙ юлына китте. Байғужа, ғәҙел, тигеҙ булһын өсөн, ҡырҡҡан ваҡытта ҡойолған икмәк валсыҡтарын да бер урынға йыйып, уның күҙенә бәләкәйерәк күренгән киҫәктәр өҫтөнә һалды:

— Йә, алығыҙ инде, — тине. Һәр кем киҫәген ҡулына алып, әсе һөткә ҡалаҡтар менән һөжүм итергә әҙерләнгәс, Индрил тәҡдим индерҙе:

— Иптәштәр, һөт аҙ, тигеҙ булһын өсөн берәр ҡалаҡлап алайыҡ; уны ашап бөткәс, тағы ла берәр ҡалаҡлап алырбыҙ. Ҡалғанын күпме тейһә, шулай бүлербеҙ, — тине. Иптәштәр

күнделәр. Ул ваҡытта инде һәр кемдең ауыҙында икмәк сәйнәлә ине. Шулай эшләнде. Әсе һөттөң ғүмере ҡыҫҡа булды. Көршәктең төбөн Байғужа күтәреп ялап ҡуйҙы. Бының менән генә аҙнаға яҡын йүнләп аҙыҡ күрмәгән ҡорһаҡ туйманы, тағы ашағы килде. Иптәштәр ергә ҡойолған икмәк валсыҡтарын эҙләп алып ҡаба башланылар. Ҡайһы берҙәре, ниҙер эҙләп, тирә-яҡтарына ҡарандылар. Индрил, иптәштәрҙәге шул тойғоно һиҙеп, аҡыл һата башланы:

— Ныҡ асыҡҡан кешегә ҡапыл күп ашарға ярамай, хәҙергә шуныһы еткән инде. Аҙ ғына йоҡлап алырға ине, — тип, ҡаты кирелде, ауыҙын ҙур асып иҫнәне.

— Эйе шул, ярар ине, — тип иптәштәр Индрилдың һүҙенә ҡушылдылар. Унһыҙ ҙа арыған, йонсоған тәндәр таралып баралар. Йоҡо һорайҙар, ял теләйҙәр ине. Новиков был тәҡдимгә өҫтәлмә индерҙе:

— Беҙгә күп йоҡларға ярамаҫ. По крайней мере мин ятһам, ике тәүлек йоҡларға мөмкин. Ике тәүлек эсендә әллә ниндәй хәлдәр булыуы ихтимал. Шуның өсөн беҙ хужаға әйтәйек. Ул беҙҙе өс-дүрт сәғәттән уятһын, — тине. Новиков, көршәкте тотоп, хужаға инеп китте. Беҙ уға тиклем тәмәке төрә башланыҡ. Буранбай, тәмәке төрөргә ҡағыҙ йыртып, кеҫәһенән махорка алырға ҡулын тыҡҡан ваҡытта, ултырған еренән йоҡлап китте, хырлай башланы. Хужа, сығып, беҙгә һарайын күрһәтте:

— Унда һалам бар. Берүк тәмәкеләрегеҙҙе ташлап инегеҙ, — тине. Төрөлгән тәмәкеләр тоҡандырылманылар. Беҙ, һарайға барғанда, яртылаш йоҡлап бара инек. Һарайға ҡалай инеп ауғаныбыҙҙы хәтерләмәнек.

Мин йоҡо араһында берәүҙең һөйләнеүен, тауышланыуын ишетеп яттым. Ләкин ул алыҫтан-алыҫтан ҡолаҡҡа салынды. Берәү бик ҡаты аяҡҡа баҫты, ҡабырғаға төрттө. Барыһын да һиҙҙем. Аҙаҡ танауҙан ҡаты ҡыҫып тотто лар. Мин, танауҙы йәшереп, йөҙ түбән әйләндем. Бер ҡаты ҡул тағы минең башты күтәреп, бик ҡаты танауҙан ҡыҫты. Аҙағында күҙҙе асырға мәжбүр булдым. Мин күҙҙе асҡас, бик ҡаты ҡысҡырҙы:

— Тороғоҙ инде, тороғоҙ!

Ул баяғы, беҙҙе ашатып, һарайына индереп ятҡырған хужа ине. Мин йоҡо менән иҫергән баш менән уга ҡарап ҡалдым. Уның ниңә уятыуын аңламаным. Эргәмдә йоҡлап ятҡан иптәштәрҙе күрҙем дә тағы ла башты һаламға терәргә уйланым. Хужа ҡулымдан тартты.

— Юҡ, юҡ, хәҙер ятырға ярамай, иптәштәреңде уят. Һеҙ, дүрт сәғәттән уятығыҙ, тигәйнегеҙ, хәҙер инде ете сәғәт артығы менән булды. Хәҙер кис яҡыная, тороғоҙ, тороғоҙ, — тип, минең аяҡтарға типте. Минең башҡа бер аҙ аң инде. Тора, ҡуҙғала башланым. Бөтә тәндәр ауырталар, аяҡтар ҡатҡандар, һис уларҙы яҙып, рәткә килтереп булмай. Аяҡҡа баҫҡас,

иҫереп туҡмалған кеше кеүек, йөрөй алманым. Бөтә кәүҙә ҡыйралып төшөп бара. Аяҡтар ойоғандар, атлай алмайҙар. Уларҙы ыуырға тотондом. Бер аҙ ҡыҙғас, ауа-түнә тышҡа сыҡтым. Күҙ яҡтыға сағылды, күҙ алдым ҡараңғыланды, баш әйләнде, күҙҙән йәштәр аҡты. Мин бик оҙаҡ күҙҙе баҫып түбән ҡарап торҙом. Шунан һуң ҡояшҡа ҡараным. Ҡояш шаҡтай уҡ түбәнәйгән. Шулай булһа ла, ҡыҙыу әле. Ҡояш йылыһы тәнгә йылылыҡ бирҙе. Ҡояшта ҡыҙынып торғанда мин йоҡлаған ваҡытты самаланым. Беҙ, иртәнге сәғәт 9-ҙарҙа ятҡайныҡ, хәҙер киске сәғәт биштәр самаһы, хатта артығыраҡ та булыр. Мин, һарайға инеп, иптәштәрҙе уята башланым. Минең ҡысҡырыуҙар, һөрәнләүҙәр, төртөүҙәр береһенә лә тәьҫир итмәнеләр. Уларҙың уянырға самалары юҡ, үлек кеүек йоҡлайҙар. Мин дә хужа методына керештем. Йоҡоһо әҙерәк кешене — Индрилды өйләндерергә, танауҙарынан ҡыҫырға тотондом. Ул «енң...» ти ҙә, танауын алып, тағы бөгәрләнеп ята. Мин аҙағында уның ботонан һөйрәп, ишек эргәһенә алып килдем. Бик ҡаты аяғына баҫтым. Ул күтәрелеп, күҙен асып миңә ҡараны. Уның шешенгән ҡабаҡтары эсенән ҡараған, ҡаймаҡланған ҡанлы күҙҙәре Индрил күҙҙәренә оҡшаманылар, ҡоторған кешеләрҙең күҙҙәре кеүек ҡот осҡос булып күренделәр. Ул әллә нәмәкәй мығырланды ла ҡайтанан ятырға теләне. Мин уның яғаһынан тотоп, ҡыҫып алып, һөйрәп йөрөтә башланым. Ул башын бер был яҡҡа, бер теге яҡҡа һалындырып ергә тартылды. Мин уның башын ергә тейҙермәҫ өсөн көрәшә башланым. Әллә ниндәй һүҙҙәр һөйләнем: «Немецтар етеп киләләр, илен ҡалабыҙ!» — тинем, ул да тәьҫир итмәне. Аҙаҡта: «Янғын, янабыҙ!» — тип ҡысҡыра башланым. Индрил ҡапыл күҙҙәрен асты. «Ә?.. Ә?.. Янғын?» — тип тора башланы. Шулай итеп көскә Индрилды уяттым. Ул, тороп, тышҡа сығып ултырҙы. Икәүләп һыу менән биттәрҙе йыуҙыҡ. Шунан һуң баяғы аҙаптар менән иптәштәрҙе уятырға тотондоҡ. Ҡалғандары араһында иң ҡыйыны Буранбайҙы уятыу булды. Беҙ уны һөйрәп тышҡа алып сыҡтыҡ. Башына һыуыҡ һыуҙар ҡойҙоҡ. Шунан ғына ул йоҡонан айнып. Беҙ уянып баш күтәргәндә, киске сәғәт һигеҙҙәр бар ине. Ҡояштың урман артына йәшеренеүенә бик аҙ ваҡыт ҡалғайны.

Беҙ нисек аҙыҡ табыу, нисек китеү тураһында план ҡороп ултырғанда, хужабыҙ, тағы ла табаҡ менән ниҙер күтәреп, беҙгә табан килә башланы. Беҙ, аптырап:

— Неужели беҙгә килтерә? — тип ҡарап ҡалдыҡ. Ул табаҡты беҙҙең алға ултыртты. Төҫөнә һис бер кисереш сығармайынса һөйләнде:

— Беҙ булғас, ҡатынға өйрәне мул бешерергә ҡушҡайным, итле түгел инде, эсендә картуфы ла, кәбеҫтәһе лә, әҙерәк борсағы ла бар, — тине. Беҙҙең өсөн уның был шәрехтәре артыҡ ине. Новиков тороп хужаның ҡулын ҡыҫты.

— Ярай, был хөрмәтеңде онотмабыҙ, — тине. Беҙ тағы ҡуңыстарҙан ҡалаҡтарҙы сығарҙыҡ. Был юлы ҡабаланмай инек. Икмәк юҡ ине. Шул көйөнсә генә күтәрә башланыҡ. Ҡайнар өйрә эскә йылылыҡ бирҙе, тәндәрҙе еңеләйтте. Бөтөнләй айнып, кеше булып к,иттек. Ашап бөткәс, хужаны ни менән ризаландырыу тураһында кәңәш итә башланыҡ. Бер пар һалдат күлдәк-ыштаны, бер кейелгән сукно гимнастерка бирергә булдыҡ. Яҡшы күңелле белорус крәҫтиәне беҙҙең был бүләктәрҙе алманы: «Ҡуйығыҙ!» — тип ҡулын һелтәне. Беҙ уға ҡарамайынса, бүләктәребеҙҙе ҡалдырып, бөтәбеҙ ҙә ҡулын ҡыҫып, иҫәнләшеп урамға сыҡтыҡ.

— Ҡайҙа барырға? Юл өсөн ҡайҙан аҙыҡ табырға?

Беҙ шул уй менән урамдан киттек. Биш кеше бергә йөрөүҙе тейеш күрмәнек, ике группаға бүленеп, урамдың ике яғынан барырға булдыҡ. Беҙ Новиков менән инек. Беҙ икәүҙә ундай эште башҡарыуҙа һәләтлек юҡ ине. Индрил үҙе теләп, Байғужа группаһы менән китте. Етмәһә, беҙҙән көлдө:

— Һеҙҙән рәт сыҡмаҫ инде, әйҙә, барығыҙ әле, — тине. Беҙ Новиков менән күп өйҙәрҙе уҙҙыҡ. Береһенән дә инеп аҙыҡ һорарға ҡыйманыҡ. Бер яҡшы ғына йортта матур ғына кейенгән бер ҡарсыҡ күренде. Беҙ шул өйгә индек. Ҡарсыҡ менән иҫәнләштек, Новиков суҡынып алды. Ҡарсыҡ беҙгә бик оҙаҡ һынсыл күҙе менән ҡарап торҙо. Бик йомшаҡ һәм мөләйем тауыш менән:

— Алла мәхлүктәре, ҡайҙан киләһегеҙ? Берәй йомошоғоҙ бармы? — тине. Новиков түбән, меҫкен тауыш менән:

— Бабушка, беҙ фронттан киләбеҙ. Бик асыҡтыҡ. Һеҙҙә һатып алырға әҙерәк икмәк булмаҫмы? — тине. Ҡарсыҡ урынынан ҡуҙғалды.

— Һатырға булмаҫ, әҙерәк тамағығыҙҙы ялғатып ебәрергә мөмкин булыр. Ултырып тороғоҙ, — тип сыға башланы. «Дуня, Дуня» — тип кемгәлер ҡысҡырҙы. Новиков башын һелтәне:

— Суҡыныуым бушҡа китте, был ҡарсыҡтан эш сыҡманы. Ҡулға алмағас, беҙгә ашап ни файҙа! — тине. Өй эсендә күҙҙәрен йөрөтә башланы. Өй эсе ҡаласа йыйыштырылған, обстановка бик бай күренә. Новиков тороп, ҡарсыҡ сыҡҡан ишектән ҡараны. Беҙгә ҡаршы торған буфетты асып ҡараны, ҡысҡырып ебәрҙе:

— Бына мал ҡайҙа ул!

Буфеттың аҫҡы ҡатында өс буханка аҡ икмәк. Бер ҙур быяла һауытта варенье ултыра. Беҙҙең күҙҙәр яндылар. Беҙ өҙгөләнә башланыҡ. Новиков әйтә:

— Ҡарсыҡ килгәнсе, алабыҙ ҙа таябыҙ! — ти, тағы ла ишеккә йүгереп барҙы, — бер кем дә юҡ. Әйҙә күтәр! — ти. Минең ҡулға варенье менән бер икмәкте тотторҙо. Үҙе береһен алды. Мин скаткаға бәйләнгән сукно гимнастерканы сисеп

алып, шуға ураным. Былар йәшен тиҙлеге менән эшләнделәр. Буфетты ябып, яңынан урындарыбыҙға ултырып, ҡарсыҡты көтә башланыҡ. Ҡарсыҡ һаман юҡ. Былай сығып китһәк, уңайһыҙланабыҙ. Аҙаҡ, сығырға уйланыҡ. Өй алдында ҡарсыҡ осраны, һөйләнеп килә:

— Дуняша огородта булған икән, уны ҡайтарҙым, хәҙер килә, — ти. Новиков:

— Рәхмәт, бабушка, беҙ көтә алмайбыҙ, частарҙан тороп ҡалабыҙ. Китәбеҙ инде, — ти. Ҡарсыҡ ҡалды. Беҙ атланыҡ. Эш көткәндән артыҡ шыма эшләнде. Беҙ, эҙҙе юғалтыу өсөн, бер тыҡрыҡ арҡыры ауыл артына сығып, ҡыҙыу-ҡыҙыу атлай башланыҡ.

Ауылдан бер аҙ китеп, таш юлға сыға торған берләм юлға төшкәс, Новиков:

— Ҡайҙа ашығабыҙ? Әллә ҡарсыҡ арттан ҡыуып етер, тип ҡурҡабыҙмы? Ул ҡарсыҡ, үҙенең Дуияшаһы ҡайтҡансы, икмәктәренең юҡлығын да һиҙмәç әле, — тине. Шунан һуң иркен һулыш алдыҡ. Бер канау буйында йәшел үләнгә ятып, тегеләрҙе көтә башланыҡ. Новиков шатлығынан сумкаһын сисеп, Варшаванан алып сыҡҡан яҡшы папиросын сығарҙы. Тегеләрҙе шаҡ ҡатырыу уйы аçтында кәйефләнеп, папирос тарта башланыҡ. Тик ҡояштың байыу, тегеләрҙең һаман да күренмәүҙәре беҙҙе бер аҙ борсой ине.

Улар ҡараңғы төшөр алда килделәр. Бер аҙ картуф, ярты арыш икмәге тапҡайнылар. Беҙҙең тапҡан мал улар өсөн сенсация булды. Шул еңеү настроениеһы аçтында күңелле аҙымдар менән яңынан юлға сыҡтыҡ.

## УН ТУҒЫҘЫНСЫ БҮЛЕК

Уянғанда, беҙ ауыл һарайында һалам өçтөндә ята инек. Ишек төбөндә мылтыҡ менән торған бер һалдат күрҙек. Беҙҙән башҡа бер нисә ят һалдат бар. Улар, тәмәке тартып, шаулашып-һөйләшеп ултыралар. Беҙҙең иптәштәрҙән Буранбай, Индрил, Новиков йоҡлайҙар әле. Уларҙың өçтәре, бит-ҡулдары бысраҡ, гүйә, һаҙлыҡтан сығарылған кешеләр кеүек яталар. Байғужаның да өçтәре шулай, ә минең шинель итәге бер иле батҡаҡҡа ҡатҡан. Ҡулдар, тырнаҡ төптәре ер ҡаҙыған кеүек ҡаралғандар[1]. Тирә-яҡҡа бик оҙаҡ ҡарандым да Байғужаға һорау бирҙем:

— Беҙ ҡайҙа? Беҙ ни эшләп бында ятабыҙ? Ниңә былай бысранғанбыҙ ?

Байғужа әҙ генә ауыҙын йырҙы, көлгән һымаҡ итте.

[1]*Ҡаралған* — ҡарайған, бысранған.

— Әллә, үҙем дә шуны аңламай таң-ғәжәпкә ҡалып ултырам әле, бына шуға күрә һеҙҙе уяттым бит! — тине. Теге һалдаттарҙың беҙҙә эше юҡ, улар үҙ-ара шаулайҙар.

— Теге мылтыҡлы һалдат ниңә бында тора?

— Үҙем дә шуға аптырайым шул. Әллә беҙҙе арестовать иткәндәр инде, ҡана, иптәштәрҙе уятайыҡ, — тине Байғужа, ултырған еренән төртөп, тегеләрҙе уята башланы. Улар берәм-берәм торҙолар, тирә-яҡтарына ҡарандылар. Беҙҙең кеүек аптырашып, беҙгә һорауҙар бирә башланылар. Беҙ бер мөйөштә һөйләшә, шаулаша башланыҡ. Теге һалдаттар араһынан берәү беҙгә һүҙ ҡушты:

— Тыныс булығыҙ! Бында ҡурҡыныс юҡ. Һаҡсы менән генә торабыҙ. Беҙҙең положение губернаторҙыҡынан кәм түгел, әйҙә йоҡлағыҙ! — тине. Мылтыҡлы һалдат көлә башланы:

— Йә, башығыҙ ни эшләй? Ауыртмаймы? — тине. Беҙ бөтәбеҙ ҙә аптырап ҡалдыҡ. Һис төшөнөр әмәл юҡ. Индрил һикереп торҙо, теге һаҡсы эргәһенә килде, һораша башланы:

— Браток, әйт әле, беҙ ни эшләп бында килдек? Ҡайҙа, ниндәй хәлдә ятабыҙ?

Һалдат, көлөмһөрәп, ҡыҫҡа ғына яуап бирҙе:

— Һеҙ хәҙергә арестант хәлендә ятаһығыҙ.

Беҙҙең бөтәбеҙҙең дә ҡолаҡтар торҙо, урындарҙан тороп, Индрил эргәһенә килдек, бер тауыштан ҡысҡырҙыҡ:

— Арестанттар хәлендә?! Ни өсөн?!

Һалдат тағы ла йылмайып көлдө, һалҡын ҡан менән генә яуап бирҙе:

— Эсеп, иҫереп, пасығыҙҙан айырылып ҡалған өсөн. — Был һүҙ беҙгә тағы ла ят тойолдо, беҙҙең аптырашты тағы ла арттырҙы, бер-беребеҙгә һорау ҡуйҙыҡ. Теге мөйөштәге һалдаттарҙан берәү беҙҙең һүҙгә ҡушылды:

— Ну, браттар, кисә һеҙ бик ҡаты төшөргәйнегеҙ, үҙегеҙҙе арбаға тейәп алып килделәр. Башҡаларығыҙ иҫендә түгел ине, бына был оҙон иптәш бик оҙаҡ һүгенеп ятты, — тип Индрилға күрһәтте. Беҙ телһеҙ ҡалдыҡ, ни әйтергә белмәнек. Новиков ғасабиланды. Ышанмаған төҫ менән:

— Алдайһығыҙ! Дөрөҫөн әйтегеҙ әле, — тип, тегеләргә ҡараны. Улар көлөштөләр. Баяғы һалдат:

— Бөтәһен дә онотҡанһығыҙ, значит, күп ебәргәнһегеҙ. Ысынлап та, һеҙ уны ҡайҙан табып эстегеҙ? — тип аҙағынан беҙгә һорау бирҙе. Новиков уларға яуап ҡайтарманы, беҙ үҙ-ара һөйләшә, аңлаша башланыҡ.

Беҙ кисә ауылда булдыҡ, бер белорус крәҫтиәне беҙҙе ашатты, һарайында йоҡлатты. Шунан һуң беҙ, ауылдан аҙыҡ табып, юлға сыҡтыҡ. Шунан һуң беҙ, бер нисә саҡрым килгәс, аҡ икмәк менән варенье ашаныҡ, шунан һуң... аръяғын хәтерләүсе юҡ. Ләкин вареньеның башҡа тәьҫир итеүен аңлайбыҙ, хатта быуынға төшөүен, күп ашарға ярамағанлығын бер-

беребеҙгә әйткәнебеҙҙе лә әҙ генә беләбеҙ. Ҡалған яғын бер кем дә белмәй. Шунан һуң ҡайҙа барғанбыҙ, ҡайҙа булғанбыҙ, бында ҡалай килеп эләккәнбеҙ — бөтәһе лә беҙгә ҡараңғы.

Индрил ҡырҡа фекергә килде:

— Беҙҙе шул варенье ғына харап иткән, — тине. — Шунан башҡа беҙҙең бер нәмә лә эшләгәнебеҙ юҡ.

Башҡаларыбыҙ ҙа шул фекергә килдек һәм ышандыҡ. Нәмәләребеҙҙе ҡарай, тикшерә башланыҡ. Бөтәһе лә теүәл. Хатта бер аҡ күмәс, картуф, ярты ҡара икмәк тә бар. Тимәк, беҙ аҡ күмәс менән варенье ғына ашағанбыҙ. Быныһы тураһында бөтәбеҙ ҙә бер фекергә килдек. Ләкин беҙҙең тағы ла ниҙер юҡ. Ниҙер етмәй, уны беребеҙ ҙә хәтергә төшөрә алмайбыҙ. Ьаман уйлайбыҙ.

Уныһын Буранбай тапты:

— Мылтыҡтарыбыҙ юҡ! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Ысынлап та, беребеҙҙә лә мылтыҡ юҡ ине. Ҡарауылсы һалдат ҡысҡырҙы:

— Мылтыҡтарығыҙ алынды. Разве мылтыҡтар менән арестовать итәләр? — тине. Беҙҙең күңелдәр тынысланды. Кейемдәрҙе таҙарта башланыҡ. Сумкаларҙы аҡтарҙыҡ. Бөтә нәмәләрҙе тәртипкә ҡуйҙыҡ, ашау өсөн аҙыҡтарҙы әҙерләнек, ҡайнаған һыу алып килеү есөн ҡарауылдан рөхсәт һораныҡ. Беҙҙең мөйөштә күңелле тормош башланды. Арестантлыҡ хәле беҙҙең беребеҙҙе лә борсомай ине. Теге мөйөштәгеләр ҙә беҙгә ҡушылдылар. Улар ҙа сигенгән саҡта, төрлө ваҡытта, төрлө хәлдә арестовать ителгән һалдаттар икән; беҙҙең берҙәм компания уларҙы беҙгә тартты, улар араһында беҙ етәксе урын алып киттек.

Обед бирҙеләр, ужин килтерҙеләр. Ваҡытында йоҡлаттылар. Беҙҙең һарайға тағы ла кешеләр өҫтәлделәр. Улар беҙгә яңы хәбәрҙәр килтерә торҙолар. Допрос, иреккә сығыу тураһында ла уйлаусылар булманы. Беҙҙең тормош шулай аға бирҙе. Фронт хәбәрен белеп торабыҙ:

— Хәҙер беҙҙең ғәскәр сигенеүҙән туҡталған, позицияға урынлашҡан, немецтарға ҡаршы һөжүмгә әҙерләнәләр икән, — тиҙәр. Бындай хәбәрҙең ишетелеүе беҙҙе һарай-төрмәгә тағы ла нығыраҡ бәйләй төштө. Сөнки һуғышыуға ҡарағанда, бында тыныс һарайҙа ятыу артығыраҡ. Бындағы халыҡтар мәсьәләгә шул яҡтан ҡарайҙар.

— Атмаһалар, беҙ бында ятырға риза, — тиҙәр.

Новиковҡа бында майҙан асылды. Ул бөтә һалдаттарҙы үҙенең ауыҙына ҡаратып алды. Шул һарай кешеләренең юлбашсыһы булып алды. Хатта һалдаттар араһында булған талашты ла ул хәл итә, ғәйеплеләренә хөкөм яһай башланы. Әгәр ҙә берәй аңлашылмау сыҡһа, Новиковҡа мөрәжәғәт итергә, шуның ҡарашы менән генә үҙ һүҙҙәрен дөрөҫләй башланылар.

Новиков, үҙенең шул авторитетынан файҙаланып, үҙенең һуғышҡа ҡаршы булған фекерен һалдаттар араһына таратырға

тотондо. Ул һуғыш мәсьәләһенә инеп китһә, ҡыҫҡа ғына һөйләп туҡтай алмай, уны тармаҡландыра. Һәр бер тармағын төрлө факттар, ваҡиғалар менән бәйләй. Ул уны һалҡын ҡан менән һөйләмәне, ораторҙар кеүек, ялҡынлы итеп, йоҙроҡтарын төйөп, ҡыҙып киткән сағында стеналарға һуғып, ҡайһы бер факттарҙы һалдаттарҙың үҙҙәренән дөрөҫләтеп, уларға аңлатырға тырышты:

— Бына үҙең әйтеп тораһың, һинең атайың да, ҡарт, запас һалдат булып, мобилизовать ителгән, үҙең дә новобранец булып һуғышҡа килгәнһең. Һин бит әле йәп-йәш бала. Разве һиңә һуғышҡа килергә кәрәк! Һинең уҡый торған ваҡытың. Ҡапыл һин үләһең, атайың да үлә. Эсәйең күмәк йәш балалары менән өйҙә тол ҡатын булып ҡала. Һеҙ бит әҙ ерле крәҫтиәндәр. Һеҙҙең байлығығыҙ юҡ. Әсәң шул балаларҙы ҡалай тәрбиә итер? Һеҙ һуғышта үлгән тип, хөкүмәт шуларҙы үҙ тәрбиәһенә алыр тип беләһегеҙме! Никогда!.. Улар, тоҡсай аҫып, урамға сығып китәсәктәр. Улар, эт кеүек, урамда ятып үләсәктәр. Был һуғыштың беҙгә һуҡыр тинлек тә файҙаһы юҡ. Беҙ утлы күмерҙе тотабыҙ ғына. Утлы күмерҙә бешкән ашты байҙар ашайҙар. Ә беҙгә — ярты аршын ҡәбер! Етмәһә, артында хәйерселәр ҡалалар. Ул хәйерселәр йә урамда асҡа үлеп ҡалалар, йә әлеге һуғыш арҡаһында байлыҡ йыйып ҡалған фабриканттарға, тамаҡ туйҙырыу өсөн, көстәрен һаталар. Ана япон һуғышы булып уҙҙы. Унан башҡа ла беҙҙең Рәсәй ғүмер буйына һуғышҡан. Шул һуғыштан беҙҙең брат файҙа иткәнме? Астар бөткәнме? Эшсе менән крәҫтиән ярлылыҡтан ҡотолғанмы? Никогда!..

Новиковтың был һүҙен һәр бер һалдат айырым тынлыҡ менән тыңлай, ул һөйләп бөткәс, бөтәһе лә бер ауыҙҙан:

— Шулай инде ул, дөрөҫ һүҙгә ни әйтәһең? — тиҙәр. Новиков тышҡа сыҡҡанда йәки йоҡлағанда, уны маҡтап һөйләйҙәр: — Ну башлы кеше күренә. Был социалист булырға оҡшай, гел генә сатнатып күҙгә дөрөҫтө әйтеп тик тора бит? Ул, ниндәй генә турала һүҙ сыҡмаһын, барыһына ла дөрөҫ яуап бирә бит... — тиҙәр. Новиковтың үҙе булһа, уға айырым бер яҡынлыҡ һәм хөрмәт менән ҡарайҙар, уның тураһында һөйләмәйҙәр. Новиков һүҙһеҙ ятҡан саҡтарҙа майҙанға Индрил сыға. Ул үҙенең бөтмәҫ-төкәнмәҫ анекдоттары менән һалдаттарҙы көлдөрә. Уйға сумған етди ваҡыттары булһа, ул һыҙғырып оҙон көйҙәр уйнап йәки әлеге «Буревестник»ты декламировать итә башлай. Байғужа менән Буранбай һүҙгә артыҡ ҡатнашмайҙар. Улар һөйләгәнде тыңларға яраталар. Һүҙ булмағанда, көн һайын аҡтарылған сумкаларын тағы ла аҡтарып, шундағы нәмәләрен барлап, рәткә килтереп ҡайнашалар. Йәки ауыл тураһында берәй хәбәр һөйләйҙәр.

Новиков, эсе бошҡан ваҡытта, кеҫәһенән әлеге Женялар, Ирочкалар яҙған хатты сығарып уҡый башлай. Хат уҡығанда

мине эргәһенә саҡырын ала. Сөнки улар тураһындағы беҙҙең эске кисереш бер төрлө. Ул турала беҙ бер-беребеҙҙең йөрәктәребеҙҙе яҡындан аңлайбыҙ, бергә кисерәбеҙ; ул хатты уҡый ҙа:

— Хәҙер ҡайҙа икән улар? Тәки күрешә алманыҡ бит. Шайтан алғыры! Һуғышы ла бөтмәне. Хәҙер уларҙы ҡайҙан табаһың? Бәлки, немецтар яғында ҡалғандарҙыр, кем белә!

Йөрәгенән әсенә лә хатты тағы түш кеçәһенә, ҡуйын дәфтәре эсенә һалып ҡуя. Мин дә, уның эргәһенә ятып, Ирочкалар тураһында уйлай башлайым. Хәҙер улар беҙҙең өсөн һис ҡул етерлек урында түгел. Хәҙер уларҙы хыялда ғына табырға мөмкин. Былай тормошта, бигерәк тә беҙҙең тормошта, уларҙы табыу мөмкин түгел.

Беҙҙең көндәр шулай үтәләр. Алда ниҙәр булыр, ниҙәр күрербеҙ. Ул көндәр беҙгә яҡтылыҡ вәғәҙә итмәйҙәр, уйлаған саҡта күңелдәргә әсенеүҙәр генә һалалар.

Ул әсенеүҙәр үҙендә әйләндергән мөхиткә, ҡанлы һуғышҡа нәфрәт тыуҙыралар. Улар һәр көн үçәләр, ҙураялар, эскә һыймай башлайҙар, асыу ҡабарған, йәнгә толҡа тапмаған саҡтарҙа тышҡа бәреп сығалар. Новиков күп ваҡыт беҙҙең шул тышҡа бәреп сыҡҡан нәфрәттәрҙе һөйләй, әйтеп бирә, башҡалар шуны йөрәктән кисерәләр, йөрәктән һөйләйҙәр, Новиков һүҙе шул күмәк йөрәктәрҙең һүҙе булғанға күрә, уға ҡушылалар:

— Дөрөç инде ул... — тип ауыр көрһөнәләр.

Көндәр шулай үтәләр ине, беҙҙең йөрәктәрҙә тулҡындар һәр көн үçәләр, көсәйәләр ине. Беҙҙең группаға хәбәр килтерҙеләр:

— Һеҙҙе штабҡа, допросҡа саҡыралар, — тинеләр. Беҙ, һис ҡаушаманыҡ — тыныс күңел менән киттек, хатта допрос тураһында үҙ-ара аңлашманыҡ та.

Беҙҙе йәш кенә капитан ҡаршы алды. Бөтәбеҙҙе лә бер юлы уның эргәһенә индерҙеләр. Ул башта беҙҙең ҡайһы полктан икәнлегебеҙҙе, ҡалай аҙашып ҡалыуыбыҙҙы һорашты. Новиков, алга сығып, бөтә ваҡиғаны дөрөç итеп һөйләп бирҙе. Беҙ ҙә уның һүҙен дөрөçләнек. Капитан бик оҙаҡ уйланы, шунан һуң беҙгә берәм-берәм һорауҙар бирә башланы:

— Фронтта саҡта хөкөмгә тартылғанығыҙ бармы?

— Юҡ, ваше высокоблагородие!

— Алкоголь менән шөғөлләнәһегеҙме?

— Юҡ, ваше высокоблагородие!

— Арағыҙҙа ҡатынлы кешеләр бармы?

— Юҡ, ваше высокоблагородие!

— Фронтта күптәнме йөрөйһөгөҙ?

— Ике йыл, ваше высокоблагородие!

Ул беҙгә тағы ла берәм-берәм ҡарап сыҡты. Ниҙер әйтергә уйланы. Тороп йөрөнө. Беҙ һаман аптырап торҙоҡ. Ул тағы ла һорау бирҙе:

— Үҙ часығыҙға ҡайтырға теләйһегеҙме?

— Так точно, ваше высокоблагородие!

— Ярай, ул ваҡытта канцелярияға инегеҙ, һеҙгә путевка һәм маршрут бирерҙәр. Арағыҙҙан берәүҙе старший итеп һайларбыҙ. Бөгөн үк үҙ полкығыҙға китегеҙ! — тине. Беҙ сығып киттек. Канцелярияла беҙҙең фамилияларҙы яҙып алдылар. Мылтыҡтарҙы бирмәнеләр. «Беҙҙең туралағы материалдарҙы штабығыҙға ебәрәбеҙ, ҡулығыҙға путевка һәм маршрут ҡына бирәбеҙ», — тинеләр. Беҙ һис һүҙһеҙ-ниһеҙ биргәндәрен алдыҡ. Эштең былай бөтөүенә ҡыуанып, канцелариянан сыҡтыҡ. Новиков, юлда бөтәбеҙҙе лә туҡтатып:

— Был көтөлмәгән эш булды. Ҡулда ҡағыҙ бар. Аръяғын үҙебеҙ белербеҙ, — тине. Беҙ һарайға ҡайтып ингәндә, ундағы һалдаттар:

— Ни булды, ни булды? — тип ҡаршыланылар. Беҙ:

— Бәу булығыҙ, иптәштәр, беҙ китәбеҙ! — тинек. Уларҙың рухтары төштө, беҙ, тиҙ генә йыйынып, китеү яғын ҡараныҡ. Ҡалған иптәштәр, һарай ишегенән ҡулдарын, фуражкаларын болғап, тауышланып, беҙҙе оҙатып ҡалдылар. Беҙ, ғәҙәт буйынса, Буранбайҙы алға төшөрөп, уның артынан атландыҡ.

## ЕГЕРМЕНСЕ БҮЛЕК

Беҙ хәҙер ирекле ҡоштар. Беҙ үҙебеҙҙең полкты эҙләү һылтауы менән хәҙер ун көн инде Белоруссия яландарын гиҙәбеҙ. Бәр пунктта беҙҙе ашаталар, ҡундыралар, юлға аҙыҡ бирәләр. Путевка буйынса тағы үҙ юлыбыҙға китәбеҙ. Хәҙер беҙ маршрутты юғалттыҡ, юғалтыу ғына түгел, беҙ маршрут тураһында күптән һөйләргә лә оноттоҡ инде.

Беҙҙең маршрут — Новиков башында. Бәр көнгө юл уның тарафынан беҙҙең ҡарамаҡҡа ҡуйыла, беҙ уны тикшерәбеҙ, төҙәтмәләр индерәбеҙ, шунан һуң юлға сығабыҙ. Ҡайһы саҡтарҙа юлда барғанда, беҙ уңайлы мәғлүмәт алһаҡ, шунда уҡ маршрутты үҙгәртеп ебәрәбеҙ. Ул юл уңаймы, түгелме, алғамы, артҡамы китә, беҙҙең маршруттың төп маҡсаты ул түгел, төп маҡсат: үҙебеҙҙең тарафтан һайланған йүнәлеш. Ул йүнәлештә ғәскәр аҙ булырға тейешле, бара торған ауыл тыныс һәм һалдаттар тарафынан таланмаған булырға тейешле. Шулай уҡ беҙ үҙебеҙҙең путевка менән тылға ла инеп китә алабыҙ. Фронт буйында, фронттан 40 — 50 саҡрым тирәһендә әйләнәбеҙ.

Ураҡ өҫтө. Крәҫтиәндәрҙең ашлыҡ йыйған миҙгелдәре. Ҡайһы бер фрукттар ҙа бешкән ваҡыт. Был ваҡытта ауылдар туҡ булалар. Беҙ ул моменттан бик ныҡ файҙаланабыҙ. Әгәр ҙә берәй ауылда ҡунғанда яҡшы хужа тура килһә, беҙ ул ауылдан бер көндә генә китмәйбеҙ. Хужаға хеҙмәтебеҙҙе тәҡдим итәбеҙ. Беҙҙең кеүек таҙа егеттәргә ауылдарҙа мохтажлыҡ ҙур. Беҙ, биш таҙа егет, берҙәм тотонған саҡта, ялан эштәре емерелеп баралар. Бер хужаның аҙна-ун көнлөк эшен беҙ бер

тәүлектә башҡарып китәбеҙ. Беҙгә яҡшы һауа ғына тура килһен, көнөн-төнөн белмәйбеҙ, эшләгән хужаның тау кеүек эшен ендәр армияһы кеүек һыпырып ташлайбыҙ. Шул арала беҙ рәхмәттәр алабыҙ, һыйланабыҙ, ҡайһы бер хужа хеҙмәт хаҡы өсөн мул ғына аҡса һәм юлға етерлек аҙыҡ та биреп ебәрә. Беҙ бында үҙ планыбыҙҙы ла үткәреп йөрөйбөҙ. Крәҫтиәндәр араһында һуғышҡа ҡаршы фекер таратабыҙ. Ул эш менән беҙ ауыр хәлгә лә төшкөләнек.

Бер ауылда төшкән хужабыҙға күп кенә ярҙам күрһәткәс, беҙ китергә йыйынғанда, ул:

— Иртәгә йәкшәмбе көн, миңә ҡунаҡтар киләләр. Әҙерләнгән һый-хөрмәт бар. Ҡалығыҙ, ҡунаҡ булып китерһегеҙ, — тип беҙҙе алып ҡалды. Беҙҙең эш ашығыс түгел, ҡалдыҡ.

Иртәгеһенә мәжлестә ҡунаҡтар күп булды. Уларҙың араһында сиркәү старостаһы ла бар икән. Новиков уны белмәне. Эсеп, бер аҙ ҡыҙып алғас, һуғыш тураһында һүҙ сыҡты. Билдәле, крәҫтиәндәр араһында һуғышҡа ыңғай ҡараусылар юҡ.

— Һуғыш бөтһөн инде, юғиһә халыҡ бөлгөнлөккә төштө, — тиҙәр.

Новиков был мәсьәләне үҫтереп, ҡабартып алып китте. Ҡыҙған баш менән ялҡынлы рәүештә һуғыш тураһында үҙенең башында ҡайнаған бөтә фекерҙәрен түгеп һалды. Новиков, һүҙен бөткәс, аяғөҫтө тороп, стакан сәкәштереп:

— Һуғыштың бөтөүенә эсәйек, долой һуғыш! — тип эсеп ебәрҙе. Мәжлестәгеләр ҙә Новиков һүҙен ҡабатланылар. Мәжлес митинг характерын алып китте. Бер мөйөштә, иконалар төбөндә, өндәшмәй генә ултырған ҡаҡсараҡ йөҙлө, йоҡа иренле, ҡылыс танаулы, кескәйерәк кенә күк күҙле, һаҡалдарына сал инә башлаған ҡунаҡ һүҙ алды. Ул ултырған урынында алдына ҡарап, күҙен стаканға терәп, нескә тауыш менән һөйләргә тотондо:

— Алла алдында гонаһ ҡылаһығыҙ, православие динен, уның ерҙәге Аллаһын мәсхәрә итәһегеҙ. Беҙ Алла һүҙен ишетмәйбеҙ, телгә ихтыяр биреп, юлдан аҙашабыҙ, Алланан башҡа бер эш тә эшләнмәй, беҙ үҙебеҙҙең гонаһлы телдәребеҙ менән уны үҙгәртә алмайбыҙ. Ерҙәге һәр бер афәт, үҙенең ваҡыты етмәйенсә тороп, ерҙән күтәрелмәй. Беҙҙең мөҡәддәс Рәсәй илендә динһеҙлек көсәйҙе. Бына шул арҡала, был һуғыш Алла тарафынан бәндәләренә ебәрелгән яза ул. Шуның өсөн беҙ Аллаға ғибәҙәт ҡылырға тейешбеҙ, Алланан был язаның күтәрелеүен һорарға тейешбеҙ. Әгәр ҙә беҙ шулай һәр көн гонаһ ҡылһаҡ, Алла беҙҙе тағы ла нығыраҡ наказать итер.

Был кешенең һүҙен бөтәһе лә тын тыңланылар. Уға ҡаршы бер һүҙ ҙә һөйләмәнеләр. Тик бер ҡарсыҡ ҡына:

— Ай, ай, гонаһтарыбыҙҙы кисер, Хоҙайым! — тип көрһөнөп ҡуйҙы. Новиковтың асыуы килде, буғай. Ул түҙә алманы:

— Һеҙ чепуха менән баш өйләндерәһегеҙ! — тип ыҫҡындырҙы. Теге кеше ҡапыл күтәрелде:

— Мин сиркәү старостаһы. Һеҙ мине хурлайһығыҙ. Һеҙ һуғыш ваҡытында ни эшләп, тынысланып ауылда йөрөйһөгөҙ әле? Һеҙ еврей түгелме, һеҙ социалист түгелме? Бөтә һүҙҙәрегеҙ шуларҙыҡына оҡшай. Һеҙ простой һалдаттар түгел, һеҙҙең документтарҙы тикшерергә кәрәк! Мин күреп торам. Һеҙ хөкүмәткә, һуғышҡа ҡаршы агитация яһап, крәҫтиәндәрҙе ҡотортоп йөрөүселәр...

Староста ҡыҙҙы, ҡалтыранды, Новиковтың ауыҙына йоҙроҡтарын төйөп, терәй башланы. Новиков та шикләнә төштө. Ул ағарынып ғәфү үтенә башланы:

— Мин һеҙҙең бындай характерҙа икәнлегегеҙҙе белмәнем. Һөйләмәгән булыр инем, — тип артҡа сигенде. Хужа, староста алдына килеп, ялынырға тотондо:

— Берүк инде һалдаттарҙың һүҙҙәренә артыҡ иғтибар итмәгеҙ инде. Улар простой халыҡтар бит, — тип унын тынысланыуын һораны. Староста бик ҡырҡа ғына:

— Былар мәжлестән сығып китһендәр, юғиһә мин китәм! — тине. Был беҙҙең өсөн уңай булды. Бөтәбеҙ ҙә күтәрелеп, тышҡа сыҡтыҡ. Хужа беҙҙең арттан сыҡты. Беҙҙе ситкәрәк алып китеп, мәсьәләне аңлатырға башланы:

— Минең һеҙгә һүҙем юҡ. Рәхмәт, ярҙам иттегеҙ. Беҙҙең был сиркәү старостаһы бик уҫал кеше. Ул күп кешеләрҙе тотоп бирҙе инде. Мин һеҙгә алдан иҫкәртергә онотҡанмын. Һеҙ, эш боҙолмаҫ борон, тиҙерәк китегеҙ. Ул әйткән һүҙен эшләмәй ҡала торған кеше түгел, — тип беҙгә тиҙерәк китергә кәңәш бирҙе. Беҙ, тиҙерәк сумкаларыбыҙҙы аҫтыҡ та, арттан, баҡса яғынан сығып, юлыбыҙҙы ҡараныҡ. Новиков юлда һөйләнеп бара:

— Ярай әле үҙенең кемлеген белгертте. Әгәр ҙә ул кеше беҙҙең мәжлес буйына барған һүҙҙе тыңлап, эстән генә кисереп ултырһа, шунан һуң ул тейешле урынға барып әйтһә, эш насар булыр ине. Беренсенән, беҙ мәжлес аҙағына тиклем ултырған булыр инек. Икенсенән, хужа һәйбәт кеше, ул бөгөн беҙҙе ебәрмәҫ ине. Башығыҙҙа ла бер аҙ бар, ҡуныгыҙ, тигән булыр ине. Мин ундай кешеләрҙе беләм. Улар әллә ниндәй гонаһтар тағырға мөмкин. Ә беҙҙең ҡулда бер путевка ғына. Унын числоһы ҡасанғы. Тағы эләккән булыр ине, хәҙер инде беҙҙе, уҫал уй менән дезертирлыҡ итеп йөрөүсе шайкалар тип, башҡа төрлө хөкөм иткән булырҙар ине. Ярай инде, хәҙергә ҡотолдоҡ. Ләкин киләсәктә беҙгә был һабаҡ булһын!

Беҙ ул көндө яҡын-тирәлә туҡталманыҡ, алыҫыраҡ китергә, был ваҡиғанан һуң күңелде нығыраҡ тынысландырырға булдыҡ.

«Ауыҙы бешкән — өрөп эскән» — тигән һымаҡ, ауылдарға килһәк, элекке кеүек йорттар һайламаныҡ, әлеге старосталарға

осрауҙан шикләндек, ауылдың ситендәге өйҙәрҙе, ярлы кешеләрҙе, һалдаткаларҙы һайлап төшә башланыҡ. Сөнки ундай өйҙәрҙә ашау яғы таҡырыраҡ булһа ла, ни эшләһәң дә, ни һөйләһәң дә мөмкин була, бындай өйҙәрҙә һүҙҙәр иркен, йүгәнһеҙ булалар.

Беҙ ундай йорттарҙа ла уңайһыҙ ваҡиғаға осраныҡ. Беҙ бер инвалид өйөнә төштөк. Ул үҙе һуғыш алдынан бер помещикка эшләгәндә аяғына бер тутыҡҡан ҡаҙаҡ ҡаҙалған да, ҡанына заражение булып, бик күп этләнгәндән һуң, уң аяғын ҡырҡтырған. Хәҙер ҙә шуның менән яфа күрә, бик һыҙлай, тип зарлана. Уның аты юҡ, бер һыйыры, бер сусҡаһы бар. Ҡатыны йәш, таҙа, матур. Һикереп, уйнаҡлап тора, һәр ваҡыт шаян һүҙҙәр һөйләй. Һәр ваҡыт ҡысҡырып йырлап йөрөй. Беҙ шул өйҙә ҡундыҡ, иртә менән торғанда, ғәжәп бер хәл күрҙек. Бөтәбеҙҙең дә маңлайыбыҙға ҡоромдар менән тәре һыҙылған. Бер-беребеҙгә ҡараштыҡ, көлөштөк, аптыраштыҡ, хужанан һорашты к:

— Әллә һеҙҙә өйөгөҙҙә ҡунған кешеләрҙең маңлайҙарына тәре һыҙыу ғәҙәте бармы? — тинек. Ҡатын иренә ҡараны. Асыулы тауыш менән:

— Аҡһаҡ шайтан! Килгән ҡунаҡтарҙы шулай итәләрме ни? — тине. Хужа уңайһыҙланды, көлөмһөрәне:

— Һеҙҙең арағыҙҙа минән дә хәйләкәрерәк кешеләр бар икән. Ярай инде, шулай ҡалһын! — тине. Йәберләнгән тауыш менән һүҙен бөтөрҙө. Беҙгә был тағы ла табышмаҡ булды. Беҙ хужаның аңлатыуын һораһаҡ та, ул турала һүҙ алып бармаҫҡа ҡушты, беҙҙең маңлайҙағы ҡоромдан яһалған тәреләр сер эсендә ҡалдылар.

Беҙ иртә менән иҫәнләшеп киттек, ул беҙҙе һалҡын ғына оҙатып ҡалды. Юл буйынса тәреләр тураһында баш ваттыҡ, һис хәл итә алманыҡ. Юлда хәл йыйырға туҡталғанда, шул турала һаман баш ватабыҙ. Буранбай үҙе генә көлөп ултыра. Беҙҙең һүҙгә ҡатышмай. Беҙ шиккә ҡалдыҡ:

— Ниңә көләһең? Әллә ул турала берәй нәмә беләһеңме? — тинек. Ул шарҡылдап көлөргә тотондо. Уның көлөүе беҙҙе ҡыҙыҡһындырҙы. Беҙ уның тиҙерәк һөйләүен, серҙе аңлатыуын һорай башланыҡ. Ул беҙгә ваҡиғаны һөйлән бирҙе:

— Мин яңғыҙым тышта ултыра инем, — ти, — теге ҡатын миңә бәйләнде, мине төрлө йомошҡа ҡуша башланы. Мин тыңланым, уның төрлө йомоштарын башҡарҙым. Ул миңә бәйләнә, минең менән шаяра, танауҙан ҡыҫа, биттән һыйпай, өҫкә атланып килә. Мин дә әҙерәк шаярткан булдым. Ул минең шаяртыуҙы ысынға алды, буғай. Иренән зарлана башланы. Ул инвалид, бер эшкә лә ярамай, ти. Мин уның менән баҙға картуф алырға төштөм. Шунда ул минең муйынға аҫылынды, ҡыҫып-ҡыҫып биттән үбә, минең битте талай башланы. Мин ни эшләргә белмәнем, уға әйтә ҡуйҙым: «Ҡасан күрешәбеҙ һуң?» —

тинем. Ул: «Ирем бик көнләй, һәр ваҡыт һағалап ҡына тора. Ул төндә, аяғы һыҙлаһа, тышҡа сығып, һалҡын алдырып ултыра— шул ваҡытта», — ти. Төндә мин бик ҡаты йоҡлай инем. Бер ҡыҙыу ҡул минең биттән һыйпап уятты. Ул теге ҡатын ине. Мин уның эргәһенә барҙым. Ире инә башланы, ул мине өҫтөнән ырғытты, тауышландыҡ, буғай, ире минең барғанды һиҙҙе, мығырланып ҡатынын һүкте. Шунан һуң ул тороп беҙҙең аяҡ осона килеп баҫты. Мин шөрләп ятам, хырлап йоҡлаған булам. Ул бик хәйләкәр икән, ситтән төшөп, барыбыҙҙың да йөрәктәрҙе баҫып ҡарай башланы, минең йөрәк сабып килгән ат йөрәге кеүек тибә. Ул һүгенде, мейес эргәһенә барып килде. Ул бармағын ҡоромға буяп маташҡан икән, ул бик яйлап ҡына минең маңлайға тәре һыҙҙы: «Иртәгә мин һине ҡыҙартайым әле», — тип мығырланып, урынына барып ятты. Уның менән генә эш бөтөүгә шатландым. Ундай кешенең характеры бик яман була бит, алыр ҙа башыңа балта менән бирер, шунан бик ҡурҡҡайным. Әгәр ҙә берәй нәмә менән килһә, һеҙҙе уятырға ята инем. Минең йоҡо ҡасты. Хужа байтаҡ ыңғырашып ятты ла хырлап йоҡоға китте. Мин маңлайымдағы тәре тураһында уйланым. Юйһаң да ҡараһы бөтмәҫ, тимен, әгәр ҙә тороп йөрөнә башлаһаң, һиҙер тип ҡурҡам. Минең башҡа бик матур уй килде. Иптәштәрҙең маңлайына ла тәре һыҙайым, хужа беребеҙгә лә бәйләнә алмаҫ, тигән ҡарарға килдем. Әкрен генә мейес алдына килеп бөтә бармаҡтарҙы ҡоромға буяным. Эргәгеҙгә килдем дә маңлайығыҙға тәре һуғып сыҡтым, ҡулдағы ҡоромдо һеҙҙең ҡулдарығыҙға һөрттөм. Шунан һуң йоҡларға яттым. Бына уның бөтә сере шунда, — тип һүҙен бөтөрҙө. Иптәштәр тәгәрәп ятып көлдөләр. Буранбайҙың хәйләһенә аптыранылар. Аҙаҡтан Индрил төҫөн етдиләндерҙе:

— Егеттәр, бынан һуң ундай эште ҡабатларға ярамай, беҙҙең хәлде беләһегеҙ бит, ҡыл өҫтөндә йөрөйбөҙ. Был эш тәүге һәм ахырғы булһын! — тине. Иптәштәр ҙә көлөүҙән туҡталдылар. Буранбай, тауышын түбәнәйтеп, үҙен ғәйепле һанап:

— Ҡатындың үҙенән булды инде. Мин бәйләнмәнем бит, үҙе бәйләнде бит. Бынан кире ул булмаҫ инде, — тип, яланға ҡараны. Буранбайҙың был тәүбәһе иптәштәрҙе тағы етдилектән сығарҙы, уға ҡарап тағы ла көлөргә тотоналар. Ул көн, юл буйынса, Буранбай телдән төшмәне, Буранбай шул көндөң геройы булып әүерелде.

Беҙ ул көн Витебск янында поляк мосолмандары ауылына тура килдек. Ауылға бик күп мосолман һалдаттары йыйылған, араларында мосолман офицерҙары ла күренә. Былар беҙгә бик яҡын тойолоп киттеләр. Улар араһына индек, һораша башланыҡ.

— Иртәгә бында ураҙа ғәйете уҡыла, беҙҙе фронттан шуға ебәрҙеләр, — тиҙәр. Беҙ ҙә ҡалырға булдыҡ. Ауылдаштар юҡ,

якташтар осранылар. Беҙ улар менән көн буйы «21» һуктык. Индрил кәрт уйнарға бик оҫта икән, беҙҙең менән ултырғандарҙың барыһын да таҙартты. Кис менән бер офицер, бер дивизия муллаһы, бер полк муллаһы килделәр. Уларҙа акса мул күренә. Индрил менән беҙ икәү катнаштык. Башка иптәштәр йокларға яттылар. Уйын кыҙҙы. Банкылар һаман Индрил яғына күсә торҙолар. Уйынсылар араһында иң комар менән уйнағаны дивизион муллаһы Хәлимов ине. Ул кәрттәрҙе өләшкәндә, бөтә хис менән бирелеп, өләшкән кулға, һалынған кәрттәргә карап ултыра. Үҙ алдына төшкән кәртте тиҙ генә алып карап куя. Үҙе кәрт алғанда ғасабилана, уны карағанда, алған яңы кәртенең мөйөшөн әкрен генә сығара, шул вакыт уның кулдары калтырай, әгәр очколар етмәһә, артык бер кисереш менән:

— Тағы берҙе һал! — ти. Уны һалғанда кәрткә йотлоғоп карап тора. Әгәр ҙә очколары етһә, кәрттәрен ташлап, ауыҙын йомоп, бер аҙ түбән карап тора ла шунан һуң айырым бер кисерешле тауыш менән:

— Үҙеңә ал! — ти. Банкирҙың үҙенә алған кәрттәрен, эйелеп-әйелеп, якын килеп карай. Әгәр ҙә үҙенең кәрттәре перебор булһа, бик ауыр көрһөнә лә, кулында көрттәрҙе әйләндереп тороп:

— Артып киткән, — тип, башын болғап куя. Әгәр ҙә ҙурырак банк отоп алһа, «очко!» тип бик әсе итеп кыскырып ебәрә, кәрттәрен ырғыта һалып, айырым бер комһоҙлок менән аксаларҙы йәйелгән бармактары менән баҫып, үҙенә тартып ала ла йомарлап тубык аҫтына тыға. Уйнаған сакта, уның кәрттәрҙән, очкол арҙан башка бер уйы юк. Башкалар һөйләшәләр, хәрәкәтләнәләр, ө ул, ғәҙәттә ултырған кеше кеүек, ултырған урынынан төндәр буйы куҙғалмай ултыра, тик уның башы менән кулдары ғына хәрәкәт итәләр. Уның бөтә иғтибары көрттә, очколар караyҙа, аксаларҙы һанап һалыуҙа ғына.

Офицерҙың, ике мулланың аксалары беҙгә инде. Хәлимов аҙактан беләгендәге сәғәтен һалып уйнаны. Ул да Индрилға күсте. Әгәр ҙә кояш сығып, ғәйет якынламаһа, Хәлимов кәрт эргәһенән китергә түгел ине. Халык ғәйеткә куҙғала башлағас, беҙ таралдык, йокларға яттык. Байғужа мине, халык ғәйеттән сыккас, уятты:

— Әйҙә, унда поляк мосолмандары һалдаттарға бүләк өләшәләр. Их, матур кыҙҙар, катындар йыйылғандар, әйҙә, мәхрүм калма! — тине.

Беҙ Байғужа менән мәсет алдына, бүләк өләшкән ергә киттек, мәсет алды йәрминкә төҫөн алған. Халык кайнай.

Мәсет коймаһы буйынан урамға табан катын-кыҙҙар теҙелгәндәр. Улар араһында гимназия формаһында кейенгән кыҙҙар күп күренәләр. Уларҙың кулдарында коробкалар, төйөнсөктәр бар. Былар гимназияла һәм башка укыу йорттарында укыусы

поляк мосолмандарының ҡыҙҙары. Чиновник формаһында кейенгән бер ҡарт өҫтәлдә ҡатын-ҡыҙҙар алып килгән бүләкте ҡабул итә. Икенсе яҡтан рәткә теҙелгән һалдаттарҙы бер офицер, сиратлап, шул өҫтәл эргәһенә үткәрә; һәр бер үткән һалдатҡа папирос, шырпы, печенье, ҡағыҙ, конверт, ҡәләм һәм ваҡ-төйәк нәмәләр биреп, урам яғына сығарып торалар.

Башына эшләпә, өҫтөнә жөббә[1] һымаҡ кейем кейгән, түшенә ленталар менән миҙалдар таҡҡан ҙур мыйыҡлы, эйәк аҫтында ослайтып ҡалдырған һаҡаллы кеше, мәсеттән сығып, кырандасҡа ултырҙы. Шул уҡ ҡиәфәтле, ләкин хәрби кейемдә, бер полковник баяғы кеше менән ҡушлашып ултырып, ҡапҡа төбөндәге офицерҙар менән иҫәнләштеләр ҙә киттеләр. Улар киткәс һалдаттар:

— Эшләпәлеһе — мулла, тегеһе мосолман полковник, — тинеләр. Беҙ Байғужа менән бүләктәр алып сыҡҡанда, әлеге беҙҙең менән ҡояш сыҡҡансы кәрт уйнаған дивизия муллаһы Хәлимов беҙгә ҡаршы булды. Мине эргәһенә саҡырып алды:

— Беҙҙе бер бай мосолман мәжлескә саҡырҙы. Унда бер нисә офицер һәм: беҙ генә булабыҙ. Һин дә мәҙәни күренәһең, әйҙә киттек, ләкин иптәштәреңде эйәртмә! — тине. Байғужаға был уңайһыҙ булды. Ул ҡырға ҡарап, белмәмешкә һалышып, йүткергән булды. Шул хәлдән ҡотолоу өсөн:

— Мин саҡырылмаған ҡунаҡ, барыу уңайһыҙ булыр. Унан һуң иптәштәр ҙә мине юғалтырҙар, — тинем. Байғужа Хәлимовҡа һүҙ бирмәне:

— Беҙҙең халыҡ йоҡлай торғандыр әле. Беҙ ҡайтып, тамаҡҡа әҙерләгәнсе, барып кил, байрамдарын күр, ҡалай байрам итерҙәр икән, — тине. Байғужаның был һүҙе миңә приказ кеүек тойолдо. Хәлимовҡа:

— Улай булғас, әйҙә киттек, — тинем. Байғужаға бүләктәрҙе бирҙем дә Хәлимовҡа эйәрҙем.

Ҙур йорт. Тирә-яғы баҡса. Төрлө емеш ағастары менән ҡапланған. Ҙур тәҙрәләргә ебәк шторҙар эленгән. Асыҡ тәҙрәнән пианино тауышы ишетелә. Тәҙрәләрҙән күренгән төрлө гөлдәр өйҙәге байрам рухын аңҡыталар. Был күренешкә Хәлимовтың күңеле нескәрҙе, буғай.

— Ошондай мәхәлләлә мулла булып торһаң ине! — тип, тирә-яғына ҡаранды. Ул арала ишек төбөндә ҙур мыйыҡлы, мөһабәт кеше беҙҙе руссалап ҡаршыланы:

— Әйҙә, рәхим итегеҙ, ҡәҙерле Алла ҡунаҡтары! — тине.

Беҙ ингәндә, кисәге беҙҙең менән кәрт уйнаған офицер
Әхмәтьянов, полк. муллаһы Туйышев, тағы ла бер поручик һәм подпоручик бар ине. Улар эргәһендә байрам кейемендә бер нисә ҡатын-ҡыҙ йөрөй. Беҙҙе көткәндәр, буғай, хужа ябылған

[1]*Жөббә* — муллаларҙың киң еңле оҙон кейеме.

өҫтәлде асты, ҡунаҡтарҙы урындарына тәҡдим итте. Хәлимовты ултырған урындан ғына таныштырҙылар. Минең турала:

— Был таныш әфәнде түгел, үҙе таныштырһын инде, — тинеләр. Мин, ни әйтергә белмәй, аптырап ҡалдым:

— Фронттан ғәйеткә килеүсе бер һалдат, — тинем. Бөтә күҙҙәр миңә ҡаранылар. Сөнки минең өҫкә, кейемгә ҡарағанда, ябай һалдат түгел, Варшаванан алып сыҡҡан яҡшы итек, яҡшы диагональ салбар, бөхтә итеп тегелгән гимнастерка, ул яҡшы офицерский ҡайыш менән быуылған, башта офицерский фуражка, тик кокарда менән погон ғына ябай һалдаттыҡылар. Мин яңы кейәмдәрҙе байрам хөрмәтенә сумканан ғына алып, кейенеп сыҡҡайным. Улар миңә айырым рәүештә килешеп торалар. Хәлимов ярты-йорто руссаһы менән:

— Был әфәнде ябай һалдат түгел, берәй штабта хеҙмәт итә торған кешегә оҡшай, — тине. Миңә был урында алдашырға тура килде:

— Дивизия штабында телефонист булып хеҙмәт итәм:, — тип ебәрҙем. Шуның менән минең турала һүҙ бөттө. Алға килгән тәмле байрам аштарына һөжүм итә башланыҡ. Хужа ҡунаҡтарҙан ғәфү үтенде:

— Дини байрам хөрмәте өсөн рух күтәрерлек эсемлектәр ҡуя алманым. Башҡа ваҡытта рәхим итеүегеҙҙе һорайым, офицер әфәнделәр!

Мәжлестә бөтә һүҙ русса булды. Беҙ Хәлимовтар менән һүҙгә ҡатнашып китә алманыҡ, алға ҡарап, ашау яғын ҡайырҙыҡ. Офицерҙар ханымдар, ҡыҙҙар менән шаулашып, көлөшөп һөйләштеләр.

Ниндәй уңай менәндер ҡорьән тураһында һүҙ сыҡты. Уны теге поручик башланы, буғай. Хужа мөйөштә, өс мөйөшлө өҫтәл өҫтөндә, ебәк эскәтер өҫтөндә, ятҡан хәтфә тышлы ҡорьәнде өҫтәлгә килтереп һалды һәм уны тотор өсөн аҡ бирсәткәләр ҡуйҙы. Ҡапыл бирсәткә кейеп ҡорьәнде асыусы булманы. Поручик һүҙен дауам итте:

— Һеҙҙә ҡорьәнде мәҡамһыҙ, һөйләп кенә уҡыйҙар, беҙҙә төрлө мәҡамдәр менән уҡыйҙар, скажем, беҙҙә һуңғы ваҡыттарҙа Мисыр, Мәҙинә мәҡамдары бар, — тине. Хужаның исеме Мостафа икән. Ул Хәлимовтың мәҡам менән ҡорьән уҡыуын һораны, алдына аҡ бирсәткәләрҙе ҡуйҙы. Хәлимовтың бармаҡтары бик йыуан һәм кәкрерәк инеләр. Ул, банкынан аҡсаларҙы һыпырып алған кеүек, бирсәткәләрҙе һыпырып алды, кейергә маташты, уңын һулға, һулын уңға кейеп, аҙапланып бөттө. Унан көлдөләр. Күрәһең, ул үҙ ғүмерендә ундай бирсәткәләрҙе кеймәгәндер, шулай ҙа ул һары ҡағыҙлы ҡорьән биттәрен аҡтарып, бер аҙ күҙҙәрен йүгертте лә:

— У нас ҡорьән так читают, вот как читают! — тип күҙҙәрен йомдо. Тауышын ҡалтыратып, ниндәйҙер бер мәҡам менән көйләп, оҙон итеп һуҙып, йәшелле-күкле тауыштар менән

уҡырға башланы. Бының уҡыуы бик күңелһеҙ ине. Теге ҡөрьән уҡыу менән маҡтанған поручик бер аҙ ҡыҙарҙы, көләмһөрәп башын түбән баҫты. Биҙгәк тотҡан кеше һымаҡ ҡалтырап, муйын тамырҙарын ҡалҡытып, бик юғары тауыш менән ҡысҡырған Хәлимовҡа теге ҡатын-ҡыҙҙар ғәжәпләнеп ҡаранылар. Ул бик оҙон аятҡа төштө. Каман һуҙҙы, һаман уҡыны. Хужа өҫтәл башында күкрәгенә ҡулын ҡуйып тыңланы. Хәлимов уҡып бөткәндә, уның маңлайынан тирҙәр сыҡҡайны, ул керле ҡулъяулығын кеҫәһенән сығарып биттәрен һөрттө. Шунан һуң ҡулъяулығына, бик оҙон итеп, танауын һемгереп алды. Хәлимовтың был ҡыланыштары мәжлес өсөн бөтөнләй ят һәм килешһеҙ ине. Ләкин Хәлимов үҙенең ул ҡыланыштарының килешеү-килешмәүен аңламаны, үҙен тағы ла иркенерәк хис итеп, үҙенә күрһәтелгән хөрмәт һәм иғтибарға мауығып, ул йомшаҡ урындыҡтың артына кирелә төшөп, бер кикереп алды. Поручик тағы уңайһыҙ хәлгә төштө, ҡолаҡтары ҡыҙарҙы, үҙендәге уңайһыҙлыҡты ҡаплау өсөн:

— Был уҡылған — Мисыр, Мәҙинә мәҡамы түгел, беҙҙә уны бик шәп уҡыусылар бар, — тине. Хужа ла өндәшмәне, башын һелкте, ҡалай ҙа һүҙҙе ҡөрьәндән башҡаға борорға тырыштылар. Ләкин һүҙҙәр тиҙ генә бәйләнеп китмәнеләр.

Минең өсөн был мәжлес артыҡ күңелһеҙ булды. Иптәштәрем эргәһенә ҡайтҡы килде. Ләкин ҡалай китергә, ниндәй һылтау табырға — шул турала уйлай башланым. Башҡа ҡунаҡтарҙың уйҙары юҡ. Мулла Хәлимов, тирләп, стакан артынан стакан сәй эсә. Туйышев, тығыҙланып ҡына, өндәшмәй генә ҡатын-ҡыҙҙарға күҙ һалып ултыра. Минең менән һөйләшеүсе кеше юҡ. Мин бөтәһенә лә ҡарайым, бөтәһенә лә күҙ һалып ултырам. Бөтә өй ҡаласа йыйыштырылған, бөтәһе ҡаласа кейенгән; өйҙө, кейемдә, ғөрөф-ғәҙәттәрендә беҙҙәге мосолман билдәләре юҡ. Тик мөйөштә, иконалар урынында, торған ҡөрьән генә уларҙың мосолман булыуҙарын күрһәтә. Ҡөрьәндәре лә беҙҙәге кеүек кәштәлә түгел, ебәк эскәтер өҫтөндә тора, уны бирсәткә менән генә асып ҡарайҙар. Уҡыусылары бармы — уныһы ла беҙгә ҡараңғы.

Беҙҙе саҡырған хужа Мостафа Ҡарашайский үҙе ҡалала, банкыла хеҙмәт итә икән. Ьуңға табан ул үҙенең хеҙмәттәре менән таныштырҙы, шунан һуң ғаилә мәсьәләһенә төшөп китте. Бында инде ул үҙенең хаҡ мосолманлығын аса башланы:

— Бында беҙҙең мосолмандарға ғаилә мәсьәләһе ҡыйын, бына балаларҙы үҫтерәһең, улар кеше булалар, уҡып сығалар, егеттәребеҙ рус ҡыҙҙарына өйләнәләр, ҡыҙҙарыбыҙ рус офицерҙарына сығалар. Ғаиләһе ҡалай төҙөлһә, дине шулай була, христиан диненә ислам динен алмашалар. Ата-әсә булған кешеләр яңғыҙҙары ҡөрьәндәре эргәһендә тороп ҡалалар. Бына һеҙ, офицер әфәнделәр, бында саҡта беҙҙең ҡыҙҙарға өйләнегеҙ, мосолманлыҡты күрһәтегеҙ, — тип һүҙен бөтөрҙө. Өҫтәлдең бер

яғында ултырған ҡыҙҙар шарҡылдап көлөп ебәрҙеләр, ҡайһылары оялып, баштарын баҫтылар. Башҡалар көлөштөләр. Мостафа Ҡарашайский, һүҙенең етдилеген юғалтмаҫ өсөн:

— Бер ҙә көлкө түгел, мин ысынлап әйтәм, — тип офицерға ҡараны. Уның һүҙенә бер кем дә яуап ҡайтарманы. Уның һүҙен ҡеүәтләү ҡыҙҙар алдында уңайһыҙ ине, Хәлимов түҙмәне, эскән стаканын өҫтәлгә ҡуйып:

— Мостафа әфәнде дөрөҫ әйтә, мосолман ҡыҙҙары булғас, мосолман егеттәренә сығырға тейештәр. Бына беҙҙең ниндәй матур, мәҙәни егеттәребеҙ бар. Әйҙә шуларға димләйек. Мин никах уҡырға әҙер. Әллә хәҙер үк уҡыйыммы? — тип, үҙенә айырым тауыш менән ғыжылдап көлә башланы. Хәлимов русса ватып һөйләһә лә, һүҙҙең төп мәғәнәһен аңланылар. Бөтә мәжлес шаулап көлә башланы. Ҡайһы бер ҡыҙҙар көлөп, түҙә алмайынса, күрше бүлмәгә сығып киттеләр, хужаға ҡыҙҙарҙың сығыуҙары оҡшаманы:

— Был ниндәй балалыҡ тағы? — тип, күтәренке, хаким тауыш менән ҡысҡырҙы. Ҡыҙҙар, күрәһең, атаһынан ҡурҡалар, тиҙ генә күҙҙәрен түбән баҫып сыҡтылар:

— Ғәфү итегеҙ! Беҙ былай ғына сыҡҡайныҡ, — тинеләр. Урындарына килеп ултырҙылар. Өҫтәлдәгеләр күптән ашамайҙар, тик Хәлимов ҡына, яңғыҙы йәйелеп, үҙенең өйөндәге кеүек, тирләп-бешеп сәй эсә ине. Ниһайәт, ул да әсеүҙән туҡтаны, өҫтәлдән тора башланылар. Хужа папирос тоҡандырҙы, шуны көтөп торған кеүек, башҡалар ҙа, дивандарға ултырып, тарта башланылар. Былар араһында мин яңы таныш булғас, ситкәрәк сығып ултырҙым. Ҡарашайскийҙың бер ҡыҙы миңә килеп ҡулын һуҙҙы:

— Марьям! — тине, мин үҙемде тәҡдим итә алманым, ярылаш тороп күрештем дә яңынан диванға ултырҙым, ул да минең эргәмә ултырҙы: — Беҙгә скучно, бугай. Баянан бирле ҡарап ултырам, һөйләшмәйһегеҙ, бик тартынып ултыраһығыҙ, — тине. Көтөлмәгән был мөнәсәбәткә мин аптырап, ҡаушап ҡалдым. Уға ҡаршы ни әйтергә яуап таба алмай торҙом. Уға тура ҡарамай ғына:

— Мин бында яңы кеше, яңы таныш, — тинем. Мәрйәм күтәрелеп китте, йөҙҙәренә кисереш сығарҙы:

— Зачем! Зачем!.. Разве шулай уйларға ярай? Бындағы әфәнделәр беҙгә барыһы ла яңы таныштар. Давайте, улай күңелһеҙ булмағыҙ! Бөгөн байрам мөнәсәбәте менән беҙҙә йәштәрҙең вечеры була. Беҙҙең унда булыуығыҙҙы беҙ настоятельно һорайбыҙ. Бында кавалер, наверно, һеҙ генә булырға тейеш, ҡалғандары өйләнгән кешеләрҙер, тип уйлайым, — тине. Мин ҡыҙарҙым, һүҙһеҙ ҡалдым. Шунан һуң:

— Ваҡыт булһа, китмәһәк, бәлки килербеҙ, — тинем. Минең был һүҙем тағы ла Мәрйәмде ғәжәпкә ҡалдырҙы:

— Бөтәгеҙ ҙә дүрт көнгә отпуск алып килгәнһегеҙ, буғай, атайым шулай тине. Беҙ бөтә таныштарыбыҙға ла шулай хәбәр иттек, — тип, миңә урындығын яҡыныраҡ ҡуйҙы. Мәрйәмдең кавалер тигән һүҙе һәм бик яҡын килеп ултырыуы минең йөрәюте тулҡынландырҙы, ысынлап та, бында килгән кешеләр араһында иң йәше мин. Хәлимов менән Туйышев утыҙ йәш тирәләрендәге запас һалдаттар, поручик, үҙенең кеҫәһенән алып, ҡатыны һәм балаларының һүрәттәрен күрһәтте. Прапорщик Әхмәтьянов йәш булһа ла, ҡарт сырайлы күренә. Уның бисәле булыуы бик мөмкин. Ә мин саҡ егерме йәшкә сыҡҡан бала сырайлы кеше. Улар мине һис шикһеҙ кавалер тип белгәндәр. Мин мәсьәләне аңлап алдым.

— Әгәр ҙә мөмкинлек тапһам, килергә тырышырмын, — тип бик нескә һәм мәҙәни кешеләрсә яуап бирҙем. Мәрйәм миңә артыҡ үҙләшеп китте. Ул, күптәнге таныш кеүек, минең менән һөйләшергә башланы:

— Бәлки, һеҙҙең төшкән фатирығыҙ уңайһыҙҙыр, шуға күрә китергә уйлай торғанһығыҙҙыр? Әйҙә, беҙгә рәхим итегеҙ! Беҙҙең фатир ҙур, айырым бүлмәләр бар. Теләһәгеҙ, беседкала йоҡларға мөмкин. Унда һауа бик яҡшы була. Беҙҙең иптәш ҡыҙҙарыбыҙ ҙа килә, күңелле булыр.

Минең күңел борсола, иптәштәрем иҫкә төшә башланы. Ҡалай ғына булһа ла миңә ҡайтырға кәрәк. Бәлки, улар китергә йыйына торғандарҙыр, мине, юғалды, оҙаҡ йөрөй, тип һүгә торғандарҙыр. Ә бында мине тиҙ генә ебәрергә иҫәптәре юҡ. Мәсьәлә һаман да тәрәнәйә, тармаҡлана. Вечерға барыу, квартираға күсеү тәҡдимдәре яһала, мин, шуларҙы уйлап, папирос артынан папиросты өҙләкһеҙ тартам. Арҡалар тирләне. Ҡолаҡ артынан да тир сыҡҡан кеүек тойола, ләкин, уны һөртөү өсөн минең кеҫәлә ҡулъяулыҡ юҡ. Ҡул менән һыпырһаң, уңайһыҙ. Алдымда артыҡ мәҙәни ҡыҙ ултыра. Ул йоҡа ебәк күлдәктән, аяғында ебәк ойоҡ, аҡ нәфис туфли. Сәстәр иң матур прическа менән эшләнгән. Түштә алтын брошка, бармаҡтарҙа бриллиантлы йөҙөктәр, ҡулда ебәк ҡулъяулыҡ менән веер; ул һәр ваҡыт шуның менән битен елләтеп ултыра. Еләҫләткән саҡта унан иң яҡшы хушбуй еҫтәре тарала, йәйеләләр. Ауыҙында ике алтын теш тә күренә. Шуның өҫтәүенә уның кәүҙә төҙөлөшө артыҡ нескә һәм килешле. Кескәй генә түңәрәк йөҙҙәр, ҙур ҡара күҙҙәр, оҙон керпектәр, һыҙылып торған матур ҡара ҡаштар менән биҙәлгәндәр. Ҡылыс танау, кескәй ауыҙ, сәскә кеүек ҡыҙыл ирендәр, алма кеүек ҡыҙыл биттәр Мәрйәмде артыҡ дәрәжәлә матур күрһәтәләр. Уларҙың ысынлығына күңел ышанмай, художниктарҙың картиналары иҫкә төшәләр, мин уның йөҙөнә бер нисә тапҡыр һыпырылып ҡараным. Ләкин күҙҙәрҙе тиҙерәк алдым. Ә Мәрйәм минең эргәгә һәр ваҡыт яҡын килеп, һыйынып, күҙҙәргә тура ҡарап һөйләй. Мин ул ваҡытта күҙҙәрҙең ҡабаҡтарын төшөрөп, алдыма ҡа-

рап ултырам. Фронтта йөрөп, тупаҫланып, ярылып, ҡаралып бөткән ҡулдарымды кеҫәгә тығырға, тәмәке тартҡанда уға төтөнө бармаһын һылтауы менән диван ситенә, ҡырға ҡуйып торған булам.

Мәрйәм миңә һаман яҡыная, һаман үҙләшә. Үҙенең гимназия бөтөрөп, медицина факультетының өсөнсө курсында уҡыуын, балалар ауырыуы белгеслегенә әҙерләнеүен, һеңлеһе Сараның киләһе йылға гимназия бөтөрәсәген, хатта үҙенең егерме ике йәшкә сығыуын да һөйләне. Атаһының да ҡаты характерын, бик ҡаты мосолман булыуын, балаларына ла мосолман тәрбиәһе бирергә тырышыуын асып һалды. Һәр ваҡыт беҙҙең һөйләшеүгә ҡыҙығып, беҙгә күҙ һалып ултырған Хәлимов миңә хәлфәләрсә бер нисә тапҡыр күҙен ҡыҫып алды. Күҙҙәрен майландырып, ҡулдарын ыуып, айырым бер шөһүәтпәрәшлек менән йылмайҙы.

Ә минең күңелем тынысһыҙ, минең күңелем иптәштәрҙә ине. Мәрйәм минең турала бер нәмә лә һорашмай. Ул һорашһа ла, мин үҙемде бик әре тоторға, тауыштарҙы танауҙан сығарып һөйләргә, мәҙәни кеше күренергә тырыштым. Ситтән һәр ваҡыт беҙгә күҙ һалып ултырған әсәһе беҙҙең эргәгә килде, минең менән күреште, минең эргәгә диванға ултырҙы:

Мәрйәм, һеҙ был әфәнде менән бик килешеп киттегеҙ, буғай, һеҙҙең һүҙҙәр бик күңелле баралар. Ҡайҙа, уңайһыҙламаһам, миңә лә ултырырға рөхсәт итегеҙ! — тине. Миңә ҡарап йылмайҙы.

— Пожалуйста, пожалуйста! — тип мин бер аҙ ситкәрәк тайҙым:. Ул:

— Ултырығыҙ, ултырығыҙ! — тип, бик йомшаҡ ҡына беләгемдән тотто. Мәрйәм әсәһенең был һүҙенә шатланды. Балалар кеүек матур күҙҙәрен өйләндереп, әсәһенең ҡулынан: тотоп:

— Рәхмәт, мам! Беҙ бында бик күңелле итеп һөйләшеп ултырабыҙ. Беҙҙең әңгәмә бик приятный. Мин әле әфәндегә бөгөнгө вечерға килергә тәҡдим яһаным. Фатирға уңайһыҙ булһа, үҙебеҙҙән бүлмә тәҡдим иттем, — тине. Әсәһе, йөрәгенә ҡулын ҡуйып: «Рәхим итһен! Ул турала һүҙ булырға мөмкин түгел. Байрамды шундай приятный компания менән үткәреү бөтәбеҙгә лә күңелле булыр», — тип, минең арҡанан һыйпаны.

Әсәһенең был һүҙе минең күңелде тагы ла нығыраҡ борсоно. Миндә тиҙерәк китеү өсөн шул тиклем көслө теләк тыуҙы, әгәр ҙә мөмкин булһа, ҡош булып осоп китер инем. Ҡайтҡас, иптәштәремдә үбер инем. Шул тойғо менән түбәләргә, асыҡ тәҙрәләргә ҡарап ҡуйҙым.

Хужабыҙ Мостафа публиканың тын булыуын һораны:

— Ҡунаҡтарҙы гел һүҙ менән һыйламағыҙ. Мәрйәмдең пианино уйнауын һорайыҡ, әфәнделәр, — тине. Кемдәрҙер ҡул саптылар. Мәрйәм еңел генә тороп, пианино эргәһенә барҙы, аяғөҫтө торған килеш ноталар аҡтарырға тотондо. Ул киткәс,

минең эргәлә һауа иркенәйеп ҡалған кеүек булды. Иркен итеп һулыш алдым. Шунан һуң уға ситтән иркенләп ҡарай башланым. Ул, ысынлап та, ғәжәп яратылған бер һын. Уның килмәгән һис бер ере юҡ. Гүйә, ҡарар өсөн генә яратылған бер күбәләк. Ул осоп ҡына йөрөргә тейеш. Хәҙер Мәрйәмдең минең менән һөйләшеүен, бөтә йөрәген миңә асып һалыуын һис аңламаным. Ул ниндәйҙер бер нотаны таба алманы, әсәһе, ғәфү һорап, минең эргәнән китте. Мин тағы ла иркенәйҙем. Шул моменттан файҙаланып урындан торған булдым. Тәҙрәнән тышҡа ҡараным. Тышҡа ҡарағас, тағы ла йөрәгем әсенеп китте, һорап китергә бер генә лә һылтау табып булмай, ни әйтһәм дә, уңайһыҙ сығыр төҫлө күренә. Шунан һуң Хәлимов эргәһенә барып ултырҙым. Барып ултырыу менән, ул минең бөйөргә төрттө. Ауыҙын минең ҡолаҡҡа ҡуйып, бышылдай башланы:

— Ну, егет, фәрештәне ауланың бит! Ул һинең менән сихырланды, һин уны ҡулдан ысҡындырма! Күрәһең бит, әсәһе лә ҡалай йөрөй? Етмәһә, бүлмә тәҡдим итәләр. Һинең урынында мин булһам, ошо урынымдан ҡуҙғалмаҫ инем, шул фәрештә эргәһендә ҡалыр инем.

Хәлимовтың был һүҙҙәре минең ҡолаҡты ярып инделәр. Асыу килде, ахырында уның эргәһенән ситкәрәк киттем. Ул:

— Ниңә ҡурҡаһың? Былар беҙҙеңсә аңламайҙар бит! — ти.

Мәрйәм пианино уйнарға тотондо. Атаһы ноталарын асып тороу өсөн ярҙамға килде. Бөтә халыҡ пианино моңо аҫтына күмелде. Ул ниндәйҙер күңелдәрҙе ашҡындырырлыҡ моңло һәм дәртле бер көй уйнарға башланы. Ул пианино алдында күбәләк кеүек һелкенә, тирбәлә, уның нескә, нәфис бармаҡтары клавиатура өҫтөндә аҡ ебәк кеүек бәүеләләр, тулҡынланалар, гүйә, ул моңдар ул баҫҡан телдәрҙән сыҡмай, Мәрйәмдең үҙенән, уның бармаҡтары аша яңғырап торалар.

Ул бер нисә көй уйнаны. Бөтә халыҡ айырым тыныслыҡ һәм кисереш менән тыңланы. Ул уйнап туҡтағас, бөтәһе лә Мәрйәмдең музыкаһын маҡтанылар. Атаһы айырым бер ғорурлыҡ менән:

— Беҙҙең Мөрйәм йәштән музыкаға һәләтле булды. Уны музыкаға өйрәткән кешеләр, Мәрйәмдән ҙур композитор сығыр, тигәйнеләр. Ләкин мин музыка юлы менән ебәрмәнем. Шулай ҙа музыканан етерлек тиклем мәғлүмәт алдырырға тырыштым. Хәҙер ҙә уны консерваторияға һорайҙар. Ул турала ҡарар иткәнебеҙ юҡ әле. Һуңғы курсы ҡалды, уҡып бөтһөн инде, тибеҙ, — тип, Мәрйәмдең айырым сифаттарын беҙгә һөйләп бирҙе.

Шунан һуң поручик хужанан китергә рөхсәт һораны. Хужа рөхсәт бирмәҫ борон мин күтәрелеп торҙом. Мәрйәм, күбәләк кеүек осоп, минең эргәгә килеп етте:

— Һеҙ ҡайҙа ашығаһығыҙ? Ултырығыҙ әле! Атай, ни эшләп һин ҡунаҡтарға рөхсәт бирәһең? Ҡалһындар!

Поручик һылтауҙар күрһәтте. Тағы киләсәген белдерҙе. Мостафа, барыбыҙға ла ҡарап:

— Әфәнделәр! Бөтәгеҙ ҙә киске сәғәт 8-ҙә миңә ужинға рәхим итегеҙ. Минең башҡа ҡунаҡтарым да була. Ул мәжлестә инде әҙерәк булыр, күңелле булыр. Ҡыҙҙар вечер ҙа ойошторалар, буғай, теләгән кешеләр шунда ҡатнашырҙар, — тине.

Бөтәбеҙ ҙә килергә тип вәғәҙә биреп, иҫәнләштек. Тышҡа сыҡтыҡ. Мәрйәм беҙҙең арттан сыҡты. Минең ҡулдан килеп тотто:

— Мин һеҙҙе үҙем айырым саҡырам. Килмәй ҡалмағыҙ. Мин көтәм! Юғиһә үпкәләрмен! — тип урамға сыҡты. Мин баш һелкеп кенә ризалыҡ белдергән булдым. Минең күңел иптәштәр эргәһенә осорға тора ине. Беҙ урамдан атлағанда, ул һаман ҡапҡа төбөндә ҡалды. Мин кәүҙәне төҙ тоторға, аяҡтарҙы офицерҙар кеүек өҙөп баҫырға тырыштым. Хәлимов һаман теге ҡыҙ менән минең турала һөйләште. Һөйләгәндә һәр ваҡыт эсен тотоп килде. Тыҡрыҡҡа ҡайырылғас, мин тегеләр менән иҫәнләштем дә бөтә көс менән иптәштәр эргәһенә йүгерҙем. Мин үҙемде ғәйепле һанап йүгерәм, үҙемде ҡалайтып аҡлау тураһында уйлап йүгерәм...

Мин ҡайтҡанда иптәштәр тын ғына ултыралар ине. Новиков менән Индрил бик күңелһеҙ күренәләр. Миңә өндәшмәнеләр. Байғужа:

— Һине көттөк, ҡайтманың, һиңә ашарға ҡалдырҙыҡ, — тип котелоктарҙы аҡтара башланы. Минең күңелгә шик төштө. Новиков эргәһенә килдем:

— Мин оҙаҡлап киттем. Әллә миңә асыуландығыҙмы? Китергә булһа, әйҙә, китәбеҙ! — тинем. Новиков әкрен генә:

— Юҡ, асыуланманыҡ. Бына Индрил менән әҙерәк талашып, үпкәләшеп алдыҡ әле, — тине. Индрил бик күтәренке тауыш менән:

— Новиков Наполеон булырға уйлай. Мин әйтәм, була алмаҫһың, тимен. Бына шул турала килешә алманыҡ, — тип йөрөй башланы. Новиков көләмһерәне:

— Чудак, һин үҙ күңелеңдәген һөйләмә! Ярар, мин башҡа һинең менән һүҙ көрәштермәйем инде. Бына Булат ҡайтты, ул үҙ фекерен һөйләр, — тине. Байғужа минең алға котелок менән картуф һәм сусҡа итенән бешерелгән аш ҡуйҙы. Мин ашарға башланым. Бик тәмле тойолдо. Тегендә сәй алдында ашаған тәмле нәмәләр менән тамаҡ туймаған, күрәһең, аппетит тағы ла нығыраҡ асылды. Минең барған мәжлес тураһында, минең күргәндәр тураһында һорашҡан кеше юҡ. Иптәштәрҙең беренсе тапҡыр шундай төҫтә ултырыуҙары миңә уңайһыҙ булды. Ундай ваҡытта ул ҡыҙыҡтарҙы һөйләү урынһыҙ ине.

Һуңға табан миңә мәсьәләне астылар. Һүҙ беҙҙең алғы яҙмыш тураһында барған. Шул мәсьәләлә Новиков менән Индрилдың фекерҙәре айырылышҡан, ҡапма-ҡаршы булғандар. Индрил мәсьәләне былай ҡуйған:

— Былай билдәһеҙ бер маҡсат менән йөрөү туйҙырҙы инде, йә полкка ҡайтырға кәрәк, йә һалдат формаһын ташлап, бөтөнләй йәшеренергә кәрәк, иҙән аҫтына китергә кәрәк!

Э Новиков ике юлдың береһен дә ҡабул итмәгән. Ул үҙ планын тәҡдим иткән:

— һалдаттар араһында һуғышҡа ҡаршы фекер тыуҙырырға кәрәк. Беҙҙең кеүек ҡасып йөрөгән һалдаттарҙы ойошторорға кәрәк. Шунан һуң бер урында һуғышҡа ҡаршы восстание күтәрергә кәрәк. Был восстаниеға фронт буйындағы бөтә крәҫтиәндәр ҡушыласаҡтар. Ул хәрәкәттең киңәйеп китеүе бик мөмкин. Унан һуң һуғышҡа ла сик ҡуйылыр.

Икеһенең дә фекере тормошҡа үткәреү өсөн ауыр. Новиков фекере артыҡ киң майҙанды әсенә ала. Уны беҙ башҡара алабыҙмы, юҡмы? Ул турала уйлау бик ҡыйын.

Мин ике фекерҙең уртаһында ҡалдым. Буранбай менән Байғужа минән башҡа үҙ тарафтарынан бер фекер ҙә әйтә алмайҙар, бер фекергә лә ҡушыла алмайҙар. Буранбай әйтә:

— Новиков артыҡ ебәрелә. Ул беҙҙең ҡулдан киләме ни? Әйҙә йөрөгән тиклем йөрөйөк. Хәҙергә йөрөргә була бит әле. Ҡаптырһалар, тағы ла ябып тоторҙар ҙа тағы ла фронтҡа ебәрерҙәр. Бәлки, уғаса мириньe лә булыр әле, — ти. Байғужа ла шул фекерҙә. Хәҙер инде өс төрлө фекер тыуҙы. Шуларҙан уҙып, мин тағы үҙемә бер айырым фекер тыуҙыра алмайым. Быларҙың барыһы ла беҙҙең бөтә һуғыш буйына кисергән ауырлыҡтарҙан, эҙләнеүҙәрҙән тыуған фекерҙәр. Хәҙер шуларҙан иң уңайлыһын, ҡулдан килә торғанын һайларға кәрәк. Беҙҙең хәҙерге шартта артыҡ пландарҙы үтәү мөмкин түгел. Әгәр ҙә шундай берәй восстание ҡалҡһа, беҙгә ҡушылып китергә мөмкин.

Ысынлап та, ошо сәғәттә беҙҙең алда ауыр бурыс тора. Һаман йөрөп ятабыҙ. Һаман шулай билдәһеҙ маҡсат менән йөрөргә уйлайбыҙ. Был урында Индрил хаҡлы. Ләкин шул хәлдән ҡалай Сығырға, уның өсөн ниндәй юл торорға? — Бына шул турала уйланырға кәрәк. Бөгөнгө хәл шуны талап итә. Әлбиттә, Новиков шунан сығып, мәсьәләне киңәйтеп ебәргән. Уны бит газеталарҙа уҡығанда, уйлағанда ғына еңел, эшләүе ауыр. Әгәр халыҡ стихиялы рәүештә ҡуҙғалып китһә, шул ваҡытта улар араһына инеп, улар араһында ҡотҡо йөрөтөргә, юлдар күрһәтергә беҙҙең ҡулдан килер ине.

Беҙ, аҙағында, шундай фекергә килдек:

— Йөрөүҙе шулай дауам иттерергә, Украина яғына фронтҡа китергә. Уның өсөн, беҙҙең дивизия шул яҡҡа оҙатылған тип, тимер юлдан файҙаланырға.

Беренсенән, унда Австрия армияһы һуғыша, бындағыға ҡарағанда унда фронт йомшаҡ, тиҙәр. Икенсенән, ул яҡта дезертирҙар күп, тиҙәр. Тимер юл һирәк, ҡалалар һирәк, унда йөрөүе уңайлыраҡ, тиҙәр. Беҙ планды шулай ҡорҙоҡ. Бөтә иптәштәр шул фекергә ҡушылдылар. Индрил менән Новиков

ҡул бирештеләр. Бөтәбеҙ ҙә шатландыҡ. Шул уңай менән Индрил:

— Миндә отҡан аҡса күп. Хәҙер лавкаға барам. Нindәй яҡшы нәмә осрай, шуларҙы алам. Байғужа, бына һиңә аҡса, һин бөгөн өс тауыҡ, сусҡа майы һәм картуф тап, был ауыл бай, байрам ваҡыты. Барыһын да табып була, — тип, Байғужаға аҡсалар сығарып бирҙе, үҙе кейенеп, китергә йыйынды:

— Бөгөн мосолман иптәштәрҙең байрамдарын итәбеҙ, иртәгә таң менән юлға!

Ул сығып китте. Новиковтың йөҙө асылды. Мин, моменттан файҙаланып, мәжлестә булған хәлдәрҙе һөйләнем. Ул бик ҡыҙыҡһынып, айырым иғтибар менән тыңланы:

— Бында мосолмандар шулай торалармы? — тип, миңә ғәжәпләнеп һорау бирҙе. Мин уны ышандырҙым. Ул минең, баяғы һүҙемде иғтибарға алып, буғай, күңелде табырға уйланы:

— Юҡ, беҙ һиңә һис асыуланманыҡ. Тик һин булмағас, беҙгә уңайһыҙ булды. Беҙ Индрил менән талашып киттек. Бик ауыр һүҙҙәр әйтештек. Хатта йоҙроҡҡа етә яҙҙыҡ, һин булмағас, Байғужа менән Буранбай бер фекергә лә ҡушылмайҙар. Бына һин ҡайтҡас, мәсьәлә тиҙ хәл ителде. Хәҙер һин буш. Әгәр иптәштәр күнһәләр, вечерға бар. Мин үҙем риза, — тине. Новиков был һүҙҙәрен йөрәгенән, аҡ күңелдән әйтте. Байғужа ла был фекергә ҡушылды:

— Әгәр вечерға барһаң, мин һиңә бик шәп погон бирәм. Сифырҙары еҙҙән ҡойолған, — тип, сығарып бирҙе. Мин уны тағып ҡарағас:

— Офицерға оҡшаның, — тинеләр.

Ә Новиков тағы күтәреп ебәрҙе:

— Байҙарҙа байрам ваҡытында ужин шәп булыр. Исмаһам, бер туйғансы ашап ҡайт. Беҙҙең юл оҙон, һалдат ҡорһағына ярар ул.

Иптәштәр риза булғас, иртәгәге көндөң маҡсаты ла асыҡ булғас, мин Мәрйәмгә биргән вәғәҙәне тыныс күңел менән үтәргә булдым. Киске вечерға әҙерләнә башланым.

Бер аҙҙан Байғужа менән Индрил әллә ни тиклем аҙыҡ күтәреп ҡайттылар. Беҙ төшкән хужа ҡатын поляк ҡатыны ине. Ул беҙҙең ашты үҙе әҙерләргә булды. Индрил миңә мәсьәләне ҡәтғи ҡуйҙы:

— Үҙебеҙҙең әҙерләгән ашты ашамайынса бер ҡайҙа китеү юҡ! — тине. Аш алдынан әҙерәк эсемлек таптылар. Хужа ҡатын әҙерләгән аш бик тәмле булды. Хужаларҙы ла һыйланыҡ. Кәйеф күтәрелде, өй эсе байрам төҫөн алды. Индрил декламацияһына тотондо. Сәғәт киске һигеҙгә тиклем хужаның өй эсен дыу килтерҙек.

Мин, ысын кавалер булып, вечерға Киттем. Бөтә иптәштәрем шаулашып мин килә торған өйгә тиклем оҙаттылар. Индрил яҡты лампа янған тәҙрәгә ҡарағас:

— Бында аристократия! — тип ҡысҡырып ебәрҙе, Новиков уның ауыҙын баҫты. Беҙ бөтәбеҙ ҙә шаҡтай уҡ ҡыҙып алғайныҡ. Мине оҙаттылар, мин бик баҙыҡ аҙымдар менән өйгә индем. Бөтә ҡунаҡтар йыйылғандар. Бик күп ят кешеләр бар. Ҡатын-ҡыҙҙар күп. Мәрйәм мине ҡаршы алды. Ҡыҙыулыҡ менән уның ҡулын ҡаты ҡыҫып күрештем, үҙем дә уңайһыҙландым, Мәрйәм ҡунаҡтарға:

— Был әфәнде фронттан байрамға килгән, беҙҙең ҡунаҡ була, — тип мине таныштырҙы. Шунан һуң мине икенсе залға алып китте. Унда әллә ни тиклем ҡыҙҙар, егеттәр йыйылғандар. Араларында бер нисә ғәскәри кеше, офицер һәм прапорщик Әхмәтьянов та бар. Унда танса бара.

Инеү менән Мәрйәм мине үҙе менән танцевать итергә һораны. Мин үҙ ғүмеремдә танцевать иткәнем юҡ һәм танса мәжлесенә ҡатнашҡаным юҡ. Ҡаушап ҡалдым, ни әйтергә белмәнем.

— Ғәфү итегеҙ, мин, һуңға ҡалам тип, ҡыҙыу килдем. Әҙ генә хәл йыйырға рөхсәт итегеҙ! — тинем. Мәрйәм ҡарышманы. Ул ниндәйҙер бер бик йәш егет менән танцевать итә башланы. Мин яңғыҙым танса ҡараған ҡарсыҡтар, балалар араһында ултырам. Миңә ҡыйын һәм оят булды. Әгәр ҙә вечерҙың былай булырын белһәм, бер аяҡ атламаған булыр инем, тип әстән баш вата башланым, «белмәйем» тиһәң — ярамай, бында танса белмәгән кеше килмәй, «кәйефем юҡ» тиһәң — тағы ла килешмәй. Ниһайәт, башҡа бер хәйлә килде: «Аяғымдан ныҡ ранен булғайным. Ул төҙәлеп етмәгән, докторҙар бейергә ҡушмайҙар». «Ә һуң йөрөргә нисек ҡушалар?» тип, һорау биреүҙәре бик мөмкин. Шулай ҙа һуңғы фекерҙә ҡалам. Танса туҡталды. Бейеүселәр еләҫ алып, ҡултыҡлашып, залда һөйләшеп йөрөй башланылар. Танса бөтөү менән, Мәрйәм, күбәләк кеүек осоп, минең эргәгә килеп етте. Ул хәҙер бөтөнләй башҡа төрлө кейенгән. Көндөҙгө аҡ кейемдәрен ташлап, хәҙер алһыу төҫкә төрөнгән. Түштәрендә, сәстәрендә ҡыйбатлы таштар ялтырайҙар, уның матурлығын тағы ла арттыралар, әкиәттәрҙә һөйләнә торған ен батшаның ҡыҙҙарын күҙ алдына килтерәләр. Ул килеп ултырғас та, мин теге һүҙемде әйтергә уңай момент эҙләй башланым. Унда минең менән бейеү теләге ҙур, ул тәүҙә тәҡдим иткәндә үк уны әйтеп һалды, әҙ-мәҙ һөйләшкәс тә, Мәрйәм:

— Беҙ хәл йыйғанһығыҙҙыр инде, шулай бит? — тине. Мин, бик әрнеүле тауыш менән:

— Тансаға бик ҡыҙығып ултырам да, мөмкин түгел бит әле! — тинем. Уның күҙҙәре ҙурайҙы. Минең ике беләктән тотто.

Күкрәген ҡалҡытып һулыш алды.

— Йә, нисек мөмкин түгел? Әллә кәйефегеҙ юҡмы?

— Кәйеф ничего, бына минең аяҡ менән эш насар бит.

— Аяҡ менән?!.

— Ранен булғайным. Шунда һөйәк араһында снаряд яр-

сыҡтары тороп ҡалғандар, ҡатыраҡ баҫһаң, шулар яфалайҙар, ауырталар.

Мәрйәм ҡулдары менән башын баҫты:

— Снаряд ярсыҡтары ҡалған, тиһегеҙ? Ай-ай, бик ауыр булғандыр бит һеҙгә!.. Бының ауырлығын күҙ алдыма килтереү ҡурҡыныс. Юҡ, юҡ, улай булғас, һеҙгә бейергә бөтөнләй ярамай. Ғәфү итегеҙ. Мин һеҙҙең был хәлегеҙҙе белмәнем, ғәфү итегеҙ!

Шунда уҡ тороп публикаға ҡысҡырҙы:

— Был әфәндене мин тансаға тәҡдим иткәйнем. Аяғы ярамай икән. Мин белмәнем, зинһар, ғәфү итегеҙ!

Миңә бик күп күҙҙәр ҡараны. Мин шундайыраҡ төҫ күрһәтергә тырыштым, шул ваҡыт уң аяҡты бик әкрен генә алға һуҙып ҡуйған булдым.

Мәрйәм тағы минең эргәгә килеп ултырҙы. Тағы үҙенең яңғырауыҡлы һүҙҙәрен түгә башланы. Хәҙер мин уны тыныс күңел менән тыңлай инем. Сөнки хәҙер иптәштәр тураһында күңел тыныс, тансанан да еңел ҡотолдом. Шул урында мин ҡуҙғалмайынса ултырырға хаҡлымын.

Танса ваҡытында Мәрйәм бер кем менән дә танцевать итмәне. Бәр ваҡыт пианино уйнаны. Танса туҡталған ваҡытта, минең эргәгә килде. Тағы ла яңғырауыҡлы һүҙҙәрен түкте. Тансаны бөтөнләй туҡтаттылар. Төрлө уйындарға керештеләр. Мин уларҙың бөтәһенә лә ҡатнаштым. Иң аҙаҡтан һәр кемгә бер нәмә һөйләргә ҡуштылар. Теләһә ниндәй телдә һөйләргә, йырларға, декламация уҡырға, анекдот һөйләргә, үҙ тормошонан бер эпизод һөйләргә мөмкин.

Минең башта тағы ла бер ауыр мәсьәлә тыуҙы. Үҙ-ара һөйләшкәндә руссаны зарарһыҙ һөйләһәм дә, ундай публика алдында сығыу мөмкин түгел. Башҡортса һөйләһәң, көлөрҙәр. Аҙағында бер башҡорт көйөн йырларға булдым. Эстән генә төрлө көйҙәрҙе иҫкә төшөрә башланым. Ауылда саҡта яҡшы йырлай торғайным. Хәҙер икенсе йыл инде фронтта йырлау өсөн ауыҙ ҙа күтәргәнем юҡ.

Берәм-берәм һөйләнеләр, йырланылар, көлдөләр.

Миңә сират килеп етте. Ҡарышманым.

— Мин һеҙгә берегеҙ ҙә ишетмәгән башҡорт йырын йырлайым, — тинем. Мәрйәм башлап ҡул сапты, уның артынан башҡалар ҡул саптылар. Ҡаушауымдан тирләп киттем. Тирләгәс, тамаҡ йомшарып киткәндәй булды. Бик оҙон итеп төрлө боролмалар менән «Буранбай»ҙы йырларға тотондом. Тауыш шыма сыҡты. Шул уңайға күңел нескәреп китте. Ниңәлер йөрәк таша башланы. Мин тауышты күтәргәндән күтәрҙем, моңландырҙым. Көйҙөң аҙағын үҙемдән өҫтәп, моңло тауыштар һуҙып бөтөрҙөм.

«Буранбай» бөтәһенә лә бик ныҡ тәьҫир итте, буғай, оҙаҡ ҡул саптылар. Тағы йырлауымды һорай башланылар. Мәрйәм,

килеп, минең ике ҡулымды алып бик ныҡ ҡыҫты. Миңә тура ҡарап:

— Мин башҡорт йырын беренсе ишетәм. Миңә артыҡ дәрәжәлә тәьҫир итте. Унда әллә ниткән тәрән, кеше аңлап бөтөрмәй торған бер моң ишетелә. Мин музыканы бик яҡшы аңлайым. Һеҙҙең йырығыҙҙы ла аңланым. Ләкин минең өсөн бөтөнләй яңы көй. Зинһар, тағы бер йырлағыҙ.

Мин ялындырманым. Рух күтәрелде. Тағы ла йырлағы килде. Үҙебеҙҙең бөгөнгө яҙмышты уйлап, Новиковтар менән барасаҡ билдәһеҙ ауыр көндәрҙе иҫкә төшөрөп, күңел нескәрҙе, бындағы халыҡ, ниңәлер, ваҡ, түбән тойолдо. Минең шул тулҡынлы йөрәгемдә Мәрйәм генә аңлай, шуның өсөн мин уға ғына йырларға тейешмен, тип хис иттем, шул ташҡынлы хис аҫтында мин тағы ла «Буранбай»ҙы башланым. Мин был юлы үҙемде Мәрйәмдәр өйөндә түгел, ҡайҙалыр киң яланда, һис бер кеше булмаған ерҙә тип белдем. Үҙем белмәгән, ҡайҙалыр йәшеренеп ятҡан көслө тауыштар сыҡҡанда, яңаҡ һөйәктәрем зыңғырланылар, аяҡ табандарына, йылы һыу ҡойған кеүек, йылы йүгерҙе. Ярһып, алғаҫып киттем. Йыр менән бергә күңел илай башланы. Һуңғы йырымды айырым бер тулҡын менән, йөрәктең ҡайҙалыр алғаҫып шашыуы менән, күңелдең ил ауы менән бөтөрҙөм.

Публика был юлы ҡул сапманы, бөтәһе лә баштарын түбән һалғайнылар. Теге залдан сығып, ишек төбөнә йыйылған ҡунаҡтарҙы күрҙем. Улар ҙа тын ине. Мәрйәм атаһының алдына йүгереп барҙы:

— Папа, ой, ой — ғәжәп йырлай. Артыҡ моңло, артыҡ йөрәккә тәьҫир итә. — Шунан һуң ишек төбөндә ҡул саптылар. Бындағылар ҙа уларға ҡушылдылар. Мин китергә, урыныма ултырырға булдым. Ҡапыл ғына китеп булмай. Тәндәр, тартып ҡуйған ҡылдар кеүек, шулай йырлаған урынында ҡатып ҡалғандар. Йөрәк ҡабарынған, әйтәһе һүҙҙе әйтеп булмай. Мин ауатүнә урыныма барып ултырҙым. Тағы ла Мәрйәм килеп етте.

— Һеҙгә бик ауыр булманымы? Тирләгәнһегеҙ, — тип, минең биткә ҡулъяулығын елләтте. Минән һуң йырлаусы булманы. Мостафа килеп, минең ҡулды ҡыҫты:

— Һеҙҙә бик һирәк осрай торған моңло тауыш бар икән, һеҙ йырлай башлағас, беҙ теге залда тын булып ҡалдыҡ. Беҙ әйтәбеҙ: ниндәй тауыш? Кем йырлай? Кем йыры? Үҙем килеп ҡараным. Икенсе йырлағанда бөтә ҡунаҡтарҙы алып сыҡтым.

Мин «рәхмәт» тиеүҙән башҡа бер һүҙ ҙә әйтә алманым. Миңә өлкән ҡунаҡтар яғына сығыуға тәҡдим булды. Мәрйәм ҡапыл ғына ебәрмәне, мине үҙе менән бер бүлмәгә алып инде. Йылы һыу менән йыуындырҙы. Ниндәйҙер һыу бирҙе. Битте одеколон менән сылатты. Шунан һуң шунда диванға ултырып хәл йыйырға ҡушты. Үҙе сығып китте.

Мин йыр менән иҫергәнмен. Минең баш хәҙер бер нәмә лә уйламай. Гүйә, дыңғырлауыҡлы арбала оҙаҡ юлдан килгән юл-

сы кеүекмен. Хәҙер мине йырларға ҡушһалар, ауыҙ асырға ла мөмкин түгел. Баяғы йырҙар, гүйә, шаулап үтеп киткән йәшенле, дауыллы ямғыр кеүек үтеп киттеләр. Ямғыр һуңындағы тын һауа кеүек, хәҙер минең баш тын, күңел буш, йөрәк талғын ғына тибә. Мин бүлмәлә янғыҙым байтаҡ ултырҙым. Ниңәлер, вечер залында шау-шыу тынды. Бер аҙҙан Мәрйәм инде:

— Мин бөтәһен дә оҙаттым. Хәҙер инде һеҙҙе ҡунаҡтар бүлмәһенә алып инәм. Әсәйем һеҙҙе бик ныҡ һораны. Беҙҙең кәйефегеҙ нисек? — тип, минең эргәгә килеп ултырҙы. Йәш ваҡытымда ла, фронтта ла һис бер йылмайыу һәм иркәләү күрмәгән күңел йомшарып китте. Үҙемде бала кеүек һиҙҙем. Шул урында ултырғы, бик оҙаҡ ултырғы килде. Шул минут минең йөрәк тағы ла тулҡынланды, йәберһенгән балалар кеүек, эскә йыйылган бөтә ауыр төйөндәрҙе сиске, йөрәгемдең бөтә киңлеген асып, Мәрйәмгә бөтәһен дә теҙеп, һөйләп бирге килде. Ләкин Мәрйәм уға ирек бирмәне. Ул үҙ йөрәген миңә һөйләргә башланы:

— Мин бөгөн шундай настроениела, миндә ул үҙ ғүмеремдә булғаны юҡ. Мин һеҙҙең йырығыҙҙа ниндәйҙер бер айырым кешелек зарын, шуның менән бергә һуғыш дәһшәтен кисерҙем. Мин хәҙер уны тасуир итә алмайым. Шуларҙы музыкаға һалғы, музыкала уйнағы килә. Мин шуларҙың бөтәһен дә өйрәнер инем. Ләкин һеҙ китәһегеҙ. Беҙ киткәс, ул йырҙы, ул моңдо мин шул тиклем һағынырмын, хәҙер үк мин уны һиҙәм!

Мәрйәмдең был һүҙҙәренә яуап биреүҙән мин ғажиз инем. Мәрйәм миндәге ул асыҡлыҡты үҙе ҡапланы. Минән адресымды ҡалдырыуҙы һораны. Минең тарафтан уға бер төрлө лә адрес биреү мөмкин түгел ине. Сөнки беҙ бөгөн бында, иртәгә тегендә.

— Беҙ бынан күсәбеҙ. Беҙҙең частың ҡайҙа барыуы мәғлүм түгел. Беҙ үҙ адресығыҙҙы бирегеҙ. Билдәле ергә урынлашыу менән, һеҙгә, һис кисекмәй, хат яҙырға һүҙ бирәм.

Мәрйәм минең бөтә һүҙгә ышанды. Ул урынынан етеҙ генә ҡуҙғалды ла өҫтәл тартмаһынан матур тышлы бер кеҫә дәфтәре алды. Бик ашығып, ғасаби рәүештә яҙа башланы. Шунан һуң теге дәфтәрҙе түш кеҫәһенә тыҡты:

— Был дәфтәр һеҙгә иҫтәлек булыр. Шунда адресымды яҙҙым. Хәҙергә уҡымағыҙ. Беҙҙән киткәс, юлда ғына уҡырһығыҙ. Шулаймы?

Әлбиттә, мин дәфтәргә ҡағылманым. Ул арала Мәрйәмдең әсәһе инде:

— Унда ужинға көтәбеҙ. Мәрйәм, ҡунағыңды алып сыҡ, — тине, туҡталып торманы, ишектән сығып китте.

Беҙ ҡунаҡтар эргәһенә ингәндә, шаулы һүҙҙәр бара, улар шаҡтай ҡыҙып алғайнылар, бәхәс һуғыш тураһында бара ине. Беҙҙең хужа Мостафа, ҡыҙып-ҡыҙып, йөрәгенән һөйләй:

— Беҙ хурлыҡлы рәүештә еңелеп ҡалырға тейеш түгел. Шундай ваҡытта дошман менән солох тураһында һөйләшеү дипломатия донъяһында күтәрә алмаҫлыҡ оят булыр. Әгәр беҙ был фронтта еңелгәнбеҙ икән, беҙҙең союзниктар көслөләр. Улар ярҙамға килергә тейештәр. Һәр хәлдә беҙ немецтарҙы баштарын күтәрә алмаҫлыҡ дәрәжәлә еңергә, иҙергә тейешбеҙ. Был беҙҙең хәлебеҙҙән килә.

Уға ҡаршы түрҙә ултырған таҙа, йыуан ҡорһаҡлы, ялтыр башлы берәү, күҙендәге пенснеһын төҙәтеп, һалҡын ҡан менән генә:

— Мин һеҙҙе бик яҡшы аңлайым. Хатта һеҙҙең фекерҙе уртаҡлашам. Ләкин был — мәсьәләнең бер яғы ғына. Бына икенсе яғын онотторға ярамай. Хәҙер беҙ металлургия әлкәһендә бик ҙур кризис кисерәбеҙ. Металһыҙ ҡорал эшләп булмай. Һуғыш көткән мөҙҙәттән оҙаҡҡа һуҙылды. Запас бөттө. Үҙебеҙҙә металлургия сәнәғәте йомшаҡ. Ул эске кәрәк өсөн, бигерәген һуғыш кәрәге өсөн булған продукцияны бирә алмай. Хәҙерге ваҡытта ситтән сығарыу заемға бәйләнгән. Былай ҙа һуғыш бурысы миллиард менән иҫәпләнә. Һуғыш ваҡытындағы договорҙарҙың бөтәһе лә кабалаға бәйләнгән була. Һуғыш һуңында ул беҙгә яҡшы һөҙөмтә бирмәҫ. Унан һуң шуны онотторға ярамай: халыҡ араһында һуғышҡа ҡаршы рух үҫә. Эшселәр араһында революцион хәрәкәт көсәйә. Әгәр ҙә беҙ һуғышты һуҙһаҡ, бына шул яҡтан да сәлби һөҙөмтә килеп сығыуы бик мөмкин. Һуғыш шундай нәмә ул: тактик һәм стратегик яҡтан да тиҙ эшләнергә, уның уңышлы яғы ла, уңышһыҙ яғы ла бик тиҙ хәл ителергә тейеш. Хәҙерге заман шуны талап итә.

Был кеше тигеҙ, һалҡын тауыш менән, йөҙөнә һис бер төрлө кисереш сығармайынса һөйләне. Һүҙенең аҙағында ла һис бер үҙгәреш яһаманы. Уны бөтәһе лә тын тыңланылар. Көндөҙ беҙҙең менән мәжлестә булған поручик бик ауыр көрһөнөп:

— Да, ауыр хәл ителә торған мәсьәлә!.. — тип ҡуйҙы. Башҡалар ҙа ул турала һүҙ алманылар. Мәжлестә ауыр настроение тыуҙы. Быларҙың һуғыш тураһында барған бәхәстәре минең өсөн шул тиклем асыҡ һәм аңлайышлы ине, мин поручиктың «ауыр хәл ителә торған мәсьәлә» тигән һүҙенә үҙемдән һөҙөмтә бирергә башланым. Новиковтың: «Һалдаттар араһында һуғышҡа ҡаршы фекерҙе көсәйтергә кәрәк, һуғышҡа ҡаршы восстание яһарға кәрәк, уға фронт буйындағы крәҫтиәндәрҙе тартырға кәрәк», — тигән фекерен быларҙың «ауыр хәл ителә торған мәсьәлә»—ләренә бәйләп алып киттем. Бында был мәжлес халҡы фекеренең килеп туҡталған ере менән Новиковтың һуҙып алып киткән фекере шул тиклем логик яҡтан бәйләнәләр ки, гүйә, Новиков ошо мәжлестә һөйләгән ораторҙың бөгөн һөйләгән һүҙен ишеткән дә шуны үҙ файҙаһына бороп ебәргән. Башта Новиков күтәргән мәсьәлә минең өсөн хәл ителмәй торған утопик мәсьәлә ине. Был мәжлестә ул минең өсөн асыҡ

хәл ителде. Һуғыш һуҙылған тәҡдирҙә, унын һуңғы оратор һөйләгән һөҙөмтә менән бөтәсәгенә асыҡ фекер тыуҙы. Һуғышта күргән бөтә ауырлыҡтарға, трагедияларға, шул арҡала беҙҙә тыуған фекерҙәргә, беҙҙең әҙләнеүҙәргә минең өсөн ошо мәжлестә йомғаҡ яһалды. Шул минут миндә ошонда ишеткән, үҙемдә тыуған фекерҙәрҙе, тиҙерәк ҡайтып, Новиковҡа һөйләргә теләк тыуҙы.

Башта, тәү күргәндә, бындағы кешеләр бик өлкән, аҡыллы, культуралы булып күренгәйнеләр. Мин уларҙың бөйөклөктәре алдында ҡаушап ҡалғайным. Мин үҙемде бында ултырырға лайыҡ кеше түгел, ғәйет айҡанлы аңлашылмау арҡаһында ғына килеп эләккән бер кеше, тип һанағайным. Быларҙың һуғыш тураһындағы фекерҙәрен тыңлағас, улар минең алдымда ваҡ һәм ярҙамһыҙ кешеләр кеүек булып ҡалдылар. Мин үҙемде шундай кеше итеп һиҙҙем. Үҙебеҙҙең нисә көндәр буйы фронттан ҡасып, ауылдарҙа, урмандарҙа ҡасып, йәшеренеп йөрөүебеҙҙе, һуғыш арҡаһында килеп сыҡҡан законлы бер аҙым, ул аҙымда бер беҙ генә түгел, беҙҙең ишеләрҙең күплегенә, меңләгән армия икәнлегенә төшөндөм.

Ханымдар тарафынан тәҡдим булды:

— Һуғыш тураһында һөйләмәҫкә, ҡатындар ҙа ҡатнаша торған башҡа турала һөйләшергә.

Был тәҡдим мәжлесте күтәреп ебәрҙе. Гүйә, аҙашҡан кешенең юлы һәләкәтле бейек ярға килеп туҡталғас, ҡайҙа барырға белмәй аптырап торғанда:

— Алда юл юҡ. Һәләк булырһың, артыңа ҡайырыл! — тигән тәҡдим һуңында, артҡа әйләнгәне өсөн ҡыуанған юлсы кеүек, бер яһалма тауыш күтәрҙеләр. Ҙур өмөт бәйләнгән уңышһыҙ юл һуңындағы көсһөҙ һылтау кеүек, һуғыш тураһындағы хәл ителмәй ҡалған фекер был теманың ханымдарға күңелһеҙ булыу һылтауы менән ҡапланды.

Ужин алдынан яңынан эсемлектәр килде. Тост артынан тост күтәрҙеләр. Асыҡ ҡалған фекерҙәрҙе эсемлек менән күмделәр.

Төнгө сәғәт бер ине. Ҡунаҡтар тарала башланылар. Мин хужалар менән иҫәнләшеп китергә йыйынғанда, Мәрйәм килде. Мине бер мөйөшкә алып:

— Һеҙгә ҡайтырға алыҫ булһа, беҙҙә ҡунығыҙ, хәҙер урын әҙерләтәбеҙ, — тине. Мин был тәҡдимгә күнмәнем, һылтау таптым.

—г Ул ваҡыт иртәгә завтракка килегеҙ! — тине. Уларҙың завтрағы ваҡытында беҙ инде әллә ҡайҙа, юлда буласаҡ кешеләр. Мин уныһын Мәрйәмдән йәшермәнем:

— Беҙ бөгөн таңдан китәбеҙ. Завтрак ваҡытында беҙ юлда булырбыҙ инде. Беләһегеҙ бит, беҙ хәрби кешеләр, — тинем. Минең был һүҙемә Мәрйәм туңып ҡалды. Күҙҙәрен бер нөктәгә терәп ҡатып ҡалды.

— Улай булғас, улай булғас... ни эшләйбеҙ инде?..

— Шулай, хәҙергә хуш булаһығыҙ! Хөрмәтегеҙгә рәхмәт! Байрам күңелле булды, — тинем. Ул минең һуңғы һүҙемде хәрәкәтһеҙ тыңланы. Шул ваҡыт ул ниндәйҙер эске тойғо менән минең ҡулдарҙы ҡаты итеп ҡыҫып торҙо. Ике арала һүҙ өҙөлдө. Шунан һуң Мәрйәм, ҡапыл һиҫкәнеп, күтәрелеп китте:

— Бөгөн минең һеҙҙе ебәргем килмәй. Һис ебәргем килмәй. Әгәр мөмкин булһа, бөгөн генә ҡалығыҙ! Бөгөн генә!

— Ғәфү итегеҙ! Мөмкин түгел!

— Аһ, мин ҡалай бәхетһеҙмен! Мин һеҙҙе байрам бөткәнсе торор тип уйлағайным...

Тағы ниҙер әйтергә уйланы. Әйтә алманы. Башын түбән баҫты. Мин китеүемде иҫкәртеү өсөн:

— Шулай, хәҙергә хуш булып тороғоҙ, Мәрйәм туташ! Бәлки, юл тура килһә, тағы ла килеп сығырбыҙ, кем белә? Адресығыҙ буйынса мин һәр ваҡыт хат яҙып торормон, — тинем. Мөрйәм, тауышын үҙгәртеп, ярым илаған, ҡалтыраған тауыш менән:

— Һеҙ тағы һуғышҡа китәһегеҙме?

— Билдәле, шулай инде.

— Аһ!.. Ниндәй ҡурҡыныс! Һеҙ һуғышҡа бармағыҙ! Үлерһегеҙ. Һеҙ, ҡалай ҙа булһа, һуғышҡа инмәҫкә тырышығыҙ!

Мин уға яуап ҡайтарманым. Ҡунаҡтар китеп бөткәйнеләр. Мин дә ҡәтғи рәүештә китергә булдым. Ҡул бирҙем. Ул да ҡулын бирҙе. Шул көйөнсә беҙ парадныйға сыҡтыҡ. Мин тағы ла иҫәнләштем. Тағы яңынан ҡул бирҙем. Мин баҫҡыстан төшкәс, ул, ишектән тороп:

— Булат әфәнде, һеҙ хат яҙығыҙ! Мин көтөрмөн, — тине. Ул баҫҡыс төбөндә ҡалды. Мин аҙымдарҙы ашыҡтырҙым. Мин юл буйынса Мәрйәм тураһында уйлап ҡайттым. Яңы танышҡан, белмәгән бер кешегә уның шул әҙ ваҡыт эсендә үҙләшеүенә, бөтә йөрәген асыуына, иҫәнләшкәндә һуғыш ауырлығын уртаҡ лашыуына һис бер мәғәнә бирә алманым. Ләкин ул яҡын, үҙенең эске тойғоһо менән яҡын бер кеше булып ҡалды.

## ЕГЕРМЕ БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

Ун биш көн инде беҙ тимер юлда сәйәхәт итәбеҙ. Поездан поезға ултырабыҙ, һаман алға алған юлды дауам иттерәбеҙ. Беҙ поездың береһен дә һайлап тормайбыҙ. Почтовый булһа ла, санитарный булһа ла ярай, — тик беҙгә эләгеү генә шарт. Шулай уҡ вагондарҙы ла һайлап тороу юҡ. Әгәр ҙә пассажирский вагондар тура килмәһә, күмер вагондарында йәки площадкаларҙа, йәки бөтөнләй асыҡ вагондарҙа барабыҙ. Беҙҙең өшөгән саҡтар ҙа булды. Иптәштәрҙең поездан тороп ҡалған саҡтары ла булды. Барған саҡта разъездарҙа ла төшөрөп ҡалдырғыланылар. Тимер юл буйлап, берәр, икешәр станция йәйәү барған саҡтарыбыҙ ҙа булды.

Ул ҡыйынлыҡтарҙың береһе лә беҙҙе туҡтатманылар. Беҙ һаман юлыбыҙҙы, барыуыбыҙҙы белдек. Иптәштәребеҙҙең береһе ҡалһа, беҙ алғы станцияларҙың береһендә төшөп, көтөп алдыҡ. Сөнки беҙ алдан уҡ шулай һөйләшкәнбеҙ, һүҙ беркеткәнбеҙ. Шуның өсөн дә ҡалған иптәш беҙҙе алғы станцияларҙың береһендә тыныс күңел менән табып ала һәм табыуына ышана ала.

Беҙ юлда Индрил менән шундай хәлгә күберәк осраныҡ. Индрил — бик теремек, һәр нәмәне алдан күрә торған кеше. Ләкин уның бер йомшаҡлығы бар. Ул, шаулап янған утты, урғылып аҡҡан һыуҙы ҡарарға яратҡан кеүек, паровоздарҙың көслө хәрәкәттәрен, йөрөштәрен ҡарап ултырырға ярата. Шуларҙың көстәре менән сихырлана. Станцияларҙа оҙаҡ поезд көткән ваҡыттар булһа, ул маневр яһап йөрөгән паровоздарҙы сәғәттәрсә ҡарап ултыра, ҡайһы ваҡыттарҙа күмәк поездарҙың ҡайнаған ерен күрер өсөн деполарға китеп юғала. Беҙ, уны юғалтһаҡ, шул тирәләрҙән табып алабыҙ.

— Ни ҡарап ҡаттың? Әйҙә китәбеҙ! — тиһәң, ул, һаман да алдында йөрөп ятҡан паровозға ҡарап:

— Яратам да һуң ошоларҙы! Уларҙа сикһеҙ көс ҡайнай, ни тиклем вагондарҙы, ауыр йөктәрҙе бер тапҡыр этәргәндә хәрәкәткә килтерә. Мин уларҙың ут менән, көслө пар менән һулыш алыуҙарын яратам. Кеше аҡылы ниндәй мөғжизәләрҙе барлыҡҡа килтерә бит! — тип фәлсәфә уҡырға тотона. Ул паровоздарҙың көсөн айырым бер дәрт менән тасуир итергә, шуға фәлсәфәүи төҫ бирергә ярата. Шунан һуң ул тағы ла тәрәнерәк, тағы ла ҡатмарлыраҡ фәлсәфәләргә инеп китә:

— Әҙәм аҡылы баш әйләнгес техникаларҙы тыуҙыра. Ләкин шул техникаларҙың күбеһе кешенең үҙен һәләк итеүгә китә. Уйлап ҡараһаң, кеше үҙенең аҡылы менән тыуҙырған техника менән файҙа итә. Бына беҙ ошо поезд менән күпме оҙон юлдарҙы ҡыҫҡарттыҡ. Күпме ауырлыҡтарҙы еңеләйттек. Ул шуның өсөн уйланып сығарылған да. Икенсе яғы менән беҙгә улар зарар һәм үлем килтерәләр. Бына ошо гигант техника — поездар кешеләрҙе һәләк итеү өсөн фронтҡа мылтыҡтар, пулялар, снарядтар, ауыр туптар, бомбалар, газдар ташыйҙар. Шул уҡ кеше һәләк итә торған ҡоралдарҙы кеше аҡылы уйлап сығарған, кеше шуны ҡулы менән эшләп сығара, үҙ ҡулы менән вагондарға тейәй, үҙ ҡулы менән шуларҙы ата, үҙ ҡулы менән үҙ кешеләрен ҡыра, һәләк итә. Бына шуларҙы уйлаһаң, кешенең үҙ ҡулы менән тыуҙырған үҙ трагедияһы күҙ алдына килеп баҫа. Бына быныһына кешенең аҡылы етмәй инде. Бына был урында кеше ахмаҡ, кеше ҡыҙғаныс, үҙе тыуҙырған бөйөк техникаға үҙе хужа була белмәй, уны үҙ файҙаһына егә белмәй. Тәрән мәсьәлә ҡайҙа ята бит ул!

Индрилдың был фәлсәфәһенән Новиков тәүҙә көлә:

— Һин, ғөмүмән, ут, һыу көстәрен яратаһың. Паровоздарҙы маҡтайһың. Шулар тураһында үҙең оҙон фәлсәфә һатаһың. Ә

үҙеңдә һинең көс юҡ. Бына һин шундай аҡыл уйлап тап. Шул кешеләрҙе һәләк итә торган техникаларҙың береһе лә эшләмәһендәр. Ул ваҡытта мин һине ҡулым менән күккә сөйөп йөрөтөрмөн. Ә һин шуларҙы маҡтайһың, яратаһың, үҙең шул көстәрҙән ҡурҡаһың. Тимәк, һин үҙең дә ахмаҡ, үҙең дә ҡыҙғаныс. Уңайһыҙ булһа ла, үткәндәрҙән миҫал алайым. Әгәр ҙә һинең кәңәшең буйынса теге ауылдан уҡ юл алһаҡ, беҙ күптән үк окопта булыр инек. Йәки таралып, ҡуян кеүек ҡурҡып өйҙәребеҙҙә, йәки урмандарҙа ятҡан булыр инек. Бына беҙ бөгөн бында килеп сыҡтыҡ, һин маҡтаған техниканы үҙ файҙабыҙға ектек. Был үҙе бер ирлек, әгәр ҙә һәр кешегә шул техниканы кеше файҙаһына егеү аңы тыуһа ине, был һуғыш та тыумаған булыр ине. Кеше аҡылы тыуҙырған техниканан бер төркөм халыҡ файҙалана. Ә иң күп өлөшө унан зарар, һәләкәт күрә. Күпселек шуны аңламай, сөнки улар ҡара наҙандар. Бына шуларға шуны аңлатырға кәрәк. Әгәр шуны бөтә крәҫтиән аңлаһа ине, бер балаһын да һуғышҡа бирмәҫ ине. Улар аңлайҙар ҙа, ләкин ҡара аң ғына етмәй, уның бөтә серен, нескәлеген, эштең ҡайҙа барыуын аңлатырға кәрәк. Әгәр улар шуны аңлаһалар, һуғышҡа ҡаршы бер шырпы тоҡаныу менән, пожарға өйләндерәсәктәр. Унан һуң фронтта кеше һәләк итә торған бер техникаң да эшләмәҫ. Бына һин шул аҡылды уйлап сығар!..

Берәй вагонда ултырып, тыныс барған саҡтарҙа беҙ шундай әңгәмәләргә керешәбеҙ. Быларҙың күбеһе Индрилдан сыға. Уның паровоз ҡарап, поездан тороп ҡалыуынан килеп сыға. Индрил үҙенең поездан тороп ҡалыу ғәйебен, йомшаҡлығын шундай фәлсәфәләр менән ҡапларға тырыша. Шул арҡала оҙон һүҙҙәр, әңгәмәләр китә. Ул көлкө менән башланған һүҙҙәрҙең аҙағы һуғышҡа килеп терәлә, һуғышты ҡалай бөтөрөү, шуға ҡаршы ниндәй юлдар табыу тураһында баш ватыу менән бөтә. Күп ваҡытта кеше аҡылына һыймаған фантазияларға, утопияларға инеп китәбеҙ. Кеше күҙенә күренмәй торған ғәскәр төҙөп, бөтә батшаларҙы, министрҙарҙы үлтереү, һуғыш ҡоралдары яһаған бөтә заводтарҙы емереү, бөтә һуғыш пароходтарын диңгеҙҙәргә батырыу хыялдары менән янабыҙ. Был хыялға бөтә иптәштәр ҡатнашалар. Байғужа үҙ планын ҡуя:

— Әгәр ҙә мин күҙгә күренмәй торған һалдат булһам, иң тәүҙә батшаның йоҡлаған һарайына инер инем. Уның танауына сиртеп уятыр инем. Ул тирә-яғына ҡараһа, мине күрмәҫ ине. Әгәр ҡурҡып тороп йөрөй башлаһа, осаһына бик ҡаты тибер инем. Әгәр ҙә йығылып китһә, яңынан торғоҙоп, яңынан тибер инем. Әгәр ҡысҡырһа, ауыҙына ҙур колбаса тығыр инем. Шунан әйтер инем: «Ә беҙҙе немецтарҙан туҡматып, һиңә бында ҡарап ятыу рәхәт булғандыр. Йә, үҙеңә туҡмалыу рәхәтме?» Шунан һуң мин уны ҡырҡ төрлө рәүештә язалап, йәшерен ғәскәрҙәрҙең туп төбөнә алып барып, элек бер тапҡыр шартлатып, йөрәген алып, шунан һуң ғына үлтерер инем.

Байғужаның хыялынан көлә башлайҙар. Сөнки ул уны ысын кеүек итеп, төҫөнә кисерештәр сығарып, ҡулдарын болғап, һәр һүҙ араһы һайын бер һүгенеп, йөрәгенән һөйләй. Ҡайһы ваҡыт шашып күтәрелеп китә. Шунан һуң тәрән һулыш алып:

— Их, шул нәмәләрҙе уйлап сығарыусы кеше булһа ине! — тип, башын түбән һалып уйға бата. Байғужаның был ҡиәфәтенә ҡарап:

— Әллә шул турала уйлай ҙа башланыңмы? — тип көлөшә башлайбыҙ.

Шулай шаулашып килеү менән оҙон юлдың ауырлығы һиҙелмәне. Беҙ инде Проскуров тигән ҙур станцияла ҡалырға булдыҡ. Бында ҙур пересыльный пункт бар. Казармалар күп. Бөтә көн көнбайыш фронтҡа килгән һалдаттар, дезертирҙар, ранен булып ауырып терелгәндәр ошо пункт арҡыры үтәләр. Бында явиться булалар, бында кейемдәр бирәләр, ашаталар, эсерәләр, шунда йыйылған һалдаттарҙан запас батальондар төҙөп, фронттарға оҙатып торалар. Бында һәр көн меңдәрсә һалдат килә, меңдәрсә оҙатылып торалар. Шулар араһында буталып, һәр көн фамилияһын алыштырып, кейем алып, уны һатып, алама кейемдәр менән кәсеп иткән, йышылып, шымарып бөткән дезертирҙар, шпаналар күп, беҙ ҙә шулар араһына инеп киттек. Беҙ, үҙебеҙсә, шулар араһында һуғышҡа ҡаршы ҡотҡо таратыу, шуларҙы ойоштороп, көслө бер отряд төҙөү, шул юл менән иң ҙур пересыльный пунктта восстание яһау планы менән ҡалдыҡ. Беҙ ҙә бер нисә тапҡыр яҙылдыҡ, бер нисә тапҡыр кейем һаттыҡ. Алама кейемдәр менән тағы ла казармаларға килеп, икенсе фамилия аҫтында яҙылдыҡ. Шул уҡ ваҡытта беҙ һалдаттар араһында һуғышҡа ҡаршы ҡотҡо таратыу эшен дә алып барҙыҡ. Ләкин эш сыҡмай. Яңы килгән һалдаттарҙы бер-ике тәүлектән ары тотмайҙар. Кейем бирәләр ҙә батальон төҙөйҙәр ҙә оҙаталар, ә унда буталған теге шпаналарҙы ойоштороу мөмкин түгел. Улар һүҙҙе тыңлайҙар, яҡшы табалар, эшкә килә башлаһаң:

— Ни өсөн миңә ҡан ҡойорға? Беҙ фронтта ла күп ҡан ҡойҙоҡ. Мин ҡан ҡоймаҫ өсөн шулай итеп йөрөймөн дә. Бөгөн бында эш боҙола икән, иртәгә икенсе ергә китәм. Беҙ юлын беләбеҙ инде. Ниңә беҙгә кеше өсөн ҡан ҡойорға? Ҡан ҡойорға кәрәк булһа, ана фронтҡа барығыҙ! — тип һүгенергә тотоналар. Улар шул шпана юлында боҙолғандар, уларҙы ипкә килтереү һис мөмкин түгел. Буңға табан улар үҙебеҙгә бәйләнә башланылар. Саҡ тотоп бирмәнеләр.

Шпаналарҙың алған ғәскәри кейемдәрен ала торған, үткәрә торған урындар бар. Беҙ ҙә шпаналар менән шунда булдыҡ. Ғәскәри кейемдәрҙе өҫтән һалып һаттыҡ. Ул үҙе бер спекулянттар ойошмаһы. Ул үҙе бер системаға әүерелгән. Ул ойошмала һәр төрлө профессия кешеһе бар. Һәр төрлө предприятиелары

бар. Бер группаһы йәшерен рәүештә һалдат кейемдәрен һатып ала, бер группаһы кейемдәрен һатҡан һалдаттарға ваҡытлы кейенеү өсөн толчоктан иҫке шинелдәр, салбар, гимнастеркалар, фуражка, бүректәр, алама итек баштары, алама ботинка, обмоткалар, ҡайыштар йыйып килтерәләр. Бер группаһы һалдат кейемдәрен төрлө төҫкә буяй, үҙгәртә, уның өсөн айырым буяу мастерскойҙары бар. Бер группаһы шул буялған һалдат кейемдәренән крәҫтиәндәргә һатыр өсөн төрлө кейемдәр тегәләр. Бер группаһы шул кейемдәрҙе төрлө магазиндарҙа һаталар. Уларҙы һалдат кейеменән эшләнгән тип берәү ҙә әйтмәҫ һәм әйтергә лә мөмкин түгел. Шул уҡ ваҡытта кейемдәрен һатҡан һалдаттар, шпаналар менән сауҙа бара. Улар теге иҫке кейемдәрҙе лә аҡсаға һаталар. Ҡалған аҡсаны ситкә сығармау өсөн үҙҙәрендә бөтә тауар бар: бүлмә бар, фәхишәләр бар. Араҡы, спирттар бар. Һәр төрлө закускалар бар. Хатта, шунда уҡ, мунсаһы ла бар. Шул көн һатылған кейемдәрҙең аҡсалары шул төн, шунда ҡалалар. Ә тегеләр ташландыҡ иҫке шинель, козырекһыҙ алама фуражка, йыртыҡ итек, балаҡһыҙ салбар, ҡорһағы тишелгән гимнастеркалар кейеп, тағы казармаларға китәләр.

Беҙгә был тормош оҡшаманы. Бында эш сығарып булманы. Беҙ ҡалай ғына булһа ла Проскуровтан китергә булдыҡ. Ҡалай китергә, ҡайҙа китергә? Шул мәсьәлә менән баш вата башланыҡ. Ул арала теге шпаналар беҙгә һөжүм башланылар. Сөнки беҙ уларҙың бөтә серҙәрен астыҡ. Беҙ уларға ҡамасаулай башланыҡ. Беҙ уларҙың профессияларынан риза булманыҡ. Бына шул арҡала улар беҙгә ҡаршы ойошоп, эш күрә, бөтә нахаллыҡты, этлекте эшләргә тотондолар. Шул беҙҙе иҫкәрмәҫтән легаль тормошҡа сығырға мәжбүр итте. Уларҙан эҙҙәрҙе йәшереү өсөн, оҙатыла торған батальонға яҙылырға, шулар менән китергә ҡарар бирҙек. Сөнки улар беҙҙе һәр урында, һәр мөйөштә, хатта вокзалдарҙа күҙәтә башланылар. Беҙгә берҙән-бер юл: стройға инеп, һалдаттар менән оҙатылыу ине һәм шулай эшләнек.

## ЕГЕРМЕ ИКЕНСЕ БҮЛЕК

Беҙҙең формировать ителгән батальонды, ни өсөндөр, фронтҡа тура ебәрмәнеләр. Кременчуг ҡалаһына ебәрҙеләр. Кременчуг өйәҙ ҡалаһы, ә үҙендә трамвайҙар йөрөп ята, күңелле генә урын.

Бында килгәс тә, беҙҙе иркен йорттарға урынлаштырҙылар. Һәр көн иртәнге занятиеға йөрөтә башланылар. Кис менән киноларға барабыҙ, урамда йөрөп, сәйханаларҙа булып үткәрәбеҙ. Ләкин беҙҙең бында килеүебеҙ, бында ятыуыбыҙ беҙгә билдәле түгел ине. Тиҙҙән фронтҡа ебәрәләрме, ошонда ҡалдыралар-

мы — бер кем дә белмәй. Өс көн үткәс тә, беҙгә мылтыҡ, патрондар бирҙеләр. Арабыҙҙан алып пулеметтарға өйрәтә башланылар. Беҙ — Индрил, Новиков, мин — өсәүебеҙ телефон курстарына яҙылдыҡ. Байғужа менән Буранбай стройҙа ҡалдылар.

Көндәр үтәләр. Ғәскәри тормош үҙ көйөнсә аға. Фронт тураһында һөйләмәйҙәр. Беҙ иптәштәр менән йыйылып һөйләшәбеҙ:

— Ни эшләргә? Бынан ҡалай ҡотолорға? Китмәгәндә ниндәй эш алып барырға? Әллә фронтҡа оҙатҡансы ошонда ҡалырғамы?

Бындағы тыныс тормош, ниңәлер, йыуашлата төштө. Беҙ ҡырҡа аҙымдарға ҡапыл ғына юл тапмай башланыҡ. Шулай ҙа Индрил һалдаттар араһында үҙенең фәлсәфәһен алып бара. Новиков Индрилдың фәлсәфәһенә асыҡлыҡ бирә. Һәр ваҡыт мәсьәләне, ғәҙәте буйынса, ҡабырғаһы менән ҡуйырға ярата. Һалдаттар Индрил менән Новиковты бик бирелеп тыңлайҙар, бында бөтәһе лә фронтты бер тапҡыр үтеп сыҡҡан һалдаттар. Индрил фәлсәфәһе, Новиков факттары быларға таныш һәм быларҙың йөрәктәренә яҡын нәмәләр.

Шул ваҡыт беҙҙең компанияға Таминко тигән бер Украин һалдаты ҡушылды. Ул күмер шахталарында булған эшсе. Новиков менән былар бик дуҫлаштылар. Таминко ҙур танаулы, ҡалын иренле таҙа бер егет. Уның киң күкрәге алға сығып тора. Һөйләшкәндә, ҡалын, яңғырауыҡлы тауыш менән һөйләй. Һүҙгә йор, кешеләрҙе көлдөрә белә. Шуның менән бергә үҙен дә тота белә. Үҙенең таҙалығы һәм көсө менән маҡтана белә. Ул һәр ваҡыт һөйләгәндә:

— Беҙ рабочий халыҡ... — тип башлап китә. Әгәр ҙә берәй һүҙен ҡеүәтләргә теләһә, шул уҡ «рабочий халыҡ» тигән һүҙен ҡыҫтыра. Уның һалдат массаһын үҙенә ҡарата торған бер сифаты булһа, ул да уның яҡшы йырсы булыуы: ул Украинаның иң матур, иң моңло һәм иң күңелле йырҙарын белә. Ул йырлағанда, стеналар һелкенә. Тауышы шул тиклем көслө булыуға ҡарамаҫтан, тыңлауға бик яғымлы һәм рухлы.

Ул һөйләй торған һүҙен һис кемдән ҡурҡмай һөйләй, әгәр уның берәй һүҙенән насар һөҙөмтә тыуһа, уны, уйын-көлкөгә һабыштырып, тиҙ генә ҡаплай белә. Хәҙер шул Таминко беҙҙең арала, беҙҙең иптәш. Таминко беҙҙең фекергә бөтә йөрәге менән инеп ултырҙы. Шуның менән бергә ул үҙ тарафынан өр-яңы фекерҙәр һөйләй башланы. Уның яңы фекерҙәре беҙҙең хәл ителә алмаған күп мәсьәләләргә асыҡлыҡ бирҙе. Индрилдың фәлсәфәләре реаль төҫкә инә башланылар. Бер ваҡыт Таминко Индрилдың эҙләгән аҡылына шундай ябай бер юл күрһәтте:

— Бөтә завод, фабрикалар, бөтә продукцияны эшләп сығара торған көстәр беҙ — рабочий халыҡ ҡулында. Әгәр ҙә рабочий эшләп сығармаһа, капиталист уступкаға килә. Әгәр ҙә капиталистың арты ныҡ булһа, ул рабочийҙы туҡмарға тотона. Бы-

на бында айырым бер нөктә бар. Шуны нык аңларға кәрәк. Ана һинең теге аҡылыңды бөтә нәмәне, техниканы эшләп сығарған рабочий халыҡ арҡаһында ғына эшләп була. Һин үҙең дә рабочий. Э һин шуны уйлап еткерә алмайһың. Эгәр ҙә бөтә рабочий халыҡ берҙәм баш күтәрһә, теге капиталистар ҡайҙа баралар? Ерһеҙ ярлы крәҫтиән капиталист артынан китмәй. Һуғыштан туйған һалдат күптән капиталист артынан китмәй. Әлеге кешене һәләк итә торған техниканы капиталистарҙың үҙҙәренә табан ҡарата. Шуның менән барыһына ла конец!

Новиков үҙенең фекере менән Таминконың фекере яҡын булғанға шатлана. Минең башта ла шул ине, мин уны әйтеп бөтөрә генә алмай инем. Ә Таминко шуны дөрөҫ әйтә тип, үҙенең фекерҙәренә йомғаҡ яһарға тотона. Индрил быларға ҡаршы килмәй, үҙенең фәлсәфәһенең нигеҙе дөрөҫ икәнлеген иҫбат итергә керешә:

— Йыйып әйткәндә, беҙҙең фекерҙең барыһы бер нәмәгә ҡайтып ҡалалар. Мин мәсьәләнең тамырын асам, ә һеҙ шуны хәл итеү юлдарын эҙләйһегеҙ.

Шул ваҡыт Индрилдың йөҙөнә үҙенән-үҙе ризалыҡ билдәһе сыға. Иптәштәр ҙә уға ҡаршы һөйләмәй башлайҙар. Бәхәстең аҙағы тағы ла уйын-көлкөгә әйләнә. Таминко тағы үҙенең көлкөләре менән бөтә һалдаттарҙы шаулата башлай.

Шулай бер кис шаулап ултырғанда, Буранбай ҡайтып инде. Буранбай күлдәк, ыштан йыуҙырып ала торған урын тапҡайны. Беҙ уның арҡыры йыуҙырып ала инек. Иртәгә йәкшәмбе көн булғас, кис менән мунсаға барыу өсөн үҙебеҙҙең таҙа күлдәк-ыштандарҙы алырға тип ебәргәйнек. Ул бик оҙаҡлап китте. Беҙ шул арҡала ул көн мунсаға ла бара алманыҡ. Буранбай ҡайтып инеү менән, уға Таминко бәйләнде:

— Буранбай, һин бөгөн мунса индерҙең!.. Давай үҙеңде әҙерәк мунса индереп алайыҡ! — тип Буранбайҙы тотоп, өйләндереп йөрөтә башланы. Ә Буранбайҙың төҫөндә ниндәйҙер бер етдилек бар, ул көлмәй, Таминконың шаяртыуына ҡаршы:

— Ҡуй әле, Таминко, шаярма әле! Минең бер ҙә шаярғым килмәй әле! — тип әйләнеп китте. Буранбайҙың был ҡылығы иптәштәргә ғәжәп тойолдо. Индрил ҡысҡырып ебәрҙе:

— Буранбай, әллә һиндә берәй хәл булдымы? Әллә нәмәләреңде юғалттыңмы? Әллә үҙеңде туҡмап ҡайтарҙылармы?

Буранбай һаман да төҫөн үҙгәртмәне. Өҫтөн һалды. «Бышыҡ» иттереп танауын һемгереп алды. Шунан һуң етди төҫ менән:

— Ундай булыуын булманы. Ләкин бик ҡыҙыҡ бер хәлгә осраным. Уны үҙегеҙгә генә һөйләрмен! — тине. Иптәштәргә үҙендә айырым бер сер барлығын белдергән һымаҡ ҡарап ҡуйҙы. Ә Индрил уны аңламаны буғай, Буранбайҙың был һүҙен көлкөгә алды, уны шаяртырға тотондо:

— Әллә тағы маңлайыңа тәре һыҙып ҡайтарҙылармы? — тип юлда булып үткән ваҡиғаһын иҫенә төшөрөп көлә башланы. Буранбайҙың төҫөнә асыу сыҡты:

— Һин һәр ваҡыт шаярырға яратаһың, бер ҙә шаяра торған эш түгел инде! — тип, тәмәке төрөп, тышҡа сыға башланы. Иптәштәр Буранбайҙың был ҡылығына ғәжәпләнделәр. Уйға төштөләр.

— Булат, бар уның артынан сыҡ! Ни һөйләр икән? — тинеләр. Мин ашығып артынан сыҡтым. Ҡараңғы төшкәйне. Беҙ икәү генә стена буйына утындар өҫтөнә барып ултырҙыҡ. Буранбай әкрен генә минең ҡолаҡҡа бышылданы:

— Эй, мин эшселәр араһында булдым. Улар беҙҙең батальонды бер ҙә яратмайҙар икән. Кеҙ бында эшселәрҙе һуйырға килгән һалдаттар, һеҙ үҙ ата-әсәләрегеҙҙе үлтерергә килгән кешеләр, тип, миңә бәйләнделәр. Мин аптырап ҡалдым. Мин әйтәм, беҙ үҙебеҙ һуғышҡа ҡаршы кешеләр, тимен, улар әйтә, һеҙ, тиҙәр, һуғыштан алынып, заказ буйынса бында килтерелгән һалдаттар. Кеҙ батшаның иң тоғро һаҡсылары, тиҙәр, көләләр. Шунан һуң мин үҙебеҙҙең баштан үткән хәлдәрҙе һөйләп бирҙем. Иптәштәрҙең фекерҙәрен әйттем. Улар ҡапыл үҙгәрҙеләр. Бер-береһенә ҡараштылар ҙа мине урталарына алдылар. Шул иптәштәрегеҙ менән беҙҙе таныштырығыҙ тип, минән һорай башланылар. Улар мине бик оҙаҡ ебәрмәнеләр. Бик күп һөйләнеләр. Ҡайтып иптәштәргә әйтергә ҡуштылар. Беләһеңме, Булат? Бөтә эшселәр һуғышҡа ҡаршы икән. Әй батшаны һүгәләр, әй генералдарҙы һүгәләр! Тап беҙҙең һөйләгәндәрҙе һөйләп тик торалар.

Куңғы һүҙҙәрен һөйләгәндә, Буранбай күтәрелеп китте. Үҙенең ҙур эш асыуы менән бер аҙ эреләнгәндәй булып ҡуйҙы. Буранбайҙың хәбәрен тиҙерәк иптәштәргә белдерергә ашыҡтыҡ. Мин, инеп, берәм-берәм тәмәке тартыу һылтауы менән Буранбай эргәһенә сығырға ҡуштым. Киске проверкаға ярты ғына сәғәт ваҡыт ҡалғайны. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ ситкә, аулағыраҡ урынға киттек. Бер ташландыҡ һарай алдында, кирбестәр өҫтөндә Буранбай хәбәрен тыңларға ултырҙыҡ.

Буранбай хәбәре иптәштәргә яңы йән өрҙө. Буранбай арҡыры улар яңы донъя асҡан кеүек булдылар. Бер-бер артлы һорау бирҙеләр. Буранбай ашыҡмай ғына яуап бирҙе. Ҡайһы бер бирә алмаған яуаптарын: «Әйтәм бит, тап беҙҙекен һөйләйҙәр. Таминконың әйткәнен дөрөҫләп кенә торалар», — тип ҡулдарын болғаны. Беҙ киске проверкаға ҡайтырға ашыҡтыҡ. Кәр кем үҙ уйына сумып атланы. Проверка ваҡытында «боже царя храни» урынына Таминко әллә ниндәй Украина йырын һуҙҙы. Проверканан һуң бер айырым кинәйәле һүҙҙәр таптыҡ. Эшселәрҙе бал ҡортона әйләндереп, шул турала Таминко әкиәт рәүешендә алғы эштәр тураһында һөйләргә тотондо. Уны беҙ генә аңлайбыҙ. Башҡалар аңламай ине. Йоҡларға команда

булғас, Новиков менән Таминко, бер-береһенә баштарын яҡын килтереп, бик оҙаҡ һөйләштеләр. Уларға ҡамасаулыҡ итеүсе булманы.

Шул көндән һуң беҙ үҙебеҙҙең батальонды һәм үҙебеҙҙең ролдәрҙе аңланыҡ. Кременчуг тирәһендә эшселәр һәм крәстиәндәр араһында һуғышҡа ҡаршы хәрәкәт тыуа башлағас, бер нисә урында баш күтәреүҙәр ҙә булып алғас, беҙҙе бында тәртип һаҡлау өсөн, эшселәр ауыҙы менән әйткәндә, «эшселәрҙе һуйыр өсөн» ебәргәндәр икән. Был ролдең асылыуы беҙҙең группа өсөн һалдаттар араһында эш йөрөтөргә ҙур һылтау тыуҙырҙы. Кәр бер уңай килгәндә, һәр бер һүҙ араһында һалдаттарға:

— Беҙ, немецтарҙы еңә алмағас, хәҙер үҙ кешеләребеҙҙе үлтереү, атыу өсөн килгәнбеҙ, — тип аңлатырға тотондоҡ. Был метод һалдаттарға яҡшы тәьҫир бирә башланы. Калдаттар араһында ул турала үҙебеҙҙең батальонға ҡаршы фекер таралып өлгөрҙө:

— Эгәр ҙә бер-бер хәл булһа, үҙ кешеләребеҙгә бер пуля ла атасаҡ түгелбеҙ! — тип һөйләнә башланылар. Был урында Индрил фәлсәфәһенә киң майҙан асылды. Ул туп, йәҙрәләр, газдар тураһында тағы ла киңерәк, тағы ла тәьҫирлерәк итеп һөйләргә, уны тағы ла тармаҡландырырға тотондо. Индрилға күп кенә шәкерттәр табылды. Улар һәр урында, һөр ерҙә Индрил фәлсәфәһен һөйләп йөрөй башланылар.

Ә Буранбай һөр төрлө һылтау менән һәр көн эшселәр араһына барҙы. Кәр көн яңы хәбәр алып ҡайтты. Ҡайһы көндә һуғышҡа ҡаршы сығарылған прокламацияларҙы ла итек ҡуңысына, йөйҙәр араһына ҡыҫтырып алып ҡайта башланы. Беҙ уларҙы һалдаттар араһына таратманыҡ. Үҙебеҙ уҡып таныу менән, уны яндырып, ундағы фекерҙәрҙе генә таратыу юлын тоттоҡ. Был методтарҙың барыһы ла Таминко күрһәтеүе буйынса эшләнә. Сөнки Таминко шахтала сағында подпольела күп эшләгәнен һөйләй. Ул турала уның тәжрибәһе ҙур. Шуға күрә ул бындай моментта үҙенең кәңәшенән тыш бер аҙым да яһамаҫҡа, бер нәмә лә эшләмәҫкә ҡуша.

Калдаттар араһында башланған буталыш начальствоға еткән булһа кәрәк, бер көн занятие ваҡытында полковник Зенченко, бөтә батальонды йыйып, һалдаттарға оҙон телмәр һөйләне:

— Братцы! Беҙ тышҡы дошмандар менән һуғыш алып барабыҙ. Беҙ һуғышты дошманды еңгәнгә тиклем алып барасаҡбыҙ. Беҙ шуның өсөн бөйөк ватан алдында ант биргәнбеҙ. Шуның менән беҙ эске тәртипте боҙған эске дошмандар, ватанға хыянат итеүселәр менән дә һуғышырға тейешбеҙ. Немец шпиондары халыҡ араһында беҙҙең ватан зарарына ҡотҡо тараталар. Халыҡты баш күтәрергә саҡыралар. Беҙ ул дошмандар менән аяуһыҙ рәүештә көрәшергә тейешбеҙ. Кеҙ бөйөк ватанды һаҡ-

лау өсөн биргән мөҡәддәс[1] антығыҙҙы онотмағыҙ. Фронтта ҡаһарманлыҡ күрһәткән кеүек, бында ла ҡаһарманлыҡ күрһәтегеҙ. Немец шпиондары һалдаттар араһына килеп инһә, тотоп бирегеҙ. Беҙ уларға мәрхәмәт күрһәтмәбеҙ!

Полковник Зенченко, был һүҙҙәрҙе һөйләгәндә, ауыҙынан күбектәр сәсте. Ат өҫтөндә ҡамсыларын һелтәне. Кемдәрҙелер ат өҫтөнән тотоп ашарҙай булды. Ләкин һалдаттар полковник Зенченконың был ялҡынлы телмәрен һалҡын ҡан менән тыңланылар. Полковник китеп, һалдаттарға тын алырға бирелгәс, тәмәке тартҡан саҡтарында:

— Кем һуң ул эске дошман? Ҡайҙа һуң немец шпиондары? Үҙ ҡалабыҙ эсендә кемдәр менән һуғышырға ҡуша һуң ул? — тигән һорауҙар, һүҙҙәр киттеләр.

Полковник Зенченко һуңында Таминко иптәштәргә тәнбиһ[2] яһаны:

— Был тиктәҫкә һөйләмәй. Берәй хәл барҙыр. Бик һаҡ булырға кәрәк. Беҙҙең арала шпиктар булырға тейеш. Беҙ уны бер ҙә иғтибарға алғаныбыҙ юҡ. Индрил, һин фәлсәфәңде ҡыҫҡа тот! Эште белдереп ҡуймайыҡ. Хәҙер моменттың бик ауыр сағы.

Иптәштәр тын ғына Таминко һүҙен тыңлайҙар. Уны иғтибарға алыуҙы баш эйеп, һүҙһеҙ генә белдерәләр.

Ләкин полковник Зенченконың телмәре ҡырмыҫҡа ояһына таяҡ тыҡҡан кеүек булды. Занятие һуңында гөрләштеләр. Ул гөрләүектәр араһында Индрил фәлсәфәһе менән полковник Зенченко телмәре көрәште. Һуғышҡа бармауҙан, бындағы тормошонан риза булған һалдаттар өндәшмәй, ике фекер уртаһында тороп тыңланылар. Ләкин улар араһында ла тауышланыусылар табылды. Улар ике фекерҙе лә яҡламанылар:

— Беҙ шаулашыу менән эш буламы ни? Бар эш тә юғарынан эшләнә бит. Беҙ түбән чин кешеләре. Уларҙан уҙып, беҙ нимә эшләй алабыҙ. Хәҙергә фронтҡа ебәрмәйҙәр әле. Тыныс ҡына ятырға кәрәк. Әгәр шаулаша башлаһаң, иртәгә үк тотоРҙар ҙа ебәрерҙәр. Ни әйтерһең? Шуға ҡаршы тороп буламы?
— тинеләр. Шуға бер нисә тауыш ҡушылды.

— Дөрөҫ инде, эш беҙҙең ҡулда түгел.

Был һүҙҙәр ҡырҡыу сыҡмайҙар, ниндәйҙер ҡурҡаҡ өн менән яңғырайҙар. Ә полковник Зенченко телмәре һалдаттар араһында барыбер ныҡлы урын ала алманы. Ул:

— Ниңә беҙ үҙ атайҙарыбыҙ менән һуғышабыҙ? — тигән асыҡ, ҡәтғи фекерҙәр менән ҡапландылар.

Яңыраҡ ҡына учебный команда курстарын бөтөрөп, погондарына ике таҫма тағып килгән взвод командиры Захаров һал-

[1] ***Мөҡәддәс*** — изге, бөйөк, хөрмәтле.
[2] ***Тәнбиһ*** — киҫәтеп, иҫкәртеп әйтелгән һүҙ; киҫәтмә, иҫкәртмә.

даттар араһындағы был тауышҡа һалҡын ҡан менән ҡарай алманы. Башта бик тын ғына тыңлап, иҙән буйынса атлап йөрөнө. Үҙенең яңы ғына сығып килгән мыйығын бармаҡтары менән юғары күтәреп ыуҙы. Ҡапыл ғына бер лампа алдында йыйылып, шаулашып ултырған һалдаттар араһына инеп, кәүҙәһен тура тотоп, күҙҙәрен ҙур асып, танау буйынан һөйләй башланы:

— Һеҙ уставты уҡығанһығыҙҙыр бит? Унда ни һөйләй? Раз һеҙ һалдат, уны һис оноторға ярамай. Ә һеҙҙең был һөйләгән һүҙҙәрегеҙ береһе лә уставҡа һыймай. Һеҙ, беренсенән, социалист түгел, һалдат! Икенсенән, һеҙ батшаға хеҙмәт итергә ант иткәнһегеҙ. Шулай булғас, һеҙ устав буйынса ғына һөйләргә тейешлеһегеҙ.

Шул һүҙе һуңында ул бөтәһенә лә һынау менән ҡарап сыҡты. Үҙенең командирлығын күрһәтергә тырышты. Бының һүҙенә бер кем дә яуап бирмәне. Бөтә шау-шыу баҫылды. Ҡайһы берҙәре баштарын түбән баҫып көлдөләр. Ул киткәс, бер-береһенә төртөшөп:

— Ул тағы ла бер таҫма алырға тырыша, — тинеләр. Һүҙҙе икенсегә борҙолар. Ысынлап та, Захаров бөтә унтер-офицерҙар араһында үҙен нығыраҡ күрһәтергә тырышыусы кеше. Ул үҙе йәш, таҙа егет. Уның биттәре ҡып-ҡыҙыл булып, өрөлөп тора. Йөрөгәндә лә офицерҙар кеүек йөрөргә тырыша, ҡабарына, көсәнә. Бөтә энергияһы менән үҙен унтер-офицер итеп күрһәтергә көс түгә. Ул, команда биргән саҡта, ниндәй ҙә булһа берәй офицер тауышына оҡшатырға, үҙенең тауышын үҙгәртергә тырыша. Шул арҡала унан ҡайһы ваҡыт кәзә тауыштары ишетелә. Үҙе йәш булыуға ҡарамаҫтан, ҡарт унтерҙар кеүек һүгенергә, аҡырынырға ярата. Ләкин уның аҡырыныуы бала әтәс кеүек сыға. Шуның өсөн дә ҡарт һалдаттар, уға «бала әтәс» тип ҡушамат биргәндәр. Шуға күрәме, һалдаттар занятие ваҡытында уның приказын үтәһәләр ҙә, занятие һуңында уға ҡарамайҙар, хатта һөйләшмәйҙәр ҙә. Шул арҡала ул үҙен иттә тота. Буш ваҡытында үҙенең койкаһында яңғыҙ ултыра. Һандығынан кескәй генә көҙгөһөн һәм сәс щеткаһын алып, сәсен щеткалай, мыйығын төҙәтә, погондарын рәтләй. Һис булмаһа, тап-таҙа итеген яңынан таҙартырға тотона. Ундай эштәре бөтһә, койкаһына ятып, устав ҡарарға тотона.

Уға бер кем дә ҡамасауламай. Бер кем дә бер һүҙ өндәшмәй, бер кем дә унан йомош һорамай. Әгәр ҙә үҙенең һалдаттарға йомошо төшһә:

— Господа, һеҙҙә шул булмаҫмы икән?.. — тип бик мөләйем һәм мәҙәни итеп һорарға тырыша.

Беҙҙең Таминко уга «эске дошман» тигән исем ҡушты. Әгәр ҙә Захаров тураһында һүҙ сыҡһа:

— Беҙгә унан һаҡ булырға кәрәк, ул иң ҡурҡыныс кеше. Ул хеҙмәт күрһәтеү, начальствоға ярау өсөн беҙҙе түгел, үҙенең

атаһын да атырға мөмкин. Күрәһең бит, ул шуның өсөн яралған, шуның өсөн генә йәшәй. Ундай кешене бер ваҡытта ла фронтҡа ебәрмәйҙәр. Сөнки ул бында, үҙ кешеләрен һуйырға кәрәк, — тип характерланы. Байғужа, Захаров тураһында беҙҙең арала һүҙ сыҡһа:

— Мин унтер-офицерҙар ғазраилы. Фронтта булһа, мин уны күптән ебәргән булыр инем. Тура килһә, бында ла ҡоро ҡалмаç. Ләкин ул бер ҙә йөрөмәй. Ундай кеше үҙенән ҡурҡа ул, — тип, йүткергән һарыҡ кеүек көлөп ала.

Шул рәүештә, беҙҙең батальондың эске тормошонда ике донъя йәшәй, ике донъя фекере көрәшә. Полковник Зенченко телмәре, Захаровтар сынйыры арҡыры, «бар эш тә юғарынан эшләнә бит» тигән ҡурҡаҡ һалдаттар араһында урын тапһа, беҙҙең донъя һәм уның асыҡ фекере: «Ниңә беҙ үҙ атайҙарыбыҙҙы, үҙ кешеләребеҙҙе үлтерәйек?» — тип, һуғышҡа асыҡ протест яһаған һалдаттарҙан башлап, Буранбай аша, һуғышҡа ҡаршы асыу менән янған меңдәрсә эшселәр массаһына барып тоташа. Хәҙер беҙҙең батальон үҙенең тышҡы төҙөлөшө, ҡуйылған маҡсаты менән, «эске дошмандар менән — үҙ атаәсәләре менән һуғышырға» ҡуйылһа, үҙенең эске тормошонда, үҙенең тышҡы тормошона ҡаршы булған фекер менән һуғарыла. Ул һәр көн үçә, киңәйә, Захаровтарға һауаны һәр көн тарайтҡандан-тарайта. Хәҙер Индрил фәлсәфәһе өçтә шауламай, ул хәҙер һалдаттар араһында юл өңгән, ул, яҙғы ҡарҙы тишеп төшкән һыу кеүек, түбән төшә, түбәндән аға, түбәндә йыйыла. Ул киңәйә, ул ҙурая, ләкин уны Захаровтарҙың күҙҙәре үлсәй алмайҙар.

## ЕГЕРМЕ ӨСӨНСӨ БҮЛЕК

Август аҙағы. Һауа ҡыҙыу, урамда саңдар күтәрелгән. Крәçтиәндәр үгеҙ егеп, арбаларына ашлыҡ, алма, картуфтар тейәп баҙарға киләләр. Арба эргәһенән үгеҙ ҡыуып килгән кешеләр — аҡ һаҡаллы ҡарттар, балаларын арбаға ултыртҡан ҡатындар киләләр. Бер генә лә йәш кеше күренмәй. Бер йәш, арыҡ йөҙлө кеше арбаһына ултырып бара. Үгеҙҙәрҙе ун биш йәшлек бер бала ҡыуа, ул сатан, ағас аяҡлы кеше.

Беҙҙең ҡаршыла өс этажлы йорт һалалар. Унда эшләүселәрҙең бөтәһе лә ҡатын-ҡыҙҙар, һалдаткалар. Араларында ир затынан десятниктар, ҡарт мастерҙар ғына күренәләр. Ҡала урамындағы бөтә йәш кешеләр һалдат кейемендә, һалдат формаһында күренәләр.

Мин шуларға ҡарап, һуғыш дәһшәтен уйлап ятам. Йөрәк әсенә, күңел тулҡынлана, тыуған ауыл күҙ алдына килә. Беҙҙең иптәштәр, беҙҙән өлкән ағайҙарҙың бөтәһе лә һуғышта, тик унда ҡарт-ҡоролар, бала-сағалар, бисә-сәсәләр генә ҡалғандар.

Ауылдың иң йәнле кешеләре дәрт менән ташып, ауылға йәм биреп торған кешеләр юҡ, улар ҡан эсендә йөрөйҙәр. Уларҙың күпмеһе иҫән ҡайтыр, күпмеһе ғәрип булып таяҡ таянып ҡайтырҙар. Хаттарға ҡарағанда, әллә лә беҙҙең кескенә ауылдан күп кешеләр юҡ: үлгәндәр, хәбәрһеҙ юғалғандар.

Шул уйҙарга күмелеп ятҡанда, Новиков ҡайтып инде. Ул уңышлы һунарҙан ҡайтҡан кеүек шат, көләс йөҙлө ине. Йөрәгендәге ниндәйҙер бер шатлыгын әйтергә теләгән һымаҡ, ул минең янға килде:

— Бир ҡулыңды! — тине. Ҡул бирҙем, ул миңә бик оҙаҡ әйтер һүҙен әйтә алмай торҙо. Шунан һуң:

— Беләһеңме? Беҙ һине бөгөн ҡунаҡҡа оҙатабыҙ! — тип, яғанан тотоп, ятҡан урынымда мине һелкергә башланы. Мин аптырап ҡалдым:

— Ниндәй ҡунаҡ булыу тағы? Хәҙер байрам түгел бит! — тип, ятҡан урынымдан тороп ултырҙым. Ул миңә ҡаршы ултырып:

— Ә беҙ байрам итергә уйлайбыҙ! — тине, тауышын түбәнәйтеп, айырым бер тулҡын менән һөйләргә тотондо:

— Һеҙ бөгөн Таминко менән икәүләп эшселәр йыйылышына бараһығыҙ. Ләкин һаҡ булырға, шыма йөрөргә кәрәк булыр. Унда һуғыш тураһында һөйләйәсәктәр.

Минең йөрәк йыш-йыш тибә башланы. Быуындар ҡалтырап китте.

— Ниңә мине? — тинем, Новиковҡа ҡарап ҡалдым. Ул аптыраған төҫ менән:

— Әллә барырға теләмәйһеңме?

— Юҡ, ниңә һин түгел, ниңә Индрил түгел?

— Уларҙың һорауҙары шулай. Һеҙ мосолман һалдаттары исеменән бараһығыҙ. Ә Таминко беҙҙең исемдән.

Мин уйға ҡалдым. Батальонда беҙҙән башҡа бөтәһе егерменән мосолман һалдаттары бар. Мин шулар исеменән эшселәр йыйылышына барам.

— Ул турала ни һөйләрмен? Мосолмандар бында бик аҙ бит!

— Һеҙҙең брат фронтта әҙме ни! Һеҙҙең брат Рәсәйҙә әҙ йәшәйме ни? Һеҙҙең брат һуғыш ауырлығын күрмәйме ни?

Новиковтың һуңғы һүҙе яңы ғына уйлаған ауылды күҙ алдына килтерҙе. Минең аптырауым ҡапыл юғалды. Ҡалтырауым бөттө. Шул минут мин үҙемде ана шул халыҡтарҙың бер кешеһе, шуларҙың йөрәктәрен аңлаусы бер кешеһе итеп хис иттем, тулҡынлана башланым. Ысынлап та, бит һуғыштың ауырлығын кисереүсе бер мин генә түгел. Беҙҙең халыҡтың барыһы ла кисерә. Был һуғыштан бер кем дә риза түгел, һуғыштың бөтөүен теләйҙәр, һәр бер килгән хатта шул турала яҙалар. Беҙҙең ауылдан, беҙҙең яҡтарҙан киткән һалдаттар, унда ҡалған ата-әсәләр һуғыштың бөтөүен, тыуған илдәренә ҡайтыуҙарын теләмәйҙәрме ни? Әлбиттә, теләйҙәр. Мин шуны

әйтергә, шуны һөйләргә тейешмен. Мин уларҙың бөтәһен дә аңлайым. Беҙ фронт буйынса Польша, Белоруссия, Украина ауылдарын үттек. Ашлыҡтары сабылған, ауылдары яндырылған, таланған, асыҡ һауала ҡалған ярҙамһыҙ крәҫтиәндәрҙе күрҙек. Беҙ уларҙың да йөрәктәрен беләбеҙ. Беҙ һуғыштың бөтә дәһшәтен, бөтә һәләкәтен күҙ алдына килтерә алабыҙ. Сөнки беҙ үҙебеҙ шул уттар , эсендә булған, пуля, снарядтар аҫтында, ҡанда йөҙгән үлектәр өҫтөндә йөрөгән кешеләр. Әгәр ҙә күңелде бөтә киңлеге менән асып, шул дәһшәттәр тураһында һөйләргә булһа, бөтә кешеләрҙең йөрәктәрен һыҡратырлыҡ итеп һөйләй алабыҙ. Ул турала беҙ бөтә кешеләрҙең әсенгән йөрәктәрен әйтеп бирә алабыҙ.

Шул тулҡынлы тойғолар мине ҡапыл еңеләйтеп ебәрҙеләр. Шул йыйылышҡа тиҙерәк, тиҙерәк барыу теләге тыуҙы. Йөрәк ярһыны:

— Ҡасан була? Ҡасан барабыҙ? — тип Новиковҡа түҙемһеҙлек менән һорау бирҙем. Ул:

— Бөгөн йәкшәмбе көн бит. Шул уңай менән Таминко командирҙан төнгө сәғәт ун бергә тиклем танышыма, яҡташыма ҡунаҡҡа барам тигән һылтау менән рөхсәт һорарға китте, — тине. Шул һүҙҙәрҙе әйткәндә, Новиковтың йөҙө көлә, тештәре йылтырай ине.

Обедтан һуң Буранбай Таминко менән мине артынан эйәртеп, үҙе тротуар буйлап эре атланы. Беҙ фронт буйында шулай Буранбайҙы алдан төшөрөп, уның киң яурынына, оҙон, һалмаҡ аҙымдарына ҡарап, бер нисә йөҙ саҡрым юлдар үтә инек. Бөгөн дә ул Кременчуг урамы буйлап, үҙенең яурынына ҡаратып, Таминко менән беҙҙе эйәртеп алып бара. Ул һөйләшмәй, беҙ һорашмайбыҙ, эстәге тулҡынлы тойғолар аҫтында Буранбай артынан атлайбыҙ.

Көн асыҡ, аяҙ. Ҡояш тура ҡарай. Танауға алма еҫтәре бәреләләр. Ҡайһы бер йорттарҙа ҡойма артында бешеп, ҡыҙарып ултырған алмалар башҡа ваҡыттағы кеүек беҙҙе ҡыҙыҡтырмайҙар. Беҙ уйҙарыбыҙ менән мауығып барабыҙ.

Беҙ, ҡаланың ситенә етәрәк, бер кескәй генә өй алдына туҡталдыҡ. Буранбай беҙҙе ҡалдырып, эскә инде. Таминко, тирә-яғына ҡаранып, ҡулдарын ыуып:

— Ошонда буламы икән? — ти. Тәҙрә арҡыры өй эсенә күҙ һалабыҙ. Унда һис хәрәкәт күренмәй. Тик ишек алдында бер нисә бала шаярып, тауышланып йөрөй, ағастан яһалған мылтыҡтар менән һуғыш уйыны уйнайҙар.

Ишектән урта йәштәрҙәге ҡатын башын тыҡты. Беҙгә ҡарап:

— Һалдаттар, инегеҙ! — тип ҡысҡырҙы. Беҙ ашығып ингәндә, өйҙә башҡа кешеләр юҡ, тик яңғыҙ Буранбай тәмәке тартып ултыра, беҙҙе саҡырып индергән хужа ҡатын янған мейес алдында ухыуатын тотоп, көршәк суйындарҙы әйләндерә баш-

ланы. Өйгә кәбеҫтә һурпаһы еҫе йәйелгән, әҙерәк төтөн дә сыҡҡан. Улар асыҡ тәҙрәнән ингән саф һауа менән бергә танауҙарға әскелтем булып инәләр.

Өй эсе яртылаш ҡаласа, яртылаш ауылса йыйыштырылған. Стена буйында ауыл эскәмйәһе, ишек төбөндә тимер карауат, ул шаршау менән әйләндерелгән. Ике ағас балалар карауаты күренә. Стенаға ҡаҙаҡланған кескәй генә шкафта төрлө һауытһабалар. Өҫтәлдә бер гөл тора. Шуларҙан башҡа өйҙә күҙгә күренгән йыһаз юҡ. Беҙ өйгә ингәс, бик оҙаҡ тын ғына ултырҙыҡ. Көйләшмәй генә тәмәке тарттыҡ. Хужа ҡатын һаман мейес эргәһендә булашты. Беҙ, үҙ-ара әкрен генә бышылдап һөйләшә башлағас, хужа ҡатын, мейескә ҡараған көйөнсә:

— Мин һеҙҙе оҙаҡ көттөрәм, буғай, хәҙер эшемде бөтәм. Бына янған мейескә аштарҙы ултыртырға кәрәк. Шунан һуң китербеҙ, — тине, һаман үҙ эше менән булды. Беҙ Таминко менән тағы ла ҡайҙалыр барырға кәрәклеген белдек. Тәҙрәнән урамға ҡарап, тын ғына ултыра башланыҡ. Көтөү сабырһыҙлығы менән бер-бер артлы тәмәке тарттыҡ. Урамда хәрәкәт юҡ. Өй тирәһендә үҙ йомоштары менән боларып йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙар, уйнаған ваҡ балалар, өй алдында, ҡояш йылыһында ултырған ҡарттар ғына күренәләр. Йәкшәмбе булыуға ҡарамаҫтан, урамда ир заты күренмәй, улар ҡайҙалыр юғалғандар.

Хужа ҡатын мейес ябып, ухыуаттарын урынына ҡуйҙы ла ашығып ҡулдарын йыуа башланы:

— Бер дуҫыбыҙҙың бала исеме туйы була. Унда йыйылғандарҙыр инде. Эле һуң түгел, өлгөрөрбөҙ, — тип ҡулдарын һөрттө. Беҙ Таминко менән, хужа ҡатындың был һүҙенә ғәжәпләнеп, Буранбайға ҡараныҡ. Уның төҫөндә һис үҙгәреш юҡ. Күҙҙәрен өҫтәл аягына текәгән дә түбән ҡарап ултыра. Таминко сыҙаманы, Буранбайҙың ҡолағына үрелеп:

— Йыйылышҡа түгелме ни? — тине. Буранбай хәрәкәтһеҙ:

— Барабыҙ бит. Шунда күрербеҙ, — тине, тағы шул хәлендә ҡалды. Таминко менән беҙ тағы ла ҡараштыҡ. Таминконың йөҙөндә ниндәйҙер йылмайыу күренде. Ул минең сабырһыҙлыҡты һиҙеп:

— Тыныс бул! — тине. Беҙ тағы ла тындыҡ. Хужа ҡатын карауат эргәһендәге шаршау артына инеп кейенә башланы. Шул тынлыҡты ҡыҫҡартыу өсөн, мин тағы тәмәке төрҙөм. Ҡатындың һүҙҙәренән мәғәнә эҙләргә тотондом. Өйҙән сығыр алда хужа ҡатын минең ҡулға сепрәккә төрөлгән бер нәмә бирҙе. Ул икмәк ине. Мин уны тотоп, баҫып ҡарағас, ҡатын тиҙерәк аңлатырға керешгте:

— Хәҙер шулай үҙ икмәгеңде тотоп йөрөргә тура килә. Беҙ унда күмәк булабыҙ бит. Беҙҙе туйҙыра алмаҫ, — тине.

Беҙ бер тыҡрыҡтан сыҡтыҡ та баҡса буйлап киттек. Был юлда бер кем дә юҡ. Тик беҙ генә барабыҙ. Аулаҡ булыуға ҡарамаҫтан, бер кем дә һөйләшмәй. Оҙаҡ барырға тура

килмәне, кескәй генә урамға индек тә бик күп ҡатын-ҡыҙҙар, бала-сағалар шаулашып ултырған ҡапҡаға туҡтаныҡ. Беҙҙе алып барған ҡатын:

— Василий Сергеевич өйҙәме, ҡунаҡтары килгәнме? — тине. Бер нисә тауыш бер юлы:

— Өйҙә, өйҙә, инегеҙ! — тинеләр. Ҡапҡанан ингәс үк, уң яҡтағы бейек баҫҡысҡа күтәрелдек. Мещандарса йыйыштырылған бер өйгә индек. Башлап өйҙәге кешеләр менән Буранбай күреште, уның артынан беҙ күрешеп сыҡтыҡ. Электән таныш кешеләр кеүек, беҙгә түрҙән урын күрһәттеләр. Беҙ башта ҡыйып уҙмай торҙоҡ. Сәстәренә сал инә башлаған, шуға төҫкә бик йәш күренмәгән бер кеше беҙҙең ҡултыҡтарҙан тотоп урындарға ултыртты. Беҙ берәм-берәм ундағы кешеләргә күҙ төшөрөп сыҡтыҡ. Улар ҙа беҙгә ҡаранылар. Ысынлап та, өйҙә байрам төҫө аңҡый, өҫтәл ябылған, өйгә аш еҫтәре таралған, бындағы кешеләр таҙа, яңы кейемдәр кейенгәндәр. Бөтәһе лә ҡунаҡ ҡиәфәтендә ултыралар. Етмәһә өҫтәлдең бер башында «баян» гармун ултыра. Ләкин бындағы кешеләрҙең төҫтәре етди, уларҙың йөҙҙәрендә байрам тантаналары күренмәйҙәр.

Бер ҡаҡса ғына кеше Таминко эргәһенә килеп ултырҙы, яртылаш украинса һөйләшә башланы. Э Таминко уға бөтөнләй украинса яуап ҡайтарырға тотондо. Ҡаҡса кеше күберәк беҙҙең батальон тураһында һорашты. Башҡалар быларҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып тыңланылар. Таминко ашыҡмай ғына батальон, ундағы һалдаттарҙың настроениелары тураһында мәғлүмәт бирҙе. Был турала башҡалар һүҙгә ҡатнашманылар. Бер ҡалын мыйыҡлы, тулы битле, поварға оҡшағаныраҡ берәү хужаға:

— Мәжлесте башларға кәрәк! — тип баш һелкте, хужа тәҙрә төбөнә барып, баш тығып, тыштағыларға ҡысҡырҙы.

— Балалар, һеҙ шаулашып ултырығыҙ! — тине. Өҫтәлде асты. Гармунды сигелгән яғалы бер йәш егеткә бирҙе. Ҡунаҡтар өҫтәлде әйләндереп ултырҙылар. Хужа тағы тәҙрәгә ҡарап:

— Теге эттәр еҫкәнеп йөрөп кенә торалар. Бала-сағаларға ышанып бөтөп булмаҫ, үҙебеҙ ҙә ҡараштырып торорбоҙ. Быға тиклем беҙҙең тирәлә ундай-бындай булғаны юҡ. Ярай әле, бик ваҡытлы йыйылдыҡ. Көнө лә тура килде. Әйҙә, мәжлесте башлағыҙ! — тине.

Өҫтәлгә фрукттар, закускалар ҡуйҙылар, ике тәрилкә икмәк ҡырҡып килтерҙеләр. Ҡыҙыл араҡы һымаҡ эсемлекте стакандарға ҡойҙолар. Гармун тағы ла өҫтәлдең мөйөшөнән урын алды. Тәпәшәк кенә түңәрәк битле бер еврей, әлеге таҙа, повар ҡиәфәтле кешегә ҡарап:

— Иптәш Иваненко, һеҙҙән башларға кәрәк булыр. Башта заводтарҙан һәм армиянан килгән вәкилдәрҙе дөйөм хәл менән таныштырырға кәрәк. Унан һуң конкрет мәсьәләләр тураһында һөйләшербеҙ, — тине. Иваненко урындығы менән бер аҙ

артҡа шыуыша төштө. Хужа урам яғындағы тәҙрәне япты. Берәү ҙә ҡойолған стакандарҙы күтәрмәне. Ҡатын-ҡыҙҙар ишек төбөндәге эскәмйәләргә урынлаштылар. Иваненко һүҙгә башланы:

— Иптәштәр, хәҙерге хәлдең ауырлығын, бөтә эшсе һәм ярлы крәҫтиән массаһының һуғышты бөтөрөү, икмәк һәм ысын ирек өсөн ынтылыуын һәр кем белә. Ошо көндә Питер эшселәре, бөтә ауырлыҡтарға, ҡорбандарға ҡарамаҫтан, икмәк өсөн, солох өсөн геройҙарса көрәш алып баралар. Беҙ революцион пролетариаттың алдынғы авангардының көрәшенә ҡушылырға, ул көрәшкә ярҙам итергә тейешбеҙ. Хәҙерге көндә бөтә Рәсәйҙең һәм бөтә Европаның ундан туғыҙ өлөш халҡы солох өсөн көрәшә. Империализм һуғышының дәһшәте эсендә ҡалған кешелекте тик пролетариат ҡына ҡотҡара аласаҡ һәм пролетариат ҡына был эште башҡара аласаҡ. Империализм һуғышынан тыуған объектив шарттар бөтә кешелек донъяһын баҫҡысҡа ҡуйҙылар: йә тағы ла миллиондарҙы һәләкәткә бирергә, йә мәҙәни илдәрҙә, бөтә власты революцион пролетариат ҡулына тапшырып, социалистик алмашыныуҙы тормошҡа ашырырға. Хәҙер кешелек шул һорау алдында тора. Хәҙерге көндә Рәсәй был һуғыш менән ауыр положениеларға осраны. Был положение хөкүмәттең бөтә механизмын ҡаҡшатты. Хәҙерге көндө Николай II Германия менән сепарат килешеү яһарға теләһә лә, уны булдыра алмай, уның союзниктары Англия, Франция һәм уларҙың былдағы илселәре бөтә көстәре менән һуғышты дауам иттереү политикаһын үткәрәләр, һуғышты Германия, Англия һәм Франция буржуалары алып бара. Улар сит илдәрҙе талау өсөн, ваҡ халыҡтарҙы быуыу өсөн, бөтә донъялағы финанс өҫтөнлөгөн үткәреү өсөн, төрлө илдәрҙәге эшселәрҙе ахмаҡландырыу, уларҙың берлектәрен емереү юлы менән һәләк була торған капиталистик төҙөлөштө ҡотҡарыу өсөн һуғышалар.

Хәҙер батша монархияһының бөтә сереклеге, уның Распутин исеме аҫтында эшләгән фәхшәт шайкалары, Рәсәйҙә еврейҙар, эшселәр, революционерҙар ҡаны менән буялған йыртҡыс батша ғаиләһенең бөтә сере асылды. Рәсәй — хәҙерге көндә Романовтар монархияһының әшәкеһе ҡойған ҡан менән тейәлгән бер арба, ошо көндә уны миллионлаған эшсе, крәҫтиән массаһы һөйрәй, ҡанлы һуғыш эсендә алып бара. Ул хәҙер ер ситенә килгән, ул ауырға, тонсоғорға тейеш. Хәҙер беҙ шул момент алдында торабыҙ. Был эште ойошҡан революцион пролетариат ҡына эшләргә мөмкин. Питер эшселәре шул ауыр хәлде үҙгәртеү өсөн тарихи көрәш алып баралар. Беҙ ҙә үҙебеҙҙең тауышты күрһәтеү өсөн урамдарға сығырға, демонстрациялар яһарға тейешбеҙ. Беҙ һуғыш ауырлығын күргән миллион крәҫтиән массаһын, һугышҡа тартылған миллион һалдаттарҙы үҙ артыбыҙҙан эйәртергә, елкәбеҙҙә булған хурлыҡлы батша монархияһын, уның ҡанлы һуғышын алып ырғытырға тейеш-

без. Революцион пролетариат алдында ҙур ҡыйынлыҡтар торалар. Кешелекте ҡандан ҡотҡарыу өсөн беҙ ул ҡыйынлыҡты күтәрергә тейешбеҙ. Капитализм бомба өҫтөндә тора. Хаҡлыҡ туп тауыштары менән ҡапланған. Бөтә Европа туп, мылтыҡ, ҡан менән биҙәлгән. Хәҙерге көндә фронт буйында ашлыҡтар, ауылдар яндырылалар. Улар урынына миллиондарҙың киҫелгән баштарынан «туғандар ҡәберҙәре» үҫәләр. Был дәһшәткә сик биреү беҙҙең ҡулда, бөтә донъя пролетариаты беҙҙең яҡта, уны беҙ генә башҡарырға тейешбеҙ!

Иваненконың һуңғы һүҙҙәре эстән ҡайнап сыҡтылар. Уның һимеҙ биттәре тиргә күмелделәр. Ул туҡтағас, мәжлес бер аҙ ваҡыт тын ҡалды. Иваненко ҡуъяулығы менән тирҙәрен һөрттө. Урындығы менән өҫтәлгә яҡын килеп, стакандағы эсемлекте эсте. Теге тәпәшәк еврей Кофман кеҫәһенән сәғәтен сығарып ҡараны, бер йәш кенә ҡатынға:

— Беҙгә ун минут. Башҡа вәкилдәр конкрет тәҡдимдәр генә индерерҙәр. Ваҡыт тар. Ашығырға кәрәк! — тине. Ишек төбөндә ултырған простой ғына бер йәш ҡатын сыҡты. Ул өҫтәл эргәһенә килмәне. Арҡаһы менән мейескә һөйәлде. Зәңгәр ҙур күҙҙәрен түбәгә терәп һүҙ башланы:

— Беҙҙең күңелдәгене Иваненко иптәш һөйләп бирҙе. Ул турала мин ни әйтәйем? Бөтәбеҙҙең дә хәл билдәле инде. Бына мин үҙем дә өс бала менән тол ҡалдым. Ирем һуғышта үлде. Үҙемде заводтан ҡыуҙылар. Беҙҙең кеүек эшһеҙҙәрҙең хәле минеке кеүек инде. Беҙгә иң тәүҙә икмәк кәрәк. Беҙ былай ҙа асҡа үлергә яҡынбыҙ. Беҙгә айырым һорап бер нәмә лә бирмәйҙәр. Шуның өсөн дә күмәкләп сығырға кәрәк. Эшселәр араһында күбеһе минең кеүек ҡатын-ҡыҙҙар, һалдаткалар. Улар ярты хаҡҡа, ас эшләйҙәр. Мин шуларҙан һайланып килдем. Уларҙың барыһы ла урамға сығырға әҙер. Минең әйтә торған һүҙем шул, башҡаны әйтмәйем.

Ул үҙенә бирелгән ваҡыттан аҙ һөйләне. Тәҡдимдәр ҡыҫҡа яһалдылар:

— Киләһе йәкшәмбе көн эшселәрҙең һуғышҡа ҡаршы демонстрацияларын ойоштророрға, «икмәк, солох!» лозунгыларын күтәреп сығырға, һалдаттар араһында эшселәрҙең демонстрацияларына ҡаршы сыҡмаҫ өсөн агитация алып барырға!

Мәжлес бөтөү менән, урам яҡ тәҙрә асылды. Йәш егет үҙенең «баян» гармунын һуҙып ебәрҙе. Ике ҡатын таҡмаҡ әйтеп, гармунға бейей башланылар. Урамдағы бала-сағалар ябырылып өйгә инделәр. Өй эсендә шау-шыу башланды.

Заводтарҙан килгән делегаттар шул шау-шыу уйын эсендә үҙ-ара һөйләшәләр, аңлашалар, киләһе йәкшәмбе көн буласаҡ демонстрацияның планы тураһында асыҡлыҡтар индерәләр ине.

Иваненко менән Кофман, мәжлес бөткәс тә, оҙаҡ торманылар. Хужа уларҙы оҙатты. Беҙҙе ҡалдырҙылар. Беҙҙең Таминко мәжлес кешеһе булып китте. Көлкөләр һөйләне,

мәжлесте көлдөрҙө. «Баян»да уйналған дәртле бейеү көйөнә осоп-осоп бейене.

Беҙ ҡайтҡанда, ҡала осона тиклем гармун менән килдек. Уларҙан айырылғас, Буранбайҙы алға төшөрөп, ҡайтыу яғына атланыҡ.

## ЕГЕРМЕ ДҮРТЕНСЕ БҮЛЕК

Эшселәрҙең демонстрация менән урамға сығыуы тураһында хәбәр алып өлгөрмәнек, беҙҙең урамдан бер нисә атлы полицейскийҙар сабып уҙҙылар. Улар артынан биш-алты жандарм йәйәүләп уҙҙы. Урамда халыҡ хәрәкәте башланды. Ләкин беҙгә сығырға приказ юҡ ине әле. Иптәштәр түҙә алмайҙар. Ундабында бәүеләләр. Демонстрация беҙгә күренмәй. Иптәштәр үҙ-ара ғасабиланып һөйләшәләр:

—- Насар ойошторғандар! Полиция көсө менән генә баҫырға уйлайҙар ахыры.

Бер нисә городовой беҙҙең урамға килделәр. Беҙҙең казарма тапҡырынан ҡала халҡын үткәрмәйҙәр. Беҙгә лә казарманан сыҡмаҫҡа приказ булды. Беҙ тәҙрәләрҙән түҙемһеҙлек менән урамға ҡарайбыҙ. Урамда халыҡ үткәрмәй торған городовойҙарҙан башҡа бер кем дә күренмәй. Иптәштәрҙең рухтары төшө башланы:

— Әгәр ҙә беҙ ошо тиклем эш алып барып та, урамга сығып, уның һөҙөмтәһен күрмәһәк, бынан китергә кәрәк!

Дүртенсе ротаға урамға стройға сығырға приказ бирҙеләр. Беҙҙең барыбыҙ ҙа икенсе ротала. Ул ротала ҡырымлы Сәйет Мәмәт тигән бер һалдат бар. Уға ышанып етеп булмай. Сөнки беҙгә яңы ҡатышҡан һалдат. Дүртенсе рота ишек алдына сығып теҙелгәндә, башҡа роталарҙың һалдаттары ҡысҡыралар:

— Ьеҙ фронтҡа киттегеҙме? Ҡара, үҙ кешеләребеҙгә атмағыҙ!

Ул тауыштар беҙҙе шатландырһа, тышҡы команда составының асыуын килтерҙе. Прапорщик әсе тауыш менән ҡысҡырҙы:

— Ундағы безобразиеларҙы туҡтатығыҙ! Ул ниндәй тауыш! Кемдәр улар аҡыралар! Үҙҙәрен тотоп наказание бирегеҙ!

Захаров йүгереп инде. Бөтә һалдаттарға команда бирҙе:

— Тәҙрәнән баштарығыҙҙы алығыҙ! Урындарығыҙға ултырығыҙ!

Уның һүҙен тыңлаусы юҡ. Сөнки унда икенсе рота һалдаттары, улар Захаровтан көләләр.

— Бөтә батальонға команда биреү өсөн һиңә тағы егерме йыл хеҙмәт итергә кәрәк! Команданы үҙ взводыңа бир!

Захаров ҡыҙарҙы. Сыға башланы. Ишек төбөнә еткәс:

— Ярай, мин тейешле урынға әйтермен! — тип бармаҡ янап, тиҙерәк сығыу яғын ҡараны. Бында күмәк көләү тауышы күтәрелде. Беҙ дүртенсе ротаға ниндәй приказ бирелеүен тыңлайбыҙ. Ләкин бында приказ бирелмәне, барыһын да ишек алдына сығарып, строй менән урам буйлап алып киттеләр. Ә беҙ һаман казармала тәҙрә төптәрендә ултырабыҙ.

Беҙ генә түгел, бөтә һалдаттар тулҡынлана башланылар. Дүртенсе ротаның урамға сығыуы тураһында шаулаша башланылар:

— Бөгөн йәкшәмбе көн, ниңә беҙҙе казармала тоталар?

Был шау-шыуҙы баҫыусы булманы, фельдфебель инеп, беҙҙең ротаға сығырға приказ бирҙе. Новиков менән Байғужа иң алдан атылып сыҡтылар. Беҙ башҡалар ағымына әйәреп сыҡтыҡ.

Беҙҙе ике квартал алып киткәс, туҡтатып, беҙҙең рота командиры подпоручик приказ бирҙе:

— Площадҡа сығырға, шунан демонстранттарҙы ҙур урамға, бигерәк тә военный начальник йортона табан, үткәрмәҫкә!

Беҙҙе бик ҡыҙыу алып киттеләр. Беҙ площадҡа еткәндә, бер төркөм эшселәр юғары урамдан площадҡа инә башланылар. Унда полиция кордоны тора, эшселәрҙе үткәрмәҫкә ҡамсы һелтәйҙәр. Ләкин, эшселәр кордонды емереп, площадҡа сығырға тырыштылар. Бер нисә атлы полиция ҡамсы менән эшселәргә һөжүм итә башланылар. Ул арала полициялар өҫтөндә һауаға күтәрелгән таштар күренделәр. Һауаға бер нисә тапҡыр мылтыҡ атылды. Был мылтыҡ тауышы һалдаттарҙы ҡапыл хәрәкәткә килтерҙе:

— Ҡара, ҡара, эшселәрҙе аталар!

Шул ваҡыт демонстрация тулҡыны ҡапыл площадҡа һирпелде. Флагтар менән эшселәр колонналары ағыла башланылар. Икенсе урамда бик әсе ҡатындар тауышы күтәрелде. Сиркәү артындағы тыҡрыҡтан балаларын күтәргән, яулыҡтары төшөп сәстәре туҙған бер ҡатын йүгереп площадҡа сыҡты, демонстрацияға табан йүгерә башланы. Уны бер атлы полиция ебәрмәҫкә тырыша, ул аҡыра.

— Мә, мә, баламды тапа!

Уның артынса тәртипһеҙ рәүештә площадҡа сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙар күренә башланылар. Улар әсе тауыш менән донъя яңғыраталар. Кис береһенең һүҙен аңлап булмай. Улар күбәйҙеләр. Демонстрацияға ҡушыла башланылар. Площадь бер нисә минут эсендә эшселәр менӘн тулды. Улар беҙгә табан килә башланылар. Бер нисә эшсе беҙгә яҡын килделәр:

— Беҙҙе атырға килдегеҙме, һалдат иптәштәр?

Бер атлы полиция уларҙы ҡыуа башланы. Улар, һүгенеп, кире сигенделәр. Ул арала беренсе рота беҙҙең артҡа килеп туҡтаны. Э беҙҙең ротаны демонстранттарҙы әйләндереп алыу өсөн бер рәтләп площадҡа алып киттеләр, берәм-берәм теҙә

башланылар. Ул арала эшселәр араһында берәү юғарыға менеп һөйләргә тотондо. Уның тауышы беҙгә әҙ генә ишетелә. Эшселәр һөйләгән кешегә яҡын һыйыналар. Полиция эшселәрҙе йырып, уртаға инергә теләне, ләкин улар ебәрмәнеләр. Бер нисә полицияны ҡанға туҙҙырып туҡмап сығарҙылар. Беҙгә демонстранттарҙы площадтан ҡыуырға, таратырға приказ булды. Мылтыҡтарҙы ҡулға тотоп, эшселәрҙе ҡамап, штыктар менән ҡыҫырға команда бирҙеләр. Беҙ штыктарҙы алға төҙәп, эшселәргә яҡыная, уларҙы ҡамай башланыҡ, эшселәр араһында шау-шыу башланды. Улар һалдаттарға ҡысҡырырға тотондолар:

— Үҙ туғандарығыҙға атаһығыҙмы?

— Һеҙ мылтыҡтарығыҙҙы беҙгә түгел, үҙ туғандарығыҙҙы ҡанға батырған кешеләргә ҡаршы төҙәгеҙ!

— Мылтыҡтарығыҙҙы ташлағыҙ!

— Долой һуғыш!

— Икмәк!

Тауыштар күбәйҙеләр. Һалдаттар, мылтыҡтарын ергә ҡуя башланылар. Ҡайһы берәүҙәре, мылтыҡтарын тотҡан килеш, урындарында баҫып ҡалдылар, һалдаттар араһында ла:

— Долой һуғыш!

— Даешь мир! — тигән тауыштар күтәрелде. Һалдаттарҙы урталарына һөйрәп индерә башланылар. Бер төркөм эшсе һалдаттар сафы булып артҡа сыҡтылар. Һалдаттар менән эшселәр бутала башланылар. Таминко, Новиков, Индрил өсәүләп саф буйына йүгерҙеләр.

— Штыктарығыҙҙы алығыҙ! Эшселәргә атмағыҙ!

Был арала ҡайҙалыр мылтыҡ тауыштары күтәрелде. Беҙҙең арттағы беренсе рота һалдаттары тәртипһеҙ рәүештә демонстранттар эсенә инәләр. Байғужа ниңәлер ҡыҙып киткән, ул тоҡтомалға һауаға ата, үҙе:

— Долой һуғыш! — тип ҡысҡыра. Эшселәр көләшәләр.

Эшселәр моменттан файҙаландылар. Улар тиҙлек менән һалдаттар араһына буталырға, уларҙы урталарына йыйырға керештеләр. Бер нисә минут эсендә площадь һалдаттар һәм эшселәр менән тулды. Офицерҙар һалдаттар араһынан сығып ситкә тайпылдылар. Военачальник йортона китеп юғалдылар. Унан бер ни тиклем атлы жандармдар, полковник Зенченко һәм бер нисә офицер килде. Халыҡты йырып, демонстранттар араһына инергә теләнеләр. Ләкин уларҙы индермәнеләр.

Бер оратор сығып һөйләй башланы. Ул һуғыш тураһында бер нисә һүҙ әйтеп өлгөрмәне, ҡайҙалыр мылтыҡ тауышы ишетелде. Шуның артынан пулемет тырылдап ҡуйҙы. Уларҙың пулялары бында килмәнеләр. Ул атыш демонстранттар араһында асыу тыуҙырҙы, ораторҙың һүҙен өҙөп, улар военачальник урамына ағыла башланылар. Улар араһында һалдаттар ҙа бергә ағылды. Военачальник йортоноң ҡапҡаһы төбөндә бер нисә ат-

лы полиция күренде. Демонстранттар уларға табан таш яуҙыра башланылар. Улар ниңәлер ҡаршылашманылар. Ҡапҡаға инеп юғалдылар.

Военачальник йорто тураһында шау-шыу тағы күтәрелде:

— Долой һуғыш! Долой ҡанескестәр!

— Икмәк! Мир!.. — тигән лозунгылар йышайҙылар. Ҡайҙандыр демонстранттар өҫтөнә аттылар. Пулялар выжлап үтеп стеналарға бәрелделәр. Ләкин яраланыусы кеше булманы. Был пулялар ҡырмыҫҡа ояһына таяҡ тыҡҡан кеүек булды. Эшселәр таштар менән военачальник йортоноң тәҙрәләренә бәрә башланылар. Һалдаттар араһынан бер нисә тапҡыр мылтыҡтан да ебәрҙеләр. Ул атыу эшселәрҙең рухтарын тағы күтәрҙе. Демонстрация ағымы оло урамға сыҡты. Унда тағы туҡталып ҡалған трамвай эшселәре ҡушылдылар. Тротуар буйынса ҡарарға килгән халыҡтар тулдылар. Оло урамды уҙғас, беҙҙең һалдаттар берәм-берәм тарала башланылар. Эшселәр үҙ төркөмдәре менән үҙ заводтарына йүнәлделәр. Уларға бер урында ла ҡаршылыҡ булманы. Һалдаттарҙан айырылғанда:

— Йәшәһен революцион һалдаттар!

— Беҙ һеҙҙең туғандарығыҙ! Башҡа ваҡытта ла беҙҙең менән булығыҙ! — тип ҡысҡырҙылар.

Һалдаттар киске сәғәт алтыла ғына казармаға йыйылып бөттөләр. Ул көн обед ашауҙың да тәртибе булманы. Ҡайтҡан береһе столовыйға инде. Ашап сыҡты. Һуңғараҡ ҡалғандарға обед та булманы. Ләкин ниңәлер обед тураһында тауыш сығарманылар. Ужин булыуын көттөләр. Шунан һуң берәү ҙә урамға сыҡманы, казармала ҡалдылар. Ул көн казармаға килеүсе офицерҙар ҙа булманы. Тик дежурный офицер ғына казармаларҙы ҡарап сыҡты. Ул да бер һүҙ ҙә өндәшмәне.

Һалдаттар араһында рух үҙгәрҙе. Төркөм-төркөм йыйылып йырларға, шаулап һөйләшергә тотондолар. Бөгөн һалдаттар араһында күберәк фронт һөйләнде:

— Беҙҙе барыбер фронтҡа ебәрерҙәр инде!

— Что нам малярам! Беҙҙең братҡа ҡайҙа ла бер инде!

— Аҡтыҡҡы көндәр, давай гулять итәбеҙ!

— Фронтҡа барабыҙ ҙа һуғышты бөтөрәбеҙ!

Ҡайҙандыр гармун алып килгәндәр. Береһе уйнай, башҡалары бейейҙәр. Ә беҙҙең иптәштәр, һорау була ҡалһа, аранан һис кемде бирмәү тураһында агитация алып баралар. Һәр роталағы ышаныслы кешеләр арҡыры һалдаттар араһына таратталар.

Ул кис менән казарма тәртибе боҙолдо. Проверка һуңында ла, дневальныйҙың һәм дежурныйҙың һүҙенә ҡарамайынса, төнгө ун икегә тиклем шаулаштылар.

## ЕГЕРМЕ БИШЕНСЕ БҮЛЕК

Иртәгеһенә ҡалаға ҡайҙандыр көслө полиция отряды һәм бер эскадрон казачий килде. Беҙҙең батальонды, мылтыҡһыҙниһеҙ генә стройга теҙеп, ҡала ситенә алып сыҡтылар. Һалдаттар араһында шиктәр тыуҙырҙылар:

— Әллә беҙҙе ябырға алып баралармы?

— Әллә атырға уйлайҙармы?

— Ниңә беҙ мылтыҡтарҙы алманыҡ икән?

Полковник Зенченко бер нисә казачий офицер менән аттарҙа беҙҙең эргәгә килделәр. Беҙҙең менән иҫәнләште. Батальонды дүрт мөйөшләп теҙҙерҙе, үҙҙәре уртаға инделәр. Полковник Зенченко ат өҫтөнән һөйләй башланы:

— Братцы! Бөгөн мин һеҙгә әрнегән йөрәк менән, һеҙҙе ҡыҙғанып һөйләйем. Һеҙ фронттарҙа ҡаһарманлыҡ күрһәткән һалдаттар, бында, эске тәртипһеҙлекте баҫыуҙа үҙегеҙҙе юғалтып ҡалдырҙығыҙ. Был беҙҙең маҡтаулы рус һалдаты, рус армияһы өсөн хурлыҡ! Һеҙҙең арағыҙға шпиондар ингән. Беҙҙең алдан тәнбиһ итеүебеҙгә ҡарамаҫтан, шуларҙы тотоп бирмәнегеҙ. Хәҙер бөтә гарнизон алдында ышанысығыҙҙы юғалттығыҙ. Әгәр ҙә арағыҙҙағы хыянатсыларҙы бөгөн үк тотоп бирһәгеҙ, һеҙҙе бында ҡалдырабыҙ. Әгәр ҙә бирмәһәгеҙ, барығыҙҙы ла дисциплинарный батальондарға таратабыҙ. Һеҙгә бер көн ваҡыт! Шул ваҡыт эсендә йә беҙҙән рәхим, йә беҙҙән ҡаты яза!

Һүҙ бөткәс тә, һалдаттар хәрәкәтһеҙ ҡалдылар... Беҙҙе алып ҡайтырға команда булды. Полковник Зенченко казачий офицерҙар менән үҙ юлына китте. Беҙ, йырлашып, ҡалаға ҡайттыҡ.

Казармаға ҡайтып ингәндә, беҙҙең мылтыҡтар юҡ ине. Барыһын да йыйғайнылар. Аҙаҡтан подсумкаларҙы, патрондарҙы тапшырырға ҡуштылар. Беҙҙе ул көн занятиеға алып сыҡманылар. Һалдаттар һорауҙар көтә башланылар. Беҙ аранан кешеләр бирмәү тураһындағы агитацияны тағы ла көсәйттек. Һалдаттар иркенләп ҡалала йөрөһәләр ҙә, беҙ һаман казармала ҡалдыҡ. Сөнки һалдат эсендәге һәр бер хәрәкәтте күҙәтеү, тикшереү — беҙҙең беренсе бурыс ине.

Шул көн эшсе кварталдарҙа көслө тентеү һәм арестар барыуы ишетелде. Һалдаттар араһында ла төрлө хәбәрҙәр йөрөй башланы:

— Архангель яғына, урман эсенә ебәрәләр, имеш...

— Себергә, Ҡытай сигенә оҙаталар, имеш...

Хәҙер фронт тураһында һөйләмәй башланылар. Ҡайҙа ебәрелеү тураһында баш ваттылар.

Бер нисә һалдат, ҡасыу уңайын ҡарап, вокзалға ла барып килделәр. Унда жандармдарҙың күбәйеүен ҡайтып һөйләнеләр. Һалдаттар араһында төрлө фекер тыуҙы. Ҡайһылары үкенәләр.

— Беҙ алдан уҡ әйттек бит. Хәҙер бына һуғыш бөтөр алдында башты юғалттылар...

Башҡалары уларҙан көләләр:

— Унда йәш кәләш көтә торғандыр! Хәҙер киткәс, баш китте инде. Хәҙер үкенеү менән бер файҙа ла сыҡмай. Ничево, ҡайғырма, күмәк булабыҙ бит!

Ул көн бер һалдатты ла сығарманылар, һораманылар.

Иртәгеһенә беҙгә юл өсөн икмәк, сохари һәм консервалар бирҙеләр. Беҙҙең ротаға Дунаевец ҡалаһына запас полкка китергә приказ булды. Башҡа роталарҙы тағы ла ниндәйҙер урындарға ебәрергә булғандар.

— Дунаевец ҡалаһы фронтҡа яҡын. Тимәк, фронтҡа китәбеҙ.

Шул көн кис менән беҙҙе эшелонға тейәнеләр, һәр вагон ишегенә ҡарауыл ҡуйҙылар. Поезд ҡуҙғалғанда, һалдаттар вагон ишегенән:

— Долой һуғыш!

— Даешь мир! — тип һөрән һалдылар. Беҙ тағы ла фронтҡа, тағы ҡан эсенә бара инек. Ләкин хәҙер беҙ тәүҙә оҙатылған кеүек пушка иттәре булып түгел, бәлки, хәҙер беҙ асыҡ фекер, сыныҡҡан көрәш тәжрибәләрен тейәп бара инек.

Хәҙер беҙ һуғыштың бөтә серен, эске маҡсатын беләбеҙ. Хәҙер беҙ ул турала иркен, асыҡ һөйләшәбеҙ. Хәҙер ул турала беҙ көрәш юлын да беләбеҙ. Ул көрәшкә һалдаттарҙы ойоштора ла беләбеҙ.

Сентябрь көндәре. Киске һалҡын ел вагон тишегенән инеп, беҙҙең вагондағы тимер мейестең утын өрә. Индрил утҡа ҡаршы ултырған да һөйләнә:

— Кешеләрҙе һәләк итә торған техниканы үҙ файҙаңа буйһондороу пролетариат ҡулында икән. Мин хәҙер ул аҡылды таптым. Хәҙер пролетариат менән бөтә ер шарының күсәрен өйләндерергә мөмкин һәм өйләндерәсәкбеҙ! — ти. Вагондағылар уның һүҙен тын ғына тыңлайҙар. Ә вагон ишегенән ингән елдәр беҙҙең мейестең ҡыҙыу күмерҙәрен өрәләр...

Беренсе китап бөттө.

# ИКЕНСЕ КИҪӘК

## БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

Беҙ Дунаевец ҡалаһына килеп урынлаштыҡ. Был ҡала тимер юлдан бик алыҫта ята. Шулай булһа ла, унда буҫтау фабрикалары бар икән. Улар хәҙер эшләмәйҙәр. Тирәләрендә эшкәртелмәгән сырье тау-тау булып өйөлгән. Ҡалала казармалар булмау сәбәпле, беҙҙе ошо фабрика корпустарына урынлаштырҙылар.

Беҙ Дунаевец ҡалаһына килгәс, ҡапыл һыуытып ебәрҙе; һалҡынлыҡ егерме градусҡа етте, ҡар төштө. Бындағы кешеләр әйтеүенсә, Украинала ундай һыуыҡтар бик һирәк була икән.

Һалҡындан интегеүебеҙ генә етмәгән, өҫтәүенә беҙгә укол ҡаҙанылар. Тиф ауырыуы тарала башлаған икән дә, был уколды шунан һаҡланыу өсөн һалғандар икән... Индрил уколды ауыр кисерҙе, ана, ул ауырып ята. Ул миңә сәй ҡайнатырға ҡуша.

— Кухняла әҙер ҡайнаған һыу бар, хәҙер килтерәм, — тим.

Минең һүҙҙәрем уның хәтерен ҡалдыра; ул, терһәгенә таянып, ҡалҡына ла, ҙур асылған күҙҙәрен миңә төбәп, һөйләргә керешә:

— Булат, һин мине аңламаның. Кухнянан килтерелгән шыйыҡ сәй ниңә кәрәк миңә? Һин тәмле итеп үҙең ҡайнат. Ана, Висла буйында ҡайнатҡайныҡ бит әле. Ух, тәмле булғайны! Хас шуның һымаҡ итеп ҡайнат.

Индрил бөгөн мине ялҡытып бөттө. Саманан тыш күп һөйләй, эсте бошора. Мин бит инде уны бер һүҙенән үк аңларға күнегеп бөткәнмен. Э ул Висла буйында кисергән әллә ниндәй хәтирәләрҙе иҫкә төшөрөргә тотона ла китә. Төшөнәм мин Индрилдың күңелендәге н — уның, боғорлап ултырған котелокка ҡарап, донъяһын онотоп тораһы, шунан ах та ух килеп тын ала-ала, арҡаһынан атылып тирҙәре сыҡҡансы, тәмле сәй һемергеһе килә.

— Хәҙер ҡайнатабыҙ уны, — тип тынысландырам тегене.

— Сәй ҡайнатыуҙан да еңелерәк нәмә юҡ. — Мин, стенала ғы ниндәйҙер бер нөктәгә тексәйеп, ҡаштарын емереп уйла-

ып ултырған Байғужаның тауышын ишетәм: — Беҙ уны момент әшләй алабыҙ. Тик бынауында ултырып сәй әсеүҙең ни ҡыҙығы бар? Әллә булмаһа...

Индрил инде, һүҙҙең ҡайҙа табан барғанын шунда уҡ шәйләп алып, урынынан ҡалҡынып ултырҙы ла хәлһеҙ ҡулы менән Байғужаның арҡаһына һуғып алды:

— Беләм, беләм. Теге хозяйка өйөнә барып... Байгужаның бөгөн мине һыйлағыһы килә. Әйҙәгеҙ һуң, киттек. Унда йылы, эйе бит, Байғужа?

— Өҫтөнә баҫтың. Мин дә шуны әйтмәксе инем, — тип Байғужа урынынан торҙо. Уның артынса Индрил да тормаҡсы була. Беҙ уға ярҙамға ашығабыҙ, аяғына баҫырға, кейенергә булышабыҙ. Хәлһеҙ ул, тик сер биргеһе килмәй.

— Әйҙә киттек, Булат, бөгөн бит беҙҙең буш көн. Новиков менән Буранбай беҙҙе эҙләп табырҙар әле. Бындағыларға әйтеп китербеҙ.

Байғужа менән беҙ ҙә йөҙҙәребеҙҙе һыта-һыта кейенәбеҙ. Уколдан һуң быуындар ҡатып, көллө тән ауыртып тора. Һәр укол ҡаҙағандан һуң беҙгә ял бирәләр, занятиеларға алып сыҡмайҙар. Беҙҙең бөгөн бына шундай көнөбөҙ. Ә Буранбай менән Новиков кухняла дежурҙа. Шуға ла улар бөгөнгө уколдан ҡотолоп ҡалдылар. Иртәгә ҡаҙатырға тейештәр. Индрил улар өсөн хафалана:

— Беҙ нисек тә ҡотолдоҡ инде. Ул бахырҡайҙарға иртәгә ыҙаланаһы бар...

— Эйе шул, — тип уның һүҙен ҡеүәтләй ҡайышын ҡыҫыбыраҡ быуып булашҡан Байғужа.

Күпселек һалдаттар уколдан һуң сырхаулап яталар. Беҙҙең йыйынғанды күреп, берәүһе хәстәрле тауыш менән әйтә:

— Ҡайҙа бараһығыҙ, обед етә бит. Һеҙгә лә аш алып ҡуйырғамы?

— Ҡайғырмағыҙ, унда бөгөн беҙҙекеләр дежурҙа. Онотмаҫтар әле, — тип тынысландыра уны Индрил.

— Уныһы ла хаҡ.

Беҙ урамға сығабыҙ. Йәш ҡар, күҙҙе сағылдырып, емелдәй. Буран тымған. Шулай ҙа електәргә үтерлек итеп әсе ел өрә. Дунаевең халҡы өсөн бындай һалҡын — бер ҙә генә лә күнегелмәгән хәл. Урал итәктәрендә, Ирәндек буйҙарында шашып ҡоторған аҡман-тоҡман ише бурандарҙы, беҙҙәгеләй шыҡырайтып бөрөп ала торған селләле ҡыштарҙы украиндарҙың ғүмерҙә лә татығандары юҡ. Шуға күрә уларҙың оҙон ҡуңыслы баймалары ла, толоп, тундары ла юҡ. Беҙ бурандар, тынды ҡурып алып бара торған ҡаты һыуыҡтар, бьймалар, тундар, толоптар хаҡында һөйләй башлаһаҡ, улар, әкиәт тыңлағандағы шикелле, ауыҙҙарын асып тыңлайҙар; шунан беҙҙең яҡтағы тормош шарттары хаҡында һорашырға тотоналар. Был тәңгәлдә инде Буранбай айырыуса һүҙгә әүәҫләнә;

күҙҙәрен йомоп алып, хыялға бирелеп, башҡорт далалары, көтөү-көтөү йылҡы, ҡуй малдары, ҡымыҙ, һөт, ит хаҡында, үҙенән дә ҡуша биреп, һөйләп алып китә:

— Беҙҙең яҡта ҡымыҙ, һөт-ҡатыҡты һатыу, һатып алыу тигән нәмә юҡ. Бушлай бирәләр. Итте лә буш ҡына ашаталар. Берәйһе һуғым һуйһа, бөтөн ауылды йыйып һыйлай...

Тыңлаусыларҙың күҙҙәре тоҙҙай була.

— Моғайын, алдайһығыҙҙыр әле. Тотторорҙар бушҡа! Булмаç.

Буранбайға ҡыйын. Сөнки ул ошо урында ғына һүҙенең хаҡлығын тәсдиҡләп[1] бирә алмай. Ул: «Шулай! Ысынлап та, шулай!» — тип ихлас ҡабатлай-ҡабатлай, тәмәке төрөргә керешә.

Шунда әңгәмәлә ҡатнашҡан еврейҙар, баштарын сайҡап-сайҡап, үҙ телдәрендә бәхәсләшеп алып китәләр.

Ҡасан ҡайтып күрербеҙ тип, күптән танһыҡлаған ҡарға кинәнеп баçа-баçа, арҡаларҙың һыҙлағанын да онотоп, алға атлайбыҙ. Һәр кем үҙ уйына бирелгән. Бер мөйөштә ҡайнар пирожки һатыусы еврей ҡарты, һалҡындан бөршәйеп, ҡобараһы осоп тора.

— Москалдәр, ниңә беҙгә һыуыҡ алып килдегеҙ? — тип шаяртырға тырышып өндәшә ул беҙгә.

— Бына, ҡарт, һине беҙҙең яҡҡа алып бараһы ине! — ти уға Байғужа.

Бер мөйөшкә боролғас, ҡаршыға тап булған бер еврей әбейе беҙҙе туҡтатып, ҡапылдан рәхмәт уҡырға тотондо ла китте:

— Бәйбәт егеттәр һеҙ, рәхмәт һеҙгә! — ти ул беҙгә, күкрәгенә усын ҡуйып. Мин, бер ни төшөнмәй, юлдаштарыма ҡарайым.

— Таныны бит, — ти Индрил. — Погром булған көндө беҙ уның өйөндә булғайныҡ бит.

Ныҡлабыраҡ ҡарағас, ҡарсыҡты мин дә таныным.

— Онотмаған өсөн үҙеңә лә рәхмәт, — тим мин, йылмайып.

Ҡарсыҡ менән һүҙҙе артыҡ ҡуйыртмай, ары китәбеҙ. Ул, биленә тиклем бөгөлә-һығыла, беҙгә изге теләктәр теләп, оҙатып ҡала. Был хәл күптән түгел булып үткән хәлдәрҙе минең иçемә төшөрә.

Был ҡалаға килеп урынлашҡас, шулай бер көндө мунсаға барып ҡайттыҡ та, әҙерәк хәл алырға тип, ятып торҙоҡ. Шул мәл урамдан әллә ниндәй шау-шыу ишетелә башланы. Беҙ ғауғаланып йүгереп сыҡтыҡ. Ҡараһаҡ, урам буйлап ҡаластар, колбаса, папирос-маҙар күтәргән һалдаттар тәртипһеҙ рәүештә агыла. Хатта бәғзе берҙәре өр-яңы офицер фуражкалары, башҡа кейем-һалым да ҡосаҡлаған.

[1] ***Тәсдиҡ*** — раçлау һүҙе йәки тамгаһы.

— Ҡайҙан алдығыҙ? — тип һорайбыҙ тегеләрҙән.

— Ҡалала еврей погромы башланды. Лавкаларын талайҙар. Беҙ ҙә шунан алдыҡ, — тине ахылдап төшкән бер һалдат.

Беҙ сауҙа рәттәренә табан ашыҡтыҡ. Урам тулы мәхшәр кеүек халыҡ. Күбеһенсә һалдаттар. Магазиндарға этешә-төртөшә, эркелешеп тулалар, ҡулдарына нимә эләгә — шуны күтәреп сығалар. Гражданский кейемдәге берәү һалдаттарға ҡарап ҡысҡыра:

— Бөтә еврейҙар — немец шпиондары. Туҡмағыҙ еврейҙарҙы! Дунаевецта уларҙың духы ла ҡалмаһын!..

Шулай ҙа уның ҡысҡырыныуҙары һалдаттарҙы ҡотортоп, сәмләндереп ебәрә алмай. Араларынан берәүһе, асыуланып, төкөрөгөн сәсә:

— Ни эшләп әле ул, әллә ниндәй бер вольный, һалдаттар менән командовать итә?

Беҙ аптырашыбыҙҙан бағана кеүек ҡатып торабыҙ. Һәр тарафтан — өйҙәренән, ишек алдарынан илаш, үҙәк өҙгөс ҡыйҡыу-һөрән, ялыныу-ялбарыу тауыштары ишетелеп тора. Быларҙы ишетеү күңелгә бик ауыр, булып ятҡан был вәхшәттең мәғәнәһенә төшөнөү ҡыйын.

Шул ике арала толпаның бер өлөшө баҙар майҙанына ябырылды. Беҙ, ни эшләргә белмәй, был күренешкә шаһит булып ҡаушап торған мәлдә, беҙҙән элегерәк бында килеп өлгөргән Буранбай инде күптән, ниндәйҙер лавкаға инеп, унан ике шешә лимонад менән бер нисә ҡап папирос һелтәп сығырға ла өлгөргән.

— Хужаһы ташлап ҡасҡан, барығыҙ, һеҙ ҙә берәй нәмә эләктереп ҡалығыҙ. Юғиһә, хәҙер ташып бөтөрөрҙәр, — тине ул беҙгә.

Шунда янныбыҙға ҡайҙандыр килеп сыҡҡан Новиков бер талай ваҡыт, әйтер һүҙ тапмағандай, башын сайҡап, уға тишеп ҡарап торҙо ла мөмкин тиклем йомшаҡ итеп әйтте:

— Ташла, Буранбай.

Тегенең үҙе ташларға самаһы булмағанын күргәс, өндәшмәй генә, шешәләрҙе уның ҡулынан тартып алды ла көрткә ырғытты. Оятынан ҡыҙарған Буранбай папиростарҙы аяҡ аҫтына ҡуйҙо.

Беҙ халыҡ араһына барып индек. Һәр ерҙән ҡатын-ҡыҙ, бала-сағаның аһ-зары, сеңләп илашыуы ишетелеп тора. Ҡылынып ятҡан был яуызлыҡҡа нәфрәтләнгән Новиков, һалдаттарҙың бер төркөмөнән икенсеһенә йүгереп, уларҙы өгөтләргә тотондо:

— Туғандар, ни эшләүегеҙ был? Оялығыҙ! Безобразиены ташлағыҙ! Мирный халыҡты ниңә таларға? Еврейҙар ҙа беҙҙең ише кеше бит. Улар араһында ла бедняктар, эшселәр бар. Бынау ҡатындарҙың, балаларҙың ни ғәйептәрен таптығыҙ? Ташлағыҙ, туғандар, ташлағыҙ!..

Һалдаттар уның тирәһенә өйөлөшә башланылар. Бәғзеләре сәлдергән әйберҙәрен шинель сабыуҙары аҫтына, ҡуйындарына йәшерергә тырышып, шым ғына тыҡрыҡтарға инеп күҙҙән юғалыу яғын ҡарайҙар.

Килеш-килбәте менән маклерға оҡшаған берәү шунда уҡ Новиков тирәһенә тупланған төркөм янына килеп етте. Был — бая ғына погром яһарға өндәп йөрөгән оратор ине. Маңлайынан тирен һөртә-һөртә, ул шелтә тоны менән һалдаттарҙы өгөтләргә лә тотондо:

— Туғанҡайҙар, һеҙ эске дошман менән көрәшеүҙең ни икәнен белмәйһегеҙ икән әле. Император хәҙрәттәренә биргән антығыҙҙы оноттоғоҙмо ни? Бында еврейҙар шпионлыҡ итә, немецтарға булыша. Э һеҙ уларҙы яҡларға уйлайһығыҙ. Был бит безобразие.

— Ҡайҙан килгән был начальник тағы ла? — тип уның һүҙен бүлеп ҡысҡырҙы Новиков. — Нимә беҙҙең менән командовать итәһең? Беҙ бында мирный халыҡ менән һуғышырға килмәнек. Марш бынан!

Теге оратор йәнә нимәлер әйтергә тип ауыҙын асҡайны, Новиковтың ярты бот дәүмәле йоҙроғо уның өнөн тыҡты. Шуны ғына көтөп торған шикелле, Байғужа менән тағы бер нисә һалдат тегеңә ташландылар ҙа ҡарға тәгәрәтеп дөмбәҫләргә тотондолар. Новиков араларына төшмәһә, меҫкендең хәле мөшкөл ине.

Бынан ҡуҙғалып китеп, икенсе урамға боролғас, беҙҙе бер ефрейтор ҡыуып етте лә һүҙебеҙгә ҡушылды:

— Дөмбәҫләп бик шәп иттегеҙ теге әҙәм аҡтығын. Ул — маклер, армияға һуғымлыҡ мал йыя. Фамилияһы — Кушнарев. Ҡот осҡос әшәке бәндә! Гел офицерҙар ҙа генералдар тирәһендә генә урала. Охранка агенты, күрәһең. Еврейҙарҙы ене урынына күрә.

— Ярай, дөрөҫ иткәнбеҙ икән улайһа, — тине Новиков шым ғына, башын түбән эйеп барған хәлдә. Ул ефрейтор менән артыҡ сиселеп китеп һөйләшергә ихласлыҡ белдермәне. Шуны тойоп, тегеһе оҙаҡламай беҙҙән айырылып ҡалды.

Шул мәл ҡапыл бер өй алдынан илай-илай бер еврей әбейе килеп сыҡты ла урам ашаһына — беҙгә ҡарай йүгерҙе; алдыбыҙға килеп туҡтап, нимәлер әйтергә теләне, тик әйтмәне, кире боролоп, өйөнә ҡарай тәнтерәкләне. Беҙ уның артынан йүнәлдек. Өйҙән илаш-сырылдаш, иңрәүҙәр ишетелеп тора. Мин беренсе булып барып индем. Күрәм: дүрт һалдат ҙур һандыҡтың аҫтын-өҫкә килтереп тентеп яталар.

— Нимә эҙләйһегеҙ һеҙ бында? — тип һораным. Тегеләр, һүҙемде ҡолаҡтарына ла элмәй, һандыҡты аҡтарыуҙарында булдылар. Шул арала юлдаштарым да килеп инде.

— Туғандар, ни эшләүегеҙ был?!

— Бына әшәке йәһүдтәр араҡыларын йәшергәндәр ҙә бирергә теләмәйҙәр, — тип асыулы һүгенде бер һалдат.

— Минең бер ҡасан да араҡы менән һатыу иткәнем юҡ. Нахаҡтан яла яҡҡандар, — тип һыктаны әбей, беҙгә ҡарап.

Күкрәгенә сабыйын ҡыҫып тотҡан йәш ҡатын, быуынһыҙланып, беҙҙең алдыбыҙға тубыкланды ла күҙ йәше аша былай тип ялбарҙы:

— Билләһи тип әйтәм, беҙҙә бер тамсы ла араҡы булғаны юҡ! Үҙем ауырыу. Ирем әщһеҙ, өҫтәүенә ғәрип. Бына әсәйем ни тапһа, шуның менән туҡланып торабыҙ. Араҡыға түгел, икмәккә лә аҡсабыҙ юҡ.

Был тамаша беҙгә ҡот осҡос ауыр тәьҫир итте. Ҡаны сиктән сығып ҡыҙған Байғужа үҙенә яҡынараҡ торған һалдатты тәгәрәтә һалып йыкты. Һалдаттарҙың икенсе береһе, үҙ сиратында ҡулына эләккән бер таяҡты һәрмәп алып, миңә киҙәнде. Шунда Новиков уның таяғын тотоп өлгөрҙө, минең баш иҫән ҡалды. Шау-шыу ҡупты. Талаусылар дүртәү, ә беҙ биш кеше. Өҫтәүенә, икеһе биш-алтыға ҡаршы тора алырлыҡ Байғужа менән Буранбай беҙҙең арала. Буранбай теге талаусының ҡулынан миңә киҙәнгән таяғын ҡайырып алды ла, тегеләрҙе уңлыһуллы ҡайыҙлап, бер стенаға ҡыҫырыҡларға тотондо. Тауыш тағы ла көсәйҙе. Хужа ҡатындар ҡурҡыуҙарынан икенсе бүлмәгә сығып бикләнделәр. Ахыр сиктә, талаусылар инәлергә тотондолар:

— Беҙ ғәйепле. Зинһар, туҡмамағыҙ!

Әммә Буранбай менән Байғужа шул тиклем ярһып киткәндәр — тегеләрҙең ялыныу-ялбарыуҙарына ыжламайҙар ҙа. Ҡыҫырыҡлап алғандар ҙа әйҙә ҡайыҙлайҙар! Берәүһенең танауынан ҡан субырлап аға, ул инде ҡаршылыҡ та күрһәтмәй, бары тик һуғыуҙан битен генә йәшерә. Беҙ иптәштәребеҙҙе саҡ һыуындырҙыҡ. Көрмәкләшеү-дөмбәҫләшеү шуның менән бөттө; тик Буранбай, һаман ярһыуын тыя алмай, тегеләрҙең өҫтәренә атланып менеп бара.

— Хәҙер үк әҙегеҙҙе юғалтығыҙ! Юғиһә яҡшылыҡ өмөт итмәгеҙ. Бынан кире мирный халыҡты талау ниәтен башығыҙҙан сығарығыҙ. Марш бынан! — тип команда бирҙе Новиков һәм тегеләр өтәләнеп сығып та тайҙылар.

Улар китеү менән, күрше бүлмәнең ишеге асылды, унан ҡарсыҡ килеп сыҡты ла аяҡтарыбыҙға йығылды. Уның артынса башҡалары ла шулай итте.

Ҡарсыҡ күҙ йәше менән беҙгә рәхмәт уҡырға тотондо:

— Ой, рәхмәт һеҙгә, балаҡайҙарым! Беҙҙе бәләнән ҡотҡарҙығыҙ. Күктән төшкән фәрештәләр кеүек килеп индегеҙ бит. Һалдаттар араһында ла миһырбанлы әҙәмдәр була икән дә баһа. Ҙур рәхмәт һеҙгә!

Беҙ уны тубыкланып торган еренән аяғына баҫтырҙыҡ та бында оҙаҡ йыбанып тормай сығып киттек. Ҡарсыҡ, һаман бөткөһөҙ рәхмәттәрен уҡыуында булып, беҙгә эйәрә биреп ҡалды.

Урамда тыныслыҡ урынлашҡайны инде. Беҙ үҙебеҙҙең ятағыбыҙға йүнәлдек. Шулай ҙа һаҡлыҡ сараһы кәрәк ине. Новиковтың кәңәше буйынса, һилерәк тыҡрыҡтар һайлап, урай-урай ҡайттыҡ.

Бына бөгөн сәй ҡайнатып эсергә тип китеп барған юлыбыҙҙа тап булған әбей ана шул көндө беҙ таланыуҙан аяп ҡалған ҡарсыҡ ине инде.

— Беҙгә ҡунаҡҡа килегеҙ. Беҙ һеҙҙе маҡтап һөйләп бөтөрә алмайбыҙ. Һеҙ — бик һәйбәт кешеләр, — тине ул беҙгә ниндәйҙер күңел иреткес әсәләрсә бер йылылыҡ менән. Ҡарсыҡтың һүҙҙәренән Индрилдың хатта күңеле йомшарып уҡ китте. Ауыртҡан арҡаһын йыйырғылай-йыйырғылай ул фәлсәфәгә тотондо:

— Һугыш... Һуғыш... Әҙәм балалары унан ни саҡлым михнәт күрәләр?! Бына бынау әбекәй бахырға һуғыш бысағыма кәрәкме ни инде? Меҫкенкәй, етмәһә, ул беҙгә рәхмәт яуҙырған була...

Башҡаларыбыҙ күңелдән уның һүҙҙәрен хуплаһаҡ та, өндәшмәй генә, баш баҫып атлауыбыҙҙа булдыҡ.

Беҙ барасаҡ өйҙөң ихлас күңелле хозяйкаһы, килеүебеҙҙе тәҙрәнән күреп ҡалып, шат йылмайып ҡаршыланы. Индрил, офицер алдында торған шикелле, честь биреп сәләмләне уны. Беҙ өйгә индек.

Был өйҙә беҙ айырыуса бер төрлө йылылыҡ һәм күңел ҡәнәғәтлеге кисерәбеҙ. Барыбыҙ ҙа, гүйә, тыуып-үҫкән өйөбөҙгә ҡайтып төшкәндәй булабыҙ. Индрилдың йөҙө иһә айырыуса ялтлап яҡтырып китә. Ул һүҙсәнләнә төшә, үтә мауығып, стеналарға эленгән фоторәсемдәрҙе ҡарарға тотона, шкафтағы китаптарҙы аҡтара, аралаш кухняға сығып, хужа ҡатынға ниндәй булһа ла ярҙам күрһәтергә тырыша.

Был юлы ла Индрил, сырхаулап тороуына ла ҡарамаҫтан, хәстәрсән төҫ менән уның тирәһендә уралырға кереште. Ҡатындың мейес ауыҙындағы өсаяҡ аҫтына ут яғырға йыйынғанын белеп алғас та, ауырыу кеше икәнен дә онотоп, утын ярып индерҙе, үҙе үк ут тоҡандырҙы. Мейес ҡабырғаһының ярыла башлағанын күргәс, балсыҡ иҙеп, үҙе һылап бирҙе. Шул тиклем иғтибарлылыҡ, хәстәрлек күргәс, ҡатындың күңеле нескәреп китте, ахыры, ул үҙенең бәхетле көндәрен хәтерләргә тотондо:

— Минең мәрхүм ирем дә шундай хәстәрлекле кеше ине. Һеҙҙең кеүек, йорт эшен бик ярата ине. Фабриканан былай ҙа йонсоп ҡайта бит инде; шулай ҙа өйҙә лә, мотлаҡ, эшһеҙ тормаҫҡа тырыша. Ә ял көндәрендә өйҙә баш ҡалҡытмай эшләй торғайны. Үҙе лә бик күңелле кеше ине, теләһә нәмә менән беҙҙең дә күңелде күтәрергә тырышып ятҡан көнө ине. Ни эшләмәк кәрәк, һәйбәт кешеләр оҙаҡ йәшәмәй, тигәндәре дөрөҫтөр инде. Алты ғына йыл бергә тороп ҡалдыҡ. Ике балабыҙ булды. Уларының да шатлыгын күрә алманым. Икеһе лә

ҡыҙылсанан үлде. Улары тере булһалар ҙа, исмаһам, бер йыуанысым булыр ине.

Өсаяҡ аҫтындағы утҡа ҡарап ултырған Индрил тәрән итеп көрһөнөп ҡуя:

— Эй-йе-е, был һуғыш бик күп яҡшы кешеләрҙе һәләк итте. Бик күп ғаиләләр үкһеҙ ҡалды. Бына беҙҙең кеүектәргә әжәл һаман килеп етә алмай, йөрөйбөҙ шунда донъя ҡыҙырып, ыҙа сигеп...

Индрилдың һуңғы һүҙҙәренән ҡатын кеше, ҡорт саҡҡан шикелле, тертләп китте.

— Ҡуй-ҡуй, ҡолаҡҡа яҡмаҫтайҙы һөйләмәгеҙсе, зинһар! Һеҙ йәшәргә тейешһегеҙ. Бына бит мин ниндәй аңра. Үҙемдекен һөйләп алдым да киттем. Яңылыш һүҙ әйтһәм, ғәфү итегеҙ. Һеҙ ҙә, минең ирем кеүек, яҡшы кеше. Ахырыһы, мин инде кешеләр менән кешесә һөйләшергә, яҡшы мөғәмәлә итергә лә онотоп бөткәнмен, — тине лә ул, урындыҡҡа быуынһыҙланып сүгәләп, үкһеп-үкһеп иларға тотондо.

Индрил урынынан һикереп торҙо, Буранбай менән мин йәһәт кенә уның янына барып еттек.

— Юҡ, юҡ, һеҙ бер ниндәй ҙә насар һүҙ әйтмәнегеҙ! Бына мин әйтер һүҙемде һеҙгә аңғартып еткерә алманым да шуның менән һеҙҙе рәнйеттем шикелле. Фронттан фронтҡа һөйрәлеп йөрөй торғас, бына беҙ үҙебеҙ түмәр кеүек тупаҫланып бөткәнбеҙ икән. Ғәйеп итмәгеҙ инде беҙҙе! — Индрил уның эргәһенә сүгеп ултырҙы ла иркә генә итеп арҡаһынан һөйөп йыуата башланы. Хужа ҡатын уның һайын ярһып китте, яурын баштары биҙгәк тотҡандағы шикелле ҡалтырана.

Буранбай нил ектәндер ағарынып киткән, ул әле миңә, әле Индрилға ялбарғандай итеп ҡарай.

— Ни булды һуң әле! Әллә һин, Индрил, берәй тейешһеҙ һүҙ ысҡындырҙыңмы?

Беҙ өндәшмәнек. Өйҙә бары хужа ҡатындың тыйыла алмай үкһеп-үкһеп илауы ғына ишетелеп тора. Уға ҡарап тороу бик ауыр, шуға күрә мин, тәҙрәгә барып ҡапланып, тәмәке төрөргә тотондом.

Урамды көрт баҫҡан. Ҡаршылағы лавка янында ике ҡатын тора. Улар лавкасы еврей менән һөйләшәләр, аралаш, беҙҙең хужа ҡатын шикелле, яурындарын һелкетеп-һелкетеп ҡуялар. Бәлкем, улар күптән түгел булып үткән погром хәлдәрен ҡоттары осоп һөйләйҙәрҙер, бәлкем, уларҙың да ирҙәре һуғышта һәләк булғандыр ҙа еврей ҡартына ҡайғыларын һөйләй торғандарҙыр. Бары бер генә нәмә асыҡ: юҡ-бар ләстит һатмай улар, йөрәк әрнеткес хәсрәтле нәмә һөйләйҙәр.

Бөгөн бер генә ел әҫәре лә юҡ. Ағастар ялбыр аҡ бәҫ менән ҡапланған. Улар бер хәрәкәтһеҙ ҡатып ултыра, шунлыҡтан тәрән ҡайғылы уйға сумғандарҙыр төҫлө. Улар ҙа йәм-йәшел

япраҡтарға, аҡ сәскәләргә күмелеп, йәйҙең йылы еленә тибрәнеп, ҡыштырлап ултырған саҡтарын һағыналарҙыр һымаҡ.

Бына урам буйлап бала күтәргән бер ҡатын үтеп бара. Башы түбән эйелгән, уйсан ҡарашы аяҡ аҫтына төбәлгән. Ул ҡулдан бәйләнгән ҡыҙыл ойоҡ һәм алаптай ҙур ботинка кейгән; аягын ерҙән айырып алмай тиерлек, һөйрәлеп атлап бара. Күрәһең, ул тәрән, ауыр уйға батҡан да атлап барыуын бөтөнләй онотҡан. Балаһы, ҡулдарын болғай-болғай, тирә-яғындағы төрлө нәмәләргә төртөп күрһәтә-күрһәтә, көлә-көлә нимәләрҙер һөйләй; тик әсәһендә уның кескәй шатлыҡтарын уртаҡлашыу ҡайғыһы юҡтыр, ахыры.

Артымдан Индрилдың:

— Сәй ҡайнаны! — тигән тауышын ишеттем. Ул, урынынан ҡубып, мейес ауыҙына барҙы. Уның артынан хужабикә лә эйәрҙе, сәйгүн аҫтынан ҡыҫҡыс менән күмерҙәрҙе тарта башланы. Был арала Буранбай сумкала ҡутарынды.

Индрилдың шат тауышы һәм сәйгүндең күңелле быҒырлап ҡайнауы ҡатын кешенең күҙ йәштәре менән өйгә тулған хәсрәт һөрөмөн шунда уҡ ҡыуып таратты. Ҡатын сәй бешерергә кереште. Ул инде әүәлге алсаҡ, мөләйем төҫөн алғайны, тик илауҙан ҡыҙарынған күҙ ҡабаҡтары һәм бөтөнләй кибеп етмәгән керпектәре генә уның яңы ғына хәсрәтле ауыр минуттар кисергәнен белдереп тора ине.

Күңелле итеп сәй эселде. Хужабикәнең ил ауынан барлыҡҡа килгән уңайһыҙлыҡ онотолдо. Һис юғында, уны берәү ҙә ҡабат иҫкә төшөрмәне. Индрил бик мәрәкәләп беҙҙең фронт буйлап йөрөгән саҡтағы мажараларҙы бәйән[1] итергә тотондо. Ҡатын уны мауығып тыңлай һәм аралаш, күҙенән йәштәре атылып сыҡҡансы, рәхәтләнеп көлә. Был күңел күтәренкелегенә бәйле матур күҙ йәштәре ине. Уның көлөүе Индрилдың күңелен оторо күтәреп, осондороп уҡ ебәрә. Ул инде, сама тойғоһон да онотоп, булған хәлдәргә булмағандарҙы йомарт бутап һиптерә башлай. Барыбыҙҙың да йөҙҙәребеҙ, оҙаҡ йонсоу көндәрҙән һуң беренсе мәртәбә болотто йыртып ҡояш нурҙары ергә ҡарағандағы шикелле, ҡыуанысла яҡтылыҡҡа сумған.

Буранбай әллә инде Индрилдың һөйләүенән бер ҡыҙыҡ та тапманы, әллә йонсоғайны, өҫтәл янынан диванға күсеп, һөйәлеп ултырҙы. Күп тә үтмәй, уның танауы бер көйгә һалып алып һыҙғыра ла башланы. Индрил уны әҙерәк мәрәкәләп алмаҡсы булғайны ла, хужа ҡатын уны шунда уҡ тыйҙы:

— Ҡағылмағыҙ, йоҡлаһын, әйҙә, арығандыр, меҫкенкәйем. Хәҙер һеҙгә лә урын йәйеп бирәм, серем итеп алығыҙ. Фронтҡа барып ҡапҡас, йүнле-башлы йоҡларға ла ирек булмаҫ әле үҙегеҙгә, — тине ул һәм юрған-яҫтыҡтарын ҡутарып ала ла

[1] ***Бәйән.*** — ниҙер хаҡында хәбәр итеп һөйләгән һүҙ.

башланы. Индрил ҡарышып маташҡайны ла, ҡатын уны тыңларға ла теләмәне. Беҙгә буйһонорға тура килде. Ул Буранбайҙың һалынып төшкән башы аҫтына ла йомшаҡ мендәр ҡыҫтырып ҡуйҙы; тегеһе, күҙен асмай ғына, аяғын диванға һуҙып ебәрҙе. Йомшаҡ урынға яткас, арҡаларҙың ауыртыуы ла тиҙ үк, ҡул менән алып ташлағандай, баҫылды ла ҡуйҙы; беҙ, артыҡ талымламай, тәрән йоҡоға сумдыҡ.

## ИКЕНСЕ БҮЛЕК

Көн һайын була килгән строевой занятиелар туҡталды, беҙгә яңы кейем-һалым бирҙеләр. Иртән барлауға ғына сығаралар, шунан ҡабат казармаларға тулабыҙ. Ә унда иртәнән алып ҡара кискә тиклем туҡтамай торған шау-шыу өйҙө күтәреп алып бара: гармунда уйнайҙар, төрлө йырҙар йырлайҙар, һикереп төшөп, тыпыр-тыпыр бейешеп тә алалар. Ҡайһы бер мутыраҡ һалдаттар әллә ҡайҙан араҡы ла табып, ҡыҙмаса йөрөү әмәлен дә табалар. Көтмәгәндә тоҡтомалдан әтәсләнешеп, һүҙгә лә килешеп алалар, хатта биргеләшеп тә китәләр. Һуғышалар, тиҙ үк ярашалар, тағы һин дә мин булып, эсергә, йырларға, бейешергә, көлөшөргә тотоналар.

Был ығы-зығы беҙҙе үҙ эсенә йәлеп итә алмай, беҙ башҡаларҙан айырымыраҡ торабыҙ. Кременчугтан киткәнебеҙҙән бирле артыҡ телгә алырлыҡ яңылыҡ булманы. Буш ваҡыттарыбыҙҙа әлеге Альфреда исемле ҡатындың өйөнә барып, әҙерәк күңел асып, ял итеп ҡайтабыҙ. Унан ҡайтыу менән, йәнә лә йөҙәткес һалдат йөгөн тартырға егеләһең. Бындай эс бошорғос тормоштан Новиковыбыҙ бөтөнләй риза түгел; Кременчугта үткәргән көндәребеҙҙе йыш ҡына һағынып иҫкә ала:

— Бына Кременчугта күңелле ине, исмаһам. Эшләйем тиһәң, эш тә бар ине. Эшселәр менән элемтә тотоу ни тиклем яҡшы ине, үҙебеҙҙең халыҡ шул улар. Берәй яҡҡа башты алып сығып китәһе ине. Бында бит, зыяраттағы һымаҡ, тере әҙәм дә юҡ төҫлө. Күпме буҫтау фабрикалары бар, береһе лә эшләмәй. Уларҙағы эшселәр ҡайҙа булып бөттө икән? — тигән һорауҙы ҡуя ул һәм, көттөрмәй, үҙе үк шуға яуабын да бирә: — Беҙҙе ҡыуалап илтеп тыҡкан шикелле, уларҙы ла фронтҡа — ут эсенә илтеп тығып бөткәндәрҙер инде.

Новиковтың һүҙҙәренә беребеҙ ҙә ҡыҫылмай. Эүәлерәк уның менән бер аҙ бәхәсләшеп алырға ярата торған Индрил да һуңғы мәлдә үҙ эсенән генә уйланыусан булып китте, тегенең менән әләгешеп китергә бер теләк тә белдермәй. Был арала ул йәшлек хәтирәләренә йышыраҡ бирелә, шуны беҙгә тәмләп-тәмләп һөйләй.

Индрил йәш сағын Норвегияла һәм Финляндияла үткәргән, унда балыҡсылар менән эшләгән. Ул йыш ҡына үҙенең тыуған ҡалаһы Ревелде иҫенә төшөрә:

— Берәй тапҡыр һеҙҙең Ревель килькаларын ашағанығыҙ бармы? Ах, белһәгеҙ икән. Беҙҙең Ревель тап шул килькаһы менән дан тота ла инде. — Кәм ул Фин ҡултығының ҡурғаш кеүек һоро ауыр һыуҙары менән йыуыла торған ярҙағы бик матур был ҡала хаҡында, хыялға бирелеп, һөйләргә тотона. Балтиканан иҫкән елдәр Ревель өҫтөнә томандар, ямғыр болоттары ҡыуалап килтерә икән. Улар, ҡалын булып, өҫтө-өҫтөнә өйөлөшөп, ҡаланың һанһыҙ үткер манараларына әленешеп торалар, ти.

Индрил шулай мауығып һөйләп алып китһә, уның тауышы үҙенә бер төрлө моң булып ағыла башлай; әйтерһең, ул һөйләмәй, ә ниндәйҙер әкиәттәге илаһи бер гүзәл ҡаланың фажиғәһе хаҡында хәсрәтле-моңло йыр һуҙа. Ревелдең тарихын тыңлау күңелдәргә ауыр шом һала. Индрил дуҫыбыҙ хикәйәтен Вышгородта Преображенский соборын төҙөүгә бәйләнешле ғибрәтле ваҡиғаларға алып барып еткерә башлаһа, уны тыңлауы ла ауырлаша. Эстондарҙың береһе лә был соборҙы яҡшы һүҙ менән телгә алмай.

— Рус батшаһы беҙҙең илде баҫып алғас, беренсе эше итеп, Бригита тигән изге храмыбыҙҙы ҡыйраттырҙы, шунан беҙҙең ятҡан Вышгородыбыҙҙа йәмһеҙ Преображенский собор төҙөттө, — тип асына эстондар.

Индрил Петроградта эшләгән сағы хаҡында һөйләргә тотона икән, ул үҙе шунда ғашиҡ булған Дуся исемле ҡыҙҙы иҫенә төшөрә.

— Их, шәп ҡыҙ ине лә бит ни, ғүмере генә ҡыҫҡа булды шу-ул, — тип тәрән уфтана ул. Был ҡыҙ тураһындағы иҫтәлектәрен дуҫыбыҙ нисә мәртәбә генә һөйләмәһен — беҙ тын да алмай тыңлайбыҙ. Беҙҙең иғтибар Индрилды айырата ҡанатландырып ебәрә, ул тағы ла илһамланыбыраҡ, күңелдәрҙе бөтөнләй нескәртерлек итеп, лирик аһәңдәр менән моңло итеп һөйләүгә күсә. Тәүҙә, әлбиттә, ул ҡораҡ тотоп башлай:

— Эшем бик ауыр, жалованьены бик аҙ алам, өҫтәүенә, тырышып-тырышып электромеханиктар курсына инергә әҙерләнәм.

Был өлөш әле тарҡау ғына тыңлана. Хатта был әңгәмә бер ситтә ғәмһеҙ тәмәке тартып ятыусы Байғужаның асыуын ҡабарта:

— Ташла әле шул бер бөтмәгән курстарыңды! — тип ҡырт бүлә ул Индрилды һәм, беҙҙең яҡҡа һыртын биреп, әйләнеп үк ята. Был иҫкәртеүҙән һуң Индрил, әңгәмәһенең баш өлөшөн бер аҙ ҡыҫҡарта төшөп, йәһәтерәк Дусяһы хаҡында һөйләүгә күсә һала:

— Яҙ башы ине. Бөгөнмө-иртәгәме Невала боҙ ҡуҙғалырға тора. Шул саҡта бер мәл миңә күпер буйлап йылға аша сығырға тура килде. Иртәнсәк ине был. Шул тиклем матур иртә, ундайҙар Петроградта һирәк була: күк салт аяҙ, зәп-зәңгәр,

яҙғы ҡояш шул ҡәҙәремсә сағыу яҡтырта, уның нурҙарының иркә йылылығы, хатта иртүк булһа ла, беленеп тора ине. Мин, матур иртәгә һоҡланып, сихырланған шикелле, хыял донъяһында йөҙөп барам. Атламайым да — йөҙөп барам. Шул саҡ ни ишетәм, күпер аҫтынан килгән: «Ҡотҡарығы-ыҙ! Ҡотҡарығы-ыҙ!» — тигән йән өҙгөс тауыш мине һиҫкәндереп, аңыма килтерҙе. Был тауыш йөрәгемде телеп алғандай булды. Мин шунда уҡ, күпер рәшәткәһенә күкрәгем менән ятып, түбән ҡараным. Унда, боҙ уйылып төшкән бер күләүектә, ҡанаты һынған күгәрсен кеүек, зәңгәр кейем кейгән бер ҡатын-ҡыҙ заты бата-ҡалҡа тыпырсына ине. Уйылып төшкән боҙ ситенә тырнаҡтарын батырып, ул мәкенән сығырға тырыша, ләкин һәр берендә ҡулы тайып китеп, башы менән һыу төбөнә сумып сыға. Мине шул фажиғә булып ятҡан ергә магнит һурып алдымы ни — аптырашып ҡарап торған үткенселәргә бәреләһуғыла күперҙе үттем дә ярҙан боҙ өҫтөнә тәгәрәнем.

Мин уға яҡынлашҡанда, батып барыусы хәлдән тая башланы, ахыры, — уның тауышы бик насарланды.) Мин, һыу инергә тип түҙемһеҙләнеп килгән кеше төҫлө, юл ыңғайында пальтомды һәм башҡа кейемдәремде һалып ырғыта-ырғыта, батыусыға табан атлыҡтым. Бер ун сажиндар самаһы эскә инеүгә, брҙ сатырлап ярылды; мин бер аяғым менән һыуға батып та сыҡтым. Сослоғом етте. Шунда, ҡаушап ҡалып, әҙерәк яйлап торһам, үҙем дә һыу төбөнә китәһем икән. Батыусы үлемесле ғазап сигеп быстырлаған мәкегә яҡынайған һайын, боҙ өҫтөнә сығып ятҡан күләүектәр йышайҙы. Барып етергә ике сажин самаһы ҡалды тигәндә, артабан ат лар лыҡ мөмкин лех^ тә бөттө. Боҙ, көҙгө кеүек, шып-шыма тайғаҡ ине. Ул батыусы интеккән мәкегә табан иңкеү. Шуға күрә мине лә үҙ ҡарынына тыны менән һурып алып барғандай. Боҙ өҫтөндә бер генә таяныс та юҡ. Ә теге меҫкендең ҡысҡырыуҙан бөтөнләй тамағы ҡарлығып бөткән инде. Ул боҙ сите умырылыуҙан торған һайын киңәйә барған мәкелә бер бата ла бер ҡалҡа. Мин инде, артабан атлап барыу мөмкинлеге ҡалмағас, уға табан күкрәгем менән шыуышып яҡынлаша башланым. Батып барыусының зәңгәр күҙле, һары сәсле йәш кенә ҡыҙ булыуын да шәйләп алдым. Ул, минең үҙенә яҡынлашыуымды күреп, һуңғы көсөн йыйып ялбарырға тотондо: «Ҡотҡарсы! Ҡотҡара күр, зинһар!..» Уның ялбарыулы ҡарашы бөтөн ҡурҡынысты оноттorҙо. Ә мин үҙем дә бит муртайған яҙғы боҙҙа ҡыл өҫтөндәге шикелле генә торам. Яр башында йыйылған кешеләр миңә нимәләрҙер ҡысҡыралар, ләкин улар минең аңыма килеп етмәй. Мин бары ҡыҙҙың: «Ҡотҡар! Ҡотҡар!» — тигән һүҙҙәрен генә ишетәм. Мин уға һыңар ҡулымды һуҙам. Ул ҡулыма ике ҡуллап сатырлатып аҫылына, ләкин, мин уны үҙемә тартыу урынына, ул мине түбәнгә үҙе янына упҡынға һөйрәй. Бигерәк шыма һәм ауыш шул боҙ өҫтө. Таяныр йәки эләгер бер йөйө

лә юҡ. Был ҡыҙҙы ҡотҡарыу урынына, уға иптәш булып, бергәләп батыу ҡурҡынысы секунд һайын яҡынлаша. Ыҫҡынмаҫ өсөн тырмашыуҙан тырнаҡ шәбеләрем аҡтарыла, бармаҡ биттәренән ҡан һарҡа. Шунда күҙ ҡырыйым менән ярҙан таҡта, бау-маҙар тотоп төшөп килгән кешеләр төркөмөн шәйләп ҡалдым. Был миңә көс өҫтәне. Ҡыҙға һуҙылған ҡулым хәлен юғалтҡан инде, һис үҙемдеке шикелле түгел; ә боҙға тырнаҡтарым менән сатырлатып йәбешкән икенсе ҡулым ут кеүек яна.

Ярҙан, алдарына таҡталар түшәй-түшәй, беҙгә кешеләр яҡынлаша. Улар бер аҙым үткәнсе, миңә тотош бер тәү лек ваҡыт үткәндәй була. Сөнки мин үҙ көсөм менән генә, был зәңгәр күҙле һылыуҙы ҡотҡарыу түгел, бынан үҙем иҫән сығыуҙан да тамам өмөт өҙгәйнем. Шунда ҡапыл минең өҫкә йыуан арҡан килеп төштө.

— Тотон! — тигән тауыш килде артымдан.

Мин арҡандың осон ҡыҙға ырғыттым да үҙем дә бер ҡулым менән йәбештем. Уғаса булмай, миңә таҡтаның бер башын этеп еткерҙеләр. Мин уны батыусы ҡыҙға табан шыуыштырҙым. Бына шулай арттағылар — мине, мин ҡыҙҙы тартырға тотондоҡ. Бер арала миңә, һыңар ҡулымды бушатып, уның менән, мәкенән ҡалҡынып, күкрәге менән боҙ ситенә ятып маташҡан ҡыҙҙың яғаһынан эләктереп алып, күтәрелергә ярҙамлашырға форсат тыуҙы. Ҡыҙҙың боҙ өҫтөнә сығып еткәнен әҙерәк хәтерләйем әле. Шунан үҙем дә һуштан яҙғанмын, ахыры. Мине тиҙ ярҙам каретаһы больницаға илткән. Больницаға беренсе мәртәбә инеүем ине был. Боҙ өҫтөндә булған мажара миңә аҙаҡ төштә күргән кеүек кенә тойола башланы, үлем ҡурҡынысы онотолдо.

Больницала ятыуымдың өсөнсө көнөнә бер сибәр генә йөҙлө сестра врач бүлмәһенә саҡыра килде. Унда мине тулы түңәрәк йөҙлө, шулай уҡ ҡуйы ҡара һаҡаллы врач ҡаршыланы. Уның эргәһендә аҡ халатҡа төрөнгән һурылған йөҙлө, зәңгәр күҙле ҡыҙ ултыра ине. Мин уны шунда уҡ танып алдым, һәм боҙ өҫтөндә бынан өс көн элек кенә булған, аяныс күренеш күҙ алдымдан емелдәп үтте. Хатта арҡа һабағым буйлап һалҡын семерләү йүгерҙе, тубыҡ быуындарым ҡалтыранды, юғалып ҡалдым, ауыҙ күтәреп, ҡыҙға бер һүҙ ҙә өндәшә алманым.

Э ҡыҙ иһә, миңә ҡарап, бик яғымлы итеп йылмайҙы ла докторға боролоп өндәште:

— Мине бына ошо егет ҡотҡарҙы!

Доктор миңә ултырырға ҡушты. Минең үҙгәреп китеүемә иғтибар итептер ахыры:

— Хәлегеҙ бик ауырмы әллә? — тип борсолоп һораны:

— Юҡ. Хәлем бик һәйбәт, — тип яуап бирҙем мин, тик, ҡыҙҙың ҡарашы менән осрашмаҫ өсөн, түбән ҡараным.

— Һеҙ электән таныш инегеҙме? — тип һораны доктор минән.

Мин ауыҙымды асҡансы, ҡыҙ яуап биреп өлгөрҙө;

— Юҡ, беҙгә тәү тапҡыр боҙ өҫтөндә танышырға тура килде. Ерҙән килдеме, әллә күктән килеп төштөмө — шулай ҙа ул минең ҡотҡарыусым булды...

Мин, уның музыка төҫлө яңғыраған яғымлы тауышына һоҡланып, башымды түбән эйгән килеш ултыра бирҙем.

— Дуся менән беҙ бына шулай таныштыҡ...

Хикәйәһен ошо ергә еткергәс, Индрил мотлаҡ туҡтай. Ул башын әйә, намаҙ уҡығанда сәждәгә киткәндәй булып, өнһөҙ ҡала, йөҙөн тәрән һағыш баҫа. Шунан ул, сәхнәлә герой ролен уйнаған артист кеүек, беҙгә сикәһе менән әйләнә лә ҙур илһам минуттары татыған ҡиәфәттә, бер нөктәгә төбәлеп ҡатып ҡала. Беҙ, унан күҙҙәребеҙҙе айырып ала алмай, бер талай ҡатып ултырабыҙ, тауыш та сығарырға ҡурҡабыҙ. Тынлыҡты Байғужа боҙа:

— Мәжнүн! — ти ул, ауыҙын мыҫҡыллы ҡыйшайтып. — Ул үҙенең Ләйләһен хәтерләй!

Беҙ көлөп ебәрәбеҙ.

Индрил, үҙенең илһамлы ҡиәфәтен юғалтып, тертләп ҡуйғандай була, ғәфү үтенгәндәй йылмайып, Байгужанан һорай:

— Э кемдәр улар — Мәжнүн, Ләйлә?

Байғужа яуап бирмәй, миңә ымлап баш ҡаға. Индрил, яуап өмөт итеп, миңә борола. Мин Ләйлә менән Мәжнүндең Көнсығыштың бик данлыҡлы ҡиссаларының береһенең геройҙары икәнен ҡыҫҡа ғына һөйләп бирәм.

Минең аңлатыуымды тыңлап бөткәс, Новиков Байғужаның сағыштырыуын бик урынлы тип таба һәм, салҡан йығылып китеп, һыны ҡатып көлөргә тотона. Индрил быға һис үпкәләмәй, үҙе лә ҡушылып, рәхәтләнеп көлә һәм аҙаҡ аҡланырға тотона!

— Улар бит әкиәттәге кешеләр, ә беҙҙең фажиғә — ысын булған хәл. Сағыштырып келәүегеҙҙе бик үк урынлы һанамайым, — айырма бында ер менән күк араһы кеүек.

Шуның менән уны мәрәкәләп көлөп алыу бөтә һәм Индрил һөйләүен дауам итә:

— Танышып алғас, беҙ Дуся менән тиҙ арала бер-беребеҙгә эҫенешеп киттек. Ул мине ныҡышып-ныҡышып үҙҙәренә саҡыра башланы. Ләкин мин уларға тиҙ генә бара һалырға баҙнат итмәнем: кейемдең дә рәте юҡ, кеҫә лә буш. Э уны бер көн күрмәй түҙер хәлдәрем ҡалманы. Ял көндәрен, тәҡәтем ҡалмай, сабырһыҙланып көтөп алам. Мин инде уның янына барырға үҙемдә ҡыйыулыҡ таба башлағайным. Кистән үк бик яҡшылап кейемдәремде таҙартҡылап, рәткә килтерәм, шыртайып тиҙ үк сикәмде баҫырға әҙер торған төктәрҙе айырыуса бер тырышлыҡ менән ҡырам. Ә был сәсмәй үҫә торған үҫемлек минең сикәләрҙе, эйәкте бик иртә һәм бик ҡуйы булып баҫа башлағайны. Атлығып барырға сығам, аяҡтарым ергә

теймәй. Юл буйы һөйләшергә иң матур һүҙҙәр һайлап барам. Ә бына, үҙен күреүем була, бөтә әҙер һүҙҙәр баштан сыға ла бөтә. Әйтер һүҙҙәреңде генә түгел, көллө донъяңды онотторорлоҡ ҡыҙ ине шул ул Дуся.

Шулай итеп, Дуся минең бар ғәмемде биләне. Саҡ ҡына буш ваҡытым булдымы — уның янына йүгерәм. Курсҡа әҙерләнеүҙе бөтөнләй оноттом, тамам кейәү егетенә әйләндем. Беҙ икәүләп киләсәккә пландар ҡора башланыҡ. Ҡыҙҙың сәләмәтлеге йүнәлеү менән, өйләнешергә булдыҡ. Йәнәһе, ул модиска була, ә мин — электротехник. Тик йүнәлеү урынына Дусяның һаулығы көндән-көн насарайыуға китте. Теге ваҡытта һалҡын тейеүҙән уның үпкәһенә зыян килгән. Ул бик йыш йүткерә, тик ниңәлер ауырыуын минән йәшерергә тырыша. Әммә быны эшләүе уға бик ҡыйын — тик торғандан ҡапыл ғына сәсәп, быуылып-быуылып йүтәлләп ала ла китә. Уның ауырыуы мине бик ныҡ бошондора, был борсолоу миңә көнөтөнө тынғылыҡ бирмәй, йөрәгемде ауырттырып өйкәп тора. Ни эшләргә белмәй, мин бер врачтан икенсеһенә, бер аптеканан икенсеһенә, унан өсөнсөһөнә йүгерәм. Тик беҙҙең пландарыбыҙға үтәлеү насип булмаған икән шул. Июль айында Дуся был донъяны ҡуйҙы. Мин ҡайғымдан башымды ҡайҙа илтеп тығырға белмәй йөрөгән саҡта, һуғыш башланды. Мин фронтҡа доброволец булып китмәксе булдым. Заводта иптәштәрем минең был ниәтемдән бот сабып көлдөләр:

— Иҫәр, күпме ереңде, нисә заводыңды дошмандан һаҡларға бараһың? Ашыҡма, былай ҙа сират етер әле, — тип теләгемдән һыуындырҙылар.

Индрил шым ҡала, тәрән уйға талып, тәмәке төрә башлай.

Новиков һүҙгә керешә:

— Байғужа һине Мәжнүн тип дөрөҫ әйтте, һин дә барыбер, уның кеүек, һөйгәнең менән ҡауыша алмаған булыр инең. Һуғыш башланды. Бына ни рәүешле йөрөп ятабыҙ. Әллә бөгөн, әллә иртәгә... — ти ул, түшәмгә текләп ятҡан килеш.

— Үткән эш инде, — тип һуҙа Индрил, уфтанып, — күпме һағынһаң да, кире ҡайтарып алып булмай. Һөйләгәнемә үпкәләмәгеҙ. Иҫтән сыҡмай бит, ни эшләтәйем? Һеҙгә һөйләһәм, әҙерәк йөрәк ялҡыны баҫылып ҡала, — ти Индрил, аҡланғандай итеп. Ул урынына менеп ята ла башҡаса һүҙгә ҡушылмай. Күрәһең, беҙгә һөйләгәндән генә йөрәге баҫылмайҙыр шул. Йөҙөнә шәүлә булып төшкән тәрән һағыш билдәләре тиҙ генә таралырлыҡ түгел. Эйе, Дусяһының фажиғәле үлеме егетебеҙҙе бик ныҡ тетрәткән икән шул. Юғиһә бер онотмаһа, бер онотор, һыуыныр ине. Хәҙер уға шаяртып өндәшеүсе юҡ. Киреһенсә, тәүҙә әҙерәк шаяртып, төрттөргөләп алыусыларыбыҙҙың күңелен үкенес көйҙөрә.

Һәр кем үҙ уйҙарына бирелгән, баштан үткәндең кире ҡайтҡыһыҙ татлы хәтирәләре, киләсәге хаҡында хәстәрлек

менән мәшғүл. Һуғышҡа инер алдынан кешеләргә əҙ генә тыныс ял бирелгән мәлдә, уларҙың фекерҙәре айырыуса йылдам эшләүсән була. Ул саҡта сәскә кеүек матур йәш саҡтар, тағы ла гүзәлерәк булып, күҙ алдынан үтә, үҙәктәрҙе өҙҙөрөп һағышландыра. Йәшлек сәскәләре һәр кем өсөн ғәзиз. Алдында дәһшәтле мәхшәр билдәһеҙлеге торғанда, ул сәскәләр айырата матурыраҡ булып тойола. Улар хаҡында ойоп-ойоп тағы ла оҙағыраҡ уйлағы, күҙ алдында асығыраҡ төҫтә күрге, онотолоп, шулар менән йыуанғы килә. Тик оҙаҡҡа йыуатып тора алмай шул артта ҡалған йәшлек хәтирәләре. Күҙ алдына үҙебеҙ кисергән һәм алда тағы ла ҡурҡынысыраҡ һүрәттә кисерәсәк ҡан йылғалары, ут даръялары, үлем сәсеүсе туп гөрһөлдәүҙәре, тонсоҡторғос ағыулы газдар, йөрәктәрҙе туңдырып, тәндәрҙе семерләтеп, башҡа уй-тойғоларҙы ҡыҫырыҡлап сығарып, тупаҫ рәүештә бәреп килеп инә.

Бына Индрил бер ҡыҙ фажиғәһе ваҡытында булған танышыуын, беренсе мөхәббәтен көллө матурлығы һәм хәсрәте менән бергә, түшенә ҡаҙаған ал сәскә кеүек, ҡәҙерләп һаҡлай. Ул — уның хазинаһы, бәлкем, хәҙергә ошо хәтирәләр уның берҙән-бер байлығылыр. Ваҡытында бит улар егеттең тормош юлын яҡтыртып торған, уға көс биргән, йәшәүен мәғәнәле иткән. Хәҙер инде ул йәшлегендә кисергән оло шатлыҡлы ла, төрән хәсрәтле лә булған ошо хәлдең хатта бәләкәй генә бер өлөшө булһа ла, ҡабат ҡабатланыуын өҙөлөп теләй. Кешеләр ҡылған эштәрҙә күргән иң яҡшы яҡтарҙы Индрил Дусяһының сифаттары менән тиңләштереп үлсәй; ошо яҡшы сифаттарҙы бер бөтөн итеп уҡмаштырып, донъяла хөкөм һөрөп ятҡан бөтә яуызлыҡҡа ҡаршы ҡуйғыһы килә уның.

Беҙҙе өйөндә ихлас күңел менән ҡабул итеп ҡунаҡ итеүсе Альфреда исемле йәш ҡатында ул Дусяһында булған күп кенә сифаттарҙың кәүҙәләнешен тапты, ахыры, шуға ла бит уға, иң яҡын кешеһе менән мөғәмәлә иткәндәге кеүек, һөйөп, иғтибарлы ҡарай. Индрил йыш ҡына:

— Альфреда — иҫ киткес яҡшы күңелле ҡатын,—тип һоҡланып ҡуя. — Йәш сағында ул, моғайын, ғәжәп сибәр булғандыр. Ни тиклем ҡайғы-хәсрәт, ауырлыҡтар кисермәһен, әле лә артыҡ бирешмәгән. Батыр ҡатын. Әгәр Альфреда белемле ҡатын булһа, бик күп кешеләрҙе бәхетле итер өсөн көрәшсе булыр ине, тип уйлайым мин, — тип тә фараз итеп ҡуя.

Новиков Индрилдың хыялилығын һөйөп етмәй, йыш ҡына «изге фәрештә» тип мыҫҡыл иткән булһа, Альфреда хаҡында һүҙ сыҡҡанда, тын ҡала, иренен мыҫҡыллы ҡыйшайтырға уйламай ҙа, баш ҡаға-ҡаға һүҙҙе хуплап уйланып ултыра ла ирҙәрсә тәрән көрһөнөп ҡуя.

Беҙ бөгөн Альфреда янына һуңғы мәртәбә инеп сыҡмаҡсы булабыҙ. Буранбай күптән унда киткән инде. Беҙ уға ҡайһы бер аҙыҡ-түлектәребеҙҙе алдан алып барып, аш-һыу әҙерләүҙә

хужа ҡатынға булышырға ҡушҡанбыҙ. Башҡаларыбыҙ, көн элгәре барып, аяҡ аҫтында уралып, ҡамасаулап йөрөмәҫ өсөн хәҙергә казармала тәмле хәтирәләргә бирелеп ваҡыт һуҙабыҙ. Беҙҙең ошо төркөмгә күптән түгел генә килеп ҡушылған Хәкимйән Иртуғанов унда беренсе тапҡыр барырға йыйына. Шуға күрә беҙҙең арала Альфреда хаҡында барған әңгәмәгә ҙур иғтибар менән ҡолаҡ һалып ултыра, үҙе һүҙгә ҡыҫылмай.

Иртуғанов — Пенза губернаһының Инсар әйәҙе кешеһе. Йәш сағында ул ҡырҡтартмасы булған, тартмаларын артмаҡлап ярты Рәсәйҙе ҡыҙырып сыҡҡан. Аҙағыраҡ Мәскәүҙә дворник булған, шунан Бакуҙа нефть промыслаларында эшләгән. Һуғыш башланыр алдынан ғына һалдатҡа алынған, хәҙер инде уның яурынында унтер-офицерҙың ике таҫмаһы бар, ә күкрәгендә Георгий тәреһе һәм бер миҙал биҙәй. Тик ул унтер таҫмалары менән дә, күкрәгендәге тәре менән дә маһаймай, үҙен ябай һалдат һымаҡ баҫалҡы тота. Был тәре менән миҙалды нимә өсөн бирҙеләр, тип һораһаң, Иртуғанов ҡыҫҡа ғына итеп яуап бирә:

— Офицерҙарҙы атҡан өсөн.

Уның был яуабына Новиков һоҡланып бөтә алмай.

Бер мәл Иртуғановты отделение командиры итеп тәғәйенләргә уйлағайнылар ҙа, теге ҡырҡа рәүештә баш тартты:

— Мин был ике таҫманы кешеләр өҫтөнән командовать итер өсөн таҡманым. Әйҙә, кемдең офицер булғыһы килә — шул командовать итһен, мин былай ҙа һуғыша беләм.

Иртуғановтың был тәүәккәллеге Новиков күҙе алдында уның дәрәжәһен тағы ла үҫтереп ебәрҙе.

— Бик шәп егет был, уны үҙебеҙҙең мөхиткә алырға кәрәк, — тине ул бер нисә мәртәбә.

Иртуғанов русса яҡшы һөйләшә, бик күп көләмәстәр белә; тик уларҙы һөйләгәндә үҙе һис көлмәй, башҡалар көлөүҙән туҡтағанды вайымһыҙ сабыр ҡиәфәттә көтөп ала ла йәнә ялғап алып китә. Ул ҡылыҡ сифаттарының ҡайһы бер һыҙаттары менән беҙҙең Новиковҡа тартҡан. Киң күңелле, ваҡланыуҙы йәне һөймәй, һүҙен бик үлсәп һөйләй, шуға ла әйткән бер һүҙе мәғәнәле, урынлы булып сыға. Кем алдында ғына булмаһын, һүҙен үткәрә белә. Рядовой һалдатмы ул, унтер-офицермы, офицермы — уның үтенесен кире ҡаҡмай; сөнки ул һәр кемдең күңеленә яраҡлы асҡысты таба белә.

Беҙ әле Иртуғанов менән етерлек дәрәжәлә яҡынлашып өлгөрмәгәнбеҙ, шуға күрә бөтөнләй үк сиселеп китеп һөйләшә алғаныбыҙ юҡ. Ләкин беҙ уның күңелендә йәшеренеп ятҡан бик ҙур көс барын яҡшы һиҙемләйбеҙ. Беҙҙең өсөн файҙалы көс булырмы ул, юҡмы — һынап ҡарамағанбыҙ әле.

Тап бына бөгөн ошо Иртуғанов атлы ир-егет беҙҙең менән Альфредаларға бара ла инде.



IB

## ӨСӨНСӨ БҮЛЕК

Егерме градуслы һалҡындар Дунаевец ҡалаһында оҙаҡ тора алманы. Ҡурып барған салт аяҙ селләне өшәнеш йонсоу көндәр алмаштырҙы. Ергә аҡтарылып төшөп килгән тәпәшәк ҡарағусҡыл һоро болоттар өҙлөкһөҙ ямғыр һибәләй. Көньяҡ-көнбайыштан иҫкән һалҡын дымлы ел үҙәктәргә үтеп ҡалтырата.

Урамдар үтеп сыҡҡыһыҙ һаҙламыҡҡа әйләнде, бысраҡ күләүектәр менән ҡапланды. Уларҙа әүәлгесә һалдаттар мыжғышып йөрөмәй, нужалары төшөп сыҡҡандары ла, иҙеүҙәре әсенә баштарын йәшереп тәмәке ҡабыҙалар ҙа, тиҙерәк урамдың елдән ышыҡ яғына сығып, бөршәйеп алып, юлдарында булалар. Тиҙ көндә фронтҡа оҙатыласаҡтарын һәр кем белә.

Ҡуйыртмаҡланып ятҡан бысраҡ урамдан бата-сума бара торғас, беҙ өймәкләшеп Альфредалар ишек алдына барып тулдыҡ. Буранбай йүгереп ҡаршы сыҡты. Беҙҙең менән күрешер өсөн, күтәрмә төбөндә Альфреда, алсаҡ йылмайып, ҡулдарын алъяпҡысына һөртөп тора. Индрил, күкрәгенә ҡулын ҡуйып, башын кеселекле рәүештә түбән эйҙе,лйул рәүешсә торған килеш ҡатындың ҡулын ҡуш услап тотҡан хәлдә оҙаҡ-оҙаҡ ҡыҫты. Альфреданы беҙҙең һөйләү буйынса ғына белгән Иртуғанов, миңә ҡасан иғтибар итерҙәр икән, тигән шикелле, сабыр ғына көтөп торҙо. Альфреда һәммәбеҙгә лә бер тигеҙ ҡараш менән иҫәнләшеп сыҡты.

— Бына, Буранбай менән әҙерәк әҙерләнеп булашҡан булғайныҡ. Оҡшатырһығыҙмы икән? Рәхим итеп, етешегеҙ, — тип ул беҙҙе өҫтәл янына ултырышырға саҡырҙы. — Тик, зинһар өсөн, өйҙә тартмағыҙсы. Аштың тәмен ебәрәһегеҙ, — тип уйынсаҡ ҡына итеп киҫәтеп тә ҡуйҙы.

Бармаҡ араларына бер үк ваҡытта кисетен дә, йыртып алған ҡағыҙҙы ла күнегелгәнсә оҫта итеп ҡыҫтырып, тәмәке урап булашҡан Иртуғанов, был һүҙҙән уңайһыҙланып, ҡыҙарына төштө, әле беребеҙгә, әле икенсебеҙгә күҙ йүгертте.

— Их, был хәтле тәмле аштар алдынан бер бәләкәй ҙә булһа икән! — тип уйынлы-ысынлы хыял итеп ҡуйҙы Новиков.

— Ярар, ярар, юҡтың башын ауырттырма инде. Алдыңа ни килгән — ҡәнәғәт булып, йыпырта ғына бир, — тине Байғужа.

Алға килгән ҡайнар борщ, ысынлап та, телеңде йоторлоҡ тәмле ине. Тирләп-бешеп һоғонорға тотоноп киттек.

— Офицерҙар һыйымы ни! — тип һоҡлана Новиков, ҡашыҡ артынан ҡашыҡ һурпаны аһ-уһ килеп ауыҙына оҙатҡан арала.

Аштан һуң Альфреда абрикос компоты менән ҡабарып бешкән күмәстәр килтереп ҡуйҙы.

— Ашағыҙ, әсегеҙ, рәхәтләнеп күңел асып ултырығыҙ. Бик һәйбәт кешеләр бит һеҙ барығыҙ ҙа. Хушлашыу мәжлесе өсөн бер нәмә лә йәл түгел, — тине күңеле йомшара төшкән Аль-

фреда, күҙ йәштәрен саҡ-саҡ тыйып тотоп. Быны һиҙеп ҡалып, уның күңелен күтәреү яйын эҙләгән Индрил:

— Альфреда һылыу, хушлашыу хөрмәтенә барыбыҙға ла ҡарап бик матур итеп бер йылмай әле. Шул һинең беҙгә бәхетле юл теләүең булыр, — тип һалды.

Альфреда башта ҡыҙарынды. Ҡыҙарыныу уның матурлығын тағы ла арттырып ебәрҙе. Шунан ул, ысындан да, ғәжәп ихлас матур йылмайҙы. Ысындан да, уның йылмайыуы: «Бәхетле булығыҙ!» — тигән теләген айырым-асыҡ итеп аңлатып тора ине. Был йылмайыуҙан һуң беҙҙең бәхетле булыу теләге шашҡын хыялға әйләнде. Был йылмайыу, гүйә, беҙҙең бәхетле булыуыбыҙға тулы ышаныс тыуҙырҙы. Әйтерһең, ошо мөләйем ҡатын барыбыҙға ла мөһим йомош ҡушҡан шикелле, бәхетле булырға наказ бирҙе, һәм беҙ ул наказды мотлаҡ үтәргә өҫтөбөҙгә йөкләмә алдыҡ.

Шулай рәхәт минуттар кисереп өҫтәл янында ултырған сағыбыҙҙа, тәҙрә алдында сандыр буйлы һуҡыр ҡарт пәйҙә булды. Уны мәйет төҫө ингән сирләшкә бер үҫмер етәкләгән. Улар икеһе лә, һалҡындан тештәре тешкә теймәй, ҡалтырана.

Тәҙрә артынан һуҡыр ҡарттың ялбарыулы тауышы ишетелде:

— Хөрмәтле хужалар, һеҙҙең күркәм табынығыҙҙа бер гармун уйнап сығырға мөмкин булмаҫмы икән?

— Әйҙүк, әйҙүк, — тип Индрил менән Новиков, урындарынан ырғышып тороп, уны инергә саҡырҙылар, ә Буранбай ҡартты ҡаршыларға ишек алдына уҡ сығып китте.

Альфреда тәҙрә яңағына һөйәлеп уйға батҡан Индрил янына барҙы, ҡыйыуһыҙ нәзәкәтлелек менән уның иңбашына ҡулын һалды, улар бер-береһенә әйтеп аңлатҡыһыҙ тәрән һағыш менән ҡараштылар, йәнә түбән ҡаранылар. Был моңһоу, өнһөҙ тамашаға шаһит булғыбыҙ килмәй, алдан һөйләшеп ҡуйған шикелле, барыбыҙ бер юлы, һуҡыр музыкантты ҡаршыларға тигән һылтау менән, ишеккә йүнәлдек. Беребеҙ — ҡарттың үҙен, икенсебеҙ — уны йөрөткән сирләшкә үҫмерҙе етәкләп, өсөнсөбөҙ — туҙып бөткән гармунды ҡосаҡлап, өйгә кире индек. Беҙ ингәндә, Индрилдың беләге Альфреданың иңбашында ине, һәр икеһенең дә керпектәрендә тос тамсылар аҫылынып тора. Индрил шунда уҡ беҙгә ҡаршы килде, ҡарт менән үҫмергә урын күрһәтте. Ҡоро һөлдәгә ҡалған үҫмер, әлбиттә, арҡаһы менән йылы мейескә һөйәлеүҙе артығыраҡ күрҙе.

Ҡарт бер ҡайғылы көйҙө уйнап сыҡҡас та, Индрил унан һорай һалды:

— Күҙегеҙҙән ҡайһылай яҙҙығыҙ, олатай?

Ҡарт усы менән бер күҙенән башлап сикәһе буйлап түбән төшөрөп, шырт баҫҡан эйәгенән уратып, шунан икенсе күҙ урынына мендереп, яй ғына һыйпап сыҡты. Нурһыҙ йөҙөнә йылмайыуға оҡшаш бер нәмә сығарҙы, гармунының телдәренә

баҫҡылап, тәрән уфтаныу һымаҡ ауаздар сығарҙы, яй ғына һүҙ башланы:

— Нисек, тиһегеҙме? Һәр ерҙә һорайҙар уны. Һәр ерҙә һөйләйем. Тик унан ғына күҙ асылып китмәй шу-ул... Һеҙ ҙә бына һуғышҡа китеп бараһығыҙ. Тик, балаҡайҙар, күҙҙәрегеҙҙән яҙырға Хоҙай ҡушмаһын. Мин дә бит уларҙы япон һуғышында юғалттым. Эй-йе-е, мине һуғыш, һуғы-ыш күҙһеҙ ҡалдырҙы! Беҙ ни, офицерҙарҙың әтәсләнеүенә ышанып, япошканы бүрек менән бәреп йығырбыҙ, тип кенә барғайныҡ та, улай булып сыҡманы. Шундай иттереп ҡыҫып алдылар, йәҙрәләрҙе һиптерә башланылар, бәреп йығырға тип әҙерләп барған бүректәребеҙҙе лә юғалтып, аяҡтарыбыҙҙы көскә-көскә һөйрәп ҡасып ҡотолдоҡ. Ҡайһыбыҙ аяҡһыҙ, ҡайһыбыҙ ҡулһыҙ, бәғзебеҙ, бына минең ише, күҙһеҙ ҡайттыҡ, ә бик күптәребеҙҙең ғәзиз баштары Маньчжурия ерҙәрендә тәгәрәп ятып ҡалды. Ул һуғыш миңә нимә бирҙе тиһегеҙме инде? Бына күрәһегеҙ, ун ике йыл хәҙер ошолай тәҙрәнән тәҙрәгә, тупһанан тупһаға йөрөп, хәйерселәп йән аҫрайым. Исмаһам, әжәле лә тиҙерәк килеп алмай бит. Был һуғыш та инде тегеһе кеүек. Меңәрләп ғәрип-ғөрәбә... Меңәрләп етем-еҫер... — Ул, нимөһен һөйләп торорға тигән шикелле, һул Ҡулын өмөтһөҙ һелтәне лә, ҡабат һорау биргеләгәнсе, өлгөрөп ҡалайым, типтер инде, тағы гармун телдәренә баҫҡыланы, моңло көйгә һыҙҙырып ебәрҙе, ҡарлығыңҡыраған тауыш менән үҙе лә ҡушылды:

Йәшәгәндәр туғандар,
Эшсе халыҡ булғандар...
Көнө-төнө эшләп тә,
Аслы-туҡлы торғандар...
Япондарҙың йәҙрәһенән
Башын һалған берәүһе...
Мукден тигән ерҙәрҙән
Күҙһеҙ ҡайтҡан берәүһе...

Һуҡыр ҡарт рус-япон һуғышының ҡот осҡос мәхшәрҙәре хаҡында, унан һуң эшсе халыҡ өҫтөнә ябырылған ҡанлы афәт хаҡында йыр менән бәйеткә тартым оҙон хикәйәт һөйләне.

Бәйет барыбыҙҙы ла бик ныҡ әҫәрләндерҙе. Альфреда күптән инде һығылып-һығылып илай. Хәсрәтле йыр аралаш уның һулҡылдау тауышы былай ҙа тулышҡан күңелдәргә өҫтәмә ауырлыҡ һала. Йоҙроҡтарыбыҙ ирекһеҙҙән йомарланған. Һуҡыр ҡарт бер аҙ тын алып торғанда, Новиков, ярһып китеп:

— Бына бит, туғандар, был олатай һуғыш хаҡында әсе хәҡиҡәтте йырлай. Беҙ һуғышып йөрөйбөҙ... Баштарҙы һалабыҙ... — тип һүҙ башлағайны, ҡарт, уның һүҙен ошо урында өҙөргә теләгәндәй, аһ-зар тулы бәйетен тағы ла моңлораҡ итеп дауам итте. Ярһыуы ҡанмаған Новиков тәҙрә янына китте лә,

Альфреданың үтенесен дә онотоп, ҡулдары ҡалтыранған килеш тәмәке төрөргә тотондо.

Һуҡыр музыкант, башын бер яҡҡа ҡыйыҡайтып артҡа ташлап, бер ни күрмәгән күҙҙәре менән ниндәйҙер нөктәгә төбәлеп, уйнай ҙа уйнай. Ул инде беҙгә гармуны менән бер бөтөн булып күренә; икеһе бер йөрәк булып уҡмашып, халыҡ өҫтөнә ябырылған ҡайғы-хәсрәтте, бер бөтөн моңға өйләндереп, бәйән итәләр. Уның бармаҡтары гармун телдәренә ҡағылмаған да кеүек; әйтерһең, сал сәсле был һуҡыр музыканттың күңел ҡылдарына гармун телдәре туранан-тура тоташҡан да унан ағылып сыҡҡан зарлы моңдарҙы тәкрарлап ҡеүәтләп кенә бара. Хатта был моңдоң йыр моңо икәне лә онотола, ул меңләгән халыҡтың бер күңелдән иңрәү ауазы булып ишетелә. Ул — йәшләй тол ҡалған ҡатындарҙың, етем балаларҙың, урамға ташланған ғәрип-ғөрәбәнең нәфрәт ауазы; музыкант юғары тондарға күсеп, көслө аккордтар алғанда, ниндәйҙер протест, буйһонмаусылыҡ ноталары ҡеүәтле аһәңдәр булып дөрләп китә; улар көрәшкә саҡырыу ораны булып ап-асыҡ яңғырай; урам тулы халыҡтың ер һиңкетеп атлап барыу тауышы ишетелгәндәй булып, уларға ҡушылырға йөрәкте елкетә. Көслө аккордтар фронттағы һалдаттарға өндәү булып яңғырағандай: «Эй, туғандар! Ҡанлы һуғышты туҡтатығыҙ! Өйҙәрегеҙгә ҡайтығыҙ! Балаларығыҙҙың һәм ҡатындарығыҙҙың ҡанын әсеүселәрҙән үс алығыҙ!»

Гармун телдәре иң юғары тауыштар менән ошо ҡеүәтле оранды ташланы ла ҡапыл тынды. Музыкант, яурынын турайтып, гармунының әлмәктәрен эләктерә башланы. Беҙ, музыка тыңлағанда ниндәй хәлдә торһаҡ, хистәребеҙҙән айный алмайынса, һаман шул килеш ҡатып торабыҙ.

Беренсе булып Байғужа телгә килде:

— Иҫ китмәле шәп уйнай! Йөрәктәрҙе телеп-телеп ала! Был тиклем күп телдәргә баҫырға бармағың нисек етә һинең, ағай кеше? — тип һоҡланды ул һәм, картҡа яҡыныраҡ килеп, гармунды һәрмәштереп ҡарай башланы.

Беребеҙ ҙә шәйләмәй ҡалганбыҙ, ни арала был шинелен иҙәнгә йәйеп йөҙ түбән ятҡан Иртуғанов, тәрән уйға сумған көйө, ҡуш усын яңағына терәп, ҡуҙғалмай ята бирә.

Иң ныҡ әҫәрләнеүсе был юлы ла Индрил булып сыҡты. Ул ҡартты ҡосаҡлап үк алды:

— Талант һиндә, ағай кеше! Ҙур талант! Күптән былдай шәп музыка ишеткәнем юҡ ине!

— Ни эшләйһең бит, йән аҫрағаның шул булғас... — тип баҫалҡы ғына яуап бирҙе ҡарт.

Шунда Иртуғановыбыҙ беренсе мәртәбә телгә килде:

— Юҡ, олатай, һин был музыкаң менән йән генә аҫрамайһың... Ҙурыраҡ эш башҡараһың... Үҙең белепме, белмәйме, һин өйҙән өйгә хәҡиҡәт өләшәһең... кешеләргә йән өрәһең, күҙҙәрен асаһың... Рәхмәт, олатай, шулай йәшә, оҙаҡ йәшә!.. —

Ул һикереп торманы, хатта урынынан да ҡуҙғалманы, әммә ҡысҡырмай ғына әйткән был һүҙҙәренең мәғәнәһе барыбыҙға ла һәйбәт аңлашылды. Барыбыҙ ҙа, баш ҡағып, уның һүҙенә ҡушылғаныбыҙҙы белдерҙек.

Был арала беҙҙең киң күңелле Альфредабыҙ һуҡыр музыкант менән уның юлдашының тамағын туйҙырыу хәстәрен күрә ине.

Беҙ, Иртуғанов янына иҙәнгә ултырышып, ҡарт үҙе ишетмәһен өсөн, шым ғына һөйләшә башланыҡ:

— Был кешенең талантлы музыкант булыуы хаҡында һүҙ ҙә юҡ.

— Тик шунығы, ватан һәм батша хәҙрәттәре өсөн ҡан ҡойған, тома һуҡыр ҡалған. Хәҙер уны барыһы ла онотҡан.

— Эйе, «ватан өсөн» күҙһеҙ ҡалған кеше урамға ташланған. Ошо гармуны булмаһа, күптән эт урынына берәй ҡойма буйында ятып үлер ине, меҫкенкәйем.

Буранбай Индрил ға боролоп һүҙ ҡушты:

— Бына һин — беҙҙең арала фәлсәфәгә иң шәп кешеһең. Һуғышта еңеп сыҡһаҡ, батша хәҙрәттәре беҙгә алтын тауҙары вәғәҙә итә. Уныһы уҡ булмаҫ та инде булыуын. Үлеп ҡалғандарына бер ни ҙә кәрәкмәй. Бына ғәрипләнеп ҡайтҡандарға дворецтар һалып бирерме икән? Әйтәйек, бер ярҙамсыһы булмағандарға?..

Индрил ҡысҡырып көлөп ебәрҙе:

— Дворецтар! Ҡапсығыңды киң тот! Миллион ғәрипкә һарайҙар һалып биргәнен көтәһеңме? Был — көлкө генә. Һарай һалып биреү түгел, үҙ һарайына бер саҡрым яҡын ебәрмәҫ. Петербургта 9 ғинуарҙа ни булғанын хәтерләмәйһеңме ни?

Әңгәмәне тыңлап шым ғына ятҡан Иртуғанов шунда ҡырҡа хәрәкәт менән торорға ҡуҙғалды:

— Дөрөҫ әйтәһегеҙ, егеттәр. Барыбыҙ ҙа бер уйҙа икән! — тип йылмайҙы ул. Быға саҡ беҙ уға һағыраҡ ҡарап йөрөй инек әле. Ошо һүҙҙәрҙән һуң ул беҙгә айырыуса яҡын булып күренде, ысын-ысынлап үҙ кешебеҙгә әйләнде.

Ҡарт менән үҫмер, ашап алғас, гармунды сепрәккә төрә башланылар. Шунда Индрил тоҡсайынан ап-аруҡ яңы гимнастеркаһын тартып сығарҙы ла ҡартҡа бирҙе. Ҡапсыҡтарыбыҙҙы һәрмәштерә торғас, уға иҫкерәк салбар менән, ямалған булһа ла, ботинка ла табылды.

Һуҡыр музыкант ҡыуанысының сиге юҡ ине.

Беҙҙең күңелдәребеҙҙе сикһеҙ әҫәрләндергән был көн — Дунаевец ҡалаһында торған һуңғы көнөбөҙ булды. Артыбыҙҙан һығылып илап ҡалған, барыбыҙ өсөн дә бер туған апайыбыҙ йә һеңлебеҙ кеүек яҡын булып бөткән Альфреданы һуңғы күреүебеҙ булды был көн.

Иртәгеһенә беҙҙең колонналар, батҡаҡлы юлда аяҡтарын көс-хәлгә айырып ала-ала, фронтҡа йүнәлде.

## ДҮРТЕНСЕ БҮЛЕК

Беҙ тағы фронтта. Беҙҙе 415-се Львовский полкка ҡуштылар. Һуңғы һуғыштарҙа бик ҙур юғалтыуҙарға дусар булған был полк ял итер һәм тулыландырылыр өсөн тылға сығарылғайны. Ул Дунаевецтан килгән мең ярым штыктан торған маршевый батальонды үҙ эсенә йотто. Беҙҙе роталарға бүлгеләнеләр, шунан строевой һәм тактик занятиелар башланды. Индрил, Новиков һәм мин элемтә командаһына эләктек, телефон хикмәттәрен өйрәнергә тотондоҡ. Башҡа иптәштәребеҙҙе икенсе батальондың етенсе ротаһына ҡуштылар. Иртуғановты бер отделениеға командир булырға мәжбүр иттеләр.

Фронт яҡын ғына, тик көслө һуғыштар барғаны тойолмай. Туп тауыштары онотҡанда бер генә ишетелә, кискә табан ғына ике яҡтан да пулеметтар бытырлашып ала.

Беҙ өсәү, әйткәнемсә, телефонға өйрәнәбеҙ: катушкалар һүтәбеҙ, сымдар һуҙабыҙ, аппараттар урынлаштырабыҙ, һөйләшәбеҙ, телефонограммалар тапшырабыҙ һәм ҡабул итәбеҙ. Был эш беҙгә ҡулай ғына булып сыҡты, сөнки, нисек әйтһәң дә, бында иреклерәкбеҙ. Өҫтөбөҙҙән аҡырып-екереп йөрөүсе юҡ. Индрилыбыҙ — телефон менән таныш кеше инде. Новиков менән мине өйрәтеүҙе уға ышандырып тапшырҙылар. Ул телефон аппаратын һуңғы шөрөбөнә тиклем һүтеп ташлай ҙа әүәҫләнеп тотоноп алып китә аңлатырға! Э Новиков менән беҙ, тәмәкеләребеҙҙе ҡабыҙып алып, ҡырын ятып тыңлайбыҙ, шунан үҙ алдыбыҙға һүтеп ташланған аппаратты йыйырға өйрәнәбеҙ. Шунан илле сажин самаһына сым һуҙып, станция һымаҡ бер нәмә ҡорабыҙ ҙа Новиков менән, башыбыҙға ни килһә, шуны һөйләшергә, тел сарларға йәбешәбеҙ. Алйотланыуҙың сигенән сыға башлаһаҡ, Индрил трубкаға ҡысҡырып туҡтата һала:

— Етәр һеҙгә, нимә баҡылдайһығыҙ унда? Бик әсегеҙ бошһа, ятып йоҡо һимертә тороғоҙ. Мин башҡалар менән шөғөлләнә торайым. Кәрәгегеҙ булһа, уятырмын.

Беҙ, күндәм кешеләрсә, трубкаларҙы һалып ҡуябыҙ ҙа, күңелдән хәтирәләр дәфтәрен аҡтарып йәиһә киләсәккә хыяли пландар ҡороп, ваҡыт үткәрәбеҙ.

...Һуғыштың ахыры күренмәй ҙә әле. Бары ла уның тағы ла оҙонға һуҙыласағы хаҡында ғына һөйләйҙәр, күрер күҙгә лә ҙур һөжүмгә әҙерләнеү һиҙелеп тора. Кременчугта беҙ һалдаттар араһында һуғышҡа ҡаршы ҡотҡо алып барырға тип һүҙ беркетешкәйнек. Был хаҡта беҙ фронтҡа килер алдынан да күп һөйләнек. Ләкин, бында килгәс, әле йүнле-башлы бер ни ҙә эшләгәнебеҙ юҡ. Исмаһам, Таминко кеүегерәк берәйһен осратаһы ине. Иртуғановты һаман булһа аңлап еткермәйбеҙ. Үҙе бар донъяһына асыулы әҙәм, шулай ҙа беҙҙең алда сиселеп китергә ашыҡмай. Айырым-айырым һалдаттар менән һуғыш хаҡында һүҙ асабыҙ икән, улары шым ғына тыңлайҙар ҙа

өмөтһөҙ рәүештә һул ҡулдарын һелтәйҙәр. Әйтерһең, барыһы ла, мотлаҡ һәләк буласаҡтарына ышанып, бынан иҫән-һау әйләнеп сығасаҡтарына тамам өмөт өҙөп килгәндәр. Һуғыштан ҡырҡа баш тартырға тип өндәргә ҡылдарын тарткылап ҡарауыбыҙ хәҙергә бер һөҙөмтә лә биргәне юҡ. Фронтҡа килгәне бирле үҙебеҙгә теләктәшлек итерлек бер генә кеше лә тапмаһыҡ, тиһәк тә, хата булмаҫ. Үҙебеҙҙең бәләкәй төркөм эсендә һүҙ ҡуйыртыуҙан да ҙурыраҡ эш башҡара алғаныбыҙ юҡ әле.

Өнһөҙ ҡалған телефон аппараттары янында ятҡан сағыбыҙҙа Новиков менән бына шул хаҡта фекерләшәбеҙ, үҙ пландарыбыҙҙы нисек ғәмәлгә ашырырға икән, тип баш ватабыҙ. Индрил был көйөнөслө әңгәмәбеҙҙең уртаһында була алмай. Уның эше бик күп; ана, ул башҡалар менән шөғөлләнә. Роталағы иптәштәребеҙ менән бары кистәрен генә, ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына осрашабыҙ.

Бына шулай көн артынан көн үтеп тора, позицияға инер ваҡыт та етә; ә алғы һыҙыҡта, мәғлүм инде, бындай эштәр менән шөғөлләнергә форсат булмаясаҡ.

Новиков бер нисә мәртәбә инде ҡулын ярһынып һелтәп әйтте:

— Ҡалаларҙа забастовка ойоштороу — бер нәмә урынына тормай, ә бында иһә һәр береһе үҙе өсөн генә ҡан ҡалтырап тора, был тамуҡтан бары үҙенең иҫән сығыуын ғына ҡайғырта.

Был турала һүҙ ҡуҙғалһа, хәҙер Индрил өндәшмәй генә тәрән уйға ҡалыусан булып китте, әңгәмәгә ләм-мим тип ҡушылмай. Йөҙ сырайына ҡарап, бына-бына ул йәнә Дусяһы хаҡында һүҙ башлар тип көтәһең; тик, әйтергә кәрәк, фронтҡа килгәс, был хаҡта ул ауыҙ асып бер һүҙ әйтмәҫ булды. Новиков та Варшава янында ҡалған Ирочка менән Женяны һөйләүҙән төңөлдө.

— Үткән эштән төш яҡшы, — тип кенә ҡуя ул. — Өҫтәүенә, хәҙер Варшава немецтар ҡулында.

Бер мин генә күңелемдә бер йылы иҫтәлекте ҡәҙерләп һаҡлайым, тик был хаҡта әлегә бер кемгә бер һүҙ ҡатҡаным юҡ. Күрәһең, кәрәген тапмағанмындыр инде. Был иҫтәлек поляк татары ҡыҙы Мәрйәм Ҡарашайскаяның яҙып бүләк иткән кескәй дәфтәре булып, минең күкрәк кеҫәмдә һаҡлана. Унда ошондай матур һүҙҙәр теҙелгән: «Юлдарыбыҙ тура килһә, беҙ, моғайын, осрашырбыҙ әле. Һинең ябай, ләкин һөйкөмлө һының мәңгелеккә минең күҙ алдымда торор. Миңә хаттарҙы йыш яҙып тор, йәме?!» Ә был яҙыуҙың аҫтында үҙҙәренең Петроградтағы өйҙәренең адресын күрһәткән. Тик минең әле уға бер генә хат та яҙғаным юҡ; сөнки ни өсөндөр уға хат яҙырға ниндәйҙер башҡа төрлө тел, башҡа төрлө ҡабарынҡы матур һүҙҙәр кәрәктер төҫлө тойола. Шулай булғас, мин уға башҡаса хат яҙа алмамдыр ҙа һымаҡ. Ваҡыт тейгән араларҙа, иптәштәремдән йәшереп кенә мин уның яҙыуын алып уҡыйым,

уның ҡойоп ҡуйған матур һынын, иҫ киткес сибәр йөҙөн күҙ алдыма баҫтырырға тырышам. Эйе, Мәрйәм, ысындан да, тиңе булмаҫтай матур ҡыҙ шул. Фронт михнәттәрен кисергәндә, һаҫыҡ, ҡараңғы барактарҙа йәшәгәндә, ул тағы ла матурыраҡ булып тойола; ул ысынбарлыҡта бөтөнләй миңә осрамағандыр, мин уны үҙ хыялым менән әкиәт итеп уйлап сығарғанмындыр ҙа үҙем шуға ышанам, табынамдыр һымаҡ. Уның хаҡында уйлау ғына ла ауыр минуттарҙа күңелгә еңеллек, йыуаныс бирә, өҫтөңә ябырылған ҡыйынлыҡтар, тормоштоң тупаҫлыҡтары бер нисә минутҡа онотолоп тора. Тик ҡайҙалыр алыҫ түгел ерҙә гөрһөлдәп ярылған туп тауыштары һине шунда уҡ ысын донъяға кире алып ҡайта, тәмле төш күреп йоҡлаған сағыңда тертләп уянғандағы шикелле, яманһыу булып китә, йөрәгеңде һалҡынлыҡ сорнап ала. Күҙ алдымда фәрештәләй булып баҫып торған Мәрйәм һынын ҡара төтөндөң дәһшәтле йомарламдары шәфҡәтһеҙ рәүештә ҡаплап китә; йөҙәр саҡрымдарға һуҙылған, ҡәбер һалҡынлығы бөркөп ятҡан окоптар, уларҙа минут һайын үлемдәрен көтөп ятыусы меңәрләгән һалдаттар, әллә кемдәрҙең ғәзиз балалары... Бына бөгөнмө, иртәгәме беҙҙе лә шунда тубырлатып алып барып тултырасаҡтар. Унда беҙҙе ниҙәр көтә? Ниҙәр яҙылған икән беҙҙең маңлайҙарға? Был ғазаптарҙың сиген күрә алырмы икән бер гонаһһыҙ әҙәм балалары?!

## БИШЕНСЕ БҮЛЕК

Октябрь айында ҡапыл аяҙытып ебәрҙе, көн йылынды. Көндәр йонсоу торғанда, дошман һөжүм башларға батырсылыҡ итмәҫ, тип уйлай инек, хәҙер сәғәт һайын атака көтәбеҙ. Мин дүртенсе ротала телефонист булып торам, Новиков — һигеҙенселә, ә Индрил — полк штабында. Мин көн һайын тиерлек ун икенсе ротала булам, Буранбай һәм Байғужа менән күрешеп торам. Беҙҙең дуҫтарҙан Иртуғанов бер үҙе беренсе ротала. Уның менән күрешеп тә, һөйләшеп тә булмай. Улар урман артында урынлашҡандар. Индрил ғына бер-ике мәртәбә телефондан хәлен белешә алған.

Дошмандың һөжүм башларын көтөп, позицияларҙы нығыталар. Беҙ телефонистарға ла яңы эш табылды, — ағас баштарына элеп һуҙылған сымдарҙы һүтеп алып, окоптар буйлатып ергә күмәбеҙ.

Бына бер аҙна инде алғы һыҙыҡта ятабыҙ. Налдаттар төнө буйы алһыҙ-ялһыҙ позицияларҙы нығытыуҙа тир түгәләр, ҡыҫҡа ғына ял бары көндөҙҙәрен генә тейә. Ашау яғы бөтөнләй хөртәйҙе. Төшкөлөккә әллә нindәй тәмһеҙ балыҡ бешерәләр; ашай башлаһаң, ярты ғүмереҢ ҡылсыҡтарын сүпләп үтә. Быға тиклем иртәнсәк, әҙерәк булһа ла, аҡ май бирә торғайнылар, хәҙер уның урынына иҫкереп бөткән сыр киҫәге генә өләшәләр.

Көндөҙҙәрен сәй ҡайнатып эсер мөмкинлек юҡ. Төтөн сыҡҡан урын күреп ҡалдылармы — немецтар шунда уҡ сәй янына күстәнәскә снаряд артынан снаряд ебәрә башлайҙар. Шул сәбәптән, көнө буйы һалҡын һыу һәм сейле-бешле арыш икмәге менән хушланырға тура килә. Өҫтәүенә, махорканы ла бик һирәк — әжәл дарыуы урынына ғына бирә башланылар. Тартмай түҙә алмаған һалдаттар окоптар буйлап «ҡырҡ» йә «егерме» не атырға һағалап, тилмерешеп йөрөйҙәр, хатта инде «егерме»не эләктереп ҡалып, ирендәрен көйҙөрә башлаған төпсөктәрҙе лә иптәштәренең күҙенә тилмереп ҡарап:

— Бир, үҙем ташлайым, — тип һорап алалар. Һин тартып торғанда, берәү килеп, «ҡырҡ» тип заявка бирә икән, йә һин иптәшеңдән һорап алған «ҡырҡ» менән ләззәтләнгән саҡта, икенсе берәһе «егерме» ти икән, баш тартырға хаҡың юҡ. Был — яҙылмаған ҡанун. Окопта ул боҙолмай, изге итеп һаҡлана. Сөнки бөгөн һин берәүгә төпсөгөңдө ҡалдырып бирәһең икән, иртәгә бит һинең үҙеңдең уға шул уҡ йомошоң төшәсәк. Шулай итеп, һәр төрөлгән сигарКаны, йыйылышып алып, кәм тигәндә, өсәү-дүртәү тарта, ыңғайҙа, фронт ауырлыҡтарын һөйләп алып китәләр.

— Былайға китһә, һуғыш үҙенән-үҙе бөтөр. Уйлап ҡарағыҙ, ас кешене нисек һуғыштырмаҡ кәрәк? — тип һығымта яһай береһе.

Алам-Һалам ашауҙан һалдаттар араһында эс ауырыуҙары таралды. Көн һайын роталарҙан околодокка унар-ун бишәр һалдатты оҙаталар. Унда ла эс ауырыуҙарының һәр төрлөһө өсөн дә бары бер генә дарыу бар: ул да булһа, касторка. Эсе ауыртыуға зарланып килгән һалдаттарҙы врач ҡарап та, һорашып та тормай, касторка эсерә лә шунда уҡ окопҡа кире ҡайтара. Околодоктан касторка эсеп ҡайтҡандар, эҫтәренән түҙә алмай, ыҙғырышып, блиндаждарҙа тәгәрәшәләр. Икенсе көн околодокка тағы китәләр, тағы ла шул уҡ хәл ҡабатлана.

Ошоларҙың барыһының да һөҙөмтәһе булып, дезертирлыҡ һәм үҙҙәрен-үҙҙәре яралау күренештәре башланды.

Тик үҙ-үҙен яралаусыларҙың эштәре күбеһенсә уңып сыҡмай, яҡындан атыусыларҙың тәнендә бешкән урын ҡала; быны белеп алып, врачтар уларҙы тикшереүгә бирәләр. Хәрби-полевой суд уларҙың бәғзеләрен — атырға, бәғзеләрен дисциплинарный батальондарға ебәрергә хөкөм итә.

Бынғы мәлдәрҙә һалдаттар үҙҙәренең ҡулдарына үҙҙәре атыуҙың яңы ысулын уйлап таптылар — атыласаҡ урындарын ҡалын итеп еүеш сепрәк менән урайҙар. Шулай иткәндә, атылған урын көймәй һәм врачтарҙа шик тыуҙырмай. Элегерәк бындайҙар, ғәҙәттә, бармаҡтарын ғына атып йәрәхәтләй торғайнылар; эҙәрлекләүҙәр көсәйгәс, ышандырырлығыраҡ булһын өсөн, хәҙер балтырҙарына, хатта һум иттәренә лә атыуҙан тартынмай башланылар; ошолай үҙҙәрен үҙҙәре ғәрипләтеп булһа

ла, был ыҙаланыуҙарҙан ҡотолорға тырыша әҙәм балаһы. Бындай хәлдәр торған һайын йышайҙы. Хатта фронтта һил булып торған араларҙа ла ошондай «еңел яраланыусылар» була ине. Хәҙер инде врачтар, шул арҡала, ысынлап та еңелерәк яраланғандарҙан да хыял күрә башланылар *— тылға ебәрмәй, полковой околодоктарҙа ғына дарыу һөртөп, әштер-өштөр бәйләйҙәр ҙә частарына кире ҡайтаралар.

Нахаҡҡа рәнйетелеп, яралы көйөнсә окоптарҙа һыҙланып йөрөгән һалдаттар араһында ризаһыҙлыҡтар, начальствоға, айырыуса врачтарға ҡарата, нәфрәт менән теш ҡайрап йөрөүҙәр йышайҙы. Көҙөмтәлә полковой околодокта бер врачты граната ташлап үлтерҙеләр.

Иртән, ғәҙәттә, позицияла тыныслыҡ хөкөм һөргәндә, Индрил миңә телефон шылтырата. Иң башта ул штабта булған яңылыҡтарҙы белдерә, шунан башҡа иптәштәрҙән дә телефон буйынса алынған сәләмдәр тапшыра. Һәр һөйләшеү үткән көндәрҙе һағынып иҫкә төшөрөү менән тамамлана. Индрил Альфреданы айырыуса бер йылылыҡ менән телгә ала:

— Беҙҙә, штабта ла, насар ашата башланылар, иттең төҫөн дә күргән юҡ, — тип зарлана һәм шуның артынса уҡ: — Их, хәҙер Альфреданың һыйҙарынан ауыҙ итәһе ине ул! т— тип хыял итеп ҡуя. —Әйткәндәй, бөгөн мин уға хат яҙҙым. Барығыҙҙан да сәләм ҡуйҙым. Шәп ҡатын!.. — тип өҫтәй.

Шунан Индрил, мине ҡотортҡандай, Альфреданың өҫтәлендәге һыйҙарҙы теҙеп тасуирлап китә.

— Индрил, туҡта, тием! Язалама ас кешене! — тип ҡысҡырам, ауыҙ һыуҙары ағыуын тыя алмай.

— Ярар, үҙемә лә ҡыйын булып китте, — ти ул, ғәфү үтенгәндәй. Шунан тауышы юғала. Мин уға ҡысҡырам:

— Һин нимә, хушлашмай ҙа трубканы һалып ҡуйҙыңмы әллә?

— Юҡ, Альфреданы уйлайым. Мин уны ысынлап яраттым, шикелле, туғанҡай. Был тамуҡтан иҫән сығылһа, билләһи, әйләнәм мин уға...

Уның ихлас әйтелгән был һүҙҙәренә мин бер яуап та ҡайтармайым. Хәҙер инде минең өндәшмәүем уның үҙен шомландыра башлай.

— Нимә, телеңде йоттоңмо әллә? — тип ҡысҡыра Индрил.

— Нимә әйтәйем инде... Буш хыял тиһәм... Ҡуғыш ҡасан бөтә лә, ул бөткәнсе, әллә кем бар, әллә кем юҡ тигәндәй...

Күрәһең, минең был һүҙҙәрем уның йөрәгенә үк барып ҡаҙалды. Ул, ярһынып, ҡаршы төштө:

— Юҡ, Булат, был буш хыял ғына түгел инде. Хәҙер һуғыш оҙаҡҡа һуҙыла алмай. Хәҙер инде һалдаттар ғына түгел, офицерҙар үҙҙәре лә, һуғыш оҙаҡҡа һуҙылмаҫ, тип һөйләйҙәр. Берәй тилергән снаряд кәүҙәбеҙҙе он-талҡан яһамаһа, туп итеп ҡайтып төшөрбөҙ әле...

Аҙаҡҡы һүҙҙәрен Индрил үҙе лә төшөнкө тауыш менән әйтә, сәсәгәндәй итеп, тамаҡ ҡырып ҡуя. Әле һөйләткәндә үҙен күреп тормаһам да, был һүҙҙәрҙе әйткән саҡта, уның маңлайында һырҙар барлыҡҡа килеп, йөҙө ҡомһарып киткәнен беләм.

Индрил менән һөйләшкәндән һуң, уйға сумам. Фронттың теге яғында, Польша ерҙәрендә, тороп ҡалған Ира менән Женя иҫкә төшә. Хәҙер инде улар беҙҙе онотҡандыр ҙа, яндарында немец һалдаттары йәки офицерҙары юхаланып уралаларҙыр. Кем белә, ҡыҙҙар инде уларҙың ҡайһы берҙәренә ғашиҡ булып та өлгөргәндер, ҡасандыр беҙгә яҙған шикелле, уларға ла иң ҡайнар мөхәббәт һүҙҙәре менән нағышлап, хаттар яҙа торғандарҙыр. Был уйҙар көнсөллөк хистәре уята, бөтә ҡаршылыҡтарҙы селпәрәмә килтереп емереп, улар янына барып етәһе лә, яндарында буталып йөрөгән офицерҙарҙы атып бөтөргәс, Ирочканы туйғансы үбәһе ине.

Хыял даръяһында күңел ҡанғансы йөҙөп, фани донъяға әйләнеп ҡайтҡас, көрһөнөп ҡуям да, ҡуйынымдан Мәрйәмдең дәфтәрен сығарып, тағы ла бер мәртәбә уҡыйым. Уның менән осрашыу мөмкинлеге ҙурыраҡ. Нисә әйтһәң дә, ул Петроградта. Әгәр яраланып, шул ҡалаға лазаретҡа барып эләкһәм, уға шунда уҡ хат яҙыр инем, ул яныма йүгереп килеп етер ине. Шул уйҙар башыма килгәс, тиҙ генә еңелсә яраланғы килә. Иҫәр хыялыма бирелеп, мин телефонымды ташлайым да, бер нәмәнән ҡурҡмай, үрә баҫып окоптар буйлап атлап китәм.

Баш осонан, юғарынан, немец аэропландары беҙҙең тылга осоп уҙҙы. Ауыр снарядтар гөрһөлдәп ярыла. Улар беҙҙең батареяларҙы ҡапшаштыра, алғы һыҙыҡҡа килтерелә торған ғәскәрҙәр, обоздар араһынан үҙҙәренә ҡорбандар эҙләйҙәр. Эҙләйҙәр, табалар һәм кемдәрҙеңдер гонаһһыҙ ғәзиз кәүҙәләрен ботон ботса, ҡулын ҡулса айырып, йыйып ерләр нәмәһен дә ҡалдырмай, тупраҡ фонтандары менән бергә күккә күтәрәләр.

Э алғы һыҙыҡта бер ни тиклем тыныс, тик һирәк-һаяҡ мылтыҡ атыштары гына ишетелеп ҡала. Окоптағы һалдаттарҙың төҫөнә ҡарарлыҡ түгел: биттәрендә турғай суҡып алырлыҡ та ит ҡалмаған, ирендәре күм-күк, эскә батҡан күҙҙәре һүрән ҡарашлы. Олораҡтарҙы көрәк һаҡалдар баҫҡан; әле һаҡал да сыҡмаған, балалыҡтарынан айырылып та етмәгән йәштәрҙең ҡобараһы осҡан йонсоу йөҙҙәренә ҡарау бигерәк тә ҡыҙғаныс. Барыһының да ҡаштары емерелгән, тештәре ҡыҫылған, сәйнәп ташларға әҙерҙәр. Төнгө ҡарауылдан ҡайтҡандар, позиция нығытыуҙа эшләгәндәр шунда уҡ окоп стеналарына һөйәлеп йә хатта лысҡылдап ятҡан аяҡ аҫтына ауып йоҡлайҙар. Иртәгеһе көн хаҡында уйлауҙан бары ла төңөлгән, ошо минут менән генә йәшәйҙәр. Килеп ярылған һәр бер туп, дошман яғынан атылған һәр пуля үлем алып килә бит. Уларҙың ҡайҙа килеп ярылырын, ҡайҙа килеп тейерен кем

белә. Нисек һаҡланыу әмәлен табып бөтмәк кәрәк. Хатта сиктән сығып йонсоп йоҡоға киткәндә, иртән уяныруңа өмөт юҡ. Был хәлде ғүмерендә лә күреп кисермәгән бераү ҡапыл ошонда килеп эләкһә, аҡылдан яҙыр ине; ә бындағылар йәшәй, сөнки окоп тормошо тәүге минуттан уҡ кешенең зиһенен ала, мейеһен зәғифләтеп, аңын томалай. Был йәһәннәм тормошо кешеләрҙе фекер йөрөтөү ҡеүәһенән мәхрүм итә. Һәр кем киләһе минутта үҙенең яҙмышы хәл ителеүен көтә. Был хәл ителештең ғәҙәттәге ике төрө бар: береһе — үлем, икенсеһе — яраланып, был ҡот осҡос мәхшәр мөхитенән ҡотолоу. Һуңғыһын һәр кем күңелендә матур хыял итеп һаҡлай; шул уҡ ваҡытта был өмөттөң, ҡылға бәйләп аҫылынған ауыр таш шикелле, теләһә ҡайһы минутта өҙөлөп төшөрөн дә белә.

Көҙгө ҡараңғы оҙон төндәрҙә үлем шәүләһе артынан бер тотам ҡалмай эҙәрлекләй. Прожектор уттары күҙеңде сағылдырып үтһә, үлем ҡайһы еремдәнерәк ялмап алырға самалай икән, тип, арҡа һабаҡтарың семерләп көтәһең. Алыҫта ярылған шрапнелдән ләүкеп ҡалҡҡан ут көлтәһе эргәңдә генә булып тойола, хас та инде ул һинең тәнеңде ялмап ала. Йөрәк атылып сығыр сиккә етеп дарҫлай. Төнгө атыштар, көндөҙгөләргә ҡарағанда, йөҙ мәртәбә шомлораҡ күренә. Күҙгә төртһәң күренмәҫ төндәрҙә һәр шәүлә, һәр ҡыштырлау ҡотто ала.

Ошондай хәтәр төндәрҙең береһе ине. Һигеҙенсе ротанан Новиков телефон шылтыратты.

— Ауыр хәбәр әйтергә йыйынам, туғанҡай, сабыр бул, — тип, төшөнкө тауыш менән иҫкәртте ул.

— Әйт тиҙерәк, ни булды?

— Буранбай ҡаты яраланған, тиҙәр. Үлем хәлендә ята, ти.

Башыма приклад менән һуҡтылармы ни, — бер һүҙ әйтә алмай, иҫәңгерәп, сүгәләп ултырҙым.

Новиков ҡалтырауыҡ тауыш менән, инәлгәндәй, дауам итте:

— Рәтен тапһаң, барып күрергә тырыш әле, пожалуйста, донъя хәлен белеп булмай... Мин дә барам...

— Ярар! — Мин трубканы атып бәрҙем дә эргәмдә иҫ белмәй йоҡлаған һалдатты уята башланым:

— Макаров, тор йәһәтерәк!

Иләҫләнеп уянған һалдат, бер ни төшөнмәй, күҙҙәрен асалаҡ-йомалаҡ итеп ултырҙы ла, ҡапыл ырғып тороп, блиндаж ишегенә атлыҡты:

— Нимә, атакамы?

Мин уның еңенән матҡып тотоп алдым:

— Юҡ, юҡ, борсолма. Һине мин уяттым.

Әҙерәк аңына килгәс, хәлде ҡыҫҡа ғына итеп һөйләп бирҙем.

— Бар, бар, — тине ул әүәҫ кенә.

Мин сыҡтым. Хәүеф тулы ҡараңғы төн. Ара-тирә унда-бын-

да пулеметтар, төн тынлығын йыртҡылап, бытырлашып алалар ҙа тағы тыналар. Алыҫ та түгел, уң флангыла туптар ярыла. Күккә бер-бер артлы ракеталар сөйөлә. Ер өҫтөн ике яҡтың да прожекторҙары сатрашлап һәрмәшә. Буранбайҙар ротаһы тәңгәленә һәрмәнә-һәрмәнә барып еттем тигәндә генә, еңел снаряд алдыма төшөп ярылды. Уның ярсыҡтары ҡолаҡ төбөмдән генә сыйнашып һыҙғырып үтте, хатта тындары бәрелеп ҡалғандай булды. Юҡ, был юлы ла теймәне. Юғиһә Буранбай дуҫым менән үк бергәләп йә тегендә, йә бында юл тотаһыбыҙ икән...

Буранбайҙы эҙләргә тотондом.

Шунда Байғужаның шат тауышын ишеттем:

— Ә мин һине ҡараңғыла шәүләңдән үк танының! — Ул, йүгереп килеп, ҡосағыма атылды. — Их, һағындым мин һине, туғанҡай! — Шунан ҡайғылы итеп өҫтәне: — Бына Буранбай ҙа... — Әйтер һүҙ тапмай торҙо, еңемдән тартып, үҙенә эйәртте. — Бына бында ул.

Блиндажға индек. Ьүрән ^ктыға күҙ эйәләшмәй торҙо. Шунда уҡ аяҡ аҫтында ыңғырашып ятҡан яралыларға баҫмаҫ өсөн, һаҡ ҡына атлап, түпкә үттек. Унда бөтөнләй ҡараңғы ине. Байғужа ҡайҙандыр бер шәм төпһәһе табып алды. Буранбайҙың күҙҙәре йомоҡ, бите, мәйеттеке кеүек, күм-күк.

— Буранбай! Буранбай! Хәлең нисек? — тип йомшаҡ ҡына итеп өндәштем.

Ишеттеме ул, юҡмы — тауышы булманы. Бер аҙҙан тағы өндәшкәс, ауыр ыңғырашты:

— Әсем... әсем яна... һыу... — тигән өҙөк-өҙөк ғазаплы өндәр сығарҙы. Ниндәйҙер аңлайышһыҙ һүҙҙәр әйтеп, һаташып китте, тағы тынды. Мин дуҫымдың янып барған маңлайына ҡулымды ҡуйып торҙом, Байғужа фляғаһынан тегенең ауыҙына һыу тамсылатты.

Әллә бая тауышымдан танып ҡалған, әллә маңлайындағы ҡулымдан таныны, — күҙен дә асмаған көйөнсә, һүҙып ҡына:

— Булат... дуҫка-йы-ым! — тип ыңғырашты. Бәлки, һаташыу аша хәтерләүе булғандыр, — төшөнөү ҡыйын ине.

— Ҡорһағын аҡтарған, — тине Байғужа, мин уны шунда уҡ күреп алған булһам да.

Шунда Буранбай күҙен асты, мине күреп, йылмайғандай итте:

— Бу-лат... килгәнһең икән... рәхмәт... ә мин... уф, әсем яна-а...

Өндәшмәй тороу ҡыйын ине. Икәүләп йыуатырға тотондоҡ:

— Хәлең ул ҡәҙәре ауыр түгел.

— Бына һауығып китерһең әле...

— Ю-уҡ, — тип өмөтһөҙ ыңғырашты Буранбай. — Рәнйеп иҫкә алмағыҙ...

— Ҡурҡма, беҙ һине ҡалдырмабыҙ. Хәҙер санитарҙар килә. Перевязочныйға үҙебеҙ алып барабыҙ.

Буранбай, күҙен йомоп, йәнә һаташа башланы. Эргәбеҙҙә булмаған Индрилға, Новиковҡа, бер руссалап, бер башҡортсалап өндәште, рәхмәттәр әйтте, бәхилләште.

Санитарҙар ярҙамында носилкаға күтәреп һалғанда, уның аңы бер килке бөтөнләй асыҡланғандай булды.

— Ипләберәк атлағыҙ. Йәшеренеберәк... Үҙегеҙгә пуля тейеп ҡуймаһын... Һаҡланығыҙ... — Тағы тынды.

Перевязочный пунктҡа ҡәҙәр булған ике саҡрым арала Байгужа менән икебеҙ ҙә бер һүҙ ҙә һөйләшмәнек. Урман ауыҙындағы землянка янына ҡара тиргә батып барып туҡтаныҡ. Носилканы ергә ҡуйғас, яралы дуҫыбыҙ тағы ла ауыр ыңғырашты. Беҙ ни тиклем борсолоп ғауғаланышһаҡ та, йыуан фельдшер менән санитар ашыҡманылар. Фельдшер яңы килтерелгән яралыға ҡайырылып ҡына бер ҡараны ла йыуан итеп ураған тәмәкеһен тәмләп тартыуын дауам итте. Эйе, улар инде был хәлгә күнегеп бөткәндәр. Ҡулдарынан ошондай ауыр яралылар көнөнә йөҙәрләп үтә.

Санитар ҡайсы менән Буранбайыбыҙҙың ҡорһағына уралған, ҡара ҡанға үтәнән-үтә мансылып ҡатҡан марляны ярып ебәрҙе, еүеш мамыҡ менән яраның тирә-яғын таҙартты.

Фельдшер тәмәкеһен дә ташламаны, Буранбайҙың яраһына ҡағылып та ҡараманы, бары вайымһыҙ тауыш менән генә:

— Разрывной пуля тейгән. Бында бер ярҙам да күрһәтеп булмай, — тине һәм сестраларға әмер бирҙе: — Ҡабат бәйләгеҙ ҙә операционныйға оҙатығыҙ.

Бәйләгәндә Буранбай өҙләкһеҙ ыңғырашты; шунан, ауыртыуы баҫылғандай, тынды.

— Повозкалар килгәс, оҙатырбыҙ. Һеҙгә китергә мөмкин, — тине фельдшер.

Ныҡлап яҡтырғайны инде. Тышта һалҡын.

— Ә улар тиҙ киләме? — тип һораным, бер аҙ көткәс.

— Улар яңы ғына киттеләр әле, — тигән һүрән яуап булды.

Шунда, беҙҙе юллап, Индрил менән Новиков килеп етте.

— Ни хәлдә? — тип борсолошоп һоранылар, йыш-йыш тын алып.

Байғужа менән мин өндәшмәй генә носилкала ятҡан дуҫыбыҙға күрһәттек. Улар баштарын сайҡап ҡарап торҙолар. Мин шул хаҡта ғына уйлап торғанда, Новиков:

— Ни ҡарап торабыҙ? Үҙебеҙ алып киттек, — тине. Операционный пункттың ҡайҙа икәнен һораштыҡ.

Фельдшер яралыны беҙгә биреп ебәрмәҫкә маташты:

— Хаҡым юҡ!

— Кеше үлем хәлендә... — Новиков ҡыҙып китте. — Күрһәтермен мин һиңә правоңды, тегеләй-былай итәйем...

Фельдшер ҡымшанманы ла:

— Хаҡым юҡ! Роталарығыҙға ҡайтығыҙ! Юғиһә хәбәр итәм. — Ул телефонға ымланы.

Новиков, мылтығын яурынынан алып, затворын шылтырата башланы:

— Атып үлтерәм, палач!

Фельдшер йомшарғандай булды, ул ялбарыусан тауыш менән:

— Ни эшләйем һуң, егеттәр? Мин дә бит һалдат... Мин дә бойороҡ үтәйем. Мә, атығыҙ! — Ул винтовка көбәгенә күкрәге менән килде.

Шунда ахылдап төшкән Иртуғанов землянкаға килеп инде, араларына инде. Хәлде төшөнөп алғас, ҡыҫҡа һәм тыныс ҡына итеп әйтте:

— Алып китәбеҙ!

Унтер-офицер погондары һәм шинеленең иҙеүен ни өсөндөр ҡайтарғанда күренеп ҡалған Георгий тәреһе фельдшерҙы тамам йомшартты, ул шунда уҡ ризалыҡ бирҙе; ишек алдына сығып юлды бәйнә-бәйнә өйрәтеп, оҙатып ҡалды.

Бишәүләп юлға сыҡтыҡ. Бер саҡрым самаһы барғас, Буранбай күҙен асты, барыбыҙға ла Ҡарап сыҡты, йәнә йылмайғандай итте, тик ул һыҙланып йөҙ һытыу рәүешендә генә беленде. Барыбыҙҙы ла таныны, тағы ла бергә йыйылыуыбыҙға һөйөндө шикелле ул. Нисек кенә булғанда ла, мин шулай аңланым.

Бер аҙ баргас, Буранбай ятҡан еренән өҙгөләнергә тотондо. Беҙ уны ҡыуарган сиҙәмгә ҡуйып, нимә менән ярҙам итергә белмәй, аптырашып торҙоҡ. Тыныслана төшкәс, тағы алып киттек.

Сирек сәғәт самаһы үткәс, дуҫыбыҙҙың тын алышы ла беленмәй башланы. Буранбайыбыҙ был донъяны ҡуйғайны инде.

Иртуғанов, телефон табып, роталарына хәбәр итте. Буранбайҙы урман ситенә, ҡарт ҡарағай төбөнә күмдек. Бишәүләп өр-яңы ҡәбер тупрағы тирәләй оҙаҡ өндәшмәй ултырҙыҡ. Күҙемде томалаған күҙ йәштәрем аша мин Буранбайҙың кеҫәһенән сыҡҡан хатты уҡыйым:

«...Ғәҙелбайың тыумай ҙа ҡалғайны бит әле. Һин уны күҙ алдыңа ла килтерә алмайһыңдыр. Тупылдап атлап йөрөй. «Эттә! Әттә!» — тип һине таптыра. Бигерәк үҙеңә оҡшаған. Уға ҡарайым да һине күргәндәй булам. Бигерәк һағынабыҙ шул икәүләп. Һин иҫән-һау йөрөп тиҙерәк ҡайтһын тип, тын алған һайын теләк теләйем.

Иҫә елдәр, иҫә елдәр,
Иҫә елдәр файҙаһыҙ...
Төндә төштәремдә күрәм,
Көндөҙ әллә ҡайҙаһың?..»

...Эй һин, йәш кенә тол ҡатын! Кескәй сабыйың менән һеҙ икәү, моғайын, яҡшы хәбәрҙәр генә көтәһегеҙҙер. Һин кескәй улыңа, атайың тиҙ ҡайта, тип һөйләгән булып, үҙеңдең янған

йөрәгеңде йыуатҡан булаһыңдыр; иҫән-һау тиҙерәк ҡайт тип көнө-төнө доғалар ҡылаһыңдыр. Ниндәй ауыр ҡайғылар көтә һеҙҙе — сабыйың менән икегеҙҙе! Ниҙәр күрер икән һеҙҙең башҡайҙарығыҙ?..

Ә Буранбай тәбәнәк кенә тупраҡ өйөмө аҫтында ята. Ул унда мәңгегә киткән. Уны инде беребеҙ ҙә ҡабат күрә алмаҫ. Моғайын, ул үҙе лә үлем алдынан һөйөклө ҡатыны һәм әле үҙе күреп тә өлгөрмәгән кескәй сабыйы хаҡында уйлағандыр...

Байғужа, уйҙарымды белгән кеүек, миңә яҡыныраҡ шыуышып, һүҙ ҡуша:

— Мәрхүмкәй (был һүҙ Буранбайға ҡарата һис йәбешмәй төҫлө) ошо һуңғы хатты көнөнә әллә нисәшәр ҡат уҡый ине. Бер ҡыуана, бер ҡайғыға ҡала ине. Ҡабат фронтҡа килеп эләгеүебеҙгә үкенеп бөтә алманы... Күрәһең, күңеле менән һиҙемләгәндер инде...

## АЛТЫНСЫ БҮЛЕК

Беҙҙең уң флангыға килеп, гусарский полк позицияға ятты. Ғәҙәттә, кавалерия частары һәр саҡ тылда булалар, һөжүм мәлендә генә алғы һыҙыҡҡа сығарылалар ине. Пехота частары етешмәгәнгә, күрәһең, гусарҙарҙы окопҡа килтереп тултырғандарҙыр.

Үҙебеҙҙең полк менән элемтә булдырыр өсөн мине уларҙың расположениеһына ебәрҙеләр. Мин һәр ваҡыт полк штабында полковник Бибиков янында дежурҙа торам, полктар үҙ-ара алыша торған сводкаларҙы ҡабул итәм йәиһә тапшырам.

Индрил менән һөйләшеп алам, иптәштәр хаҡында белешеп торам. Ул ҡайһы бер ваҡытта мине Новиков менән тоташтыра, ә Новиков иң башлап миңә:

— Һаумы, штаб крысаһы! — тип ҡысҡыра.

Быны ул, әлбиттә, уҫал ниәт менән әйтмәй, шулай ҙа ҡыйын булып китә. Уның юҡ-бар мәрәкәләүҙәренән тиҙерәк ҡотолоу өсөн, мин тиҙерәк Байғужаның хәлен һорашырға ашығам. Новиков етдиләнә.

— Эйе, Буранбай һәләк булғас, уға бер үҙенә бик ҡыйын.

Шунда беҙҙең һөйләшкәнде тыңлап торған Индрил һүҙгә ҡушыла:

— Мин уға махорка-маҙар ебәргеләп торам, онотмайым. Һәм оноторға ла ярамай. Бергәләп әсеһен дә, сөсөһөн дә күп татыныҡ бит. Ә Иртуғанов үҙе штабҡа йыш килә. Ул бомбометная командаға күсергә ниәтләй. Ну, емереүҙе ярата ла инде.

Күбеһенсә Новиков һөйләшеүҙе ризаһыҙлыҡ белдереү менән бөтөрә:

— Окопҡа килдек тә һаҫып ятабыҙ шунда. Һуғыштың осоҡырыйы күренмәй ҙә. Солох хаҡында ла бер һүҙ юҡ. Үҙебеҙ

ҙә күпме һөйләнгән булдыҡ. Ҡоро тел булып ҡалдыҡ, ахырыһы, Буранбайыбыҙ һәләк булды. Шулай барыбыҙҙы ла берәм-берәм сүпләп бөтөрөрҙәр әле. Бынау мәхшәрҙә, мин иҫән ҡалырмын, тип кем ышанып әйтә ала. Эй-й, һеҙ штаб крысаларына нимә, пулялар һеҙгә тиклем барып етә алмай...

Телефон аша нисек әрепләшеп китәһең инде, шунда һүҙҙе өҙөргә тура килә. Трубкала Индрилдың тәрән көрһөнөүе ишетелеп ҡала, — әҙерәк фәлсәфә һатып алырға мөмкинлек булмауына әсе бошоуылыр, ахыры. Мәғәнәләп, кинәйәләп һөйләшеп алырға бик ярата шул беҙҙең Индрил дуҫыбыҙ.

— Берәй бушыраҡ ваҡытың булһа, йүгереп кенә килеп сыҡ әле. Үҙеңә генә әйтәһе хәбәрем бар, — ти ул хушлашыр алдынан.

Бер мәл Индрил үҙенең бер революционер менән таныш булыуын ысҡындыра яҙып ҡалғайны. Һалдаттар араһында аңғартыу эше алып бара икән теге. Шулай ҙа әле булһа дуҫыбыҙ һүҙенең айышына беҙҙе ныҡлап төшөндөргәне юҡ әле. Күрәһең, йән дуҫтарына ла асмаҫ лып; булғас, бик ҡаты серҙер инде ул. Беҙ уның асылып китерен көн һайын көтәбеҙ, тик һаман булһа унан бары бер генә һүҙ ишетәбеҙ: «Һалдаттарға был һуғыштың һис кемгә кәрәкмәгәнлеген аңлатығыҙ, аңлыраҡтарын үҙ тирәгеҙгә ылыҡтырығыҙ».

Һалдаттар менән беҙ һәр бер мөмкин булған урында әңгәмә алып барабыҙ. Мәғлүм инде: бер генә һалдат та һуғышты артабан дауам иттереү яғында түгел; һәр сәғәт, һәр минутта ғына ла түгел, тын алған һайын был мәғәнәһеҙ ҡан ҡойоштоң туҡталыуын теләйҙәр, сөнки һәр бер тын алыш араһында ғүмереӊ киҫелеп ҡуймаҫ тип бер кем дә ышандырып әйтә алмай. Беҙҙе былай илке-һалҡы ғына эш алып барыу һис кенә лә ҡәнәғәтләндермәй; донъяһының аҫтын өҫкә килтерерлек — ҙурыраҡ эштәр ҡылғы килә — тәҡәт бирмәй. Һис юғында, Кременчугтағы шикелле, бер мәртәбә дер һелкетеп алаһы ине. Миңә ҡалһа, бында, окопта ятҡанда, бының өсөн мөмкинлектәр ҙә ҙурыраҡ, — һәр кемдең ҡулында ҡорал бар. Тик, әллә ни эшләптер, һәр кем үҙенең ғүмерен һаҡлап алып ҡалыу йәһәтен генә уйлап тик ята. Билдәле инде, кемдең генә бер мәғәнәһеҙгә ятып үлгеһе килһен. Мәғәнәһе, иманы юҡ был һуғыштың. «За отечество! За царя!» — тип ҡубып сығабыҙ. «За отечество» тигәне бик аңлайышлы инде. Уныһы инде, «үҙ әсәң әсән» тигән кеүек, ҡаныңа һеңгән. Эле Наполеон яуында уҡ бының өсөн меңдәр-миллиондар башын ихлас һалған. Тик бөгөн «за царя» тип күкрәгеи пуля йәки штыкка ҡуйыусы мөкиббән киткән иҫәрҙәр көн һайын кәмей бара. Батша менән уның ярандары ҡотороп типтереүҙәрен дауам итһен, уларҙың тыныс типтереүҙәрен һаман да һаҡлайыҡ тип, хәҙер кемде генә инде үлем ғәрәсәтенә ышандырып ҡыуып алып бараһың? Тик ойошҡанлыҡ етмәй, минеңсә; һалдаттар берҙәм рәүештә

һуғыштан ҡотолоу өсөн көрәшкә ҡалҡһын тиһәң, ойошҡанлыҡ кәрәк, ситтән ниндәйҙер бер ҙур этәреш кәрәк, барыбыҙҙы ла бер көслө ағым итеп тупларлыҡ бер ҡеүәтле оран кәрәк. Был оран бер юлы бөтөн фронт буйлап таралһын, бер тында бөтә кешеләрҙең уй-хистәрен ялмап, биләп алһын ине. Беҙ һәр сәғәт ошо оранды көтөп йәшәйбеҙ. Йә ҡапыл бер ҡырҡа боролош рәүешендә, һис юғында, солох хаҡындағы бер хәбәр булып килһен ине был көткән нәмәбеҙ. Тик көткән нәмәбеҙ һаман юҡ та юҡ.

Штабта ултырғас, миңә был хаҡта, өҙөм-йортом ғына булһа ла, хатта офицерҙарҙан да ишеткеләргә тура килә. Улар кил-ке-килке полковник Бибиков янына йыйылып алалар ҙа тото-налар һуғыш һәм солох хаҡында ҡыҙып-ҡыҙып бәхәсләшергә, беренең тауышын икенсеһенекенән айырыу ҙа ситен булып китә. Минең бер ҡолағым — телефонда, икенсеһе тегеләрҙең һүҙен аулай. Үҙемдә уларҙың һөйләшеүҙәренә иҫе лә китмәгән кеше ҡиәфәте. Полковник үҙе был һөйләшеүҙәргә, ғәҙәттә, бик үк әүәҫ ҡыҫылып бармай, дәрәжәһен һаҡлай; бер арала фор-сат табып, башҡаларға артыҡ һиҙҙермәй генә, һүҙҙе йә һунар хәлдәрен һөйләүгә, йә шунда ғәйре бер еңелерәк мәрәкәгә әйләндереп, офицерҙарҙың һүҙен икенсегә бороп ебәрергә тыры-ша. Ысынлап та, полковник Бибиков, һунар тиһәң, үлә лә китә торған әҙәм шул. Хатта ошонда, фронтта, ятҡан сағында ла ул йә ҡор атырға, йә бүҙәнә аңдырға сығып китергә яйын таба. Алғы һыҙыҡта саҡ ҡына һил булдымы — һунарға сыға ла китә. Уның адъютанты, поручик Толстой, тегенең ғәҙәттәренә күнегеп бөткән. Полковникты окоптан һорайҙар икән, Бибиков дивизия штабына китте, тип яуап бирә; дивизия штабынан һорайҙар икән, полковник окоптарҙа йөрөй, тип яуап бирә. Әгәр ҙә инде, шул яуапты алғас, полковникты тиҙерәк баталь-ондарҙың береһенән булһа ла тоташтырығыҙ, тип ҡыҙырталар икән, Толстой, ул әле генә батальондан һеҙҙең янға сығып кит-те, тип яуабын таба. Шулай алдашып, бөтә мөмкин булған һылтаныштарын сығарып бөткәс, поручик, ҡоторған йыртҡыс төҫлө, бүлмә буйлап ары-бире йөрөргә тотона, өҙлөкһөҙ тарта, ауыҙ эсенән һүгенә, минут һайын тәҙрәнән килеп ҡарай.

— Бына бит, эттән тыуғыры ҡап ҡорһаҡ! Оперативный сводка таптыралар, ул юҡ та юҡ! Алдашырын алдашып та бөттөм инде. Ышанмай ҙа башланылар... — Шунда ул ордина-рецты таба ла полковникты эҙләргә сығарып ебәрә.

Тегеһе эҙләп-эҙләп йөрөй ҙә, ҡылы ла ҡыбырламаған кеше һымаҡ, ҡайтып урынына ауа. Унан полковник ҡайтып инә.

— Нимә, штабтан һоранылармы? — тип адъютантҡа тыныс ҡына өндәшә.

— Эйе, господин полковник, дивизия начальнигы һораны. Мин һеҙҙе алғы линияға китте, тинем, —- тип аңлата Толстой һәм ни рәүешле алдағанын бәйнә-бәйнә һөйләп алып китә.

Вайымһыҙ ҡиәфәтен һаҡлаған килеш, полковник һунарсылыҡ ҡорамалдарын бер-бер артлы һалып урындарына элеп ҡуя, шунан һунарҙа күргән мажараларын ашыҡмай ғына һөйләргә тотона, элегерәк булған хәлдәрҙе лә һағынып иҫкә алып үтә. Поручик Толстой, полковнигының әңгәмәләрен тыңларға теләһә-теләмәһә лә, сыҙап ултырырға, тейешле урынында аһ итеп һоҡланырға йә ҡыҙғанып көрһөнөп алырға мәжбүр. Юғиһә, уға полковниктың бик ныҡ хәтере ҡалыр ине. Һөйләй-һөйләй, шулай ярты папирос тарта ла шунан ғына ашыҡмай-са телефонға үрелә. Үҙен саҡырған кеше менән иҫәнләшкәс, әле генә поручик алдап һөйләгәндәрҙе һүҙмә-һүҙ тиерлек ҡабатларға керешә:

— Эйе, эйе, алғы һыҙыҡта булдым. Әле генә ҡайттым. Әллә ни үҙгәрештәр юҡ. Бар нәмә лә әҙерлек хәлендә. Һеҙгә сводка кәрәкме? Хәҙер бирербеҙ уны.

Шуларҙы һөйләп бөткәс, полковник карауатҡа һуҙылып ята ла папиросының ҡалған яртыһын тартырға тотона. Тартып бөтәрәк, шул уҡ папиросынан ңкенсеһен ҡабыҙа, бер үк ваҡытта ниндәй ҙә булһа берәй ҡағыҙҙы уҡый. Шуны уҡып сыҡҡас, хәҙер адъютантына берәй бойороҡ бирер инде тип көтәһең, ә ул уның урынына, ҡағыҙҙы бер яҡ ситкә шылдырып ҡуя ла, денщигын саҡырып алып, һунарҙа бысранған итегенә ишара итә.

— Итекте йыуып бөткәс, бүҙәнәләрҙе таҙарт та картуф менән ҡур. Ашарға капитан Кобылинды саҡырырһың, — ти.

Шунан һуң ғына адъютанты поручик Толстойҙы саҡырып ала ла үҙе һунарҙа йөрөгән арала булған хәлдәрҙе төпсөнөп белешергә тотона, шунан эшкә керешә. Батальон командирҙарын аллы-артлы телефонға саҡырта, алғы һыҙыҡтағы хәлдәрҙе белешә; тора торғас, ауыҙын асып иҫнәй, кирелә-һуҙыла башлай. Адъютантын да өҫтәл янына саҡырып, ашап ала ла, сисенеп тә тормай, карауатҡа ауа.

— Әҙерәк баш терәп торайым. Бары штабтан генерал Кучин шылтыратһа ғына уятырһығыҙ, — ти.

Полковник тормошон ҡора белә. Әйтерһең, ул фронтта түгел, бер хәүефһеҙ ерҙә, үҙ дачаһында инде. Эреләнеү, һауаланыу уның холҡона һис тә хас сифат түгел, бер кем алдында ла үҙенең юғары чины менән ҡуҡырая белмәй. Ул бөтә кеше менән дә бер төрлө — кеселекле мөғәмәлә итә, бойороҡ тонын ҡулланмай тиерлек. Инде һүҙ һунар хәлдәре тирәһендә ҡуйыра башлаһа, полковнигыбыҙ торғаны сабый балаға әйләнә лә ҡуя. Ул минең менән дә йыш ҡына әңгәмәләшә башланы. Тәүҙә мин унан бик ояла, тартына инем, тора-бара ҡыйыуландым. Сит кеше юҡта, икәүҙән-икәү ҡалып һөйләшкәндә, беҙҙең әңгәмәләр бигерәк оҙаҡҡа һуҙыла, ҡыҙығыраҡ та, етдирәк тә булып сыға. Минең башҡорт балаһы икәнемде белеп алғас, беҙҙең халыҡтың һунарға әүәҫлеген, таҫыллығын серетеп маҡтап алып китә, ауыҙынан һыуҙары килә. Шунда ул киләһе

барыуында һунарға мине лә алып сығырға вәғәҙә итә. Һунарға барыр көндө телефон төбөндә дежур итергә икенсе берәүҙе йәһәт кенә саҡыртып ала. Беҙҙең тәү барыуыбыҙҙа һунар ғәләмәт уңышлы булып сыҡты. Украинаның төньяғында көҙлөктә бүҙәнәләр һәләк күп була имеш тә баһа! Улар иртәнсәк һәм кискеһен, тамаҡ туйҙырыр өсөн урман ауыҙына сығалар, ҡуйы һаҙ үләне араһында ҡымйышалар, һаҡһыҙ ҡыланалар, һунарсыны яҡын уҡ ебәрәләр. Оҫта атыусы бер тоҫҡауҙа унлабын бер юлы атып ала ала. Тик ҡуйы үлән араһынан аҙаҡ эҙләп табыуы ғына ҡыйын. Быға тиклем полковник бары үлгән бүҙәнәләрҙе генә тапҡан икән. Мин еңелсә яраланғандарын да эҙләп табып ҡуям. Шулай итеп, беҙ бер барыуҙа иллеләп бүҙәнә алып ҡайттыҡ. Был — полковник алдында минең абруйҙы бермә-бер арттырып ебәрҙе.

Фронтта әле бер аҙ һиллек хөкөм һөрә. Октябрь. Көндәрҙең аяҙ һәм йылы торошона ҡарап хөкөм йөрөткәндә, шулай ҙа оҙаҡламай йә беҙҙең яҡтан, йә дошман яғынан һөжүм башланасағын көтөү ҡыйын түгел ине. Ысынлап та, юғарынан — баш командованиенан килгән телеграммалар һәм телефонограммаларҙан күренеүенсә, һөжүмгә бик ныҡлы әҙерлек алып барыла. Алғы һыҙыҡҡа беҙҙән дә шунда уҡ йөкмәткеле бойороҡтар бирелә. Тик былырҙың береһе лә полковник Бибиковтың көндәлек тормошон да, кәйефен дә үҙгәртә алмай; ул ыжлап та бирмәй, ваҡытын йә һунарҙа йөрөп, йә һунар хаҡында кем менәндер әңгәмәләшеп уҙҙыра бирә.

Бер мәл полковник мине һәм коновод итеп ординарецын алды ла, өсәүләп, бер ун саҡрым самаһындағы урманға һунарға киттек. Ҡояш байырға ла күп ҡалманы. Бындағы крәҫтиәндәрҙең әйтеүенә ҡарағанда, ошо мәлдә урман ауыҙында ҡорҙар «туй мәжлесе» үткәрә, имеш. Шуны ишеткәс, полковнигымдың ашар ашы — аш булмай, йоҡлар йоҡоһо йоҡо булмай башланы.

Урман ауыҙына етәрәк, аттарҙы ординарец ҡулына тапшырҙыҡ та ҡорҙар туйлай торған урынды эҙләп киттек. Юл ыңғайы беҙгә ояһы-ояһы менән бүҙәнәләр тап була торҙо. Тик беҙ уларға ваҡыт исраф итеп тормаҫҡа булдыҡ, ҡағылмай ары китә бирҙек. Бына беҙҙең баш осонан ғына, ҡолтор-ҡолтор итеп, бер тиҫтә самаһы ҡор осоп үтте. Беҙ, йөрәктәребеҙ атлығып сығырҙай булып, рәхәт итеп дарҫлаған хәлдә, тегеләрҙең төшөр урынын самалап, алға атлыҡтыҡ. Хатта ҡайһы йүнәлештә барғаныбыҙҙы ла оноттоҡ. Беҙҙе бары һунар дәрте генә биләп алғайны. Был ваҡытта, мәғлүм инде, Бибиков башын юғалтырға ла әҙер. Күпме барғанбыҙҙыр. Мин инде аҙаштыҡ тип әҙерәк шыртлай ҙа башланым. Уйымды белгән һымаҡ, полковник та, хырылдауығыраҡ тауыш менән:

— Аттарҙы таба алмабыҙ, ахыры. Фронт яғына ҡарайыраҡ атлайыҡ. Берәй обоз урынлашҡан ергә барып сығырбыҙ әле, —

тип ҡуйҙы. Фронт тауыштары килгән тәңгәлгә ыңғайланыҡ. Барабыҙ. Барған һайын урман шырлығы ҡуйыра бара. Әленән-әле биттәрҙе сыбыҡ һыҙыра, ағас төмһәләренә абынабыҙ. Туҡтап-туҡтап, аралаш ҡолаҡ һалыштырып торабыҙ. Ьирәк-һаяҡ туп ярылған тауыштар тоноҡ ҡына булып ишетелеп ҡала. Ҡараңғылыҡ ҡуйырғандан-ҡуйыра. Атыш тауыштары асығыраҡ ишетелә башланы. Ахыр сиктә, беҙ урман шырлығынан асыҡ яланға килеп сыҡтыҡ. Күңелебеҙ күтәрелеп китте.

— Әҙерәк хәл алайыҡ, — тине полковник туҡтап, миңә портсигарын һондо. Беҙ өндәшмәй генә тарттыҡ та ары ҡуҙғалдыҡ. Тиҙҙән аяҡ аҫтыбыҙҙа һыу шаптырлай башланы. Алдыбыҙҙа һаҙлыҡ йәйелде. Шырпы һыҙа-һыҙа, бер түңгәктән икенсеһенә һикерәбеҙ. Улары ла барған һайын һирәгәйә. Ҡурҡып, кире бороლдоҡ. Шунда мин, тайып китеп, бил тиңенте һаҙ һыуына баттым. Ьаҙ һаман төпкә һура. Әллә аяғымда француз ботинкаһы ине. Итек булһа, уларҙы һаҙ һурып алып ҡалаһы ла, мин ялан аяҡ килеп сығаһымын икән. Полковникты ҡыуып еткәс, йүнәлеште самалап торҙоҡ. Каҙ буйлап һаман да һулға ҡайырып бара бирҙек. Таң атыр мәл дә яҡынлашты шикелле инде, хәлдән тайышҡан беҙ икәү алғы һыҙыҡҡа тамам яҡынлаштыҡ булһа кәрәк. Тик һаман да тере йән әҫәрен күргәнебеҙ юҡ әле. Йәнә бер аҙ атлағас, ботаҡтан ботаҡҡа һуҙылған ялан телефоны сыбығына барып ҡағылдым. Был беҙҙе дәртләндереп үк ебәрҙе, күңелдәребеҙҙә өмөт осҡоно ҡабыҙҙы: уның буйлап барһаҡ, беҙ һис шикһеҙ берәй часҡа барып сығасаҡбыҙ. Тик шатланыуыбыҙ иртәрәк булып сыҡты. Сыбыҡ беҙҙе яңынан урман шырлығына алып барып индерҙе һәм шунда өҙөлдө.

Ҡайҙалыр яҡында ғына пулеметтар тыҡырлаша, туптар ярылыша ла бит ни, тик бер генә лә кеше тауышы ишетелмәй шул.

— Күрәһең, беҙҙе урман эйәһе шаяртып үҙ артынан эйәртеп йөрөтәлер, — тип асыуланып еңелсә генә һүгенә биреп ҡуйҙы полковнигым һәм сыртлатып бер төкөрҙө лә хәл йыйырға йыуан ағасҡа һөйәлде. Әллә шулай аяғөҫтө серем итеп алды, әллә оҙаҡ итеп тәрән уйға бирелеп торҙо. Мин үҙем башлап һүҙ ҡушырға ҡыйманым. Йәнә тауыштарға ҡарап, алғы һыҙыҡ яғын тоҫмаллап атлау яғында булдыҡ. Башҡа сара юҡ ине.

Ҡапыл ғына беҙҙән һулдараҡ көслө атыш башланып китте. Винтовкалар шартлай, пулеметтар ҡабаланып сатырлай, һауаны өҙлөкһөҙ ракеталар яҡтырта, хатта урман эсе лә бер килке шомло йәшкелт ҡыҙыл һалҡын яҡтылыҡҡа сумып ала. Аралаш эргәбеҙҙән пулялар ҙа безелдәшеп үткеләй. Үҙебеҙҙең ҡайһы тирәлә аҙашып йөрөүебеҙҙе шәйләргә тырышып туҡтап торған арала, бик ҡаты артиллерия канонадаһы башланып китте. Туптар яҡында ғына ярыла, урман ыңғырашып-ыңғырашып ҡуя.

Мин өшөүҙән, тешем-тешкә теймәй, ҡалтыранам. Полковник Бибиков та, ҡаушауынан, ахыры, ҡалтырана башланы.

— Минең полкта бара түгелме һуң был атыш? Кәләк итте беҙҙе был ординарец. Ниңә шунда, аттарҙы етәкләп, беҙҙең арттан әйәреп килмәҫкә ине уға? Бөттө минең баш, туғанҡай! Был ҡәһәр һуҡҡыры урманды! Ни эшләргә инде хәҙер? Ҡайҙа барабыҙ, туғанҡай? Бына бит ахмаҡлыҡ! Эргәңдә генә ҡаты һуғыш барһын, ә һин, полк командиры, түмәр шикелле, ҡарурман төпкөлөндә ултыр! И-их, бөттө минең баш, бөттө, туғанҡай! — Ярһыуынан Бибиков тештәрен шығырлата, бармаҡтарын һындырғылай.

Беҙ һаман да атыш барған яҡҡа һәлпәнләйбеҙ. Арыҡкан, асыҡтырған, өшөтә. Бер аҙҙан йәнә асыҡ яланға килеп сыҡтыҡ. Тиҙҙән таң һарыһы үтә алғы һыҙыҡ ҡоролмаларын төҫмөрләй алдыҡ. Шул арала атыш та тына бирҙе. Ахыр сиктә, төн эсендә беренсе мәртәбә кеше тауышы ишетеү бәхетенә ирештек:

— Туҡта! Кем килә?

Беҙҙең алда өс рус һалдаты пәйҙә булды.

— Үҙебеҙҙекеләр, туғанҡайҙарым! — тип шатланып ҡысҡырҙы полковник. Шул арала ракета күкте яҡтыртты. — Бында ниндәй полк урынлашҡан? Алғы һыҙыҡ яҡынмы? — тип һорай һалды полковник. Һалдаттарҙың береһе, алға сығып, аңлатып бирҙе:

— Бында Пензинский полк тора. Ана теге окоптар алғы һыҙыҡтыҡы. Беҙ бында ҡарауылда торабыҙ.

Был һүҙҙәрҙән минең эскә йылы инеп китте, — тыуған йортома ҡайтып ингәндәй булдым.

Бер һалдат беҙҙе батальон командирына алып барҙы.

— Бында нисек килеп сыҡтығыҙ, полковник әфәнде? — тип аптырап һораны батальон командиры.

Бибиков, күҙен дә йоммай, алданы ла һалды:

— Минең полк ялға сығарылды. Шунан файҙаланып, кистән һунарға сыҡҡайным. Бына, төнө буйы аҙашып йөрөп, һеҙҙең полктың алғы һыҙығына килеп сыҡҡанмын.

Батальон командиры ышанды булһа кәрәк, башҡаса төпсөнөп торманы. Уның ҡайғыһы ла түгел ине, — алғы һыҙыҡта хәл торған һайын борсоулыраҡҡа әйләнә бара. Ул бер һалдатына беҙҙе оҙатып ҡуйырға бойорҙо ла үҙ эштәре менән сығып китте.

Пензинский полктың штабына килгәс, карта буйынса үҙебеҙҙең аҙашып йөрөгөн юлыбыҙҙы сама менән билдәләп алдыҡ. Ҡайтыр яҡҡа боролғас, һулға көрәгенән ныҡыраҡ ҡайырғанбыҙ ҙа алғы һыҙыҡтың артынан һуҙылған һаҙламыҡтың икенсе яғына барып сыҡҡанбыҙ. Наҙҙы уратып торған урман эсендә бер генә лә юл заты юҡ икән. Шуға ла, фронт яп-яҡын булһа ла, бер генә хәрби часть та, обоз да осратмағанбыҙ.

Бары сәғәт ундарҙа ғына беҙ гусарский полк штабына ҡайтып ауҙыҡ. Поручик Толстой беҙҙе бик ярһыған ҡиәфәттә ҡаршыланы. Уның ирендәре ҡалтырашып тора ине. Ул полковникка бик мөһим телеграммалар килгәнен әйтте. Полковник, ғәҙәтенсә, уны керпек тә ҡаҡмай, тыныс ҡына тыңланы. Ул, поручикка берәй һүҙ әйтәһе урынға, денщигын саҡырып алды ла:

— Йыуынырға һыу әҙерлә, шунан ашарға килтер, — тине. Бары шунан һуң ғына, ҡулын күкрәгенә ҡаушырып торған килеш, Толстойға: — Бына мин тамаҡ ялғап алайым, әҙерәк ял итәйем. Шунан һуң һинең менән һөйләшергә лә ваҡыт табылыр, — тине.

Ашап алғас, ул, бер ҡайғыһыҙ, ғәмһеҙ-моңһоҙ кешеләрсә, хырылдап йоҡлап та китте.

## ЕТЕНСЕ БҮЛЕК

Гусарский полк штабында һигеҙ көн дежурҙа торғас, мине алыштырҙылар. Үҙебеҙҙең полктың элемтә командаһына ҡайтҡас, мине алғы һыҙыҡҡа, беренсе рота ҡарамағына ебәрҙеләр. Хәҙер мин Иртуғанов менән бер подразделениеламын. Беренсе рота урынлашҡан ер бик насар һәм ҡурҡыныслы. Бында окоптар юҡ, сөнки рота урман эсендә, һаҙламыҡ урынға урынлашҡан, ышыҡланыр урын итеп, бары ҡом тултырылған ҡапсыҡтар ғына өйөлгән. Снарядтарҙан һаҡланыр өсөн блиндаж тигән нәмәнең бында еҫе-оҫо ла юҡ. Ерҙе бер көрәк ҡаҙып алдыңмы, шабырлап һыу эркелеп сыға. Немецтарҙың нығытмалары ла беҙҙеке кеүек үк. Шуға күрә көндөҙ ике яҡ та бер-берейһен атыш менән бимазаламаҫҡа тырыша. Бары ҡараңғы төшкәс кенә, секреттар ҡуйыла һәм күҙгә салынған бер шәүләгә аталар.

Көндөҙ беҙҙекеләр ҙә, немец һалдаттары ла үҙ расположениеларында һис бер йәшеренмәйенсә йөрөйҙәр, бер-беренә сәләм бирәләр, һөйләшәләр, хатта офицерҙар юҡ мәлдә, ике яҡтан да нығытмаларҙан сығып, урта төштә сауҙа ойоштороп ебәрәләр. Беҙҙең һалдаттар немецтарға икмәк, шәкәр бирә, ә тегеләр сигареттар, шараптар сығара. Бындай баш-баштаҡлыҡтарҙы күбеһенсә Иртуғанов ойоштора. Немецтар менән осрашырға теләүселәрҙән бер төркөм ойоштора ла улар менән бергә мотлаҡ Кригер-Соколовский тигән немецса белгән бер һалдатты ебәрә.

— Әйт уларға, беҙгә атмаһындар, шулай итһәләр, беҙ ҙә уларға атмабыҙ. Беҙ һуғыш теләмәйбеҙ, уны туҡтатыу өсөн көрәшәбеҙ. Улар ҙа шуның өсөн көрәшһендәр, — тип наказ биреп ебәрә.

Ҡайһы берҙә Кригер-Соколовский Иртуғановтың наказдарын ҡағыҙға яҙып ала.

— Әгәр иркенләп һөйләшергә ирек бирмәһәләр, ҡағыҙҙы ҡалдырып китермен, — ти ул.

Бындай осрашыуҙар күбеһенсә иртә таңдан була. Был саҡта атыш тына. Офицер әфәнделәр ҙә тәрән йоҡола була. Һалдаттар, һыу алып, нығытмаларҙан ситкә йыуынырға сыға. Немецтар ҙа шулай итә.

— Гутен морген! — тигән тауыш килә немецтар яғынан.

— Доброе утро! — тип ҡысҡыра беҙҙекеләр.

Йәиһә беҙҙекеләр немецса сәләм бирә, немецтар русса яуаплай. Беҙҙекеләр немецтарға икмәк ҡыйырсығы күрһәтә, тегеләр үҙ сираттарында флягаларын күтәрәләр. Шунан бер төркөм һалдат менән Кригер-Соколовский нығытмаларҙың алдына сығалар, немецтарҙы ла сығырға саҡыралар. Был төркөмдө күргәс, немецтар ҙа нығытмаларынан һибелеп сыға, һәм улар яғынан да бер төркөм беҙҙекеләргә ҡаршы йүнәлә. Братаниеға сығыусылар, ғәҙәттә, ике яҡтан да бер үк алыҫлыҡта — ҡап урталыҡта осрашалар. Был мәлдә нығытмала ҡалғандарҙың да һәммәһе нығытма өҫтәренә ябырылып ҡалҡа. Тегеләре лә, былары ла, фуражкаларын сисеп, бер-берен сәләмләйҙәр, ҡысҡырышалар. Күбеһенсә былар: «Беҙгә атмағыҙ, беҙ ҙә һеҙгә атмабыҙ!» — тигән мәғәнәгә эйә була.

Тора торғас, эш шуға барып етә — беҙҙең һалдаттар немецтарҙың нығытмаларына яҡын уҡ барып етәләр, йә тегеләр — беҙҙекенә. Ҡыйыуыраҡтары хатта сәнскеле тимер сыбыҡтар аша ла сыға. Бер-беренә дошман булған ике лагерҙың һалдаттары шул саҡта ҡул ҡыҫыша, ҡосаҡлаша, бер-берен ҡунаҡҡа саҡырыша башлайҙар. Осрашыу ысын байрам төҫөн ала. Эле төндә генә бер-береһенә үлемесле пулялар оҙатҡан дошмандар, бер туғандар кеүек, ҡайнар ҡосаҡлаша. Бер-беренең телен аңламаһалар ҙа, ым-ишаралар менән уй-тойғоларын аңғартырға тырышалар, һәр береһенең йөрәгендә бер нәмә — был ҡан ҡойошло һуғышҡа тәрән нәфрәт. Бер һаҡалтай рус һалдаты, немец һалдатына нығыраҡ төшөндөрөргә теләп, ҡат-ҡат ҡабатлай:

— Беҙгә һуғыш кәрәкмәй.

Шунан ул асыҡ иҙеүле күкрәгенә төртә лә алты бармағын күрһәтә. Йәнәһе, өйҙә мине алты балам тилмереп көтөп ултыра, тип әйтергә теләүе инде. Немец та, төшөндөм, тип баш һелкә лә үҙ сиратында өс бармағын күрһәтә. Шунан һаҡалтай, артына табан ҡулын болғап, үҙенсә тиҙерәк өйгә ҡайтып киткеһе килеүен белдерә. Немец та шул уҡ ишараны яһай һәм, ике ҡулын да күкрәгенә ҡыҫып, үҙенең балаларын бик нығ һағынғанын белдерә. Һаҡалтай яурындарына сырайын һытҡан килеш сәпәп ала ла мылтыҡ атыу ишараһы яһай. Йәнәһе, һуғыш алтын погонлыларға ғына кәрәк, тимәксе инде. Ә немец, үҙҙәренең яғына ымлап, ҡорһағын кәпәйтә, шуның менән һуғышты үҙҙәренең буржуйҙары теләгәнен аңғарта.

Братание ваҡытында был йолаға ҡатнашмай бер генә һалдат та ситтә ҡалмай. Күптәре, нығытмаларҙың башына баҫып:

— Бүтәнсәләй һуғышмайбыҙ! Әйҙәгеҙ, өйҙәргә таралышайыҡ! — тип һөрәнләйҙәр.

Быға яуап итеп, немец нығытмаларынан:

— Руски золдат корош. Война не нада! — тип ҡысҡыралар.

Үҙҙәре өсөн һис көтөлмәгән был хәлгә аптырап ҡалған офицерҙар, ҡоторған шикелле ҡысҡырышып, нығытмалар буйлап йүгерешергә тотоналар.

— Хәҙер үк туҡтатығыҙ был тәртипһеҙлекте! Хәҙер үк нығытмалар әсенә ҡайтығыҙ! Юғиһә, пулеметтарҙан ут асасаҡбыҙ!

Бынан һуң унтер-офицерҙар ҙа, нығытма баштарына һикерешеп менеп:

— Батальон командирының әмере буйынса тиҙерәк окоптарға ҡайтығыҙ! — тип һөрәнләшергә керешәләр.

Һалдаттар, теләр-теләмәҫ кенә, баштарын түбән эйгән килеш, нығытмаларга табан атлайҙар, үҙҙәренең ризаһыҙлыҡтарын белдереп, һуҡраналар, асыуҡтан-асыуҡ ҡысҡырып һүгенәләр. Оҙаҡламай икмәккә, шәкәргә шарап алмашып алып ҡайтҡандар ҡыҙмаса булып алалар һәм нығытманың төш-төш урынынан йыр тауыштары ишетелә башлай. Төндә ҡарауылда торған һалдаттар, йылыраҡ урын һайлап, йоҡларға ауалар.

Кригер-Соколовский тирәһенә һалдаттар төркөмө йыйылып алған. Ул немецтарҙан ишетеп ҡайтҡандарын һөйләй:

— Уларҙың береһе лә һуғышты дауам итергә теләмәй. Бары ла һуғыштан йөҙәгән. Һуғышты туҡтатырға, тип өндәмә таратып йөрөгән ике немец һалдатын тотоп хәрби ялан судына бирҙеләр һәм аттылар, тиҙәр. Немецтар, икмәкте аҙ бирәләр, насар ашаталар, тип зарланалар. Төшкөлөккә уларға фасолдән похлебка ғына бешерәләр икән. Әҙ генә үҫемлек майы һалалар, ти. Бары шуның менән генә йыуаталар икән, әҙерәк шарап өләшәләр ҙә тәмәкене етерлек бирәләр икән.

Һалдаттар Кригер-Соколовскийҙың һөйләгәнен ҙур иғтибар менән тыңлайҙар ҙа уны һорауҙар менән күмеп ташлайҙар. Тыңлаусыларҙың берәүһе фуражкаһын сисеп, ергә атып бәрә лә төкөрөп ҡуя:

— Эй, һөйләп тораһы бармы ни инде, — беҙ ҙә бит инде күптән һаҫыған балыҡ менән борсаҡ бутҡаһына терәлеп ҡалдыҡ бит! Бер аҙҙан унынһы ла булмаҫ әле.

Тыңлаусылар араһында ултырған Иртуғанов, берәүгә бер күтәрелеп тә ҡарамай, һынын да үҙгәртмәй, үҙенең уй-фекерҙәрен һөйләп алып китә. Уның һүҙҙәре бөтөн һалдаттарҙың да йөрәгенә яҡын.

— Бына бит, нимәгә кәрәк беҙгә һуғыш? Һуғыш беҙгә лә, немецтарға ла бер тингә лә кәрәкмәй. Бер тинлек файҙа юҡ унан беҙгә! Һуғыш — империяларын киңәйтер өсөн — батшаларға, чиндарын арттырыр, дан ҡаҙаныр өсөн — генералдарға, тауарҙарын күберәк үткәрер, кеҫәләрен ҡалынайтыр өсөн капи-

талистарға кәрәк. Э беҙҙең ағай-энегә — эшсе-крәҫтиәнгә унан ни файҙа? Бер файҙа ла юҡ. Ә һуғышта кемде ҡыралар тиһәң — беҙҙең ағай-энене. Меңәрләп, йөҙәр меңләп ҡыралар. Ә күпме кеше өйөнә эшкә яраҡһыҙ булып зәғифләнеп ҡайта? Һуғыш бөткәс, улар өсөн кем ҡайғыртыр, хәстәрлек күрер тип уйлайһығыҙ? Һәләк булғандарҙы ла бары етем ҡалған балалары, итәк тулы бала менән тол ҡалған ҡатындары ғына ҡайнар күҙ йәштәрен түгә-түгә иҫкә алырҙар, күбеһе, тоҡсай аҫып, бер һынығ икмәк теләнергә ил өҫтөнә сығып китер. Ә батшаға — үҙе еңде ни ҙә, уны еңделәр ни — барыбер, ул үҙ урынында ҡаласаҡ, генералдар, офицерҙар чиндарын һәм наградаларын барыбер аласаҡтар, ә капиталистар һуғыш биргән килемдәрен һанарҙар. Бына шуның өсөн генә алып барыла һуғыш, бына шуның өсөн һалына эшсе-крәҫтиән ағай-энеһенең ғәзиз баштары. — Иртуғанов үҙенең һүҙен шулай тип бөтөрә: — Баштарын һалғандар бында — ер ҡуйынында ҡалырҙар ҙа тынысланырҙар. Э тегендә ҡайтҡандар йәнә ҡайғы-хәсрәт кисерергә, ярты тингә тир түгергә, бил бөгөргә мәжбүр булырҙар. Һуғыштан байлыҡ туплап ҡалған капиталистарҙың тупһаларына барып, кәпәс һалырҙар, үҙҙәре аслы-туҡлы йәшәп, тегеләрҙе йәнә нығыраҡ байытыр өсөн көстәрен сарыф итә башларға мәжбүр булырҙар.

— Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, ысынлап та шулай бит! Алйоттар беҙ, аңһыҙ хайуандар, шул ғына! —- тип зәһәрләнеп ҡулын һелтәй бер һалдат.

Әңгәмә ҡуйырғандан-ҡуйыра, төрәнгә китә бара, яңынан-яңы, ҡыйыуҙан-ҡыйыуыраҡ фекерҙәр әйтелә. Эйе, был һуғыш һәр кемдең сей елкәһенә тейеп йөҙәткән, тешләндергән. Һәммәһе лә ярһып-ярһып һуғыштың мәғәнәһеҙлеге хаҡында һөйләйҙәр, уны кисекмәҫтән туҡтатырға кәрәк, тиҙәр. Э уны нисек эшләргә? Тап бына ошо һорауга килеп төртөлгәс, әңгәмәселәр, телдәрен тешләгән шикелле, тынып ҡала. Бына быныһы исмаһам, ситен хәл.

— Барыбыҙ бер төптән тороп, килешеп, артабан һуғышыуҙан баш тартырға кәрәк! — ти береһе.

— Фронтты ташлап, өйҙәребеҙгә таралышырға кәрәк!

— Немец һалдаттары менән, башҡаса бер-беребеҙгә атмаҫҡа, тип һөйләшергә кәрәк!

— Бөтә офицерҙарҙы атып үлтереп бөтөрөргә! — Быларҙың барыһын да әйтеүе генә еңел, ә асылда нисек бойомға ашырырға? Кешеләрҙең фекерҙәре буталыша, ҡыҙыу бәхәс китә.

Берәүҙәр былай ти:

— Йә, ярай, әйтәйек, беҙ фронтты ташланыҡ та, ти. Өйҙәребеҙгә таралыштыҡ, ти. Хуш. Шунан беҙҙең ерҙәрҙе немец батшаһы баҫып алһа, уныһы башыбыҙҙан һыйпар тип беләһегеҙме ни?

— Һ.уң немец һалдаттары ла һугыш теләмәй бит. Улар ҙа бит үҙ батшаларын ендәре урынына күрәләр. Улар менән теләгән ваҡытта һөйләшеп, килешеп була. Улар менән бер дәүләт төҙөйбөҙ ҙә башлыҡтарҙы һайлап ҡуябыҙ. Шулай иткәндә, бер ҡасан да һуғыш булмаҫ, — тип бигерәк еңел, бигерәк бер ҡатлы аҡыл биреүселәр ҙә бар.

Бәхәс кискә тиклем дауам итә. Тик кешеләр, бер төрлө лә төплө ҡарарға килә алмай, үҙ урындарына таралалар.

Кис менән һәр төрлө тауыштар тына, позициялар һуғышсан әҙерлек хәленә күсә. Хәүефле төн төшә, һалдаттар үҙ постарында уяу торалар.

Ротаға кире ҡайтҡас та, беҙ Иртуғанов менән бергә йәшәй башланыҡ, тағы ла нығыраҡ дуҫлашып киттек. Һуңғы мәлдәрҙә Кригер-Соколовский ҙа беҙгә бик яҡынайҙы.

Ул хәрби хеҙмәткә әле йбш үҫмер көйөнсә генә 1915 йылда алынған, хәҙер инде ап-аруҡ нығынған. Ул — зәңгәр күҙле, ҡылған сәсле егет. Атаһы —щоляк, ә әсәһе немка булған. Улар үҙҙәре Лодзи кешеләре булғандар, ә хәҙер күптән инде Одессала йәшәйҙәр икән. Кригер-Соколовский, атаһы иҫән саҡта, гимназияла уҡыған; тик ул үлеп киткәс, уҡыуын ташлап, Одесса портына кассир булып ингән. Аҙағыраҡ сауҙа судноһына эшкә ингән һәм иҫке донъяның да, яңы донъяның да бик күп порттарында булған. Ул диңгеҙ хеҙмәтенә бик ныҡ күнеккән һәм армияға ҡаралғанда диңгеҙ флотына ебәреүҙәрен үтенгән, ләкин тыңламағандар, пехотаға ебәргәндәр. Армияла хеҙмәт итеүҙән ҡотолоу өсөн, ул сирле кешемен тип һылтанып йөрөп ҡараған, хатта бер ни тиклем ваҡыт йәшенеп тә ятып ҡараған. Шулай ҙа бер килеп уны тапҡандар һәм беҙҙең полкка ебәргәндәр. Ул — бик сабыр холоҡло, аҙ һүҙле кеше, ҡайғыны ла, шатлыҡты ла тыныс ҡына кисерә белә. Бары әсәһен иҫенә алғанда ғына ул күңел тыныслығын юя.

— Меҫкенкәйгә, бер үҙенә бигерәк ауырға тура киләлер инде, — тип уфтана ул бындай ваҡыттарҙа.

Бына ошо Кригер-Соколовский рус һалдаттары менән немецтар араһында братание барған мәлдәрҙә тәржемәсе булып хеҙмәт итә лә инде. Шуғалыр инде, һалдаттар һуңғы ваҡытта уны айырыуса хөрмәт итәләр. Бик ауырлыҡ менән ҡайнатылған сәйҙе алдарына килтергәс, һалдаттар иң тәүҙә уны саҡырып һыйлауҙы үҙҙәренең бурысы итеп һанай башланылар.

— Соколовский, әйҙә беҙҙең менән сәй эсергә! — тип ҡысҡыралар уға.

Взвод командиры ла уны ауыр һәм яуаплы заданиеларға ебәрмәҫкә тырыша, бары бойница янына һаҡка ғына ҡуя.

Мин Кригер-Соколовскийҙы телефонислыҡка өйрәтәм. Ул бик дәртләнеп өйрәнә, тиҙерәк был эште үҙләштереп алып, шуның һылтауы менән алғы һыҙыҡтан тайырға самалай. Уның телефонист булғыһы килеүен мин Индрилға хәбәр иттем, һәм

ул был хаҡта команда начальнигы менән һөйләшеп ҡарамаҡсы булды. Үҙенең уйлаған эшен бойомға ашырыуҙа минең ярҙамым тейерен белеп булһа кәрәк, ул беҙҙең тирәгә һырлығып ята, һәм Иртуғанов ҡушҡан йомоштарҙы ҙур теләк менән үтәй.

Хәйер, Иртуғановҡа ул ғына түгел, бөтә рота яҡын итеп ҡарай. Иртуғанов нимә генә ҡушһа ла, уның йомошо рота командирының бойороғона ҡарағанда ла ҙурыраҡ теүәллек менән йәһәтерәк үтәлә. Бөтәһе лә күреп, белеп торалар, үҙенең белеме һәм таҫыллығы менән Иртуғанов офицерҙарҙың күптәренән юғарыраҡ булһа ла, һуғыштың михнәттәрен рядовой һалдат менән бер үк дәрәжәлә күреп йәшәй; өҫтәүенә һалдат башында ҡайнашҡан мең төрлө һорауҙарға ҡыйыу рәүештә яуап бирә белә. Уның уйҙары тап ябай һалдат хыял иткән нәмә булып сыға.

Бына, шулай итеп, беҙҙең ротала ике властылыҡ хөкөм һөрә башланы. Власть, бер яҡлап — подпоручик Акимов тарафынан атҡарылһа, икенсенән, рәсми булмаған рәүештә, унтер-офицер Иртуғанов тарафынан башҡарыла.

Роталағы һәммә һалдаттың да Иртуғановҡа, уны командирҙары итеп ололап ҡарағас, башҡа унтер-офицерҙар ҙа уға үҙҙәре өҫтөнән оло күреп, хөрмәтләп ҡарарға мәжбүрҙәр. Был хәл ҡайһы берҙәренең һарыуын ҡайнатҡаны күренеп-күренеп ҡала. Үҙе юҡта бәғзеләре, көнләшеүҙәрен йәшерә алмайынса, уны асыҡтан-асыҡ һүгеп тә ташлайҙар.

Беҙҙең ротала һуңғы көндәрҙә булып ятҡан хәлдәр менән Новиков та, Индрил да бик ныҡ ҡыҙыҡһындылар. Улар көн һайын телефон аша минән братание хәлдәренә ҡағылышлы яңылыҡтарҙы һорашып торалар. Индрилды был эштең бөтә ваҡлыҡтары уҡ ҡыҙыҡтыра, мин, әҙерәк буш ваҡыт булғанда, шуларҙы уға бәйнә-бәйнә һөйләп биреп, тегенең күңелен ҡандырырға тырышам.

Минең һөйләгәнде сабыр ғына тыңлап бөткәс, ул елкенеп, ҡысҡырып уҡ хыял итеп ҡуя:

— Их, бөтә фронт буйынса хәлдәр шундай булһа икән ул!

Немецтар менән братание көн дә тиерлек дауам итә торҙо. Шуның менән бер ҡатарҙан уҡ уны туҡтатыу хаҡында беренән-бере ҡырҡыуыраҡ бойороҡтар ҙа килә башланы. Эш хатта шуға барып етте, беҙҙең ротаға полковник Харченко менән дивизия начальнигы генерал Кучин үҙҙәре килеп еттеләр һәм, хәлдәрҙе урында төпсөнөп тикшергәс, был тәртипһеҙлекте кисекмәҫтән туҡтатырға ҡушып киттеләр. Ләкин быларҙың береһе лә ярҙам итмәне, һәр иртәлә һалдаттар немецтар менән братаниеға сығыуҙы ғәҙәткә әйләндереп алдылар.

Бер көн иртән шулай һалдаттар, көндәгесә, окоптарҙан сыҡтылар, ҡыҙып-ҡыҙып әңгәмәләшә, ҡулдарында бар нәмәләрен алмаша башланылар. Кәр ваҡыттағыса, беҙҙең ҡайһы бер һалдаттар немец нығытмаларына яҡын уҡ барып еттеләр, ә немецтарҙың бәғзеләре — беҙҙең нығытмаларға. Кис көтмәгәндә генә,

бер ниндәй иҫкәртеү-киҫәтеүһеҙ, уң флангынан беҙҙең күрше булған икенсе ротанан братаниеға сыҡҡандарға тоҫҡап пулеметтан ата башланылар. Уларға беҙҙең ротаныҡылар ҙа ҡушылды. Уларға яуап итеп немецтарҙың өс пулеметы бер юлы телгә килде. Братаниеға сыҡҡандар тәртипһеҙ рәүештә сәбәләнеп үҙҙәре яғына йүгерешергә керештеләр, нығытма башына сыҡҡандар ҙа, ғауғаланышып, түбән һибелделәр. Рус һалдаттары менән бергә пуляларҙан ҡасып, беҙҙең окоптарға ун бишләп немец та килеп ингәйне. Ике яҡтан да пулеметтар өҙлөкһөҙ тыҡырлаша, ләкин уларға бер яҡтан да мылтыҡ тауыштары ҡушылмай. Бер ун минут самаһынан пулеметтар ҙа тынды, тик унан да яманыраҡы алмашҡа килде — ике яҡтан да окоптарға артиллерия ут асты. Ҡом тултырылған тоҡтарҙан ғына торған беҙҙең нығытмалар бары пулянан ғына һаҡланырға яраҡлы ине, бында артиллериянан һаҡланыу бөтөнләй ситен булды. Беҙ бик ҙур юғалтыу кисерҙек. Яралылар торған һайын күбәйә барҙы; улар ыңғырашалар, ярҙам һорап ҡысҡыралар, әммә уларға ярҙамға барыу һис мөмкин түгел.

Атыш бары төш алдынан ғына туҡталды. Тыныслыҡ урынлашҡас та әле, окоптарҙа хәрәкәт башланғас, немецтар ҡабат дөмбәҫләргә керешмәгәйе, тип ҡурҡып, урындарҙан ҡуҙғалыуҙы булманы. Бары яралыларҙың ыңғырашып ярҙамға саҡырыуҙары ғына, йөрәк әрнетеп, ишетелеп тора. Бик ҙур ауырлыҡ менән уларға ярҙам күрһәтеп, окоптарҙан үлектәрҙе йыйыштырырға керештек. Еңел яралыларға, бары ҡараңғы төшкәс кенә, артҡа сығырға рөхсәт ителде; ә ауыр яралылар, һаман окоптарҙа ҡалып, ғазап сигеүҙәрен дауам иттеләр. Иҫән ҡалғандар, ҡаштарын йәмерәйтеп, береһе бер һүҙ өндәшмәйенсә, баштарын һалындырып, урындарында ултыралар, йә баҫып торалар. Яйлап-яйлап отделение һәм взвод командирҙары ла үҙҙәренең донъяла барлыҡтарын белдертә башланылар. Уларға төнгөләккә ҡарауыл тәғәйенләргә кәрәк ине.

Бөгөн бары беҙҙең ротанан ғына ла алтмышлап кеше сафтан сыҡты.

Кис һуңлатып ҡына командирыбыҙ Акимов ротаның хәле һәм юғалтыуҙар хаҡында штабҡа рапорт бирҙе, ротаны тулыландырырға өҫтәмә көс ебәреүҙе һораны. Телефондан был рапортты тапшырып бөткәс, мин полк командиры менән беренсе батальон командиры штабс-капитан Андреев араһында барған һөйләшеүгә ҡолаҡ һалып торҙом. Штаб телефоны менән беҙҙең телефон бер линияла булғас, мин барын да ап-асыҡ ишетә алдым. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, командирҙар бөгөнгө хәл тураһында һөйләшә башланылар.

— Полковник әфәнде, мин һеҙҙең бойороғоғоҙҙо үтәнем.

— Рәхмәт, капитан әфәнде!

— Үпкәләмәҫтәр, братаниены туҡтатмаһағыҙ, ут асасаҡбыҙ, тип нисәмә мәртәбә киҫәттек. Был хәл көндән-көн ҡурҡыны-

сыраҡ төҫ ала бара ине. Башҡаса мөмкинлек ҡалмағас, братаниеға сыҡҡандарға мин үҙ ҡулым менән ут асырға мәжбүр булдым.

— Ә дошман яҡ утты һеҙҙән һуң астымы?

— Эйе, полковник әфәнде.

— Һалдаттарҙың кәйефе нисек?

— Бөтә роталарҙа ла тулы тыныслыҡ.

— Юғалтыуҙар күп булған икән шул.

— Был ҡурҡыныслы эште ҡорбандарһыҙ ғына һис тә туҡтатып булырлыҡ түгел ине шул, полковник әфәнде.

Бөгөнгө хәлдәр хаҡында дивизия штабында ла һүҙ булды. Дисциплинарный саралар менән генә лә сикләнергә мөмкин булыр ине, тиҙәр унда.

— Бөгөн беҙ үҙебеҙ эшләгәнде ҡылмаган булһаҡ, унда һүҙ тагы ла ҡатыраҡ һәм ҡырҡыуыраҡ буласаҡ ине.

— Уныһы ла дөрөҫ, ауыртыуынан ҡурҡһаң, шеште һытып булмай.

— Дөйөм алғанда, минең батальон йөҙ илле кеше юғалтты.

— Ҙур һуғышта был ғына юғалтыу ҙур нәмә түгел. Йә, хәҙергә хуш, капитан.

— Һау булығыҙ, полковник әфәнде, һеҙгә сәләмәтлек теләйем.

Ишеткәндәремдең барыһын да, түкмәй-сәсмәй, Иртуғановҡа һөйләп бирҙем, ә ул үҙ сиратында тотош ротаға еткерҙе. Хәҙер инде батальон командиры штабс-капитан Андреев беҙҙең һалдаттарҙың төп хас дошманына әйләнде. Уға теш ҡайрай башланылар.

— Наступлениеға сыҡҡас та, беренсе пуля — уға, — тиҙәр нәфрәтләнгән һалдаттар.

Новиков менән Индрил беҙҙең роталағы булған хәлде һәм капитан Андреевтың яуызлығы хаҡындағы хәбәрҙе бөтә полкка тараттылар. Әлбиттә, быны өсөн телефондан да ҡулай нәмә юҡ инде.

Хәҙер инде штабс-капитан Андреевтың исеме бөтә полк өсөн ләғнәтле исемгә әйләнде.

Полковник Харченко исеме лә ләғнәт менән телгә алына хәҙер. Быға тиклем дә һалдаттар офицерҙарға дошман күҙе менән ҡарай торғайнылар, хәҙер ул дошманлыҡ тәрәнгәрәк китте; күптәр был дошманлыҡтың оҙаҡламай бер килеп, дауыл булып өҫкә ҡалҡып сығаһын көтә башланылар.

## ҺИГЕҘЕНСЕ БҮЛЕК

Бына ике көн инде ике яҡтың да артиллерияһы өҙлөкһөҙ тиерлек ҡотороноп ата. Бөгөнгө көнгә тиклем, өҫтәмә көстәр килтереүгә ҡамасаулар өсөн, дошман алғы һыҙыҡҡа килер юл-

дарҙы утҡа тотто, ә хәҙер инде нығытмаларҙы һәм тимер сыбыҡ заграждениеларҙы ҡайыҙлай. Беҙҙең позицияларҙа ятып сыҙар әмәл ҡалманы. Полк штабы менән телефон әлемтәһе лә өҙөлдө. Рота командиры Акимов, бер ниндәй күрһәтмәләр ҙә ала алмай, утҡа баҫҡан бесәй шикелле, ары саба, бире һуғыла. Аптырағас, ул батальон командирына вестовой артынан, ни эшләйһе икән, тигән һорау менән пакет ебәрҙе. Ләкин ул тегенән бойороҡ көтөп ала алманы, шрапнель ярсығы уны башынан ауыр яраланы. Бер ни тиклем ваҡыттан беҙгә окоптарҙың икенсе һыҙығына сигенергә тигән бойороҡ булды, тик һуң ине инде. Снарядтар һәм шрапнелдәр ямғыр урынына тупырлашҡан саҡта, асыҡ ялан аша унда күсеү, туранан-тура һәләкәткә барыу икәне һәр кемгә күренеп тора ине. Бары, һыҙланыуҙарына сыҙаша алмаған яралылар ғына, ҡотолоу өмөт итеп, нығытмаларҙан сығып, артҡа йүгермәксе булалар, һәм шунда уҡ уларҙы снаряд ярсыҡтары, сал ғы менән сапҡан кеүек, ергә йыға. Ҡорбандар һаны ишәйгәндән-ишәйә бара. Һаҙлыҡ һәм урман өҫтөн зәңгәр һөрөм ҡаплай башланы. Шомло тауыштар ишетелде:

— Газ! Газ! Маскаларығыҙҙы кейегеҙ!

Юҡ, был газ булып сыҡманы, тымыҡ көндә ергә һылашып ятҡан төтөн генә икән. Беҙҙең окоптарҙа инде иҫән ҡалғандарға йәшеренерлек тә төҙөк урын ҡалмағас, ҡайһы берәүҙәр, сыҙаша алмай, уң флангылағы урманға йүгерешә башланылар. Тик унда снарядтар ямғыры көслөрәк булып сыҡты. Немецтар, өҫтәмә көстөң ошо урман ышығына йәшереп килтереләсәген тоҫмаллап ахыры, был урманды айырыуса ныҡ дөмбәҫләйҙәр ине. Көслө дауыл аҡтарғандағы шикелле, һауаға тамырҙары менән ҡуптарылған ағастар күтәрелә, һындырылған ботаҡтар оса, мөһабәт имәндәр шытырлап ергә ауа. Көслө пожар ҡотороғандағы һымаҡ, урман осо ҡара төтөн менән тулған. Урманда үҙҙәренә ышыҡланыр урын эҙләп китеүселәр, береһе лә тиерлек кире әйләнеп ҡайтмай, юҡҡа сыға барҙылар. Урман эсе мәйеттәр менән тулды. Яралыларға иғтибар итеүсе лә юҡ, был ҡот осҡос вәхшәттә һәр кем үҙенең ҡотолоп иҫән ҡалыуы хаҡында ғына ҡайғырта. Бында инде һалдаттар юғарынан килгән бойороҡҡа буйһоноп түгел, үҙ-үҙеңде һаҡлап ҡалыу тойғоһона буйһоноп ҡына эш итә.

Кис менән, ҡояш байыр алдынан, канонада бер аҙ тына төштө, ҡараңғы төшөр-төшмәҫтән күктә ракеталар һәм прожекторҙар йырмасларға кереште.

Был арала окоптарҙың икенсе линияһына резервта булған ниндәйҙер полк килеп урынлашҡайны. Позицияны ташлап киткән беҙҙең батальондың роталары тырым-тыраҡай таралышып, буталышып бөттөләр. Тамам ҡараңғы төшкәс, алмашҡа килгән полк алғы һыҙыҡҡа күсте. Беҙҙең полктың ҡалдыҡтарына яҡындағы бер әрәмәлеккә — элек беҙҙең штаб урын-

лашҡан тирәгә йыйылырға бойороҡ булды. Ҡоҙғондан ҡурҡып, үлән араларына ҡасышып бөткән себештәр шикелле, берәмләп-берәмләп беҙ күрһәтелгән урынға йыйыла башланыҡ. Йөҙгә яҡын кеше тороп ҡалғанбыҙ.

Иртәнән бирле минең Иртуғановты ла, Кригер-Соколовскийҙы ла күргәнем юҡ. Йыйылғандар араһында ла, күпме генә эҙләһәм дә, улар күренмәне. Мин инде, улар үлмәнеме йәки яраланманымы икән тип, хәүефләнә башланым. Индрилды күрәйем тип, мин штаб урынлашҡан ергә киттем, тик полк штабын бынан ике саҡрым самаһындағы бер бәләкәй ауылға күсергәндәр икән.

Беҙҙе сафҡа теҙҙеләр ҙә шунда алып киттеләр. Был емерек ауылға килеп еткәс тә, мин шунда уҡ Индрилды эҙләп киттем. Үҙемдең дә иҫ китте, бәхеткә ҡаршы, мин Индрил эргәһендә Иртуғановты ла осраттым. Осрашыуыбыҙ бик ҡыуаныслы булды, беҙ бер-беребеҙҙе оҙаҡ-оҙаҡ ҡосағыбыҙҙа ҡыҫтыҡ. Улар ҙа мине инде тере килеш күреүҙән өмөт өҙөп бөткәндәр.

Мин инде, түҙемем бөтөп, ҡалган иптәштәрем хаҡында һорашырға ғына тип ауыҙымды асҡайным, уйымды белгән кеүек, Индрил алданыраҡ өлгөрҙө:

— Новиков иҫән, ә Байғужа аяғынан яраланған. Ул көндөҙ үк бында килгән, уны артҡа оҙатҡандар. Яраһы артыҡ ауыр түгел — ярсыҡ балтырын ярып киткән. Яраһын бында, пунктта, бәйләгәс, тылға ул, сатанлай-сатанлай булһа ла, үҙ аяғы менән киткән.

— Э беҙҙең ярым поляк, ярым немецыбыҙҙың яурынына пуля тейҙе, — тип шарҡылдап көлдө Иртуғанов, мәрәкә һөйләгәндәге кеүек. — Егетең был фронттан тайырға күптән һылтау эҙләп йөрөй ине. Хатта минән, берәй еремә атып, еңелсә генә ярала әле, тип тә үтенә ине. Бәхетенә ирешәте. Яурынын үҙем үк бәйләп ебәрҙем. Тик ул киткәс, канонада бигерәк көсәйҙе шул, иҫән-һау сыға алдымы икән?

Беҙ һөйләшкән арала алғы һыҙыҡта атыш тағы көсәйеп китте. Беҙгә йәнә бер ергә тупланырға бойорҙолар. Барлау булды. Беҙҙең полк ярты кешеһен юғалтҡан булып сыҡты. Һирәгәйеп ҡалған роталарҙы резервтан килгән ярты меңләп кеше менән тулыландырҙылар ҙа таң алдынан йәнә алғы һыҙыҡҡа сығырға тигән әмерҙе иғлан иттеләр.

Һалдаттар асыуланышып һуҡрана башланылар:

— Ҡасандан бирле йүнле-башлы ашаған, эскән, йоҡлаған юҡ. Был көйөбөҙсә, беҙ тағы ни хәл итеп һуғышҡа инәйек, ти?!

Иртуғанов һалдаттар араһында йүгергеләп йөрөй һәм тегеләрҙе:

— Нығыраҡ ҡыҫҡырығыҙ! Шау-шыу күтәрегеҙ! — тип ҡоторта.

Шунда һалдаттар алдына полковник Харченко килеп баҫты

ла хырылдауыҡ тауышы менән һөйләй башланы:

— Туғандар, һуғыштың законы шундай: һуғышсан бойороҡтарҙы беҙ һис бер ҡаршылашмай, еренә еткереп үтәргә тейешбеҙ. Бөгөн генеральное наступление башлана. Беҙ, дошманды окоптарынан һөрөп сығарып, Софийка ауылын алырға тейешбеҙ. Шунан һуң беҙгә ял бирәсәктәр. Аҙыҡ тураһында ҡайғырмағыҙ. Хәҙер бында кухня килтерәләр.

Ни эшләптер, Харченконың һүҙҙәрен тыңлағас, һалдаттар тыныслана төштөләр. Шау-шыу тынды, тик ҡайһы бер урындарҙа ғына әле һаман һуҡраныуҙар ишетелгеләп ҡала.

— Немецтар беҙҙе мәңгелеккә ял итергә һалырға тырышырҙар инде, — тип ҡуйҙы берәү.

Кухнялар килеүен хәбәр иттеләр. Бер нисә көн һуҙымында бер ҡабым ҡайнар аш төҫө күрмәгән һалдаттар, котелоктарын шылтыратып, уға ҡаршы ташландылар. Шул уҡ ваҡытта һәр беребеҙгә берәр пачка папирос өләшәсәктәре лә билдәле булды. Ашап алғас, һәр урында папирос уттары баҙлашты. Ошондай ҡыҫҡа ғына ял осоронда ҡот осҡос ут даръяһынан иҫән ҡотолоп сыҡҡан кешеләр әкренләп аңдарына килә, тыныслана башланылар, үҙ-ара әңгәмәләр китте.

— Ай-яй, кәрәкте бирҙеләр ҙә һуң немецтар бөгөн! Аяҡҡа баҫып торор әмәл ҡалманы! — тип аптырай бер ҡарт һалдат һәм, шунда йәнә хәҙер үк ут эсенә ҡыуып алып инәсәктәрен иҫенә төшөрөп, тәрән көрһөнә лә асынып әйтеп ҡуя: — Тағы һәләкәткә илтеп тығалар инде беҙҙең ғәзиз баштарҙы...

Был хаҡта кешеләрҙең артыҡ һүҙ ҡуйыртҡылары килмәй, ауыр тынлыҡ урынлаша. Һалдаттар алғы һыҙыҡтан ишетелгән көслө атыш тауыштарына һағайып ҡолаҡ һалып торалар ҙа, унда өҙлөкһөҙ ләүкегән уттарға ҡарап, уфтанып ҡуялар:

— Ай-һай, унда эштәр ҡыҙыу бара! Донъяның аҫты-өҫкә килә, буғай...

Алыҫ түгел урында төн пәрҙәһен артҡа сигендереп балҡышҡай дәһшәтле ут туфандарын кешеләр, беренсе тапҡыр күргәндәге шикелле, шомланып байҡайҙар, уларҙың күңелендә иҫән ҡалыуға өмөт осҡондары торған һайын кәмей бара.

Теҙелергә команда булды. Үҙҙәрен батҡыл һаҙлыҡ һурғанға ҡаршы торған кеүек, һалдаттар, үҙ иректәренән тыш буйһоноп, яй ғына теҙелделәр. Уларҙың ихтыярҙары үҙҙәренә буйһонмай, аяҡтары тыңламай, улар алғы һыҙыҡтан ишетелгән үлем музыкаһы тактына ҡушылып атлап баралар шикелле.

Тәүҙә беҙҙе урман юлынан дүртәрләп теҙеп, колонна менән алып барҙылар. Урмандан сыҡҡас, цепҡа таралып, ут һыҙығына табан ята-шыуыша-йүгерә киттек. Мин яурыныма һалған катушканы күтәреп йүгерәм. Унан телефон сымы тағатылып артҡа ҡала бара. Һөжүм ваҡытында телефонистың эше — иң ауыр эштер, моғайын. Уға дошман пуляларынан да һаҡланырға, шул уҡ саҡта телефон сымын да һуҙа барырға, ваҡыты-

ваҡыты менән аппаратты тоташтырып, линияның төҙөклөгөн дә белә барырға кәрәк. Башҡа һалдаттарҙың бер ҡалҡыуҙан икенсеһенә тиҙ генә йүгереп, боҫа-боҫа барырға мөмкинлектәре бар, ә телефонистың йүгереү тиҙлеге үҙенең етеҙлегенән генә тормай, катушканың әйләнеп, тимер сымдың таралыу тиҙлегенә бәйләнгән.

Беҙ окоптарҙың алғы һыҙыҡтағыларына яҡынлашҡанда, унда ятҡан полк, тимер сыбыҡ заграждениеларҙы аша сығып, дошман окоптарына яҡынлап бара инек инде. Немецтар, күрәһең, уларҙың ябырылып килгәнен һиҙеп ҡалды; пулемет уты байтаҡ көсәйҙе, бер үк ваҡытта улар өҫтөнә снарядтар ҙа йышланып яуа башланы.

Беҙгә лә тиҙерәк тимер сыбыҡ заграждениелар аша үтергә бойороҡ булды. Бойороҡҡа буйһоноп, һалдаттар алға ташландылар, тик пулялар ямғыры аҫтында күптәре шунда уҡ, көлтәләр кеүек, ергә ауҙылар. Яралыларҙың ҡайһы берҙәре, алйып китеп, йә күкрәктәрен, йә баштарын тотҡан хәлдә, һаҡлыҡ сараһын бөтөнләй иҫтәренән сығарып, аяғөҫтө баҫып, туп-тура артҡа, окоптарға, кире йүгерәләр, ләкин хәлдәре бөтөпмө, икенсе пуля тейепме, шунда уҡ яңынан аяҡтан йығылалар.

Дошмандың ут ғәрәсәте аҫтында булғанда бары бер генә уй менән йәшәйһең: пуля һәм снарядтарҙан нисек һаҡланырға, йәшеренер урынды ҡайҙан табырға? Үлемде һәр минут һайын көтәһең. Ләкин бындағы үлем көтөү, ҡайһы берәүҙәр иҫәпләүенсә, күңел нескәрткес тойғолар килтермәй, әйткәндәренсә, үткән тормош картиналары ла бер-бер артлы һыҙландырып күҙ алдынан үтмәй, тормош менән айырылышырга тура килерен уйлап, үкендермәй ҙә. Үлем шәүләһе бында, башың осона ҡылысын күтәргән әжәл сифатында, бер туҡтауһыҙ һине эҙәрлекләп кенә йөрөй. Тик ниңәлер ошондай ваҡыттарҙа күңелдә ҡот осҡос үлемгә ҡаршы баш күтәрге килеү, уны инҡар итергә тырышыу теләге тыумай, үлем бары һиңә кире ҡаҡҡыһыҙ тормош законы булып тойола башлай. Үлге килмәү тойғоһо һиндә һәр ваҡыт йәшәй, ләкин өнөн-тынын сығармай, шым ғына йәшәй; уны берәү ҙә теле менән әйтмәй. Киндә йәшәгән кешелек тойғолары тирә-яҡта эшләнеп ятҡан ҡот осҡос вәхшәт күренештәре менән томалана, көслө утҡа ырғытылған ҡоро юнысҡы ише, күҙ асып йомғансы янып юҡҡа сыға...

Дошман окоптарына ябырылырға команда бирҙеләр. Бындай мәлдәрҙә кешеләр, команданы ишеткәс, дәртләнеп китә, уға һис бер икеләнмәй буйһона.

Пулялар сафтарҙы салғы кеүек саба, берәүҙәр ыңғырашып ауа, икенселәре үлем алдынан һуңғы мәртәбә сайылдап ебәрә. Ләкин тереләрҙе былар ғына туҡтатып тора алмай, улар һаман алға ынтылыуҙарында булалар. Кешеләр һәр аҙымдарында үлемде күҙ алдарында күрә баралар, унан ҡотолоп ҡалыу әмәлен эҙләйҙәр, эйеләләр, ергә һыйыналар, шыуышалар, бер

минутҡа үлемде кисектерәләр, ә икенсе минутта әжәл тағы улар өҫтөндә ялман ҡылысын һелтәй. Минең эргәмдә ауыр яралы бер һалдат ята. Һуғыш тыммайынса үҙенә бер ҡайҙан да ярҙам килмәҫен белә ул, шуға, һуңғы көсөн йыйып, ятҡан урынынан көрәге менән ерҙе ҡаҙып, тупрағын башы тәңгәленә өйөргә тырыша. Бына ул тамам хәлдән тайҙы ахыры, был эшенән туҡтап, көрәге менән башын ҡапланы ла, урғылып аҡҡан ҡанын туҡтатыу ниәтендә һыңар ҡулы менән яраһын баҫҡан булды. Бына был мәлдә инде кеше тормоштоң ҡәҙерен айырыуса белә, үҙенең ғүмерен ситтән килеп бәрәү ҙә ҡотҡармаясағын белеп, иң һуңғы сараларҙы ҡулланып булһа ла, уны мөмкин ҡәҙәре үҙ көсө менән оҙайтырға тырыша. Ләкин инде уны һуңғы көсө ташлап сығып бөтөп бара; уның хәле ҡыл өҫтөндә, ғүмере, бына-бына ботағымдан өҙөлөп төшәм тип, көслөрәк ел килеп ҡағылғанын көтөй торған көҙгө ҡыу япраҡты хәтерләтә. Ел килеп ҡағылыр, ул өҙөлөп төшөр, уны тапап, иҙеп китерҙәр...

Ҡапыл эргәмдә генә бомба ярылды. Һауа тулҡыны мине ерҙән йолҡоп алды ла бер яҡ ситкә йомарлап ырғытты. Мин бер нисә секундҡа аңымдан яҙҙым. Мин ошо ҡыҫҡа ғына арауыҡта тирә-яғымда ниҙәр ҡылынып ятҡанын онотоп торҙом, был тойғо әле мин әҙерәк аңыма килә башлағас та, бер ни тиклем дауам итте. Асылда, был ниндәйҙер ләззәтле онотолоу ине: башым уйҙарҙан бөтөнләй азат, бая ғына бер төйөн булып уҡмашҡан, өҙөлөргә етешеп көсөргәнешкәй нервыларым бөтөнләй бушаҡланған, мин еүеш ерҙең үткер тәмле еҫен ҡомһоҙланып еҫкәп ятам. Бына мин аҡрынлап тәнем ҡалтыранғанын тойҙом. Был — мине ысынбарлыҡҡа кире ҡайтарҙы. Әйтерһең дә, мин әле бер йәшник эсендә бикле томаланып ятҡанмын да ҡапыл уның ҡапҡасын асып ебәрҙеләр: ҡолаҡтарым яңынан ишетә, күҙҙәрем яңынан күрә башланы, — йыйып ҡына әйткәндә, тирә-яғымдағы ҡот осҡос ғәрәсәтте мин яңынан тоя башланым. Был ваҡытта пулялар һине ҡурҡытмай, бары уларҙың ҡолаҡ төбөндә бәйләнсек шөпшә кеүек безелдәүҙәре генә һине ярһыта. Асыуың ҡабара, кемгә асыуланғаныңды ла асыҡ ҡына белмәйһең һәм, шул асыуың менән һуҡыр рәүештә тешләнеп, алға ынтылаһың. Һиңә ҡаршы һәм һинең әҫтәңдән, яҡ-яғыңдан зыйнашып осоусы пулялар, снарядтар ташҡыны һауаны шул ҡәҙәре тығыҙлап тулғандар, һинең уларҙан тының тарлыға, һауа ҡыҙған тимер кеүек ҡыҙыуға әйләнә, киң ялан тар булып ҡала. Гүйә, тын алған һайын, һинең әсеңә ялҡын ағылып инеп, ихтыяр көсөңдө яндырғандай тойола.

Тик барыбер бер талай ваҡыттан айыҡ аңың үҙеңә ҡайта, ҡыҙған башың һыуына төшә һәм алдыңа:

— Нисек ҡотолорға? — тигән һорау килеп баҫа.

Тирә-яғыңа күҙ ташлайһың, ҡотолорға бер әмәл дә юҡ икәнен күрәһең — һәр тарафта үлем хакимлығы тантана итә. Алға

ла, артҡа ла йүгерергә тәҡәтең дә, мөмкинлегең дә юҡ. Ҡотолор өсөн берәй эш ҡылырға үҙеңдең көсһөҙлөгөңдө күрәһең, шуға инанаһың икән — бары бер генә теләгең тороп ҡала: ергә һыйынырға. Берҙән-бер таянысың ул. Уга төпкәрәк инеп һыйынырға. Шул уй-теләгең менән ҡанатланып, күрәгеңә тотонаһың һәм бар көсөңә ярһып-ярһып меçкен еркәйҙе соҡорға, йырмасларға тотонаһың. Был секундтарҙа үҙең ҡаҙып башың тәңгәленә өйгән һәр ус тупраҡ һинең ғүмереңде оҙайтҡандай тойола.

Уң флангыла «ура» ҡысҡыра башланылар — тимәк, беҙҙекеләр атакаға китте. Немец окоптары яғынан атыу тынды. Минең тирәләгеләр ҙә ҡалҡына башланы, улар ҙа көслө «ура»ға ҡушылдылар, алга ташландылар. Был оран көс бирә, рухты күтәрә, үс алыу тойғоһо — үҙеңдең ғүмереңде киçергә ҡаныҡҡан пуляларға, снарядтарға үс тойғоһо уята. Уларҙың зыйылдашыуы, гөрһөлдәшеүе тынып, уларҙы һин ишетмәй башлағанда тотоп тыйғыһыҙ шатлыҡ барлыҡҡа килә һәм һинең күкрәгеңдән оран булып урғып сыға. Йөрәкһеп ҡысҡыраһың, юҡ, еңеү өсөн тантана итеп түгел, әле генә күкрәгеңдә ҡыçып торған бөтә нәмәнән, бөтә тойғонан тиҙерәк арынып өсөн шашып һөрәнләйһең.

Снарядтар тарафынан өҙгөләнеп-йолҡҡоланып ташланған тимер сыбыҡ заграждениеларҙы үтеп, дошман окоптарына барып ингәндә, унда бер нисә немец һалдатын ғына тап иттек. Берећенән башҡалары, шунда уҡ әсир төшөргә ризалыҡтарын белдереп, ҡулдарын күтәрҙеләр. Тик мыҡты кәүҙәле әлеге берәүһе генә ҡоралын ташламаны, ул штыгын беҙгә ҡарай тырпайтҡан хәлдә, тәкәббер рәүештә ҡаршы тороуында булды. Арабыҙҙан берәү уға терәп атып ебәрҙе; теге, киçеп ауҙарылған имән кеүек, гөрһөлдәп окоп төбөнә ауҙы.

Беҙ немец окоптарына бәреп ингәс, ике яҡтан да атыш бөтөнләй тынды. Яралыларҙы йыйып ала башланылар, әсир төшкәндәрҙе тылға оҙатырға керештек. Үлгәндәргә һаман ҡул етмәй әле, әжәл үҙҙәрен ҡыуып еткән ерҙә улар, йөктән ауып ҡалған бүрәнәләр шикелле, бәрә-тара килеп тәгәрәшеп яталар.

Шунда уҡ әле генә үҙебеҙ баçып алған окоптарҙы яйлаштырып нығытырға, ҡулайлаштырырға керештек. Таң һыҙыла башлағайны, яҡтырғансы, һәр кем үҙенә йәшеренер урын әҙерләп ҡалырға тырыша. Бындай ваҡыттарҙа окоптар юғарынан килгән бойороҡ буйынса түгел, һалдаттарҙың үҙ ихтыяры менән нығытыла. Сөнки һәр кем яҡтыра башлау менән үк бындай хәлдәрҙә атыштың яңынан ҡоторооп китәсәген асыҡ һиҙемләй.

Тамам яҡтырҙы. Томан ҡатлауын ярып, ҡояш сыҡты. Алғы һыҙыҡта һаман дәһшәтле тынлыҡ хөкөм һөрә. Дауыл алдынан була торған шомло тынлыҡ был. Бындай тынлыҡтан һуң үлемесле ут ғәрәсәте башланасағын һәр һалдат белә. Был

уй баштарынан һис китмәгән кешеләр өндәшмәйҙәр. Ләкин уларҙың кисерештәрен, бер һүҙһеҙ, сырайҙарына ҡарап та белеү еңел.

Ҡояш сығыу менән, барыһы ла иртәнге тамаҡ хаҡында ҡайғырта башланылар. Үҙҙәренең запас ашамлыҡтары булмағандар шунда уҡ аунап ятҡан немец мәйеттәренең тоҡсай-сумкаларын тентергә керештеләр. Тик, ғәҙәттә, немецтарҙың сумкаһы бик фәҡир була — сыҡһа, шунда берәй бәләкәй генә киҫәк сусҡа майы, маргарин йә көнбағыш майы һөртөлгән йоҡа ғына телем икмәк килеп сыға. Сыҡмаһа — ул да юҡ. Уның ҡарауы, уларҙың флягаларында һәр ваҡыт тиерлек ҡыҙыл шарап була һәм рус һалдаты уны иң яҡшы табыш тип иҫәпләй. Ошондай шатлыҡҡа тарыһа, ул, үҙен иң бәхетле кеше итеп һанап, ауыҙын ләззәтле сәпелдәтә-сәпелдәтә, ваҡ-ваҡ йотомдар менән рәхәт сигеп һемерә. (

Минең алдымда ла бер немец мәйете ята. Уның, ни эшләптер, яраһы ла, аҡҡан ҡаны ла күренмәй — ҡаты йоҡоға талған кеүек ята ул. Күҙе ҡыҫыҡ ҡына ҡалған, бер ҡулын күкрәгенә һалған, икенсеһен ситкә ташлаған. Быға тиклем минең бер генә лә мәйеткә былай ентекләп ҡарап торғаным юҡ ине. Ә был юлы эргәмдә генә ерәү ята, мин ирекһеҙҙән уға нығытып ҡарайым. Уның сумкаһын ҡутарған һалдат миңә бер төргәк хаттар һәм фотокарточкалар сығарып бирҙе. Фотоларҙың береһендә был һалдат фронтҡа китер алдынан төшкән, ахырыһы. Ул үҙе өр-яңы хәрби формала; уның эргәһендә сәсен шыма итеп тараған, ауылса итеп тегелгән шаҡмаҡлы кофта һәм ҡара оҙон юбка кейгән йәш ҡатын тора. Уның йөҙөндә ҡайғы шәүләһе. Уларҙың ике яғына — береһе ете, береһе биш йәштәр самаһындағы ике ҡыҙыҡай баҫҡан. Улар ҡыҫҡа ғына аҡ күлдәктәр кейгәндәр, сәстәренә күбәләк банттар таҡҡандар. Ҡыҙҙар икеһе лә көләс йөҙлөләр. Әлбиттә, был сабыйҙар аталарын ниндәй ҡурҡыныслы юлға оҙатҡандарын аңлап етмәйҙәр. Бары аталары кейеп алған өр-яңы хәрби формаға һоҡланып, уның менән ғорурланып ҡарайҙар. Эй сабыйҙар, әле һеҙ бер ни ҙә белмәйһегеҙ бит әле! Атайығыҙҙың әле ниндәй хәлдә ятҡанын күҙ алдына ла килтерә алмайһығыҙ!

Минең алдымда ятҡан үлек немец һалдаты тере сағында был карточканы алып, уға күҙҙәрен мөлдөрәтеп-мөлдөрәтеп бик йыш ҡарап торғандыр, һөйөклө ҡатынын һәм ҡыҙҙарын өҙөлөп-өҙөлөп һағынғандыр. Ә был хаттарҙа, моғайын, мөлдөрәмә тулы һөйөү һәм һағыш һүҙҙәрелер.

Немецса уҡый алмауыма үкенеп, мин хаттарҙы ла, карточкаларҙы ла мәйеттең сумкаһына кире һалып ҡуям. Бынан һуң да, күҙемде айырып ала алмағандай, мәйеттең йөҙөнә ҡарап торам.

Меҫкенкәйем! Ни өсөн һуғышып йөрөнөң һин? Минең менән һинең арала ниндәй генә дошманлыҡ булһын инде? Әйтерһең,

ата малы бүлешәбеҙ! Дошман булыу түгел, беҙ бер-беребеҙҙе белмәй инек тә бит. Хатта бына беребеҙ мәйет булғас ҡына күрешергә тура килде. Нимә хаҡына беҙ бер-беребеҙҙең күкрәгенә тоҫҡап, үлем пулялары аттыҡ икән? Бер талай ваҡыттан бына һинең үлем хәбәре ғаиләңә, балаларыңа, яҡындарыңа барып юлығыр. Улар сәстәрен йолҡоп илашырҙар. Улар әле һинең был донъяны ҡуйғаныңды белмәй ҙә бит; улар әле сәғәт, минут һанап, һинән сәләм хаттар көтә. Э һин инде һалҡын окоп төбөндә һуңғы тыныңды алып, ғәзиз йәнеңде биргәнһең. Һин хәҙер мәңгегә ер ҡуйынына инәсәкһең. Һинең бит хатта үҙеңдең айырым ҡәбереӊ дә булмаясаҡ. Дошман мәйеттәрен улай тәрбиәләп айырым-айырым күмеп торорға ҡайҙа инде ул ваҡыт, айырыуса теләк! Һөйөклө ҡатының, балаларың, туғандарың бары үҙеңдән ҡалған рәсемеңде генә, күкрәктәренә ҡыҫып үбә-үбә, күҙ йәше менән сылатырҙар...

Бөгөн көн сыуаҡ, болотһоҙ күктән ҡояш сағыу ҡыҙҙыра. Ул бөгөн дошман яҡлы һымаҡ. Сөнки былдай аяҙ көндө алыҫта күккә олғашып торған немец аэростатынан беҙҙең яҡтағы теләһә ниндәй хәрәкәтте лә шунда уҡ шәйләп алалар, шунда уҡ теүәл генә тоҫҡап алып, хәрәкәт булған урынға снаряд яуҙыра башлайҙар. Беҙ яңы баҫып ингән немец окоптарында үҙебеҙҙе ҡараҡтар һымаҡ хис итәбеҙ. Беләбеҙ, дошман беҙгә бөгөн айырыуса хаслыҡлы, беҙҙең хәрәкәттәребеҙҙең һәр береһен диҡҡәт менән күҙәтә һәм беҙҙе бынан нисек кенә булһа ла кире бәреп сығарыу яғын ҡарар. Һәр минутта яңынан һуғыш ғәрәсәте ҡубыуын, үҙебеҙ әле генә кисереп үткән ҡурҡыныстың ҡабатланыуын көтөп, барыбыҙ ҙа ҙур хәүеф эсендә йәшәйбеҙ, күптәр килгән юлдарына әйләнеп күҙ һалып-һалып ҡуя. Бындай мөлдәрҙә кешене ҡояш та һөйөндөрмәй. Ул беҙгә ҡарап тора ла дошманға: «Күр, ана, улар анауында боҫҡан!» — тип әйтеп тора төҫлө. Ә беҙҙең ҡараштарыбыҙ, күккә түгел, ергә төбәлгән. Беҙ үҙебеҙҙе ҡотҡарырлыҡ һикәлтәләр, соҡорҙарҙы алдан ҡараштырып һайлау менән мәшғүлбеҙ. Ер — ул беҙҙең ҡотҡарыусыбыҙ, һаҡсыбыҙ.

## ТУҒЫҘЫНСЫ БҮЛЕК

Көҙгө аяҙ көндәрҙә Украинаның яландары, урмандары иҫ киткес матурҙар. Һауала томанһып тын торған төтөн шаршауы аша һарғайған япраҡлы ағастар, өҫтәренә алтын бөркәнсек ябынған төҫлө, ғәжәйеп матур күренәләр. Емеш баҡсаларына күмелеп ултырған ап-аҡ хаталар, күңел тыныслығына, ялға өндәп, тәҡәт бирмәй әүрәтеп, үҙҙәренә тартып торалар.

Тик алғы һыҙыҡҡа яҡын урындарҙа бындай матур күренештәрҙе табып булмай инде. Ауылдар ҡыйратылған, үртәлгән,

өйҙәр урынында көл-күмер өйөмдәре генә ҡалған. Гүзәл урмандар ҙа снарядтарҙан теткеләнеп бөткән, һынған, сәрпәкләнгән, тураҡланған ағастар, үлә алмай ғазапланған ҡаты яралыларҙы хәтерләтеп, иңрәшәләр төҫлө. Был күренештәр күңелгә бигерәк ауыр тойола.

Урманда ауыр снарядтар ярылғанда, йөҙйәшәр имәндәр, биҙгәк тотҡандағы шикелле, ҡалтыраналар, бер туҡтауһыҙ ҡыҙғаныс ыңғырашалар. Уларҙың иңрәүҙәре йөрәктәргә үтеп айҡап сыға торған моң-һағыш, хәсрәт менән тулы украин йырҙарын хәтерләтә. Улар әле һуғыштың ҡот осҡос ауырлыҡтарын үҙ елкәләрендә татыған украин халҡының әсе аһ-зарының ауаздары булып ишетеләләр. Сабыйҙарын күкрәктәренә ҡыҫып, яна башлаған өйҙәренән ҡасып сыҡҡан меҫкен ҡатындарҙың ҡурҡыуҙан аларған күҙҙәре, буҙарған йөҙ-сырайҙары күҙ алдына баҫа.

Ҙур алһыу ҡыҙыл түңгәләккә әйләнеп, ҡояш байыуға бара. Кис яҡынлашыуы һалдаттың күңел кисерештәренә яңыса тәьҫир итә; уларҙы тағы ла нығыраҡ хәүеф алдына ҡуйып, һағайыуҙы көсәйтергә мәжбүр итә. Ҡараңғы төшөүгә, һәр кем өр-яңынан үлем менән алышырға әҙерләнә башлай. Һуғышта кеше — тере барометр ул, уның һәр күҙәнәге алда буласаҡ тетрәнеүҙәрҙе, шартлауҙарҙы ҙур һиҙгерлек менән тоя һәм уға ҡаршы торорға үҙендә көс туплай, әҙерлек алып бара башлай.

Һиҙемләп көткәнебеҙ дөрөҫкә сыҡты — әйләнә-тирәбеҙҙә еңел снарядтар ярылырға кереште. Улар, ғәҙәттә, ҡаты атыш башланырының тәүге хәбәрселәре булып киләләр. Улар артынса, алыҫтан уҡ дәһшәтле олошоп, беҙҙең өҫкә ауыр снарядтар килә башланы. Улар, шартлауҙары менән ер һелкетеп, мейеләрҙе һиңкетеп, килеп ярылалар, окоптарҙы емерәләр, тупраҡ бағаналарын күккә олғаштырып, кешеләрҙе ер менән күмәләр, үлем сәсәләр. Был мәлдәрҙә кеше ғүмере себендекенән дә ҡәҙерһеҙерәккә әйләнә, ә кеше үҙен себендән дә көсһөҙөрәк итеп һиҙә. Ҡурҡыныс ябырылғанда, ҡанатлы себен, исмаһам, хәүефһеҙ урын әҙләп, безелдәп осоп китә ала; ә кеше ергә һыйына; үлемесле снарядтар ямғыр урынына өҫтөнә яуғанда, бары ергә генә һыйына ала ул.

Ҡоторонҡо атыш булып алғас, бер килке тынлыҡ урынлаша — әллә артиллеристар әҙерәк хәл ала, әллә яңы снарядтар килтергәнде көтәләр. Иҫән ҡалған һалдаттар, тонған күҙҙәре менән тирә-яҡҡа ҡарана-ҡарана, терелеп ҡәберҙәренән килеп сыҡҡан мәйеттәр шикелле, боҫоп ятҡан өңдәренән һөйрәлеп сыға башлайҙар. Улар шунда уҡ үҙҙәрен һаҡлап алып ҡалған урындарын ипкә килтерергә, емерелгән урындарын нығытырға тотоналар; ашарына аҙығы бары — ашарға, тартырына бары тартырға керешә.

Минең йәнәштә Вафин фамилиялы бер татар һалдаты ята. Атыш тынғас, ул да урынынан ҡалҡынды, өҫ-башын ҡаҡты

һәм, янсығын сығарып, тәмәке төрөргә кереште. Тәмәке тартыуына ҡарамаҫтан, Вафин — үҙе былай бик динле кеше; ҡурҡыныс килгән ваҡыттарҙа, иренен ҡыбырлатып, бер өҙләкһеҙ доғаларын уҡый. Һуғышҡа тиклем ул тире-яры менән һатыу итеүсе бер Мәскәү сауҙагәрендә приказчик булып әшләгән.

Вафин тәмәкеһен, айырыуса ләззәтләнеп, бер-ике мәртәбә лә һурырға өлгөрмәне, беҙҙең окоп ҡаршыһында ғына гөрһөлдәп снаряд ярылды. Вафиным тәмәкеһен атып бәрҙе лә:

— *Лә-хәүле!..* — тип ҡысҡырып ебәреп, ергә ауып китте. Ул ташлаған тәмәке һаман баҙлап ята ине әле. Уны күршеһендәге Попов күреп ҡалды һәм, шатлыҡтан ауыҙын йырып, үрелеп ала һалды ла ҡомһоҙланып һурырға кереште. Ҡурҡыуынан әҙерәк айный төшкән Вафин, урынынан тороп, өҫ-башын ҡаҡҡылапы, Поповтың ауыҙына тилмереп ҡараған килеш:

— «Ҡырҡ»ты ҡалдыр инде! — тип ялбарҙы. Кисет төбөн ҡырып ураған булған икән шул меҫкенкәйем.

— Үҙемә лә «ҡырҡ» ҡына тейҙе бит. Ярай инде «егерме» һен ҡалдырырмын, — тине Попов, уның хәленә инеп.

Вафин өлөшөнә тейгән «егерме»не алып ҡына өлгөрҙө, — окобыбыҙ өҫтөнә йәнә снарядтар яуа башланы.

Ҡыҙыл баҡыр ҡояш яҡындағы һары урман артына ауышҡас, беҙҙең өҫтә инде снаряд һәм шрапнелдәрҙән тын алғыһыҙ ут дауылы ҡоторорға кереште лә китте. Ер һиңкетеүсе шартлауҙарҙан ҡолаҡтары тоноп, баштары шаңҡып ҡалған кешеләр, һәммә ихтыяр көстәрен, өмөттәрен юғалтып, дауыл ҡоторған океанда йөҙгән юнысҡылар хөкөмөндә инеләр. Бындай ваҡыттарҙа кешеләрҙә көллө кешелек тойғолары юҡҡа сыға, тупаҫлана. Уларға әле генә һин дә мин һөйләшеп йөрөгән, хәҙер инде боттары — ботса, ҡулдары — ҡулса айырылып ятҡан, хатта баштары сәрпәкләнеп мейеләре һытылып аҡҡан йән күршеләренең мәйеттәре лә бер төрлө лә тәьҫир яһай алмай. Һәр ҡайһыһы үҙ ғүмерен һаҡлап алып ҡалыуҙы ғына ҡайғырта, уларҙың бөтә ғәмен шул хәсрәт кенә биләй, шуның өсөн генә хәстәрлек күрә улар...

Ҡапылдан ғына немецтар артиллерия утын беҙҙең тылға күсерҙеләр һәм шуның артынса уҡ окоптарға мылтыҡ һәм пулеметтарҙан ҡаныҡып ут яуҙырырға тотондолар. Быны мәғәнәһе һәр кем өсөн асыҡ инде — хәҙер улар атакаға күтәреләсәк! Иҫән ҡалған һалдаттар винтовкаларын сытырлатып ҡыҫып тотоп, дошманды көтә башланылар. Дошманыңдың атакаға күтәрелеү ҡурҡынысы тыуғанда, кешелә бер генә уй була: «Мин ҡаршыма килгәндәрҙе юҡ итергә тейешмен, юғиһә улар үҙемде юҡ итәсәк», һәм һинең көллө хәрәкәттәрең ошо уйыңа буйһона.

Шунда пулеметтар тынып ҡалды, һәм бер нисә минуттан немецтар, ҡаты ҡысҡырышып, беҙҙең окоптарға ябырылды. Бер кем дә беҙгә бер төрлө лә команда бирмәне, ҡаршы то-

порғамы, сигенергәме икәнен дә белмәйбеҙ. Атака алдынан булған атышта беҙҙең барлыҡ командирҙарыбыҙ ҙа сафтан сығып бөткәйне. Бындай мәлдәрҙә һалдаттар үҙҙәрен ирекләрәк һиҙәләр, һәм һәр ҡайһыһы үҙ белдеге менән эш итә. Бөгөн дә шулай булды — немецтар яҡынайғанын күргәс тә, урындарын ташлап, бер-бер артлы артҡа йүгерә башланылар. Беҙҙең көстәрҙең бөтөнләй тарҡалғаны, немецтарға ҡаршы тора алмаясағыбыҙ көн кеүек асыҡ ине. Өҫкә ябырылып килгән ҡурҡыныс мине лә артҡа һөйрәне. Мин, телефон аппаратын ташлап, ҡасыусылар артынан йүгерҙем. Бөтә ер снарядтарҙан йырмасланып бөткән. Ҡараңғыла, күҙгә аҡ-ҡара күренмәй, аталанып йүгереп барғанда, снаряд ярылыуҙан яһалған соҡорҙарҙы тиҙ генә шәйләп алып буламы ни — әленән-әле һөрлөгөп, тәгәрәйем дә китәм, тәкмәсләп барам да төшәм. Ғәжәп хәл, бындай ваҡыттарҙа ауыртыу ҙа һиҙмәйһёң, аңыңдың асыҡлығын да юғалтмайһың. Бер ямға гөрһөлдәп барып төшөүең була, пружина менән сөйөп ебәреләһеңме ни — шунда уҡ һикереп сығып йүгерәһең, икенсеһенә барып баш түбән осҡансы, шулай елдерәһең генә...

Иҫләмәйем, күпме йүгергәнмендер, ҡапыл кемдер аяғыма күҫәк менән килтереп һуҡҡан кеүек булды. Мин, һуғыусынан һаҡланған төҫлө, үҙ ихтыярымдан тыш, артыма әйләнеп, винтовкам менән һелтәндем. Ҡулымда ниндәйҙер хәлһеҙлек барлыҡҡа килгән икән, ул ысҡынып китте. Уны һәрмәп алып тороу ҡайғыһы ҡайҙа инде ул, аяғымдың сәнсеп ауыртыуын да онотоп, туйтаңлай-туйтаңлай ары саптым... Үҙебеҙҙең элекке окопҡа барып төшкәс кенә туҡтаным, биҙгәк тотҡандағы шикелле ҡалтыранам, тештәр тешкә теймәй, тамағым сатнап кипкән, күҙ алдымда йәшелле-ҡыҙыллы ут дүңгәләктәре бейешә.

Бер аҙ тын тартып, аңымды йыя башлағас, тәнемдең өшөп ҡалтырағанын һәм аяғымдың үлтереп һыҙлағанын тойҙом. «Ыыу! Ыыу!» Тик уны ҡайҙан алаһың?

Ҡапыл шомло шау-шыу ҡупты.

— Газ! Газ! Маскаларығыҙҙы кейегеҙ!

Шул саҡ танауға ниндәйҙер бер емеш еҫенә оҡшаған апаруҡ тәмле генә еҫ бәрелде, тик уны һулауҙан тын ҡурыла, күкрәк ҡыҫа башланы. Мин противогазымды кейҙем, тик ул тын алыуҙы бигерәк ситенләштерҙе; аҙ ғына сыҙаным да уны битемдән йолҡоп алдым. Был ваҡытта инде әлеге «емеш еҫе» юҡҡа сыҡҡайны, һауа әүәлгесә таҙа ине инде.

— Әлдә ел тиҫкәре бәрелде. Газды немецтарҙың үҙҙәре өҫтөнә ҡыуып алып китте! — тип шатланып ҡысҡырҙы берәү.

Был мәлдә атыш тамам тынғайны. Ниңәлер немецтар өҙлөкһөҙ рәүештә һауаға ракеталар сөйөргә керештеләр, улар тирәяҡты әллә ҡайҙарға саҡлым яҡтырта. Дошман торған ерҙә ығы-зығы ҡупҡаны әллә ҡайҙан тойолоп тора, унда ҡыйҡыу-

һөрән күтәрелде. Немецтар ебәргән газ, кирегә әйләнеп, тегеләрҙең үҙҙәрен тонсоҡтора башланы.

Тын алыу сикһеҙ ауыр, тамағыңа таяҡ тыҡҡандармы ни, өҙләкһеҙ осколоҡ тоттора, хәлде ала. Өҫтәүенә, уң аяҡ һынды ҡатырып ауырта. Итегемдең эсе тулы һыу. Ҡайҙа батып, һоҫоп алдым икән уны, хәтерләмәйем. Ҡулымды ҡуңысыма тығып ҡараһам — ул ҡап-ҡара ҡанға мансылып сыҡты. Шунда ғына аяғым яраланғаны аңыма етте.

— Яраланғанмын, ахыры, — тинем мин эргәмдә һаман да әле противогазын һалырға ҡурҡып ятҡан һалдатҡа. Ул рота командирының денщигы булып сыҡты. Ул әйткәнемде ҡул ымымдан аңлап алды ла, противогазын һалып, аяғымды ҡапшарға кереште.

— Эйе, аяғыңа бәргән. Сис тиҙерәк итегеңде, бәйләй һалайыҡ.

Йәһәт-йәһәт кенә бәйләштергәс, ул миңә һис кисекмәй артҡа китергә ҡушты. Шул ыңғай, ҡыҙыулыҡ менән һикереп торматсы булғайным, башым зырлап әйләнеп китте, йүтәл тотто; тын алырға ирек бирмәй, быуылдырып үкшыта башланы.

— Булмай! — тип көс-хәлгә әйтә алдым да ыңғырашып ергә сүгәләнем. Бер генә быуыным да ҡалманы.. Э тамаҡ сатнай...

Шул ике арала яҡында санитарҙар күренде. Улар мине күрмәй үтеп тә китергә булғайнылар, денщик ҡырҡыу ғына итеп әйтте:

— Алығыҙ. Аяғына баҫа алмай. Өҫтәүенә, газ менән ағыуланған!

Уның был һүҙҙәре һәм санитарҙарҙың шунда уҡ уны тыңлауы минең күңелемде тултырып ебәрҙе. Уларҙы, барыһын да ҡосаҡлап, рәхмәт уҡый-уҡый үбәһеләрем килде, тик быға бөтөнләй хәлем ҡалмағайны.

Санитарҙар мине күтәреп носилкаға һалдылар. Рәхмәт тойғоларымды башҡаса белгертә алмағас, мин уның менән хәлһеҙ ҡулымды күтәреп болғап хушлаштым.

Тымыҡ көҙгө кис. Бер ерҙә лә атыу ишетелмәй. Санитарҙар мине урман ауыҙына еткерҙеләр ҙә повозкаға һалдылар.

Артабан нимә булғандыр, иҫләмәйем. Мин санитарный поездың ваннаһында ятҡан хәлдә аңыма килдем. Ваннала йыуғас, ярамды ҡабат бәйләнеләр ҙә ниндәйҙер дарыу эсерҙеләр, уның артынса ауыҙыма бер стакан һөт ҡойҙолар. Ләкин мин уларҙың бер тәмен дә тойманым. Көллө тәнем хәлһеҙлектән таралып төшөп бара, күҙ ҡабаҡтарын күтәреп асырлыҡ та көс ҡалмаған. Йәнә носилкаға һалдылар ҙа икенсе вагонға алып киттеләр. Шунда инде мин тағы ла һушымды юйҙым. Аралаш, төшөмдәге һымаҡ ҡына, ҡолағыма тәгәрмәс тыҡылдағаны һәм паровоз ҡысҡыртҡаны килеп бәрелгәндәй була, ләкин быларҙың береһен дә алдыма йыя алмайым.

## УНЫНСЫ БҮЛЕК

Мине йомшаҡ ҡына итеп иркәләп уятҡандай иттеләр. Иң беренсе итеп тотош аҡтан кейенгән шәфҡәт туташтарын күрҙем. Тәүге минуттарҙа әллә ни әшләп улар миңә быға са күрелмәгән илаһи йән эйәләре һымаҡ булып күренделәр, шуға бер аҙға уларҙың һәр хәрәкәтен ғәжәпһенеп күҙәтеп яттым. Сестралар, мине иплап кенә урынымдан ҡалҡындырып, халат һәм аяғыма сәпелдәк-ҡата кейҙерҙеләр. Берәүһе дарыу менән һөт килтерҙе.

— Эс, эс. Ике тәүлек бит инде аңыңа килә алмайһың. Тамағыңа тәғәм дә ҡапҡаның юҡ. Дүрт тапҡыр укол һалдыҡ. Яраң былай артыҡ ауыр түгел. Тик ҡаның күп аҡҡан да газ менән нык ағыуланғанһың, — тине ул миңә.

Әллә ни эшләп был һүҙҙәргә минең бер генә лә иҫем китмәне, әйтерһең дә, улар миңә һис/ҡағылмай ине. Тирә-яғыма ҡарап алғас, мин үҙемдең һаман да\ вагонда икәнемде белеп алдым. Тәҙрәнән вокзалдың ҙур бинаһы күренеп тора, платформала кешеләр ҡайнаша.

— Ниндәй станция был? — тип һораным һәм үҙемдең тауышымды үҙем таныманым.

— Петроград, — тине эргәмдә торған сестра. Был хәбәрҙе ишеткәс тә, ҡылым да ҡыбырламаны. Шул саҡта башым ҡапыл ғына ауырая һәм зыр-түңәрәк килеп әйләнә башланы, күҙ алдарын ҡуйы томан ҡапланы; мин, хәлһеҙләнеп, ҡабат мендәргә ауҙым. Ләкин миңә, ятып, ҡабаттан һушһыҙлыҡ томанына сумырға ихтыяр ҡуйманылар.

— Юҡ. Юҡ. Беҙ һине хәҙер ошонда төшөрәбеҙ ҙә лазаретҡа оҙатабыҙ, — тинеләр.

Тиҙҙән мине, носилкаға һалып, вагондан сығарҙылар.

Көн йонсоу. Коро болот ҡала өҫтөн ҡалын булып ҡаплаған. Ваҡ ҡына һалҡын ямғыр бер өҙлөкһөҙ һибәләй. Шулай ҙа мин саф һауаны, туймаҫтай булып, ҡомһоҙланып һулайым; күкрәктәрем киңәйеп китте. Платформала күмәк кешеләр йыйылған, улар беҙҙе сәләмләйҙәр. Кемдәрҙер минең носилкама кәнфиттәр, папиростар ырғытты. Күкрәгемә килеп төшкән бер ҡап папиросты ҡулыма алып ҡараным, уның тышына «Зефир» тип яҙылғайны.

Беҙҙе ябыҡ машинаға тейәнеләр ҙә шаулы урамдар буйлап алып киттеләр, ләкин урамдың үҙен күреп булмай.

Хәрби лазаретта ун көн ятҡас, мин урынымдан әкренләп тора, ҡултыҡ таяҡтарына аҫылынып аҙыраҡ йөрөштөрә башланым. Бер мәл коридорҙа торған бик ҙур көҙгө ҡаршыһына барып еттем. Ҡараһам, ҡотом осто. «Был минме?» — тип ҡысҡырып ебәрә яҙҙым. Эйе, мин үҙемде үҙем таныманым. Йөҙөм күм-күк булғайны. «Эгәр ғүмерлеккә ошолай ҡараҫҡы ҡиәфәтендә ҡалһам!.. Ҡот осҡос! Ҡайтып, әҙәм күҙенә нисек күренермен?» -— тигән уй сарпып үтте мейемдә.

Мин, ҡурҡып, битемде устарым менән ҡапланым; шунан, был ҡотһоҙ күҙгө янынан нисек етте шулай тәнтерәкләп китә һалып, һылтыҡлай-һылтыҡлай урыныма барып ауҙым. Күҙемдән соборлап ағып киткән йәштәремде башҡалар күреп ҡалмаһын өсөн, башымды йәһәтерәк одеял менән бөркәй һалдым. Сестра шулай ҙа минең сәйер ҡыланышымды һиҙеп ҡалған икән, шунда уҡ яныма килеп етеп, кәйефем ҡырылыуының сәбәбен төпсөнөргә тотондо. Мин уға бер һүҙ менән дә яуап ҡайтара алмайым; күҙ йәштәре, тамағыма төйөлөп, быуып алып бара. Бер төрлө лә яуап ала алмағас, ахыр сиктә, ғәжәпһенгән сестра эргәмдән китеп барҙы, ҡабат минең карауатым янына килмәҫ булды.

Икенсе көндө иртән палатаға врач инде. Мин, көллө тәнем уттай ҡыҙышып, хәл өҫтөндә ята инем. Температурам утыҙ туғыҙ градусҡа тиклем күтәрелгән.

— Туғанҡай, ни булды һиңә? Берәйһе рәнйеттеме әллә? Былай һауығыуға бараһың шикелле. Яраң уңала. Газ да артыҡ зарар килтермәгән. Үпкәң таҙа ҡалған. Һиңә бары әҙерәк тынысланып ял итергә генә кәрәк, — тип, бала шикелле итеп, башымдан һыйпап, йыуатырға кереште.

Мин, күңелем нескәреүҙән бер һүҙ ҙә әйтә алмайынса, битемә төртөп күрһәттем, йәнә мендәремә ҡапландым.

Минең ни өсөн өҙгөләнеүемде аңлап алған врач, уйланып, әҙерәк шым торҙо, шунан мине йәнә йыуатырға тотондо:

— Битең өсөн ғауғаланаһыңмы ни? О-о, йәш егет ҡайғыһы бына нәмәлә икән! Ҡыҙҙар яратмаҫ, тип ҡурҡаһыңмы? Баһадир, һине лә ҡыҙҙар яратмағас!.. — Ул шаяртып арҡамдан һөйөүҙән туҡтаны ла етди итеп әйтте: — Эйе, ҡәһәр төшкөрө газ шулай иткән һине. Тик, минеңсә, бөтөргә тейеш. Беҙ һине спецоиалист-врачҡа күрһәтеп ҡарарбыҙ.

Бынан һуң мин аҙыраҡ тынысланa төштөм. Бер-ике көндән мине тире ауырыуҙары буйынса белгес булған врач ҡараны, һөртөргә әллә ниндәй шыйыҡ дарыуҙар бирҙе. Көнөнә унар мәртәбә көҙгөгә барып ҡарайым. Ә хәҙер инде битемдең төҫө элеккенән дә ҡурҡынысыраҡ булып, хас та мәйеттеке шикелле, күкһел һороға әйләнә бара ине.

— Әгәр шул көйөнсә ҡалһам? — тигән һорау башымдан китмәй, йөрәгемде ауырттырып өйкәп тик тора.

Өмөтһөҙлөгөм шул сиккә етте, өйгә хат яҙыуҙан да төңөлдөм. Битем шул көйөнсә, мәйеттеке шикелле булып ҡалһа, мин унда ҡайтып нисек күренермен? Әсәйемдең ҡото осоп, йөрәге ярылып үлер бит. Әҙерәк һауыҡҡас, миңә, бәлки, отпуск бирерҙәр. Әгәр шул ике арала битем әүәлге асылына ҡайтмаһа, мин, билләһи, унда ҡайтып күҙ көйөгө булмаясаҡмын.

Төндәр буйы йоҡламайым — ауыр уйҙар теңкәгә тейә. Йыш ҡына күҙ алдыма Мәрйәм Ҡарашайскаяның һыны килеп баҫа.

Ул, могайын, әле Петроградталыр. Өҙөлдөрөп-өҙөлдөрөп уны күргем килә, ләкин был теләгемде башымдан көсләп ҡыуып сығарырға, уны бөтөнләйгә онոторға тырышам. Петроградтағы адресын яҙып бүләк иткән дәфтәрен фронтта ҡайҙалыр юғалтҡайным, хәҙер инде хәтер дәфтәренән уның үҙенең дә иҫтәлеген мәңгелеккә һыҙып ташлағым килә. Бында уның менән берәй төрлө яңылыштан ғына осрашырға тура килгән сүрәттә лә, мин барыбер танытмай ҡасасаҡмын. Ни йөҙөм менән күренәйем мин уға ошо ҡиәфәтем менән? Был һис кенә лә мөмкин хәл түгел. Мин уны тиҙерәк, тиҙерәк онոторға тейешмен!

Көн һайын ошо ҡарарымды күңелемдән нығытам, ләкин Мәрйәмдең аҡҡоштай һыны ҡараҡ шикелле һағалап боҫоп ҡына килә лә күҙ алдыма тере булып баҫа, үҙ ихтыярымдан тыш күңелемде иләҫ-миләҫ килтереп, рәхәт иттереп ҡытыҡларға тотона. Мин, ныҡышып-ныҡьинып, уны уйымдан ҡыуалайым, башҡаса иҫемә төшөрмәҫкә күҙ бирәм.

Фронтта ҡалған иптәштәремә лә хат яҙғаным юҡ әле, әллә ни эшләп теләк тә тыумай. Мин бөтә барлығым менән үҙ хәсрәтемә генә бирелгәнмен. Хатта тәҙрәнән урамға ла ҡарағым килмәй. Ҡайһы берҙә, тамам өмөтһөҙлөккә бирелеп киткән саҡтарымда, был лазареттан тиҙерәк ҡотолаһы ла, кеше күҙенә салынмай, ҡарурманға ҡасып, унда дөм яңғыҙлыҡта йәшәйһе ине, тигән ҡырағай хыялдарға ла ысын ихластан сумып китәм.

Бер мәл, мосолман һалдаттарына бүләктәр өләшергә, тип, Петроград мосолмандары лазаретка килде, тинеләр. Улар «Йәмғиәти хәйриә» тигән шәфҡәт ойошмаһының вәкилдәре икән. Быны миңә палатабыҙҙың сестраһы Мария Павловна әйтте:

— Мосолман байҙарынан вәкилдәр килде. Бүләктәр алып килгәндәр. Мин һинең исемеңде әйттем. Әйҙә минең менән приемныйға!

Мин, тиҙ генә урынымдан тороп, халатымды яурыныма һалдым да ишеккә йүнәлдем, һәм шунда башыма ҡылт итеп: «Э улар араһында Мәрйәм дә булһа?!» — тигән уй килде. Был уйымдан үҙемдең ҡотом осоп, халатымды һалып аттым да карауатыма ҡабат ауҙым. Мария Павловна мине саҡырырға ҡатҡат инде. Тик мин барыуҙан, төрлө һылтауҙар табып, ҡырҡа баш тарттым.

Килеүселәр сығып киткәс, тәҙрәгә үрелеп, мин улар артынан оҙаҡ ҡарап торҙом. Тегеләр дүртәү ине: өс ир һәм бер ҡатын кеше. Мин ҡатын кешегә айырыуса диҡҡәт менән ҡараным. Был — бик яҡшы кейенгән, тулы, һомғол кәүҙәле бер ханым ине. Башына бик матур ҡалпаҡ кейгән. Ҡурҡыуым бушҡа булған, улар араһында Мәрйәм юҡ ине. Мин, тынысланып, койкама ултырҙым. Оҙаҡламай Мария Павловна килеп инде, ул миңә тип ҡалдырылған бик ҙур төргәкте алдыма килтереп ҡуйҙы. Унан алмалар, кәнфит, печенье һәм бик күп га-

зета, журнал, китаптар килеп сыҡты. Мин алдыма килгән тәмле-татлы ниғмәттәрҙе палаталағы һәммә иптәштәргә таратып бирә һалдым да үҙем ҡомһоҙланып газета-журналдарға ҡаҙалдым. Бында «Ваҡыт», «Йолдыз», «Нур» газеталары, «Дин вә мәғишәт», «Шура» журналдары һәм төрлө дини китаптар бар ине. Мин китаптарҙы иғтибарһыҙ ғына мендәр аҫтына тыҡтым да газета, журналдарҙы йотлоғоп уҡый башланым. Миңә, һуғыштың ҡот осмалы ут-һыуҙарын кискән кешегә, татар газеталары бик булдыҡһыҙ, йомшаҡ булып күренде. Уларҙа беҙҙең йөрәктәрҙә ҡайнаған уйҙар ҙа, беҙҙең телдәр әйтергә ҡысып торған һүҙҙәр ҙә — береһе лә юҡ ине. Фронттағы хәлдәр хаҡында яҙылған мәҡәләләр, балалар уйыны хаҡындағы шикелле, үтә бер ҡатлы, мәғәнәһеҙ яҙылғайны. Күберәк урын дин мәсьәләләренә бирелгән. Үлемесле һуғыш барғанда, бик күп халыҡтарҙың яҙмыштары ҡыл өҫтөндә торғанда, һуғыш яланында миллионлаған ғәзиз баштар һалынғанда, татар матбуғаты муллалар, мәсеттәр хаҡында бик ҙур хәстәрлек менән тулған, әйтерһең дә, бөгөнгө көндә шунан да ҙур, мөһим мәсьәлә юҡ донъяла. Ниңә был газеталар фронттарҙа бер ҙә юҡҡа һәләк булған миллиондарҙың нәфрәт ауаздарын сағылдырмай? Ниңә улар ошолай мәғәнәһеҙ ҡан ҡойоуға ҡаршы көслө оран күтәрмәйҙәр? Нисек күтәрһендәр инде, уларға үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын тигәндәй, үҙҙәрен тәьмин иткән хужаларының табандарын яларҙай булып, улар алдында ялағайланалар.

Был газета һәм журналдар миңә көтөлгән рухи аҙыҡты бирә алманылар. Ҡоро ымһыныуым ғына булды. Улар миңә йәндән мәхрүм әшәке нәмәләр булып тойолдолар, бары асыуымды ғына ҡабарттылар. Йөрәктәрҙе ярһытып, тотоп тыйғыһыҙ дәрт менән тултырыусы ялҡынлы һүҙҙәр уҡығы, көслө оран булып яңғыраған йырҙар ишетке, уларға эйәреп, азатлыҡ өсөн ҡайнар көрәшкә атлыҡҡы килә...

Битемдәге йәмһеҙ ҡара тантар аҡрынлап юйыла бара, ләкин мәйет төҫө һаман да китмәҫкә ҡыртлалаша; үҙемә ҡалһа, мин торған һайын йәмһеҙләнә барам шикелле.

Газ менән ағыуланыуҙан һаман булһа ныҡлап ҡына сихәтләнеп бөтмәйем әле. Ваҡыт-ваҡыт быуылып йүткерәм, шул саҡта күкрәгем сәнсеп-сәнсеп ала. Аяғымдағы ярам тамам уңалды тиерлек инде, яйлап-яйлап таяҡһыҙ ҙа йөрөй ала башланым. Минең бар хәсрәтем — битем зәғифләнеп ҡалыуҙан ҡурҡыуҙа. Төҙәлерме икән ул, бөтөнләй һулып ҡалмаммы икән йәшләй генә?

Өҙәләнеүемде һиҙептер, ахырыһы, Мария Павловна, битемә массаж яһағанда, минең менән эсемә-бауырыма инеп һөйләшә. Бер арала ул миңә серҙәрен дә систе. Уның һөйгән егете флотта хеҙмәт итә икән. Тегенең хаттарының ҡайһы бер урындарын да уҡып күрһәткеләй.

— Саша — бик һәйбәт кеше, — ти Мария Павловна. — Беҙҙең танышып дуҫлашҡанға өс йыл инде. Айырылышҡаныбыҙға ла йыл тулып китте. Уны Ҡара диңгеҙ флотына ебәрҙеләр. Беҙ вәғәҙәләшкәнбеҙ. Иҫән йөрөп, һау ҡайтһа, бергә тора башларға һүҙ ҡуйышҡанбыҙ. Үлеп һағындым мин уны! Юҡһыныуҙарымды һин күҙ алдарыңа ла килтерә алмайһың... — Ул, бер аҙ уйсанланып, моңайып тора ла һүҙҙе миңә бора: — Битеңдәге таптарҙы бөтөрөрбөҙ, ҡайғырма. Моғайын, һинең дә һөйгән ҡыҙың барҙыр әле. Ул да һине һағынып көтә торғандыр. Аҡыллы ҡыҙ булһа, һин ошо көйөңсә ҡайтып төшһәң дә, ул һине яратыр. Э шулай ҙа беҙ барыбер һинең битеңде элеккенән дә матур итербеҙ.

Уның яғымлы һүҙҙәрен тыңлауы миңә рәхәт тә, әҙерәк ауыр ҙа. Ысын йөрәге менән ихлас итеп әйтә шул ул быларҙы.

Мария Павловна һөйләгәндә, уның ҙур зәңгәр күҙҙәре киң асыла, тулы алһыу бит остаЬында, һыу өйөрмәһе кеүек, матур соҡорҙар барлыҡҡа килә. \

— Ыңар аяҡлы йә һыңар ҡуллы булып ҡайтһа ла, иҫән генә йөрөп ҡайтһын инде Сатаҡайым! — тип ҡуя ул, тәрән көрһөнөп, һәм тағы ла дәртләнеберәк миңә массаж яһарға керешә. Ул массаж яһағанда, мин, күҙҙәремде йомоп, ләззәт донъяһына сумам, бәхетле минуттар кисерәм. Бар булған хәсрәттәрем юҡҡа сыға. Уның йылы, йомшаҡ ҡулдарынан көллө тәнем буйлап рәхәт йылылыҡ тарала, ошо хәлдә оҙаҡ-оҙаҡҡа донъяңды онотоп ятаһы килә. Ул массаж яһағанда миңә сикһеҙ рәхәтлек биргән ошо наҙлы ҡулдарҙы, ҡуш услап тотоп алып, ҡомһоҙланып үбергә тотоноп китеү теләге көсәйгәндән-көсәйә, тик баҙнат итә генә алмайым.

Мария Павловна сығып киткәс тә, мин уның хаҡында оҙаҡ-оҙаҡ уйланып ятам, уның иҫ киткес йылы, шәфҡәтле күңеленә һоҡланып бөтә алмайым. Ул оҙағыраҡ инмәй торһа, ысын-ысынлап һағыш кисерәм. Сашаһы һап-һау ҡайтып төшөп, бәхетле генә булһын ине ошо рәхимле зат.

Петроградтың ҡапыл-ҡапыл алмашынып тороусан дымлы климаты миңә зарарлы тәьҫир итте булһа кәрәк — биҙгәк тота башланы. Газдан дауаланып та өлгөрмәгәнмен, бына һиңә кәрәк булһа, сүп өҫтөнә сүмәлә. Врачтар мине, артабан дауалар өсөн, Мәскәүгә оҙатырға кәрәк тип таптылар. Бер яҡтан, быға шатланған булһам да, Мария Павловна менән айырылышыу бик яманһыу булды. Мин китәһе көндө ул лазаретта күренмәне — ауырый, тинеләр. Уның менән хушлашмай ҙа китеү миңә айырата ауыр тәьҫир итте. Был сибәр һәм үтә шәфҡәтле күңелле ҡыҙҙың һыны минең хәтеремдә бик оҙаҡҡа һаҡланыр.

## УН БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

«Алтын көмбәҙле Мәскәү!» тигән һүҙҙе быға тиклем миңә бик йыш ишетергә тура килгәйне. Ысынлап та, Мәскәүгә килеп инеү менән, һинең күҙеңә иң тәүҙә иҫәбе-һаны булмаған сиркәү манаралары һәм көмбәҙҙәре ташлана. Сиркәүҙәр аҙым һайын осрай. Уларҙың күбеһенең манаралары үҙҙәренән һуңыраҡ һалынған бейек өйҙәрҙән дә тәпәшерәк булып ҡалған. Мәскәү кешеләре миңә, Петроградтыҡыларға ҡарағанда, һүлпәнерәк, ауырыраҡ ҡуҙғалыусан булып күренделәр. Бында күберәген һәлмәк атлап йөрөүсе ҙур һаҡаллы йыуан кешеләр осрай.

Урамдарҙың күбеһе кәкре-бөкрө, уларҙан иҫәпһеҙ-һанһыҙ тар тыҡрыҡтар бормаланып-бормаланып бер ситкә үрмәләп китәләр. Йорттары ла тигеҙ түгел. Биш-алты ҡатлы мөһабәт йорттар менән йәнәшләп, ергә сүгеп бөткән бер ҡатлы иҫке ағас йорттар ултыра. Лавкаларҙа бик ҡалын кейенеп алған, ҡыш бабайға оҡшап торған һаҡалтай сауҙагәрҙәр ултыра. Үтеп-һүтеп йөрөгән кешеләрҙең һәммәһен дә улар кейек аңдыған һунарсы күҙе менән ҡаршы алалар һәм оҙатып ҡалалар.

Һәр бер сиркәү ҡаршыһында ғәрип-ғөрәбә, һуҡырҙар тулып йөрөй. Улар үтеп барған һәр кемгә ялбарып ҡулдарын һуҙалар, ҡыҙғаныс иңрәүле тауыштар менән хәйер-саҙаҡа һорайҙар. Урам буйлап китеп барған ҡарсыҡтар, һәр сиркәү ҡаршыһында туҡтап, ишек башындағы тәрегә ҡарап, маңлайҙарын ергә бәрә яҙып, бөгөлә-һығыла суҡыналар. Трамвай туҡтаған урындарҙа күпселеге йыуан кешеләр вагондарға ашыҡмай ғына ауыр атлап менәләр. Уларҙың баҫҡыс буйлап менеп еткәнен көткөләгән арала, трамвай инде ҡуҙғалып та китә. Минең шикелле трамвайҙа йөрөп өйрәнмәгән кешеләр бындай хәлдәрҙә ауыҙ асып тороп та ҡалалар. Мәскәүлеләр үҙҙәре ундай хәлгә тарымайҙар.

— Әфәнделәр, әфәнделәр, йәһәтерәк ҡыймылдағыҙ! — тип ҡабаландыра улар, ҡыҫылышып. Әгәр инде шунда вагон ҡуҙғала башлаһа, баҫҡысына баҫҡан көйө аҫылынып китергә лә ҡурҡмайҙар.

Сиркәү ҡыңғырауҙарының өҙлөкһөҙ саң ҡағыуына һәм трамвай тәгәрмәстәренең бер туҡтауһыҙ әсе шағырлауынан бындай тауыштарға күнекмәгән баш һиңкеп ауырта башлай.

Беҙҙе вокзалдан лазаретҡа бына шундай трамвайға ултыртып алып барҙылар. Лазарет трамвай юлынан байтаҡ ситтә, аулаҡ урамдарҙың береһендә, ҙур баҡса эсенә урынлашҡан портта булып сыҡты. Ул бер байҙың утарына йә булмаһа дачаға оҡшағайны. Беҙҙе тултырған тауыҡ кеүек һимеҙ сестралар ҡаршыланылар, врачҡа приемға алып инделәр. Врач — тәбәнәк кенә буйлы кеше, ләкин күҙҙәре ҙур. Ул көрәктәй һаҡал үҫтергән. Врач беҙҙән бер нәмә лә һорашып торманы, хатта беребеҙгә бер һүҙ өндәшмәне; бары ауырыу тарихтары-

быҙҙы ҡарап сыҡты ла палаталарға тәғәйенләп оҙатты. Мин, был әллә телһеҙме икән, тип тә уйлап ҡуйғайным; тик беҙ сыға башлағанда ғына, ул ниндәйҙер бер әш буйынса бер сестраға шундай тупаҫ итеп екерҙе, — ирекһеҙҙән барыбыҙ ҙа артыбыҙға әйләнеп ҡараныҡ. Уның бәләкәй генә йөҙөнә һис килешмәгән ҙур күҙҙәре шул тиклем уҫал, зәһәрле йылтырайҙар ине, беҙ, шөрләгәндәй, тиҙерәк бүлмәнән сығып китеү яғын ҡайырҙыҡ. Хатта үҙемә тәғәйенләнгән палатаға килтереп индергәс тә, мин уның ағыу сәсеп йылтыраған күҙҙәрен күреп торғандай булдым.

Беҙҙең был лазаретҡа килеп урынлашыуыбыҙға өс көн үтте инде, әммә беҙҙең сәләмәтлегебеҙҙе тикшерергә, хәлебеҙҙе белешергә бер кем дә килгәне юҡ әле; беҙ бары сестраларҙы ғына күрәбеҙ. Шулай ҙа ваҡытында ашарға бирергә онотмайҙар, хатта палатала тәмәке тартырға ла рөхсәт итәләр. Тәүҙә беҙ бындағы тәртипһеҙлектәргә аптырап ҡарағайныҡ; шунан, бер ни тиклем күнегә төшкәс, ҡуйылған иректән файҙаланып, шаярыша, хәлдән килгәнсә күңел аса башланыҡ. Күпме генә шаулашмайыҡ, беҙгә иҫкәртеү яһаусы юҡ, бары сәғәт төнгө ун бер тулғанда ғына, утты һүндереп, беҙгә ятырға ҡушалар.

Дүртенсе көн тигәндә, градусниктар килтереп, температураларыбыҙҙы үлсәнеләр. Пал атал ағыл арҙың һәммәһенең дә температураһы яҡшы булып сыҡты. Был хәлгә күптәр борсолоша башланы. Сөнки, температура арыу булһа, лазареттан сығарып, фронтҡа кире ебәреүҙәре мөмкин ине. Былдай тын, аулаҡ урынды бер кемдең дә ташлап, ут эсенә ҡабат барып ингеһе килмәй ине.

Ағай-эне хәйлә ҡора башланы, нисек иткәндә температураны юғары итеп күрһәтеп була, йәнәһе. Был мәсьәлә буйынса беренсе булып йәмшек танаулы шаҙра бер һалдат үҙ фекерен уртаға ҡуйҙы.

— Градусникты буҫтау одеялға нығ итеп ышҡыһаң, температура шунда уҡ күтәреләлә китә, — тип үҙ тәжрибәһе менән уртаҡлашты ул.

Уның артынса иң төпкө мөйөштә ятҡан ырғаҡ танаулы һалдат үҙенең ҡиммәтле тәҡдимен индерҙе:

— Сестра градусник килтерер алдынан ғына, стакан менән ҡайнар һыу индереп, тумбочкаға йәшереп ҡуйырға кәрәк. Сестра градусникты ҡуйып киткәс тә, уны шул ҡайнар һыуға тығып алырға кәрәк. Шунан инде ни булғанын күрерһегеҙ.

Был тәҡдим барыһы өсөн дә ҡулай булып күренде, ә әлеге йәмшек танаулы һалдаттың кәңәшен тәүге тәҡдимде тормошҡа ашырыу берәй төрлө мөмкин булмаған сүрәттә генә файҙаланырға ҡарар ителде.

Тәү мәртәбә температурабыҙҙы үлсәгән көндө лә, иртәгеһенә лә беҙҙең палатаға врач инмәне. Өсөнсө көнөнә, иртәнге сәй ваҡытында сестра йәнә беҙгә градусниктар ҡуйып сыҡты. Был

мөлдә ауырыуҙарҙың күптәре ауыҙҙарына килтергән сәйҙәрен дә кире ултырттылар. Ҡайнар сәйҙе ни өсөн һаҡлағандары мәғлүм инде.

Минең койкам ишек төбөндә генә тора. Шуға күрә градусник беренсе булып миңә эләкте. Ауырыуҙарҙың бөтәһе лә миңә төбәлделәр, мин градусникты ҡултыҡ аҫтыма ҡыҫтырҙым да тумбочкама табанырак шылыштым, унда яңы эсә башлаған сәйем ултыра ине. Хәҙер инде уңайлы ваҡытын ғына самалап алаһы ҡалды.

Сестра өс-дүртебеҙгә градусник ҡуйҙы ла палатанан сыҡты. Шунда уҡ бөтә ауырыуҙар ҙа ығы-зығы килә башланылар:

— Сәйегеҙгә тиҙерәк тыға һалығыҙ! Беҙ ишектә ҡарауыллап торорбоҙ! — тип ҡысҡыралар.

Беҙ, градусник алғандар, уны әҙерәк сәйгә тығып торҙоҡ та шунан, алып, ҡултыҡ аҫтарыбыҙға ҡыҫтырҙыҡ һәм, бер ни булмағандай, вайымһыҙ түҫтә түшәмгә ҡарап яттыҡ. Тиҙҙән сестра, инеп, минән градусникты алды. Ул 38,3-тө күрһәтә ине. Сестра, аптырап, күҙҙәрен таҫырайтты.

— Һуң кисә генә температурағыҙ арыу ине бит әле. Бөгөн уға ни булған?

— Белмәйем. Бөгөн төнө буйы башым бик нык ауыртты, — тип ярҙым да һалдым мин, күҙемде лә йоммай.

— Докторға әйтергә кәрәк, — тине сестра.

Минең күршеләрҙең температуралары ла шаҡтай күтәренке булып сыҡты. Ҡайһы берҙәренеке хатта 40-ҡа еткән!

Сестра, аптырап, бот сапты.

— Ҡарап тормаҡҡа берегеҙҙең дә төҫөгөҙ үҙгәрмәгән. Ә температурағыҙ юғары. Ғәжәп!

Ул палатанан сығып китеү менән, беҙ барыбыҙ ҙа мендәрҙәребеҙгә ҡапланып көлөшөргә тотондоҡ.

Был мутлыҡҡа өйрәткән һалдат маҡтанып та алды:

— Молодцы! Шәп эшләнегеҙ. Мин бында саҡта, хур булмаҫһығыҙ!

Беҙҙең был тантана оҙаҡҡа һуҙылманы: сәйебеҙҙе эсеп бөтөрөргә лә өлгөрмәнек, теге көндө беҙҙе лазаретка ҡабул иткән врач, сестрабыҙҙы эйәртеп, килеп инде. Ул башта ауырыуҙарға алмаш-тилмәш күҙ йүгертеп сыҡты. Бер килке тәҙрәләргә, түшәмгә ҡарап торҙо, маңлайын йыйырғылап «һм-һм!» тине. Беҙ, ауырыу кешеләр төҫө алып, шымтайып ятабыҙ, ҡайһы берҙәребеҙ хатта еңелсә генә ыңғырашып та ҡуя. Врач уҫал ғына итеп сестраға тексәйҙе. Тегеһе, ғәйепле кеше һымаҡ, түбән ҡараны.

— Нилектән булды был? — тип аптырай врач. — Әллә, төнө буйы форточкаларҙы асыҡ тотоп, һалҡын алдырттыңмы? Әллә ҡайнамаған һыу эсерҙеңме? Һис башҡа һыйырлыҡ хәл түгел. Барыһының да температураһы бер юлы күтәрелһенсе әле!.. Әллә аҙыҡ насар сифатлы булдымы икән?

Температураларыбыҙҙы үҙенең күҙ алдында ҡабат үлсәргә ҡушмаһа ярар ине тип, тын алырға ла ҡурҡып ятабыҙ. Бәхетебеҙгә ҡаршы, был аҡыл уның башына килмәне. Врач сығырға бороолдо һәм шул ыңғай әйтеп китте:

— Күрәһең, былар ҙың барыһын да еңел аҙыҡҡа күсерергә кәрәк булыр.

Сығып киткәндәрҙең аяҡ тауыштары алыҫлашҡас та, ауырыуҙар бер-бер артлы урындарынан ҡалҡына, бер-береһенә һүҙһеҙ генә ымлашып, шырҡ-шырҡ көлөшә башланылар. Бер нисә етеҙерәге ишек төбөнә барып та еткән инде, ишекте ҡыҫып ҡына, врач менән сестра бүлмәләренә инеп киттеме икән тип, күҙ һалалар, хатта тегеләрҙең арттарынан телдәрен сығарып күрһәтәләр. Бер нисә минут үтеүгә инде, палатала ҡәҙимге йәнлелек хөкөм һөрә ине. Еңеүсе ҡиәфәте менән урындарынан һикерешеп торалар, ҡысҡырып-ҡысҡырып һөйләшәләр, көлөшәләр, тыпырлашалар. Әммә был байрамыбыҙ оҙон ғүмерле булманы. Төшкө аш ваҡытында шатлығыбыҙ ҡапыл һүрелде. Байтаҡ ял итеп, һауығып килгән организмыбыҙ ныҡ ашау талап итә ине, беребеҙ ҙә аппетит юҡлыҡҡа зарланмай. Ә беҙгә был юлы берәр тәрилкә шыйыҡ ҡына һурпа ла әҙ генә аҡ сохари килтерҙеләр.

— Ниңә былай?

— Ни эшләп ашауҙы насарлаттығыҙ? — тип һуҡранышырға тотондолар.

Тауышҡа сестра йүгереп килеп етте.

— Доктор шулай ҡушты. Ҍәр ҡайһығыҙҙың температураһы юғары. Берегеҙгә лә итле аш ашарға ярамай.

Быны өҫтәүенә, ашауҙан һуң берәр аспирин порошогы эсергә ҡуштылар.

Ауырыуҙар, төп башына ултырғандарын тойоп, бер-береһенә ҡараштылар.

— Бына һиңә юғары температура!

Бирелгән аштар елп итеп ҡалды, кесе телгә лә йоҡманы, аппетит шундай күтәрелеп китте, баяғынан да нығыраҡ асыҡтырҙы. Әүәлге ашауҙар иҫкә төшөп, ауыҙҙан һыуҙар килә. Бер һалдат ҡысҡырып хыял итергә тотондо:

— Их, хәҙер алдыма ике ҡаҙаҡ һимеҙ һарыҡ ите менән боҫорап торған картуф килтереп ҡуйһындар ине! Ну һуғыр ҙа инем! Шунан, тын алмай, бер сүмес кеүәҫ һемерәһе лә ятып йоҡлайһы ине!..

Уның хыялдары беҙҙең буш ҡорһаҡтарҙы, үкерер дәрәжәгә еткереп, ҡотортоп ебәрә. Берәү, түҙмәй, теге һалдатҡа екерә:

— Өнөңдө тыҡ йәһәтерәк! Юғиһә тамағыңа һөйәк ҡаҙалыр!

Ғәҙәттә төшкө аштан һуң йоҡлай торғайныҡ. Бөгөн йоҡо

алмай. Бәғзеләребеҙ, бөгөнгө ахмаҡ хәлгә ҡалыуыбыҙҙы иҫкә төшөрөп, һындарыбыҙ ҡатып көлә, икенселәр, ауыҙ эҫтәренән мығыр-мығыр килеп, юғары температура ысулдарын өйрәткән

әлеге һалдаттарҙы һүгәләр. «Юғары температура оҫталары» үҙҙәре, бер-береһенә күҙ ҡыҫышып, аҫтыртын ғына көләләр.

Киске ашҡа әҙерәк эремсек, берәр стакан ҡайнар һөт һәм бәләкәй-бәләкәй генә киҫәк икмәк тараттылар. Был юлы кешеләр йыуашайып ҡалғандай күренәләр ине инде, һуҡраныуҙар ҙа ишетелмәй. Алдарына килгәндең ләззәтен мөмкин тиклем оҙаҡҡараҡ һуҙырға тырышып, өнһөҙ-тынһыҙ, яй ғына ашай бирәләр.

Аштан һуң тағы бер көтөлмәгән күңелһеҙлек булып алды — беҙгә тәмәке бирмәҫкә бойороҡ алынды. Сөнки, йәнәһе, беҙ барыбыҙ ҙа ҡаты ауырыуҙар, тартыу беҙгә бик зарарлы.

Быға ҡаршы инде берҙәм баш күтәрҙек.

— Был ни хәл?! Беҙҙе астан да, тәмәкегә лә һыуһатып тамам үлтермәксе булалармы ни былар?!

— Врачтың бойороғо шундай, — тип ҡыҫҡа ғына әйтте сестра.

Палаталағыларҙың янсыҡ төптәрендә ҡалғанды шунда уҡ ҡаҡҡылап тартып бөттөк. Катып алырға ла сығармай, тотамлап торалар.

Бер нисә көн буйы шулай ыҙалап, тамам хәлдән тайҙырҙылар, асыу, ярһыуҙың тамам сигенә сығарҙылар тигәндә, бер көн иртән тағы ла температураларҙы үлсәмәксе булдылар. Был юлы инде градусниктарҙы ҡайҙа ул сәйгә маныу, буҫтау одеялға ышҡыу!

Барыбыҙҙы ла ҡарап йөрөп сыҡҡас, күңеле бик ныҡ күтәрелеп киткән сестра:

— Һәммәгеҙҙең дә температурағыҙ һәйбәтләнгән! — тип ҙур ҡәнәғәтлек менән белдерҙе.

Уның теленән ошо һүҙҙәр ысҡыныу булды, тирә-яҡтан, ҡысҡырырға ла тотондолар:

— Ашауҙы элеккесә итегеҙ инде хәҙер!

— Ҡоро һыуығыҙ теңкәгә тейҙе!

— Тартырға килтерһендәр!

— Доктор ҡушһа, барыһы ла булыр, — тип сығып китте сестра.

Беҙгә йән ингәндәй булды. Бөгөн һимеҙ һурпа һәм ит ашаясағыбыҙға өмөт бар ине. Асығыуыбыҙ үҙен тағы ла нығыраҡ һиҙҙертте. Төшкө аш ваҡытын еткерә алмай, күҙҙәребеҙ тондо. Берәү ҙә урынында тик ултырып сыҙаша алмай. Әле беребеҙ, әле икенсебеҙ кухня тирәһенә барып, унан килгән тәмле еҫтәрҙе еҫкәштереп әйләнә.

Көтөп алған ваҡыт етте, палаталар буйлап төшкөлөктө таратып йөрөй башланылар. Ахыр сиктә, беҙгә лә сират етте. Быныһы тағы нимә? Ҡараһаҡ, йәнә кисәгесә шыйыҡ һурпа менән әҙ генә сохари!

— Ни эшләүегеҙ был? Мыҫҡыл итәһегеҙме әллә?! — тип ауырыуҙар аш килтергән ҡатын өҫтөнә ябырылдылар.

Тегеһе, ҡото осоп, артҡа сигенде:

— Минең ни ғәйебем бар? Нимә биргәндәр — шуны килтерҙем.

Тауышҡа сестра йүгереп килеп етте һәм былай тип аңлатып бирҙе:

— Докторҙың бойороғо шундай. Ул бөгөн дә һеҙгә еңел аш бирергә ҡушты. Уның бойороғон беҙ боҙа алмайбыҙ.

Был яуап ҡына беҙҙе тынысландыра алманы, тағы ла нығыраҡ шаулаша башланыҡ. Әлбиттә, бының менән бер нәмәгә лә ирешә алманыҡ. Үҙебеҙ бешергән бутҡа, бына инде үҙебеҙгә һоғонорға тура килә. Беҙ алдыбыҙға килгәнде өндәшмәй генә ашарға тотондоҡ...

Өҫтәүенә, ашағандан һуң ятып ял итеп торған арала беҙҙе теге йәмшек танаулы һалдат ирештерергә тотондо. Баҡтиһәң, ул, ниндәйҙер юлын табып, кухняға үтеп ингән дә поварҙар менән танышып алған. Тегеләр уны саманан тыш һыйлағандар. Ул палата буйлап ҡорһағын кәпәйтеп йөрөй һәм беҙҙе үртәй:

— Кем туймай ҡалды, бына минең ҡорһағымды ялағыҙ. Мин әле генә өс тәрилкә һурпа менән ике өлөш ит ашап сыҡтым. Төкөрәм мин һеҙҙең эшкинмәгән докторығыҙға! Ә миңә ҡағылырға уйлаһағыҙ, барығыҙ өҫтөнән дә ялыу яҙам. Фәлән дә фәлән, тием, уларҙың температураһы һаман да юғары, тием, улар, бары туйғансы ашар әсән генә, алдашып, температураларын кәметеп күрһәтәләр, тием. Ул бит барыбер, үҙе килеп, һеҙҙең тән ҡыҙыулығығыҙҙы үлсәп йөрөмәйәсәк, ә минең һүҙемә ышанасаҡ.

Уның шуҡ һүҙҙәренә берәү ҙә ҡушылманы, көлөүсе лә булманы. Барыһы ла одеялдарын баштарына тартып бөркәнгәндәр ҙә тегенең лығырлауын ишетмәмешкә һалышалар.

Әммә йәмшек танауҙың теле һис тик тормай, ул һаман мыҫҡыллауын дауам итә. Ас кешенең асыуы яман, ти. Ҡикереп тороп, тегене һуғып йығырға ҡулдар ҡысый. Был теләк миндә генә булмаған икән. «Ҡайнар сәйгә градусник маныу оҫтаһы» ҡырлас танау, йәмшек танау үҙ эргәһенә килеп, тегенең ҡолаҡ төбөндә генә безелдәгәнен һағалап ятҡан икән — ҡорһағына ҡуш йоҙроҡлап төртөп ебәрҙе. Йәмшек танау ыһ итте лә, быуынһыҙланып, иҙәнгә сүгеп ултырҙы. Яҡындараҡ ятҡандар шунда уҡ һикерешеп торҙолар. Берәүҙәре эсен тотоп иҙәндә сүгәләп ултырған йәмшек танауҙы күтәреп аяғына баҫтырҙы, икенселәре, әтәсләнешеп китмәһендәр тип, тегеләрҙең араһына барып баҫыу сараһын күрҙе. Тауыш ҡуптарыу үҙебеҙ өсөн бик ҡурҡыныс икәнде һәр кем белә ине. Сөнки «еңел аштың» был лазаретта, дауалау сараһы ғына түгел, тәртип һаҡлау ҡоралы ла булып торғанын төшөнөп өлгөргәйнек инде. Тартай теленән таба, ти, теге йәмшек танауға ап-аруҡ ҡына эләккән икән. Бер һүҙ өндәшмәй, урынына барып ятты ла, одеялын башынан бөркәнеп, кискә тиклем әллә иланы, әллә еңелсә генә ыңғырашты. Бәлки, икеһе лә аралаш булғандыр.

Айырым бер палатаға ауыр яралылар урынлаштырылғайны. Бер тапҡыр шул палата янынан үтеп барғанда, ҡайһылыр береһенең, татарсалап:

— Эй Хоҙайым, бер гонаһһыҙ башҡайыма ниңә был тиклем яфалар һалдың инде?! — тип иңрәгәнен ишеттем. Минең ҡолағым ҡарп итеп ҡалды. Тиҙерәк уны күргем, хәлен уртаҡлашҡым килде. Мин палатаға индем дә:

— Бында кем мосолман? — тип һораным.

Миңә күҙе тапҡырынан уратып, башы ҡалын итеп марля менән уралган берәүҙе күрһәттеләр һәм:

— Ҡысҡырыбыраҡ өндәш. Ул контужен, насар ишетә, — тип киҫәттеләр.

Повязка аҫтынан был яралының бары ауыҙы менән ҡара һаҡал баҫҡан эйәге генә күренә.

— Хәлең нисек? Ҡайһы ерҙән яраландың? — тип ҡысҡырып һораным мин.

Яралы минең һүҙҙәремде аңланы булһа кәрәк, башын бора төштө, ҡапыл хәрәкәт менән ике ҡулымды ла һәрмәп тотоп алды һәм тулҡынланған хырылдауыҡ тауыш менән һөйләп китте:

— Аллаға шөкөр, бында мосолмандар ҙа бар икән әле! Мин бит хәҙер тома һуҡыр ҡалдым. Бер пуля ике күҙемдән дә яҙҙырҙы. Өҫтәүенә, контужен булдым, һаңғыраулandым. Кисәнән бирле, Аллаға шөкөр, әҙерәк ҡолағым асылғандай итә башланы. Хәлем ауыр, туғанҡай. Хатта ҡош телендәй хат та яҙа алмайым бит хәҙер. Әлдә һин килеп сыҡтың әле. Грамотныйһыңмы, туғанҡайым?

— Әҙерәк һуҡалайым.

—- Бик һәйбәт! Хоҙай ғүмереңде бирһен. Миңә бәләкәй генә хат яҙып бир инде. Ҡайҙа ятҡанымды белһәләр, бәлки, ҡатыныммы, туғандарымдың берәйһеме килеп, хәлемде белеп китер. Мин инде уларҙы ҡабат күрә алмам, исмаһам, тауыштарын ишеткем килә...

— Ярар, ағай кеше, йәһәт кенә ҡағыҙ, ҡәләм алып киләйем дә...

— Бик-бик рәхмәт, туғанҡайым! Ике донъяның рәхәтен күр!

Мин палатама йүгерҙем. Унда иптәштәрем магазиндан
ҡыты-мыты аҙыҡ алырға ебәрергә кемдән нисә тин сыға, шуны бергә туплап яталар икән. Үҙҙәре шарҡылдап көләләр. Йәмшек танау ҙа, ҡыҙарған күҙҙәрен ышҡый-ышҡый, көлөргә тырыша. Әле генә шул билдәле булған: теге меҫкен, поварҙар менән танышып алып, өс тәрилкә һурпа менән ике өлөш ит ашау түгел, кухняға үтеп инә лә алмаған икән. Темеҫкенеп еҫкәнеп йөрөгән еренән дежурныйҙар төрткөләп ебәргән булғандар; бында ҡайтып, теле тик тормаған өсөн, иптәштәренән дә өҫтәү алды. Палаталағылар уны ҡыҙғаналар, хәҙер ашарға алып ҡайтырҙар, тип йыуаталар. Ғәҙәт булһа ла, һуғыш

ғәрәсәтен үтеп, яраланып сығырға өлгөрһә лә, мыйыҡ та үҫмәгән бала ғына шул әле ул.

Мин һуҡыр һалдат янына әйләнеп килдем дә, ҡағыҙҙы тумбочкаға һалып, яҙырға әҙерләндем.

— Йә, ағай кеше, әйтеп тор, яҙа башлайым.

Яралы кеше ярһығаныраҡ тауыш менән әйтте:

— Нимәһен әйтеп торорға инде. Һәр береһенә сәләм ҡуйырһың да, хәлемде күреп тораһың бит, үҙең белгәнсә, теҙеп, килештереп яҙ. Адресын ҡуй, мин йүнәлә биргәс, берәйһе шуның менән юллап килеп алыр әле.

— Кемгә яҙырға?

— Ҡатыным Шәмсиә исемле. Шунан ун йәшлек улым менән Ғәйшә исемле һеңлем бар. Бына шуларға сәләм ҡуй инде. Э үҙем — Фәтхулла... Басиров. Юҡ, юҡ, хәлем хаҡында үҙем әйтеп тора алмайым. Телем әйләнмәй... Үҙең белеп яҙ. Тик ҡоттарын алырлыҡ уҡ булмаһын.

Мин, башҡа бер нәмә лә һорашып тормаҫҡа тырышып, ҡыштыр-ҡыштыр яҙырға тотондом: «Шәмсиә ҡәҙерлем! Һиңә күптән-күп һағыныслы вә һарғайышлы сәләмдәремде күндереп ҡалам...» Абдулла менән Ғәйшәгә лә ҡайнар сәләмдән өлөш сығарғас, бик оҙаҡ уйланып ултырҙым да: «Йәнә шул да мәғлүм булһын...» тип башлап, яйлап-яйлап ҡына Фәтхулла ағайҙың хәлен бәйән иттем, мөмкинлектәре булған тәҡдирҙә килеп күреүҙәрен үтендем.

Яҙып бөткәс, хатты эйәһенә уҡып күрһәтергә иткәйнем дә, теге ике ҡулын бер юлы сәбәләнеп һелтәне.

— Ҡуй, ҡуй, туғанҡай, зинһар өсөн... ишеткем дә килмәй!

Мин, хатты һалып, конвертты йәбештерҙем дә адресын
һораным.

— Мәскәү, Уланский тыҡрығы, йорт 7-се, фатир 6-сы, — тине Басиров.

— Э һин үҙеңдең ҡайҙа ятҡаныңды беләһеңме? — тип аптырап һораным мин.

— Юҡ, белмәйем.

— Һуң беҙ бит Мәскәүҙең үҙендә ятабыҙ!

— Китсәле! Мин бит фронт тирәһендәге берәй ҡалалалыр тип уйлай инем. Шаяртмайһыңмы һин мине?

— Ни эшләп шаярып торайым, ти. Беҙ Мәскәүҙәбеҙ.

Басиров шатлығын артыҡ белгертмәне, аһ-уһ та килмәне,
бер аҙға шым ҡалып, уйланып ятты. Шунан һүрән генә тауыш менән әйтте:

— Яҙ адресты, туғанҡай. Әйҙә, хат барыбер бара торһон. Аҙаҡ күҙ күрер.

Мин адресты яҙҙым да хатты йәшниккә төшөрҙөм; шунан Басиров хаҡында сестраға инеп әйттем. Уның Мәскәү кешеһе икәнен ул да белмәгән икән. Иртәгә адресы буйынса кеше ебәрмәксе булды.

Басиров менән осрашыу миндә ауыр тәьҫир ҡалдырҙы. Мин, төнө буйы йоҡо төҫө күрмәй, уның фажиғәле яҙмышы хаҡында уйланым, ғаиләһе, яҡындары менән уның тәүге осрашыуы нисек булыр икән, тип күҙ алдыма баҫтырырға тырыштым. Шәмсиәһе, ирен фронтҡа оҙатҡанда, ул тома һуҡыр булып ҡайтыр тип башына ла килтермәгәндер. Сәсенә ҡарағанда, Басировтың күҙҙәре, моғайын, һоро булғандыр. Ә улар хәҙер мәңгегә юғалған. Иртәгә уның өйөнә хат та барып төшөр, лазареттан кеше лә барыр. Ҡайғы хәбәрен нисек ҡаршылар икән улар?

## УН ИКЕНСЕ БҮЛЕК

Мин ятҡан лазарет — берәүҙең хосуси лазареты булып сыҡты. Уны миллионер Чичкиндар үҙ аҡсаларына тоталар икән. Бында режим бик үк ҡаты түгел, уның урынына дауалау ҙа, ауырыуҙарҙы тәрбиәләү ҙә насар. Улар фельдшер менән сестралар ҡарамағында ғына торалар. Ә баш врач лазаретҡа аҙнаһына ике-өс ҡабат ҡына килә. Ҡаты яралыларға аҙнаһына бер мәртәбә икенсе лазареттарҙан врачтар саҡырталар.

Ашауҙы насар тип булмай, курорттағы һымаҡ тиһәң дә, һис арттырыу булмаҫ, тәмле лә, мул да. Фронттарҙа асҡа ҡаҡланып килгән, күп ҡандарын юғалтҡан кешеләргә, айырыуса һауығып бөткән тиерлек беҙҙең палата халҡына, был ярап ҡала.

Был лазаретҡа килеп ингәндән бирле мине врач ҡарағаны юҡ әле. Мин инде үҙемде тамам һауыҡҡан итеп тоям. Хатта мине күпме хафаларға һалған битемдэге таптар ҙа үҙҙәренәнүҙҙәре бөтөүгә баралар.

Көҙгөгә ҡараған һайын, мин Мария Павловнаны һағынып иҫкә алам. Уның йомшаҡ ҡулдарының битемә иркә генә итеп ҡағылыуҙары һаман әле сикәләремдә рәхәт итеп йылытып тора һымаҡ.

Бөгөн беҙҙең палаталағыларға йән инде: «еңел аш» язаһынан ҡотҡарып, беҙгә яҡшы аш килтерҙеләр. Ашап, билбау аҫтын нығытып алғас, әҙәмдең күңеле көрәйеп, күтәрелеп китте, көләшә-көләшә һөйләшә башланылар. Минең дә бөгөн кәйефем бик яҡшы. Коридорға сығып, көҙгөгә ҡараным. (Хәҙер инде уға ҡарарға ҡурҡмайым.) Эскә батҡан яңаҡтарыма ит ҡуна башлаған, битемә алһыулыҡ ҡайта төшкән, таптары беленмәй тиерлек инде. Быныһы мине айырыуса ҡыуандырҙы. Нисә әйтһәң дә, егет кеше бит әле мин. Ауылда ҡалған туғандарым, фронттағы иптәштәремде бигерәк нык һағына башланым. Бөгөн барыһына ла хат яҙмаҡсы булдым. Хәҙер минең уларға яҙырлыҡ шатлыҡ һүҙҙәрем бик күбәйҙе. Ул һүҙҙәрҙе йыр итеп йырлағыларым килә.

Мин ошо уйҙарым менән мәшғүл булғанда, урамдан орган тауышы ишетелә башланы. Шул тиклем моңло итеп уйнай ул, хас та минең бөгөнгө тойғоларымды белә лә, шуны музыкаға һалып, башҡаларға аңғартып бирә.

Ауырыуҙарҙың аяғына баҫырҙайҙары, яурындарына халаттарын һалып, тиҙерәк ишек алдына һибелделәр. Мин дә уларға эйәрҙем. Ишек алдында һуҡыр органсы тора ине, ул органы өҫтөнә бүркен ҡуйған да «Маруся» тигән көйҙө әйләндерә. Уның янында бәләкәс кенә, ҡаҡса ғына ҡатын тора; ул ҡарлығыңҡыраған тауыш менән теләкһеҙ генә йырлай, йырлағанда йөҙөнә бер тамсы ла хисләнеү билдәһе сыҡмай. Күңеленән түгел, ихтыярһыҙ көндән йырлағанын ул хатта йәшерергә лә тырышмай.

Маруся, ты Маруся,
Открой свои глаза...

Шулай ҙа уларҙы уратып алған ауырыуҙар ҡатынды йотлоғоп тыңланылар һәм бөтәһе лә тиерлек бер юлы кеҫәләрендә соҡсонорға керештеләр, унар-ун бишәр тинлек маркалар табып, органсының кәпәсенә һалдылар. Күптән музыка ишеткән юҡ ине. Аулаҡ утарға оҡшаған тын лазарет янына органсының килеп сығыуы көлләбөҙ өсөн дә байрам һымаҡ булды. Аҙаҡ килеп, органсының кәпәсендә аҡсалар өйөлөп китте, улар араһында хатта иллешәр тинлек ике марка ла бар ине. Уны оҙаҡ-оҙаҡ ебәрмәй тоттолар; әле бер көйҙө, әле икенсене уйнарға ҡуштылар. Бөтә донъямды онотоп, йотлоғоп музыка тыңлап торғанымда, сестра сығып, еңемдән тартты. Ул миңә бер нисә тапҡыр өндәшкән булһа кәрәк инде.

— Басиров һине таптыра, — тине ул. Мин, үҙемдең уға ниңә кәрәк бул ыуым хаҡында ла уйлап тормай, вайымһыҙ ғына ҡиәфәт менән улар палатаһына йүнәлдем. Унда, Басировтың койкаһы янында, арыу ғына кейенгән ике ҡатын ултыра ине. Уларҙы күргәс, мин, баҙнатһыҙлана төшөп, ишек төбөндә туҡтап ҡалдым. Быларҙың береһе, һис шикһеҙ, Басировтың ҡатыны ине, икенсеһе, моғайын, һеңлеһелер. Улар янына барып, нисек итеп кенә үҙемде танытаһы икән?

Тегеләр мине ошо палаталағы бер ауырыуҙыр тип уйланылар, ахырыһы, миңә иғтибарһыҙ ғына һирпелеп ҡаранылар ҙа кире боролдолар. Мин халат сабыуҙарымды ҡаушырыңҡырай төштөм дә, сәсемде һыйпап, нимәлер булһа ла әйтергә кәрәк табып, тамаҡ ҡырып алдым, ләкин тамағымдан тауыш сыҡманы. Әгәр Басировтың күҙҙәре күргән, ҡолағы ишеткән булһа, ул мине саҡырып алып, үҙе үк таныштырыр ине. Был хәл булмаҫтай булғас, миңә үҙемдең батырлығыма ғына таянырға тура килде.

— Һаумыһығыҙ, ханым! — тип сәләм бирҙем мин, уларға яҡыная төшөп.

Улар хәҙер миңә үтә иғтибарлы ҡаранылар; мин, оялып, аяҡ осома ҡараным. Тапалып, йәмшәйеп бөткән йәмһеҙ сәпелдәк-ҡатамды күргәс, тағы ла нығыраҡ уңайһыҙландым. Ә уларҙың аяҡтарында — үтә күренмәле ебәк ойоҡтар, бик затлы, ҡупшы туфлиҙар.

— Ултырығыҙ, әфәнде. Беҙҙең Фәтхулла һеҙҙе саҡырғайны булһа кәрәк, — тине өлкәне.

Саҡырғандарын ишеткәс, мин уларға диҡҡәт менәнерәк күтәрелеп ҡараным. Уларҙың йөҙҙәрендә тәрән ҡайғы һыҙаттары ярылып ята ине. Күҙҙәренән йәштәре тәгәрәп төшөргә генә тора. Уларҙың хәлен аңлағас, ахыр сиктә минең телем асылды.

— Фәтхулла әфәндενең үтенесе буйынса кисә мин хатты һеҙгә яҙғайным булһа кәрәк, — тинем мин.

Күҙәмәгә Фәтхулланың һеңлеһе булырға тейешлеһе — йәшерәге шунда уҡ миңә рәхмәт уҡырға тотондо.

— Рәхмәт һеҙгә, бик ҙур рәхмәт, әфәнде! Һеҙҙең хатты ҡат-ҡат уҡып илай торғас, үҙебеҙ һуҡырайыша яҙҙыҡ инде. Беҙгә ҡайғы хәбәре килтерҙе ул хат, тик беҙ уның буйынса бына Фәтхуллабыҙҙы таптыҡ. Ғәфү итегеҙ инде, әфәнде, рәхмәтебеҙҙе әйтәйек тип, һеҙҙе беҙ саҡырып борсорға батырсылыҡ иттек. Һеҙ яҙмаһағыҙ, ағайымдың ҡайҙа икәнен ҡасан белер инек әле?

Был рәхмәттәрҙе мин һис кенә лә көтмәгәйнем. Шул тиклем рәхмәт алырлыҡ ниндәй генә яҡшылыҡ эшләнем һуң әле мин уларға? Ҡайтарыр яуап та тапманым. Хәлдәрен уртаҡлашыуымды һис юғында күҙ ҡарашым менән генә булһа ла белдерәйем тип, мин ҡыҙға күтәрелеп ҡараным. Таң ҡалдым! Хоҙайы-ым! Ни тиклем сибәрлек! Ҙур ҡара күҙҙәре күл ҡамышындай һөрмәле оҙон керпектәр менән ҡаймаланған; ҡарлуғас ҡанатындай ҡыйғас ҡара ҡаштары, төҙ танауы, һытылырға торған алһыу ирендәре уны көнсығыш хикәйәттәрендә һүрәтләнә торған гүзәл ҡыҙҙарға оҡшатҡан да ҡуйған. Фәтхулла ла уға оҡшаған булһа, бик сибәр кеше булғандыр ул. Күҙҙәре лә, моғайын, һеңлеһенеке кеүек матур булғандыр. Мин Фәтхулланың ҡатынына ла күҙ йүгертеп алдым. Шәмсиә, тигәйне бит әле. Уның сәстәре һарғылт, күҙҙәре зәңгәр, бите аҙыраҡ һипкелле. Маңлайы киң, йөҙөнөң башҡа һандарына бәрәбәр ҙур танаулы, ҡалын ғына иренле. Былар уның көслө ихтыярлы ҡатын икәнен әйтеп тора.

Улар менән минең һүҙем бәйләнеп китә алманы, шуға мин, Фәтхулланың ҡолағына эйелеп:

— Хәлең нисек, ағай? Бына туғандарың күрергә килгән икән... Мин бик шатмын... — тинем.

Фәтхулла миңә бороллдо ла, кисәгесә, ҡулдарымды һәрмәп тотоп алды.

— Бик ҙур рәхмәт, туғанҡайым! Әлдә һин тап булдың әле. Юғиһә ҡайҙа ятҡанымды әле һаман белмәгән булыр инем. Бы-

на... килгәндәр... Ә мин уларҙы күрмәйем... — Фәтхулланың һүҙе шунда өҙөлдө. Уның яурындары ҡалтыраша башланы. Таушһыҙ ғына илай ине шикелле ул. Мин ситкәрәк китергә уйлағайным да, Фәтхулла минең ҡулымды тағы ла нығыраҡ ҡыҫты. Шунда инде ҡатыны ла сыҙамдың сигенә сыҡты, үкһеп, иренең күкрәгенә ҡапланды. Фәтхулла, минең ҡулымды ысҡындырып, ҡатынын ҡосаҡланы, арҡаһынан һөйөп йыуатырға тотондо. Мин ситкәрәк киттем. Бик тә күңелгә ауыр ине. Фәтхулланың һеңлеһенең дә, бирешмәҫкә тырышыуы күренеп торһа ла, ахыр сиктә, түҙеме бөттө, һығылып төшөп, илай башланы, битен баҫып, палатанан сығып уҡ китте. Был ауыр күренешкә артабан да шаһит булып тороу мөмкин түгел ине. Мин палатанан яй ғына сыҡтым. Басировтың һеңлеһе, коридор ишегенең яңағына һөйәлеп, буҫығып-буҫығып илай ине. Уның янына барып, сәсенән һыйпап йыуатҡым килде, тик быңдай хәлдә ҡайҙан табаһың инде уның күңеленә йыуаныс бирерҙәй һүҙҙәрҙе? Аптырағас, мин, бөксәйеп алып, үҙебеҙҙең палатаға инеп киттем.

Иҫәнләшмәй ҙә сығып китеү уңайһыҙ булды. Тик ни хәл итеп, уларҙың үҙ ҡайғыһы — ҡайғы булғанда, хушлашып йөрөйһөң инде. Кире инеп, был ауыр күренешкә ҡабат шаһит булғы ла килмәй. Ниндәй генә яҡшылыҡ эшләй алам һуң мин уларға?

Мин үҙ койкама барып ауҙым. Басировтың фажиғәле яҙмышы, уның ғаиләһенең тәрән ҡайғыһы тураһындағы уйҙар, болотло көн шикелле, мине баҫҡандан-баҫа бара. Ҡасан йоҡлап киткәнмендер — хәтерләмәйем. Киске аш килтергәс, уяттылар. Тамағыма аш барырлыҡ түгел ине.

Иртәгеһенә иртән мин өйҙәгеләргә һәм фронттағы дуҫтарыма хат яҙырға ултырҙым. Ниндәйҙер ҙур дәрт, юғары илһам менән яҙҙым мин уларҙы. Был тиклем йылы һүҙҙәрҙе барыһына ла ҡайҙан табып бөтөрҙөм икән? Хаттарҙың һәр береһендә үҙемдең хәлдәрҙе бәйнә-бәйнә хәбәр итеү менән бергә һәр бер хатта Басировтың ауыр хәлен дә һөйләп бирҙем. Фронттағы иптәштәремдең һәр береһенә айырым-айырым яҙҙым. Улар, бәлки, хәҙер бергә лә түгелдәрҙер. Иҫәндәрме икән инде улар? Мин фронттан киткәндә, Байғужа, еңел яраланып, дивизионный лазаретта ята ине; бары Новиков, Индрил һәм Иртуғановтар ғына әлегә һау-сәләмәттәр ине. Ундағы хәлдәр мәғлүм инде. Бер минут элек кенә һин дә мин булып йөрөгән кеше икенсе минутта был донъяны ҡуйған булып сыға. Иҫәндәрме икән минең дуҫтарым? Уларҙы уйлай башлаһам, әллә ни эшләп Басиров тоҡтомалдан күҙ алдыма килә лә баҫа. Уның кеүек һуҡыр ғына булып ҡалмаһындар инде.

Иптәштәрем хаҡында уйлағанда, яңынан Новиковтың һуғыш хаҡындағы ҡырҡыу, нәфрәтле һүҙҙәрен, Индрилдың оҙон, аҡыллы, баҫалҡы фәлсәфәһен тыңлағы килеү теләге тәҡәт

бирмәй. Уларҙың инде яңы һүҙҙәре барҙыр, уларҙы яңы иптәштәренә һөйләй торғандарҙыр. Бәлки, инде улар мине һәләк булған тип иҫәпләйҙәрҙер, һирәк-һаяҡ ҡына, мәрхүм, тип иҫкә алаларҙыр. Э уларҙың һындары минең күҙ алдымда тере булып уйнап тора. Бәр береһе менән донъяның әсеһен-сөсөһөн күп татыған, фронт юлдарының үлемесле хәтәрлектәрен бергәләп баштан кисергән йән дуҫтарымды, айырылышҡанға ваҡыт күберәк үткән һайын, уларҙан алыҫлашҡан һайын, нығыраҡ һағына, йөрәгемә яҡыныраҡ күрә барам. Бергә саҡта күрә лә белмәгәнмен икән; уларҙың һәр береһенең яңынан-яңы күркәм сифаттарын торған һайын күберәк асам.

Ҡайһы берҙә Новиковтың ҡаштары емерелә, ул, телен йотҡандай, өнһөҙ ҡала торғайны. Ғәҙәттә, бындай мәлдәрҙә ул иренен мыҫҡыллы ҡыйшайтып, аралаш тешен шығырлатып, хәҙер кемгәлер осоп ҡунырҙай булып асыуланып, ҡырын ята торғайны, ә ҡулына алған берәй нәмәне был мәлдә өҙләкһеҙ рәүештә бармаҡтары менән ыуалай ҙа ыуалай. Бындай саҡтарында уға һүҙ ҡушып тороу ҙа файҙаһыҙ. Уның был ҡылығының дауыл алдынан була торған тынлыҡ икәнен төшөнөп өлгөргәйнек инде. Ошондай ваҡытында уға өндәшеп бимазаламаһаң, дауыл тиҙерәк ҡуба. Үҙен борсоған уйҙар әсенә генә һыйышып ҡала алмай, ташҡын булып бәреп тышҡа урғыла. Ул ҡулында әүәләгән нәмәһен һелтәнеп атып бәрә, тирәяҡтағыларҙы тертләтерлек итеп, ҡапыл урынынан һикереп тора, шунан инде әсендә ҡайнағандар тышҡа атлыға башлай:

— Һуң әҙерәк мейеләрҙе ҡыбырлатып, ошо ябай ғына хәҡиҡәтте төшөнөргә ваҡыт бит инде! Кем өсөн түгәбеҙ беҙ был ҡан даръяларын? Аңра һарыҡтар өйөрө беҙ, вәт! Их, бөтөн донъя ишетерлек итеп ҡысҡырыр әмәлен табаһы ине. Һуғымға килтерелгән хайуанмы ни беҙ? Тик шуға оҡшап торабыҙ инде... Үҙ ҡәҙеребеҙҙе үҙебеҙ белеп, тауыш күтәрмәгәс...

Бына шулай ҡапыл ғына ул ялҡынлы үткер һүҙҙәр һибергә тотона, улар, мейегә үтеп инеп, көйҙөргөс осҡондар ҡабыҙалар, тәрәнгә йәшеренеп йоҡомһорап ятҡан фекерҙәрҙе уяталар, терелтәләр. Кемдеңдер алҡымынан матҡып алып, һелкетке килеү теләге тыуа.

Бындай мәлдәрҙә Индрил, ниңәлер, һул ҡулының бармаҡтарын тырпайтып, сәсен өҙләкһеҙ артҡа тарарға тотона. Был ваҡытта уның киң тигеҙ маңлайы тағы ла киңерәк булып күренә, ә ҡара күҙҙәре тағы ла үткерерәк ҡарашлыға әйләнә. Уның күңелен көслө тойғолар биләп алғанда, йөҙөндә айырыуса рухланыу билдәләре балҡып яҡтырып китә. Ул, бер нөктәгә төбәлеп, һүҙен башлап алып китә:

— Минеңсә, донъя һуғыштан һуң да был хәлендә ҡала алмаҫ, ҡырҡа үҙгәрер. Ни әйтһәң дә, кешенең аҡылы тик тормай, һаман эшләүендә, яҡшы тормош әмәлдәрен эҙләүендә бит. Ҡасандыр бер Стенька Разин да, Пугачев та иҙеүселәренә ҡар-

шы яу булып баш күтәргәндәр. Ниндәй ваҡытта әле! Э 1905 йылда Петроградтың аҫтын-өҫкә килтерҙеләр. Питер эшселәренә был юлы бөтә һалдат, бөтә ил ҡушылһа, улай ғына булмаҫ әле...

Бик оҙаҡ һөйләй ул был хаҡта, һөйләгән һайын рухлана бара.

Бөгөн килеп дуҫтарымдың һөйләгән һүҙҙәре асыҡ булып иҫкә төшә, һәм уларҙың тауыштары, айырым-асыҡ булып ҡолаҡ төбөмдә яңғырап тора һымаҡ. Шулар менән рухланып, мин был хаҡта үҙемдең мөнәсәбәтемде иптәштәремә оҙон-оҙон итеп яҙҙым. Тик, белмәйем, цензура үткәрерме икән? Быны, уларҙан яуап хаты килмәйенсә, белеп булмай.

Мин күберәк ваҡытымды Басиров янында үткәрәм. Хәҙер инде ул аҡрынлап ҡына урынынан ҡуҙғала һәм, минең яурыныма таянып, ары-бире йөрөштөрә ала башланы. Күҙе ҡабат күреүҙән өмөт өҙөлгән икән инде, врачтар, һис юғында әүәлгесә яҡшы ишетһен өсөн, күп көс һалырға тотондолар. Уны ҡарарға йыш ҡына специалист-врачтар килеп тора. Уларҙы Басировтың ҡатыны үҙ иҫәбенә яллап ебәрә икән. Хәҙер инде Фәтхулла ап-аруҡ яҡшы ишетә һәм быға һөйөнөп бөтә алмай.

— Әлдә ҡолағым асылып килә әле. Уныһы ла ишетмәһә, бер нәмәгә яраҡһыҙ ит киҫәге булып ятыр инем шунда, — ти ул ҡат-ҡат. Мәскәүҙә яҡындары эргәһендә булыуына ла ул ҡыуанып бөтә алмай. — Улар янында булмаһам, күптән теге донъяла булыр инем, — тип ҡуя.

Кеше, ниндәй генә хәлдә булһа ла, йәшәргә тырмашып ята, бер нигә яраҡһыҙ булып ҡалғанда ла, яҡты донъянан һис туймай ул.

Мин бөгөн Басиров янында бик оҙаҡ ултырҙым. Миңә ул үҙенең үткән ғүмерен һөйләне:

— Мин үҙем Ҡазан губернаһының Төтөш әйәҙендә тыуғанмын. Миңә алты йәш саҡта атайым, ғаиләһен алып, эш эҙләргә сығып киткән. Шунан бирле минең тыуған еремдә бер генә мәртәбә лә булғаным юҡ. Ҡайһы ерҙә тыуғанымды паспортым буйынса ғына беләм. Атайым нефть промыслаларында ла эшләне, күмер ҙә соҡоно, һуңынан тире иләүсе һәнәренә өйрәнеп алды. Ул бик күп йылдар Мәскәүҙә, бер туған Ҡарамышевтарҙың фирмаһында эшләне. Шунда үлеп тә китте. Унан бына беҙ Ғәйшә менән икәү тороп ҡалдыҡ. Атайым иҫән саҡта, әҙерәк уҡып ҡалғайным; ул үлгәс инде, малай ғына көйөмсә, шул уҡ Ҡарамышевтарға эшкә ялландым. Башта тамаҡ хаҡына ғына эшләнем. Аҙағыраҡ айына биш һум аҡсалата ла бирә башланылар. Бер аҙҙан бүрек тегеү һәнәрен үҙләштерҙем. Ай-й, мин теккән ҡаракүл бүректәр бөтә Мәскәүҙә дан тота ине. Куғыш алдынан инде мин айына етмеш биш һумға тиклем эш хаҡы төшөрә башлағайным. Хәҙер ул һөйгән эшемдән ваз кисергә тура килер.

һөйләүенән шул урында өҙөлөп, ул, ҡаны ҡыҙған кешеләрсә, сикәләрен, башын ышҡырға, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә, күҙенең повязкаһын төҙөткеләргә тотондо. Уға ҡарап тороуы ҡыйын ине, йыуатыр һүҙҙәр ҙә юҡ. Басиров ауыр ғына көрһөндө лә былай тип өҫтәп ҡуйҙы:

— Улым бик йәш, шуныһы ҡыҙғаныс. Мин уны уҡытырмын, кеше итермен тип өмөтләнә инем. Незнай инде, ни эшләргә хәҙер? Уға ла, үҙем кеүек, сабый ғына көйө фабрикант тупһаһына барып, бүрек һалырға тура килмәһә ярай ҙа бит...

Басиров һөйләгәндә, мин бер ауыҙ һүҙ ҙә ҡыҫтырманым. Бары аҙаҡтан ғына әйтеп ҡуйҙым:

— Йәштәргә хәҙер мөмкинлек ҙурыраҡ булыр әле. Улар үҫкәнсе, һуғыш та бөтөр.

Басиров бер аҙға, башын артҡа ташлай биреп, өндәшмәй ултырҙы, шунан былай тип ҡуйҙы:

— Һин, Булат туғанҡай, миңә бик ҙур ярҙам күрһәтәһең, һин бында саҡта мин бынан йырылып сыға алһам, үҙеңде бер алҡынғансы һыйлап ебәрер инем.

Был вәғәҙә мине бик мауыҡтырҙы. Мин инде бер нисә мәртәбә уларҙың тормошон, Ғәйшә исемле сибәрҙең нисек йәшәгәнен күҙ алдыма килтерергә тырышып ҡарағайным. Минең улар ғаиләһендә булғым килеү теләге көсәйгәндән-көсәйә ине. Ғәйшә ағаһы янына килеп киткән саҡтарҙа, мин уға ҡарап-ҡарап, үҙем дә һиҙмәҫтән, уфтанғылап та ҡуям.

Миңә Басировтарҙың өйө бик күркәм итеп йыйыштырылған, бик яҡтылыр булып тойола; унда мине, моғайын, яҡты йөҙ менән ҡаршыларҙар, мин үҙемде сикһеҙ бәхетле итеп тойормон шикелле. Тик быға тиклем улар өйөндә булыу хыялымды тормошҡа ашырырға һылтау таба алмай ғына йөҙәй инем. Басировтың был һүҙе мине ҡанатландырып уҡ ебәрҙе.

Килеп тарыған ҡыуаныстандыр, ахыры, мин һүҙгә әүәҫләндем дә киттем, үҙемдең башымдан үткәндәрҙән Басировҡа ҡыҙыҡлы ваҡиғалар һөйләргә тотоноп алып киттем. Һөйләүгә мауығып, ҡайһы бер нәмәләрҙе арттырыбыраҡ та ебәргеләйем шикелле. Ундай урындарҙа әҙерәк туҡтап, Басировтың асыҡ ҡалған урындарынан йөҙ сырайының үҙгәрешен күҙәтәм. «Эй-й туғанҡай, әҙерәк фәстерәһең түгелме?» — тип, маҡтансыҡлыҡта ғәйепләп, мыҫҡыллап ултырмаймы икән? Уның сырайына ышанмау, һөйләгәндәремдең дөрөҫлөгөнә шикләнеп ҡарау ғәләмәттәре ҡалҡмағас, артабан дауам итәм. Күңелем килһә, апаруҡ һүҙ оҫтаһымын да икән үҙем! Башым нимәнән дер таҙарынып, асылып ҡалған һымаҡ, фекерҙәр таҫмалай ағылып сығып ҡына тора. Быңдай рухланып, илһамланып киткән саҡтарым һирәк була шул.

## УН ӨСӨНСӨ БҮЛЕК

Петроградҡа ҡарағанда, Мәскәү ҡояшлыраҡ ҡала, тиҙәр. Ысынлап та, мин лазареттан Басировтарға йүнәлгәндә, ҡышҡы көн булһа ла, салт аяҙ ҡояшлы ине. Бындай көндәрҙә Мәскәү йылмайып тора һымаҡ, тик сиркәүҙәрҙең алтын ялатылған манараларының ҡояш нурҙарында һалҡын емелдәүе был йылмайыуҙы һыуыта төшә һәм ошо матур ҡаланы беҙгә, ситтән килгән кешеләргә, ят яһай.

Ҡояш нурҙарына ҡойонған шаулы урамдарҙың береһенә сыҡҡас, үҙемде иректә һиҙеп, былай ҙа яҡшы кәйефем тағы ла нығыраҡ күтәрелеп китте. Кәр ерҙә бик күп тәҙрәле күп ҡатлы йорттар... Уларҙа кемдәр тора икән? Был йорттарҙа тороусыларҙың һуғыштың ни тиклем ҡот осҡос нәмә икәненән хәбәрҙәре бармы икән? Миллиондарҙың йәшәү менән үлем сигендә ниндәй яфалар күргәндәрен беләләрме икән? Миңә ҡалһа, был ғәләмәт ҙур өйҙәрҙең ҡалын стеналары аша һуғыш шаңдауы, миллиондарҙың аһ-зар ауаздары үтеп инә алмайҙарҙыр, шикелле. Унда, моғайын, тыныс ҡына, ғәмһеҙ генә тормош ағалыр, эстәре бошоуҙан кешеләр кирелеп, ауыҙҙарын асып иҫнәйҙәрҙер һымаҡ.

Ҡышҡы ҡояштың һалҡын нурҙарына ҡойоноп ултырған Мәскәү миңә әкиәттәге ҡала һымаҡ булып күренә. Бындағы урамдар, урам буйлап өҙлөкһөҙ ағылған кешеләр, өйҙөр, хатта айырым кирбесенә тиклем — һәммәһе лә миңә ят бауыр булып күренә. Бары һирәкләп осраштырған һалдаттар ғына, нисектер, туғандарым кеүек яҡын тойолалар. Улар ҙа Мәскәү хаҡында, тап мин уйлағанса уйланып, үҙҙәрен был ҡалала ситһенеп киләләрҙер, моғайын.

Мин Басировтарға китеп барам. Лазарет ҡапҡаһынан сыҡмаҫ борон улар ғаиләһе, туғандарым кеүек, яҡын булып тойола ине. Урамға сығып, башымдан Мәскәү тураһындағы әлеге уйҙар үткәс, үҙем алдан көткән осрашыу шатлығы яйлап һүрелә барғандай, уларға ҡарата яҡынлыҡ тойғоһо кәмей төшкәндәй булды. Улар өйөндә мин күҙ алдына килтергән гүзәллек, ниҙәлер, атлаған һайын, төҫһөҙләнә бара. Уларҙы күргем килеү теләге лә байтаҡ кәмене; мин бары унда трамвайға ултырғаным өсөн генә, трамвай алып китеп барғаны өсөн генә барамдыр төҫлё. Хәҙер инде, әллә кире боролаһымы икән, тип тә уйлаштыра башланым. Уларҙың йортона барып етә алмам кеүек, барып еткән сүрәттә лә, өйҙәренә инергә баҙнат итмәм кеүек. Басировтар ғаиләһе менән уларҙың үҙҙәренең өйөндә осрашыу хыялы быуға әйләнеп осоп бөтөп бара; уның урынын ниндәйҙер үкенес, хатта нимәгәлер асыу килеү тойғоһо биләй. Нимә өсөн, кемгә асыуланам мин, һис тә асыҡ итеп атап әйтеп бирә алмайым. Покровский ҡапҡаһы тәңгәлендә мин трамвайҙан төштөм һәм бер ғәмһеҙ, бер маҡсатһыҙ урам ҡыҙырып

йөрөгән кеше аҙымы менән тротуарға сыҡтым. Тәмәке тоҡандырҙым, үтеп-һүтеп йөрөүселәрҙе күҙәтеп, бер урында оҙаҡ баҫып торҙом, әш юҡтан эш булһын тип, вывескаларға күҙ йөрөттөм. Тора торғас, кешеләрҙән ояла башланым. Улар минең һис мәғәнәһеҙгә бер урында тапанып тороуымдан шикләнәләрҙер йәиһә көләләрҙер һымаҡ тойола. Шунан мин күңелемдән генә: «Ни булһа ла булыр», — тип ҡул һелтәнем дә, ҡулдарымды шинель кеҫәһенә тығып, Уланский тыҡрығына ҡарай эре-эре аҙымдар менән атланым. Шинелемде фронттан сыҡҡаны бирле беренсе мәртәбә кейергә биргәйнеләр. Уның бер кеҫәһендә бармағы иҙерәп тишелеп сыҡҡан һыңар һалдат бейәләйе, икенсеһенең төбөндә окопта тартылып бөтмәй ҡалған махорка бар ине. Кеҫәмдәге «байлыҡ» мине йәнә килеп ҡыйынһыратты, әйтерһең дә, инде мин Басировтарға барып ингәс, мотлаҡ уны кемдер ҡапшап ҡараясаҡ. Мин ҡулдарымды кеҫәмдән тиҙ генә тартып алдым да, һалдаттарса тыҡ-тыҡ баҫып, ары киттем.

Бына мин Басировтар квартираһының алдында торам, ләкин ишек шаҡырға ҡыйыулығым етмәй әле. Баҫҡыста үҙемдең артымда аяҡ тауыштары ишеткәс кенә, шаҡырға батырлығым етте, сөнки менеп килеүсе мине ошо ишек алдында асыҡ бер маҡсатһыҙ һерәйеп торған хәлдә тап итһә, әллә нәмә уйлауы бар ине. Ишек асылып китеп, унда Шәмсиә ханымды күргәс, мин, ни өсөндөр, артыма сигенә биреп ҡуйҙым һәм, инергә артыҡ теләге булмаған кешеләрсә, урынымда тора бирҙем.

— Рәхим итә күрегеҙ!

Ошолай ихлас күңел менән саҡырғанды ишеткәс кенә, урынымдан ҡуҙғалдым. Алғы яҡҡа ингәс тә әле, тирә-яғыма күҙ йүгертеп, бер аҙ баҫып торҙом. Өй эсе тып-тын ине. Шәмсиә ханым артымдан ишек элгесен эләктереп ҡуйғас, миңә сисенергә, түргә уҙырға ҡушты. Сәйҙәрҙә бик затлы пальтолар эленеп тора, улар янында минең шинелем бигерәк меҫкен күренә. Мин үҙ ихтыярымдан тыш кеҫәләремде сабыуым менән йәшерә биреп ҡуйҙым. Ҡаушауымдан мин быларҙы бик килешһеҙ хәрәкәттәр менән эшләнем, арҡамдан тир бәреп сыҡты, ҡыҙарынғанымды һиҙҙем. Миңә ҡала квартираларында бик һирәк булырға тура килә шул, һәм уларға ингән һайын ниндәйҙер уңайһыҙлыҡ һиҙәм, ятһынып, ҡаушап ҡалам.

— Үтегеҙ, үтегеҙ! — Шәмсиә ханым мине түргә уҙырға ҡыҫтаны.

Шуның артынса эске бүлмәләрҙең береһенән Фәтхулланың ҡарлығыңҡыраған тауышы ишетелде:

— Әйҙүк, әйҙүк, Булат. Беҙ һине күптән көтәбеҙ. — Уның тауышын ишеткәс кенә, миңә йән инеп ҡалды, һәм мин бәләкәй генә йыйнаҡ залға үттем. Унда йомшаҡ мебель ҡуйылған. Гөлдәр бик күп. Стеналарҙа яҡшы картиналар. Кеше ниндәй

матур нәмәләр солғанышында йәшәй, ә үҙе шуны күреү мөмкинлегенән мәхрүм тигән уй башымдан йүгереп уҙҙы.

Мин ҙур көҙгөлә үҙемдең һынымды күрҙем. Затлы нәмәләр тулы залда ул айырыуса меҫкен булып күренә.

Һул яҡта йоҡо бүлмәһе. Фәтхулла шунда карауатта ята. Уны лазареттан өйөнә ҡайтарыуҙарына өс кенә көн була әле. Мин, уның янына уҙып, иҫәнләштем. Фәтхулла, ҡалҡына биреп, миңә ике ҡулын да һондо, мин ҡулдарымды биргәс, ул уларҙы оҙаҡ ебәрмәй ҡыҫты. Килеүемә ихлас күңелдән һөйөнгәне күренеп тора. Был минең ҡыйыуһыҙлығымды ҡыуа башланы. Мин инде, Фәтхулла янына йәп ләп ултырып алып, уның менән һөйләшә башларға ғына йыйынғайным, бүлмәгә биттәре һалҡындан алма кеүек булып алһыуланған, уйнап торған ҡара күҙле теремек бер малай шаулап килеп инде. Ул шаҡмаҡлы пальто, ҡаракүл бүрек кейгән. Кейеме уға бик килешеп тора.

— Һаумы, ағай, — тип минең менән ҡыйыу ғына иҫәнләште ул, һалҡында өшөгән бәләкәс кенә йомшаҡ ҡулын биреп күреште, шунан атаһына ташланды. — Атай, хәҙер күҙең ауыртмаймы инде?

— Юҡ, ауыртмай, улым.

— Атай, ә докторҙар һиңә яңы күҙ яһап ҡуя алалармы?

— Ҡуя алалар... быяланан.

— Э быяла күҙ күрәме һуң?

— Улым, беҙ унда фонарҙар ҡуйырбыҙ.

Был һүҙҙәрҙе Фәтхулла шаян тон менән һөйләһә лә, уның ғазап кисергәне күренеп тора ине. Күрәһең, улын үҙенең йөрәген телгеләй торған һорауҙар биреүҙән туҡтатыр өсөндөр инде, Фәтхулла улын күкрәгенә ятҡырып, ҡосаҡлап һөйҙө лә сығып сисенергә ҡушты.

— Мин сисенеп тормайым, — тине малай. — Мин һалдат ағайҙы күрергә генә индем. Мин хәҙер Фуат менән уйнарға сығам. — Шунда уҡ сығып та китте.

Мин, тиҙерәк Ғәйшәне күреү теләге менән, минут һайын залға сыға торған ишеккә ҡайырылып ҡарайым. Ҡолаҡтарым, берәй ерҙән уның матур тауышы ишетелмәҫме икән тип, аулай. Ҡыҙыҡ, нимә тип һүҙ ҡушаһы икән уға?

Мин көткән Ғәйшә урынына алъяпҡыс быуған Шәмсиә ханым ишектә күренде, ул комодта соҡсонорға тотондо, эш араһында, үҙ-үҙенә әйткән төҫлө, ауыҙ эсенән генә:

— Э улар һаман да юҡ, — тип ҡуйҙы.

Минең ҡолағым ҡарп итеп ҡалды. Кемдәр икән ул «улар»? Э Ғәйшә булһа, ниңә «ул» ғына тимәй? Йәнәһе, мин үҙем гел Ғәйшәне уйлап, уны күрергә өмөтләнеп торғас, һүҙ мотлаҡ уның хаҡында ғына барырға тейеш инде. Моғайын, ул әхирәттәре менән бергә ҡайтырға тейештер. Шуға «улар» тигәндер.

Мин өҫ-башыма тағы ла иғтибарлыраҡ итеп күҙ йүгертеп сыҡтым. Итегемдең башы ҡырылған икән. Ниңә инде шунда юл буйында таҙарттырып алырга башыма килмәне икән? Ҡулдарым да уйға ҡалдырҙы, тырнағымды киҫергә лә онотҡанмын да баһа, улар araһына кер тулған. Мин уларҙы тиҙерәк шырпы менән таҙартырға тотондом. Фәтхулла ағай быны, әлбиттә, күрмәй инде.

— Окоптарҙа ятҡан саҡта ошолай матур, тыныс өйгә ҡайтылыр тип, башҡа ла килтереп булмай ине бит инде. Беҙгә лә яҙған икән ошондай тыныслыҡта әҙерәк рәхәтләнеп ултырырға, — тинем мин, оҙаҡҡараҡ һуҙылған тынлыҡты боҙор өсөн генә.

— Эй-йе-е, туғанҡайым... — тине лә Фәтхулла ағай, йәнә тын ҡалды. Күрәһең, ул үҙенең ауыр яҙмышҡа тарыуы һәм киләсәге хаҡында хәсрәтле уйға талғандыр. Мин дә уның кәйефенә биреләдем, әммә ишеккә күҙ һалыуымдан туҡтаманым.

Шунда Фәтхулла улының яңғырауыҡлы тауышы ишетелде:

— Атай, еҙнәмдәр килде!

—- Бик һәйбәт, бик һәйбәт! — тине Фәтхулла һәм, урынынан тороп, кейенә башланы. Мин залға сыҡтым. Тиҙҙән ишектә урта буйлы, әҙерәк һипкелле аҡшар[1] ир күренде: ул өр-яңы ҡаракүл бүрек, шундай уҡ яғалы ҡиммәтле тауарҙан тегелгән пальто кейгән. Уға ҡаракүл жакет кейгән Ғәйшә әйәргән.

Сисенгәс, ир кеше залға үтте, минең менән үтә ҡоро итеп иҫәнләшкәс, Фәтхулла бүлмәһенә инеп китте.

— Һин тороп мәшәҡәтләнмә, беҙ һинең эргәңдә үҙебеҙ ултырырбыҙ, — тине ул минең менән иҫәнләшкәндәге кеүек үк ҡоро һәм ҡырҡыу тауыш менән.

Үҙемә ҡарата һауалы мөнәсәбәт күрһәткәс, миндә лә тәкәбберлек тойғоһо уянды, үҙемде бында артыҡ һанап, тиҙерәк хушлашып, сығып киткем килде, ләкин шунда алдыма, ҡояштай балҡып, Ғәйшә килеп баҫты һәм, ҡулымды ныҡ итеп ҡыҫып, иҫ китмәле яғымлы итеп йылмайҙы:

— Һаумыһығыҙ! Беҙ һеҙҙе күреүебеҙгә ифрат шатбыҙ. Ағайым ҡайтҡаны бирле һеҙҙе һөйләп бөтөрә алмай.

Ғәйшә һылыу менән аяғүрә тороп иҫәнләшкәс, мин йомшаҡ диванға кире ултырҙым. Ул да миңә яҡын ғына килеп ултырҙы. Килеп ингәс тә, Ғәйшәнән өйгә тәмле хуш еҫ таралып киткәйне; ул бик матур ал күлдәк кейгән, муйынына йоҡа ғына аҡ ебәк шарф ураған. Беләк йыуанлыҡ ҡалын ҡара сәс толомон яурыны аша нәфис ҡалҡыу күкрәгенә һалған.

Уны бысратыуҙан ҡурҡҡан шикелле, мин ситкәрәк шылыштым.

Илгәҙәк Ғәйшә, миңә табан тартыла төшөп, бер ҡатлы ғына һорауҙар менән күмеп ташланы.

[1] ***Аҡшар*** — аҡһыл һары сәсле, аҡ сәсле.

— Һеҙ фронтта оҙаҡ булдығыҙмы?

— Ике йылдан ашыуыраҡ.

— Әлдә иҫән сыҡҡанһығыҙ әле.

— Күрәһең, Алла һаҡлағандыр.

— Унда, фронтта, нисек ашаталар?

— Эләккәндә ашайһың, эләкмәһә, аҫҡа әләңләп тик йөрөйһөң.

— Унда үлгәндәрҙе нисек күмәләр?

— Атыш туҡталғансы, улар ауған урындарында тәгәрәп ята бирәләр, шунан арлы-бирле йыйыштырып, ҙур итеп соҡор ҡаҙып, барын бергә шунда ауҙаралар.

— Ҡот осҡос!.. Үҙҙәренә фронт яҡынлашҡас, шул тирәләге ауыл кешеләре снарядтарҙан нисек йәшеренәләр?

— Улар өйҙәрен ташлайҙар ҙа тылға ҡасалар.

— Ә һеҙ немец һалдаттары менән нисек һөйләшәһегеҙ?

— Мылтыҡтан бер-беребеҙгә атышып...

Беҙ ошондай һүҙҙәрҙе һөйләшеп ултырған арала, Фәтхулла менән Ғәйшәнең ире залға сыҡтылар. Ҡунаҡ кеше миңә һирпелеп тә ҡараманы, бары Фәтхулла менән генә һөйләшеүендә булды.

Шунда Шәмсиә ханым, был яҡҡа сығып, беҙҙе өҫтәл тирәләй ултырышырға саҡырҙы. Мин бер ситтән генә ултырырға иткәйнем дә, Шәмсиә ханым, ай-вайыма ҡарамай, иң түрҙән, Фәтхулла янынан, урын күрһәтте, икенсе яғыма һис бер тартыныуһыҙ Ғәйшә килеп ултырҙы. Тағы ла урыным уның йәнәшәһенән тура килгәс, минең күкрәгем ҡыҫа башлаған төҫлө тойолдо, тауышым да, тәбиғилеген юғалтып, нисектер, ҡалтырауыҡ булып сыға башланы. Мин Ғәйшәгә боролоп ҡарамаҫҡа тырышып, йышыраҡ Фәтхулла менән һөйләштем. Тик Ғәйшә һис кенә лә мине тыныслыҡта ҡалдырырға теләмәне, бер ҡатлы ғына һорауҙарын яуҙырҙы ла яуҙырҙы. Мин урлап-урлап ҡына уның иренә күҙ йүгертеп алам. Үҙен ҡоро тотоуына ҡарап хөкөм йөрөткәндә, уның көнсөл кеше икәнлегенә иманым камил ине. Ә алсаҡ Ғәйшә үҙен бик иркен һиҙә.

Ғәйшәгә ҡарата булған бөтә хыяли уйҙарым юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Ҡасан килеп күрермен икән тип атлығып торған Басировтар өйөнөң ярты йәме кәмене лә ҡуйҙы. Мин был өйҙә үҙем өсөн һис ғәҙәти булмаған, әллә ниндәй зиннәтле һарайҙарҙа ғына була торған нәмәләр күрермен, уның эсе тулы бәхет тә шатлыҡ ҡыналыр, тип күҙ алдыма килтерә инем. Әлбиттә, алдан уйлаған матурлыҡтарҙың күбеһе бар был өйҙә, ләкин унан шатлыҡ ҡасҡан. Өйҙәгеләрҙең барыһының да өҫтөнә ауыр ҡайғы болото аҡтарылып төшкән; күрәһең, әле был өйҙә бик оҙаҡ ҡайнар йәштәр түгерҙәр, әсе яҙмыштарынан зарланырҙар, киләсәк тормоштарын нисек итеп ҡороу тураһында баш ватырҙар. Күренеүенсә, был — юнылған

таш кеүек һалҡын, һипкелле битле кеше менән Ғәйшә һылыу ошо ғаиләнән оҙаҡламай һыуынырҙар. Ул саҡта инде Фәтхулла менән Шәмсиә ханыма ауыр тормош йөгөн икәүләп кенә тартырға тороп ҡалыр.

Ошо уйҙар менән мәшғүл булып ултырғанымда, Ғәйшә миңә йәнә өндәште:

— Фәтхулла ағайым һеҙҙе, һуғыш хаҡында бәйеттәр сығарған икән, тигәйне. Шуларҙың берәйһен беҙгә әйтеп күрһәтегеҙ әле.

Ул минең иң ауыртҡан еремә ҡағылды. Нисек инде мин ошонда бәйеттәремде әйтеп ултырайым?

Тик шунда Фәтхулла үҙе лә, Ғәйшәнең һүҙенә ҡушылып, мине ҡыҫтарға тотондо.

— Ысынлап та, Булат туғанҡайым, беҙгә берәй бәйетеңде уҡып ишеттер әле. Бик матур итеп, килештереп сығарғанһың һин уларҙы.

Мин бөтөнләй юғалып ҡалдым. Мин бит ул бәйеттәремде былдай урындарҙа кешеләргә уҡып йөрөр өсөн түгел, хаттарыма яҙып ебәрер өсөн генә сығара инем. Бер мәл, Фәтхулла ағай менән лазаретта һөйләшеп ултырғанымда, телем сиселеп китеп, уға бәйеттәремде уҡып күрһәтәһе иткәйнем шул. Күрәһең, ул, өйөнә ҡайтҡас, шуларҙы һөйләп тә өлгөргән.

Мин, ҡыҙарынып, ыҡ-мыҡ иттем, арҡамдан тир бәреп сыҡты. Шунда һылтауын да таптым:

— Уларҙы алып килмәгәнмен бит әле. Яттан белмәйем. Икенсе бер ваҡытта килтереп уҡып китермен, — тинем мин, асылда бар бәйеттәремде яттан белһәм дә.

Бүтәнсәләй ҡыҫтап булашманылар, шулай ҙа Ғәйшә әйтеп ҡуйҙы:

— Беҙ уны, күсереп яҙып, миңә иҫтәлеккә ҡалдырырһығыҙ, ярармы?

— Ярар, күсерермен, — тинем мин әүәҫ кенә. Ғәйшә бер туҡтауһыҙ һөйләшә һәм күберәген гел миңә өндәшә. Уның ире бары Фәтхулла менән генә әңгәмә алып бара, унда ла уларҙың һүҙҙәре бары тауҙа мәсьәләләре, приказчиктарҙың хәле тирәһендә генә өйөрөлә. Тел төптәренә иғтибар итеп хөкөм йөрөткәндә, кейәү кеше приказчик булырға тейеш ине.

Ә Ғәйшәнең һорауҙары башлыса һуғыш, фронт мәсьәләләренә ҡайтып ҡала. Үҫеп буйға еткән, кейәүгә сыҡҡан кеше булһа ла, уның һорауҙарының барыһы ла тиерлек балаларса бер ҡатлы булып сыға, хатта шулай һөйләшеүе наҙлы, илгәҙәк йәш ҡатынға килешеп, уны биҙәй һымаҡ. Үҙе өҫтән-мөҫтән һөйләп, еңелсә генә бирелгән яуаптарға ла ҡәнәғәт була.

Өҫтәл тирәләй ултырған сағыбыҙҙа ул иренә бер генә тапҡыр ҙа күтәрелеп ҡараманы һәм уға өндәшмәне лә. Шулай уҡ ире лә уны бөтөнләй иғтибарһыҙ ҡалдырҙы.

Ни эшләптер, мәжлес тамам булғансы, миндә гел Ғәйшәгә ҡарата ҡыҙғаныу тойғоһо ғына булды. Ул миңә бик яңғыҙҙыр, эс серҙәрен һөйләшер, уртаҡлашыр кешеһе лә юҡтыр һымаҡ тойолдо. Был мөхиттә уға, моғайын, күп нәмәләр етмәйҙер, һәм ул ҡайҙалыр пырылдап осоп сығып китергә һәр ваҡыт талпынып йәшәйҙер. Хәрби аэропландар хаҡында һүҙ ҡуҙғалғас, ул хыялдарын ҡысҡырып уҡ әйтеп һалды:

— Их, ул аэропланға ултырып, алыҫка-алыҫка осоп китеп була торғандыр! Мин, ир кеше булһам, бында, Мәскәүҙә, түҙеп ултырмаҫ инем. Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән яҡтарға осор ҙа китер инем.

Был саҡта уның ҡиәфәте бөтөнләй үҙгәреп китте: алһыу бите бер аҙ ослая төшкәндәй булды, ҡаштары юғары сөйөлдө, нурлы күҙҙәрендә өр-яңы осҡондар йылтыраштты. Унан күҙҙе айырып алыу ҙа ҡыйын был ваҡытта. Тик... ярамай.

Аш янында күпме ултырғанбыҙҙыр, мин ваҡыт тойғоһон юғалттым. Шунда кейәү кеше кеҫәһенән ҙур көмөш сәғәтен сығарып ҡараны һәм Ғәйшәгә өндәште:

— Беҙгә ваҡыт, һөйөклөм.

Улар ҡуҙғалдылар. Миңә лә ваҡыт етте.

— Ҡатын кешенең ҡырылмаһа ҡырҡ эш инде ул. Беҙҙең менән күңел бөткәнсе һөйләшеп ултырып та булманы, — тип Шәмсиә үкенеп алды. Ысындан да, был арала Шәмсиә ханым бер өҙлөкһөҙ өҫтәл янынан аш яғына, унан өҫтәл янына йүгергеләп кенә торҙо шул. Табын тирәһенә һирәк йоҡто.

Китер алдынан Ғәйшәнең ире минең менән, күрешкәндәге кеүек үк, үтә ҡоро хушлашты, ә Ғәйшә, бик күп, бик йылы теләктәрен әйтә-әйтә, минең ҡулымды оҙаҡ ҡыҫып торҙо.

— Вәғәҙәгеҙҙе онота күрмәгеҙ. Миңә бәйеттәрегеҙҙе күсереп бирерһегеҙ, йәме? — тине ул иң ахырҙан.

Мин әүәҫ кенә баш ҡаҡтым.

Ул китте, өй эсе буп-буш булып ҡалды, шулай ҙа мин үҙемде ул арһыҙ иркенерәк хис иттем, тәмәке тоҡандырҙым.

Фәтхулла ағай менән Шәмсиә ханым мине ҡыҫтай-ҡыҫтай йәнә өҫтәл янына ултырттылар. Беҙ, һуғыш хәлдәрен һөйләшә-һөйләшә, тағы оҙаҡ-оҙаҡ сәй янында ултырҙыҡ. Ахыр сиктә, һүҙ Ғәйшә яғына ыңғайланы. Фәтхулла, ауыр ғына көрһөнөп:

— Һеңлем бик аҡыллы бала ине, тормоштары нисек кенә булып китер икән инде, незнай, — тине.

Мин урамға сыҡкас та әле, уның ошо һүҙҙәре ҡолаҡ төбөмдә сыңлап барҙы.

Һәйбәт ҡатын шул Ғәйшә!

## УН ДҮРТЕНСЕ БҮЛЕК

Тын лазареттан сыҡҡас та, мин шау-шыулы казармаға барып эләктем. Нисектер, ҡыйын булып китте. Бында таҙа йомшаҡ постелдәр ҙә, төрлө тәмле-татлы аштар ҙа юҡ. Һалам тултырылған ҡаты матрас йәйелгән нарҙарҙа йоҡлайһың, ун кешегә бер ҡалай кәстрүлгә аш һоҫоп килтерәләр. Бындай ҡапыл үҙгәрешкә тиҙ генә күнегеп китеп булмай, эс боша. Занятиеларға ике генә сәғәткә сығаралар, шулай ҙа сәғәт алтыла уҡ уяталар, бары төнгө ун берҙә генә ятҡыралар. Ярма өйрәһе, балыҡ киҫәге һәм бер ҡашыҡтан ғына ҡарабойҙай бутҡаһы бирәләр. Бында кешеләр ирекТәренән тамам мәхрүм — ҡайҙа ҡыуалаһалар, шунда бараһың; меңләп кешегә нимә әҙерләйҙәр, шуны ашайһың.

Башта мин казармаға күнегә алмай интектем. Буш ваҡытымда нарҙа түшәмгә ҡарап тик яттым. Тышҡа сығып йөрөгө лә, үҙемә сит һымаҡ күренгән ҡояшҡа ҡарағы ла килмәй. Мин бөтә донъяға, хатта ҡояшҡа ла асыулы инем. Уның нурҙары ла бында яғымлы түгел, ул беҙҙең казарма тәҙрәләренә ирекһеҙҙән генә төшәлер һымаҡ. Уның һалҡын нурҙары күңелде иркәләмәй, йөрәкте шатлыҡ тойғолары менән тултырмай. Ҡайҙандыр аңҡыған серек еҫе лә уның нурҙарынан сығалыр кеүек. Тирә-яғымдағы йәмһеҙлектәрҙе күрмәҫ өсөн, мин шинелем менән башымды бөркәйем, һалам тултырылған яҫтыҡҡа битем менән ҡапланам. Ул, эсендә сыҫҡан йөрөгән һымаҡ, шикле ҡыштырлай. Йоҡоға китә алһаң, йоҡоң да тыныс булмай. Уяулы-йоҡоло ятҡанда, әллә нәмәләр күреп, һаташып төн сығаһың. Йә ниндәйҙер шөкәтһеҙ нәмә һине баҫа башлай, йә аҫтыңдағы нарың ҡыйшайып китеп, төпһөҙ йәһәннәм упҡынына осаһың, йә үҙеңде ауыр йөк тейәлгән повозкалар өҙлөкһөҙ үтеп торған юл өҫтөндә ятҡан итеп күрәһең. Улар һине тапап, һытып үтергә өҫтөңә киләләр, һин тороп ҡасырға уйлайһың, ләкин ниндәйҙер ауырлыҡ һине ергә ҡыҫа, бер ағзаңды ла ҡуҙғата алмайһың. Ҡысҡырырға теләйһең — тик тауышың сыҡмай; ҡот осҡос мажаралар араһында тыбырсына торғас, шыбыр тир булып килеп уянаһың. Уянғас та әле, хәтәр тойғоларыңдан байтаҡ ваҡыт арына алмай, һиңкәҙәп ятаһың. Башың ауырта, ауыҙыңда әллә ниндәй алама тәм була. Туҡмап ташланған кеше кеүек, көллө тәнең һыҙлап килеп тораһың, шул хәлеңдән тиҙерәк арыныр өсөн, бак янына бараһың һәм бер көрөшкә һыуҙы шабырлатып эсеп ебәрәһең. Аҙаҡ ауыҙыңда тутыҡҡан тимерҙең насар тәме ҡала, ниндәйҙер әсе әйбер ҡабып, тиҙерәк ауыҙ тәмен кире ҡайтарғы килә. Ул теләгеңде ҡандырыр әмәл булмағас, сараһыҙҙан йыуан итеп махорка төрәһең дә ҡомһоҙланып һурырға тотонаһың. Алдыңдағы тәмәке төтөнө пәрҙәһе аша тирә-яҡтағы йәмһеҙ күренештәр үҙгәрә төшә, башың еңелсә әйләнә башлай, һәм бер нисә минутҡа ғына

күңелең яһалма рәүештә күтәрелеп тора. Нервыларың тынысланa төшә, башыңдағы уйҙар йәһәтерәк ҡымйыша башлай, төрлө хәтирәләр бер-береһен йылдам алыштырып тора. Фронттағы көндәр, унда ҡалған дуҫтар, өйҙәге яҡындарың бер-бер артлы яманһыулатып иҫкә төшә. Бер арала, үҙем дә абайламаҫтан, уйым менән Басировтар өйөнә лә барып кергәнмен булып сыға. Беренсе булып, әлбиттә, Ғәйшәнең гүзәлдәрҙән-гүзәл һыны алға килеп баҫа, уның матур көмөш тауышы ҡолаҡ төбөндә илаһи музыка һымаҡ яңғырап киткәндәй була. Ошондай татлы хәтирәләр өҫтөңә ябырылып, бер нисә минут самаһы ләззәтле онотолоу мәле кисереп торғас, ҡапыл ниндәйҙер бер тупаҫ тауыш һине һиҫкәндереп ысынбарлыҡҡа ҡайтара, йөрәк, әсетеп, сәнсеп ала, үҙеңде мыҫҡылланып, хурланып, сүплек соҡорона илтеп ташланған кеше итеп һиҙәһең...

Надеждин тигән бер һалдат менән яҡындан танышҡас ҡына, был һоро казарма тормошо әҙерәк йәнләнә, мәғәнәлегә әйләнә башлағандай итте, күңел төшөнкөлөгөм кәмеүгә китә башланы.

Казармаға килгәнемдең тәүге көнөнән үк Надеждин минең менән яҡындан аралашырға теләге барлығын һиҙҙерҙе. Минең башҡорт икәнемде белеп алғас, ул:

— Минең атайым да Урал заводтарының береһендә эшләгән. Мин дә шунда, Уралда, тыуғанмын, — тине. — Атайым мәрхүм һәр ваҡыт башҡорттарҙы яратып телгә ала торғайны. Улар, дуҫ булышып, ҡунаҡҡа йөрөшкәндәр. Уларҙың ҡымыҙҙарын, бишбармаҡ, ҡаҙыларының тәмлелеген һөйләп бөтөрө алмай торғайны. Башҡорттар бик яҡшы һыбай йөрөйҙәр, бик сая һуғышсылар, тип иҫкә ала ине.

Надеждин менән тәү күрешеп һөйләшкәс үк, миндә уға ҡарата яҡынлыҡ тойғоһо тыуҙы.

Бөгөн шулай бик насар кәйефле хәлдә ауыр уйҙарға талып торғанымда, ул минең эргәмә килде.

— Тыуған яҡтарыңды һағынаһың, ахыры? Һуғыш һине лә тамам туйҙырғандыр инде. Эйе, уны тиҙерәк бөтөрәһе ине, — тине ул миңә.

Надеждиндың был һүҙҙәре төшөнкө хәлемдән әҙерәк айнытып ебәрҙе, ләкин ҡапылда нимә әйтергә белмәй торҙом әле уға.

Минең ҡыйынһырап ҡалғанымды күреп, ахырыһы, ул шунда уҡ һүҙҙе икенсегә борорға тырышты:

— Һин бушаған һайын яҙаһың да яҙаһың, нимә яҙаһың ул? — тип һорай Һалды.

Былай тип һорау биргәндәрен мин яратмай инем. Ниңә кәрәк инде уға минең нимә яҙыуым? Ниңә юҡ менән ҡыҙыҡһына икән? Мин иҫтәлектәр, көндәлектәр яҙа барам, бәйет һымаҡ нәмәләр яҙғылайым, уларҙы нисек итеп һәр кемгә һөйләп йөрөйһөң? Ҡайһы бер наҙаны был арҙан көлөп ҡарай;

бәғзеһе һөйләгән һайын, йәнде көйҙөрөп, нығыраҡ төпсөнөргә тотона. Шуға күрә лә мин Надеждинға тура ғына яуап бирмәнем:

— Шунда юҡ-бар инде.

Надеждин артыҡ төпсөнөп, быуынға төшөп торманы, һәр беребеҙҙең теңкәһенә тейгән һуғыш һәм һалдат яҙмышы хаҡында һөйләүгә күсте:

— Мин бөгөн фронттағы бер иптәшемдән хат алдым. Унда бер нисә полк һөжүмгә барыуҙан баш тартты, тип яҙа. Көнбайыш фронтта бөтә дивизиялар ҙа баш күтәргән, офицерҙарын ҡырып сыҡҡандар. Бына хәҙер эштәр ҡайҙа бара. Башҡаса булыуы ла мөмкин түгел, сөнки фронттағы һалдаттар ярым астар, ярым яланғастар, ә тегендә, тылда, ғаиләләре аслыҡтан, яланғаслыҡтан яфа сигә. Хәҙер Мәскәүҙә лә икмәккә мохтажлыҡ көсәйгән. Эшсе ғаиләләре төн уртаһынан икмәккә сиратҡа баҫа. Май, ит тураһында инде ауыҙ асаһы ла юҡ.

Надеждин тынып ҡалды һәм, бер талай уйланып ултырғас, бышылдауға күсеп тигәндәй әйтте:

— Беҙҙең ғәскәрҙәр хәҙер гел сигенә. Беҙ һуғышта еңеләсәкбеҙ икәне көн кеүек асыҡ хәҙер, сөнки хөкүмәт башында эшкинмәгән бәндәләр ултыра, командование ла бер нигә яраҡһыҙ, буштан-бушҡа миллионлаған һалдатты ҡырҙыртты, ә бында һимеҙлектәренән сыҙаша алмаған жандармдар бер ғәйепһеҙ эшселәрҙе, ҡатын-ҡыҙҙарҙы аттыралар, төрмәләр лыҡа тултырылған. Бындай хәл шул көйөнсә өҙлөкһөҙ дауам итә алмаҫ. Халыҡ, бер килеп, ҡалҡыныр ҙа әйтер: «Был хөкүмәт ил менән идара итерлек түгел, сөнки ул беҙҙеке түгел, беҙ хәҙер үҙ хөкүмәтебеҙҙе һайлап ҡуябыҙ!» Хәҙер эш шуға бара.

Надеждиндың тәүге һүҙҙәре миңә аңлайышлы инде, былар — һәр бер һалдаттың һарыуын ҡайнатҡан әсе хәҡиҡәт, ә бына аҙаҡҡы һүҙҙәре минең өсөн бөтөнләй яңылар. Беҙ фронтта саҡта һуғышты туҡтатыу хаҡында йыш ҡына әңгәмәләшә инек, әммә берәү ҙә хөкүмәткә, батшаға тел тейҙерергә батырсылыҡ итмәй ине, ә бына Надеждин асыҡтан-асыҡ ярҙы ла һалды. Их, әле яныбыҙҙа Новиков менән Индрил булһа икән! Ул саҡта беҙҙең һүҙ бик тәрәнгә китер ине. Мин иһә үҙем Надеждинға бары:

— Дөрөҫ әйтәһең. Хәҙер инде был һәр бер һалдатҡа мәғлүм, — тип әйтә алдым.

Надеждин һиҙелерлек йәнләнеп китте, ҡулын яурыныма һалып, ҡыҙыбыраҡ һөйләп алып китте:

— Һүҙҙәр һөйләшеү — бер эш, ә бына шул һүҙҙәрҙе бойомға ашырыр өсөн беҙгә ойошорға, бергә тупланырға кәрәк, һуғышҡа һәм хөкүмәткә ҡаршы хәл иткес көрәшкә күтәрелергә кәрәк. Беҙ барыбыҙ ҙа бер төптән булып, дәррәү ҡупһаҡ, бер устай генералдар һәм офицерҙар ни ҡыра ала? Э бит хөкүмәт бары уларға ғына таяна...

Шул саҡта мин Надеждинға текләберәк ҡараным. Унының түңөрәгерәк йөҙө оҙонсалана төшкән, төпкә батҡан күҙҙәрендә осҡон тоҡанған һымаҡ булған. Былар барыһы ла унының йөҙөнә ғәйрәт һәм ҡыйыулыҡ билдәләре булып һыҙатланғайны. Унының был һуғышсан сәме миңә лә йоға башланы.

Мәскәү минең күҙ алдымда торған һайын әкиәттәге кеүек гүзәллеген юя бара. Бик күп тәҙрәле ҙур өйҙәрҙә тороусы ғаиләләр барыбер шул уҡ Басировтар һымаҡ бәхетһеҙ ғаиләләрҙер. Әгәр ҙә меңләгән һалдаттар: «Бөтһөн һуғыш!» — тип оран һалып, урамдарға сыҡһалар, был өйҙәрҙең эсендә ятҡан ҡулһыҙ, аяҡһыҙ, һуҡыр Басировтары ла үҙҙәренең ауазын был оранға ҡушыр ине.

Надеждин менән әңгәмәнән һуң мин үҙемде бөтөнләй икенсе төрлө хис итә башланым. Башымда бер өҙлөкһөҙ ул әйткән фекерҙәр ҡымйыша. Бына мин күҙ алдымда «Бөтһөн һуғыш!» тигән лозунгылар күтәргән эшселәр һәм һалдаттар колонналарын күрәм, улар араһында үҙем дә бар. Был уйҙар, бер минең генә түгел, бик күп, бик күп һалдаттарҙың ғәмен биләй. Кистәрен һуғыш хаҡындағы әңгәмәләр айырыуса көслө булып ҡабынып китә.

— Беҙҙе ҡабат фронтҡа илтеп тығырҙар ҙа йәнә һуғышырға бойорорҙар. Хәҙер ҡайһы ахмаҡ һөжүмгә, күрәләтә үлемгә барһын инде.

— Барыһын да ҡыйрата һуғып ташлап, өйҙәргә таралырға кәрәк.

Былдай фекерҙәр инде ғәҙәтигә әйләнеп киткән. Уларҙы, һис йәшермәйенсә, асыҡтан-асыҡ әйтәләр. Ғәҙәттә, Надеждин уларға һығымта яһай:

— Хәҙер барыһы ла шулай уйлай. Тик был ниәттәребеҙҙе беҙ, бер бөтөн булып тупланып, ҡырҡа көрәшкә ҡалҡһаҡ ҡына, бойомға ашыра аласаҡбыҙ. Әгәр ошо талаптарыбыҙ менән урамға сыҡһаҡ, беҙгә меңләгән эшселәр ҙә ҡушылыр, әгәр инде улар элегерәк сыҡһа, беҙгә ҡушылырға әҙер булырға кәрәк. Быының өсөн улар менән тығыҙ бәйләнешкә инергә, бер төптән булырға кәрәк. Бөтәбеҙ берҙәм күтәрелһәк, быының менән хөкүмәт иҫәпләшмәй булдыра алмаҫ.

Надеждин яһаған һығымталарға бер кем дә ҡаршы төшмәй, бары ла тынып, тәрән уйға тала. Был дәһшәтле тынлыҡ дауыл алдынан булған хәтәр тынлыҡҡа оҡшай.

## УН БИШЕНСЕ БҮЛЕК

Яңы 1917 йылды казармаларҙа ҡаршыланыҡ. Беҙҙе мунсаға, шунан кинематографҡа алып барҙылар, итле аш, майлы бутҡа, аҡ икмәк бирҙеләр. Яңы йыл бүләге итеп хат яҙырға конверт һәм ҡағыҙ тараттылар, папиростар бирҙеләр. Тик һал-

даттарҙы быныҡ менән генә алдап әүрәтә алмаҫһыҡ, улар яҡы кейем-һалым биреүҙе талап иттеләр, күптәренеҡ итектәре юҡ, тишелгән ботинкалар кейеп йөрөйҙәр, шинелдәре эшлектән сығып туҙған, хатта ҡайһы берҙәре ҡыш та гимнастерка, салбарҙан ғына йөрөй. Күптәр, шуға һылтанып, занятиеларға сыҡмайҙар, нарядтарҙан баш тарталар. Байрам һылтауы менән һалдаттар ошо хаҡта тауыш күтәрҙе.

Төшкө аштан һуҡ беҙгә казармалар алдына теҙелергә бойорҙолар. Өс меҡ тирәһе һалдат сафҡа баҫты. Сафтар тигеҙләнешкәс, ҡаршыбыҙға бер полковник, бер поручик һәм штатский кейемле бер кеше сыҡты. Полковниктың сәләменә һалдаттар бер теләкһеҙ, тырым-тыраҡай яуап бирҙеләр. Полковниктың йөҙө ҡомһарып уҡ китте.

— Туғандар! — тип беҙҙеҡ алда телмәр һөйләргә тотондо ул. — Беҙ — батыр һуғышсылар, һеҙ инде һуғыш яландарында булып, ватан өсөн ҡандарын түккән кешеләр. Тыуған илде яуыз дошмандан һаҡлауҙы дауам иттереү өсөн һеҙгә яҡынан фронтҡа китергә тура килә. Беҙ һуғышты тулы еҡеү менән тамам итергә тейешбеҙ. Беҙҙеҡ еҡәсәгебеҙгә шик юҡ, ул саҡта дошман беҙҙән солох үтенәсәк, шунан инде һуғыш та бөтәр. Беҙҙеҡ арала хыянатсылар бар, улар беҙҙеҡ еҡелеүебеҙҙе теләйҙәр, улар беҙҙеҡ ватаныбыҙҙың ҡыйралыуын теләйҙәр, аҡ батша хәҙрәттәренә тел тейҙерәләр. Улар — немец шпиондары. Әгәр араларығыҙҙа шундай кешеләр барлығы беленә икән, уларҙы тотоп бирегеҙ, был — һәр бер намыҫлы рус һуғышсыһының бурысы. Беҙгә Яҡы йылда барығыҙға ла бәхет теләйем! Данлыҡлы рус армияһының ҡоралына еҡеү теләйек! Ура!..

Һалдаттар полковниктың һүҙен насар ҡеүәтләнеләр — «ура» тауышы бик шыйыҡ, һүрән һәм тарҡау ишетелде.

Шул мәлдә ниндәйҙер бер буш йәшник табып килтерҙеләр. Уға штатский кейемдәге кеше менеп баҫты. Ул эшләпәһен систе лә ҡулдарын болғай-болғай һөйләргә тотондо. Уның тауышы, йәш әтәстеке кеүек, сыйылдаҡ һәм йәмһеҙ ине.

— Ҡәҙерле туғандар! Бөйөк Россияның тоғро улдары! — тип һүҙен күҡел болғатҡыс шәрбәтле итеп башланы ул. — Беҙҙеҡ ватаныбыҙ әле ауыр көндәр кисерә. Дошмандар беҙҙеҡ еребеҙгә ҡыйратыусы, үлемесле йәҙрәләрен һибеүҙәрен дауам итәләр. Дошмандар беҙҙеҡ ерҙәребеҙҙе баҫып алырға теләй, беҙҙе ҡолдар яһарға теләй. Юҡ, рус халҡы быға ирек ҡуймаҫ. Ул һуҡғы тамсы ҡаны ҡалғанса, үҙенеҡ ватанын һаҡлар, үҙенеҡ бер бөтөн бөйөк империяһын яҡлар. Мин социал-демократтар партияһы исеменән шуны белдерәм: беҙ ватаныбыҙҙы һатырға теләмәйбеҙ. Ауыр һынау көндәрендә һәр кем бар көсө менән ватанға ярҙам итергә тейеш. Беҙҙеҡ дәүләтебеҙ еҡгәс, беҙҙеҡ ил еҡеү тантанаһы үткәргән саҡта, хөкүмәт алдында үҙебеҙҙеҡ талаптарыбыҙҙы ҡуйырбыҙ, ә хәҙергә бөтә көсөбөҙҙө ватанды

һаҡлауға ғына сарыф итергә тейешбеҙ. Беҙҙең арала ниндәйҙер ҡотҡо һүҙҙәрен бышылдап, йәшерен рәүештә таратыу эше алып барған дошмандар һүҙенә бирелмәйек, дошманды үҙ еребеҙҙән ҡыуып сығарайыҡ! Хәҙер ватанға һөйөү һәм уға бирелгәнлек бар нәмәнән дә өҫтөн торорға тейеш!..

Ҡапыл ораторҙың таҫма кеүек һыҙылып ҡына аҡҡан һүҙҙәрен аранан уҫал ҡысҡырыуҙар бүлде:

— Долой хыянатсыны!

— Долой һатлыҡ йәнде!

Был тауыштар һоро һалдат массаһын ҡуҙғытып уҡ ебәрҙе, улар тын ятҡан күл өҫтөнән ҡапыл көслө ел иҫеп үткәндәге шикелле тулҡындылар. Бөтә һалдаттар ҙа ҡуҙғалыша, һуҡраныша башланылар. Шау-шыу ҡупты. Офицерҙар, ярһынышып: «Смирно!» — тип аҡыралар, ләкин уларҙың екеренеүҙәре күтәрелгән дәһшәтле тауыш эсендә күмелеп, юғалып ҡалалар, бер төрлө тәьҫир ҙә яһай алмайҙар. Оратор, ҡулы менән көслө ишаралар яһап, һалдаттарҙы тәртипкә саҡырып маташты; бер төрлө лә тәьҫир итә алмағас, ҡултығына эшләпәһен ҡыҫҡан хәлдә аптырап ҡатып тороуында булды. Офицерҙар полковник тирәһенә өйөлөштөләр ҙә ни хаҡындалыр ҡыҙып-ҡыҙып кәңәшләшергә керештеләр. Улар ҡотортоп ярһытылған йыртҡыстарға оҡшап ҡалдылар, тирә-яҡтарына күҙ һала-һала, ҡаушап арыбире йүгергеләйҙәр. Оратор инде аптырашынан күҙен асалаҡйомалаҡ итеп, бер аҙ хәрәкәтһеҙ баҫып торҙо ла, телмәрен артабан дауам итергә мөмкинлек тыуыуынан өмөт өҙөп, йәшниктән төштө. Шуны ғына көткән шикелле, сафта торған һалдаттар тәмәке тоҡандырҙылар. Һалдат массалары өҫтөнән һорғолт ҡуйы төтөн күтәрелде. Сафтар таралды, һалдаттар төркөмдәргә уҡмаша башланы. Штатский кейемдәге кеше лә, офицерҙар ҙа юҡҡа сыҡты. Таралған колонналар алдында бары бер фельдфебель генә ҡысҡырынып йүгереп йөрөй:

— Казармаларға таралырға-а!

Ярҙарынан ташып сыҡҡан яҙғы һыу кеүек урғылышып, һалдаттар казарма ишектәренә ябырылды.

Бына ошондай ваҡиға менән барып осланды беҙҙең яңы йылыбыҙҙың тәүге көнө.

Кисенә шау-шыу казармаларҙың эсендә көсәйеп китте. Ҡәҙимге тәртип бөтөнләй юҡҡа сыҡты: ҡысҡырып һөйләшәләр, гармун тарталар, йырлашалар.

Был кистә минең янға Надеждин килде. Ул бик күңелле ҡиәфәттә күренә. Ҡулымды бик ныҡ иттереп ҡыҫҡас, ҙур ҡыуаныслы хәбәр әйтергә теләгән кеше төҫө менән минең күҙҙәремә тура ҡараны:

— Беләһеңме?

— Нимәне?

— Һалдат массаһына хәҙер аң керҙе, тигәйнем бит. Бөгөнгө ваҡиға — үҙенә күрә бер көрәш бит инде ул. Массаның көсөн

күрҙеңме? Күпме генә тиреләренән сығырҙай булып тырышмаһындар, күҙҙе томаларға ирешә алманылар, һалдаттар өҫтөнлөк алды, ә бына улар ҡулдарына ҡорал алһа, нимә булыр? Ул саҡ бөтә Мәскәү беҙҙең ҡулда булыр.

Надеждиндың һуңғы һүҙҙәре мине һағайтты. Был тиклем ҙур Мәскәү беҙгә ниңә кәрәк? Уны ни эшләтәйек беҙ? Һуғышты туҡтатыу өсөн уның ни әһәмиәте бар? Э Надеждин уны алырға уйлай. Ҡарамаҡҡа ул тыныс кешегә оҡшай, ҡысҡырмай ғына һөйләшә, ә үҙе башында ниндәй ҙур хыялдар йөрөтә! Әйтәйек, беҙ Мәскәүҙе үҙ ҡулыбыҙға алдыҡ та, ти, ә беҙ уны һаҡлай алырбыҙмы? Фронт та унан бер нисә йөҙ саҡрымда ғына.

Мин аптырап һорай һалдым:

— Нимәгә кәрәк беҙгә Мәскәү? Беҙгә үҙебеҙ талап иткәнде генә бирһендәр. Һуғышты туҡтатһындар ҙа үҙебеҙҙе өйҙәргә таратһындар.

Надеждин ҡыҙып-ҡыҙып миңә аңлатырға тотондо:

— Мәскәү менән Петроград беҙҙең ҡулға күсһә, бер кемдән бер нәмә һорап торорға ҡалмаясаҡ. Ул саҡта бит власть үҙебеҙҙең ҡулда була. Һуғышты ҡасан теләйбеҙ, шунда туҡтатабыҙ. Ҡан ҡойошто бөтөрәбеҙ ҙә кемдәр теләй, шуларҙы өйҙәренә таратабыҙ. Халыҡ үҙе күтәрелеп, властыүҙ ҡулына алмай тороп, батша хөкүмәте беҙҙең талаптарҙы үтәргә уйлап та ҡарамаясаҡ. Был — факт!

Надеждиндың шул һүҙҙәрен ишеткәс, башымдағы уйҙарым асыҡлана төштө. Новиков та шундайыраҡ һүҙҙәр һөйләй торғайны бит. Тик ул был хәт ле асыҡ итеп әйтеп кенә бирә алмай торғайны, ә Надеждин, бөгөнгө ваҡиғаларға, фронттағы ваҡиғаларға нигеҙләнеп, ышандырырлыҡ итеп ярҙы ла һалды.

Ул миңә сәйәси партиялар, уларҙың етәкселәре хаҡында күп кенә мөһим нәмәләр һөйләне. Партиялар барлығы хаҡында миңә быға тиклем дә ишеткеләргә тура килгәйне, ләкин мин улар алып барған эш хаҡында ла, уларға кемдәр етәкселек иткәнен дә өҙөм-йортом ғына белә инем. Ул большевиктар партияһы тураһында, уның хаҡ эше хаҡында айырыуса рухланып һөйләй. Бер арала ул үҙенең дә ошо партия вәкиле икәнен белдереп алды.

Большевиктар хаҡында фронтта ла мин йыш ҡына ишетә инем, тик, ниңәлер, офицерҙар уларҙы немец шпиондары, ватанды һатырға ҡотортоп йөрөүсе хыянатсылар, тип атай инеләр. Ә Надеждин һүҙҙәренән мин уларҙы дөм икенсе яҡтан күрҙем, уларҙың инанған имандары, көрәштәре — тап бына беҙҙеке, имеш, тә баһаң. Большевиктар партияһы — эшселәрҙең үҙ партиялары икән. Шуға күрә эшселәрҙең төп массаһы улар яҡлы икән. Миңә айырыуса большевиктарҙың бөтә халыҡтарға тиң хоҡуҡ биреү өсөн көрәшкәндәре оҡшаны. Бынан һуң Надеждин миңә айырыуса яҡын булып әүерелде.

Бер заман ул миңә шундай һүҙҙәр әйтте ки, улар минең хәтеремә, ташҡа соҡоп яҙылған кеүек, тәрән инеп урынлаштылар, мейемдә балҡып янған усаҡ тоҡандырҙылармы ни:

— Был һуғыш бары капиталистар мәнфәғәтендә генә асылған, ә эшселәр һәм крәҫтиәндәр өсөн бары ҡанлы фажиғә булып ҡына тора. Һуғыш — кешелектең тәнендә үлемесле, ғазаплы шешек ул. Уны һис ҡыҙғанмай ярып ағыҙырға кәрәк. Һуғышҡа ҡаршы һуғыш асыу, революция — бына ошо операция була ла инде. Был лозунгыны большевиктар күтәргән. Уларҙың байрағы кешелекте һәләкәттән ҡотҡарыу байрағы булып тора. Большевизм — ул кешелектең выжданы. Большевизм — кешелек донъяһының кешелеклеге өсөн көрәш. Был көрәште бары эшсе синыф үҙенең большевиктар партияһы етәкселегендә ярлы крәҫтиәндең берҙәм ярҙамына таянып ҡына алып бара һәм унда еңеп сыға ала...

Кешенең башында яңы мауыҡтырғыс уйҙар тыуһа, уның төн йоҡолары тамам ҡаса. Мин бөгөн керпек тә ҡаҡманым. Ә бөтә казарма тәрән йоҡоға талған. Йөрәгем көслө тибә, нервыларым шартлап өҙөлөрҙәй булған; уйҙарым, яҙғы ташҡын һымаҡ, урғыла, ҡайнай. Кеше, сағыштырмаса, үҙе әллә ни ҙур булмаған йән эйәһе булһа ла, уның башына нимәләр генә һыймай? Уйҙары менән ул, ҡанат ҡуйған һымаҡ, әллә ҡайҙарға оса, диңгеҙҙәр кисә, тауҙарҙы артыла, ҡоштар осоп менә алмаҫлыҡ бейеклектәргә олғаша, ул күк күкрәүҙәрҙән дә көслөрәк тауыш менән оран һала, уның тауышын бөтә донъя ишетә ала. Был тауыш — йөрәк тауышы, хәҡиҡәттең үҙ тауышы. Шуға ла уны көллө ғаләм ишетә һәм аңлай.

Бөгөн беҙҙең алда тамаҡ йыртҡан оратор дошманды еңгәнгә тиклем һуғышырға өндәне. Ярай, тагы ла миллион йәндәр, яңы ҡан даръялары бәйәһенә еңеүгә өлгәштек тә ти, тыуған ауылдарыбыҙға таралыштыҡ ти, шунан ни булыр? Беребеҙ аяҡһыҙ, беребеҙ ҡулһыҙ, беребеҙ, Басиров һымаҡ, күҙһеҙ ҡайтҡан кешеләр ни генә эшләй алыр инек? Башта беҙҙе ҡыҙғанырҙар, шунан оноторҙар, яҙмыш ҡулына тапшырырҙар, һинең ыҙа сигеүҙәреңә ситтән генә шаһит булырҙар. Э һин, әҙ-мәҙ хеҙмәткә яраҡлы булһаң әле, ғаиләңде астан үлтермәҫ өсөн, көнө-төнө михнәт йөгөн тартырһың, элекке үк байҙарыңды байытырһың.

Ә кешегә һәр ваҡыт нимәгәлер ынтылыу тойғоһо хас. Ул, иң башта, әҙәмсә арыу ғына итеп йәшәргә теләй. Ләкин бының өсөн кеше азат булырға һәм уның ҡулында үҙенең ынтылыштарын тормошҡа ашырырға мөмкинлектәр булырға тейеш.

Большевиктар, бер ниндәй ҡаршылыҡтарҙан да ҡурҡмай, алдарына ошоноң өсөн көрәш иманын ҡуйғандар. Был иман беҙ — һалдаттар өсөн дә бик яҡын, уртаҡ иман, ул беҙҙең йөрәктәребеҙҙә көрәш уты баҙлата. Ялҡын тоҡанған йөрәк бығаса ишетелмәгән, ләкин йөрәк елкеткес матур, көрәшкә саҡырыусы йырға ҡушыла. Был йырҙы кисекмәҫтән башҡалар

ҙа бер юлы ишетеп алһын һөм шунда уҡ дәррәү рәүештә уға ҡушылһын ине, бығаса кеше ишетмәгән-күрмәгән ҡеүәтле күмәк йыр барлыҡҡа килһен ине, ул кешеләрҙең мейеһен ҡуҙғытып, йоҡомһорауҙан һиҫкәндереп уятһын ине, үҙҙәренең фажиғәле яҙмыштарына ҡаршы баш күтәрергә яуға алып сыҡһын ине. Был йыр дошман пуляларының, ағыулы газдарҙың юлына ҡалҡан булып баҫһын ине. Был ҡеүәтле йырҙа кешеләрҙең туғанлығы, кешенең мөһабәт ижади көсө, кеше ғүмеренең матурлығы, уның бер ни менән дә сағыштырғыһыҙ ҡиммәте данланһын ине.

Эй кеше! Ул, бары ул ғына, ижади уй-фекерҙең сығанағы бит! Ул үҙенә тәбиғәттең һуҡыр көстәрен дә буйһондора ала, уның өҫтөнән үҙ хөкөмөн хөкөм итеп ҡуя ала. Кеше үҙе тыуҙырған гүзәл ижады менән тәбиғәт матурлығына йәм өҫтәй. Ул мөһабәт һарайҙар төҙөй, матур ҡалаларҙы барлыҡҡа килтерә, иҫ киткес гүзәл сәнғәт әҫәрҙәре ижад итә. Техникаға эйә булып, кеше юлды бик ныҡ ҡыҫҡарта торған ғәйрәтле паровоздар яһаған; дәһшәтле, дауыллы диңгеҙ, океандарҙы аша ҡыйыу рәүештә ярып сыға алырлыҡ пароходтар төҙөгән, ирекле ҡоштарҙан да йылдамыраҡ тиҙлек менән һауаға сөйөлә торған аэропландарҙы ла тыуҙырған ул хатта. Былары бик шәп. Тик кеше үҙенең ишеләрҙе ҡырыу өсөн ҡоралдар ҙа уйлап сығарған: дары, мылтыҡ, туптар, газ. Шуларҙы ҡулланыу өсөн һуғыш та — кеше ижады.

Кеше ижад итә, бының өсөн ул бөтә ғүмерен арнай, дан менән солғана, ләкин үҙенең ижады кешелек өсөн файҙалымы әллә, киреһенсә, һәләкәтлеме икәненә һәр ваҡытта ғына хисап бирә еткерә алмай. Йыш ҡына кеше ҡиәфәтле икенсе бер йыртҡыстар уның ижадын кешеләрҙең үҙҙәрен үк үлтереү өсөн файҙаланалар...

Был бәйләнсек уйҙарҙан арынып, тиҙерәк онотолғо килә, ләкин йоҡо алмай. Яңы йыл күстәнәсе итеп бирелгән папиросты алып тоҡандырам, нарҙарҙа бөгәрләнеп-бөгәрләнеп йоҡлаған иптәштәремә күҙ йөрөтөп сығам. Күптәр йоҡо аралаш тынысһыҙ борғоланалар, уфылдайҙар, ыңғырашалар, һаташалар. Арғы мөйөштәге бер ҡарт һалдат ҡына йоҡламай шикелле. Ул һалам мендәрен әленән-әле төҙәткеләп һала, ни өсөндөр, йыш ҡына кеҫәләрен һәрмәп ҡарай, шунан бер аҙға тын ҡала. Күрәһең, уға ла ниндәйҙер ауыр уйҙар тынғы бирмәй.

Керле тоноҡ тәҙрә уйымынан ҡаршы яҡ стенаға сағыу булып ай яҡтыһы төштө. Бер ниндәй уйһыҙ мин уның яҡтылығын күҙәтеп яттым һәм шунда йоҡлап та киткәнмен...

...Тимер рәшәткә араһынан көс-хәлгә һыйып, мин ялан ергә барып сыҡтым. Үләндәр шул тиклем йәшелдәр, ә сәскәләр шул хәтле асыҡ матурҙар, уларға күҙ ҡамаша. Мин бейек үләндәргә күмелеп атлап барам, аҙым һайын тирә-яғыма күҙ һалам. Мин

ниманандер ҡурҡам. Сөнки мин бер яңғыҙым, тирә-яҡта бер кеше заты юҡ. Мин атлап барған туғай үҙемә бик тә таныш күренә — ул беҙҙең ауыл янындағы туғай ҙа баһаң. Мин, үҙе-беҙҙең ауылды күрмәксе булып, үрелеп-үрелеп ҡарайым. Ләкин ул күренмәй. Э мин бит бары уны күрер өсөн генә шулай ашҡынып ҡайтып киләм.

Ҡапыл мин бер ҙур өй алдына барып сыҡтым, шунда мин бер ҡатындың үҙемә ҡысҡырғанын ишетәм: «Унда инә күрмә, һәләк булырһың. Был бит — батша өйө!» Мин тағы ла нығыраҡ ҡурҡыуға төштөм. Мин инде ул өйгә ингәнмен дә, имеш. Стенала батша ғаиләһенең портреты эленеп тора. Уртала Николай II үҙе. Ҡапыл һүрәттәге кешеләргә йән инде. Николай II миңә асыу менән тишеп ҡараны, уның артынса башҡалары ла миңә нәфрәт тулы күҙҙәре менән төбәлделәр. Мин ғәйепле төҫтә башымды эйҙем һәм бынан нисек сығып ҡотолаһы икән, тип уйланым. Шунда батша уҫал итеп әйтте: «Ниңә минең болондо тапап йөрөйһөң? Нисек килеп сыҡтың һин бында?» Мин һорауға яуап бирә алмайым, батшаның ғаилә ағзаларына ҡарайым. Уларҙың биттәре күм-күк, сырайҙары хәсрәтле, үҙҙәре бышын-бышын доға уҡыйҙар. Бер яҡ ситтә мин тар ғына ишек күреп ҡалдым, тоттом да шунан сығып йүгерҙем, бер йылға буйына барып сыҡтым да шуның ярынан йүгерә башланым. Бер аҙ йүгергәс, берәүҙең былай тип һөйләгәнен ишеттем: «Хәҙер һуғыш бөттө инде. Күпселек һалдаттар өйҙәренә таралдылар. Улар, арбаларға ултырып, батшаның болоно аша уҙалар, тапаталар. Батша уларға асыулана». Мин уңға боролоп ҡараным, унда кешеләр теҙелешеп тауға менеп баралар ине. Улар барыһы ла һуғыштан ҡайтып баралар шикелле.

Мин уянғанда, барса һалдаттар ҙа торғайны инде. Мин, күргән төшөмдөң һәр бер ваҡлығын хәтеремдә яңыртырға тырышып, күҙемде асҡан көйөнсә, тағы ла бер аҙ урынымда яттым әле. Кәйефем яҡшы уҡ күтәренке, көллө тәнемдә әллә ниндәй еңеллек һиҙелә. Минең кәйефемдең яҡшылығын белеп, уны тағы ла яҡшыртырға теләгән шикелле, күрше нарҙа ятҡан бер һалдат былай тине:

— Бөгөн иртәнгене ашағас, беҙҙе томанлы картина ҡарарға алып баралар.

Мин егеттәрсә етеҙлек менән урынымдан һикереп төштөм дә йыуынырға сығып киттем.

## УН АЛТЫНСЫ БҮЛЕК

10 ғинуарҙа, фронтҡа оҙатыр алдынан, беҙгә яңы кейемһалым бирҙеләр һәм мунсаға алып киттеләр. Ғинуар уртаһы етеп килеүгә ҡарамаҫтан, көн йылы ине. Беҙ мунсаға, сафҡа

теҙелешеп, йырҙар йырлап киттек. Көн матур булғанғалырмы, фронтка китер алдынан булғанғамы, кешеләрҙең күңеле үрһәләнеп тора, улар айырыуса ҡысҡырып йырлайҙар.

Миңә ҡалһа, минең үҙемдең тауышым да бөгөн көслөрәк яңғырай һымаҡ, әйтерһең, ул, күкрәгемә һыйыша алмайынса, ҡеүәтле гөрләүек шикелле, гөрөлдәп тышҡа урғыла. Йыр ыңғайына аяҡтар ныҡ һәм берҙәм баҫалар. Аҙымдарҙың берҙәмлегенән тән еңеләйә, баштар юғарыраҡ күтәрелгән. Мәскәү кешеләренә ғорурлыҡ менән былай тип ҡысҡыраһы килә:

— Тыңлағыҙ, бына беҙ нисек яҡшы йырлайбыҙ!

Мин үҙебеҙҙең йыр башлаусыға иғтибар иттем. Был — киң күкрәкле, ҡалҡыу маңлайлы, ҙур танаулы, ҡалын иренле, әҙерәк кенә һипкел баҫҡан мыҡты егет ине. Ул йыр ыңғайына ныҡ-ныҡ баҫып атлай, ҙур ҡулдарын киң итеп һелтәй. Әгәр ҙә ул ҡулын һелтәгән мәлдә берәйһенең башы уның ҡулы аҫтына тап була икән — иҫән ҡалыуы икеле. Йыр башлаусы югары ноталар алғанда, ул башын артҡа ташлай һәм эйәге тамағы менән бер кимәлгә тура килә.

Ул, бөтә ғәмен йырға биреп, бик хисләнеп, мөкиббән китеп йырлай, үҙенең илһамланыуын башҡа һалдаттарға ла йоҡтора. Барыһы ла уға оҡшатырға тырышып йырлайҙар; уның кеүек үк ныҡ-ныҡ баҫып атлайҙар, ҡулдарын тырышып-тырышып һелтәйҙәр, баштарын текә тоталар.

Беҙҙең күп тауышлы йырыбыҙҙа һуғышта ғазап сиккән миллионлаған кешеләрҙең ҡайғы-хәсрәте, уларҙың һуғышҡа ҡаршы көслө баш күтәреү ауазы ишетелә. Был йырҙа йөҙәр йыл ултырған, ағастарҙы ла тамыры менән аҡтара алырҙай көслө дауыл тауышы ишетелә, был йырға ер тетрәткес көсҡеүәт йәшеренгән...

Һалдаттар мунсала ла бөгөн үҙҙәрен айырыуса бер төрлө хис иттеләр, — әйтерһең дә, инде туйға барырға әҙерләнгән кейәүҙәр. Барыһы ла бер-береһенә асыҡ йөҙлөләр, бер-берен ғәҙәттәгесә мыҫҡыл итешеп көлөү, әрләшеү, һүгенеүҙең өнө лә юҡ. Ҡып-ҡыҙыл булып ҡыҙарынған битле һалдаттар, мунсанан сыҡҡас, тағы теҙелделәр.

— Шаго-ом марш! Айт, два, три... Айт, два, три... Левой, левой!.. — тигән команда, һалдаттар массаһын үҙ хөкөмөнә буйһондороп, ҡабат урам буйлап алып китте, беҙҙең сафтар хәҙер диңгеҙ тулҡынын хәтерләтә ине. Мунсанан һуң йырлатмайҙар; һалдаттар шуға, баштарын эйә биреп, үҙҙәренең берҙәм аяҡ тауыштарын тыңлап, уйланып ойоп барған төҫлө күренәләр.

Колонна Театр майҙанына етеп килгәндә, беҙҙең алда урамды атлы полиция быуғайны. Атлылар ҡул күтәрҙеләр, һәм колонна командаһыҙ-ниһеҙ туҡтаны. Һалдаттар, аптырашып, тирә-яҡтарына ҡарана башланылар.

— Берәйһен трамвай тапағанмы әллә? — тип һораны күршем. Шул мәлдә Тверской урамынан халыҡ ағымы урғы-

лып килеп сыҡты, урыны-урыны менән улар өҫтөндә ҡыҙыл байраҡтар елберләй ине.

— Кемделер ерләйҙәр шикелле, — тине бер һалдат.

Шул мәлдә Ҙур театр янында ла бик күп халыҡ төркөмө барлыҡҡа килде. Атлы полицейскийҙар ҙа урамда күбәйгәндән-күбәйҙе, улар бер баштан икенсеһенә сабышып йөрөйҙәр.

Петровка яғынан кешеләрҙең яңы ташҡыны урғылып килеп сыҡты. Был ҡеүәтле колонна беҙҙең сафтарға килеп һуғылды, беҙҙе уратып үҙ эсенә алды. Беҙ сафтарҙы тарҡатмаҫҡа тырышып, һаман баҫып торабыҙ. Килеп туҡтағандарҙың береһе, беҙгә мөрәжәғәт итеп, ҡысҡырып һөйләргә тотондо:

— Һалдат иптәштәр! Һеҙ — барығыҙ ҙа эшсе-крәҫтиән балалары. Һеҙ инде дүрт йыл буйы фронттарҙа ҡан ҡояһығыҙ. Э беҙ бында аслыҡтан, яланғаслыҡтан яфа сигәбеҙ. Һеҙҙең ата-әсәләрегеҙ, балаларығыҙ аслыҡтан шешенә. Беҙгә һуғыш кәрәкмәй. Беҙ бына шуны әйтер өсөн урамға сыҡтыҡ. Туғандар! Беҙгә ҡушылығыҙ!..

Ораторға һөйләп бөтөрөргә ирек бирмәнеләр, — атлы полицейскийҙар ҡылыстарын болғап килеп еттеләр ҙә халыҡты беҙҙән ҡыҫырыҡлап сигендерә башланылар.

Шул мәл Надежд ин дың көслө тауышы ишетелде:

— Эшселәр — беҙҙең туғандарыбыҙ. Улар беҙҙең йөрәктәрҙә ҡайнаған хәҡиҡәт һүҙҙәрен әйтәләр. Беҙ, һалдаттар ҙа: «Беҙгә һуғыш кәрәкмәй!» — тибеҙ. Был һуғыштан беҙ бер генә лә отош алмайбыҙ, бары ҡан ҡоябыҙ ҙа меңәрләп-меңәрләп ҡырылабыҙ. Бына бит — беҙҙең ата-әсәләребеҙ, сабыйҙарыбыҙ аслыҡҡа, яланғаслыҡҡа дусар ителгәндәр. Бөтһөн һуғыш! Бөтһөн батша хөкүмәте! Бөтһөн...

Надеждин да һүҙен ослай алманы; атлылар беҙҙең колоннаны ҡыҫырыҡлап тарҡата башланылар, тапап киләләр. Аҡрынлап беҙҙең колоннаға юл астылар, беҙҙе Охотный рядҡа табан ашыҡтырып ҡыуаланылар. Беҙ инде, баяғыса тигеҙ сафтар булып түгел, һарыҡ көтөүе кеүек, теләһә ҡайһылай тәртипһеҙ эркелешеп барабыҙ. Охотный рядтан сиркәү эргәләп уҙғанда, баҙар яғынан ҡапыл эшселәр төркөмө килеп сыҡты ла беҙгә ҡушылды.

— Полиция беҙҙе нагайкалар менән туҡмарға, атырға уйлаша. Китмәгеҙ, беҙҙе ташламағыҙ. Шаһит булығыҙ, яҡлашығыҙ! — тип ҡысҡырышты улар.

Уларҙың тауышын ишеткәс, колонналар яйлап туҡтаны. Ҡыйыу ғына ҡиәфәтле бер тәбәнәк буйлы һалдат шунда бер эшсене ҡосаҡлап, арҡаһынан һөйөргә тотондо. Шуны ғына көткән кеүек, һалдаттар эшселәрҙе үҙ ҡосаҡтарына ала башланылар.

Бер эшсенең битен нагайка ярып ебәргән, ҡаны тамсылап тора. Ул фуражкаһын систе лә, ҡулдарын ныҡ-ныҡ һелтәп, үҙен ҡамап алған һалдаттарға нимәлер һөйләргә тотондо. Телмәр һөйләүсе эшсене күреп ҡалып, полицейскийҙар уның яны-

на йырып инмәксе булғайнылар ҙа, тик һалдаттар ике араға ҡалын стена булып баҫтылар. Тегеләр, бер ни эшләй алмайынса, артҡа сигенделәр һәм бер аҙҙан, тағы ла ҙурыраҡ көс туплап, аттарын ҡамсылай-ҡамсылай, һалдаттар менән эшселәр бергә аралашҡан төркөмдө йырып инә башланылар. Нәфрәтле тауыштар ишетелде:

— Их, йәл, винтовкалар үҙебеҙ менән түгел!

— Ҡорал ҡулда булһа, беҙ һеҙҙең менән һөйләшә белер инек!

— Ҡанескестәр!

Полицейскийҙар күбәйгәндән-күбәйә. Нагайкаларын уңлыһуллы һелтәп, төркөмдәрҙе йырмаслап йөрөй торғас, улар эшселәрҙе һалдаттарҙан аралап ала алдылар. Беҙҙе ашыҡтырып, көсләп алға ҡыуаланылар. Тик оҙаҡламай алдағы рәттәр, нимәгәлер төртөлөп, ҡабат туҡтаны. Һалдаттар, привалдағы шикелле, ашыҡмай ғына тәмәке көйрәтә башланылар. Туҡтағанға тәүҙә аптырап ҡалһалар ҙа, әкренләп тынысландылар. Мәскәүҙең иң уртаһында туҡтаған һалдат колонналары, офицерҙарҙың аҡырыу-екереүҙәренә лә ҡарамаҫтан, үҙҙәрен бик ирекле һиҙеп, шаулашырға, ҡысҡырынырға, хатта йырлашырға, бейешергә тотондолар. Бөтәһенең дә йөҙө көләс, һәр кем үҙен тантаналы байрамдағы һымаҡ хис итә.

Ҡапыл ҡайҙандыр яҡындан ғына мылтыҡ тауыштары ишетелде, һалдаттар ҡапыл тындылар, атыу тауышы ишетелгән яҡҡа һағайып ҡаранылар. Ҡайһы берҙәре ҡандарына һеңешеп бөткән ғәҙәттәре буйынса патрон сумкалары аҫылынып торорға тейеш булған урындарына — янтыҡтарына үрелделәр. Шул саҡ беҙҙең янға кавалеристар эскадроны яҡынлашты. Улар араһында күбеһе офицерҙар ине. Бер полковник беҙгә ҡысҡырып мөрәжәғәт итте:

— Туғандар, Манежный урамына сығығыҙ ҙа казармаларығыҙға ҡайтығыҙ.

Һалдаттар, ни эшләптер, быны үтәлергә тейешле бойороҡ итеп ҡабул иттеләр һәм күрһәтелгән йүнәлешкә эркелештеләр. Кемдеңдер команда биргәнен дә көтмәй, сафтар йәнә тигеҙләнде: казармаларыбыҙға йәһәтерәк ҡайтып етергә кәрәклеге ҡапыл иҫенә төшкән кешеләрсә шәп-шәп атланыҡ.

Беҙҙең колонна алдынан хәҙер һыбайлы өс офицер төшкән. Улар кемдәр, беҙҙе улар ҡайҙа алып баралар —• бер кем дә белмәй һәм был хаҡта уйлап та ҡарамай ине.

Арбат майҙанына сыҡҡас, туҡтарға команда бирҙеләр. Шунда, тулы тәртип урынлаштырып, колонналарҙы теҙҙеләр, үҙебеҙҙең казармаларға ыңғайлатып алып киттеләр. Шым ғына атлайбыҙ, күрәһең, барыбыҙ ҙа ауыр уйҙарға бирелгәнбеҙ. Меңләгән кешенең шундай уҫал тынлыҡ һаҡлауы теләһә нәмәне хәҙер ҡарынына йотоп алырға әҙер булып, дәһшәтле тынлыҡ һаҡлап ятҡан тәрән упҡынды күҙ алдына килтерә ине.

# УН ЕТЕНСЕ БҮЛЕК

Иртәнсәк арабыҙҙа Надеждин юҡлығы беленде. Унын серле рәүештә юҡҡа сығыуы хаҡында төрлөсә фараз иттеләр:

— Кисә ишетелеп ҡалған атыш мәлендә яралағандарҙыр.

— Бәлки, ул эшселәр менән киткәндер.

— Полиция ҡулға алған булырға тейеш.

Ләкин береһе лә асығын ғына әйтә алманы. Надеждиндың юғалыуын мин бик ауыр кисерҙем. Казарма яртылаш бушап ҡалғандай тойолдо. Төндә, уның хаҡында уйланып, урынымда борғоландым да борғоландым. «Бәлки, ул иртән ҡайтып та инер, үҙе менән бик күп мөһим хәбәрҙәр алып ҡайтыр», — тип үҙемде тынысландырырға тырыштым. Иртән, йыуынғас, берәй урында Надеждинды тап итмәмме икән тип ниәтләнеп, мин һәммә казарманы ла йөрөп сыҡтым, ләкин быны бер һөҙөмтәһе лә булманы. Мин бик тә күңелһеҙләндем. Һәр урында ла һалдаттар кисә булып үткән хәл тураһында ҡыҙып-ҡыҙып һөйләшәләр, ләкин минең уларҙың береһенә лә ҡушылғым килмәне.

Мин үҙебеҙҙең ротаның фельдфебеле Ефремов янына барҙым да үҙемде өс сәғәткә ҡалаға сығарыуын үтендем.

Койкаһында ятҡан фельдфебель:

— Һин Мәскәүҙекеме ни? — тип һораны.

— Юҡ, мин үҙем Мәскәүҙеке түгелмен, тик бында туғандарым бар, — тип алданым. Мин Басировтарға барып сыҡмаҡсы, шуның менән Надеждинды юҡһыныуымды әҙерәк баҫмаҡсы булғайным.

— Бар. Тик һуңлама. Бөгөн төндә булмаһа ла, иртәгә иртән беҙҙе оҙатасаҡтар, — тине фельдфебель һәм миңә увольнительный яҙып тотторҙо. Мин, хатта Ефремовҡа рәхмәт әйтергә лә онотоп, йүгереп сыҡтым һәм тәмәке тоҡандырырға тип туҡтаным. Тик тартҡым килмәй булып сыҡты. Тоҡандырмайса, урамға сығырға ашыҡтым. Трамвайҙа барғанда ла әле мин тоҡандырылмаған тәмәкемде ҡулымда тотоп барам, имеш. Мин уны йәһәтерәк кеҫәмә тығырға ашыҡтым.

Юғалған иптәшемде осратмаммы икән тип, мин һәр бер үткенсенең йөҙөнә өмөт менән ҡарайым, тик файҙаһыҙ. Хатта Басировтар ишеге алдына килеп еткәс, баҫҡыстан төшөп килгән хәрби шинелле берәүҙе күргәс, ул үтеп киткәнсе, ишекте шаҡылдатмай, өмөт менән ҡарап торҙом. Эргәмдән ниндәйҙер музыка ҡоралы күтәргән ҡаҡса ғына оҙон буйлы кеше үтеп китте. Күтәргән әйберенә ҡарағанда, ул хәрби оркестр музыканты булырға тейеш ине.

Мин Басировтарҙың ишеген шаҡығанда, яҡындан ғына скрипка тауышы ишетелеп торҙо. Мин шунда, шаҡыуҙан туҡтап, түбәнгә ҡараным. Әллә теге музыкант туҡтап уйнай башланымы икән? Тик ул күренмәй ине инде. Ә музыка дауам итә. Уның моңдары мине биләп алды, әҫәрләнеп, мин бер аҙ тыңлап

торҙом да ҡабаттан нығыраҡ итеп шаҡырға мәжбүр булдым. Шунда уҡ скрипка тауышы өҙөлдө, һәм эстән ишеккә табан килеүсе ашығыс аяҡ тауыштары ишетелде. Минең йөрәгем, аяҡ тауыштары кемдеке булыуын алдан һиҙемләп, күкрәгемде бүҫеп сығырҙай итеп тибергә тотондо. Шул саҡ ишек асылып китте, минең алдымда, асыҡ йылмайып, Ғәйшә баҫып тора ине. Уның матур күҙҙәре мине магнит һымаҡ эскә тартты, мин, эскә үтеү менән, Ғәйшәнең йомшаҡ ҡулдарын ҡабаланып усыма алдым. Уның йылы усынан, нәфис бармаҡтарынан килгән рәхәтлек йөрәгемә барып ҡағылды, ҡан тамырҙарым буйлап йүгерҙе.

Мин артымдан ишекте ябырға ла онотҡанмын, имеш, ә бары Ғәйшә үрелеп уны япмаҡсы булғас ҡына, иҫемә килеп, уның ҡулын ысҡындырҙым, иҫәнләшергә ауыҙымды аса алдым. Ғәйшә, ишекте япҡас та, ашығып залға инеп китте һәм ағаһына ҡысҡырҙы:

— Фәтхулла, юғалған Булатыбыҙ килде! Ысынлап әйтәм, Булат килде!

— Ысынмы? Рәхим ит! Рәхим ит! — тине Фәтхулла теге яҡтан шат тауыш менән.

Был ихлас ҡаршылауҙан миңә сикһеҙ рәхәт булып китте. Мин, тиҙ генә сисенеп, төҙәтендем дә залға индем. Минең беренсе күргән нәмәм — диванда ятҡан скрипка булды. Баяғы скрипка тауышы, баҡһаң, ошонан килгән икән. Мин: «Уны кем уйнай икән?» — тип уйлап, бер аҙ уға ҡарап торҙом.

Шунда Фәтхулланың түҙемһеҙ тауышы килде:

— Йә инде үтә һал был яҡҡа, үт!

Мин унда ингәндә, Ғәйшә ағаһына ҙур хәстәрлек менән пинжәген кейергә ярҙам итә ине.

— Бына ул Булат, — тине ул, миңә ҡарап матур итеп йылмайып.

Мин Фәтхулланың ҡулын ҡаты итеп ҡыҫтым, шунан ҡулымды Ғәйшәгә һонорға иттем, ҡапыл ғына уға икенсе мәртәбә ҡул һуҙырға уйлағаным иҫемә төшөп, ҡыҙарынып киттем. Э Ғәйшә минең яңылышымды һәм ҡаушап ҡалыуымды күрмәмешкә һалышты. Мин оялышымдан хатта ҡулдарымды кеҫәмә үк тығып ҡуйҙым.

Фәтхулла менән беҙ залға сыҡтыҡ. Мин уға текләберәк ҡараным, уның бер ни тиклем таҙара төшкәнен, битенә ит ҡунғанын күрҙем. Ул бик яҡшылап ҡырынған, сәсен матурлап тараған. Ҡара күҙлеге булмаһа, бик сибәр кеше булыр ине ул. Бының өсөн иң кәрәк нәмә — күҙҙәре генә етешмәй.

Ул сирләп ятҡан арала, күп кенә күркәм һыҙаттары йәшеренеп күренмәй торған икән. Тауышы ла бик матурланған.

Әңгәмә юлға һалынып киткәс, мин кисә Театр майҙанында булып уҙған хәлдәрҙе Фәтхуллаға һөйләп бирҙем, иртәгәнән дә ҡалмай үҙебеҙҙе фронтҡа ебәрәсәктәрен әйттем. Ул мине бүл-

дермәй генә тыңланы, мин һөйләп бөткәс тә әле, бер талай өндәшмәй уйланып ултырҙы. Ахыр телгә килде:

— Мин шунда булһам, мотлаҡ бер нисә полицейскийҙың күҙен соҡоп алған булыр инем. Улар ҡоралһыҙ кешеләр менән һуғышҡанда ғына батырҙар бит, — тине ул, ярһынып маңлайын ыуа-ыуа. — Ҡайҙан ғына белеп бөтөрәһең инде. Мин бит хәҙер һуҡыр кеше. Күҙем күргән саҡта, хужаларым минең өсөн өлтөрәшеп торалар ине. Ике һүҙҙең береһендә: «Һинең ҡулдарың алтын, Фәтхулла!» — тиҙәр ине. Мин намыҫ менән эшләй инем. Минең тауар иң югары сифатлы гына булып сыға ине. Минең ҡулымдан уҙғанда иң насар ҡаракүл дә первый сорт булып сыға торғайны. Мин теккән әйберҙәр менән Ҡарамышевтар сит ил баҙарҙарында дан тота башланылар. Хатта уларға тиңләшер конкурент та булмай торғайны. Уларҙың тауарына Россияла ла, сит илдә лә ихтыяж бик ҙур була ине. Байҙарҙың һәм генералдарҙың ҡатындары мин эшләгән нәмәләр менән һоҡланып бөтә алмайҙар ине, уларҙы һатып алмайса, китә алмаҫ булдылар. Ә мин бер ҡатлы алйот булып сыҡтым, үҙем һуғышҡа китер алдынан һәнәремдең бар серҙәрен байҙарыма асып киттем. Хәҙер улар шуларҙы ҡулланып эшләйҙәр. Ә мине, шул серҙәрҙең эйәһен, һуҡыр ҡалып, улар өсөн файҙам бөткәс, хатта килеп күрергә лә уйламайҙар. Басировтың донъяла барлығын улар күптән онотҡан инде.

Һуңғы һүҙҙәрен әйткәндә, Басировтың тауышы үҙгәреп, ҡалтыранып китте. Шул мәлдә Фәтхулланың бүлмәһенән Ғәйшә сыҡты.

— Фәтхулла, зинһар, шул хаҡта һөйләмәҫе. Тыңлауы ла ауыр, — тине ул ялбарыу тауышы менән.

— Йөрәк яна бит, һөйләмәй булмай.

— Бына хәҙер сәй ҡайнатам. Сәй янында икенсе бер күңеллерәк нәмә һөйләшерһегеҙ.

— Минең һеңлем алтын ул. Күрәһең, минең күңел йыуанысым булыр өсөн генә тыуғандыр инде, — тине Фәтхулла, миңә табан боролоп.

Ғәйшә аш яғына сығып китте. Мин уның артынан һоҡланып ҡарап ҡалдым. Шул арала Фәтхулла миңә табанараҡ шылып ултырҙы һәм бышылдап һөйләүгә күсте:

— Ғәйшә менән икебеҙ ҙә бәхетһеҙ булып сыҡтыҡ, ахырыһы. Үҙемде, беләһең, һуғышҡа алып, күҙһеҙ яһап ҡайтарҙылар. Инде әҙәм рәүешле генә йәшәй башланыҡ тигәндә... Өҫтәүенә, мин юҡта Ғәйшәне бер йүнһеҙгә димләп биргәндәр. Тегеһе ике ҡатын айырған булып сыҡты. — Фәтхулла, башын эйеп, тынып ҡалды. Сөнки залға Ғәйшә инеп килә ине. Мин йәнә уға ҡарап ҡатып ҡалдым, күҙемде лә айырып ала алмайым. Унан сибәрлек, сафлыҡ, көр күңеллелек бөркөлөп тора, ул бөтөнләй йәп-йәш ҡыҙ һымаҡ ҡына күренә әле. Былдай мәлдә кеше бөтәһен дә белергә, тормоштоң төмен тулыһынса та-

тырға ашҡына. Әгәр сәскәләргә шул мәлдә ямғыр булмаһа, бер өҙлөкһөҙ ҡояш ҡыҙҙырһа, ул ҡыуара, һарғая һәм йомшаҡ ҡына ел ҡағылып киткәндә лә ҡойола башлай. Ә инде шул саҡ, тап кәрәк сағында ғына, йылы ямғыр һибәләп, сәскәләрҙең битен йыуып китһә, шуның артынса уҡ рәхимле ҡояш, ялт итеп килеп сығып, йылы нурҙары менән наҙлап иркәләһә, сәскәнең йөҙө көләслектән емелдәп китә; сәскә ҡыуана һәм ҡыуанған һайын матурлығы арта бара. Бынан һуң инде уның матурлығын һалҡын елдәр ҙә, дауылдар ҙа, йонсоу көндәр ҙә кәметә алмай; бары, төрлө һауа шарттарына ҡарап, сәскәнең матурлығы ла төрлөсәгә әйләнә бара. Йонсоу көндәрҙә ул матурлығын йәшереп һаҡлап тора, дауылдарҙа үҙенең йәшел кейеме эсенә йомарланып, йәшендәргә ҡушылып, күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән ҡот осмалы фажиғәләр тураһында уйсан, хәсрәтле йыр һуҙа, ә ҡояшлы салт аяҙ көндәрҙә уның бәбәк йөҙөндә саф һәм шатлыҡлы йылмайыу өҙлөкһөҙ балҡып тора, кешеләрҙең күҙ яуын алып, күңелдәренә бихисап кинәнесле тойғолар бирә.

Бөгөн Ғәйшә ана шундай сәскәләрҙән дә матурыраҡ ине. Ул диванға ултырҙы ла, скрипканы ҡулына алып, бер нисә аккорд сығарҙы. Миңә инде быларҙың барыһын да төшөмдә генә күрәмдер һымаҡ булып тойола башланы. Күҙ алдымды өрөңкө томан баҫты, һәм мин музыка тулҡындары тибрәтеүенә эйәреп, ултырған урындығым-нием менән күктәргә олғашып барғандай хис иттем үҙемде. Ғәйшә инде ер ҡыҙы түгел, ниндәйҙер илаһи зат булып күренде; ул муза ине хәҙер, алтын ҡыллы арфа уйнаусы илаһи муза ине...

Фәтхулланың тауышы мине тағы ла ысынбарлыҡҡа ҡайтарҙы. Уны ишетеп, мин ҡапыл һиҫкәнеп уянғандай булдым.

— Әллә ниндәй, бер эшкинмәгән бәндәгә биреп, һәләк ителәр ҡыҙыҡайҙы, — тип уфтанды Фәтхулла. — Бәләкәйҙән үк музыканы үлеп ярата ине. Бик бирелеп өйрәнде. Үҙем иҫән саҡта, уҡытыусылар яллап уҡыта инем. Барыһы ла бер тауыштан уны бик ҙур талант тип маҡтайҙар ине. Бына был скрипканы мин уға йөҙ илле һумға һатып алып бирҙем. Һуғыштан иҫән-һау әйләнеп ҡайтһам, уны тағы ла уҡытырмын тип ниәтләй инем. Тик насип булмаған икән шул...

Был һүҙҙәрҙе Фәтхулла ағай Ғәйшә ниндәйҙер йомош менән ҡапыл ғына эске бүлмәгә инеп киткән арала әйтте. Шунан бик иркә итеп тегеңә өндәште:

— Йә сыҡ инде, һылыуым, «Евгений Онегин»дан Ленский арияһын уйна әле беҙгә!

Фәтхулла һеңлеһенән уйнарға үтенгән ул көй хаҡында мин быға саҡлы ишеткәнем дә юҡ ине, хатта ул әйткән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен дә аңламаным.

Ғәйшә уйнап ебәрҙе. Скрипка ҡылдары иҫ киткес моңло көй сығара. Миңә был гүзәл ауаздарҙан әле һауанан ҡолап төшөп, ауыр яраһынан үлеп барған аҡҡоштоң зарлы ҡысҡырыуы, әле

балаһын юғалтҡан ҡоралайҙың хәсрәтле тауышы, әле буранда аҙашҡан сабыйҙың илауы ишетелеп торғандай булды. Ғәйшә бөтә донъяһын онотоп әле башҡарған көйҙө мин беренсе мәртәбә ишетәм, әммә ул миңә бик тә таныш кеүек тойола. Мин ошо көй аша кемдеңдер бик ҙур тормош фажиғәһе хаҡында үҙәк өҙгөс ҡайғылы хитап тыңлағандай булдым, унда кеше теле менән һөйләп биреүе бөтөнләй мөмкин булмаған тойғолар бәйән ителде. Скрипка ҡылдарынан тибрәнеп сыҡҡан юғары аһәңле ауаздар, ҡолаҡҡа ғына ишетелеп ҡалмай, бөтә тәнгә тарала, ҡан тамырҙары буйлап йүгерешә, быға са татып та ҡарамаған юғары тойғолар уята. Ошо музыка ыңғайына быға са һис кенә лә әйтелмәгән тойғоларыңды һөйләп бирге килә, тик телгә ундай көслө һәм тапҡыр һүҙҙәр килмәй, был мәлдә йөрәктә ҡайнаған хистәрҙе әйтеп бирергә кеше теле һәләтһеҙ.

Шул мәл мин Ғәйшәгә күтәрелеп ҡарарға баҙнат иттем. Уның нурлы күҙҙәре югарыға ҡараған, тәне, скрипка һыҙған ҡулдарының хәрәкәтенә эйәреп, нәзәкәтле һомғол сайҡала. Шуға күрә, был моңдар, скрипка ҡылдарынан түгел, уның тәненән ағылып килеп, нәфис бармаҡтары аша тышҡа урғылып сығалар һымаҡ. Ғәйшә бары үҙенә генә аңлайышлы телдә кешеләргә быгаса күрелмәгән-татылмаған тойғолар хаҡында һөйләй төҫлө. Юҡ, был һис тә мин быға са бер нисә мәртәбә күреп белгән, мин һоҡланып ҡараған ер һылыуы түгел, ҡул һуҙып буй еткеһеҙ серле зат. Уның фани донъяла ҡәҙимге кешеләр араһында йәшәүе мөмкин түгел. Ул, күк ҡабағы асылып, кешеләр күҙе алдында бик аҙға ғына балҡып пәйҙә булып киткән гүзәл күренеш! Э ни эшләп һуң, улай булғас, ул, ошо илаһи зат, һипкелле битле тупаҫ кешенең ҡатыны икән? Юҡ, мине алдағандарҙыр! Минең быға ышанғым килмәй.

Казармаға ҡайтҡанда ла әле, мин урамдағы тауыштарҙың береһен дә ишетмәнем, әле һаман Ғәйшә скрипкаһының ҡабатланмаҫ моңдары минең ҡолаҡ төбөмдә яңғырап килә ине.

## УН ҺИГЕҘЕНСЕ БҮЛЕК

Онотолмаҫлыҡ ошо көндән һуң бер аҙна үтеүгә, мин Көнбайыш Украинала — Ровно ҡалаһында инем инде. Беҙҙе бында бик ашығыс хәлдә килтереп бушаттылар. Вагондарҙан сыҡҡас та, бик ҡаты конвой аҫтында казармаларға килтереп тултырҙылар һәм унан ҡалага бер кемде сығармаҫ булдылар; хатта занятиеларға ла йөрөтмәйҙәр, буш ваҡыттан күп нәмә юҡ.

Казарма тирәләй көнө-төнө жандармдар һәм казактар патруллек итә. Кем дә кем казарманан сығырға баҙнат итә, уны шунда уҡ патрулдәр тотоп ала ла, һөйләшеп-нитеп тә тормай, гауптвахтага ултырта.

Казармаларҙа һыуыҡ, сиктән тыш насар ашаталар. Һалдаттар ризаһыҙлыҡтарын асыҡтан-асыҡ белдерә башланылар:

— Беҙҙе ни эшләп аристандар һымаҡ тоталар? Былай ыҙалағансы, тиҙерәк фронтҡа оҙатһындар ине.

Һаҫыған балыҡтан бешергән һурпа, күгәргән икмәк ашап, бер маҡсатһыҙға һалҡын казармала ятыуы бик ҡыйын ине, һәм беҙҙең һәр беребеҙ бөтә донъяға асыулы ине.

Һалдаттар араһында сир таралды — биҙгәк көсәйҙе. Күптәре ашҡаҙаны менән интегә. Сирләгәндәрҙе околодокка оҙаталар. Тик унда берәй төрлө дарыу бирәләр ҙә йәһәтерәк кире бороп ҡайтаралар. Теге бахырҙар һалҡын казармаларҙа, йоҡа шинелдәрен ябынып, дер-дер ҡалтырашып, ыңғырашып яталар. Беҙҙең казармалар концентрационный лагерға оҡшап ҡалды.

— Ниңә былай мыҫҡыл итәләр икән?

— Ни эшләп һаман бында тоталар?

Һәр кем шул һорауҙы бирә һәм үҙе, шуның яуабын таба алмай, ыҙалана. Төрлөсө һығымтаға киләләр.

— Хөкүмәт бөтөнләй бөлөп ҡалған. Ул инде һуғышты артабан алып барырға хәлһеҙ. Шуға күрә, немецтарға булған үстәрен беҙҙән алыу өсөн, ошонда асҡа ҡаҡлап үлтермәксе булалар.

— Хәҙер улар беҙҙең ҡулға мылтыҡ бирергә ҡурҡа.

Улар һалдаттарҙың эшселәр яғында икәнен беләләр, шуға бына ошонда ҡоралһыҙ көйө бикләп тоталар.

Ҡорал етешмәй икән. Шуға фронттағы һалдаттарҙың бер өлөшөн немецтар ҡырып бөтөрөп, уларҙан ҡорал бушағанын көттөрөп ятҡыралар.

Тора-бара был фараз итеүҙәр уҫал янауға әйләнеп китә:

— Барыбыҙға ла бер юлы ҡуҙғалырға ла, ҡоралды баҫып алып, ҡаланың аҫтын өҫкә килтерергә, шунан өйҙәргә таралырға кәрәк.

Былдай һүҙҙәр кешеләрҙең мейеләрен айҡап сыға, уларҙы тәрән уйланырға мәжбүр итә.

Асылда кеше, юғары һәм матур тойғолар эйәһе булараҡ, һәр саҡ матурлыҡты һәм иректе ярата. Тик, әгәр һинең иркеңде ҡыҫалар йәки унан да аяныһы, унан һине бөтөнләй мәхрүм итәләр икән, азатлыҡ бигерәк тә ҡәҙерле күренә; уны ҡайтарыр өсөн әллә ниҙәреңде бирерҙәй булаһың. Киң болондарға барып сығаһы, унда бер ғәмһеҙ шаярып-көлөп, ырғыпһикереп уйнағы, бейек-бейек тауҙарға менге килә. Унан тирәяҡтағы осо-ҡырыйы күренмәгән яландар ус төбөндәгеләй булып күҙ алдында йәйелһен ине; йә булмаһа ул тау сал тулҡындар ҡағып иркәләүсе диңгеҙ ярында булһа икән, шунда баҫып, күкрәгеңдән ташып сығып килгән шатлығыңа сыҙай алмай, ҡысҡырып йырлап ебәр ине.

Ни генә теләмәй тойғоларға бай кеше күңеле?! Э бит бына ошондай хөрлөккә ашҡынып тороусы йөрәкле меңәрләгән кешеләр бөгөн һалҡын, бысраҡ, ҡараңғы казармаларҙа, зиндан-

дағы шикелле, яфа сигәләр; улар хәҙергә үҙҙәренә ирек алыр өсөн көсһөҙҙәр, шуға ситлектәге көслө йыртҡыс шикелле, тештәрен шығырлаталар. Әйтерһең дә, уларҙың өмөттәре, кешелек хыялдары, ынтылыштары казарманың бысраҡ таш иҙәненә һалып, аяуһыҙ мыҫҡыл итеп тапала. Быны минут һайын тойоп тороуҙан йөрәгең һулҡылдап һыҙлай, ҡан тамырҙарыңа ағыу йүгерә һымаҡ. Был мәлдәрҙә кешеләр бөтә донъяға, хатта үҙҙәренә яҡтылыҡ биргән ҡояшҡа, айға ла асыулылар.

Бына ошондай ялҡытҡыс көндәрҙең береһендә көтмәгәндә генә ишек алдына сығып, теҙелергә команда бирҙеләр. Һалдаттар, тревога сигналы булғандағы шикелле, дәррәү сығып йүгерҙеләр, бер-береһен тапаттылар, ҡыҫылып, ишеккә тығылышып, ни ары, ни бире китә алмай торҙолар. Ситтән ҡарап торғанда, был күренеш хас та янғындан ҡотолорға ашығыусыларҙы хәтерләтә ине.

Көн болотло һәм йылы ине, ябалаҡлап ҡар яуа. Боро һалдат сафтары оҙаҡламай ҡар менән ҡапланды, улар көслө ел иҫеп китһә, тирә-яҡҡа һибелеп, бөтә нәмәне күмеп китерлек көрт өйөмдәре булып күренә башланылар.

Сафтар алдына ниндәйҙер бер офицер сығып баҫты ла команда бирҙе:

— Частары Көньяҡ һәм Көнбайыш фронттарҙа булмаған түбәнге чиндарга ун аҙым алға сығырға, бүтәндәр үҙ урынында ҡала.

Колонна икегә айырылды.

Мин урынымда ҡалдым, сөнки минең часым ошо фронтта һуғыша булырға тейеш ине.

Команда үтәлгәс, офицер былай тине:

— Частары бында булмаған түбәнге чиндарҙан маршевый батальондар төҙөлөп, айырым дивизияларға ебәреләсәк. Ә инде частары был фронтта булғандар үҙ частарына ҡайтарыласаҡ.

Был хәбәр мине бик һөйөндөрҙө, мин еңел тын алдым. Күрше-тирәмдәге һалдаттарға күҙ һалырға тотондом, беҙҙең дивизияныҡылар юҡмы икән, тием. Часта ҡалған иптәштәремде тиҙерәк күрге килеү теләге тыуҙы. Бәлки, Новиков, Индрил, Байғужа һәм Иртуғанов һаман да элекке полкыбыҙҙалыр. Улар менән осрашыу ҡайһылай ҡыуаныслы булыр! Мин уларға Петроградта һәм Мәскәүҙә күргәндәремдең барыһын да һөйләрмен. Бигерәк тә Надеждин хаҡында төпсөбөрәк һөйләрмен, унан ишеткәндәремде түкмәй-сәсмәй иптәштәремә лә ишеттерермен. Алдан уҡ һиҙеп торам: иптәштәрем дә Надеждинды мин һөйләгән буйынса яратырҙар.

Беҙҙең дивизияның Ровно ҡалаһынан ҡырҡ биш саҡрымда ялда икәне мәғлүм булды. Унда ебәреләсәк һалдаттар ун һигеҙ кеше йыйылды, һәм беҙҙе бер өлкән унтер-офицер етәкселегендә иртән иртүк йәйәүләп шунда оҙаттылар.

Көн йонсоу, ҡуйы томанлы ине, шуға күрә лә тирә-яҡтағы бөтә нәмә лә беҙгә серле һәм ят күренә. Һоро томан артынан ҡапыл ғына алдыбыҙға килеп баҫҡан ағастар бик бейек булып тойола. Ҡаршыбыҙға һирәк кенә осраған һыбайлылар күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән илдәрҙән киләләрҙер ҙә улар унан ҡот осҡос яман хәбәрҙәр килтерәләрҙер һымаҡ. Урмандар, йөҙҙәрен йәмерәйтеп, тын торалар, уларҙың иге лә, сиге лә юҡтыр, төпһөҙ диңгеҙҙәр ситенә саҡлы һуҙылып киткәндәрҙер кеүек.

Беҙ, үҙ иркебеҙгә ҡуйылған һалдаттар, ҡабаланмай ғына барабыҙ, ҡайҙа күңелебеҙгә оҡшаһа, шунда туҡтап ял итәбеҙ. Урман ауыҙҙарында туҡтап, зифа буйлы ҡарағайҙар төбөндә һуйҙайып ятып алыуҙар бигерәк тә рәхәт була. Ятаһың, ҡарағайҙарҙың томанға төрөлгән остарына ҡарайһың, уларҙың оҙонлоҡтарының күпмерәк булырын хатта тиҙ генә самалап алып та булмай. Уларҙан да бейегерәк күтәрелеп, тирә-яҡҡа ҡарап торғо килә. Уйсан ҡарағайҙар менән йәнәшләп үҫкән уҫаҡтар яҙ яҡынлашыуын хәбәр итәләр. Уларҙың ботаҡтары йәшкелт бөрәләр менән ҡапланған. Тағы ла аҙмы-күпме ваҡыттан ошо бөрәләр ярылыр ҙа уларҙан ыуыҙ кеүек кенә һарғылт йәшел япраҡтар баш күрһәтер. Ҡояштың йән өргөс нурҙарынан һәм шифалы йылы ямғыр тамсыларынан кинәнеп, улар шунда уҡ турығышып үҫеп китерҙәр, талғын ғына ел ҡағылғанда ла күңелле ҡыштырлашып көллө урманға йәм биреп ултырырҙар. Ә хәтәр, көслө елдәрҙә бейек ағастарҙың баштары диңгеҙ шикелле тулҡыныр, ҡарт олондар шығырлап һығылыр... Тәбиғәттең ошондай сәскә атҡан мәлен тыныслыҡта, шат күңел менән тап бына ошонда көтөп алаһы ине, тигән теләк тыуа.

Ә беҙ яңынан окоптарға ҡайтып барабыҙ. Кем белә инде, ул тыныс яҙғы көндәрҙе көтөп алыу беҙгә насип булырмы? Бәлки, ул ваҡытта был ағастарҙың баштарынан снаряд өйөрмәләре осор, мөһабәт ғорур ҡарағай, уҫаҡтарҙы сәрпәкләр, яҙ иркәләре — сабый ғына япраҡтарҙы аяуһыҙ ялҡын һулышы менән өтөр. Ә шул ағастарҙың төптәрендә генә әллә кемдәрҙең ғәзиз балаларының ҡәҙерле кәүҙәләре ҡәҙерһеҙләнеп, ҡанһырап ятыр...

Был хәлде күҙ алдына килтереү ҙә ауыр, аяныс!

## УН ТУҒЫҘЫНСЫ БҮЛЕК

Беҙҙең дивизияның штабы Софейка тигән ауылда булып сыҡты, ә полктар яҡындагы урман араһында ҡаҙылған землянкаларға урынлашҡан. Дивизия штабында беҙҙе бер татар һалдаты ҡаршыланы. Оҙон буйлы, аҡ йөҙлө был егет штабтың писары булып сыҡты. Беҙҙең исемлектәрҙе ҡарап сыҡҡас та, ул миңә татар телендә өндәште:

— Һеҙ мосолман кешеһе икәнһегеҙ ҙә. Ҡайһы яҡтарҙан булаһығыҙ?

— Һамар, губернаһынан.

— Яҡташ тип әйтерлек икән.

— Э һеҙ үҙегеҙ ҡайҙан?

— Татарстан дан.

Беҙ шунда уҡ бер-беребеҙҙе яҡын күрә башланыҡ. Ул мине каптинармусҡа алып барып, тейешле аҙыҡты алышып бирҙе лә шунан үҙенең землянкаһына сәй әсергә алып ҡайтты. Беҙ уның менән оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул миңә фронт хәлдәрен һөйләне, мин уны Мәскәү яңылыҡтары менән таныштырҙым.

Абдулла Хәсәнов тигән был егет бер ҡарт уҡытыусының улы булып сыҡты. Ул рус мәктәбендә лә уҡыған, ә һуғыш алдынан ғына Ырымбурҙа «Хөсәйениә» мәҙрәсәһенә ингән, тик уны тамамларға өлгөрмәгән, 1914 йылда һалдатҡа алынған. Бер йыл самаһы фронтта рота писары булып йөрөгән, шунан бына дивизия штабына эләккән.

Хәсәновтың тауышы көслө түгел, әммә бик яғымлы. Бәлки, ул атаһының һөйләү рәүешенә ғәҙәтләнеп алғандыр; уҡытыусылар шикелле, асыҡ, ышандырырлыҡ итеп һөйләшә, шуға ла һинең иғтибарыңды шунда уҡ биләп ала. Уның менән әңгәмәлә миңә айырыуса уның офицерҙарҙан ишетеп ҡалған һүҙҙәре тәьҫир итте:

— Мин штаб офицерҙарының һөйләшеүенә һәр ваҡыт ҡолаҡ һалам. Улар һуғыш хаҡында ла, батша тәхете тураһында ла дөм икенсе төрлө һөйләй башланылар. Уларҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, Петроградта эшселәр араһында көслө хәрәкәт башланған, батша тәхете бик ныҡ ҡаҡшағанға оҡшай. Распутиндың үлтерелеүе ишетелгәс, офицерҙар был темаға айырыуса күберәк һөйләшә башланылар. Улар араһында хәҙер көн һайын ошо хаҡта ҡыҙыу бәхәстәр сыға ла китә, яңы, бик ҡыҙыҡлы фекерҙәр әйтеп ташлайҙар. Командование хәҙер бик ауыр хәл кисерә, һуғыш оҙаҡҡа һуҙыла алмаҫ, ахыры. Мәскәүҙә булған хәлдәр тураһында һеҙ һөйләгәндәр ҙә тап бына шуны раҫлай.

Хәсәновтың ваҡытын күп алмаҫ өсөн китергә булдым һәм был хаҡта уға әйттем.

— Юҡ, юҡ, мин тәүлек буйы дежурҙа торҙом. Хәҙер ваҡытым бар, — тип мине тынысландырырға ашыҡты ул.

Бынан һуң шунда уҡ ҡына ҡуҙғалып тороп китеү уңайһыҙ ине. Мин үҙебеҙҙең часть хаҡында әйттем, унда иптәштәрем барлығын белдерҙем, фамилияларын да атаным.

Хәсәновтың ҙур һоро күҙҙәре киң булып асылды.

— О-о, мин уларҙың береһен беләм бит, — тине ул ихлас ҡына. — Ул беҙҙең штабта телефонист.

— Ҡайҙа ул? — тип ҡысҡырып, урынымдан һикереп торғанымды ла һиҙмәй ҡалдым.

— Ул кисә дежурҙа булғайны, бөгөн ял итә торғандыр.

Йөрәгем ярһып тибергә кереште, мин йәһәт кенә ишек янына барып еттем. Минең бик нык тулҡынланғанымды күреп, Хәсәнов башҡаса тотмаҫҡа булды, һәм үҙе лә минең артымса урынынан ҡуҙғалды.

Беҙ тышҡа сыҡҡас, ул бер землянкаға төртөп күрһәтте:

— Элемтәселәр ана тегендә тора.

Мин Хәсәновҡа ҡулымды йәһәтерәк биреп күрештем дә тиҙерәк теге землянкаға табан ашыҡтым. Ашығыуымдан хатта яңы дуҫыма һыйы өсөн рәхмәт әйтергә лә оноткҡанмын. Бығаса һуғыштың бөтә әсеһен-сөсөһөн бергә татыған дуҫтарымды тиҙерәк барып күрергә ашҡыныу менән аяҡтарыма бығаса күрелмәгән тиҙлек бирҙе. Уларға һөйләргә тигән яңылыҡтар, снаряд эсенә һалынған дары кеүек, күкрәгемде шартлатырға теләгәндәй ине. Йөрәгем иптәштәремде һағыныуҙан атлығып сығырҙай булып дөпөлдәй, бөтә донъяның ҡайғы-хәсрәттәре хәҙер минең өсөн юҡҡа сыҡҡайны. Гүйә, миңә ҡанаттар үҫкән дә, улар мине бейек-бейектәргә күтәреп осороп алып баралар...

Күрһәтелгән землянка янына яҡынлашҡанда, уның ишегенән ҡулына котелок тотҡан Индрил үҙе сығып килә ине. Ул миңә, тере кеше булып түгел, ниңәлер, бер күреүҙә, хыялымда йөрөгән һын һымаҡ ҡына булып тойолдо. Мин телдән яҙҙым, күҙҙәремде томан баҫты, һәм, ҡаҡҡан бағана һымаҡ, баҫҡан урынымда ҡатып ҡалдым.

Мине күргәс, Индрил да, нисектер, алға һонолдо ла, үҙ күҙҙәренә ышанмаған кеше шикелле, туҡтаны.

Икебеҙ ҙә өндәшмәйбеҙ.

— Күҙемә күренәһеңме әллә?! — тине ул, ахыр килеп.

— Индрил! — тип ҡысҡырып ебәрҙем мин, бөтөнләй ят тауыш менән.

Индрилдың ҡулынан котелогы шылтырап ергә төшөп китте, һәм уның оҙон ҡулдары мине ҡармап ҡосаҡлап алды.

— Күҙҙәремә ышанмайым. Булат, ысынлап та, был һинме?!

Индрил, ҡосаҡлаған көйөнсә, мине землянкаға алып инде, һәм беҙ унда, әйтер һүҙ тапмағандай, бер-беребеҙгә ҡарашып оҙаҡ торҙоҡ. Ҡапыл осрашыу икебеҙҙең дә һушыбыҙҙы алғайны, икебеҙ ҙә нимәнән һүҙ башларға белмәйбеҙ.

— Мин хәҙер сәй ҡайнатып килтерәйем. Шунан туйғансы һөйләшербеҙ, — тине Индрил, ахыр килеп. — Ой, һағындыҡ та һуң һине, Булат! Биңә һөйләр һүҙҙәребеҙ ҙә күбәйҙе.

Ул ашығып землянканан сығып китте. Көслө тулҡынланыуҙан миңә эҫе булып киткәндәй булды, маңлайымдан тирҙәр бәреп сыҡты.

Балам түшәлгән иҙәндә ике һалдат йән белмәй йоҡлай; күрәһең, дежурҙан ҡайтҡандарҙыр. Мин уларға диҡҡәт менәнерәк ҡараным, тик йөҙҙәре таныш булмай сыҡты. Шулай булһа ла, Индрил менән бергә йәшәгәс, улар миңә бик яҡын кешеләр

булып тойолдо. Уларҙы тиҙерәк уяткым, яҡындан танышҡым килде, тик бигерәк рәхәтләнеп йоҡлайҙар шул. Арығандарҙыр. Мин дә шаҡтай йонсоғанмын, ахырыһы, Индрил сәй ҡайнатып йөрөгән арала, йоҡом килә башланы. Күҙ ҡабаҡтарым ауырая, тәнем рәхәт кенә иттереп ойой һәм күҙ алдымда окоп стеналарына һөйәлеп йоҡлаған һалдаттар күренә башланы.

— Бына сәй ҙә әҙер! — Индрилдың шулай тип яғымлы өндәшеүе мине һиҫкәндереп ебәрҙе.

Индрил сәй урыны әҙерләгән арала мин сисендем дә уға ҡаршы ултырып, дуҫымдың йөҙөнә ентекләберәк ҡараным. Ул, ни эшләптер, нык ҡына бирешкән, яңаҡтары ослайған, танауы ҙурайғандай булған, ҡара һоро күҙҙәре эскә батҡан, улар тирәһендә ваҡ ҡына һырҙар барлыҡҡа килгән. Киң маңлайында әүәлгесә бер генә лә һыр юҡ, һәм ул тағы ла киңәйә төшкән һымаҡ. Индрилдың өҫтөндә ике күкрәк кеҫәле шул уҡ гимнастерка, уны мин танымай буламмы һуң инде, сөнки кеҫәләрен үҙем тегеп биргәйнем. Уларҙың береһенән яҙыу кенәгәһе, икенсеһенән тәмәке ҡағыҙы менән ҡәләм башы күренеп тора.

Индрилдың кеҫәләре ҡыҙыҡ ҡына хәтирәне иҫкә төшөрҙө. Ғәҙәттә һалдат гимнастеркаларының кеҫәһе булмай, кеҫәләр офицер гимнастеркаларына ғына тегелә. Бер мәл беҙҙең ротаға кеҫәле гимнастерка кейгән бер һалдат килде. Унан күрмәксе, һалдаттар гимнастеркаларына үҙ ҡулдары менән кеҫә тегә башланылар. Белер-белмәҫ ҡул менән, өҫтәүенә, йә ҡара, йә аҡ еп менән тегелгән кеҫәләр бик йәмһеҙ күренә ине. Мин кеҫә тегеүҙә барыһынан да оҫта булып сыҡтым. Әлбиттә, был ваҡ эш ине, ул бик күп ваҡытты ала, шулай ҙа минең теккән кеҫәләр оҫта тегенсенекенән ҡалышһалар ҙа, аҙ ғына ҡалышаларҙыр. Шулай итеп, мин ротабыҙҙа кеҫә тегеү буйынса мәшһүр оҫта булып дан алдым. Ялда ваҡытта мине заказдар менән күмеп ташланылар. Эш өсөн бер әсмүхәме шунда, ярты әсмүхәме тәмәке алғас, мин ул заказдарҙы бик ҙур әүәҫлек менән еренә еткереп башҡарам. Бер талай ваҡыттан инде, беҙҙең ротаның ғына түгел, тотош батальондың һалдаттары, кеҫәле гимнастеркалар кейеп, ҡупшыланып йөрөй башланылар.

Шул шөғөлөм иҫкә төшөп, мин үҙ алдыма көлөп ебәрҙем. Ашарға әҙерләп булашҡан Индрил көлөүемде үҙенә ҡабул итте:

— Минең аштан көләһеңме әллә? Күрәһең, лазареттарҙа һеҙҙе хан һыйында тотҡандарҙыр. Белеп тор, беҙҙә ундайҙар тәтемәйәсәк.

— Юҡ, мин, үҙем теккән кеҫәләр иҫемә төшөп, көлөп ебәрҙем.

— Эй, шулаймы ни! Мин был гимнастерканы һинең төҫөң итеп һаҡланым. Уға ҡараған һайын, һине һағындым, — тине Индрил һәм үҙе лә кеҫәләренә көлөмһөрәп ҡарап ҡуйҙы.

Мин һүҙҙе икенсегә борорға тырыштым.

— Йә, тиҙерәк бүтән дуҫтар хаҡында һөйләй һал инде. Ни хәлдә улар? Иҫәндәрме?

— Мин дә, ни эшлән был һаман һорашмай тора икән, тип уйлай башлағайным инде. Новиков полк штабында телефонист булып тора, ә Байғужа обозға күсте. Уның эш хәҙер рәхәт. Иртуғанов хәҙер фельдфебель булып алды. Уны тағы ла Георгий тәреһе менән бүләкләнеләр.

— Нимә өсөн?

— Һуғыш барғанда, офицерҙарҙы атҡаны өсөн.

— Нисек улай?

— Ул шундай кеше инде, ҡойроғона баҫыуы ҡыйын.

— Улайһа, ул хәҙер һеҙҙең менән түгелме ни?

— Юҡ, уның беҙҙән киткәне юҡ, үҙ эшен башҡарып йөрөй.

Уның һуңғы һүҙҙәренең мәғәнәһен аңламай, уйға ҡалдым: «Фельдфебель булды. Георгий тәреһе алды. Һуң бит ул тәреләрҙе һуғышта күрһәткән айырыуса батырлыҡтар өсөн генә бирәләр».

Минең аптырауымды күреп, Индрил ялғап алып китте:

— Иртуғанов тураһында шикләнмә, ул үҙебеҙҙең егет. Э бына беҙ һине башҡаса фронтҡа әйләнеп ҡайтмаҫһың инде, тип уйлағайныҡ. Һинең килеп төшөүең — беҙҙең өсөн һис көтөлмәгән хәл. һине күреүемә бик тә, бик тә шатмын, әлбиттә, башҡаларыбыҙ ҙа һөйөнөп бөтә алмаҫтар. Бында хәҙер беҙҙең өсөн эш күп, шулай уҡ төрлө яңылыҡтар ҙа етерлек. Мин хәҙер һинең әйләнеп килеүеңде телефондан Новиковҡа хәбәр итәйем, шунан улар йүгерешеп килеп тә етерҙәр. Барыһын да бергәләшеп һөйләшербеҙ. — Индрил шулай тине лә землянканан ашығып сығып китте.

## ЕГЕРМЕНСЕ БҮЛЕК

Быйыл Украинала яҙ башы ҡояшлы һәм йылы булды. Былтыр көҙҙән ҡойолоп, инде яртылаш серегән япраҡтарҙы ҡалҡытып, үләндәр бик иртә баш ҡалҡытты. Яңы ғына сыҡҡан матур үләндәргә аяҡ менән баҫып йөрөү ҙә йәл. Йәш үләндәр ҡояшҡа ҡарап һөйөнөп, уға ҡулдарын һуҙған сабый балаларҙы хәтерләтәләр. Уларҙың ҡыуаныслы матур тормошо алда әле. Улар, көнгә тартылып, үҫеп китерҙәр, ҡалын йәшел келәм булып ерҙе ҡапларҙар, төрлө төҫтәге матур сәскәләр атырҙар, тәгәрәшеп еләктәр бешер.

— Быйыл яҙ иртәләне, — тиҙәр украин крәҫтиәндәре, гөлтләп килеп сыҡҡан үләнгә ҡарап, шунан ҡараштарын фронт яғына төбәйҙәр ҙә тәрән көрһөнөп ҡуялар. — Һуғыш ошо арала ла бөтмәһә, ерҙәребеҙ быйыл да ҡыҫыр ҡалыр инде.

Шундай ҡояшлы көндәрҙең береһендә беҙ, иҫке дуҫтар, йәнә бергә йыйылдыҡ. Был минең өсөн үтә шатлыҡлы бер байрам булды. Новиков, Индрил, Байғужа, Иртуғанов һәм мин ҙур урмандың ситендә, яҙҙың хуш еҫтәрен бөркөп торған ерҙә, ҡояш

нурҙарына кинәнеп ятабыҙ. Һәр беребеҙҙең йөҙө уйсан һәм етди. Мин Мәскәүҙә үҙем шаһиты булған ваҡиғаларҙы әле генә бәйнә-бәйнә һөйләп бөтөрҙөм, дуҫтарым, ишеткәндәренең тәьҫиренә бирелеп, өндәшмәй генә тәмәкеләрен көйрәтәләр.

Беҙҙең баш: особоҙҙа, әллә ниндәй мөғжизәле ҡиәфәттәргә инеп, өрөнкө аҡ болоттар ағыла ла ағыла. Быға тиклем үткән ғүмерен бер ауыҙ һүҙ менән дә телгә алмаған Новиков, ни сәбәп менәндер, бөгөн тап шул хаҡта әүәҫләнеп һүҙгә тотондо. Бәйләй башларҙан элек ул аҫтына йәйелгән шинелен ипләберәк йәйеп, салҡан төшөп ятты, аҡ болоттарға ҡарап, оҙаҡ-оҙаҡ өндәшмәй уйланды; күрәһең, йәшлек хәтирәләрен берәм-берәм күҙ алдынан үткәреп, барлап сығыуы булғандыр.

— Эйе, дуҫтар, — тип башланы ул һәлмәк кенә, шунан, беҙҙең иғтибарыбыҙҙы туплар өсөндөр, әҙерәк шым торҙо. — Уҙған ғүмер минең шәптән булманы, артабанғыһын өҙәм рәүешлерәк итеп йәшәге килә. Үткән ғүмерем миңә нимә генә бирҙе? Атайым, бер һыныҡ икмәк эҙләп, Мәскәү янындағы шахталарға килгәндә, миңә бары һигеҙ генә йәш ине әле. Э беҙ, уның балалары, ете йән инек. Бына шул тиклем ишле ғаиләнең тамағын туйҙырып ҡара инде! Улар бит, сәүкә балалары кеүек, һары суҡыштарын асып, бер туҡтауһыҙ ашарға таптырып сырылдашып ҡына торалар. Быны һөйләп тә тораһы юҡ инде. Мин үҙем ун йәшемдән эшләй башланым. Нисәмә шахтала, нисәмә заводта ғына эшләп китергә тура килмәне —- бер төрлө лә һәнәргә эйө була алманым. Ун туғыҙ йәшемә хәтлем ҡара эшсе генә булып йөрөнөм. Бер ваҡытта ла йүнле эш хаҡы төшөрә алманым. Буғыш алдынан ғына, ярҙамсы булып эшләп, тимерсе һәнәренә өйрәнә башлағайным, шунда уҡ һалдатҡа алдылар. Бына ошонда башты һалырға тура килһә, тимәк, был донъяла бер генә рәхәт тә күрмәй киттем тигән һүҙ була инде. Юҡ, шайтан алғыры, йәшәге килә әле, кешесө йәшәге килә! Быға тиклем беҙ йыуаш быҙау инек бит. Э бына һуғыш өйрәтте, күҙҙәребеҙҙе асты... Беренсе мәртәбә осрашҡаныбыҙҙы һәр берегеҙ хәтерләйҙер инде. Э бына Булат бөгөн нимәләр һөйләй? Мәскәүҙә күргәндәрен нисек итеп һөйләп бирҙе ул! Күҙҙәре тамам асылған егетебеҙҙең!

Индрил шунда үҙенең ҡәҙимге фәлсәфәһенә бирелеп алмай булдыра алманы:

— Бала ла бит тыуыу менән аяғына баҫып атлап китмәй. Башта сәңгелдәктә ята, шунан ултыра башлай, ҡурҡа-ҡурҡа ғына аяғына баҫа, беренсе аҙымдарын яһай, ә бер аҙҙан ҡараһаң, йүгереп үк йөрөй. Шулай үҫә бит кеше. Ваҡытында уҡыу эләккән булһа, беҙ барыбыҙ ҙа былай ғына булмаҫ инек әле.

Индрилдың был һүҙҙәренә бер кем дә айырыуса иғтибар бирмәне. Шуға күрәлер, ахыры, ул үҙе лә фәлсәфәһен артыҡ ҙурға һуҙып тормай, тынды.

Шунда Иртуганов үҙенең шаҙраraҡ йөҙөн күтәрҙе. Уның тәрәндә ултырған ҡара күҙҙәре айырыуса бер төрлө сатҡылар һибеп, йылтырап китте.

— Һуғыш — ул ҡанлы уйын, — тип һүҙ башланы Иртуғанов. — Уны бер кем дә яратмай. Тик һуғыштың яҡшы яғы ла бар: унда һинең ҡулыңа ҡорал тотторалар һәм һин унда үҙеңде хужа итеп тояһың. Мылтыҡтан бит кемгә теләйһең — шуға атып була. Бына мин, әйтәйек, ошо винтовкам менән үҙебеҙҙе ғүмер баҡыйына интектергән алпауыт Александров™ атып үлтерҙем.

Новиков аптырауынан урынынан ырғып уҡ торҙо.

— Нисек инде, әллә һин, мылтығыңды алып, ауылыңа ҡайтып килдеңме?

— Юҡ, ҡайтып килмәнем. Мин уны бында ғына дөмөктөрҙөм, — тип көлөмһөрәне Иртуғанов.

— Бер ни төшөнмәйем.

— Беҙҙең батальондың командиры капитан Александров беҙҙең ауылдың күршеһендә генә йәшәгән алпауыттың улы ине. Ул татар крәҫтиәндәрен бик күп мыҫҡыл итте. Мин йәш кенә үҫмер саҡта әле ошо Александров мине ҡайыш ҡамсыһы менән бик ныҡ итеп ярғайны. Бында осрашҡас, Александров мине танымаңы, ә мин, был ҡәбәхәт йән ҡабаттан үҙ утарына әйләнеп ҡайта алмаясаҡ, тип әсемдән генә ант итеп ҡуйҙым. Көҙгө һөжүмдәрҙең береһендә мин үҙемдең антымды үтәнем.

— Шулай дөмөктөрҙөм тиһең инде? Молодец! — тине Байғужа, Иртуғановҡа һоҡланып ҡарап.

— Эйе. Хәҙер был әш буйынса инде минән дә шәберәк оҫта юҡтыр фронтта, һөжүмгә күскән ваҡыттарҙа мин иң әшәке офицерҙарҙы беренсе эшем итеп юҡҡа сығарам да командованиены үҙ өҫтөмә алам, шулай итеп ҡулдан килгән саралар менән һалдаттарҙы үлемдән һаҡлап алып ҡалырға тырышам.

Бына ошоларҙы ишеткәс кенә, Иртуғановтың нисек итеп фельдфебель чинына өлгәшкәне һәм Георгий тәреһе менән наградланғаны әҙерәк аңлашыла төштө. Ул — көслө ихтыярлы һәм ҡаты характерлы командир. Уның үҙ фекере һәм үҙ пландары бар, уларҙы ул, бер ниндәй ҡаршылыҡтар менән дә иҫәпләшмәй, тормошҡа ашыра белә, һалдат массаларын да үҙ артынан эйәртә.

— Һәр ҡорал ике яҡлы эш эшләргә мөмкин, — тип һүҙгә кереште Индрил, һуҡ бармағын һелкеп. — Әйтәйек, бына һунар мылтығынан кейекте лә үлтереп була; ә инде уның менән һаҡһыҙ ҡыланһаң, яңылыш үҙеңә лә атып ҡуйыуың бар. Был бит инде бик ябай хәҡиҡәт. Бына Иртуғановтың һүҙҙәрен тыңлағас, минең башыма шундай уй килде әле; әгәр ҙә бына һалдаттар үҙҙәренең ҡулындағы ҡоралды үҙҙәренең ихтыяждарын үтәүгә йүнәлдерһәләр, ул саҡта бит донъя тетрәткес эш эшләп була. Ә ундай хәлдең булыуы бик мөмкин. Һалдаттар фронтта күпме иптәштәренең һәләк булғанын үҙебеҙҙең дә һәләк

бул ыуыбыҙ көн кеүек асыҡ, тип аңдарына килерҙәр. «Ни эшләп һуң әле мин немец һалдатына атам? Уны үҙемә лә атырға ҡотортоп, үҙемә үлем саҡырам?» — тиер улар.Немец һалдаттарының да башында ошо уҡ уйҙар ҡайнамай тип беләһегеҙме ни? Әлбиттә, ҡайнай. Бер мәл килеп шундай ҙа хәл булыр әле: бөтә фронт тарҡалып бөтөр, беҙҙең менән командовать иткән офицерҙар үҙ һалдаттарының уҡ пуляларынан ҡасырҙар. Кисә Иртуғанов үҙенең алпауыты Адександровты дөмөктөргән икән, бөгөн, иртәгә уны башҡалар ҙа эшләр. Төптәнерәк уйлаһаң, бына беҙҙең алда ниндәй тетрәткес хәлдәр булырға тора.

Индрилдың маңлайына эре тир тамсылары бәреп сыҡты, ул йыш-йыш тын ала, хатта һөйләүенән сәсәп туҡтағандай булды.

Новиков уға ҡарап көлөп ебәрҙе.

— Әгәр мин армия менән командовать иткән булһам, уны бер ергә йыйыр инем дә, Индрил, һине тотош армия алдында сығып нотоҡ һөйләргә ҡушыр инем. Беҙҙең алда һөйләгәндә генә лә әле, ҡара тирҙәрең сыҡты, ә бына тотош армия алдында һөйләһәң, һуштан яҙып йығылыр инең, моғайын.

— Һөйләргә минең генә көсөм етмәҫтәй булһа, башҡалар ярҙам итер. Бары һин командующий булып ал да хәҙер үк армияңды йый.

Төшкө аш ваҡыты етте. Беҙ урындарыбыҙҙан өндәшмәй генә ҡуҙғалдыҡ та землянкаларыбыҙға ҡарай атланыҡ. Беҙҙең кәйефтәребеҙ күтәренке ине, ниндәйҙер бик үк асыҡ та булып етмәгән яҡты өмөт менән атланыҡ беҙ.

## ЕГЕРМЕ БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

Мине дивизия штабында элемтә командаһында ҡалдырҙылар. Хәҙер мин Индрил менән бергә йәшәйем. Көн һайын Хәсәнов Абдулла менән күрешәм. Ул минең менән шаҡтай ныҡ дуҫлашып алды, тик, ниңәлер, минең дуҫтарым менән борсағы бик бешеп етмәй. Мин уларҙы маҡтап һөйләргә тотонһам, Абдулла теләр-теләмәҫ кенә тыңлай ҙа һүҙҙе йәһәтерәк икенсегә борорға тырыша. Хәсәнов татар милләтенең яҙмышы һәм уның ҙур эшмәкәрҙәре хаҡында айырыуса, йыш һәм ҙур ихтирам менән һөйләй. Ләкин уның был фекерҙәре миңә сәйерерәк тойола.

— Әгәр татар милләте айырым дәүләт төҙөп ебәрһә, ул Көнсығышта иң көслө дәүләт булыр ине. Көнсығыш сәнәғәте һәм сауҙаһы тотош уның ҡулында булыр ине, — ти ул.

Был фекерҙәр минең өсөн ят һәм аңлайышһыҙ. Әгәр инде ошо фекерҙәр мәҙрәсәлә, берәй дәрестә һөйләнһәләр, уларҙың асылына төшөнөргә тырышҡан булыр инең; ә бында, фронт шарттарында, мөстәҡил[1] татар дәүләте тураһында һүҙ алып барыу — миңә һаташыу кеүек тойола.

[1] ***Мөстәҡил*** — бер кемгә лә буйһонмаған, үҙ аллы, ирекле.

Хәсәнов ошондай фәлсәфәһенә бирелеп китһә, мин һүҙһеҙ ҡалам һәм ҡулыма эләккән беренсе әйберҙе йомарларға тотонам, ҡайһы берҙә, хатта, йоҡомһорап, күҙҙәремде йомам. Тәмләп-тәмләп хыялдарын бик оҙаҡ һөйләгәндән һуң, ул, минең ҡарашымды белергә теләптер, ахыры, һорау бирә:

— Ә был хаҡта һин нимә уйлайһың?

— Әллә, — тим мин, был мәсьәлә хаҡында башымда бер генә уй ҙа булмағас. Минең был мәсьәләгә бер ҙә иҫем китмәгәнгә Хәсәновтың бик ныҡ кәйефе ҡырыла. Ул, ҡулдары ҡалтырана-ҡалтырана, тәмәке төрөп тоҡандыра ла, берәй мөһим эш тапҡан булып, янымдан китергә ашыға.

Бына шулай гелән генә Хәсәнов менән бик йылы осрашабыҙ ҙа күңелһеҙ айырылышабыҙ.

Башта ул мине үҙенең бик һөйкөмлө тышҡы ҡиәфәте менән үҙенә ылыҡтырғайны, характеры ла һәйбәт кеүек, һуғыш тураһында һөйләгәндәре лә — тап беҙҙеке һымаҡ; тик бына Көнсығышты тотош яулап алырға тейеш булған хыяли татар дәүләте тураһында һөйләй башланымы — ул миңә ят кеше булып тойола башлай, үҙенән биҙҙерә.

Бәлки, Хәсәнов мәҙрәсәлә яҡшы уҡытыусы булып та иҫәпләнгәндер. Тик фронтта һәм башҡа урындарҙа һуғышты туҡтатып, бөтә халыҡтарға тиң азатлыҡ яулап алып бирергә тип һөйләшеп, хыял итеп, ҡулдан килгәнсә шуның өсөн көрәшеп йөрөгәндә, бындай уҡытыусының һүҙҙәрен тыңлағы килмәй. Рус алпауытын — татар алпауыты менән, рус батшаһын татар батшаһы менән алыштырыуҙан ни файҙа? Уның өсөн көрәшеп тороуҙан ни мәғәнә?

Шуға ла миңә Новиков һәм Индрил дуҫтарымдың һүҙҙәре ғәзизерәк, йөрәгемә ятымлыраҡ. Улар барса һалдаттарҙың да теләген сағылдыра шул. Бөтә халыҡтар өсөн дә тиң азатлыҡ!

Мин бөгөн, телефон аппараты янына дежурлыҡҡа баҫып, Индрилды алмаштырҙым. Китер алдынан дуҫым миңә бышылдап ҡына бер яңылыҡ әйтте:

— Бөгөн корпус штабы менән дивизия штабы араһында ниндәйҙер йәшерен һөйләшеүҙәр булды. Генерал Кучин барлыҡ полктарҙа ла офицерҙарҙың кәңәшмәһен уҙғарырға бойороҡ бирҙе. Күрәһең, ҡайҙалыр бола һымаҡ нәмәләр башланғандыр. Һин бөгөн бында бөтә һүҙҙәргә лә ҡолаҡ һалып тор, һуңынан беҙгә лә еткерерһең, — тине ул.

Ул киткәс, мин ҡолағымды телефон трубкаһынан айырмаҫ булдым. Тик ғәҙәттәгесә полк штабтарынан төрлө сводкалар, фронттағы хәлдәр тураһында хәбәрҙәр һәм метеорологик белешмәләр генә биреп торҙолар. Ә минең ниндәйҙер ғәҙәттән тыш мөһим хәбәрҙәр ишетергә тип, күңелем үрһәләнә. Дауыллы йәшен көткәндәге һымаҡ, һағайтып, болоҡһотоп тора. Мин көсөргәнеп көтәм, теләп көтәм — бына-бына күңел тетрәткес хәбәр ишетелер. Бына хәҙер мин көткән һүҙҙәр күктәр күкрәүе

булып яңғырап китерҙәр, уларҙы яҡшыраҡ ишетеп ҡалыр өсөн кешеләр тау баштарына ябырылып менер, һуғыш бөтөнләй онотолор, бөтә йыһан шатлыҡ ауаздары менән тулыр һымаҡ...

Миңә аш килтерҙеләр, ләкин бер ҙә ашағы килмәй. Уның урынына бер туҡтауһыҙ һыу әсәм дә тәмәке тартам. Йөрәгем дөп-дөп тибә, күңелем үрһәләнеп, ҡайҙалыр — кешеләр күмәкләшеп шау-шыу килеп шат йәшәгән ергә барырға, унда барыһы менән бергәләп йырларға, бейергә өндәп тора.

Полк штабынан Новиков шылтыратты. Ул дежурҙа түгел икән, бары минең хәлде һорашыр өсөн генә телефон янына килгән.

— Йә, хәлдәрең нисек? — тип һораны ул.

— Бер көйө, ултырам бына.

— Ниңәлер әс боша. Ялдамын, ә йоҡо алмай.

— Мин дә шул хәлдәмен.

— Бер-бер күңелһеҙ нәмә ишеттеңме әллә?

— Юҡ.

— Әллә ниндәй имеш-мимеш йөрөй. Асығын ғына бирәү ҙә белмәй.

— Бында ла шулай.

— Ярай, иртәгә тағы һөйләшербеҙ әле.

— Һау бул. Тыныс йоҡо.

Новиков менән һөйләшкәндән һуң, нисектер, тәндәрем таралып төшә башлағандай булды, башымда бер уй ҙа юҡ төҫлө, һауа тынсыу һәм сиктән тыш дымлы, тын алыуы ауырлашып киткәндәй тойолдо. Тышҡа сығып, ергә һуҙылып ятып, саф һауа һулағы килә, тик телефон янынан бер минутҡа ла китергә ярамай.

Етмәһә, Хәсәнов, штабта эшен бөтөргәс, эргәмә яйлап, йәйелеп килеп ултырҙы ла йәнә шул ярты донъяны биләп алырға тейеш булған татар дәүләте хаҡындағы хыяли фәлсәфәһен һатырға кереште. Һуғыш һәм батша хөкүмәте хаҡында ул, беҙ уйлағанса уҡ, дөрөҫ һәм етди фекер йөрөтә. Әммә артабан фекерҙәре дөм икенсе яҡҡа салыулап сыға ла китә. Сыңғыҙ хан яуҙарын ауыҙ һыуҙарын ағыҙып маҡтай, Ырымбурҙа сыға торған «Ваҡыт» газетаһын күктәргә күтәрергә керешә, Рәмиев, Әхмәт Хөсәйенов кеүек татар байҙарын Алла дәрәжәһенә күтәрә. Бәлки, ысынлап та, улар бай ҙа, мәҙәни, ҙур ҙа кешеләрҙер, ләкин ни эшләп һуң әле улар минең, фронттарҙа үлем көтөп, сиктән сығып йонсоп йөрөгән һалдаттың ғорурлығы, яҡыны булырға тейеш, ниңә мин уларға табынырға тейеш? Шәп кешеләр булғас, ниңә улар ошонда — окоптарҙа түгел, беҙҙең менән бар михнәттәрҙе уртаҡлашмай, унда үҙ байлыҡтарын арттырып, ҡорһаҡтарына май бөрҙөрөп яталар? Иртуғанов атып үлтергән Александров алпауыттан улар нимәләре менән артыҡ? Ниңә мин уларҙың батша урынына ултырыуы өсөн көрәшергә тейеш?

Хәсәнов һеләгәйҙәрен ағыҙып, сурытып маҡтаған әлеге та-

тар байҙары, миңә ҡалһа, моғайын, беҙҙең ауыл Хафиз хажи кеүектәрҙер. Ул үҙе лә һуғышҡа барманы, малайҙарын, туған-тыумаһаһын да мобилизациянан ҡотҡарып алып ҡалды. Хафиз хажи — тирә-яҡта даны сыҡҡан иң бай кешеләрҙең береһе. Ул гел генә Ырымбур, Ҡазан байҙары менән әшнәлек итә, банкылар менән генә әш йөрөтә. Мин уның ауылдашы булһам да, икебеҙ бер үк телдә һөйләшһәк тә, уның теле барыбер миңә аңлайышлы түгел. Уның йортонда миңә бөтөнләй ят булған тормош хөкөм һөрә, унда беҙ — фәҡирҙәр өсөн аңлайышлы булмаған нәмәләр хаҡында һөйләшәләр, беҙ уйлағанға ҡапма-ҡаршы фекер йөрөтәләр, аҙым һайын беҙҙе мыҫҡыллайҙар. Хафиз хажиҙың ағаһы Абдрахман старшина, имештер, хатта батшаның үҙендә ҡунаҡта булған, тип һөйләйҙәр. Был, әлбиттә, әкиәт. Хәсәнов һөйләгәндәрҙең, ул теләгәндәрҙең барыһы ла шундай уҡ әкиәт. Тик ул шул әкиәткә ышанып, шул әкиәти хыялының тормошҡа ашырына мөкиббән инанып һөйләй. Фронттарҙа ыҙа сиккән, күпме ҡандар ҡойған һалдаттың иң ҙур теләге ошо ҡәһәрле һуғыштан тиҙерәк ҡотолоу, тулы азатлыҡ алыу хыялы булғанда, беҙҙең өсөн ят булған шул байҙарға маҡтау йырлау бары нәфрәтте генә арттыра. Хәсәновты баштараҡ яҡын күреүем хәҙер инде уға ҡарата асыуға әйләнде.

Мин шунда һиҫкәнеп киттем. Полктарға еткерер өсөн командованиеның телефонограммаһын килтереп бирҙеләр. Бына нәмә яҙылғайны унда:

«Бөтә полк, батальон, рота командирҙарына.

Баш командование штабынан шуны тәҡдим итәләр: түбәнге чиндар менән мөғәмәлә итеүҙә һаҡ булырға. Был бойороҡтоң мәғәнәһе хаҡында өҫтәмә рәүештә йәшерен пакеттар менән хәбәр ителер. Аң булығыҙ.

Дивизия нач:альнигы
генерал-майор КУЧИН».

Телефонограмманың йөкмәткеһе менән танышып сыҡҡас, мин һөр полк штабына шылтыратып, телефонограмма ҡабул итергә әҙерләнергә ҡушып сыҡтым. Барыһына ла бер юлы әйтеп яҙҙырырға тотондом:

«...түбәнге чиндар менән мөғәмәлә итеүҙә һаҡ булырға».

Был һүҙҙәрҙе әйтеүгә, күрәһең, барыһы ла аптырап ҡалдылар. Берәүһе ҡайтарып һораны:

— «Түбәнге чиндар менән мөғәмәлә итеүҙә һаҡ булырға». Дөрөҫ яҙғанмынмы?

— Дөрөҫ.

Шунда мин трубканан:

— Ҡара әле, һин унда шаярыуыңды ташла! — тигән хырылдауыҡ тауыш ишеттем.

— Нимә әйтәләр — шуны яҙығыҙ! — тип ҡоро ғына итеп өҙҙөм дә артабан әйтеп тора башланым.

Башҡаса төпсөнөүсе булманы, мин тапшырыуҙы дауам иттем. Телефонограмма бирелеп бөткәс, трубкала төрлө ерҙән бышылдашыуҙар, шым ғына шырҡ-шырҡ килеүҙәр ишетелеп торҙо. Мин телефонограмманы ҡабул итеүселәрҙең фамилияларын һорашып сыҡтым. Һуңғы булып Новиков яуап бирҙе һәм тулҡынланған тауыш менән һораны:

— Бин ысын телефонограмма бирҙеңме әллә шаяраһыңмы? Минең башҡа һыйып бөтмәй әле был. Бында нимә лә булһа бар, тоҡтомалдан булмаç. Бин, моғайын, айышын беләһеңдер әле, ә? Әйт инде!

— Юҡ, дуçҡай, телефонограммалағынан башҡа, бер ни ҙә белмәйем.

Тағы бышылдашыуҙар. Берәү ҙә трубкаларын һалып ҡуйырға ашыҡмай, минең тағы ла берәй нәмә өçтәп әйтеүемде көтәләр булһа кәрәк.

Беҙҙең дивизия был мәлдә алғы һыҙыҡта булмағанға күрә, төнгө сәғәт ун икенән һуң телефонда һөйләшеүҙәр туҡтатыла. Бик һирәк кенә мөһим оперативный сводкалар ҡабул итергә тура килә. Хатта сәғәт иртәнге биштәргә тиклем ятып йоҡлап торорға ла мөмкин була. Ләкин бөгөн ҡабул ителгән һуңғы телефонограмма минең йоҡомдо тамам ҡасырҙы. Уны тапшырып бөткәс, мин үҙемде юлға сығырға әҙерләнгән кеше кеүек тоя башланым; ҡайҙалыр ашығам, ә ҡайҙа ашыҡҡанымды үҙем дә белмәйем. Аш килтерҙеләр, ул тамағыма аш булып түгел, таш булып бара. Асыҡҡанмын да төçлө, ә киндер майы менән әҙерәк сылатылган ҡарабойҙай бутҡаһы алҡымымдан һис үтмәй. Башымдан әлеге телефонограмма һис китмәй. «Тоҡтомалдан бындай телефонограмма бирмәçтәр». — Мейемдә гел Новиков әйткән шул һүҙҙәр ҡымйый. Бик ныҡ йонсоғанмын шикелле, артығын уйлағы ла килмәй.

Килтерелгән ашты иллә-алла тамамлағас, бер көрөшкә һыуҙы шабырлатып эстем дә, ҡулдарым ҡалтырай-ҡалтырай, тәмәке төрөргә тотондом, ҡомһоҙланып тарттым. Бер-ике мәртәбә ҡаты итеп һурғас, баш етеҙерәк эшләй башлаған шикелле булды. «...Түбәнге чиндар менән мөғәмәлә итеүҙә һаҡ булырға...» Хәҙер аңлайышлыраҡ был һүҙҙәр. Моғайын, армияла берәй мөһим үҙгәреш булғандыр; бәлки, тәхеттең берәй мөйөшө ителгәндер... Ә шулай булғанда ла... Артабан эштәр ҡайһылайға китер? Бынығы, йәнә килеп, башҡа һыймай.

Башым тубал кеүек. Бүтәнсә бер уй ҙа һыйырлыҡ түгел.

Бар донъя усым төбөндә, мин бар кешене лә күреп торам. Улар ҡуҙғалалар, мейеләрен ҡыбырлаталар, шатланалар, ҡайғыралар, нимәлер эшләйҙәр, көңгөр-ҡаңғыр килеп һөйләшәләр, эләгешеп китәләр, һуғышалар, ҡан ҡойошалар. Улар араһында төрлөһө бар: бәләкәйҙәре бар, ҙурҙары бар; томаналары бар, ғалимдары бар; аҡыллылары бар, ахмаҡтары бар; сабый кеүек саф күңеллеләре бар, йыландай мәкерлеләре бар... Улар бер-бе-

реһен беләләр... Шулай ҙа йәнәш йәшәйҙәр... Ҡайһы берҙә, белмәмешкә һалышып, күҙ йомалар... Йыртҡысты таяҡ менән ҡотортоп ырылдатмауым хәйерлерәк, тип иҫәпләйҙәр... Тик йыртҡыс барыбер уларҙы бер килеп быуа... Шуға күрә йыртҡысты йә тәүҙә үк юҡ итергә, йә ситлеккә ябырға кәрәк...

Кисә генә миллиондар өсөн ҡот осмалы йәшен булған баш командование һалдаттар менән яҡшы мөғәмәлә итергә саҡыра. Тигенгә түгел был. Күрәһең, йыртҡыстың ҡойроғона баҫҡандарҙыр...

## ЕГЕРМЕ ИКЕНСЕ БҮЛЕК

Бөгөн көн бигерәк йылы, елдең әҫәре лә юҡ, шундай сыуаҡ. Һалдаттар, әйтерһең, туйға йыйыналар: кейемдәрен тырышып-тырышып йыуалар, төймәләрен йылтлатып таҙарталар, йөҙ түбән ятып, ҡәләмдәрен төкөрөкләй-төкөрөкләй, хат яҙалар, картуф бешерәләр, сәй ҡайнаталар... Әллә көн матурлығы, әллә башҡа бер сәбәп уларҙың болоҡһоған күңелен күтәргән дә ебәргән. Йәмерәйгән йөҙләрҙе бөгөн күрермен тимә; тик һәр береһе һаҡ һәм етди.

Украина яҙы кешеләрҙең ҡандарын ҡуҙғатҡан, уларҙың күңелен бик ныҡ күтәреп ебәргән. Ҡояш бейектән тура ҡарай, һөр тарафта шигранә тынлыҡ. Кешеләр уйсан, кешеләр бөгөн нескә күңелле һәм һаҡ; һүҙҙәр үлсәүле һәм мәғәнәле; кешеләр бөгөн бер-береһенә айырата иғтибарлы; кешеләр тыныс ҡына борсоу. Һәр кем үҙ шөғөлөнә бирелгән. Һәр кемдең эше айырым. Уйҙар бер. Йй ғына, танау төптәренән генә моң сыға башланы. Икенсеһе ҡушылды, өсөнсөһө... Көй таныш та, ниməһе менәндер яңы ла... Бәлки, ул мең мәртәбә йырланған, меңәрләгән дөм иҫке моңдор; тик бөгөн ҡолаҡ ҡына уны яңыса ишетергә яйлашҡан, ахыры... Эйе, тәхеттәр күп, улар көн һайын йәшәй, хөкөм һөрә, ләкин улар көн һайын тетрәмәй, көн һайын кителмәй... Беҙ аңра һарыҡтар көтөүе түгел хәҙер. Ирекле көндән «түбән чиндарға һаҡ мөғәмәлә...» тигән шәфҡәтте һығып сығарырһың игелекһеҙ, сырайында миһырбан нуры булмаған батшалыҡтан!

...Әүәлге йыр... Ул аҡрынлап көсәйә... Тик ул һис тә элеккегә оҡшамаған... Көрөрәк тә, сафыраҡ та булып көсәйә, хистәр тулҡыны мулыраҡ унда. Бөгөн йырҙа көс бар, аһәң бар; үлемгә дусар ителгәндәр йырында үлемде еңеү ауазы ишетелә башланы. Һүҙҙәр ҙә, моң да шул уҡ, тик унда:

— Мин — кеше! — тигән оран асыҡ ишетелә.

Яҙғы тын иртәлә, ғәҙәттән тыш иртә килгән яҙғы иртәлә, йыр яңғырай. Уның һәр ауазынан:

— Мин — кеше! — ғорур булып ишетелә.

Ябай йыр түгел был, кисә ишеткән ҡәҙимге моң түгел был.

— Мин — кеше!

Әйтерһең, кеше бары бөгөн генә үҙенең кеше икәнен белеп алған.

— Мин — кеше!

Бәр кем бөгөн шуны әйтергә теләй, бар донъянан үҙенең кешелек хоҡуғын таныуҙы даулай. Ул үҙ иркенең, үҙ ихтыярының хужаһы булырға теләй.

Мин бөгөн ауылға хат яҙҙым. Хатымды конвертҡа һалып, йәбештерер алдынан, уны ҡабат уҡып сыҡтым да уйға ҡалдым. Әүәлге хаттарым бик ябай булған икән: иҫәнлек-һаулыҡ, күп-күп сәләм һәм вәссәләм. Йөрәгемде ҡушып яҙған беренсе хатым икән шул быныһы. Быға тиклем мин һуғышта күргән ыҙаларҙы хатымда һис тә күрһәтмәҫкә тырыша инем. Ә бөгөн бөтә хистәремде, бер тамсыһын да ҡалдырмай, хатыма мөлдөрәмә итеп түккәнмен дә һалғанмын. Уҡып илашырҙар инде. «Һалдаттар тамам хәлдән тайған, миктәгән, уларҙың бар теләге — һуғыштың бөтөүе, тыуып-үҫкән илдәргә тиҙерәк таралышыу. Тотоп тыйғыһыҙ теләк менән улар өйҙәренә ҡайтырға ашҡыналар. Тик беҙ ғәзиздәрегеҙгә, күрәһең, тағы ла бер күркәм яҙҙы окоптарҙа уҙҙырырға насиптыр, ә окоптар — ҡан менән тулы һаҙ. Эй ҡәҙерлеләрем, ауыр ҙа һуң һалдат яҙмышы!..» Хатым тотошлай ошондай һүҙҙәр менән тулы ине. Уны ебәрәһеме, юҡмы, тиеп, оҙаҡ баш ваттым. Ахыр сиктә, йыуатыу һүҙҙәре ялғап ҡуйырға тигән уйға килдем: «Оҙаҡ ҡалманы шикелле инде. Ҙур үҙгәрештәр булыр самалы. Уныһын үҙегеҙ ҙә тоя торғанһығыҙҙыр. Шулай булғас, һуғыш, ҡан ҡойош та әллә нигә ырамаҫ. Насип итһә, беҙ меҫкендәрегеҙ ҙә геүләшеп ҡайтып төшөрбөҙ әле. Изге теләктә булығыҙ. Яҙғы һабан туйҙарында бергә булырға яҙһын. Амин...»

Хатымды һалып ҡайтып килгәндә, Индрил ға тап булдым. Ул, оҙон боттары менән ҙур-ҙур аҙымлап, миңә ҡаршы ашығып килә ине. Ул бөгөн бик үк ыҫпай түгел, сәсе тырпайған, ә бите йылмайыуҙан йәйелгән. Миңә төртөлә яҙып туҡтағас, ул, башта бер һүҙ ҙә әйтә алмаған төҫлө, тәрән тын алды; ҡулымды оҙаҡ ебәрмәй ҡат-ҡат ҡыҫты; әйтерһең дә, инде нисә йылдар күрешмәй тороп, үлеп һағынышҡанбыҙ.

— Булат дуҫҡайым, бөгөн ниндәй төштәр күрҙең?

— Үлгән кеүек йоҡланым. Төш күрергә форсат булманы.

— Ә мин телефон аппараты янында саҡ-саҡ аҡылымдан яҙмай ҡалдым.

— Ни булды ул хәтле?

— Һуң үҙең ишетмәнеңме ни? Донъя тетрәткес хәлдәр булып ята бит. Петроградта ҙур үҙгәрештәр булырға тейеш. Ни булғанын атап ҡына әйтә алмайым — штабта уны һаман тәрән сер итеп һаҡларға тырышалар. Бөгөн мин полктарға бер нисә телефонограмма ебәрҙем. Ни булырын асыҡ ҡына итеп әйтмәйҙәр, әммә офицерҙарҙы шул үҙгәрештәргә әҙерләйҙәр.

— Бәлкем, солох булыр?

— Ул ғына булмаç. Ҙурыраҡ нәмә булыр төҫлө Петроградта. Телеграммаларҙың тел төбөнә ҡарағанда, тәхет түңкәрелер, ахыры.

— Әллә батшаны төшөрҙөләрме икән, юғиһә?

— Әйтеүе ҡыйын, әммә эштәр шул тирәгә барғанға оҡшай.

— Улайһа, һуғыш бөттө тигән һүҙ бит инде!

Индрил минең ике ҡулымды ла ҡармап тотоп алып, ҡаты итеп ҡыҫып һелкте.

— Әйҙә полкка — Новиков янына киттек, — тине ул, дәртләнеп.

— Киттек.

Индрил бик шәп атлай, мин уға саҡ-саҡ эйәреп барам. Штаб янында беҙҙең ҡаршыға Хәсәнов тап булды. Ул, мине туҡтатырға теләп, ҡулы менән ымланы. Моғайын, бөтә Көнсығышты табаны аҫтында тетрәтеп торасаҡ татар ханлығын яңынан ҡайтарыу хаҡындағы хыяли уйҙарын тағы ла бер мәртәбә һөйләргә теле ҡысып торалыр. Һуңғы телефонограммалар уны тап бына шуға мөмкинлек тыуыуы менән һөйөндөрәләр.

— Ваҡытыбыҙ юҡ. Күрәһең бит, ҡабаланабыҙ, — тип ҡысҡырҙым мин уға, артыма әйләнеп. Ул беҙҙе, йөҙөн йәмрәйтеп, иренен мыҫҡыллы ҡыйшайтып, оҙатып ҡалды.

Мин үҙемдә ғәҙәттән тыш еңеләйеү һиҙәм, аяҡтарым мине үҙҙәренән-үҙҙәре алып баралар, улар ергә лә теймәгән һымаҡ. Хатта ағастар ҙа беҙҙең ыңғайға ҡайҙалыр ашығалар төҫлө. Беҙ, йөрәгебеҙҙә урғылған хистәребеҙгә, елкендергән уйҙарыбыҙға ҡолаҡ һалып барғандай, шым ғына атлайбыҙ. Юлыбыҙҙа осраған һалдаттар, ылауҙар, һыбайлылар беҙҙең иғтибарыбыҙҙы үҙҙәренә һис йәлеп итә алмайҙар. Тиҙерәк, тиҙерәк дуҫтарыбыҙҙы табып, күңелдәребеҙҙән эркелеп ташып барған яңылыҡтар, уй-тойғоларыбыҙ менән уртаҡлашҡы килә.

Бөгөн ҡояш та, ҡыҙыулығы мөлдөрәмә артылып барғандай, йылы нурҙары менән ерҙе йомарт ҡойондора. Уның сағыу яҡтылығынан һәм яғымлы иркәләүсән йылыһынан баштағы уй-хыялдар тағы ла яҡтыраҡ, матурыраҡҡа әйләнә, йәйғорҙай булып үҙенә мауыҡтыра, алға әйҙәй. Шуға ла беҙ, шатлығыбыҙҙы, бәхетебеҙҙе ҡаршыларға барған кешеләрҙәй, талпынып, елкенеп алға атлайбыҙ.

Икенсе китап бөттө.

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

## Шиғырҙар

Шинель ........ 3
Ҡан баҙары........ 3
Сумка........5
Атлан, батыр ........6
Һуҡа бабай, ситкә кит, трактор килә ........6
Хыял һәм тормош........7

## Хикәйәләр

Бәләкәй Ҡотош . .... ........9
Тимеркәй фәлсәфәһе ........ 22

## Драма

Ҡарағол........34

## Роман

Ҡан........57

Учебное издание

Даут Юлтый

ИЗБРАННЫЕ ПРОИЗВЕДЕНИЯ

***(на башкирском языке)***

Составитель ***И. А. Шарапов***

Редакция мөдире ***С. М. Рәхимова***
Мөхәррире ***З. М. Ғәлишина***
Рәссамы һәм биҙәлеш мөхәррире ***Ф.Ф. Ислахов***
Техник мөхәррире ***В. Р. Абдрахманова***
Корректорҙары ***А. Х. Баязитова, А. Х. Хәкимова***

Баҫырға ҡул ҡуйылды 10.09.07. Форматы 60х90 $^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Мәктән гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 21,0+0,25 фора. Шартлы буяу отт. 22,5. Иҫәп-баҫма таб. 21,22+0,45 форз. Тиражы 20900 дана. Заказ № 1.0122.07.

Башҡортостан Республикаһының «Башҡортостан «Китап» нәшриәте» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.


ДАУЫТ
ЮЛТЫЙ



